Зигат Султанов
Йыһат Солтанов

СОЧИНЕНИЯ В ПЯТНАДЦАТИ ТОМАХ

ӘҪӘРҘӘР УН БИШ ТОМДА

ТОМ VII

ЖИЗНЬ ПРОСТАКА
ЭСКЕРҺЕҘҘЕҢ ТОРМОШО

(ВРЕМЯ. ДЕРЕВНЯ. РОД. РОДОСЛОВНАЯ)
(ЗАМАНЫМ. АУЫЛЫМ. ЫРЫУЫМ. ШӘЖӘРӘМ)

Мемуары
Хәтирәләр

Бабалар, замандаштар иçтәлегенә

Редакторы

Солтанов Йыһат.

Әçәрҙәр ун биш томда, VII том. Эскерһеҙҙең тормошо (Заманым. Ауылым. Ырыуым. Шәжәрәм) -- тәүәрих-мемуар. Өфө: 602 бит.

Ауыр, ҡатмарлы һәм фәһемле тормош юлы үткән, ябай һабансы-колхозсынан алып күренекле әҙип, тарихсы-ғалим дәрәжәһенәсә үçешкән, алтмыш ете быуын ата-бабалар шәжәрәһен ентекләп асыҡлаған авторҙың ғүмер тәүәрихе илдекенә, халыҡтыҡына тығыҙ бәйләнештә бирелеүе менән мемуар әҙәбиәтебеҙҙә үҙенсәлекле айырым бер урын алып тора һәм ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыла.

Илебеҙҙең үткән быуат елле-дауыллы һәм ҡатмарлы ваҡиғалары, ә кешеләрҙең шуға, бер-береһенә ҡатмарлы мөнәсәбәте авторға хас тоғролоҡ менән йәшермәйенсә, биҙәмәйенсә яҡтыртылған. 90-сы йылдарҙағы Башҡортостан суверенитеты өсөн халыҡ массаларының киçкен көрәш тарихы, сәйәси осло мөйөштәрҙе шымартмай, исемдәрҙе һәм ваҡиғалары йәшермәй, архивтарға кермәгән бик күп документтар, текстар теле менән нисек бар – шулай тасуирлана. Боронғо ата-бабалар хәле, тәүәрихтәр, бик күп шәжәрәләр бар. Һәм авторҙың көн заңына яңғырашлы үткер публицистикаһы бик ҡыҙыҡһынып уҡыла.

БЕРЕНСЕ КИҪӘК

Ауылдан — ҡалаға

Ҡотлау һүҙе

(Йыһат Солтановҡа илле йәш)

Ижад юлы – бәхет, шатлыҡ юлы.
Әммә ауыр, хәтәр ҡайсаҡта.
Ҡурҡыу белмәҫ ысын батыр ғына
Йығылмайса атлай ул сафта.

Йыһат ҡустым, һиндә саф, халыҡсан
Тыйнаҡ түҙем, ҡөҙрәт етерлек.
Талант көсөң бер юл ярып алһа,
Даръя булып ағып китерлек.

Илле йәш ул – ил ағаһы йәше.
Килешеп тора һиңә бигерәк тә.
Илле йәш ул – ирҙең бөркөт сағы,
Ғәйрәт йыйған сағы беләккә.

Йәшә ҡустым, ҡүкрәк киреп, йырлап,
Бәхет йондоҙоңа юл ярып.
Яңрап торһон саф йөрәктән сыҡкан,
Ил йөрәген тойған моңдарың.

Ҡотло булһын, ҡустым, илле йәш!
Тағы илле йәшә шулай йәш.
Ижад шишмәң кибеү белмәһен,
Ҡартлыҡ еле һиңә теймәһен.

Зәйнәб Биишева.
04.XII.1982

Саҡ ҡына төпкөл тарих

Йыһат-малай

Мин, салдарҙан сал Үҫәргән ырыуының Ҡамалар араһы башҡорто Солтанов Йыһат Әҙеһәм улы, Кремлдәге "мыйыҡлы юлбашсыбыҙ" тарафынан колхозлаштырылған илебеҙҙең ҡоролоҡ-аслыҡ ғәрәсәте осоронда — 1932 йылдың 3 декабрендә Башҡортостандың Йәнсура[1] районы Ырыҫҡол ауыл советы Сәнкем-Биктимер ауылында тыуғанмын. Батшалыҡ заманындағы административ бүленештә — Орск өйәҙен, ә Бәләкәй Башҡортостан АССР-ы төҙөлгәс — Үҫәргән кантонын һәм ылыҫтарын (волостарын), шунан һуң Йылайыр кантонын һәм ылыҫтарын тәшкил иткән Үҫәргән ырыуы башҡорттарының йәйрәп ятҡан иркен ер-һыуҙарын 1930 йылдың 20 авгусында, кантон һәм ылыҫтар системаһы урынына район һәм ауыл советтары системаһын булдырып, уны Йәнсура, Йылайыр, Хәйбулла райондарына бүләләр. Ә ул райондарҙың тышҡы сиктәрен уратып алған тарафтар ул саҡтарҙа, 1919 йылдан биреле, Ҡырғыҙ (хәҙергесә әйткәндә, Ҡаҙаҡ) АССР-ы (баш ҡалаһы Ырымбур) булып йөрөй. Был иһә ҡыҙыл Рәсәй хөкүмәтен, юлбашсыларын хәүефкә һала, бик борсой: бер үк сик буйында ут күршеләр булып йәшәгән туғандаш башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының ҡыҙыл Рәсәй империяһына ҡаршы берләшеүе мөмкин бит. Ошо хәтәр сиктәшлекте бөтөрөү өсөн, ике араға «шына» килтереп тығалар — РСФСР-ҙың "буфер зона" Силәбе, Ырымбур өлкәләре ижад ҡылына. Бының өсөн ВЦИК-тың 1934 йыл 17 ғинуар декреты менән Силәбе өлкәһенә Башҡортостан республикаһының Арғаяш һәм Ҡоншаҡ райондарын, ә шул уҡ йылдың 7 декабрь декреты менән Ырымбур өлкәһенә — тулыһынса Туҡ-Соранды һәм Үҫәргән ырыуы райондары биләмәләренең байтаҡ өлөшөн (хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Гай, Ҡыуандыҡ, Һарыҡташ, Төйлөгән райондары) ҡанын сығарырҙай киҫеп алалар. Һөҙөмтәлә Йәнсура районының мине тыуҙырған яртыһы балта сапҡандай ярып ситләтелә — Ырымбур өлкәһенең Йәнсура (урыҫса боҙоп рәсми яҙылышында Зиянчуринский) районы булып китә, ә Башҡортостан республикаһында килеш тороп ҡалған ярты өлөшөн, тегеһенән айырымландырыу өсөндөр инде, «я» хәрефен «а»-ға алмаштырып, Зианчура (Зианчуринский) районы рәүешендә үҙгәртеберәк яҙалар. Шуға тиклем район үҙәгебеҙ бер үҙенә ике исемле (Бәкәтәр, Йәнсура) ауылында ине. Исемдәрҙең тәүгеһе бик боронғо — алыҫ Бәкәтәр батырҙың 420 йылда Гурж (Грузия) батшаһы Бәхтәң менән бәрелештә һәләк булыуы боронғо тарихҡа теркәлгән (Мровели

[1] Эйе, хәҙерге рәсми ҡағыҙҙарҙа боҙоп яҙылған «Ейәнсура» түгел, ә Йәнсура бабабыҙҙың исеме менән аталған Йәнсура ауылы. Батшалыҡ заманы администрацияһының 1826 йылғы рәсми ҡағыҙына ла ул «Янчурино» тип теркәлгән. (Башҡортостан Республикаһы Үҙәк Дәүләт Тарих Архивы, ф. И-2, оп. 1, д. 890, л. 78).

Леонти. Жизнь картлийских царей. «Наука», М., 1979; 84-енсе бит). Тарихнамәлә Абыҙ Бәкәтәр батыр ғәскәрендәге «абыҙҙарҙы һәм ҡыпсаҡтарҙы» («овсов и кивчаков») Бәхтәң-батшаның һуғышып еңеүе һәм буйһондороуы әйтелә (90-ынсы бит). Ошо уҡ бәрелеш тарихы «Бәкәтәр батыр» тигән башҡорт риүәйәтендә күренә (Башкирские предания и легенды. Уфа — 1985; 103 — 104-енсе биттәр). Грузин тарихында Бәхтәң-батшаның бер туған һеңлеһен абыҙҙар һәм ҡыпсаҡтар — башҡорттар урлап китһә, башҡорт риүәйәтенең «Бәкәтәр-мәргән» тигән икенсе бер вариантында ла (машинкала баҫылған һәм яҙып алыусы Ф.Ф. Илбулдин дөрөҫләп ҡул ҡуйған тексы миндә һаҡлана) ҡаршы яу яғының ҡаҙаҡ ҡыҙын (бында грузин шулай ҡаҙаҡҡа алмаштырылған) урлап алып ҡайта башҡорттар. Бәкәтәр-мәргәндең ләҡәбе лә унда, «Бәкәтәр ауылы исеменән алынған», тип әйтелә... Шулай итеп, Бәкәтәр ауылының исеме V быуат башына барып тоташа. Ә уғата төптәнерәк төпсөнһәк, хәҙерге Бәкәтәр — хәҙерге төньяҡ Афғанстан ерендәге бик боронғо Бәкәтәр (Бактор) дәүләтебеҙҙең (Бәктора//Бактрия) баш ҡалаһының исеме ул (әйткәндәй, әлегәсә үҙебеҙҙең Алыҫ Көнсығыштың Хабаров крайында ла Бактор тигән ҡала бар).

Ә инде район үҙәгебеҙҙең Йәнсура тигән рәсми аталышына килһәк, атаҡлы «Үҫәргән тәүәрихе»ндәге ырыу шәжәрәбеҙгә теркәлгән, ҡасандыр шул бик боронғо Бәкәтәр тигән ауылда түрә булып торған бабабыҙҙың исеменән килә ул[2] (шунан һуң ауыл ошо көндәргәсә ике исемле булды: халыҡ телендә -- Бәкәтәр, рәсми аталышы Йәнсура). Был бабаның нәҫелдәре ошо көнгәсә фамилияларын боҙмайынса, Йәнсурин (Янсурин) тип яҙып йөрөтәләр, «Башҡортостан» гәзитенең ҡарт журналисы Ф. Абдуллин уҙамандың ташҡа баҫылған бер ҙур мәҡәләһендә лә күренде был. Ауылдың ошо күркәм исемен, иҫке төрки яҙмаһында ҡабул ҡылынғанса, бер аҙ татарлаштырып, тәүҙә — Жәнчура, бара-тора Зианчура (урыҫса Зиянчурино) тип рәсмиләштергәндәр... Башҡортостандағы район үҙәген шул Бәкәтәрҙән Иҫәнғолға күсергәндә, күрәһегеҙ, уның боҙоҡ исеме лә бергә киткән, «хатта стеналарҙағы ҡаҙау-сөйҙәргә тиклем һурып алып киттеләр» тип һөйләй торғайны өлкән быуын...

Башҡортостаныбыҙҙан ситләтелгән райондар араһынан нәҡ беҙҙеке — иң бәхетһеҙе булып сыҡты. СССР-ҙың баш түрәһе алабарман Н.С. Хрущев заманында уны бөтөрөп, биләмәләренең яртыһын — Ҡыуандыҡ, яртыһын Биләй райондарына ҡуштылар. Йомоштарыбыҙ менән Ҡаҫмарт, Һаҡмар һәм телдәре татарлашыуға ауышмыш Үҫәргән (апанды араһы) башҡорттарының Алабайтал ауылы аша Яйыҡты (Уралды) кисеп сығып, Ҡаҙағстандың ҡомло сәмүм елдәре, ә ҡышҡыһын һепертмә ҡар бурандары иҫеп торған алыҫ Биләйгә йөрөнөк. Ләкин быныһы ла оҙаҡҡа барманы — беҙҙең яҡ яртыны Биләйҙән кире ҡырҡып алып, Һарыҡташ районына йәбештерҙеләр. Ошо көндә мин үҙемде иле-ере таланған, кеше илендә йәшәгән килмешәктәй хис итәм, сөнки Башҡортостанымда минең үҙ районым юҡ, ә етәкселегендә башҡорттарҙан бер кем дә булмаған һәм башҡорт мәҙәниәтен, минең мәҙәнилегемдә бар тип тә белмәгән һәм кәрәкле һанамаған Ырымбур өлкәһе һәм районарында мин улар өсөн — шырау, биғәйни,

[2] Ҡарағыҙ: «...Ҡуңғырбай бин Кинйә, уның улы Түлебай, уның улдары Илембәт, Килдеғол, Ғаян, Ҡусҡар, Атлан һәм дә мәҙкүр ***Йәнсура»...*** («Ағиҙел» журналының 2000/1 һаны, 127-нсе бит).

ҡунаҡларлыҡ йорто-ере булмаған бер мосафир. Ҡасандыр ғәзиз бабабыҙ Муйтәндең Иртыштан (Ҡыртыштан) алып Иҙелгәсә йәйрәп ятҡан биләмәләренән исеме генә ҡалды минең өләшкә. Бөтөндө бөтөргөң килһә, ботарла ла бүлгесләә, тигәндәре ошолор...

Иртыш-һыуҙан алып — Иҙелгәсә,
Ағиҙелдән — алыҫ Кәспийгәсә
Усаҡ яға беҙҙең Үҫәргән.
Өнһөҙ өлкәләрҙең өлпөләре
Булып бүлгесләнгән, бүҫелгән.

Тере тәнде сабып тураҡлауы
Топор-балтаға тик килешә.
Ҡаңғырамын, ҡанап, бүлкәләрҙә, —
Шағир йәнен киҫкәс өләшкә...

Һәм Ҡаманан алып — Обь-һыуғаса,
Ағиҙелдән — ҡарлы ҡотопҡаса
Ярты яғым — Башҡорт ҡанһырай.
Йөрәгемдең төбөн — Межгорьены
Умырып алып, «топор» ҡон һорай...

Тыпырсынған тере ҡалъяларҙың
Йәне сыҡһа сығыр, — өнө юҡ.
Гүр ташылай ҡатҡан Каруанһарай,
Биленә тиң моңға күмелеп.

Ай-осона ҡарпып, ҡушбаш-коҙғон
Тәсбихләрме ҡара тәкбирен?..
Юҡ! — «Топор»ҙо гүргә быраҡтырҙы
Һүнмәҫ рухым, еңеп тәҡдирҙе!

«Башҡортостан — ҡайын япрағы», тип
Ҡайыҙлаусы ҡылмаҫ тантана!
«Топор»сонон йәне тыпырсынып,
Ҡурай остарынан ҡан тама...

Әйткәндәй, ошо көндә Самара (Һамар) өлкәһенең Оло Черниговка районында бүленеп ҡалған ана шул минең ырыуҙаштарым үҫәргәндәр башҡорт донъяһына бөйөк ике әҙипте — Һәҙиә Дәүләтшина менән Рәшит Ниғмәтиҙе тыуҙырған. Минең дә алыҫ бабаларымдың береһе булған атаҡлы Бикбау-көнәсәнән (кенәздән) тармаҡланыу халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең нәҫел шәжәрәһендә бик асыҡ күренә: «Рәшит — Ниғмәтулла — Өркөнбай — Диңгеҙбай — Юлымбәт — Үтәгән — Бикйән — Ҡотлогилде — Теләүкәй — Бикбау.

Ағасы — Миләш.

Ҡошо — Торна.

Тамғаһы — Ҡойошҡан». («Ағиҙел» журналының 1999/10 һаны, 178-енсе бит).

Үҫәргәндәр үҙҙәрен Бүре-әсәнән тыуған (йәки уны имеп үҫкән) башбаба тоҡомдары итеп һанауы (Башҡорт халыҡ ижады. Риүәйәттәр, легендалар. Башҡортостан китап нәшриәте, Өфө — 1980; 82-нсе бит, № 49) һәм шуға күрә борон замандарҙа бүре-этҡә табыныуҙары, ә урта быуаттарҙағы татар-монгол илбаҫарҙары һәм уларға буйһонған илдәрҙең ҡәүемдәре ошолай бүре-этҡә табыныусы үҫәргәндәрҙе «нуғай» (монголса ул «эт» тигән һүҙ) тип атауҙары (Чокан Валиханов. Избранные произведения. «Наука», М. — 1986; 235-енсе бит) мәғлүмдәр. Һәм ҡасандыр Ағиҙел буйҙарынан Ҡубанға күсенеп киткән, хәҙер ҙә шунда ил ҡороп йәшәгән «нуғай»ҙар — минең менән бер нәҫелдәш (шәжәрәләренән үк күренә) — бер үк Үҫәргән ярсығы...

Инде тыуған төйәгемә ҡайтайыҡ.

Боролоп-боролоп аҡҡан Ҡаҫмарт һыуы Һаҡмарға килеп ҡойған ерҙә ике йылғаның һыуын һыулап ғүмер иткән ата-бабалар ауылы Сәнкем-Биктимерҙе тарихи төҫмөрләтергә тип ғәзиз әсәйем Бибисадиҡа (1896 йылда тыуған) аманатлап яҙып ҡалдырған ҡәҙерле ҡомартҡыны үҙгәртмәйенсә, тип әйтерлек, күсерәм.

Әсәйем хикәйәте

*

Мин был дәфтәргә Сәнкем-Биктимер ауылының нигеҙ ташын кем башлап һалғанын, улар ҡайҙан күсеп килеп ултырғанын яҙам. Нигеҙ ташын һалыусылар Биктимер, Аҡкилде һәм Ҡолбәк исемле өс ҡарт (Аҡкилдеһе — үҙемдең бабам), Нөгөш буйынан күсенеп, Һаҡмар буйына ултырған. Сәнкем ауылы икәү булған: йәнә Үрге Сәнкем, хәҙер Һунарсы тип йөрөтәләр. Инде Сәнкем-Биктимер юҡ, халҡы күсеп китеп бөткән.



Һүр. 1. Ауылымдың йәмле Ҡаҫмарт буйҙары

*

Үҙемдең тыуған ауылымдың ер-һыуын яҙып сығам.

Беҙ элек Башҡортостанға ҡарай инек, беҙҙе 32 — 33-өнсө йылдарҙа бүлеп, Ырымбур обласына — Һарыҡташ районына ҡалдырҙылар. Элек беҙ Ырымбур гөбөрнәһе Орски өйәҙе 6-нсы Үҫәргән ылыҫы (волосы) булып йәшәнек.

Мин хәҙер үҙемдең ике ауылымдың — Үрге (Һунарсы), Түбәнге Сәнкем ауылдарының ер-һыуларын яҙырға булдым (һүрәттә Ҡаҫмарт һыуы, Һунарсы ауылы эргәһендә).

Көрмөйә тауы аҫты — тау бите урманлыҡ-туғайлыҡ булып, Ҡаҫмарттан бүленеп сыҡҡан Аҡма тигән бәләкәй генә йылға, ул Сәнкем-Биктимер ауылының үр яғында Ҡаҫмартҡа ҡоя. Аҡма һыуының был яғында (Олобайҙа) — Шыртуғай тигән сабынлыҡ, үләне яҡшы, муйыл, балан, ҡарағат, бөрлөгәнгә бик бай. Өйкөм таллыҡлы Аҡманы буйлап — Зимләнкә, Байғаҙ, Ҡамыткүл төбәктәре. Аҡҡош, торна яҙҙарын Олобайға төшөп, ял итеп китә; оса алмай ҡалғанлары шунда бала сығарып, көҙ көнө ҡушылып осоп китә торғайнылар. Бабайлар: «Аҡҡош төшкән — рашҡы барҙыр, ҡар яуырмы икән, тип йөрөй торғайнылар.

Олобай тигән бик ҙур сабынлыҡ, аны ҡартлар, «Битрау» үткәс, бүлешә. Һәр кемдең үҙенең аҡһаҡалы — түбә ҡарты тип йөрөтә торған ҡарт бар. Баяғы шул йөҙ йәшәгән бабай ҡамалар араһына сабынлыҡ өлөштәрен үҙе, кемгә арҡырыһын нисә арҡан иңләүендә тейешенсә бүлеп, салғыһы менән сабып сик һалып, таяҡҡа һәр кемдең исемен йәки тамғаһын яҙып ҡуя.

Төрөкмән араһының — үҙ аҡһаҡалы, борайҙың — үҙ ҡарты, бешкәктең — үҙ ҡарты, күректең — үҙ ҡарты, маңҡаның — үҙ ҡарты. Ахун муллаға үҙенә айырым мижа. Бишҡаралар араһы — аларҙың үҙ аҡһаҡалы...

Олобайҙа өҙөм-өҙөм күлләр; күл йыуаһы, ҡуҙғалаҡ, көпшә, валериан, тағы төрлө-төрлө дарыу үләне. Бесәнгә бай сабынлыҡ. Зимләнкә тәңгәлендә үрге Ҡаҫмарт тирмәне булһа, артабан — Алма төбәге, Буҡлыман төбәк, Бикәнәй төбәге, Дәүи төбәге. Ул ерләр емеш-еләккә бай. Ҡаҫмарт буйында түбәнерәк Кәрҫлән төбәге, Мулла төбәге, Микалай күле, Йәнүҙәк төбәге емешкә, еләккә бай.

Үрҙә әйткән Аҡманан бүленеп — Ҡайын Аҡма аға, шул яҡта Урта тирмән, Түгәрәк бай тигән сабынлыҡ башлана, ул һәр кемгә — бер төбәк, аны бүлмәй торғайнылар. Шунан дүрт километр саҡлым — Ҡырғы бай[3], Оҙон Күл тигән ерҙә — Селек хуторы, хәҙер Ново-Николаевка тип йөрөтәләр. Халҡы хахул һәм мармун тигән ҡәүем була торғайны, хәҙер урыҫ йөрөйләр.

Һаҡмар буйына төшәм: Үле Һаҡмар, Сирүбай соҡоро, Түбәнге тирмән юлы, Ҡомло йорт — боронғо оло атайларҙың көҙгө йәйләүе; һәйбәт туғайлыҡ, емешкә бай сабынлыҡ була торғайны... Сәләм соҡоро, Нияз соҡоро, Шаһи соҡоро, Таҙлыбай батҡан, Ҡараҡуян туғайы — йүкәгә, ҡайынға, емешкә бай бесәнлек.

Килеп төштөм Ҡаҫмартҡа. Аның буйы ағасҡа бай.

Барып төшәм Урта тирмәнгә — Аҡма буйына: Дөйә утары, Ҡормантай. Хәҙер унда халыҡ картуф сәсә.

Мөстән соҡоро — сейәлек; борон мөстәндән (йоғошло түләмә сиренән) ҡасырып шунда быҙау, башмаҡ аҫырағанлар. Ауылда бер һыйыр ҙа ҡалмай

---

[3] Бай (урыҫсаға ингән пай, паек булып) — йорт башына бүлеп бирелгән өлөш.

ҡырылып бөтә торғайны, тип һөйләр ине ҡартлар. Төнлә урамда елән ябынған ҡатын кеше булып, урамда көйшәп ятҡан һыйырлар араһына инеп йөрөһә, шул көндә һыйырлар үлеп сыға торғайны, тип һөйләр ине әнейләр. Мөстәнде әүрәтергә кәртәгә май, ҡорот ҡыҫтырып ҡуяр инек, ти торғайнылар (хәҙер ул ауырыу юҡ). Шуны юшай булғандыр. Шул соҡорҙоң түбән яғында Хәлил байы, Бесәнсе байы, Хәлфә байы (сабынлыҡлары). Ауылдың икенсе муллаһының сабыны, Тимерғәли байы, Мофаззал байы, Ғөзәирхан байы, Түгәрәк бай, Хөсәйен байы күпере. Туғайы емешкә бай, ағасҡа ла. Ҡаҫмарттың Һаҡмарға ҡойған ере — Ҡаҫмарт яғы.

Килеп төштөм инде Ҡаҫмарттың уң яғынан — Үрге Сәнкем (Һунарсы) үр яғы Билән тауға. Бейек кенә тау, урта билендә юл, Билән артында — Һултанбай ауылы, аҫта — Ҡаҫмарт; тау аҫты туғайы емешкә бай. Түбән яғы — Ҡаҙаҡлар сабынлығы, уларҙың ерләре айырым, алар ҡайһы ваҡытта килеп йәшәгәнләрҙер, мәғлүм түгел[4]. Оло атайымдың (Зариф ҡарт Байназаровтың) яҙған яҙыулары юғалып бөткән, йөҙ йәшкә етеп үлде. Бик ныҡ уҡыған кеше ине. Урыҫса шкулды Ҡурғашлы тигән ерҙә уҡыған.

Ҡаҙаҡ сабыны түбән яғында — Уҫаҡлыҡ, Әхәт төбәге, Ҡаҙғай төбәге, Мөфтөй быуаһы; Сергей тигән шул уҡ быуа-тирмәндең хужаһы Сергей ҡарт (урыҫ), ниндәй генә булмаһын, төрки китапларын особый үҙенсә көйө белән уҡый торғайны, мәҫәлән, Йософ китабын... Ҡаҫмарт буйлап — хәҙерге Һунарсы ауылы рощаһы йәғни йүкәлеге, Маныс тигән кисеүендә Ҡырсынташ төбәк, анан түбән герман һуғышында Аустрия халҡы пленныйы һыуға төшөп үлгән. Ҡормантай кисеүе, Һаҡал төбәк, Ғәзиз төбәге, Муса төбәге, ***Иҫке ауыл*** урыны. Артабанырак — Түбәнге тирмән быуаһы, Иҫке ауыл ҡәберлеге, Түбән тирмән соҡоро аҫты — баяғы Ахун Хәҙрәт баҡсаһы. Арыҡтың аръяғында — Имәннек исемле дурға; йүкәгә, төрлө емешкә бай. Ҡоромай торған күлен Һалабаш күле тип йөрөтә торғайнылар. Аннан түбән яғында Әхмәтшаһ күпере урыны бар; әрәмәлектең

Һүр. 2. Ауылымдың йәмле Һаҡмар буйҙары. Сания, Йыһат Солтановтар һәм ҡәйнешем Ирек Абдрашитов

[4] 1816 йылғы халыҡ һанын алыу («ревизские скаски») буйынса, Рәсәй ғәскәрҙәренә әсир төшкән был ҡаҙаҡтар гөбөрнәтер фарманы менән Һунарсы ауылына «ҡырғыҙ типтәрҙәре» рәүешендә еректерелгән: Тәнәли Шөкөрбаев — 38 йәштә, уның улы Хәмиҙулла — 7; Бусурман Йәнҡарин — 30, уның бер туғандары Туйҡара — 25, Йомабай — 20; Тәнәйбәк Тусаев — 30, уның бер туғаны Сөнәйбәк — 20; Атайбәк Чупашев — 35,; Аҡайлыбай Янтайласов — 23 йәштә. (Башҡортостан Республикаһының Үҙәк Дәүләт Тарих Архивы, ф. И-138, оп. 2, д. 170, 137-нсе табаҡтың арты). Был ҡаҙаҡтар артабан Туйғарин, Дусаев, Үтәбаев фамилиялы башҡорттарға әйләнә.

буйы — Имәннек тауы, Ҡыҙлар тауы — Ҡарға буҭкаһына сыҡҡанда уйнай торған; түбән яғында — Әбей Үлгән тауы, юл һыртында Саҡанай сағылы; Соҡор тамағы тигән бер яғында Ҡара айғыр юғалған урман булған. Бер ваҡыт Ҡаҫмарт күперенең ауыҙындағы рощала сиған таборы — уларҙың ҡунып китә торған ере, унда бик ҙур ҡарама бар ине — Хәйерсе ҡарамаһы тип йөрөтә торғайнылар ул төбәкте. (Һүрәттә Һаҡмар-һыу: Сәнкем-Биктимер ауылының һыуалғысында Сания, Йыһат һәм ҡәйнешем Ирек Абдрашитов).

Бар унда быуа урыны, Һаҡмарҙан килгән арыҡ (канал) урыны. Һаҡмарҙа быуа ташы әлдә бар, өҫтәл кебек ҙур таш. Ярҙы менгәс, оло юл — Кершәнник юлы өҫтө — туҙанлы ҡара түмәләс. Ыристандарҙы Сәнкем-Биктимер аша Бала-сайҙан (?) ҡыуалағанда Ҡаҫмарт күперенән сығып, стражниктар үҙҙәре арбаларында ҡырын ятып, суд хөкөмөндә гөнаһлы булған баяғыларҙы тау текәһе ерҙән йәйәүләтеп үтә торғайнылар тау үренә. Сәнкем-Биктимер ауылына утыҙ саҡрым ерҙән килә улар, Сәнкем-Биктимерҙән Мансурауға (Мансуровкаға) — ҡырҡ биш саҡрым ер. Халыҡ бахырҙарға нәрҫә бирергә сыҡһа, баяғы ҡырын ятҡандар ҡамсы болғап ҡыуып ебәрә торғайнылар. Хәҙер ул хуторҙы (Мансурауҙы) Спасский тип йөрөтәләр. Мин анда Ватан Һуғышы ваҡытында мал санитары булып уҡып йөрөнөм. Боронғо баярлар ауылы булған икән. Төрлө ерҙә дачалары, йортлары булған. Хәҙер — Кесе Эйек Тамаҡ тигән колхоз.

Ауылыбыҙ башындағы Һаҡмар туғайын (әрәмәлекте) Руша (Роща) тип йөрөтәләр; һәр төрлө емешкә бай; имән, йүкә, муйыл, ҡарағат, бейек булып үҫкән тирәкләр, матур ҡырсынлыҡлар күп. Балығы йәйен, суртан, бурыс күп була торғайны. Беҙҙең ҡамалар араһынан Солтанов Хәлил олатай йәйенде күп тота торғайны. Оҙон буйлы кеше тиң йәйенде яурынынан аша һалып, ҡойроғон ергә һөйрәлтеп ҡайта торғайны. Үҙе ат, һыйыр тотманы, хатыны ла, үҙе лә уҡымышлы кеше ине. Ауыл башында (Саҡанай сағылында) һәр ваҡыт йылтырап янған ут күреп, барып һуҡҡан икән, бер бәләкәй генә ҡумта менән алтын балдаҡ булған. Хәнифә инәйҙе ул ғашиҡ булып алған, хәлле кеше ҡыҙы булған. Уға бәйетләр сығарған, менә мин бер өҙөгөн яҙам:

Ирәм бағындамы үҫтең, йөрәгем майыны киҫтең;
Саба еле кебек иҫтем, һиңә ғашиҡ булып, жани.
Хәнифә атлы дөхтәр[5] ул, Ирәм бағым, гөлөстаным...

Инде төштөм Сәнкем-Биктимер ауылына. Һунарсы яғынан килешләй, Түбәнге (“Дражжин”) тирмәнде үткәс, юлдың һул яғында — Тирмән тау, уны уҙып соҡор аша күтәрелгәс һул яҡта — Әбей Үлгән тау, эргәһендә — Ҡыҙлар тауы; юлдың уң яғында — Таш Өйгән тау. Анда башҡа ауылға кейәүгә киткән ҡыҙлар, килгән һайын, таш күтәреп тау башына өйәр булғаннар; бейек кенә тау, аҫты ырҙын, мәгәзәй (аслыҡ йылдарҙа ашау өсөн дөйөм иген келәте) яны — ҡәберлек. Ҙур ғына келәт (мәгәзәй) була торғайны, анда йыл һайын йән башына икешәр сажин ашлыҡ сәсеп, көҙ көнө һуғып тапшыра торғайнылар. Ул келәттең бер ҡарауылсыһы — аҫҡыссыһы була торғайны, бахтыр (вахтер) тип йөрөтә

[5] Дөхтәр (ғәрәпсә) — ҡыҙ.

торғайнылар. Ул игенде аслыҡ булған йылда кешенең хәленә ҡарап бүлеп бирә торғайнылар...

Ауыл халҡы иген, ҡарбуз баҡсаһы сәсмәй һис ҡалманы, һәм дә быны һыңар атлы кеше — дүртәүһе бер булып та һөрөп-сәсә торғайнылар. Сәнкем ауылына ете километр Яңауыл бар, шул уҡ Сәнкемдән башҡорттар ҡайсан килеп ултырғанларҙыр — аныһы аныҡ ҡына мәғлүм түгел. Имеш, 1868-енсе йылдарҙа алар үҙләренә ер бүлеп алып күсеп киткәннәр, ауылларына Новый Ғафар тип исем биргәннәр, һаман бер обществоға ҡаранылар — Сәнкемгә. Улар урынына Сәнкемгә Быҙаулыҡ өйәҙенән мишәрләр килеп ер һорағас, килегеҙ, еребеҙ иркен, тип әйткәннәр беҙҙекеләр. Алар (мишәрләр) 1871-енсе йылдарҙа күсеп килгән. Аларға ер айырып биргәннәр. Ҡыҙ биреп, килен алып, бик татыу йәшәгәннәр. Ауылдың ярты (түбәнге) яғы — мишәр, ярты (үрге) яғы башҡорт булған. Ауылда бер Һаҡмарҙа — ике күпер, ике борам кәмә була торғайны. Бәғзе берҙә ғауғалашып, ике борам кәмә араһына ситән үреп ҡуя торғайнылар.

Сәнкем-Биктимер ауылы — ҙур ғына ауыл ине. Ҙур ғына мәсете, биш мәҙрәсәһе бар ине. Ул заманда ахун — Мөхәммәд-Камал Дәүләтшин, төрлө яҡтан шәкертләр күп килеп уҡый торғайнылар. Яйыҡ арьяғынан ҡаҙаҡлар, ҡыҙларын, улларын уҡытыр өсөн, семьялары белән күсеп килә торғайнылар, аларҙың шәкертләренә айырым мәҙрәсә бар ине. Яҙғыһын күсеп ҡайтып китәләр...

Ауыл тапҡырында Һаҡмарҙы арьяҡлап Сафа ҡарт күле тигән бик ҙур күл бар, аршын буйы балығын — һаҙан балығын тота торғайны шул ҡарт. Шуның янында өйәңкелек соҡор — Көпшәлек, ҙур ғына туғай — Йүкәлек тип йөрөтә торғайнылар. Аның Көнәс (Көҙәс?) ере тигән юл буйы — Һаҡмарҙан бүленеп аҡҡан йырын-остров, андағы ағас — ерек, тирәк. Емешкә бай Муйынһөйәк тигән сайтаҡаны — ауылдың икенсе муллаһының сабынлығы ине. Һаҡмар балыҡҡа, бигерәген йәйенгә, бай һыу ул. Һаҡмарҙың уң (ауыл) яғы — киртләс-киртләс ҡыҙыл ташлы яр. 1921 аслыҡ йылында балыҡ үрләгән яҙғы ташҡын ваҡытына барып еткән кеше үлмәне. Халыҡ күп ҡырылды, өйө-өйө менән. Яр башында, ҡәбер ҡаҙырға көс булмағас, бер ҡарттың өй баҙына ҡырҡ биш кешене күмделәр... Хөкүмәттән ярҙам килгәс, үлеү туҡталды.



Һүр. 3. Урмәмбәт-кенәз ҡәберташы

Яҙҙарын, ауылды урталай, Ишемүҙәк тигән бик шәп ҡар һыуы-йылға аға, бәғзе йылда ат белән сығып булмай торғайны. Ауылдың түбән яғында (Һаҡмарҙың яр яҡаһында) Борам тауы тигән түң бар. Ә юлдың уң яғында (ауылды сыҡҡас) ҡушарлап-ҡыйыҡлап ултыртылған ике яҫы таш бар (Әүлиә зираты). Хәсән-харунъя тигән кеше белән энеһе Лотфулла тигән кеше, Хәлилгә табылған хазина беҙгә лә табылыр — ут күренә, тип ҡаҙғаннар; көтмәгәндә ел-дауыл ҡубынып, икеһенең дә — береһенең ауыҙы ҡыйшайып, икенсеһенең күҙе салшайып ҡалған ине — шул ҡыйыш-салыш көйө үлгәнсе йөрөнөләр. Ил-ауыл сығып, шул ташларҙы ҡартлар барып әүәлге хәленә

ҡуйғас ҡына, дауыл баҫылды; имеш-мимеш һүҙ түгел — үҙ күҙем менән күрҙем[6]. (Һүрәттә: Әүлиә -- бабабыҙ Урмәмбәт -- Ырыҫмәмбәт тигән нуғай бейе -- кенәз зиратының ҡәбер ташы).

Борам тауынан түбәнгәрәк төшкәс, Һаҡмар буйы һомғол тирәклек, ҡоромай торған күл; түбәнендә Өс Ҡарама тигән ер, яр өҫтөндә Әүлиә зираты: бер ерҙә — башы, бер ерҙә кәүҙәһе күмелгән, тип һөйләй торғайны ҡартлар. Таш бурап ҡуйғаннар. Юлдан өҫтә — Ташҡаҙған, һырт яғын Ҡыҙылташ һырты тип йөрөтәләр. Һәм шундағы ҡыҙыл ташлы Һаҡмар текәһе — Ҡыҙылташ тип атала. Аҫ яғы һыу буйлап — баяғы Өс Ҡарама, түбән яғы — Бибекбиргән таллығы, унан түбәндәрәк — Билал Тирәге, Ярыш туғайы (эсе сабынлыҡ — Мишәрләр сабынлығы), һырт яғы ҙур күл — Ярыш күле.

Ташҡаҙған юлы барып Тәрәнүҙәккә төшә, үҙәк буйында балан, йәнә этбауыр ағаслары бар. һул яғы тигеҙ йырын. Элек һабан һөргәндә тимер күлмәк яҡалары — иҙерәп ҡалған гәүҙәле яҡалары сыға торғайны. Тәрәнүҙәктең икенсе яғында сейәлек була торғайны. Үр яҡ үҙәк буйында Камал хәҙрәт тиреҫ ташып, тупрағын ашлап сәскән ерләрендә ашлыҡ бик уңа торғайны. Аръяғы — Маяҡлытау, аҫтағы тигеҙлеге — Мансур юлы (шуның ере булған). Ул ерҙе хәҙерге ваҡыт Рамаҙан ырҙыны тип йөрөтәләр. Түбән яғында бейек тау еге бар, тәрән соҡор — элек Этбауырүҙәк тип әйтә торғайнылар, ә хәҙер Комбайн Ауған тип йөрөтәләр. Соҡор барып Ярыш күленә төшә; анда ҙур сирәм, тип, һабандағы кеше һәммәһе шунда ҡыуыш ҡороп ята торғайнылар. Һуңғы ваҡытта колхоз өй һалып, культурный ыҫтан яһаны (үткән-һүткән Хаматау, Каирский ауылы урыҫтары бүрәнәләрен һүтеп алып киткән). Аръяғында Һаҡмар Йорт — боронғо олатайларҙың Урта йәйләүе булған. Һуңғы ваҡытта урыҫ хуторы килеп ултырғас, Хомутовка тип йөрөтәләр, тик хәҙер юҡ инде. Анның аҫ яғында Эшләпә туғайы, анан түбән Бүребәйләгән туғайы. Тау өҫтөндә яңғыҙ өй яғы — Ҡыҙылйорт, бер генә өй — Бундыр өйө — Сруша (Сережа) тигән ҡараҡ йәшәй торғайны. Халыҡ, малы саҡ ҡына күренмәһә, Сруша ҡараҡҡа олаҡмаҫы борон табырға тырыша торғайны. Анның ярҙа ҡаҙып яһаған мал һарайы бар, тип һөйләй торғайнылар. Анда барып керһә, күсенеп йөрөй торған Әлем ҡаҙағы Нарымбайға барып эләкһә — вәссәләм, ти торғайнылар.

Маяҡлытау башындағы Шаһи тауы битләүе — хәҙрәт ере. Шул үҙәкте буйлап — Кершәнник юлы, Тирәкле шишмәһе. Ул ерҙә ашлыҡ бик уңа торғайны. Ул һыу (Тирәкле йылғаһы) бик алыҫҡа бармай.

Инде ҡабат Һунарсы ауылы яғына килһәк, унын үр яғында — Урта Биләнтау юлы, Биләнь Көрмөйәһе. Бороноралҡ бик ҙур мәмерйә булған. Хәҙер күмелеп ҡалған, емерелгән. Унын был яғында Үтәбикә туғайы, Ташҡаҙған соҡоро. Анда 1921 йыл аслыҡта бик күп үлек күмелгән.

Көрмөйә буйлап Манҡыс яғаһы тигән үҙәк — ағаслыҡ, баланлыҡ, бөрлөгәне бик матур, тәмле. Һыуы бар. Шул уйһыуҙың түбән яғында Бетән Ҡойоһо тигән, ағып ятҡан, һыуы һаҙмат бесәнлек бар; 1932-нсе йылдарҙа Уфанан агранум барып, шул йылғаны быуып, чумиза тигән тары сәстерҙе, бик унды — ҡытай тарыһы, ти

---

[6] Ҡаушарылып ҡуйылған ике таҡтаташты (әҙәм бейеклек) Һарыҡташ ҡасабаһында ялланып йорт һалыусы “шабашник” әрмәндәр урлап алып киткән.

торғайны халыҡ. Шул уҡ агранум Олобайға ла, быуа яһатып, дөгө сәстерҙе, насар булды аның уңышы.

Төштөм Маңҡыс йылғаһы ҡойған Һаҙлыйылға башына. Ул йылға Һунарсы ауылынан үтеп аға, Әселеүҙәк йылғаһы ҡушылып, Ҡаçмартҡа ҡоя. Һунарсынан Һаҙлыйылғаны кисеп сыҡҡан оло юл Сәнкемгә табан бара, һул яҡта — ҡәберлек (халыҡта «Сәғиҙәләр зираты» тип йөрөтәләр; Миңнебай тигән берәү зираттың бура таштарын алып китеп, өй нигеҙенә һалды, «Сәғиҙәләр зираты» өçтөндә хәҙер — өйҙәр), юл аçтында (Ҡаçмарт тарафлап) колхоздың бик ҙур таш келәте. Анан түбән бик ҙур мал һарайы. Тигеҙлек — ашлыҡ сәсә торған ер. Юл һыртында (уң яҡлап тау битләсендә) — Барсын ҡойоһо, элек һыуы ағып ята торғайны, хәҙер юҡ. Анан түбән — Балаҡ үҙәге. Юл аç яғында һулда — ҠамышлыҒолаҡ, Ғәзиз сабыны. Юл ҡырыйында — Ат батып үлгән һаҙ, хәҙер һаҙы юҡ. Хәҙер ул тигеҙлек, ашлыҡ сәсәләр. Атбатҡандың өç яғы, һул ҡулдағы яçы ғына түмәләс — боронғо Уртауыл (Иçке Ҡый) ҡәберлеге. Шунан юл буйлап барып (Түбәнге тирмәнде үткәс) — Һабыр Ҡарауылы тигән бейек кенә тау, бер яҡ битендә тәрән генә соҡор (Тәрәнсоҡор); шунда егетләр барып ҡурай, гармун тартып уйнап ҡайта торғайнылар (ауылда уйнарға имам хәҙрәттән ҡурҡып — бик ғәййәр булды). Туғыҙынсы йылдарҙа шул Мөхәммәт-Камал хәҙрәт мәҙрәсәләге шәкерт Сәйетбатталов Ғәбдел-Әхәтте (боронғо шағирыбыҙ Һибәтулла Сәлиховтың тоҡомо, 1918 йылда ошондағы ҡыҙыл гвардия әтрәте командиры), һабаҡташы Сөнәкәйев Төхфәтте (һуңынан билдәле шағир, Шәйхзада Бабичтың дуçы), башҡа бик күп кенә шәкертләрҙе мәҙрәсәнән ҡыуҙы (йәдитселәр хәрәкәтендә ҡатнашҡандары өсөн). Кухняла шәкертләргә сәй ҡайнатып йөрөй торған Хөснәлитдин Байназаровты ла (әнейем Бибиғәфифәнең бер туған энеһен) ҡыуҙылар, хөкүмәткә ҡаршы йәшерен собрание үткәрмәгеҙ, тип.

Инде йәнә Һунарсының Оҙон Ҡырла тауҙары яғына баҡһаҡ, билән аша Маңҡыс йылғаһы ағып сыҡҡан тау ҡыçығы — Ҡапҡанташ; шул уҡ исемдәге яҡаһы тигеҙ яғында — Факан хуторы; боронғосаһын Хаҡан әбей утары тип йөрөтә торғайнылар. Ҡыçыҡ йылғаһының үр яғындағы ҠолонҺуйған тауы йыуаға, артышҡа бик бай. Анан — Шәкәрҡасҡан тау йылғаһы, анан — Кәзәбаҡырған тау йылғаһы, Ҡыҙларбиргән тау йылғаһы, «Ишәй ыҙма бураған» тау йылғаһы, Туҡмаҡ йылғаһы, Туҡмаҡ хуторы (хәҙер Митрский — Дмитриевка тип йөрөтәләр), инде хәҙер юҡ, күсеп бөткән. Түң аша — Һыулыүҙән, анан сыҡҡан һыу — Бейлеғош йылғаһы (ҙур, шәп йылға), шул йылға башында — «Генерал Перовский юлы», түбәндә — Перовский хуторы. Анан түбән — Гразлуфка (Грязьловка), Бүгәслүфкә (Богословка) хуторлары. Бейлеғош — олатайларҙың боронғо яҙғы йәйләүе. Анан түбән — Монашка хуторы, Кәйерский (Каировка), Назарский. Шул ауылларҙан үтеп, Тимаш баяры еренән Бейлеғош Оло Эйеккә ҡоя. Аръяғы Кершәнников — ҙур баҙарлы ауыл, хәҙер үр яғы — Сураш ере. Бейлеғош һул яғында — боронғо оло атайларҙың Үрге йәйләүе. Яҙ башында шунда күскәннәр, ҡарт-ҡоролары ара ҡунып барғаннар. Хәҙер анда баяғы Бүгәслүфкә (Богословка) тигән сиркәүле ауыл. Минең иçемдә ҡалған: был ерләребеҙҙе 1894 йылда һатҡаннар...

Беҙҙең Сәнкем-Биктимер ауылына 1924 — 25-енсе йылларҙа хөкүмәтебеҙ аты юҡҡа — ат, һабаны юҡҡа — һабан бирҙе; ашлыҡ сәстек, баҡса, картуф үҫтерҙек.

Сәнкем халҡының борондан һәр өйгә бер һауын бейәһе, бер аты булды. Иген сәсеп көн итте. Үрге Сәнкем (Һунарсы) ауылы ла шулай йәшәне.

1913 — 14-енсе йылларҙа ауыл халҡы «ширкәт» тигән лафҡа асып, шуға силин (член) булып яҙылып, байтаҡлары дебеттән нәҙек («паутинкә») шәл бәйләп тапшырып, тауар ҡайтартып торҙолар, конторы Яйыҡ буйында Сиркәш (Черкес) ауылында булды. Һәр ауылдың һайлап ҡуйылған һатыусыһы барып килтерҙе тауарҙы.

Совет йылдарында, хөкүмәтебеҙ ҡушыуы буйынса, «кәмитәт взаимопомощи»ға ойоштоҡ.

Донъяны әҙерәк тыныҫҡа ҡалдырып, үҙебеҙҙең ауыл ҡыҙыл партизанлары ҡайтты.

Партизан исемлеге:

Сәйфитидинов Ғариф Этйейміәҫов Бесәнсе улы.
Ихсанов Ғиналитдин Низамитдин улы.
Солтанов Хисамалитдин Шиһабиттин улы.
Солтанов Суфиян Ғәзиз улы.
Солтанов Сәлимулла Хәлил улы.
Ҡолбаҡов Ғайса Фәхри улы.
Байназаров Хәмзә Зариф улы.
Уразов Ғөбәйҙулла Тажи хәҙрәт улы.
Әбдрәшитов Сәләхитдин Низамитдин улы.

Үрге Сәнкемдән (Һунарсынан):
Биктимеров Ғиндулхалиҡ Йәнтүрә улы.
Биктимеров Рахманғол Ислам улы.
Һунарсин Баймөхәммәт Зөлҡәрнәй улы.
Сөйөндөков Хәмиҙулла Сәйфулла улы.
Көбәков Бәҙрәлитдин Умырҙаҡ улы.

Һултанбайҙан:
Әхмәров Ғимаҙислам, указной мулла, Фәтхелислам ишан хәҙрәт улы.

Ырыҫҡолдан:
Таймасов Вәлиәхмәт Ырыҫҡолов Хужахмәт улы.
Ырыҫҡолов Сәхиулла Нәбиулла улы.
Ырыҫҡолов Ҡәһәрмән Ғәбделваһап улы.
Ырыҫҡолов Ғафурйән Хәкимйән улы.
Арыҫланов Рәхимйән Хәсән улы.
Ярышев Хәйбулла Хәйрулла улы.

Яңауылдан (Яңы Ғафарҙан):
Сәйетбатталов Ғәбдел-Әхәт Садиҡ улы.
Баҡиев Сәләх Хисам улы.
Бакиев Иҙрис Ғәләү улы.
Хөсәйенов Һаҙый Ғариф улы.
Хөсәйенов Исмәғил Исхаҡ улы.
Хәкимов Миңлеғәли Харис улы.
Собханғолов Әсәт...
Файызов Хаматый Шәрип улы.
...Исмәғил...

Әсәйемдең яҙмаларын һүҙ ыңғайында ошо урында бүлеп, ҡыҙыл партизан олатайым Хисамитдин Шиһабитдин улы Солтанов (өҫтәге исемлектә бирелгән) тураһында бер-ике кәлимә өҫтәп китәйем. Ғүмере буйына тыуған ерҙең тәбиғәтен ҡурсалар, аҡ казак ҡылысы сапҡан муйыны бер яҡҡа ҡыйшайып йөрөр, шуға күрә Ҡыйышмуйын тип тә ләҡәпләнер ине. Мин, бик йәшләй үк әҙәбиәт менән мауыҡҡан улан, төбәгебеҙҙең ҡыҙыл партизандары тураһында роман яҙырға хыялланып, олатамдың граждандар һуғышында күргәндәрен, башҡорттарҙан беренсе ҡыҙыл гвардия ойоштороусылар һәм етәкләүселәр Сөләймән Мырҙабулатов, Ғәбделәхәт Сәйетбатталов һәм башҡалар тураһында һөйләтер инем. Шул хәтирәләренең 1949 йылдың 11 ноябрендә үҙ ауыҙынан яҙып алғандарымдың 5-6 бите һаҡланып ҡалған, бына ул:

“1917 йылдың феврале – Ырымбурҙа мин хеҙмәт иткән запас полкта агитация башланды. Карауанһарай, пороховой погреб. Ауылға мартта ҡайтарҙылар. Апрелдә Ғәлләм мулла Дәүләтшин (Жултый ҡасабаһының Нуғай биҫтәһе имамы, 1918 йылда уны Ырымбурға сигенеүсе большевиктарҙың Каширин әтрәте атып китә. – *Й.С.*) сельский собрание саҡырҙы (Сәнкем-Биктимер, Һунарсы, Ырыҫҡол, Яңауыл, Селек Мужигы ауылдары). Староста Хисмәт. Урамға теҙеп ҡуйҙылар, аҡтарҙың Дутов армияһына яҙылырға өндәйҙәр. Беҙ теләмәйбеҙ. Байҙар, барыусыларға малдар бирәбеҙ, тип өгөтләйҙәр. (Ауылыбыҙҙың Фатих мулла[7], большевик яҡлы булып, Ғәлләм мулла менән талашты). Бүтән яҡтарға агитация таратыу өсөн 3-4 уполнамус һайланылар. Барырға теләмәүсе 40-50 кеше өҫтөнән протокол төҙөнөләр, 18 сәғәт эсендә атырға, тип. Ҡайтып киттек. Һыу ташҡан ваҡыт. Төнгө 12 – 1 сәғәт – атылыу срогы. Өйҙә йәш ҡатын. Бөтә ауылдарҙың партизандары Сәнкем-Биктимерҙә йыйылдыҡ, бында ғына борам кәмәһе сөнки. Йоҡо килмәй, эс боша. Берәү тәҙрә сиртә. Балта тотоп тупһаға баҫтым. Ҡарттам инде, илай: “Большевиктар килә”, -- ти. Орудие тауыштары ишетелә Черный Отрог яғынан. Ҡарттамды йыуаттым. Иртәгәһен Әхәт Сәйетбатталов килде, бөтәбеҙ әтрәткә индек. Ауыл эштәрен тикшерҙек. Әтрәт исемләнде “Сакмарская свобода” тип. Жултыйҙан ҡасып килә башланылар, большевиктарҙан ҡурҡып. Ҡамауҙа торҙоҡ. Жултыйҙы барып алдыҡ, беҙҙең әтрәткә яҙыла башланылар. 15 көн яттыҡ шунда. Ырымбурҙан элемтә өҙөлдө. Ҡыуандыҡ менән элемтә тоттоҡ. Шул сәбәпле Ҡундырау тимер юл станцияһына

[7] Сәнкем-Биктимер ауылының имамы, 1917 йылда яңы төҙөлгән Башҡорт хөкүмәте ағзаһы.

киттек, 60 кеше әтрәттә. Жултый тимер юл станцияһы башлығы большевик Расщепкин – беҙгә башлыҡ, Әхәт Сәйетбатталов – комиссар. Көнбайыштан беҙҙе кавалерия ҡамай башланы, кемдәр икәнен белмәйбеҙ. Ата башланыҡ. Һул флангаһы ауылға бәреп инде. Ҡараһаҡ, сиркәү башында ҡыҙыл флаг. Атыу туҡтатылды. Сиркәүгә барҙы Әхәттәр. Тегеләр 1-й Оренбургский ҡыҙыл казачий кавалерский полк булған, улар беҙҙе белмәй килеп баҫҡан. Беҙҙе арестовать итеп алып киттеләр Дубиновкаға. Тикшергәс, ҡоралдарҙы кире бирҙеләр. (Уларҙың алтауһын үлтергәнбеҙ, аттарының 12-һе яраланған, беҙ – һау). Вагондарға тейәп, Ырымбурға алып киттеләр, Ҡыуандыҡ әтрәте менән бергә. Барғас, дүрт тәүлек бикле торҙоҡ. Тикшергәс, көндөҙ сәғәт 6-ла беҙҙе асып сығарҙылар. Әхәт команда биреп аттарҙы вагондарҙан төшөртөп, һыбайланып алдыҡ. Гөрләтеп оркестр уйнай. “По одному!” командаһы менән шәһәргә сығып, “по 2 шеренги” киттек. Царский (хәҙерге Советский. – *Й.С.*) урамға сыҡҡас, “по три” менән Форштад биҫтәһенә киттек. 105-енсе баракка алып барып, карантин яһанылар. Мунса индек. 6-нсы көндә обмундирование бирҙеләр. “Рубка”ға (ҡылыс менән сабышырға) шәһәр ситенә маневрға сығарҙылар. Әхәт (Ғәбделәхәт Сәйетбатталов. – *Й.С.*) 60 тал киҫте. 10-дан кәмдәрҙе пехотаға ҡалдырҙылар. Мин кавалерияға эләктем (4-5 кеше – пехотаға). Ырымбурҙан 18 эшелон булып сигендек. Ишеттек: Дутов Ҡыуандыҡҡа сапҡын яһаған. Унда инә башлағас, Расщепкин 3 платформаны паровоз алдына ҡуйырға команда бирҙе, ә пехотаға – цепҡа таралырға. Кавалерия һөжүм итә. Китмәҫебеҙ борон теге яҡтан бер буш паровоз килә башланы, бәрҙертергә. Бәрелгәс, бер платформа осоп китте, паровоз үҙе лә осто. Икенсе платформа, тәгәрләп барып, беҙҙең паровозға бәрелеп, Расщепкиндың аяғы һынды. Ҡураған йылғаһы янында һуғыш башланды. Беҙ – тау өҫтөндә, улар аҫта. Обоздарын ташлап, Индилка яғына ҡастылар. Дутов легковик менән ҡасты. Бер 7 сәғәттәй ҡыуып барып боролдоҡ. Ҡыуандыҡҡа индек, 120 кешене һуйғандар. Аҡтарҙың ҡайһылары йәшенеп өлгөргән тиреҫлектәргә, Һаҡмар, Ҡураған буйҙарына. 4 офицерҙы тотоп аттылар. Индилканан бер приказчикты, аҡһаҡ изменникты, Хәмзә[8] атты. (Туңҡайтып ҡуйып арттан атты, пүлә башынан сыҡты). Братская могилаға иптәштәрҙе ерләнек, 4 көн ял иттек. Ҡалған 6 эшелон менән Орскиға ҡуҙғалдыҡ (ауған паровозды торғоҙоп ултырттыҡ). Орскиҙа музыка менән ҡаршы алдылар. Май айында бер аҙна ял алдыҡ, байрам иттек. 1 июндә аҡ казактар атаковать итә башланы, ҡамалышта ҡалдыҡ 11 ай буйына. Әхәт – командующий, Лысов (Семистополь ауылыныҡы) комиссар булды. Аҙыҡ-түлекте һуғышып таптыҡ. Бер көн июнь айында Орск янындағы ауылдар беҙгә ярҙам һорап килделәр, Дутов көсләп мобилизовать итә, тип. Июндең 15-ендә беҙҙең эскадрон Ҡомаҡ ауылына ярҙамға киттек, 150 кеше: бер взвод пехота, бер эскадрон кавалерия. Орский тигән казачий ҡасабанан 15 саҡрым. Ләкин ир-аттың бөтәһен дә шул көндә алып киткәндәр. Һөйләнеләр, Нафорскийҙа мобилизация, тип. Шунда киттек. Өлгөрмәнек: күптәрҙе үлтереп, талап киткәндәр. Семостополгә барҙыҡ. Лысовтың 15 йәшлек улын, ҡатынын үлтергәндәр, өйөн яндырғандар. Лысовтың бер туған ағаһы (полковник) подвалда иҫереп ятып ҡалған. Лысов уны урамға һөйрәп сығарып, сапҡылап үлтерҙе.

[8] Өҫтәге исемлектә күрһәтелгән Байназаров Хәмзә Зариф улы, минең оләсәйем яғынан олатайым.

Әйттеләр, тегеләр Яңы Таналыҡҡа киттеләр, тип. Аҙыраҡ торғас, шул ауылда беҙҙе атаковать итә башланылар. Уларҙың винтовкаһы юҡ, только ҡылыс. Лысов команда бирҙе ҡаршы сығырға. Ҡамауҙан сығыу өсөн һуғыша башланыҡ, шунда Ғәлиев 12 юнкерҙы сапты. Сигенделәр Таналыҡҡа. Ҡыуҙыҡ Таналыҡҡа тиклем. Унда беҙҙе тағы өс яҡлап атаковать итә башланылар. Борам кәмәһен ватҡандар. Ямғыр китте. 2 пулемет, таҫмалары ҡомланып, атыуҙан туҡтаны. Тегеләр, отбивать итеп, пулеметтарҙы эләктерҙеләр. Әхәт, ҡырандасты ауҙарып, уның артында ятҡан килеш ҡул пулеметынан ата башланы. Команда биреүсе юҡ. Шул ваҡыт Яшка Яков сигенергә команда бирҙе. Хоҙайбәндин тигән 19 йәшлек егет ҡул пулеметы алып, уң флангаға ата башланы, шул уңдан йырып сығып сигендек, ун биш саҡрым китеп йыйылдыҡ. Һау ҡалған 53, пехотала 17 кеше. Шул ваҡыт бер атлы сабып үтә башланы. Мин (бөтәбеҙ ун кеше) уның артынан төштөк. Шулай ҡыуып барһаҡ, соҡор эсендә бер сотнялай аҡ казак ҡылыстар менән тора. Арттан баҫтырҙылар, дүртебеҙ ятып ҡалған. Минең арттан етеп, ҡылыс менән арҡамды эләктерҙеләр, муйыныма саптылар – яға һәм шарф аша яңаҡ һөйәге киҫелде. Ике атҡа арҡылы һалып, сепрәк менән ҡанды баҫҡандар. Ҡояш сығып килгәндә Орск күренде, ләкин элемтә юҡ. Беҙгә орудиенан ут яуҙыра башланылар. Алдан флаг күтәреп сапҡас, атыу туҡтатылды, ҡалаға ҡайтып индек. Беҙҙе алсаҡ ҡаршылап, май, һөт, ҡаймаҡ тотоп торалар. Ауыр хәлгә ҡалыуыбыҙҙың сәбәбен дә аңланыҡ: Ткачев тигән врач, иҙән аҫтына радиотапшырғыс ултыртып, шпионлыҡ ҡылып йөрөгән... Шул 18-енсе йылда хәбәр алдыҡ: Ырымбур аҡтарҙан таҙартылған”...

Инде әсәйемдең яҙмаһын дауамлайыҡ.

Партизаннар ҡайтҡас, донъяның городынан (ҡаланан) бер завод кешеһе килеп, беҙҙе калхузға өндәне, беҙ берәүҙән (бер тауыштан) калхузға ойоштоҡ, калхуздың исемен «Бәлшәвик» тип ҡуштыҡ. Үрге Сәнкем (Һунарсы) ауылыныҡылар калхузларына «Барсын» тип исем бирҙеләр. Хәҙер унда һигеҙ йыллыҡ мәктәп, китапхана, клуб, медпункт, магазин, бушта (почта) бүлеге бар. Үур ғына ферма-һарай, ашлыҡ һаҡлағыс келәте бар.

Һүр. 4. "Әхмәтйәниә" мөғәллимәләр курсы. Алғы буйҙа һулдан беренсе -- Солтанова Бибисадиҡа Ғәбиҙулла ҡыҙы (әсәйем); артҡы буйҙа һулдан икенсе -- Йосопова Гөлбәҙәр Әхмәт ҡыҙы (аҙаҡ билдәле артистка). Орск ҡалаһы, 1915 йылдың авгусы.

Сығам Һаҡмар аръяғына. Һаҡмарҙың аръяғына беҙҙең башҡорт ауылының бер ҡатышы ла юҡ ине. Ул ваҡытта улар казачий исемендә йөрөй торғайнылар.

Суртанлы тигән ауыл — ҡундрау нуғайлары ауылы, таш мәсетле (хәҙер тирмән). Суртанлы йылғаһының аръяғында муҡшы (мордва) ауылы — сиркәүле (хәҙер сиркәүе юҡ). Шуға ялғаш — Күләй (Күл ауылы) тигән татар ауылы, мәсетле (хәҙер мәсете юҡ). Һәммәһе лә казачий ауыллары, хәҙерге көндә бөтәһен бергә Жултый тип йөрөтәләр (боронғо «Желтый редут»тан). Һуңғы йылдарҙа Һунарсы ауылы шул уҡ Жултый сәүитенә, шул уҡ калхузға ҡарай, калхуздың исеме «Һаҡмар». Анан түбән тимер юл буйлап Сәпәр йылғаһы һәм хуторы бар. Анан Ирек тигән ауыл бар, элек Майор Күле тип йөрөтә торғайнылар. Анан түбәнерәктә — Эйек мәхәлләләре ауылы — барыһын бергә Эйек Тамағы йәки Ҡырҡ Күкәй тип йөрөтә торғайнылар, хәҙер Шишмә тиҙәр. Анан урыҫ ауылы Воздвиженка — боронғо казачий-дун станица (Дон казактары станицаһы) атаманы торған ер, шунан түбән — Һарыҡташ.

Мин 1896 (бер мең һигеҙ йөҙ туҡһан алтынсы) йыл Ырымбур гөбөрнәһе Орск өйәҙе (хәҙер Ырымбур обласы Һарыҡташ районы) 6-нсы Үҫәргән ылыҫы (волосы) Сәнкем-Биктимер ауылында Мөхәммәт-Камал ахун Дәүләтшин мәхәлләһендә тыуғанмын. Хәҙер Һарыҡташ районы Жултый сельсәүите Һунарсы ауылы.

Атай-олатайлар Нөгөш буйынан күсеп килгәннәр. Сәнкемгә нигеҙ ташын һалыусылар Биктимер, Аҡкилде, Ҡолбаҡ тигән ҡартлар.

Һунарсы, Ҡарасан тигән ҡартлар булған. Ҡыҙғаныска ҡаршы, тарихлар, боронғо яҙыулар һаҡланмаған.

Һорауны (улымдың һорауына яуапнамәне) тултырған кеше — хәҙер 79 йәшендәге Бибисадиҡа Солтанова Ғәбиҙулла ҡыҙы. Йәш ваҡытта 1917-нсе, 18 — 19-ынсы йылдарҙа балалар уҡыттым, боронғо төрки хәреф белән. Эш-һөнәрем — йәш ваҡытта әртилгә шәл бәйләнем, хат ташыусы булып эшләнем, медпунктта санитарка булып биш йыл эшләнем, һабан һөрҙөм, кәбән ҡойҙом.

Бер йыл уҡып, мал санитары булып эшләп, пенсиәгәсә — 57 йәшкә саҡлы эшләнем. Сәләмәт булғас, хәҙер ҙә хәтерем яҡшы, күҙем күрә, хәҙерге көндә Уфала йәшәйем — улым, киленем ҡулында.

Яҙылды 1975-енсе йыл 21 синтәберҙә.

Хәҙерге шөғөләм шул: урыҫсаһын да, башҡортсаһын да — журналлар уҡыйым, телевизор вә ҡарайым.

Әнейемдең (үҫәргәндәр әсәне *эней,* атаны *этей* ти) уҡытыусылығы тураһында аңлатыбыраҡ китәйек.

Солтанова Бибисадиҡа Гәбиҙулла ҡыҙы иҫке стиль буйынса 1896 йылдың 2 октябрендә Ырымбур гөбөрнәһенең Орск өйәҙе 2-се Үҫәргән ылыҫы Сәнкем-Биктимер ауылында тыуған. Атаһы яғынан – солтановтар, әсәһе яғынан байназаровтар нәҫеле. 1914 йылдың 6 мартында мәсет метрика кенәгәһендә “Чәнкем-Биктимер ауылының Ғәбидулла Билал уғлы Султановның ҡыҙы Бибисадиҡаны никах ҡылынды Бикбирдинский обществода Юнай ауылының

башҡурт Дәүләтғәли Нурзиәғәли Баймөхәмәд уғли Ишкилдингә. Һәр икесенең әүәл никахлары. Ҡыз 17 йәшендә, егет 19 йәшендә”, тип теркәлмеш. Әнейем уҡымышлы булған һәм уны, уҡытыусы ир-егеттәр герман һуғышына китеп бөтөү сәбәпле, икенсе йылында уҡ өйәҙ үҙәге Орск ҡалаһында асылмыш уҡытыусылар әҙерләү курсына юлландырғандар һәм ул унда, өҫтәрәк килтерелгән фотонан (хәҙер ул БР йәмәғәт ойошмалары Үҙәк Архивында Бәҙәр Йосопова шәхси фондында һаҡлана – ф.10185, оп.1, д.43/17 һәм д.43/15) күренеүенсә, буласаҡ халыҡ артискаһы Бәҙәр Йосопова менән бергә уҡып сыҡҡан. Хәтеремдә: “Өфөләге әртис Бәҙәр Йосопова менән бергә уҡыныҡ”, --тип һөйләй торғайны. Үкенескә ҡаршы, фотоларҙың тәүгеһенең артында “Садиҡа Фатҡуллина” тип фамилияһы яңылыштырылып яҙылған, өҫтәүенә, ғәрәп хәрефе “с”-ны “х” тип уҡып, хәҙерге яҙмаға “Хадиҡа” тип күсергәндәр, ә икенсеһендә (унда әнейем һул яҡтан икенсе) байтаҡ ҡына исемдәр ҡуйылмаған.

Заманының башҡорт йолаһы буйынса, йәш кәләш ике йыл дауамында ата йортонда ҡалған, кейәү-бала килеп-китеп йөрөгән. Шул арҡала уларҙың баш балаһы Әхмәҙулла 1916 йылдың 15 мартында әсәһенең ата йортонда – Сәнкем-Биктимер ауылында донъяға килгән. Шул йылда ғына имсәк балалы йәш киленде кейәү йортона – Юнайға төшөргәндәр, шунда уларҙың икенсе улы тыуған, ә балаларҙың атаһын герман һуғышына оҙатҡандар. Офицер чинындағы Дәүләтғәли Ишкилдин фронттан, яраланып, аяғы аҡһап ҡайтһа ла, граждандар һуғышы башланып, Әхмәтзәки Вәлидовтың башҡорт ғәскәренә командирҙар етешмәү сәбәпле, һуғышҡа алып китәләр һәм ул 1919 йылда ҡыҙылдар яғына сыҡмаған башҡорт полкы сафында Алыҫ Көнсығышҡа (атаҡлы “ледовой поход”) олағып юғала. Шул сәбәпле әнейем атаһы йортона ҡайтып китергә мәжбүр була, ләкин уның бәләкәс кенә ике улын, “малды бүлешмәҫ өсөн” тип ҡарунланып, аһ-зар илатып тартып алып ҡалалар, әсә йылыһынан яҙған бахыр сабыйҙарҙың икеһе тиң оҙаҡламай яҡты донъянан китә…

Әнейемдең яҙмаһын дауамлайыҡ.

*

Беҙҙең ауыл, бик ҙур булмаһа ла, бик ҡунаҡсыл булды, һәр береһе, башҡорттоң ғөрөфөн ташламай, йортҡа быҙаулы һыйыр, бер ат, бер һауын бейә аҫырап, һәр береһе үҙ ҡымыҙын эсеп йәшәне. Яҙ көнө һабанға сығар ваҡытта һабан бутҡаһы бешереп, ҡунаҡ булып йөрөй торғайнылар. Тәкә һимергәс, тағын ҡунаҡ булышалар. Ашлыҡ бешә башлағас, бер-ике көлтә урып, ярма яһап, бутҡаға саҡырышып, ағай-эне ҡунаҡ булалар. Минең атайым да шулай уҡ ике ат, ике бейә аҫыраны. Ул орлоҡҡа тигән ашлығын, көҙөн айырым һауытҡа һалып, өҫтөнә көл һибеп, бер ваҡыт та тейҙертмәҫкә ҡуша торғайны. Яҙ көнө үлсәүгә бөртөктәрен хисаплап һалып ҡарай торғайны, туфраҡҡа сәсеп (шыттырып) ҡарай торғайны. Һабанға сыҡҡас, орлоҡ ашлығына йомортҡа (орлоҡ йомортҡаһы) бешереп һалып, шул һабандағы кеше йыйылып, алып ашайлар ине.

Ашлығын да, көнбағышын да сүп ҡалдырмай утап ҡуя торғайны, беҙҙе лә кескенә ваҡыттан ураҡ тоттортоп, урҙыртып өйрәтте.

Китәм ҡымыҙ әсетә торған *һабаға.*

Аны байлар һимеҙ һуғым (йылҡы) тиреһенән яһайлар. Яҙ көнө оҫта ҡартлар йыйылып, сәс бәкеһе белән сәс алған кеүек итеп ҡыралар. Һабаны тегә торған оҫта әбей була, ул әбей аны бик яҡшылап бесә, ул һәр кемдең ҡулынан килмәй торған эш. Башынан — *башкүнәк* яһай, ауыҙын семәрләп. Ҡулынан — *ҡулсаҡ* тегә ҡолаҡлап, бәйләргә уңай булһын өсөн. Әбей ике арт ботонан — *ботлоҡ* тегә, ул да ҡолаҡлы, төбө түгәрәк — матур итеп ҡыҙыл сепрәк ҡыҫтырып, тарамыш белән тегә.

Кәүҙәһенән *һаба* тегә, төбө дүрткел була. Ауыҙы бешкәк һыярлыҡ, төрлө төҫтә семәрләп, матур итеп ҡыл ишеп, башын үргә бәйләп ҡуя. Аның да, ике яғын да бәйләп ҡуяр өсөн, ике ҡолағы була, алар бик матур итеп ҡылдан бау ишеп, суҡлап, ике яҡ ҡолағынан тартып бәйләп ҡуяр өсөн. Ҡалған ҡыйыҡ-ҡымтығынан *муртай* тигән, сирекле шешә урынына йөрөй торған бер һауыт тегәләр — ат өҫтөндә йөрөтөргә уңай. Һабаның аҫтында үҙенә күрә тәбәш өҫтәле була, тартмаһы — ҡымыҙ һауыты (туҫтағы) ҡуя торған урын. Аның тегеп бөткәс ыҫлай торған урыны була. Шул оҫта тегеүсе әбей эшен бөтөрөп тапшыра. Ул әбей бик ҡәҙерле, хөрмәтле кеше була...

Әсәйемдең яҙмалары ошо урында өҙөлә, ләкин тыуған-үҫкән ерҙең ҡәҙерен белеп һөйөргә, ғүмерем буйына рухланырға ошоноһо ла еткән.

Әсәйем миңә Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың үҙ заманында (1897) Ҡазанда сыҡҡан «Ядкәр»ен ғәрәп хәрефтәре менән дәфтәргә күсереп тә биргәйне (совет осоронда баҫылмағайны әле), шул дәфтәрҙе аҡтарып ултырғанда, ауылда саҡта 1964 йылда тауҙарыма ҡарап, уларҙы салҡан ятып талған Урал батырҙың һынына оҡшатып, яҙыла башлап та өҙөлөп ҡалған һәм онотолған поэмама юлыҡҡас, баяғы инә һөтөнән имгән, тыуған ерҙе изгеләштереп һөйөү рухым йәшлегемдең шаңдауы булып йөрәгемде елкетте:

Тауҙарға баҡ иртән, һөйөклөм,
Яулар һине моңло бөйөклөк.
Түгелдер был Уралтау ғына:
Баҡһаң таңғы офоҡ яғына,
Ер — Күк сиген күҙҙән кисерһәң,
Һыҙаттарын уйға килтерһәң,
Һүрәтләнә һинең алдыңда
Батыр һыны тауҙар ҡабында:
Салҡан ята бөйөк баһадир —
Ике ҡулын янға һалған ир.
Күҙен йомған. Танау, ҡаш ҡына
Ал нур сиртә Биләнбашына.
Ҡалын сәсе — ҡара Шыртуғай,
Уны ярып Ҡаҫмарт шылтырай.
Тәңкә ҡаға көмөш тулҡындар,
Төптән баға тоноҡ упҡындар.
Тилбер таҫма — татлы Ҡаҫмарт-һыу

Батыр сәсен сорнай бик ярһыу.
Ә батырҙың муйын өҫтөнән,
Муйынсаҡлап, киң юл үтелгән...

Әсәйемдең мәҙкүр (өҫтә күрһәтелгән) хәтирәһендә Ҡаҫмарт тамағы ауылдарының салбикә-әсәһе Иҫке Ҡый[9] (Иҫке ауыл), бер түгел ике урындағы серле Әүлиә зираттары, еребеҙҙән ниндәйҙер оло яу үткәнлеген дәлилләүсе тимер күлдәктәр (кольчугалар) табылыуы тураһында телгә алынған, әммә уларҙың килеп сығышы һәм тарихы — күптәребеҙгә билдәһеҙ йомаҡ көйөнсә ҡала килә. Тик уларҙың һәр береһенең артында — һәр бер башҡорт белергә тейешле оло тарих, бер ауылдың ғына түгел, ә бөтә Башҡортостандың, башҡорт халҡының яҙмышын хәл иткән ваҡиғалар йәшеренеп ятҡанлығын хәҙерге һәм килер быуындарға асып биреү хәйерле.

Борон замандарҙа Ҡаҫмарт тамағыбыҙ бик күп һандағы һаҙмат-батҡаҡ йылғалар, инештәр, ҡойолар, әҙәм үткеһеҙ һаҙлыҡтар менән уратып алынған, шуға күрә лә дошман яуҙарынан һил, шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙекеләргә йәшерен юлдарҙан Бөйөк Башҡортостанға һәм унан — сит-ят яҡтарға шыпыртын ғына кереп-сығып йөрөмәле һәм, иң мөһиме, Һаҡмарыбыҙға терәлеп аҡкан Яйыҡ йылғаһынан Алабайтал, Гирьял кисеүҙәре аша Үҫәргән (Каспий) диңгеҙенә, Урта Азия аша алыҫ Һиндостанға, Афғанстанға һәм Фарсистанға, Мысырға илтеүсе түтә юлға (Ҡуңыр Буға юлына) ла ифрат яҡын (ун биш саҡрым) ятҡан һип-һил бер төбәк булғанлыҡтан, илде яу баҫкан сетерекле мөҙҙәттәрҙә хандарыбыҙ һәм солтандарыбыҙ был ерҙе ваҡытлыса боҫоу, баш-күҙ алыу урыны итеп тә файҙаланған. Ырыуҙашым һәм райондашым, ғүмере буйына эҙәрмәнләнеп башҡорт тарихын юллаусы һәм үҙ ваҡытында әсәһенең дәфтәренән тарихыбыҙ өсөн бик мөһим «Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе»н күсереп алып, Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырған уҙаманыбыҙ Фәсхитдин Фәтхелислам улы Илбулдиндың миңә әйтеп яҙҙыртҡан мәғлүмәте буйынса, «хәҙерге Сәнкем-Биктимер ауылы ултырған төбәктә борон заман Муйтән-хандың баш ҡалаһы булған». Башҡаларҙан да сала-сарпы ишеткеләнем был хаҡта, әммә кемдер уйлап сығарған итеп ҡарай торғайным. Тарих төпкөлөнә керә биргәс кенә, барыһы аңлашылды — Муйтән-кенәздең//көләрҙең ысынлап та йәшерен ыҫтаны булған төйәгебеҙҙә.

Ҡаҫмарт йылғаһынан ағылып сыҡкан Кесе Аҡма (Аҡмасыҡ) йылғаһы әсәһе Ҡаҫмарт менән бергә Һаҡмарға ҡойорға 2 — 3 саҡрым ҡалғас, уның уң яҡ ярында (юл буйындағы Ҡамышлыҡолаҡ тигән күтергә яҡын), Һунарсы һәм Сәнкем-Биктимер (хәҙер юҡ) ауылдары араһында, әлегәсә өй нигеҙҙәре төҫмөрләнгән бик боронғо төп ауылыбыҙҙың урыны бар — «Иҫке Ҡый» тип атала. Сәнкем-Биктимергә табан юл буйынса Ҡамышлыҡолаҡты үткәс тә, һул яҡтағы яҫы түңдә (убала) шул боронғо ауыл зираты — ҡәберҙәре тигеҙләнеп бөткән, тиерлек, һирәк-һаяҡ таштары күҙаллана. Ҡарттарҙың һөйләүенсә, һәм дә өҫтә килтерелгән әсәйем хикәйәтенән дә күренеүенсә, хәҙерге Сәнкем-Биктимер, Һунарсы, Солтанбай (Һултамбай) ауылдары ҡасандыр шул «Иҫке Ҡый»ҙан

---

[9] Тәүәрихтә ул «Ҡасанҡый-Сала» тип яҙылған.

күсенеп ултырған, ә Сәнкем-Биктимерҙән иһә 7 саҡрымға үрҙәрәк Һаҡмар Һыуының уң ярына Ғафар исемле уҙаманыбыҙ башлығында бер килке башҡорт күсенеп, Яңауыл (рәсми яҙыуҙа Яңы Ғафар) ауылын нигеҙләгән (ул башҡорттарҙың тоҡомдары хәҙер үҙҙәрен татар тип яҙып йөрөтә). Ауылдаштар «Иҫке Ҡый»ҙың бик боронғо бабалар ауылы булғанлығын яҡшы белһәләр ҙә, тарихыбыҙҙан төптө бихәбәр ҡалып, «борон заманда шул ауылдың бер байы, үҙем үлгәс яңғыҙ улым утын ҡырҡып этләнеп йөрөмәһен, тип, бик күп йылдар буйына урмандан утын ташытып, тау ҡәҙәре итеп өйҙөрткән; тик бер заман ут сығып, тауҙай утын өйөмөнән кәбәндәй көл-күмер генә тороп ҡалған, тигәндән башҡаһын иҫләй алмайҙар ине, ә баҡтиһәң, ул ауылыбыҙҙы Аҡай батыр ихтилалы заманында Рәсәй батшаһының ҡырғын әтрәте яндырып юҡ иткән икән. Әсәйем иһә бабаларыбыҙҙың «эт тиреһенә яҙылған» бик боронғо шәжәрә-тәүәрихе булғанлығын, ул ауылыбыҙҙың бер аҡһаҡалында һаҡланғанлығын, аҡһаҡалдың һөйөклө ҡыҙы «баш яҡҡа» (йәғни йылға башы яғына, хәҙерге республикабыҙҙың Йәнсура районына) килен булып төшкәнендә: «Миңә мал урынына шул шәжәрәне бирегеҙ», — тип ялынып, «эт тиреһенә яҙылған Үҫәргән тәүәрихе»н алып китеүен һәм хәҙер ул шәжәрәнең кемдә икәнлеге лә билдәле түгеллеген үкенеп һөйләр ине... Һәм бер заман Өфөбөҙҙә СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы ғилми китапханаһында иҫке яҙмалы 40 битлек «Үҫәргән тәүәрихе»нең күсермәһе (оригиналы баяғы «баш яҡ» — Йәнсура районы Байыш ауылы муллаһы Муса хәҙрәт ҡулында булған) менән танышҡас, «ҡылт!» итеп иҫемә төштө: шул, «эт тиреһенә яҙылған тәүәрих»ебеҙҙең күсермәһе!

Ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Саланың быуат ярымға һуңыраҡ — 1357 — 1380 йылдарҙа ла сәскә атып йәшәүен һөйләүсе ҡиммәтле мәғлүмәт теркәлгән «Үҫәргән тәүәрихе»нә (57-нсе бит): «Бирҙебәк йылдар аша саманан ашты, тора-тороп Яҫы Ташта (хәҙерге Ҡаҙағстандың Ҡыҙыл Урҙа өлкәһендәге Яҫы далаһында булһа кәрәк. — *Й.С.*) Күсем хандың улдарын үлтерҙе. Үлтерелгән уғландарҙың бабалары башҡорт халҡы ине (шәжәрәбеҙҙәге Тура-хан улы Баба Төкләçтең һәм уның нәçелдәренең ысынлап та үçәргән-башҡорт икәнлектәренә тура ишара! — *Й.С.*). Улар халҡының бик атаҡлыларынан ине. Улар ғәскәр менән Бирҙебәк-солтанды үлтермәк өсөн хөсөт ҡылдылар. Шул саҡ Бирҙебәк-солтан Төркөстанға Үсәк//Көсөк-ханға һыйыныу өсөн ҡасты, Үсәк-хандар (Үсәк-хан 1341 — 1357 йылдарҙа тәхеттә ултырған. — *Й.С.*) — Жәнибәк-хан улдары инеләр. Ҡасып барғанында күрҙе: Һаҡмар һыуында бер төркөм башҡорттоң үҙенең бәге (бейе) бар ине, ***Ҡасанҡый-Сала бәк*** тип ләҡәпләрҙәр ине, данлыҡлы ине, халҡы *мәсәкле*[10] ине. Унан солтан Бирҙебәк һыйыныу үтенде һәм ***Ҡасаҡ-Сала бәк*** уға хуш күңеллелек күрһәтте. Күсем хандың бәктәренән илсе килеп, Бирҙебәк-солтанды талап иткәндә, сала халҡы ризалыҡ биреп, уны йәшерҙеләр һәм алып ҡалдылар. Ләкин Бирҙебәк-солтан эт холоҡло ине: күпселек йәмәғәт хаҡы уның иҫенә лә кермәне. Бер көн уға ***Ҡасаҡ-Сала*** әйтте: минең солтаным, һеҙ анаулары-был халыҡҡа ҡатышманығыҙ, беләм сәбәбен, тине. Солтан Бирҙебәк: йөрәгем этйән

---

[10] Мәсәкле//Машаҡлы — Үҫәргән тәүырыуының башбабаһы Шүлгәнде тыуҙырмыш изге Машаҡ тауға табыныусы.

түгел, аңһыҙҙан был халыҡ мине ҡатил ҡылыр (үлтерер), тине. Ҡасаҡ-Сала бәк уға үҙ халҡынан бер данлы әҙәмдең Субъямал тигән ҡыҙын никахландырҙы. Ирәүән Ҡасаҡ-Сала бәкте Бирҙебәк-хан (тимәк, 1341 йылда Күк Урҙа тәхетенә хан булып ултырғас, сөнки быға «солтан» тип яҙыла ине. — *Й.С.*) сәрғәскәр итеп, халҡы уға ризалыҡ бирҙе... Был Бирҙебәк-солтан (тимәк, тәхеткә ултырмаҫы борон, солтан сағында. — *Й.С.*) яҡшылыҡ ҡәҙерен белмәҫ кафырҙай ине, башҡа хаталары ла суҡтыр (күптер)»...

Ошондай уҡ, ләкин буталсығыраҡ, ә шулай ҙа мәғлүмәттәргә бай хикәйәтте Һун-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендә күрәбеҙ (Башкирские шежере, 74 — 75-енсе биттәр):

«Өсән тигән һыу буйында Йәнбәк-хан (Күк Урҙа ханы. — *Й.С.*) урынына хан булыр өсөн талашып Зыянғол, үҙенең атаһы (Тура-хан улы Ҡаҙансы. — *Й.С.*) менән бер туған ағаһы Бирҙебәктең (Нармуйынлы Бирҙебәктең. — *Й.С.*) улын үлтереп, *Абаный Аҡмасыҡ*[11]-бейҙең ауылына ҡасып килде. Ул ваҡытта Аҡмасыҡ-бей ауылында туй-йыйын бара ине... «Ул, йыйынға килмәйенсә, баҡи һун[12] кейек (ҡырағай бүре) кеүек ситтә тороусы кеше, ниндәй әҙәм?» — тип әйтештеләр... «Һин ҡайҙан килеүсе кешеһең? Атың, ырыуың нисек?» — тип һоранылар.

Зыянғол: «Мин ҡасҡынмын. Хан булыр өсөн талашып, ағам Бирҙебәк улын үлтереп ҡастым. Атым Зыянғол, ырыуым Ҡыпсаҡ», — тип яуап бирҙе... — «Һин һун-кейек кеүек йөрөнөң, шуның өсөн бынан һуң һинең атың *Һун-Зыянгол* булһын», — тинеләр. (Шуға күрә Һун-Зыянғолдоң тоҡомдары башҡорттоң Ҡыпсаҡ ырыуының *Һун-Ҡыпсаҡ* араһын тәшкил иткән, имеш. — *Й.С.*).

Шунан һуң Зыянғол Аҡмасыҡ-бейҙә торҙо. Ҡаҫмарттан сыҡҡан йылғала (Аҡмасыҡта. — *Й.С.*) ултырған заманда (Ҡасанҡый-Сала ауылында. *Й.С.*), улының ҡан үсен алыр өсөн тип, Бирҙебәк шул Һун-Зыянғолдо ҡыуа килде.

Шул ваҡытта Аҡмасыҡ-бей, Зыянғолдо үлтертмәйем, тип, ике туғыҙ (2х9=18) баш мал бирҙе. Йәнә ҡыпсаҡ[13] Ҡолсадиҡ тигән кеше ике туғыҙ баш мал бирҙе. Шулай итеп, дүрт туғыҙ (4х9=36) баш мал бирҙеләр. Зыянғолдоң йәнен һаҡлап алып ҡалдылар. Ошо йылғаны «Яныс-бей» тип атанылар. (Дөрөҫө «Маныс-бей»ҙер, сөнки әлегәсә Һунарсы ауылының түбән яғы тәңгәлендә Ҡаҫмарт һыуының Маныс тигән яр буйы бар. — *Й.С.*).

Шунан һуң Һун-Зыянғол Аҡмасыҡ-бейҙә, уғыл-бала булып, теүәл бер йыл торҙо. Шуның һуңында Аҡмасыҡ-бейҙең ҡыҙ ҡарындашы Бибекәйҙең кейәүен үлтереп, Бибекәйҙе Зыянғолға ҡуштылар»...

---

[11] Аҡмасыҡ — Һунарсы ауылы янында Ҡаҫмарт йылғаһынан йырылып сығып, Ҡаҫмарт йәнәшәһенән Һаҡмарға табан аҡҡан һыу. Ҡасанҡый-Сала ауылыбыҙ шуның яр яҡаһында ултырған. Шәжәрәләге Сарыш-бейҙең улы Аҡмасыҡ-бей шунда йәшәгән һәм шул һыу исеме менән ләҡәпләнгән.

[12] Һун//һуна//шуна — «бүре» тигән һүҙ.

[13] Аҡмасыҡ-бейҙән айырмалы рәүештә, был кешенең, Үҫәргән түгел, ә Ҡыпсаҡ ырыуынан икәнлеге күрһәтелә; тимәк, бабабыҙ Аҡмасыҡ — ысынлап та үҙебеҙҙең Үҫәргән ырыуы шәжәрәһендәге Сарыш-бей улы Аҡмасуҡ һәм ул Ҡасанҡый-Салала Күк Урҙа тәхете өсөн боларышлы 1357 — 1380 йылдарҙа йәшәгән булып сыға.

Аҡһаҡ Тимер уҙған юл

Ауылыбыҙға ҡағылышлы йәнә лә бер ҙур тарихи ваҡиға XIV быуат аҙағында Башҡортостаныбыҙға Аҡһаҡ Тимер (сығышы буйынса Һалйыуыт ырыуының Барлас араһы башҡорто) ябырылыуына бәйле. Алтын Урҙаның сығышы буйынса Үҫәргән батшалар шәжәрәһенән булған башҡорт ханы Туҡтамышты бер нисек тә үҙенә буйһондора алмай ҡәһәтләнгән Урта Азия йыһангире 1391 йылдың 19 ғинуарында үҙенең ҙур ғәскәре менән Ташкенттан тура төньяҡҡа — Туҡтамыш-хандың төп таянысы булған Башҡортостанға йүнәлә. Ҡасандыр Муйтән-көләр көньяҡҡа ҡасып киткән төп оло юлға төшөп (һүрәттәге уҡлы юл), Яйыҡҡа яҡынлағас, ундағы Айғыръял (Гирьял) кисеүе алдындағы йәйрәү Ҡорокүлдә (хәҙерге Бурансы ауылы янында) Туҡтамыш-хандың төп көстәре көтөп торғанлығы, ә хан үҙе Ҡаҫмарт тамағы Ҡасанҡый-Салала йәшенеп ятҡанлығы тураһында ялған хәбәр алып, буғай, Аҡһаҡтимер, дошман менән йөҙгә-йөҙ бәрелешмәҫ, ә хәйләле юл менән уның арт яғынан көтмәгәндә хан ыҫтанын барып баҫыр өсөн, уңғараҡ тайпылып, хәрби сәфәрен Яйыҡ үренә дауамлай. Ғәскәренә башҡорттоң Йеҙекәй батыры һ.б. кеүек Башҡортостан тарафтарын яҡшы белеүселәр юл башлағанлыҡтан һәм, моғайын, осраған берәүҙе үлтереп барғанлыҡтан, хәрби серҙе һаҡлауға өлгәшәләр һәм Яйыҡ башынан һулға табан тау-таш, урман аша Әйек буйы далаларына сығыу йүнәлешен дөрөҫ һайлайҙар. Башҡорт халҡына әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур һәләкәт һалған был дәһшәтле ябырылыу тураһында элегерәк ентекле яҙыуым сәбәпле («Шоңҡар» журналының 1998/3 — 4 һандары), башкиҫәрҙәрҙең Яйыҡты хәҙерге Сибай тәңгәлендә кисеүен, Бөрйән урмандары аша йәшерен юлдарҙан Әйек башына сығып, уны уң яғынан түбәнләп, 1391 йылдың 4 июне көнө Әйек тамағана етәрәк ул йылғаны көнсығышҡа ҡарай кисеп сығыуҙарын һәм ҙур һаҡлыҡ менән бер нисә көн буйына хәҙерге Ладыгино — Һунарсы тупраҡ юлы буйлап бик һаҡ хәрәкәт ҡылыуҙарын ғына хәбәр итәмен. Әйекте ат йөҙҙөртөп кисеп сыҡҡас (әйткәндәй, унда күперебеҙ булған, бабаларыбыҙ уны яндырып өлгөргән), баяғы юл өҫтөндәге бейек ҡалҡыулыҡҡа нығытмалар ҡороп ҡуналар, ундағы ҡаҙындыҡ соҡор эҙҙәрен әлегәсә төҫмөрләргә мөмкин, тиҙәр. Иртәгәһенә ғәскәр, алғаскы



Һүр. 5. Аҡһаҡ Тимер Сәнкем-Биктимер ауылы аша үткән юл

(авангард) ебәреп, артынса уҡ ҡуҙғала ла хәҙерге Хаматау утарының Сәнкем-Биктимер яҡлап көнсығыш башында уң ҡулдағы Һаҡмарҙың бейек-текә ярынан алып Һул яҡтағы бейек ҡалҡыулыҡтарғаса туп-тура һыҙатлы оҙон ур (соҡор) ҡаҙып нығына, ул ур-соҡор әлегәсә тәрән беленеп ята һәм «Хаматау граны» тип йөрөтөлә. Шул оҙон урҙан Сәнкем-Биктимергә табан бер саҡрымдай үткәс, тауҙар яғынан һуҙылып юлға арҡылы ятҡан, Һаҡмар буйындағы Ярыш күленәсә барып етеп осланған Этбауыр үҙәге бар, бына шунда, әнейемдең (әсәйемдең) хикәйәте буйынса, яҙғы ташҡын ҡар һыуы йыуған йырынтыла «яҡаһы сереп бөткән тимер күлдәк» — ҡулсаға (кольчуга) тапҡандар, был иһә башҡорт темеҫкененең (разведкаһының) илбаҫар алғаҫҡы менән бәрелешеү урынында ятып ҡалмыш мәйеттең ҡалдығылыр. Шундай уҡ үлемесле бәрелеш Сәнкем-Биктимер менән Һунарсы араһында Түбән тирмән ҡаршыһындағы таулыҡтарҙа ла булған: 1938 йылда булһа кәрәк, яҡын ағайым Ғаязитдин Камалитдин улы Солтанов (1924 йыл тыуған) шундағы «70 гектар» тигән баҫыуҙы һөргәнендә, һабан төрәне аҡтарып, шулай уҡ тутығып иҫкергән тимер күлдәк — ҡулсаға табып алып ҡайтып, ауыл ҡатын-ҡыҙҙарына сулпылыҡҡа (яман күҙҙәрҙән ҡурсалай, имеш) киҫкеләп тараҡҡайны, шуның әнейем өлөшөнә тейгән бер киҫәге әлегәсә һаҡлана миндә.

Һүр. 6. Аҡһаҡ Тимер яуында шәһит киткән Әүлиә зираты (тәреләп күрһәтелгән) янында. Йыһат, Сания, Ирек

Аҡһаҡтимер алғаҫҡыһы, баяғы тәүге мәйет ҡалған ерҙе үтеп, Ҡыҙылташ тауын төшкәс, Һыулау тип аталған гүзәл Һаҡмар яры буйындағы уйһыулыҡта башҡорттарҙың тағы ла дүрт яугире менән бәрелешеп, береһененең ҡылыс менән башын өҙә сабалар, ә өсөһөн Аҡһаҡ Тимер ыҫтанына тотоп килтерәләр. (Һүрәт: Аҡһаҡтимер яуында һәләк булған батырыбыҙ -- Әүлиә зираты эргәһендә. Сәнкем-Биктимерҙең мал Һыулау тәңгәле). Башы сабып өҙөлгән яугиребеҙҙең кәүҙәһе ат өҫтөндә бер талай елеп барып, башы тәгәрәп төшкән ерҙән байтаҡ ҡына алыҫта ауып ҡала. Был кеше, имеш, әүлиә булған һәм, үҙенең ҡайһылай үлерен алдан уҡ белеп, кәүҙәһен дә, башын да ҡолап төшкән ерҙәрендә күмергә әйтеп ҡалдырған һәм шулай эшләгәндәр ҙә. Шунан биреле ул ике уба Әүлиә зираты тип атала. Минең яҡын олатайым Хисамитдин Шиһабитдин улы Солтанов (1890 йылда тыуған) беренсе донъя һуғышының үлемесле ғәрәсәтендә йөрөгәнендә: «Әгәр тыуған илкәйемә иҫән-һау әйләнеп ҡайтһам, тауҙан таш сығарып, Әүлиә зиратын бурап ҡуйыр инем», — тип нәҙер әйтеп, ҡайтыуы менән үк шул изге бурысын үтәгән (60 — 70-

енсе йылдарҙа Һарыҡташ ҡасабаһында ялланып йорт һалыусы "шабашник әрмән" тигән выжданһыҙ йәндәр таштарын урлап алып киткән). Шул Әүлиә ярлыҡауылыр инде: Хисамитдин олатайым 1918 йылда ҡыҙыл гвардиясы булып, Орск янындағы һуғышта аҡ казак ҡылысынан муйынын саптырҡас та, иҫән ҡалып, оҙаҡ йәшәне, ғүмере буйына Ҡыйышмуйын тигән ләҡәп йөрөттө («Урман бабай» исемле хикәйә-китабымдың геройы)...

Аҡһаҡ Тимерҙең урҙаһы Ҡасанҡый-Салаға табан хәрәкәтен дауамлап, Туҡтамыш-хандың унда юҡлығын күреп, ауылыбыҙҙың көлөн күккә осора — байҙың янып көл-күмер булған утын тауы тураһындағы риүәйәттең төбөндә лә, моғайын, шул яталыр... Быңдағы яндырыу һәм үлтереү эштәрен теүәлләгәс, ҡан дошманы Туҡтамыш-хандың ҡайҙалығын билдәләргә темеҫкендәр ебәреп баш-күҙ алыр өсөн, шул Ҡасанҡый-Сала һәм Билән тау араһындағы хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған яҫылыҡта лағыр ҡороп урынлаша. Тарихсы яҙыуынса, шаҡтай шөбһәләнгән «Тимер яңы темеҫкенлеккә үҙ улы Мөбәширҙе тәғәйенләне, ҡаршы яу тураһында ниндәй ҙә булһа яңылыҡ белмәй тороп, әйләнеп ҡайтмаҫҡа бойорҙо». Был Мөбәшир етәкселегендәге темеҫкен әтрәт Билән тау итәгендә хәҙерге Һунарсыға яҡын Ҡаҙаҡтар сабынлығында Ҡаҫмарт йылғаһын һәм йылға аръяғындағы һыубаҫар Олобай батҡаҡлығын, хәҙерге Шыртуғай моронондараҡ, унын иң тар өлөшөнән уҙғандан һуң, шундағы Аҡма (Ҡаҫмарт тармағы) йылғаһын да кисеп, Көрмөйә тауы итәгендәге ҡаты юлға сыға. Был юл хәҙерге Яңы Ғафар (Яңауыл) эргәһендәге Һаҡмар буйынса үргә табан Ҡараһыу тамағындағы (хәҙер унда Черноречка ауылы) Һаҡмар кисеүенәсә илтеп, Һаҡмар аръяғынан Яйыҡтың Алабайтал (Гирьял) кисеүенәсә һуҙыла (Муйтән бабабыҙ ҡасҡан юл). Мөбәшир әтрәте, хәҙерге Яңы Ғафар һәм Ҡараһыу (Черноречка) ауылдары араһындағы урманда туҡталған һәм Туҡтамыш-хан ғәскәрҙәренә ҡушылырға китеп барған бер төркөм башҡорт яугирҙәрен ҡапыл барып баҫҡанлыҡтан, ҡыҫҡа һуғышта уларҙы еңеп, 40 кешеһен әсир итеп алып ҡайта. Аҡһаҡ Тимер башҡорттарҙы, үҙенә кәрәклеһен һорашып белгәс, шунда уҡ үлтертеп ташлай. Һунарсынан Билән тауға күтәрелгән юлдың һул яғындағы оҙон ҡырла һырты буйлап рәт-рәт теҙелмеш тәпәшәк (40 — 50 *см* бейеклектәге) түп-түңәрәк ҡорғандар бар — шул 40 әсир кәүҙәләре, бәлки, шунда яталыр?.. Был яҡтарҙа «Үҫәргәндең (нуғайҙың) ҡырҡ батыры» тигән риүәйәт тә таралған. (Башкирские предания и легенды. Уфа, 1985; 112-нсе бит)...

Туҡтамыш-хан әмирҙәренең береһе булған Мәмәкте лә тотоп килтерәләр, ул да, баяғы һәләк булмыш башҡорт яугирҙәр төркөмө кеүек үк, Туҡтамыштың бойороғо буйынса баш ҡала Сарайҙан килеп етеп тә, хандың үҙен таба алмай ҡаңғырып йөрөмөш икән. Шул рәүешле, Туҡтамыш-хандың Иҙел буйынан килеп етергә тейешле ғәскәрҙәре лә килмәй ҡала, һөҙөмтәлә башҡорт ғәскәре бер үҙе генә, тип әйтерлек, Аҡһаҡ Тимер яуына ҡаршы торорға мәжбүр була. Өҫтәүенә, Ҡараһыу тамағынан байтаҡҡа үрҙәрәк Ҡаҙанболаҡ тамағындағы Бәкәтәр (хәҙерге рәсми исеме Йәнсура) аулында ыҫтаны менән килеп урынлашҡан һәм Аҡһаҡ Тимергә ҡаршы торорҙай барлыҡ көстәрен туплай башлаған Туҡтамыш-хан урҙаһында Аҡһаҡ Тимер файҙаһына аҫтыртын эшләүсе һатлыҡ йәндәр була, хәрби серҙәр дошманға еткерелә. Баяғы юлдан ебәрелгән Аҡһаҡ Тимер

бағауылдары, «Неделе-тархан, Мули, Сайын-Тимер һәм бер нисә ҡыйыуйән менән әмир Хәмит улы Йәлил» Ҡараһыу тамағы тирәһендә Туҡтамыш-хан яғынан килеүсе төркөм менән осрашып һөйләшеп, Аҡһаҡ Тимергә Алтын Урҙа ханы ыҫтанының ҡимммәтле хәрби серҙәрен алып ҡайта. Һаҡ эш ҡылыусы Аҡһаҡ Тимер алынған ул мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгөн асыҡларға Иҫке-Тимер етәкселегендәге батырҙарын темеҫкенлеккә юлландыра; улар Туҡтамыш-хан төп көстәренең Һаҡмар уң яры буйлап бында ҡарай етеп килеүен белдереүсе алғасҡыға тап булып, йәһәт боролоп ҡасалар, тегеләре уларҙы баҫтыра. Аҡма кисеүе эргәһендә ҡыуып етеп, киҫкен бәрелештә Иҫке-Тимер әмир үҙе һәм яҡын ярандары «Йәғәфәр-барлас улы Хөрмәлек, Рамазан-хужа һәм Мөхәммәт-арлат» башҡорт уҡтары ҡаҙалып һәләк була; мәйеттәрен лағырға алып ҡайтып, баяғы Һунарсынан Биләнтауға илткән юлдың уң яғында дөйөм ҡәбергә һалалар. Буйы — 5, арҡылыһы — 3. бейеклеге 1 — 1,5 метр тирһе дүрткел итеп өйөлгән был тарихи уба юлдан уҙғынсы һәр кемдең күҙенә салынып ятты, әммә хәҙер һуңғы йылдарҙа һалынмыш бейек таш юл өйөмө аҫтында ҡалған...

Ташкенттан сәфәр сыҡҡандарынан һуң алты ай уҙғас, Аҡһаҡ Тимерҙең төп көстәре Һаҡмарҙың уң яғындағы яланда — Ҡараһыу тамағы һәм Һаҡмарҙың һул ярындағы Ҡондорса (хәҙерге Кондуровка тимер юл туҡталышынан үрҙәрәк) йылға тамағы ҡаршыһындағы аралыҡта Туҡтамыш-хандың башҡорт ғәскәре менән ҡаты бәрелешә (“Заманалар” тигән китабымда ул хаҡта тулыраҡ яҙылды). Аяуһыҙ алышта башҡорт ғәскәре тулыһынса тар-мар ҡылынып, Туҡтамыш-хан үҙенең ярандары менән хәҙерге Кондуровка тәңгәлендәге Һаҡмар кисеүенән сығып ҡаса; артынан Иҙелгәсә эҙәрлекләп ҡыуһалар ҙа, тота алмайҙар уны... Шул кисеүҙе сыҡҡас, тимер юл буйында ике бейек ҡорған бар — ике яҡтың шул һуғышта һәләк булған яугирҙәре айырым-айырым ерләнгәндер, тигән уйҙамын...

Тыуған ауылым — Урмәмбәт-кенәз ыҫтаны

Ауылымдың ошонан һуңғы йәнә лә бер осоро ла аҙмы-күпме теркәлгән тәүәрихҡә.

Беҙгә мәғлүм элекке бер башҡорт-нуғай ханы Тиңәхмәттең улы Урмәмбәт-кенәз (тәхеттә ултырыу йылдары 1580 — 1601) XVI быуат аҙаҡтарында хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Һаҡмар һәм Яйыҡ буйҙары аралығында иле менән йәйләп йөрөгәнлеге, ә кенәз ыҫтаны («баш ҡалаһы») үҙебеҙҙең Ҡаҫмарт тамағындағы «биш ауылға» йәғни боронғо беҙгә таныш Ҡасанҡый-Сала һәм унан бүленеп сыҡмыш ауылдарға урынлашып, Урмәмбәт-кенәз үҙе, ҡарттар хәтерләүенсә, Сәнкем-Биктимерҙә ыҫтанланып торғанлығы билдәле. Был осорҙа Урмәмбәт-кенәзгә күрше булып Турғай далаларында ҡаҙаҡ урҙаһының Ҡасим-ханы йәшәй; был икәүҙең араһында Яйыҡ һыуы аръяғында Илек, Әмбә йылғалары буйҙарындағы хозур ер-һыу өсөн әленән-әле низағтар, ҡанлы барымталар булып тора. Әйтелгән Ҡасим-хан шанлы Сыңғыҙ-хан нәҫелдәренең бер сыбыҡ осо булғанлыҡтан, ул атаһы Хаҡназар-хан күптән түгел бойороп ултырған Башҡортостанды кире-ҡабат үҙ ҡулы аҫтына алырға, атаһы һымаҡ уҡ шөһрәтле

хан булырға дәғүәләй, ләкин Урмәмбәт тә уның башына етергә әҙер. «Үҫәргән тәүәрихе»ндә (58-енсе бит) әйтелеүенсә, «был Урмәмбәт Урыҫ-хандан (дөрөҫө, кенәздән. — *Й.С.*) һуң булды, заманында ир-арыҫлан (Ҡасим-хан Хаҡназар улы. — *Й.С.*) менән араларында һуғыш булып, халҡы ике ҡәүемгә (төркөмгә) айырылды: береһе Ҡасим ир-арыҫланға табиғ булып (буйһоноп), нуғай (үҫәргән. — *Й.С.*) халҡы ине; береһе береһенә ҡаршы торҙолар. Һаҡмар һыуы буйында бер урында ғазем (киҫкен) үлтереш булды, Урмәмбәт-ханды язалап үлтерҙеләр; ул ваҡытта нуғай (үҫәргән. — *Й.С.*) халҡының баш ҡалаһы *Һаҡмар* һыуында ине, — әле хәҙер ҙә, ***Ҡаҫмарт тамағы,*** тиҙәр, — шул *биш ауыл* урындан нуғай (үҫәргән. — *Й.С.*) халҡы таралды — һәр ҡайһыһы һәр тарафҡа киттеләр... Иҙел һыуына тиклем ил араһы бер заман шөйлә буш ҡалды, ахыр башҡорт хужа булып, 1617 йыл тарихта ил тота башланылар»... Күренеүенсә, Һаҡмар һыуы Ҡаҫмарт тамағындағы был «баш ҡала» — Сәнкем-Биктимер ауылы булһа кәрәк...

Сәнкем-Биктимер ауылының көнбайыш осонда («Ярыш юлы»ның уң яғында), өҫтәрәк әйтеп һәм зиратының һүрәтен биреп үтеүебеҙсә, сал ҡылғанлыҡ араһында әҙәм бейеклек ике яҫы таш ҡаушарып ҡуйылған (ҡаушарылған ике яҫы таш инде юҡ – Һарыҡташта ялланып йорт һалыусы әрмән “шабашник”тары алып киткәндәр, мәрхүмдең башы осондағы бүкәнташ ҡына ҡалған) ҡәбер бар ине, — Әүлиә зираты, тиҙәр быны ла, — 1601 йылда үлтерелгән тап шул тарихи Урмәмбәт-кенәзебеҙҙең (Исмәғил-кенәздең ейәненең) гүре был...

Шулай итеп, XVI быуат ахырында уҡ «биш ауыл» урынында төп ауыл Ҡасанҡый-Сала һәм унан бүленеп сыҡҡан Сәнкем-Биктимер булғанлығы асыҡланды...

Сәнкем — шул уҡ Үҫәргән

Әйткәндәй, тыуған ауылымдың исеменең «Сәнкем» тигән өлөшөнә лә аңлатма биреү кәрәктер. Бабаларым үҫәргәндәрҙең был ғәзиз төйәген бәғзеләр, башҡорттоң бөгөнгө Ҡыпсаҡ ырыуында Сәнкем-Ҡыпсаҡ араһы барлыҡҡа таянып, моғайын, уны ҡыпсаҡтар нигеҙләгәндер, тип яңылыш юрай.

Боронғо бер ҡыҫҡа әйтелешендәге Әсәр//Әсән һәм тулы әйтелешендәге Әсәркөн//Әсәнкөн — шул уҡ Үҫәргән тигән һүҙ. Үҫәргән тәүырыуының төньяҡ-көнсығыш (Тышҡы Башҡорт) ҡанатын тәшкил иткән Әсәнкөн//Сәнкөн (йәки Сәнкем//Сәмкем) ҡәүеме ҡытай тәүәрихтәрендә әүәлерәк үсүн тип, һуңырағын чумукун тип теркәлгән. (Мәғлүмәттәр түбәндәге китаптарҙан һоҫолдо: А.Г. Малявкин. Танские хроники о государствах Центральной Азии. Новосибирск, «Наука», 1989; Л.Н. Гумилев. Древние тюрки. М., 1993).

Б.э. тиклем II — I быуаттарҙа Үсүн ҡәбиләләр берләшмәһе хәҙерге Ҡырғыҙстандың — төньяҡ, Ҡаҙағстандың көньяҡ-көнсығыш өлөштәрен биләгән (үҫәргәндәрҙең тәүтөйәк Уралдан – йәйләүҙән -- барып ҡышлау урыны), берләшмә башлығы *көнбиҙең*, йәғни Көндән (Ҡояштан) яралған бейҙең, ыҫтаны (баш ҡалаһы) — Әсәккүлдең йәки Исыҡкүлдең көньяҡ ярындағы *Сигеү* (хәҙерге Рыбачий) ҡалаһы булған. «Сигеү» — Уралдағы (төп йорт-йәйләүҙәге) һалҡын

ҡыштан яҙға тиклем бер миҙгелгә ваҡытлыса *сигенеү*, ҡышлау урыны, тигән һүҙ. Ул заманда үҫәргән-үсүндәр Ҡытай менән берлектә үҙҙәренең игеҙәк туғаны һун (һуна/суна/шуна – *бүре* тигән һүҙ, шул уҡ бүрегә табыныусы үҫәргән-үсүндәр) башҡорттарына ҡаршы көрәшкән; Ҡытай, үсүндәргә таянып, Урта Азияны яулай башлаған. Б.э. 125 — 144 йылдарында «көнбайыш илдәрен» Ҡытай баҫып алыуҙары осоронда Үсүн иле Ҡытайға буйһоноуҙан баш тарта.

V быуаттың 30-ынсы йылдарында жужандар ҡыҫымы көсәйгәс, Үсүн иле 437 йылда ярҙам һорап Ҡытайға илсе ебәрә, 437 — 438 йылдарҙа Үсүндә лә Дун Вань исемле ҡытай илсеһе булып китә. Жужандарҙың ҡыҫымы аҫтында үсүндәр Памир тауҙарына табан күсенергә мәжбүр була, ә улар тарафынан ҡыҫырыҡланмыш йыуасалылар (башҡорттоң *йыуасалы* ырыуы кешеләре), үҙҙәре төйәкләнгән Или йылғаһы буйҙарын ҡалдырып, Урта Азияға сигенә. Ҡытай тәүәрихнамәһендә үсүндәр шул V быуатта юҡҡа сыҡты, тип яңылыш һанала, ләкин улар һис юҡҡа сыҡманылар, ә инде үҙҙәренең тулы исемендә *сәнкем (үсәнкән — үҫәргән тигәндән)* атала һәм ҡытай тәүәрихтәрендә *лә чумукунь* тип яҙыла башлай. Уларҙың *ҡыпсаҡ түгеллеген* ҡытай тәүәрихендә асыҡ күрәбеҙ: 635 йылда Көнбайыш Төрки Ҡағанат дәүләте етәкселегенән ситләтелгән ҡыпсаҡтарҙан айырмалы буларaҡ, сәнкемдәр дәүләт идаралығына киң йәлеп ителә. (Л.Н. Гумилев, 213-өнсө бит). Әйткәндәй, “ҡыпсаҡ” этнонимының да шул уҡ изге “Бүре-әсә тоҡомо” -- Үҫәргән икәнлеге күренә (һәм ул тарихи яҡтан да дөрөҫләнә -- “Мәхмүт Ҡашғари картаһы” тигән хеҙмәтемдән ҡарағыҙ), бына ул этнонимдың килеп сығышы: көб-әсәк (“көб” -- бүре, “әсәк” -- әсә тигән һүҙ) -- ҡыпсаҡ; өҫтәүенә, Үҫәргән һәм Ҡыпсаҡ ырыуҙарының төп бабаһының исемендәге изге ораны ла бер үк: ***Туҡсаба***.

VII быуат башында, билдәле булыуынса, Бөйөк Төрки Ҡағанат икегә (Көнсығыш һәм Көнбайыш) бүленеп, 604 йыл Көнбайыш Төрки Ҡағанат (артабан: К.Т.Ҡ.) тәхетенә Үҫәргәндең биш араһынан тәшкил *Насиби* ҡәбиләһенән Шығай-кенәз менеп ултыра, насибиҙәргә ҡан-ҡәрҙәш һәм шулай уҡ биш аралы *Дала* ҡәбиләһе лә ныҡ тартыша тәхет өсөн. Үҫәргәндең был бер туған ҡәбиләләренең исемдәре бик боронғонан килә: б.э. тиклем 104 йылда Үҫәргәндең (Үсүндең) ҡартайып әлһерәгән көнбие *Әлми* бабабыҙ («Таштуғай» йырының авторы булған Көнбикә һылыуҙың ире, «Әлмисаҡтан» тигән әйтемебеҙ шул заманға ишара) үҙе үлер алдынан илен *Дала* һәм *Насиби* тигән улдарына бүлеп бирә; шунан һуң халыҡтың Дала уҙаманға ҡараған яртыһы — *далалар* тип, Насибигә ҡараған икенсе өлөшө иһә *насибиҙәр//нушибиҙәр* тип атап йөрөтөлә. («Башҡорттар һәм Ҡытай» тигән хеҙмәтемдә ентеклерәк яҙылған былар).

Шығай-кенәз ҡаған булып ултырған ул осорҙа далалар — Етеһыу аралығын һәм Көнбайыш Жунгарияны, ә нушибиҙәр — Тянь-Шань тауҙарының көнбайышын һәм Әсәккүл тирәһен биләгән. Дәүләттең баш сәрғәскәре йәғни *яуаға* (ябғу) вазифаһындағы ҡаған урынбаҫары (далалар вәкиле) Ашина Хәллек, сәйәсәттә Шығай-ҡаған менән килешә алмай, 646 йылда үҙенең төп көстәрен — сәнкем (чумукунь), һалъйыуыт (хилуцзюй), шишәй (шэшэшти), төркәй (туциши), бүре (шуниши) тигән биш аралы Дала ҡәбиләһе менән Шығай-ҡағандан айырылып, Ҡытайға буйһона. Ләкин 650 йылда уҡ Ҡытайға ҡаршы баш күтәреп, Ҡытай ғәскәрҙәренән еңелгәс, көнбайышҡа сигенә лә боронданғы Дала-ҡаған

ерҙәрен (хәҙерге Ҡаҙағстандың көньяҡ-көнсығышы — Ҡырғыҙстан — Үзбәкстан) йәғни Боротал һәм Меңболаҡ йылғалары аралығын биләп ала. Был һуғышта сәнкемдәр бик күп ҡырыла, ләкин һуңғы тамсы ҡандарынаса Ашина Хәллеккә тоғро ҡалалар һәм уның биләмәләренең көнсығыш сиктәрен ҡытайҙарҙан ныҡ һаҡлап торалар. 654 йылда ҡытайҙар йәнә ҡаты һөжүмгә күсеп, дәһшәтле һуғышта сәнкем ғәскәренең күп өлөшөн тураҡлап ташлай, утыҙ мең сәнкем мәйетенең ҡырҡып алынған ҡолағын ҡытай генералы императорына улъя итеп оҙата. (Гумилев – артабан Л.Н.Г., 238-енсе бит). 656 йылғы һөжүмдә лә ныҡ ҡыралар сәнкемдәрҙе. 658 йылда Ҡытай императоры баяғы Ашина Хәллек дәүләтенә хәл иткес ҡырғын армияһын ебәрә, сәрғәскәр итеп — Динфан тигән генералды, уның урынбаҫарҙары итеп Жэнь Ясянды һәм уйғырҙар башлығы Пожунды билдәләй. Берләштерелгән был армия ил сигендә һаҡта торған сәнкемдәр менән тағы ҡаты бәрелешеп, Болан-дала (Ланьдулу) тигән ир-көндө (ғәскәр башлығын) ун меңдән ашыу йортло ауылы менән баш эйергә мәжбүр ҡыла. Ашина Хәллек ҡаған үҙенең төп көстәре — Дала ҡәбиләһенең баяғы биш араһы (шул иҫәптән сәнкем) һәм Насиби ҡәбиләһенең биш араһы тәшкил иткән йөҙ меңлек ғәскәре менән ныҡышмалы ҡаршылыҡ күрһәтһә лә, үҙ ҡәбиләһенең һалйыуыт араһы һәм насибиҙарҙың бөтә биш араһы дошманға бирелгәнлектән, еңелеп, эргәһендәге тоғролоҡло бер нисә йөҙ сәнкем һыбайлыһы менән көнбайышҡа ҡаса. Фронттың көньяҡ йүнәлешендә тороп ҡалған Дала ҡәбиләһенең биш араһы ла, уның еңелеүен ишетеп, һөжүм итеүсе ҡытай генералы (башҡорт) Ашина Бөрйән алдында ҡорал һала. Был һуғыштарҙа Ҡытай яҡлы уйғыр атлы ғәскәре һәм заманында Көнбайыш Төрки Ҡағанатҡа хыянат ҡылып ҡытайҙар яғына сығып киткән Ашина тоҡомло Ашина Мышы һәм баяғы Ашина Бөрйән Ҡытай илбаҫарҙарының удар көсөн тәшкил итә. Ашина Хәллек һуғышта әсир алына һәм 659 йылда Ҡытайҙың баш ҡалаһы Чанъанда вафат була.

VII быуат урталарында Тибетҡа ҡаршы һуғыш ғәрәсәттәре кисергән Ҡытай көнбайышта үҙенә ҡаршы баш күтәргән төркиҙәрҙе тынысландырыу һәм Тибетҡа ҡаршы аяҡландырыу өсөн, 671 йылда Ашина Дәүәйҙе (Дучжиҙы) Ҡытай ҡулы аҫтындағы сәнкемдәр өлкәһенең (хәҙерге Ҡытай — Ҡаҙағстан сигендәге Эби-Нур күле буйҙарында) хәрби башлығы һәм идарасыһы итеп билдәләй. Ләкин көнбайыш төркиҙәр 694 йылда шул Ашина Дәүәйҙең улы Ашина Сөйҙө етәкселегендә Ҡытай иҙеменә ҡаршы баш күтәреп, ҡытайҙар тарафынан тағы ҡыйратылғас, сиреүҙәре төрлө яҡҡа һибелеп, үҫәргән-сәнкемдәр үҙҙәренең изге тәүтөйәге Уралға ҡайтып төпләнә, ә бер ярсығы (һәм дә һун ҡалдыҡтары) Ҡара Иртыш буйындағы ҡыпсаҡтарға барып ҡушылып, Ҡыпсаҡ ырыуының Сәнкем-Ҡыпсаҡ һәм Һун-Ҡыпсаҡ араларын тәшкил иткән (татар-монгол яуҙарынан һуң улар ҙа ҡайта Уралға)...

Инде йомғаҡлап әйтәм: әле тарихы һөйләнгән Сәнкем дә шул уҡ Үҫәргән. Үҫәргәндең тере тәненең айырылғыһыҙ бер киҫәге ул минең тыуған ауылым -- Сәнкем-Биктимер ауылы.

Үҙебеҙҙең замандарға шөйлә яҡын (18-енсе быуат уртаһы) осорҙа ла Башҡортостандың, башҡорт халҡының ҡанлы-данлы тарихының үҙәгендә ҡайнаған тыуған ауылым.

Ул сәхифәне аса башларҙан элек, Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың «Башҡорттарҙың тарихы» (Өфө, 1994) тигән китабына (92, 95-енсе биттәр) күҙ һалайыҡ:

«Петр I Полтава янында еңеүгә өлгәшкән 1709 йылдан алып уның ҡыҙы Елизавета тәхеткә ултырған 1741 йыл араһында көнсығыш Рәсәйҙәге төрки һәм башҡа мосолмандар тамам ҡоллоҡ хәленә төштө... Рәсәй хөкүмәтенең яңы сәйәсәте тураһында Түләкәй улының Петербургтан яҙған хатын алыу менән Килмәк Абыҙ башҡорт ырыуҙары күренеклеләренән Йыһанғол улын, Ирәткол улын, Кимәт улын (ихтимал, Кимәк улы) саҡырып, «Хажи мәсете»ндә (йәғни хәҙерге Хажи ауылында) ҡоролтай, башҡортса йыйын, тупланы. Унда рустарҙың был эштәренә ҡорал менән ҡаршы торорға ҡарар иттеләр...»

Башҡорт ҡырылған урын

1735 йылда Рәсәй батша самодержавиеһы тарафынан үҫәргәндәр ерендәге Ур йылғаһы тамағына ҡала-кәлғә төҙөү өсөн Өфөнән юлландырылған Ырымбур хәрби экспедицияһының юлын өҙөү -- башҡорт ерендә урыҫ кәлғәһе сукайтыуға ирек ҡуймаҫ өсөн, тамъян батыры Аҡай Күсемов башлап ебәргән һәм беҙҙең төбәктә Килмәк-абыз менән Үҫәргән батырҙары дауамлаған ғәрәсәтле ихтилалдың нисек итеп фажиғәле бөтөүенә туранан-тура бәйле урын был -- әүәлге Ҡасанҡый-Сала, ә хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге тыуған ауылым Сәнкем-Биктимер (Һунарсы).

Билдәле булыуынса, 1735 йылдың июнендә Өфө ҡалаһы янында йыйылған бөтөн башҡорт ҡоролтайы (Аҡай батыр унда Ҡазан юлы башҡорттарының вәкилдәрен етәкләй) батша баҫымына ҡаршы ҡоралы баш күтәрергә ҡарар сығара һәм ихтилал Ҡазан даруғаһында Аҡай батыр етәкселегендә дөрләп ҡабына, ә ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Сала янындағы ҡанлы һуйылыш ихтилалдың фажиғәле һуңғы аһәңе була. Тарихсы И.Ғ. Аҡманов иҫбатлауынса, Аҡай батыр, ихтилалды баҫтырырға ебәрелмеш генерал-лейтенант А.И. Румянцев менән йәнәһе тыныс һөйләшеп килешеү өсөн, 1735 йылдың сентябрендә Минзәләгә саҡыртыла һәм, мәкерле рәүештә ҡулға алынып, 1738 йылда С.-Петербург төрмәһенә оҙатыла (артабанғы яҙмышы билдәһеҙ). Ләкин эҙәрмән-тарихсы Рәүеф Насиров 1997 йылда Өфөлә нәшер ителгән «Уҙамандарҙы эҙләйем» тигән китабында Аҡай батырҙың, үҙе етәкләгән ихтилалдан һуң да, «тыуған яғы Әй йылғаһы буйҙарында ғүмер итеүе» тураһында байтаҡ ҡына дәлилдәр килтереп яҙһа ла, ысынбарлыҡҡа тап килмәй был фаразы; ни өсөн, тигәндә, Аҡай Күсемов һәм Р. Насиров һылтанған Аҡа (Аҡҡа, Аҡай) мулла Ҡамҡаев (Ҡыуаҡан ылыҫы Ҡамаҡай ауылы кешеһе, Бәпәнә Төрөпбирҙиндең ауылдашы) — икеһе ике кеше. Сөнки 1737 йылдың 11 сентябрендә ул, Аҡай мулла, төрмәлә ултырмыш ихтилал етәкселәре Йосоп, Килмәк, Аҡай Күсемов уҙамандарҙы азат итеүҙәрен һорап В. Татищевҡа хат яҙып ебәреүҙә ҡатнашҡан. Шулай итеп, журналистың был раҫлауҙары уйҙырма булып сыҡты...

Әммә ихтилал башлығы Аҡай батыр ғәскәренең һәм, Ә.В. Туған әйтмешләй, уның идара үҙәгенең минең тыуған ауылымдың боронғо төп-нигеҙе Ҡасанҡый-Сала эргәһендә (хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ерҙә) урынлашып, рәхимһеҙ ҡырылыуы тураһында башҡорт тарихсыларының да, яҙыусыларының да хәбәрдарлығын белдерткән мәғлүмәт юҡ, әгәр ҙә ки Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың әллә ҡасан уҡ яҙылып, үҙенән һуң ҡулъяҙма хәлендә ҡалған һәм 1994 йылда ғына Өфө «Китап» нәшриәтендә донъя күргән «Башҡорттарҙың тарихы» тигән хеҙмәтен телгә алмағанда. Ләкин бөйөк ғалимыбыҙ ҙа, ваҡиғаларҙы ифрати дөрөҫ биреп тә, уларҙың тәғәйен ҡайһы урында барғанлығы мәсьәләһендә бутала (сит илдә ҡалып эшләүе, Башҡортостан менән бәйләнеше өҙөлөү арҡаһындалыр). Ғалимыбыҙ таянған тарихи документты мин уның әле әйтелгән китабы донъяға сыҡмаҫы элек үк ныҡлы өйрәнеп, ваҡиғаларҙың географияһын дөрөҫ билдәләгәйнем, быға минең, әлбиттә, тап шул төбәктә тыуып-үҫеүем һәм ундағы ер-һыу атамаларын, риүәйәттәрен белеүем ярҙам итте.

Әлхасил, Ә. Вәлиди Туғандың шул «Башҡорттарҙың тарихы» китабынан беҙгә ҡағылышлы өҙөк (96 — 99-ынсы биттәр:

«1736 йылдың яҙында башҡорт ғәскәрҙәре *Кинель, Һаҙлыйылга, «Кешеҡырылган»* йылғалары буйында идара үҙәге ҡорҙо. Күп мосолман һәләк булды. Бигерәк тә Кинелбашы, Һаҙлыйылға һуғышында урыҫ ғәскәре, шымсылар булышлығында башҡорт ғәскәренең идара үҙәгенә төндә һөжүм итеп, ғәскәр генә түгел, ауыл халҡын да аяуһыҙ ҡырҙы. Шәфәҡтә йылға аръяғында ауыр һуғыш алып барған ирҙәргә ярҙам итергә теләгән ҡатындарҙы тупҡа тоттолар. Ҡатындар балалаларын һыуға батырып, һуғыш майҙанына ашыҡты. Ләкин һәммәһе лә ҡылыс аҫтында һәләк булды. Был һуғыштар тураһында һижри буйынса 1150 йылға ҡараған хәтирәләр Асылыкүл исемле ауылда Әхмәт исемле берәүҙең ҡулында һаҡланған дәфтәргә яҙылғайны. Һуғыш ҡыҙыулығында ирҙәрҙең — ҡатындарын, ҡатындарҙың үҙ балаларын үлтереү осраҡтары боронғо уғыҙҙарҙа һәм шулай уҡ ҡара-ҡытайҙар килгәндә Сәмәрҡәнд янындағы Катвен исемле ерҙә булған һуғыштарҙа күҙәтелеүе беҙгә мәғлүм... Тамъян ҡатындары, Һаҙлыйылғаның аръяҡ ярында ҡалған ирҙәре сафына ҡушылыу өсөн, балаларын йылғаға батырып, ҡаршы яҡҡа йөҙөп сығып һуғышҡан. Ҡыҫҡаһы, Һаҙлыйылға һәм «Кешеҡырылған» — башҡорттарҙың ватан һөйөү һәм уның өсөн шәһит булырға әҙер тороуҙарының үлмәҫ хәтирәһе ул. Урыҫтар был һуғыштарҙан һуң Аҡай-бейҙе Минзәлә ҡалаһында язалай. Икенсе бер риүәйәттән күренеүенсә, уны Петербурға алып килеп, шунда язалағандар...

Ошо ҙур яуҙа башҡорттарҙы ныҡ өҙгөләндергән тағы бер хәл — Минзәлә Һәм «Кешеҡырылған» һуғыштарында Ҡазан татарҙарынан бер төркөмдөң, бигерәк тә Ҡорманай исемле әҙәмдең, һәм Уржум сирмештәренең урыҫҡа ярҙам итеүе, төнөн юл күрһәтеп, башҡорттарҙың идара үҙәгенә көтмәгәндә дошман килтереп, аңғармаҫтан баҫып алыуы булды. Ихтимал, улар Тевкелевтың (Тәфтиләүҙең) агенттары булғандыр...

«Кешеҡырылған» һуғыштарынан ҡалған ҡәбер таштарының... һаҡланыуы хаҡында ишеттем».

Шулай тип яҙа ғалимыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған.

Китап авторы ҡулланған, иҫке төркисә яҙылып, урыҫсаға ла тәржемә ҡылынған ҡомартҡылағы өс йылғаның исемен, хәҙерге көндәге әйтелеш исемдәре менән сағыштырып, ысынлап та беҙҙең төбәктәге бер үк йылғалар икәнлеген асыҡлап биреү бик мөһим. Иғтибарлап ҡараһаҡ (түбәндәге географик карта буйынса барлағыҙ), китаптағыса «Кинель» — Ғәрәп хәрефтәре менән яҙылышында «Кнали», был иһә өҫтәрәк телгә алынған, һыу башы Ҡаҫмарттың уң ярынан йыраҡаланып (каналланып) ағып сыҡҡан һәм Ҡасанҡый-Сала янынан Һаҡмарға табан ағылған боронғо исемендәге «Аҡмасыҡ», ә Аҡай яуы осорондағы «Аҡмалы» булып, иҫке төркисә ҡулъяҙмала «Аҡынали» яҙылып, шул уҡ ваҡытта баштағы «А» таяғы «ҡ»-ға ҡушылып һыҙылыуы арҡаһында ошо ике хәреф бергә «К» тип уҡылып, күсермәлә «Кнали» хасил булғанлығы күренә. Тимәк, бик боронғо Аҡмасыҡ//Аҡмалы был. Ул хәҙерге Һунарсы ауылы көнсығышындағы «Ҡаҙаҡлар сабыны» тәңгәлендә Ҡаҫмарттан ҡаналланып-йырылып сыҡҡан һәм ауылдың Ҡаҫмарт яҡ ситен уратып аҡҡан (хәҙер уның был башланғыс өлөшө ҡороған, ә дауамы Урта тирмән тәңгәленән яңы йыраҡаланып ағылып ята).

Икенсеһе «Һаҙлыйылға» (Аҡмалыға ҡоя) әлегәсә шул көйөнсә исемләп әйтелә. Һаҙлыйылғаға ҡойған һәм ҡулъяҙмала «Кешеҡырылған» тип исемләнгән өсөнсө бәләкәй йылғабыҙ иһә хәҙерге көндә Әселе үҙәк атала, ул иһә, моғайын, «әжәл» һүҙенең үҫәргәндәр һөйләшендәге «әзәл» әйтелешенән яһалған: «Кешеҡырылған»ға алмаш «Кеше Әзәле» тигән вариант исемдән, «кеше»һе ҡыҫҡартылып, Әзәле//Әселе үҙән барлыҡҡа килгән, ә хәҙер иһә ул, һыуы ҡороп, Әселе үҙәк тип йөрөтөлә. Быларҙың өсөһөнөң дә бергә ҡушылған урыны боронғо Ҡасанҡый-Саланан көнсығыштараҡ — хәҙерге Һунарсы ауылының көнбайыш осонда — атаҡлы илбаҫар Аҡһаҡ Тимер яуы үткән юл өҫтөндә...

Батшаға ҡаршы баш күтәргән Нуғай юлы башҡорттарының (ҡатын-ҡыҙҙары, бала-сағалары, мал-тыуарҙары менән бергә) 1736 йылдың яҙында ни өсөн тап беҙҙең Ҡаҫмарт тамағында пәйҙә булыуҙарын аңлатыусы ҡайһы бер тарихи документтарға күҙ һалайыҡ.

Иң тәүҙә бер мөһим хәл: был ихтилал Аҡай ихтилалы тип аталһа ла (сөнки ул башлап ебәргән һәм башында етәкләгән), Аҡай Күсемов, әйтеп үтеүебеҙсә, 1735 йылдың 7 ноябрендә үк иң яҡын ярандары менән бергә Өфөләге генерал-лейтенант А.И. Румянцевҡа барып баш һалып, төрмәлә тотолғанлыҡтан, Нуғай юлындағы артабанғы хәрәкәттәрҙең башында Юрматы ылыҫының ил ағаһы Килмәк абыҙ Нурышев тора, ихтилалсылар иләүен дә был төбәккә боронғо Муйтән бабабыҙ эҙҙәренән тап шул алып килә лә инде.

Билдәле булыуынса, үҫәргәндәр ерендәге Ур йылғаһы тамағында башҡорт менән ҡаҙаҡ араһына урыҫ ҡәлғәһе (беренсе Ырымбур) ҡуйҡайтыу өсөн, 1735 йылдың йәйендә Өфөнән тура көньяҡҡа ҡарай статский советник И.К. Кирилов етәкселегендәге Ырымбур экспедицияһы юллана. Ул Эйек йылғаһының һул яры буйынса йылға тамағына етеп, хәҙерге Воздвиженка ҡаршыһында Һаҡмарҙы кисеп сығып һулға боролорға ла Яйыҡтың уң яры буйлап үргә — Ур тамағына барырға тейеш була. Нуғай юлындағы башҡорт болаһы экспедицияның башына етмәһен өсөн, уның артынса уҡ Өфөнән ебәрелгән 500 драгунға Мәләүез йылғаһы тамағында август айында Юрматының ил ағаһы Килмәк абыҙ ихтилалсылары

ябырылып, ҡаты һуғышта 200 драгунды ҡырып ташлай ҙа 3000 яугире менән Кириловтың артынан төшә. Ә Кирилов экспедицияһы был ваҡытта Эйек йылғаһының һул яғында баяғы 500 драгундың килеп етеүен көтөп, Эйеккә ҡойған Әселе йылғаһы буйындағы хәҙерге Петровский ҡасабаһы тәңгәлендә ыҫтан ҡороп туҡталып тора икән — нәҡ минең аҫаба бабаларҙың йәй уртаһы йәйләүендә (ә Кирилов тоҫҡалған Һаҡмар кисеүе — көҙгө йәйләү еребеҙ)... Аръяҡтағы Һаҡмар ҡәлғәһенән урыҫ казактары, батша яҡлы башҡорт ҡыпсаҡтары, ҡалмыҡ, мишәр кешеләренән торған әтрәттең һәм атаман Араповтың яҡшы ҡоралланған 200 кешелек командаһының бергәләшеп йәһәт килеп етеүе һәм башлыса уҡ-һаҙаҡ, һөңгө менән генә ҡоралланған ихтилалсыларға утлы ҡоралдары менән ныҡышмалы көрәшеүе арҡаһында ғына Ырымбур экспедицияһы тар-мар ҡылыныуҙан ҡотола. Килмәк абыҙ төркөмдәренең батша ғәскәрҙәренә ҡаршы тап ошо минең бабалар ерендә һуғышыуҙарын дөрөҫләүсе документ һаҡланып ҡалған — батша ғәскәрҙәре яҡлы старшиналар Муса Ҡошҡолтаев менән Ҡыҙрас Муллаҡаевтың (икеһе лә Нуғай юлы Мең ылыҫынан) 1735 йылдың 10 июлендә Өфө провинция кәнсәләренә биргән шаһитлыҡтары. Улар икеһе лә И.К. Кирилов ыҫтанының ***Тирәкле*** йылғаһынан 15 саҡрым алыҫлыҡта тороуын, һәм үҙҙәренең ихтилалсылар тарафынан тап шул Тирәкле йылғаһы буйында әсир алыныуҙарын, ә ул саҡта Килмәк абыҙ ыҫтанының иһә Тирәкле йылғаһы башында булыуын күрһәтә, ә был иһә беҙҙең ғәзиз йылғабыҙ, хәҙер ҙә ул, яртылаш ҡороған хәлдә, беҙҙең колхоз баҫыуҙары буйынан ағылып ята...

Бабаларыбыҙҙың ошо беҙҙең йәйләү ерҙәрендә Ырымбур экспедицияһын Һаҡмар кисеүенә үткәрмәй тотҡарлауҙары арҡаһында бер аҙ һуңлабыраҡ булһа ла, И.К. Кирилов Ур тамағына барып етә һәм унда яңы ҡәлғә Ырымбурҙың (һуңынан Орск) нигеҙләнеүе тураһында 1735 йылдың 23 сентябрендә Һаҡмар ҡәлғәһенән әбей батшаға хәбәр ебәрә. Уның Һаҡмар ҡәлғәһенә ашығыс әйләнеп ҡайтыуының сәбәбе — Нуғай юлы башҡорттарының Килмәк абыҙ етәкселегендәге ихтилалының көсәйеүе, шул арҡала Өфө менән бәйләнештең өҙөлөү ҡурҡынысы. Әбей батшаға ул баш күтәреүселәрҙе баҫтырырға йүнәлеүен хәбәрләй:

«...А я, нижайший раб, сентября 7 числа пошел назад внутрь помянутых воров *иштяков,* на самые их жилища Юрматынской и Тамъянской волостей; а имею при себе драгун Вологоцкого армейского, Казанского гарнизонного, да новых всего 8 рот под командой секунд-майора *Останкова,* да нерегулярных Уфимских татар, мещеряков, кои по подданнической своей должности управлением первого их старшины Муслюма Кудайбердина в верной службе обращаются — 400, казаков уфимских, яицких, сакмарских 150 человек...» (Шуныһы ҡыҙыҡ: Һаҡмар ҡәлғәһенән 1735 йылдың 23 сентябрендә яҙып ебәрелгән был ҡағыҙ Петербурҙағы әбей батшаға бер ай эсендә үк — 26 октябрҙә барып еткән!).

Әммә ихтилал Башҡортостандың йәмғе дүрт юлында ла дөрләгәнлектән һәм ҡыш башланыу сәбәпле, И.К. Кириловҡа Өфө ҡәлғәһенә ҡайтырға һәм, барлыҡ көстәрҙе туплап, киң фронтлы һөжүм ойоштороу тураһында уйларға кәрәк була. Сөнки әбей батша Анна Иоанновна баш күтәреүсе башҡорттарҙың тоҡомон тамам ҡороторға әмер биргән, һәм бындағы сатраптарын һүлпән

ҡуҙғалыуҙа шелтәләй... Шул йәһәттән 1736 йылдың 5 мартында Ҡазан гөбөрнәтере генерал-лейтенант А.И. Румянцев, статский советник, Ырымбур экспедицияһы башлығы И.К. Кирилов Алабуға ҡалаһында осрашып, ихтилалсы башҡорттарҙы шул уҡ йәйҙә ҡырып бөтөрөү тураһында һөйләшеп килешә лә кем ҡайҙа нимә эшләргә тейешлеген аныҡ билдәләй:

А.И. Румянцев ғәскәре менән Ҡазан юлы башҡорттарын баҫтыра-баҫтыра Нуғай юлына барып етәсәк.

И.К. Кирилов кисекмәҫтән Өфөгә йүнәлеп, ундағы ғәскәрҙең иң ҙур өлөшөн алып, Нуғай юлындағы Табын ҡәлғәһе аша юрматы һәм башҡа ылыҫтарҙың аҫтын өҫкә килтерә.

Полковниктар П. Мартаков (Әстерхан драгун полкы), Тевкелев Алексей Иванович (Ҡотломөхәммәт мырҙа Тәфтиләү. И.К. Кириловтың ярҙамсыһы) үҙҙәренең ҡул аҫтындағы ике меңләп драгун менән Уса һәм Себер юлы башҡорттарының көлөн күккә осора.

Ике меңлек Яйыҡ казактары һәм улар менән бергә урыҫтарға хеҙмәт иткән ҡалмыҡтар март аҙағы — апрель баштарында Һаҡмар ҡәлғәһенә килеп етергә лә, унан Ағиҙел тарафына юлланып, өҫтә әйтелгән А.И. Румянцев һәм И.К. Кирилов командаларына ҡушылырға тейеш. Әстерхан яғындағы өс мең ҡалмыҡ та, Һаҡмар ҡәлғәһенә ашығыс килеп, Нуғай юлына сығасаҡ...

Ниәттәренең үтәлеше тураһында А.И. Румянцевтың батшаға хисапнамәһенән: «...чрез всю Казанскую дорогу шел благополучно со удовольством — на станциях приготовлено фуражу и подвод (сөнки Аҡай Күсемов етәкселегендәге Ҡазан юлы ихтилалы баҫтырылған, етәкселәре килеп баш һалған. — *Й.С.*)... Пошел 3 апреля сего года к Деме реке (Нуғай юлына. — *Й.С.*) в самые воровские жилища... И где их собрания были, нимало не стояли, а бежали вперед, уповая тамо живот свой спасти. И не токмо по одной Деме, но и по протчим рекам, которые в Дему впали, посыланы партии были и помощию всевышняго и е.и.в. высочайшим счастием *около тысячи человек обоего пола воров побито,* и несколько десятков в плен взято, и *около ста деревень выжег, не оставляя ни единого двора.* Тако сии злодеи за бунтовское свое воровство пред в.и.в. от меча и огня конец восприяли, разве только те спаслись, которые не в проходимые ущелья забежали... От статского советника господина Кирилова получил письмо, что он с командою ходил по Уршаку реке, и тако же по оной реке воровских деревень выжег 42 и воров несколько побито... *И тамо воры також бегут, и домы свои и фураж жгут, и тем ему припятствие в пути чинят. А главный вор Кильмяк-абыз за Белую реку ушел,* и за ним от него (от Кирилова. — *Й.С.*) послана немалая партия, и что воспоследует, еще ведомости не имею...»

Күренеүенсә, Килмәк абыз Ағиҙел аръяғына — беҙҙең Ҡаҫмарт йылғаһы тамағындағы Ҡасанҡый-Салаға табан сигенеп бара боласыл иләүе менән...

Ә бына И.К. Кириловтың 1736 йылдың 20 майында яҙған шундай уҡ хисапнамәһенән:

«Е.и.в., самодержице всероссийского всеподданнейшее в Кабинет доношение.

...Дождався драгунского Вологодского полку... на Нагайскую дорогу для искоренения воров башкирцов вышел того же марта 24-го, где счастием в.и.в. *воров башкирцов* разными партиями так, *как скот гнали,* не имея никаких от них отпору (гөнаһһыҙ бала-саға, ҡатын-ҡыҙ, ҡарт-ҡоро һәм ихтилалда ҡатнашмаған тыныс тормошло башҡа кешеләрҙе ҡырып йөрөйҙәр. — *Й.С.*), но одно было у них, что спасали себя, жон и детей своих, бегая в леса и в другие места. И так по рекам Белой до урочища Бубульжан (Бөгәлжән. — *Й.С.*), по Уршаку, по Негушу, Тору, Селеуку, где самое воровское гнездо было, около *двух сот деревень, в них близ 4000 дворов раззорено и сожжено,* в том числе главных воров Кильмяка, Бепеня, Рысая жилища и *первая по всей орде мечеть,* называемая Азиева, в которой в прежней и нынешние бунты воры о бунтах советовали и Куран целовали. При чем воров кажнено 158, побито обоего полу близ 700 человек, живых ясырю взято и ныне в Табынску 160 человек, да роздано в Уфе 85, в ссылку из Уфы в Остзею послано в службу годных 81, да женок с малолетними детьми 34. Ныне посылается в Остзею ж осмнадцать лошадей. От многих тысяч по нужде под безлошадных драгун и под артиллерию отобрано 237, а протчия оставлены в степях, а иныя служащим татарам в пищу роздованы, ибо по здешнему обычаю к весне лошади в степях едва бывают живы. Сие, и что от главной команды генерал-лейтенанта и казанского губернатора Румянцова по Деме и впадающим в нее рекам и речкам учиненное такое же ворам раззорение, также особое командою полковников Мартакова и Тевкелева на Осинской и Сибирской дорогах и от Сибири разными тамошними командами под управлением действительного статского советника Татищева, действительное ворам искоренение (во всех местах ужа около 4000 человек пропало) привело к тому, что не знали куды воры скрытца, ибо от самого начала подданства ни за которыя бунты (коих в разные времена многажды было, и окончание имели отпущением вин) *никогда таковой казни и раззорения не видали.* По сему началу несумнненная надежда есть, что сии плуты в совершенное подданство приведены будут...»

Ә Уса һәм Себер юлдарын айҡап йөрөүсе бәдбәхет Тәфтиләүҙең 500 башҡорт ауылының көлөн күккә осороуы, мең кешелек Сейәнтусы ауылы халҡының береһен-бер ҡалдырмай ҡылыстан тураҡлатып, 105 кешене, мәсеткә бикләп, тереләй яндырыуы һәр кемгә лә мәғлүмдер...

Килмәк абыҙ менән бергә Ағиҙелде ашып киткән Дим, Юшатыр, Нөгөш, Ҡана, Тора, Эйек буйҙары башҡорттарының да береһен-бер ҡалдырмай ҡырып бөтөрөү бурысы ҡуйыла. Килмәк абыҙ баш күтәргән халыҡтың иҫән ҡалғандарын бына шул тулайым геноцидтан ҡасырып, былтырҙан уҡ үҙенә яҡшы билдәле Ҡасанҡый-Сала төбәгенә килтергән булырға тейеш — алдағы дәһшәтле көрәш алдынан тын алыу, көстәрҙе туплау йәһәтенән. Ә бәлки, батша ҡырғынсыларының хәттин ашҡан яуызлығы тынмаһа, Муйтән бабаның юлы буйынса Урта Азияға сығып китергә лә булғандыр ниәттәре. Ләкин...

1736 йылдың 2 июнендә И.К. Кирилов әбей батшаға кинәнесле хәбәрләй:

«Ее императорскому величеству, самодержице всероссийской всеподданнейшее в Кабинет доношение.

После всеподданнейших нижайшего раба репортов и отъезду отсюду генерала-лейтенанта и казанского губернатора Румянцева получил известие от майора *Останкова,* что яицкими казаками вступя от Сакмарска Нагайской дороги в Башкиры *19 мая,* ушедших с Демы реки воров, на которых *пришли внезапно,* в горах *между Ика и Сакмары рек,* добита *мужеска полу с 600, женска немалое число,* причем получено лошадей, скота и пожитку довольно...»

Иғтибар итегеҙ: 600 ир-ат һәм унан да кәм булмаған һанда (тимәк, тағы 600) ҡатын-ҡыҙ — бөтәһе 1200 кеше, көтмәгәндә баҫып алынып, бер юлы үлтерелгән, һәм был ҡанлы фажиғә ошо беҙҙең төбәктә — Эйек менән Һаҡмар аралығындағы минең бабалар ауылы Ҡасанҡый-Сала ерендә булған... Ә Ырымбур экспедицияһының 1736 йыл 30 июндә яҙылған икенсе бер документында: «Майор *Останков* с яицкими казаками после первой над ворами победы *от 22* по 30 числа мая ходил по реку Яику, где воровских разорил и выжег 113 деревень, и с башкирцами, коих было 1000 человек, бились и побито больше двух сот...» — тип әйтелә. Тимәк, ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Салала ҡырғынсылар тарафынан 1200 ир-аттың, ҡатын-ҡыҙҙың, бала-сағаның үлтерелеүе, Ҡасанҡый-Сала ауылыбыҙҙың сираттағы яндырылып юҡ ителеүе 1736 йылдың иҫке стиль менән 22 майында булған, был иһә Себер юлы Балыҡсы ылыҫы Сейәнтусы ауылы фажиғәһенән кәм түгел. Айырма шунда ғына: Тәфтиләү менән бергә йөрөгән П.И. Рычковтың яҙма-шаһәҙәтнамәһе арҡаһында ғына Сейәнтусы тарихҡа керһә, Ҡасанҡый-Сала фажиғәһе тарихтан ситтә ҡалған. Әммә ихтилал етәксеһенең (Килмәк абыз үҙе булһа кәрәк) йөрәккәйе ҡанһырап ядкәрләгән, Әхмәтзәки Вәлиди Туған файҙаланған баяғы ҡулъяҙма ҡомартҡыһы тарихыбыҙҙың был аҡ тошона асыҡ яҙыулы сәхифә булып өҫтәлһен (башҡортсанан ауҙарылмыш урыҫсаһынан ҡабат башҡортсалап тәүге тапҡыр бирелә):

Башҡорттарҙың Күсем улы Аҡай етәкселегендәге ихтилалы

Ҡолһары-бәктең кәңәше буйынса, урыҫтар Өфө йылғаһы тамағында ҡала төҙөнөләр һәм уны Өфө тип атанылар. Йыйылған яһаҡты шул ҡалаға тапшыра инек. Дим йылғаһы тамағындағы Бөрсуан йылғаһы буйында башҡорт халҡы йыйылып кәңәшләшер, унда бөтә дүрт даруға башҡорттары ағылыр ине. Шул кәңәшмәлә эшлекле ҡарттар, һыналған ирҙәр үҙ-ара кәңәшләшеп, ҡайһылай итеп быйыл урыҫтар араһында темеҫкенеү ойошторорға һәм үткәрергә, тигән берҙәм фекергә килде.

Әлхасил, юлбашсылыҡ Улаҡай улы Күсемгә күсте. Уның заманында башҡорттар мохтажлыҡ һәм ҡыҫыуҙарҙан ҡурсаланғайны. Уның заманында урыҫтар ҙа әлегеләй ҡыйыулыҡ ҡылманылар: сиктән бер аҙым сығырға ла баҙнат итмәйҙәр ине. Ул (Күсем. — *Й.С.*) бөтә дүрт даруғала ла хөрмәт ҡаҙанды, уҙаман булып танылды. Ҡазанлылар, сыуаштар, сирмештәр, муҡшы һәм уржумлы халыҡтар, урыҫтарҙың иҙеменә сыҙай алмай, уға килеп һыйына ла ҡотолоу таба ине...

Күсембәттең, Иләүкәй улының, йорто Минзәлә ҡалаһынан 50 — 60 саҡрымда ине. Уның заманында бөтә дүрт даруға бер фекерҙә булды, башҡаса булманы. Бөтәһе үҙ старшинаһын тыңланы, сөнки уның заманында башҡорттар, һис шикһеҙ, иркен йәшәне. Урыҫтарҙы тыңламаны, хаҡлыҡ өҫтөнлөк итте, ә нахаҡлыҡ еңелде. Бәлә-ҡазаларҙан бит Хоҙай үҙе һаҡланы. Күсембәттең, Иләүкәй улының, өс улы бар ине: береһе Атха — яуыз иҙеүсе булды, икенсеһе Аҡай — урыҫтар ҡулына эләкте, өсөнсөһө — Сыуаш. Һуңғыһы айырым әһәмиәтле түгел. Ул, сыуаш ҡатындан тыуғанлыҡтан, Сыуаш тип йөрөтөлдө.

Әлхасил, Күсембәттең вафатынан һуң, ифрат ғәййәр ҡараҡтар Аҡайҙың аттарын урланылар. Ҡазанлы сыуаштар ине был ҡараҡтар. Аҡай уларҙы Ирнә йылғаһы буйындағы Ураҙ ауылында ҡыуып етте, ләкин ҡараҡтар, Аҡай ҡулына эләкмәҫ өсөн, мөс[14] һәм уҡтар менән ҡарыулаштылар. Аҡай әмере буйынса, улар бөтәһе дөмөктөрөлдө. Араларынан нисектер ҡотолоп ҡалған береһе Минзәләгә барып, унда Аҡай өҫтөнән шикәйәт ҡылды, унда ул Аҡай, күп һанлы әтрәте менән улар ауылында пәйҙә булып, ауылдың тыныс халҡын ҡырҙы, ә уны бер нимәһен дә ҡалдырмай таланы, тип яҙҙы. Был шикәйәт тураһында урыҫтарҙың кенәзенә еткерҙеләр. Шул сәбәпле кенәз, ғәскәр йыйып, Аҡай өҫтөнә йүнәлтте. Ғәскәр башына Румянцев ҡуйылды. Был эште аҙағына еткереү өсөн, Аҡайҙың ауылын ҡаманылар һәм уны ҡулға алдылар. Ошонан һуң Аҡайҙы бер кемгә лә күрһәтмәнеләр, берәүҙәр — уны аҫҡандар, тип, икенселәре — ул һуктырылыуҙан һуң үлгән, тип һөйләнеләр.

Аҡайҙы ҡулға алыу хәбәре тирә-яҡҡа тиҙ таралды. Ярлылар ҙа, хәллеләр ҙә бер-береһенә был хаҡта хәбәр ҡылды. Кәңәшмәгә йыйылдыҡ. Һәр ырыуҙан вәкилдәр килде. Фәҡәт дала ҡанлылары ла ҡобауҙар ғына килмәне. Күтәрелешкә риза түгел ине улар. Шул саҡ уларҙың алдында байраҡтар күтәреп: «Әҙерме һеҙ һуғышҡа?» — тип оранланыҡ. Һәм улар, теләһә-теләмәһә лә, төрлө сафтарыбыҙға ҡушылдылар. Бында Бәкәтиндән, Ҡыпсаҡтан, Тамъяндан, Бөрйәндән, Пчҡаҡтан (шулай яҙылған. — *Й.С.*), Урандан, Ҡаршынан, Күриҙән, Ҡобауҙан, Ҡарайҙан, Шурандан, Ҡырғыҙҙарҙан өс төркөм, Йыландан дүрт төркөм һәм башҡалар бар ине. Бөтәһе лә, һүҙ ҡуйышып, һуғышҡа әҙерләнделәр. Әлбиттә, улар араһында батырҙар, тәжрибәле аҡһаҡалдар, белемле ғалимдар бар ине. Улар бөтәһе лә килделәр был кәңәшмәгә; атаҡлы батырҙар: Пчҡаҡтан (шулай яҙылған. — *Й.С.*) — Ураҙман батыр, Тамъяндан — Сәлим батыр, Йыландан — Абдулла батыр, Байларҙан — Килмәк абыз. Улар бөтәһе бер фекергә килделәр. Кәңәшмәнән һуң, урыҫҡа хат менән илсе ебәрергә ҡарар ҡылынды, түбәндәгеләр яҙылғайны унда: «Бисмилла, башлайбыҙ. Беренсеһе — Күсем улы Аҡайҙы ҡайтар беҙгә; икенсеһе — Минзәләгә ҡайтып кит һәм шул сиктән сыҡма. Әгәр ҙә ошо талаптарҙы үтәмәһәң, ул саҡта, Хоҙай ярҙамына өмөтләнеп, һинең менән һуғышҡа керешәбеҙ». Урыҫтар ошолай тип яуапланылар: «Миңә Яйыҡ йылғаһынаса юл бирегеҙ. Унда мин бөйөк батшабыҙҙың әмере буйынса ҡәлғә ҡорорға урын эҙләйем. Шунан һуң Аҡайҙы ҡайтарырбыҙ, әммә хәҙергә уны урыҫтар араһында тотабыҙ». Ошонан һуң кесеһе лә, олоһо ла, ярлыһы ла, хәллеһе лә, ғалимы ла, ябайы ла — бөтәһе лә кәңәшләште яңынан.

---

[14]Мөс (меч) — сәнсеү ҡоралы (төҙ ҡылыс).

Хәлле инсандар әйтте: әгәр урыҫ-кафыр өҫтөнлөк алып, йорттарыбыҙҙы яулап алһа, ҡарауыл ҡуйыр ул унда. Балаларыбыҙ бөтәһе кафырҙар ҡулына ҡалыр һәм уларға хеҙмәт итер...

Кәңәшләшеп, урыҫтар өҫтөнә һуғыш менән барырға ҡарар ҡылдыҡ. Был хаҡта бөтә ырыуҙарға: «Таң атыуға һуғышҡа әҙер булығыҙ!» — тип хәбәр иттек.

Һуғыш башланыҡ. Урыҫтар йырып сығырға ынтылдылар, ләкин башҡорттар бер кемде лә үткәрмәй ныҡ торҙолар, үҙ-ара вәғәҙәләренә тоғро булдылар. Урыҫтарҙың күптәрен әсир иттеләр, күптәрен яраланылар. Йыл буйына уңышлы барҙы эштәр. Бер саҡ бөтәбеҙ берҙәм фронт менән һөжүмгә күстек: ҡулсаға (кольчуга. — *Й.С.*) кейгән, уҡ-һаҙаҡ һәм мөстәр менән ҡоралланған егеттәр урыҫтарға ташланды һәм, уларҙың фронтын емереп, тар-мар ҡылды уларҙы.

Бәғзе бер тәжрибәһеҙ, наҙанлыҡта тәрбиәләнгән яугирҙәр талауға керешеп китте. Шул форсаттан файҙаланып, урыҫтар мылтыҡ һәм туп уттары астылар һәм мосолмандар мәжбүр булды сигенергә. Артабан уңыш ҡаҙанманы мосолмандар. Әлбиттә, урыҫтар Минзәләгә ҡайтып китте һәм Аҡайҙы сығарманы.

Ағиҙел йылғаһы Нуҡрат (Ҡама. — *Й.С.*) йылғаһына ҡойған тәңгәлдә урыҫ ғәскәрҙәре пәйҙә булды. Мосолмандар, Ағиҙелде буйлар өсөн, улар менән һуғыш алып барҙылар. Танылған башҡорт батырҙарының күптәре һәләк булды: Тамъян батыры Сәлим Наҡаҫ урманында һәләк булды. Башҡорттар бер нисек тә кәртәләй алманы урыҫ юлын, һөжүмдәрен тотҡарлай алманылар. Шул сәбәпле башҡорт йорттарында тыныслыҡ булманы һәм күп бәлә-ҡазаға тарыны улар. Әгәр инде иҫке ҡанундар нигеҙендә иҫке ерҙәребеҙҙә урыҫтарҙан тыныслыҡ һәм бәхет күрмәгәс, был күп бәхетһеҙлектәргә килтерәсәк, тип һөйләнеләр; ҡарт-ҡороларыбыҙҙы, бала-сағаларыбыҙҙы, туған-тыумасаларыбыҙҙы урыҫтар иҙеүенән ҡотҡарыу өсөн, беҙгә яңы ерҙәр эҙләп табырға кәрәк, тип тә һөйләнеләр. Ошондай уйҙар менән күпмелер ваҡытҡаса иҫке урындарҙа ҡалдылар. Ҡышҡыһын бик ныҡ йонсонолар. Урыҫтар даими һөжүм итте уларға. Урыҫ ҡулына ҡалмаҫ өсөн, алты ай буйы һуғыш алып барҙы башҡорттар. Ҡышҡыһын бик күп урыҫтарҙы ҡырҙылар, шуға күрә был ҡышта урыҫ ҡулына ҡалманылар. Яҙғыһын көндәр йылынғас, мосолмандар хат яҙышып, берҙәм күтәрелеүҙең көнөн, урынын билдәләнеләр. Бөтәһе лә Аҡыналы (Аҡмалы. — *Й.С.*) йылғаһына йыйылдылар (беҙҙең төбәккә. — *Й.С.*); һуғышырға теләмәүселәр урманға ҡасты, ҡайһыларын көслөкләп килтерҙеләр. Улар араһында *казан татарҙары һәм уржум сирмештәре* бар ине, үҙҙәренә файҙалы саҡта башҡорттар араһына йәшеренә ине улар. Араларында шымсылыҡ ҡылыусы һәм ғәскәребеҙҙең йыйылыу урынын урыҫтарға еткереүсе һатлыҡ йәндәр табылды, шуға күрә урыҫтар таң тишегенән беҙҙең өҫкә ябырылды. Аҡыналы (Аҡмалы. — *Й.С.*) тамағында бер бәләкәй йылға бар, Һаҙлыйылға тип атала, һәм тағы бер бәләкәй йылғаны «Кешеҡырылған» (хәҙерге Әселе үҙәк. — *Й.С.*) тип ләҡәпләйҙәр, сөнки һуғыш ваҡытында был йылғала бик күп мосолман ҡырылды. Мосолмандар, урыҫтарҙың бында пәйҙә булмаҫына инанып (бер кем дә быны хатта башына ла килтерә алманы), тирә-яҡҡа ҡарауылдар йүнәлтмәнеләр. Бында теләгән берәү килде лә үҙе теләгәнсә йәшәне, ә теләгән берәү китте. Ирекһеҙләп йыйналған бәғзе берәүҙәр хыянатсылыҡ ҡылды

һәм урыҫтарға хәбәр бирҙе, улар иһә яйлап ҡына һуғышҡа әҙерләнде. Мосолмандар иһә бер ни ҙә белмәне. Һатлыҡ йәндәрҙең береһе Ишривандан ине, *Ҡорбанай* тип исемләнеләр уны, кемдең улы икәнлеген мин белмәйем. Ул мосолмандар йәшәгән урынды күрһәткән һәм урыҫтарҙы һуғыш хәйләһенә өйрәткән. Урыҫтар төндә үҙҙәренең туптарын килтерҙе лә иртәнсәк шуларҙан ата башланы. Бахыр башҡорттар, был атыуҙың ҡайҙан ҡупҡанлығын аңлай алмай, төрлө яҡҡа һибелеп ҡаса башланы; күп ҡатындар балаларын ҡосоп йылғаға ташланды. Яралылар ҙа йылғала һәләк булды. Был һуйышта Һаҙлыйылғала мәйеттәрҙән күпер хасил булды. Ҡарттарҙы эт урынына таштар һәм күҫәктәр менән һуғып үлтерҙеләр, күкрәк сабыйҙарын ҡылыстар менән тураҡланылар, гөманлы бисара ҡатындарҙың ҡорһаҡтарын ярҙылар, йәш-елкенсәкте мауығып үлтерҙеләр. Шәһиттәрҙең мәйеттәрен ҡарғалар суҡыны һәм төлкөләр кимерҙе. Ошо көндә лә унда ул кешеләрҙең һөйәктәрен табырға мөмкин...

Көнө буйы барҙы шулай. Шунан һуң урыҫтар ҡалғандарға тын алырға форсат бирҙе күпмелер. Урыҫ башлығы указ уҡып ишеттерҙе, ошолай тиелгәйне унда: «Батша һеҙҙең гөнаһтарҙы кисерҙе, үҙегеҙҙең әүәлге йорттарығыҙға ҡайтығыҙ, бер кем дә теймәҫ һеҙгә». Урыҫтарҙың һүҙенә ышанып ҡайтып киткән күптәребеҙ аслыҡтан һәләк булды. Был көндәрҙә тамъяндар өйҙәренә ҡайтырға ҡурҡты, әммә тыуған ерҙәренән бөтөнләйгә өҙөлөргә теләмәгәнлектән, йәйләүҙә үткәрҙеләр йәйҙе. Ҡышҡыһын Ағиҙел буйҙарында ла тыныслыҡ тапманы тамъяндар, һуғыштан күп ҡайғыларға тарынылар. Уларға һис кем ярҙам ҡулы һуҙманы, һис кем яҡты йөҙ менән ҡаршыламаны. Кемдәрҙе дуҫ күрһәләр, күберәк шуларҙан дошманлыҡ осраттылар...

Минзәләгә яҡынырак йәшәгән тамъяндар башлағайны бит һуғышты (күтәрелештең тәүге осоро тураһында бара һүҙ. — *Й.С.*). Өс йөҙ алтмыш дүрт атлының башында торған атаҡлы батырҙар, уҡ-һаҙаҡтар, мөстәр менән уңдан һәм һулдан да, алдан һәм арттан да ҡурсаланып, бер кемдән дә ҡурҡмайынса, елдәй елдерҙеләр. Күп осраҡтарҙа дүрт даруғаның да ғәскәр башлыҡтары шуларҙан тәғәйенләнде. Шуға ла әйтерҙәр ине: «Һуғышырға теләһәң, тамъяндарҙан кәңәш һора, бәхәсләшкең килһә, сарайлыларға өндәш».

Ҡыпсаҡтар, үҙҙәренең урыҫтар яҡлы булыуынан маһайып, Хоҙай уларға тыныслыҡ һәм бәхет килтерҙе, тип һананы һәм тамъяндарға ҡаршы көрәште. Тамъяндарҙан үс алырға теләп, Һаҡмарға барып еткән (йәғни Ҡасанҡый-Салаға йүнәлгән. — *Й.С.*) урыҫтар менән берләшеп, тамъяндарға ябырылды. Һуңғылары үҙҙәренә ҡотолор урын таба алманы...

Улар (тамъяндар. — *Й.С.*), күсенергә теләп, ҡыпсаҡтарҙың тарафына (баяғы беҙҙең Һаҙлыйылға буйына. — *Й.С.*) килгәйне, ләкин көтмәгәндә ҡыпсаҡтарҙан булған һатлыҡ йәндәр (тимәк, майор Останковтың ҡырғын әтрәтенә юл күрһәткән Ҡорманай — Ҡыпсаҡ ырыуынан. — *Й.С.*) Һаҡмарға килеүсе урыҫтарға хәбәр иткән улар хаҡында. Улар уларҙың мал-тыуарын ҡыуалап алып китте, ҡатын-ҡыҙҙарын ҡол итте, эшкә яраҡһыҙ ҡарттарҙың бөтәһен ҡырҙы. Тамъян аҡһаҡалдарынан Аҡманай, Йәнғол ҡасҡын, Кинжәғол, Солтанғол — бөтәһе шунда һәләк булды. Ҡатындар, урыҫтарҙан ҡоттары осоп, үҙ балаларын һыуға аттылар; бәғзеләренең сабый балалары тирәк ботаҡтарына эленгән сәңгелдәктәрҙә

ҡалды — бөтәһе лә шунда һәләк булды, сөнки әсәләре уларҙы үҙҙәре менән алырға өлгөрмәнеләр. Күксә-тархандың ҡатынын — Сураҡайҙың әсәһен — әлһерәп бөткән ҡарсыҡты, урталай яра сабып, юлдың ике яғына бырағтырҙылар. Тамъяндан Ҡорманғолдо, Аҡмайҙың улын, был фетнәле көндә урыҫтар ҡамап алған; үҙенең һөйләүенсә, ул, ике янды бер юлы ҡармап алып, керешен бөтөрә тартып, шуларҙан уң яҡлап — урыҫтарға, һул яҡлап мишәрҙәргә атып, үҙенә юл ярған. Бер мишәр уның артынан: «Ах, ни эшләнең һин, яуыз башҡорт?! Һеҙҙе аҫып бөтөрөргә тирәктәр ҙә етмәй бит!» — тип ҡысҡырып ҡалған. Тап шулай уҡ был көндә Күксә-тархандың туғаны Китһентүрә Тамъяндан күп иптәштәре менән бергә дошмандарға ҡаршы һуғышта ҡатнашты. Һәм улар дошман ҡулына эләкмәне — икенсе яҡҡа китте. Урыҫтар уларҙы эҙәрлекләне. Улар үҙҙәренең ауылдарына әйләнеп ҡайтҡас, улар урыҫтарҙан хат алды: Аҡыналы (Аҡмалы. — *Й.С.*) йылғаһы буйындағы һуғышта булыусылар кисекмәҫтән Минзәләгә килеп күренһен, үҙ ихтыярҙары менән килмәһәләр, этап менән килтереләсәктәр, тиелгәйне унда.

Бахыр мосолмандар! Урыҫтарҙың был хәбәре уларҙы үҙ баштарынан ваз кисергә мәжбүр ҡылды. Һатлыҡ йәндәр көлдөләр һәм уларҙың ҡайғыһынан ҡыуандылар. Был эштең башында торған урыҫ яҡлылар: Киршмәнән — Мөхәммәт Шәрифи, Түбәләстән — Мәсғут, Аҡсар ауылына Ҡазандан килде улар. Шулай уҡ Нарыз Уразмәтов тигән берәү һәм уның кеүектәр хеҙмәт итте урыҫтарға. Хатта шуға тиклем барып еттеләр: үҙ әтрәттәрен төҙөп, бахыр мосолмандарҙы ҙур тырышлыҡ менән ауланылар һәм уларҙы урыҫ ҡулдарына һаттылар. Шулай уҡ Саратов яғынан пәйҙә булмыш казактар һәм мишәрҙәр, урыҫтарға тотоп биреү өсөн, дала мосолмандарын ауланылар (һуғыш суҡмарҙары тип йөрөттөләр уларҙы; *улар көслөк менән башҡорт ерҙәрендә ҡалды һәм бөгөн дә күп әле улар*); башҡорт ауылдарында берәүҙе лә тере ҡалдырманылар, бигерәк тә Ҡазан даруғаһында халыҡ аҙ ҡалды. Ҡалһа ла, ауыл һайын ике-өс кешенән артыҡ түгел. Ул заманда ун кешегә бер тун да, ун йортҡа бер балта ла булманы. Сәсеү өсөн орлоҡто ла Ҡазан еренән килтерҙек. Ауыр булды йәшәүе, тамаҡ туйҙырырлыҡ һис ни булманы, һәм шундай ҡара аслыҡ — әҙәм балаһы әҙәм итен ашай, тип һөйләнеләр. Ошо ауыр көндәрҙә мохтажлыҡтан дворяндарға ҡоллоҡҡа яҙылдылар. Дворяндарҙың ҡулында ҡолдар күп булды...

Сылбырлап бығауланған мосолмандар Минзәләгә күп килтерелде, бөтәһен дә төрмәләргә бырағтырҙылар, ә яугир егеттәребеҙҙе ер аҫты зиндандарына яптылар. Ҡала тышына алты мөйөшлө бина ҡорҙолар, һәр мөйөшөнә тимер ҡаҙыҡ һерәйттеләр. Урталыҡта торған бер ҡаҙыҡ әйләнәһенә бейек дар ағастары ҡуйҙылар. Шунан һуң музыка шаулатып, батыр мосолмандарҙы килтерҙеләр, артынса указдар уҡып, урыҫтар үҙ ҡатиллыҡ эштәрен башҡара башланылар. Иң элек беренсе һуғыш башлағанды ултырттылар урталыҡтағы осло ҡаҙыҡҡа, уның ярҙамсыларын әйләнәһендәге осло ҡаҙыҡтарға ултырттылар. Ҡаҙыҡ уларҙың яурынынан килеп сыҡты; ә үҙҙәрен ҡаһармандарса тотҡандарҙы киҫәктәргә тураҡланылар, аҙаҡ баштарын сабып өҙҙөләр. Ҡайһыларын ҡабырғаларынан тимер ырғаҡтарға аҫып, баштарын өҙә саптылар, бәғзеләрен таштар бәреп

үлтерҙеләр. Бер кемде лә аяманылар. Хоҙайым, урыҫ ҡулдарында ҡалғандарҙы ярлыҡа!

Мосолмандар Хоҙайға ялбарып ҡына йыуандылар. Язалауҙан азат булған ҡазан кешеләре, уржум сирмештәре үҙҙәренә башҡорттарҙың ҡатындарын һәм ҡыҙҙарын күпләп һатып алып, өйҙәренә алып ҡайтып киттеләр. Быларҙан тыш, Минзәлә ҡалаһы тышында күптәрҙе фронтҡа теҙеп ҡуйып, береһен-бер ҡалдырмай, мылтыҡтарҙан һәм туптарҙан атҡандар, тип һөйләнеләр.

Шул тиклем дә күп халыҡ ҡырылды ки, мәйеттәрен хайуан урынына сүплеккә ауҙарҙылар. Минзәлә йылғаһында боҙға мәке уйып, һәр ҡырҡ кешенән береһен генә ҡалдырып, утыҙ туғыҙын мәкегә батырҙылар. Мәйеттәр менән быуҙылар йылғаны. Шундайын да ҡот осорғос эштәр ҡылынды ки, әҙәм теле менән генә тасуирлап булмай уларҙы. Булғандарҙың йөҙҙән бер өлөшө генә мәғлүм ҡылынды бында... Ҡалған мосолмандарҙы, муйындарынан бер-береһенә бығаулап тағып, Ҡазанға ҡыуаланылар. Ҡазанға барып етә алмағандары юлда аслыҡтан һәм һыуһауҙан һәләк булды. Йығылғандарҙы ҡарауыл командаһы осло мөстәре менән сәнсеп үлтерҙе. Саҡрым һайын ун һәм унан да артыҡ кеше йығылды. Йылғаларға яҡын ебәрмәй һыуһатып, Ҡазанға килтереп үлтерҙеләр. Бер урыҫ ауылында ҡарауыл үҙе айырым йортҡа урынлашып, икенсеһенә башҡорттарҙы тултырып, тәҙрә ҡапҡастарын һәм ишектәрен ныҡытып бикләп, өйгә ут төрттөләр һәм өйҙәгеләрҙең бөтәһе лә утта янып һәләк булды.

Ошонан һуң әмер бирҙе урыҫтар: тере ҡалған башҡорттар ҡаҙнаға берәр ат тапшырырға тейеш. Даланың һәр башҡорто, бер ат тапшырып, яҙыулы ҡағыҙ алды, унда ни өсөндөр уны «хыянатсы-боласы» тип яҙҙылар. Урыҫтар яҡлы булған башҡорттарҙың һәр береһен ул ҡағыҙҙа «инабатлы башҡорт» тип нарыҡланылар. Ҡаҙнаға ат тапшырғанлығы тураһында ҡағыҙы булмаған башҡорттарҙы ҡулға алдылар ҙа һис бер аяуһыҙ рәүештә урыҫтарға тотоп килтерҙеләр. Һәм улар шунда һәләк булды. Шундайын да заманалар килде ки, әгәр мосолман ҡайҙа ла булһа урыҫ урамынан үтеп барһа, кесеһе лә, олоһо ла туҡманы уны, башына таш яуҙырҙы. Быларҙан тыш, ихтилал ваҡытында Тамъяндан һәм Ҡыпсаҡтан күптәр бәрелештәрҙән һуң ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ. — *Й.С.*) еренә ҡасты. Һуңғылары уларҙы, ике йөҙләнеп, ҡайғыларын уртаҡлашҡан булып: «Бахырҙар, урыҫ ҡулында интегәһегеҙ, һыуһынығыҙҙы ҡандырырбыҙ, тамағығыҙҙы туйҙырырбыҙ», — тигән булып ҡаршыланылар. Бахыр башҡорттар уларҙың ялған һүҙҙәренә ышандылар, ә ҡырғыҙҙар (ҡаҙаҡтар. — *Й.С.*), йәнәһе башҡорттар менән туғанлашҡан булып, уларҙың ҡоралдарын тартып алдылар, артабан үҙҙәренә эшләргә мәжбүр ҡылдылар, ә ҡатындарын тартып алдылар һәм мөлкәттәрен таланылар. Йәштәребеҙҙе эттәренән талаттылар, таштар бәреп һәм күсәктәр менән һуғып үлтерҙеләр. Китсентүрә менән Сура ошонда һәләк булды. Уларҙың ҡатындары фарсыларға (тажиктарға. — *Й.С.*), ҡараҡалпаҡтарға, төркмәндәргә һәм башҡа ҡырғыҙҙарға ҡалды. Уларҙы шуларға һаттылар, балаларын әсәләре, ҡайғыларына сыҙай алмай, үлтерҙеләр. Унда уларҙы ҡарғалар, һайыҫҡандар суҡыны, төлкөләр ашаны. Башҡорттар, шул тиклем дә ҡайғыға дусар булғас, урыҫтар яғына киттеләр, ҡайһылары далаларҙа күскенселектә ҡалдылар, ҡайһылары, ҡырғыҙҙар (ҡаҙаҡтар. — *Й.С.*) менән көрәште ташлап, улар араһында тыныс тормош

ҡорҙолар. Хәҙер ҙә уларҙың бер килкеһе осрай ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ. — *Й.С.*) араһында. Күренеп тора: ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ. — *Й.С.*) батырҙары — тамъян башҡорттарының нәҫеле улар».

Тимәк, был тәүәрихте, йөрәге ҡанһырап-һыҙлап, ихтилалда үҙе әүҙем ҡатнашҡан тамъян башҡорто яҙған, әммә исеме билдәһеҙ.

Секунд-майор Б.Л. Останков командалығындағы Яйыҡ казактары менән мишәрҙәр әтрәте бергәләшеп 1200 башҡортто бер юлы ҡырған урын (хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ер) төбәгебеҙҙең һыҙмаһында (һүр.6.1.) – тәре тамғаһы менән, ә Һаҡмарҙың һул ярынан ҡырғынсылар килгән юл пунктирлап күрһәтелде. Ҡорбанай тигән хыянатсы ҡырғынсыларҙы аҫтыртын килтергән йәшерен юлды түртөклө пунктирҙар менән билдәләнек; шул кисеү һәм уның аръяғындағы төбәк хәҙер ҙә *Ҡормантай* тип атала («Ҡорбанай»ҙан үҙгәргән булһа кәрәк). Хәҙерге Һунарсы ауылынан Сәнкем-Биктимергә табан Әселе үҙәкте сыҡҡас та, юлдың һул яғында һөргән ер эсендә (хәҙер инде һөрөлмәй — ауыл өйҙәре аҫтында ҡалып бара) эре-эре таштар менән уратылған, арҡырыһы — биш, буйы ун метр самаһындағы оҙонса-түңәрәк (овальный) уба, ә уның ян-яҡтарында шулай уҡ таш бураулы бәләкәйерәк ике уба бар ине — «Сәғир-Сағаид» зираты. Ҡайһы берәүҙәр уны, «Сағаид»ә һүҙен боҙоп әйтеп, «Сәғиҙә зираты» тип йөрөттө, шуға күрә унда, имеш, «атаһы менән ҡунаҡтан ҡайтып барышлайы юлда үлеп ҡалмыш Сәғиҙә тигән ҡыҙ күмелгән» (бер юлы өс зиратҡамы?!.), тип яңылыш һөйләне. Әммә зираттың бабаларыбыҙ ҡушып ҡалдырған ғәрәпсә исемендәге «Сәғир» — «ғазап уты», ә «Сағаид» — «бейек урын, уба» тигән һүҙ икән. Фани донъяла уҡ ғазап утында янып-язаланып үлеүселәрҙең — изге шәһиттәребеҙҙең уба-зираты, тимәк...

Мең дә ике йөҙ шәһит күмелгән был убаның эре-эре бура таштарын үткән быуаттың алтмышынсы йылдар уртаһында Хәмитов Миңнебай тигән кеше ташып алып, саҡ ҡына үрҙәрәк Әселе үҙәктең һул ярында ҡоролмош өйөнөң нигеҙенә

һалған (башҡорт маңҡортҡа әүерелә -- ата-бабалар тарихын

Һүр.6.1. Карталағы түңәрәк төртөклө пунктир -- Аҡһаҡтимер яуының юлы. Тәреле пунктир -- Кириловтың Ырымбур экспедицияһы юлы. Уҡлы һыҙыҡ -- батша ҡырғынсыларының Ҡасанҡый-Салаға (башҡорт яуының төбәгенә) уҙған юлы. 1. Сәнкем-Биктимер. 2. Ҡасанҡый-Сала -- батша ҡырғынсылары 1200 башҡортто ҡырған урын. 3. Ҡаçмарт йылғаһының иçке үҙәне. 4. Тәре-билдә -- Тирәкле йылғаһы янында Кирилов драгундары Килмәк-Абыз яуы менән һуғышҡан урын. 5. Тәреле түңәрәк-билдә -- Аҡһаҡтимер һәм Туҡтамыш-хан ғәскәрҙәре бәрелешкән урын.

тойомламай). Шул йылдарҙа Һунарсы ауылы Әселе үҙәктең уң ярынаса ҙурайып китеп, шәһиттәрҙең изге зираттарына еткерә яҙып кемдәрҙеңдер йорттары төҙөлгән һәм улар, изге зираттар, бура таштарының урланып бөтөүе сәбәпле, ер менән тигеҙләнгән -- зират булыуынан туҡтаған. Ошо көндә ул урынды ауылдың бер нисә ҡарты ғына (мәçәлән, минең замандаштарым Сөйәрембәтев Фәсхитдин, Ҡыуатов Атауылла, Мостряков Алексей-Лүңке — ғүмерҙәре буйына шул зиратты уратып үтеп ер һөргән тракторсылар) күрһәтеп бирә алыр ине (ул изге урынды 2003 йылдың июлендә ғаиләм менән ауылға ҡайтканыбыҙҙа баяғы уҙамандар менән берлектә урта тәңгәленә бүрәнә киçкәһе һалып билдәләп киткәйнек. Аҙаҡ 2008 йылда Фәсхитдин һәм Атауылла вафат булған тип ишеттем). Халҡыбыҙҙың ҡаны аҡкан изге зират мотлаҡ тергеҙелергә һәм унда мәңгелек матәм һәйкәле ҡуйылырға тейешле, тип һанайым.

Һаҙлыйылға буйындағы ҡанлы еңеүенән рухланған секунд-майор Б.Л. Останков үҙенең ҡырғын әтрәте менән май айының аҙаҡҡы аҙнаһында Һаҡмар менән Яйыҡ аралығынан үрләп китә лә 113 башҡорт ауылын яндырып, 200 башҡорттоң башына етеп ҡайта. Үçәргән ерендәге ҡырғын киләһе йылында ла шул рәүешле ҡоторона.

Баяғы секунд-майор Останковтың хисапнамәләре буйынса, Һаҡмар ҡәлғәһенән ул монаятлап юлландырған казактар һәм батша яҡлы *башҡорт ҡыпсаҡтарынан хасил 700 ҡырғынсы* 1737 йылдың август аҙаҡтарында Ағиҙел аръяғынаса дөрөп (хәҙерге Күгәрсен районында ултыраҡланған ҡыпсаҡтар), Нөгөш, Мәләүез йылғалары буйындағы ихтилалсы башҡорттарҙың ҡанын ҡойоп ҡайта.

2 сентябрҙә шул уҡ Останков ойошторған батша яҡлы (“доброжелательные башкирцы”) *700 башҡорт ҡыпсағы* (шуға тиклем Ырымбур арты далаларында йәшәгәндәр; үҙҙәре ҡырған ихтилалсы-үҫәргән башҡорттарының ерҙәрен батшанан бүләк рәүешендә алып, хәҙерге Йәнсура, Күгәрсен, Бөрйән райондарында ереккән ҡыпсаҡтар), 300 казак, бергәләшеп, баяғы Эйек тамағындағы Һаҡмар кисеүенән уң яҡ ярға сығып, Ҡаҫмарт һәм Инәк йылғалары буйында йәйләгән Алғушай батыр Наҙаровтың иләүенә ябырыла; ошо хаҡтағы урыҫса документтан өҙөктө тәржемәһеҙ бирәбеҙ: “Майор Останков 2 сентября из Сакмары писал: ...собравший он, майор, доброжелательных башкирцев з 700 же человек да яицких казаков с 300 человек, отправил на вора Алгишея по другую сторону реки Сакмары, о котором де есть известие, что кочует на реке Космарке и Оняку (дөрөҫө Инәк. – Й.С. [Материалы по истории Башкортостана, том VI, автор-составитель Н.Ф. Демидова. Уфа – 2002, №312, 475-енсе бит])”. Һөҙөмтәлә минең тыуып үҫкән төбәктең үҫәргәндәре йә ҡырылып, йә төрлө яҡҡа һибелеп бөтөп, бик һирәкләнеп ҡала, урындарына ерҙәребеҙгә баяғы батша яҡлы ҡыпсаҡтар килеп төйәкләнә (хәҙер һәр ауылда, тип әйтерлек, ҡатнаш йәшәйбеҙ). Соран йылғаһы буйы ҡыпсаҡтарының тап шул осорҙарҙа Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен, Көйөргәҙе һ.б. районларына, мәҫәлән, Көйөргәҙе йылғаһы буйына күсенеп килеп урынлашыуы тураһында уларҙың шәжәрәһендә мәғлүмәт бар (“Ватандаш” журналы №2/2001 йыл, 164-енсе бит). Батша ҡырғынсыларының ҡанлы язаларынан ҡасып киткән Үҫәргән ырыуы Бишәй араһы башҡорттарының бер өлөшө көнсығышҡа -- Урал тауҙарына барып һыйына, хәҙерге Салауат районында шулар нигеҙләгән Бишәйләр ауылы (ул исемде, боҙоп, Бишәүләр тип тә яҙып йөрөтәләр) әле лә бар. Был ауыл кешеләренең тап Үҫәргән бишәйҙәре икәнлеген абруйлы ғалимдар раҫлай: “V ревизией 1795 г. была зафиксирована деревня под названием **Бешевлярово.** Член-корреспондент РАН, профессор Р. Г. Кузеев на основании информации самих жителей этого селения считает, что часть рода бишей (Усерганского племени), продвинувшись на северо-восток Башкортостана с бассейна р. Сакмары, обосновалась на берегу р. Юрюзань и основала д. Бешевлярово. Два родовых подразделения в деревне называются бишей и бурес (буре - волк)”. Ҡарағыҙ: А.З. Асфандияров. История сел и деревень Башкортостана. Уфа “Китап” -- 2001, 112-нсе бит. Ошоноң һымаҡ уҡ, тарихи Башҡортостандың көнбайышындағы Минзәлә өйәҙендә йәшәгән, Аҡай Күсемов күтәрелешендә әүҙем ҡатнашҡан Тамъян ырыуы ла тулыһынса көнсығышҡа -- Урал артына китеп төйәкләнергә мәжбүр була.

Ырымбур ҡалаһын төҙөүгә ҡаршы күтәрелеш 1735 йылда беҙҙең Үҫәргән ерендә башланыуын, уның башында тәүгеләрҙән булып Үҫәргән ылыҫы

старшинаһы Алғушай батыр Наҙаров, Кәлсер ылыҫынан — Киддеш, Дыуандан — Солтан батыр Арыҫланбәков тороуын әйтеп үтәйек. Эйек тамағындағы Һаҡмар кисеүенә китеп барған Кирилов экспедицияһының юлына арҡылы төшөп, Вологда роталарын тар-мар ҡылыусы 2 — 3 меңлек башҡорт ғәскәрен дә Килмәк абыз, Бәпәнәйҙәр менән бергә Үҫәргәндән — Алғушай батыр, Тамъяндан — Сәйет бай, Ҡатайҙан — Көләүкәй, Йәнбәк, Күсәкәйҙәр юл башлап килтергән. Ихтилалсылар яуында батша ғәскәрҙәренә ҡаршы беҙҙең төбәктән йәнә Алғушайҙың улы Солтанаҡбирҙе, бер туғаны Морат Наҙаров, шулай уҡ Ишмәк батыр Теләшев, Зыянғол, Ишәй (бөтәһе лә Үҫәргән ылыҫынан), Сәнкем ылыҫынан Аҡбаш Солтан батыр (1738 йылдың 20 апрелендә яҙылған мәғлүмәт буйынса, шул йылдарҙа Ҡыҙыл йылғаһы буйында вафат була), Үтәғол бай тархан Шөкөров, Теләүембәт, Бужан бай, Усман батырҙар йәндәрен аямай һуғышҡан. 1737 йыл аҙаҡтарында бер нисә мең ихтилалсы-башҡорт ғаиләһен, ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйерҙең вәғәҙәләренә ышанып, ҡаҙаҡ урҙаһына алып сығып китеүсе һәм, баяғы тәүәрихтә яҙылған ҡаҙаҡ хыянатына дусар булып, ҙур яфа һәм юғалтыуҙарҙан һуң, ҡалғандарын Башҡортостанға ҡабат алып ҡайтыусы ла — Алғушай батыр Наҙаров.

Һунарсы ауылы осондағы Һаҙлыйылға яры башында Ҡасанҡый-Сала фажиғәһенең тере шаһиты — түбәһе күккә терәлгән, тамыры ергә көрмәлгән, дүрт кешенең ҡоласы етмәҫлек йыуан олонло баһадир Тирәк бар ине. 1965 йылда мин Өфөгә күсеп киткәс, бер дауылда төнө буйына шаулап, гөрһөлдәп ауҙы, тинеләр...

Мин дә бар был донъяла

Беҙ, Солтановтар, Сәнкем-Биктимерҙең тәрән тамыры.

Атайым Әҙеһәм Мөхәммәтсадиҡ улы 1895 йылдың иҫке стиль буйынса 8 февралендә Үҫәргән ырыуы аҫаба башҡорт ҡартатайым Мөхәммәтсадиҡ Әйүп улы Солтанов менән уның хәләл ефете — еребеҙгә ебәрелмеш мишәр ҡартәсәйем Бибилатифа Ямалитдин ҡыҙы Әбдрәшитова ғаиләһендә донъяға килгән.

Әсәйем Бибисадиҡа Ғәбиҙулла ҡыҙы Солтанова 1896 йылдың иҫке стиль буйынса 2 отябрендә Үҫәргән ырыуы аҫаба башҡорт олатайым Ғәбиҙулла Билал улы Солтанов менән үҫәргәнләшкән Бөрйән ырыуы аҫаба башҡорт оләсәйем Бибиғәфифә Мөхәммәтзариф ҡыҙы Байназарова ғаиләһендә тыуған донъяға. Оләсәйем (әсәйемдең әсәһе) Бибиғәфифә тәүҙә Абзан ауылының Хәйрулла Камалитдин улы Байназаровҡа кейәүгә сығып, унан айырылған да ҡатыны үлгән 40 йәшлек олатайым (әсәйемдең атаһы) Ғәбиҙулла менән 1895 йылдың 11 декабрендә — егерме ике йәшендә никахлашҡан. Шәжәрәмдең ир-ат быуынын барлағанда, атайым яғы ла, әсәйем яғы ла бишенсе быуындағы мәҙкүр Болаҡбайҙың туғыҙ уландары араһындағы Әбделмәмбәт менән Аҡкилде исемле бер туғандарҙан килә:

Һүр. 7. Ултыралар: атайым Әҙһәм, әсәйем Бибисадиҡа. 16.10.1931

1. Әбделмәмбәт — Әйүп Әбделмәмбәтов (1792) — Мөхәммәтсадиҡ Әйүп улы Солтанов (1846) — Әҙеһәм Мөхәммәтсадиҡ улы Солтанов (1895) һәм:

2. Аҡкилде (1773) — Билал Аҡкилдин-Солтанов (1814) — Ғәбиҙулла Билал улы Солтанов (1853) — Бибисадиҡа Ғәбиҙулла ҡыҙы Солтанова (1896)...

Нәҫелебеҙгә Болаҡбаев фамилияһын биргән Болаҡ батыр бабабыҙ иһә быуындар сылбыры аша туранан-тура Муйтән-бейгә барып тоташа:

Болаҡ — Иҫәнбирҙе — Күскенсе — Мусҡа — Сөйәлғужа — Үҫәргән — Ябынсы Яҫауыл — Һырыш-би — Һарыбаш-би — Тимерҡабыҡ-би — Арбан-би — Урал-би (Аралбай) — Манғут-би — Һеркә-би — Бүрекәй-би (Бүҙәк-би) — Шаҡмалы-би («Ҡасыр Улы») — Муйтән-би («Ҡасыр»)...

Атайым Әҙеһәм – герман һуғышы һалдаты

Бабам Ябынсы Яҫауылдың шанлы исеме тарихҡа ла яҙылған.

Ул тәүҙә йәш ваҡытында, урыҫ батшаһының ливон һуғыштарында уның ғәскәренә хеҙмәт итеп, яҫауыл дәрәжәһен ала. Һуңынан Ҡазан ханлығында үҙенең башҡорт ғәскәре менән даими хеҙмәттә була, Ҡазан ҡалаһы янында уның Ябынсы ауылы әлегесә бар, тиҙәр. 1552 йылда яуыз Иван Ҡазан ханлығын яулағанда Ябынсы Яҫауыл бабабыҙ үҙенең башҡорт ғәскәре менән Ҡазан ҡалаһын һаҡлауҙа ҙур ҡаһарманлыҡ күрһәтә (ул хаҡта Ә.В. Туғандың «Төрк һәм татар тарихы»н, минең «Башҡорт батыры Йеҙекәй (Едигей)» тигән хеҙмәтемде уҡып белергә мөмкин). Һәм уның төп-тамыры беҙҙең "Ҡасанҡый-Сала"ға бәйле икәнлеге мәғлүм...

Әсәйем Бибисадиҡа 1915 йылда буласаҡ халыҡ артискаһы Бәҙәр Йосопова һ.б. менән бергә өйәҙ ҡалабыҙ Орскиҙа мөғәллимәләр әҙерләү курсын тамамлай ҙа һуңынан бер нисә йыл балалар уҡыта. Шул йылдың 6 мартында ул Юнай ауылы Дәүләтғәли Нурзияғәли улы Ишкилдингә кейәүгә сыға, боронғо йолаға ярашлы, кейәү кеше йыл буйына кәләш ҡуйынына кәләштең ата йортона килеп йөрөй. Ауырға ҡалған йәш кәләш, атаһының йортонда килеш, 1916 йылдың 15 мартында Әхмәҙулла исемле улын таба, шунан һуң ғына Юнай ауылына килен булып төшә. 1917 йылда хәләл ефетен герман һуғышына алып китәләр, 1918 йылда уларҙың икенсе улы тыуа. Атай кеше, һуғышта аяғы яраланып, аҡһап ҡайтһа ла, оҙаҡ тора алмай — шул 1918 йылда, офицер булараҡ, Әхмәтзәки Вәлидовтың аҡ башҡорт армияһына алына һәм шунда китеп юғала. Йәшләй генә тол ҡалған әсәйем атай йортона ҡайтып китә, ләкин ҡайныһы менән ҡәйнәһе, бик ҡаты бәғерле кешеләр, киткән килен менән балаларына «малдан өлөш сығармаç өсөн», ике улын тиң тартып алып ҡалалар һәм аҙаҡ уларҙың икеһен дә ҡарамай үлтерәләр. Ауыр ҡайғыға һабышҡан әсәйем, хәләл ефетем Санияның ҡартәсәһе Бибисәрә әбей уны үҙе күреп-белеп һөләүенсә, атаһы Ғәбиҙулла өйөнөң урындыҡ башында, ҡара шәлен бөркәнеп, ҡалғый-ҡалғый, йөрәк өҙгөс һағыш менән сеңләп ултырыр ине, ти...

Һүр. 8. Атайым менән бер туған апайым Сәлимә абыстай

Атайым Әҙеһәм герман һуғышынан 1918 йылдың ҡышында — ҡыҙылдар һәм автономия яулаусы аҡ башҡорттар араһындағы ҡоралды алыштың иң ҡыҙышҡан мәлендә ҡайтып төшә. Ҡыҙыл ғәскәр башҡорт ауылдарын талай, һәр башҡортто автономиясы яуыз дошман итеп күрә. Атайым яңы ғына өйгә ҡайтып кергән, өçтөндәге һалдат хөлләһен дә һалмаған, әммә аяҡтарына ата-әсәһе оçта быймасынан баçтыртып әҙерләп ҡуйған өр-яңы аҡ быймаларҙы кейеп алған. Тап шул көндә ауылды ҡыҙылдар килеп баçа, «автономиясы башҡорт»тарҙы өйбөрөнсә йөрөп йәберләү башлана...

Атайымдың бер туған һеңлеһе Сәлимә абыстайым (һүрәттә) ошолай иçләр ине: «Ҡоралды ике ҡыҙыл әрмис ишекте тибеп асып, ажғырып килеп инде лә Әҙеһәм абзыйымдың яғаһынан алды: «Япфаймат башкир, тебе автономия нужна?! — Башы менән ишек төбөнә ҡаратып иҙәнгә һуҙып һалдылар ҙа: — На тебе автономия!» — тип башы тәңгәленә аттылар, аяғындағы быймаларын һалдыртып алып сығып киттеләр. Мылтығының пүләһе абзыйымдың сикәһен һыҙырып үтеп, ая ҡалынлыҡ ҡарағас иҙән таҡтабыҙ буйҙан-буй шартлап ярылды (мин шул ярыҡ иҙәнле өйҙә үçтем. – Й.С.), ә абзыйым ҡото осоуҙан ай самаһы ауырып ятты»...

Атайым кеүек үк, герман фронтынан яңы ғына ҡайтып төшкән, бөтә ғаилә ҡыуанышып сәй табынына ултырыр алдынан ишек алдында сайынып торған икенсе бер һалдатты, ҡыҙылдар килеп сығып, бер һүҙ ҙә әйттертмәй, «автономист башҡорт» тип атып киткәндәр... Ҡатыным Санияның бабайҙарының

(олаталарының) береһен, ябай ауыл кейемендәге мишәрҙе, ике ҡыҙыл әрмис урамда яғаһынан бөрөп алып: «Кем һин? Башҡортмо, әллә татармы?» — тип аҡырғас, теге бахыр ҡурҡышынан ни тип әйтергә лә белмәй: «Башҡорт» — тип яуаплаған икән, стенаға килтереп терәгәндәр. Атылырға торғанында өсөнсө бер ҡыҙыл әрмис — күрше урыҫ ауылындағы ызнакумы пәйҙә булып: «Һеҙ нишләйһегеҙ? Башҡорт түгел, ә беҙең һымаҡ уҡ килмешәк мишәр бит ул!» — тип, аралап алған әжәлдән...

Ә мин шуларҙы даими хәтерләткән, пуля тейеүҙән ысынлап та «буйҙан-буй шартлап ярылған» иҙән таҡтабыҙҙы күреп, өҫтөнән йөрөп үҫтем һәм 1965 йыл Өфөгә күсеп киткәнебеҙсә буйлатып атлап йөрөнөм...

Атайымды ла оҙаҡламай башҡорт армияһына саҡыртып алалар һәм ул, Татар Ҡарғалыһы янында тир (тиф) сиренән йығылғанынса, Муса Мортазин бригадаһында йөрөп һуғыша. Әсәйемде ул, шул яуҙарҙан әйләнеп ҡайтҡас, егерменсе йылдар аҙағында ғына алған булырға тейеш (аныҡ белмәйем), сөнки әсәйемдең унан тапҡан беренсе балаһы, үсмер сағында үлгән Нәзһәт абзыйым, 1927 йылда донъяға килгән, ә мин иһә, икенсе бала булып, 1932 йылдың 3 декабрендә тыуғанмын. Минән һуң Нажиә тигән һеңлем булып үлгән, ә Сөйөндөк исемле туптай тәгәрләп йөрөгән ҡустыҡайым, иҙәндә имгәкләп йөрөгән сағында бөтәбеҙҙең күҙе алдында өҫтөнә ҡайнап ултырған самауыр түңкәрелеп йән бирҙе (уның йән әсеһе менән ҡысҡырыуы, ошо етмеш йәшемдә лә, әле булһа ҡолаҡ төбөмдә һәм, иҫемә төшкән генә һайын, йөрәккәйем ҡанһырай)...

Шулай итеп, әсәйемдең бөртөк-бөртөк балаларынан яңғыҙым иҫән ҡалғанмын (ошо юлдарҙы яҙҙыртырға Хоҙайым аралағандыр). Ләкин Ғазраил әфәнде салғылы ҡулын һуҙып ҡараған миңә лә: өс айлыҡ ҡына сағымда үпкәм шешеп, саҡ-саҡ олаҡмағанмын — Бибиғәфифә оләсәйем көн дә, көн дә күкрәгемә һары майлы ҡағыҙ ябып, ошо көндәр өсөн ҡурсалап ҡалған...

Тап шул мин тыуған йылда атайым өй һатып алып, ауыл советлы, почталы, магазинлы, фельдшерлы һәм башланғыс мәктәпле ҙурыраҡ ауыл Һунарсыға күскәнбеҙ. Төбәктәге бөтә ваҡ-төйәк колхоздарҙы бергә ҡушып, «гигант колхоз» ойошторолғас, атайымды баш ҡалабыҙ Өфөлә ашнаҡсылыҡҡа өйрәтеп ҡайтарғандар һәм ул «гигант колхоз» үҙәге Әрсүндә (хәҙерге Башҡортостандың «Һаҡмар» совхозы) асылған ашхананың баш ашнаҡсыһы булып шөһрәт ҡаҙанған, ә беҙ ауылда ҡалғанбыҙ. «Гигант колхоз» күп тә тормай тарҡалғас, атайым, ауылыбыҙға ҡайтып, магазинға һатыусы булып урынлашҡан, ләкин эштәре гөрләп бармаған, буғай, сөнки өйөбөҙгә ваҡытлыса һаҡларға алып ҡайтҡан ҡаҙна аҡсаһын урлатып, әсәйемә шул сумманы дебет шәлдәр (“Оренбургские платки”) бәйләп һатып йыйған аҡсаһынан түләргә тура килгән.

Атайымды үҙем күреп белгән ике эпизод ҡына ҡалған иҫемдә.

Яңы яуған йоҡа ғына ебешкәк ҡарҙы ишек алдында тутыҡ ҡалай киҫәге менән көрәп уйнап йөрөгәнемдә, Йылайырҙа ағас ҡырҡып ятҡан атайым пар ат егелгән оҙон арбаһында дөбөрҙәп ҡайтып керҙе; ҡыуанып ҡаршы йүгергәйнем, һөрлөгөп йығылып, тутыҡ тимерем һул ҡашымды зәһәр ярып ебәрҙе (ғүмерлеккә ҙур бирсәләнеп ҡалды)...

Оһолһоҙлоғом арҡаһында алған тәрән бирсәләрем эйәгемдең уң яғында (әсәйем менән бер туған Хәбибулла абзыйым Орскиҙан уйынсыҡ итеп алып ҡайтҡан, ҡыҙыҡтырып өҫтәлдә ятҡан электр лампаһын үрелеп алайым тигәнсе, өҫтөнә йығылып ҡырҡылдым), уң беләгемдең һум итендә лә иҫтәлекле һаҡлана (туғыҙ йәшемдә Андижан ҡалаһында, әсәйем әйтмешләй, ҡойма буйынан кәзә тәкәһеләй ырғаңлап барып, тутыҡ ҡаҙауҙан ярҙырттым). Ләкин миндә Хоҙайҙың үҙенән бирелгән бирсә лә бар: һул ҡулымдың һуҡ бармағының төп быуыны ҡырында серле Ярым Ай һәм уның эсендә уҡ башағы тамғаһы (шундай тамға ауылыбыҙҙағы минән 2 — 3 йәшкә өлкән Йәнбирҙин Нәзһәттә лә күрҙем, ул аҫылынып үлде).



Һүр. 10. Йыһат менән ике туған ҡустыһы Фәрит Һибәтулла улы Солтанов. 27.04.1937

Атайыма бәйле икенсе эпизод — һуңғыһы һәм бала аңына аңлашылмаҫ шомлоһо. Атайым оҙон һикелә һуҙылып ята, танауының ике тишегенә лә сыбар гәзит ҡағыҙы төрнәп тығылған. Ҡағыҙ бөкө ысҡынһа, танауынан ҡан бәрә... Шунан һуң мин, үҫә төшкәс әсәйемдән һорашып, уның 1936 йылда Ырымбурҙа бөйөрөнә хирургия операцияһы яһатырға китеүен һәм шул операция өҫтәлендә вафат булыуын белдем. Мәйетен ауылға алып ҡайта алмағандар, ә барып ерләшеүсе булғанмы, юҡмы — белмәйем (әсәйемдән дә, яҡын ағаларынан да төпсөнөргә ҡыйыулығым етмәне). Атай тауышы ла, һүҙе лә иҫемдә ҡалмағанлыҡтан, Ырымбурға китеренән элек районыбыҙ үҙәге Йәнсура больницаһынан әсәйемә «ғәрәпсә» яҙған бер открытка-хатындағы һүҙҙәренә үҙенең ауыҙынан ишеткәндәй ҡарайым. Өйҙә атайҙың паспорты ла һаҡлана ине, уны әсәйем, ниңәлер, утҡа яҡты... Һәм үҫмер сағымдан уҡ үҙем ҡуйын кеҫәмдә йөрөтөп туҙҙырған аҡса һалғыс күн кеҫәлеге (кошелогы) ғына бар...

Мин иҫ белгәндән әсәйем ауылыбыҙҙың фельдшерханаһында атайымдың дуҫы Илья Дмитриевич Пудовкин тигән ҡарт фельдшер ҡулы аҫтында санитарка булып эшләне. Алған саҡ ҡына аҡсаһы ҡышҡылыҡ утын-бесәнгә һ.б. китеп торғанлыҡтан, саҡлы-соҡло йәшәнек. Колхозда эшләмәгәс, ауырыған һәр береһе әсәйемә йүгереп килһә лә, беҙҙе һанға һуғыусы һирәк ине. Мәҫәлән, тиңдәш дуҫтарым бер заман колхоз балалар баҡсаһына урынлашып, шунда ашап-эсеп, күҙҙе ҡыҙҙырткыс ҡыҙыл шаҡмаҡлы күлдәк-ыштан кейеп йөрөр булды, ә мине алманылар, сөнки колхозсы балаһы түгел. Әсәйем, кооператив аша һоратып, ул саҡта бик затлы һаналған патефон ҡайтартһа ла (иҫ киткес мөғжизә ине!) уны, беҙгә тәтетмәйенсә, арғы урам осондағы бер колхозсы ағайға һаттыртылар. Утын-

бесән килтертергә ылау бирмәй этләнеләр. Ихатабыҙҙың кәртәләре сереп бөтөү сәбәпле, ишегебеҙ алдынан уҡ үтәнән-үтә юл һалып, ат-арбалары менән дөбөр-шатыр тура елдереп йөрөнөләр. Искәндәр исемле бик мыҡты, һәйбәт олатайҙың бер саҡ, утын киҫкәндә тубыҡ бөгәренә яңылыш балта сабылып, ҡаны сәптергән яраһын услап тотоп килеп инеүе, өйөбөҙҙә әсәйемдән бәйләтеп һәм еҙ ҡомғаныбыҙҙан еҙ әләгәнебеҙгә йыуҙыртып ултырғаны хәтеремдә. Бына бер көн ишек төбөндә ҡалған, ата-баба мираҫы булған шул еҙ ҡомғаныбыҙҙы ошо яғымлы олатай арбаһының тәгәрмәсенән иҙҙертә тапатып уҙҙы (йәмшәйгән ул ҡомартҡыбыҙ әлегәсә үҙемдә)...

«Кендегебеҙ берешкән», һәр саҡ бергә уйнай торған иң яҡын өс дуҫым бар ине: Атауылла Ҡыуатов, Миңлеғәли Байназаров, Володя Пахомов. 1939 йылда колхозыбыҙ «полуторка» тигән йөк автомобиле һатып алып, Володьканың атаһы Пахомов шуны йөрөтөүсе булып килгәйне, араҡы эскәндең иртәгәһенә ул похмелдән (бахмурҙан) ярты стакан кәрәсин күтәреп эсә лә һин дә мин кеше була ла китә, тип һөйләйҙәр ине. Володька менән бик тиҙ дуҫлашып өлгөрҙөк, ә мин иһә аңғармаҫтан урыҫ телен һыу эскәндәй отоп алдым (һуңынан, әҙәби әҫәрҙәр яҙа башлағас ҡына, башҡортса уйларға ҡамасаулағанын тойоп, ул телде шаҡтай онотоуға өлгәштем). Автомобиль урамдан дырылдап килеп сыҡһа, көллө ғаләм артынан йүгереп ҡалыр, йәшел буяулы таҡта йәшнигенә тейәлеп елеүселәр үҙҙәрен иң бәхетле һанар ине. Ләкин хозурлыҡтар күпкә барманы: аккумулятор тигән нәмәһе бүҫкәреп, машинабыҙ ил теләгән саҡта һис кенә лә дырылдамай — насар аттай сығынсылай башланы. Моронсайына тағылған ҡайыш мисәүгә биш-алты алашаны егеп, ат өҫтөндәге һыбайлылар һайт-һайтлап саптыртып байтаҡ һөйрәткәс кенә, машинабыҙ бер-ике сөскөргөләп, ҡәҙимгесә үҙ алдына йүгереп китер ине...

Һүр. 11. Солтанов Хәбибулла Ғәбиҙулла улы (уңда) һәм Абдрашитов Хәйрулла Ғибаҙулла улы. Андижан, 15.09.1938.

Әммә уның кузлаһында кинәнеп йөрөү бәхете теймәне миңә. Иләҫләнеп шуға иғтибар иттем: резинкә тәгәрмәсле был мөғжизә, артынан саң болоттары борҡотоп, гелән генә күңелемде тылсымлы илдәй арбаған, оләсәйемдең һәм әсәйемдең теленән төшмәгән, ҡыҙыл ҡалай түбәле өйөбөҙ кире әйләнеп ҡайтыуыбыҙҙы өҙөлөп көтөп торған һәм Ғилаз бабайым менән Мәликә әбейем йәшәгән Сәнкем-Биктимер яғына дөнә ине. Бер мәл ауыл осонаса артынан йүгереп барҙым да күпереп ятҡан юл саңына һырлы матур биҙәктәрен һалып семәрле таҫмалай һуҙылған эҙен буйланым да киттем. Дүрт саҡрымды ҡайһылай атлап уҙыуым, нисек барып етеүем иҫтә ҡалмаған. Моңайып миңә бағып торған өйөбөҙ күршеһендәге өйҙә — атайымдың әсәһе (ҡартәсәйем)

Бибилатифа мәрхүмә менән яҡын туған Ғилаз бабайым менән уның хәләл ефете — әсәйемдең әсәһе (оләсәйем) Бибиғәфифә менән бер туған Мәликә әбейемдәрҙең һыйлы табынында рәхәтләнеп ҡаймаҡ ялап ултырһам, дөмә ҡараңғы урам яҡ тәҙрә ҡапыл туҡ-туҡ ҡағылды ла тулҡынланыуҙан һулышы ҡыҫылған әсәйемдең хафалы тауышы ишетелде: «Апай, Йыһат улым бындамы?..» Донъялағы яңғыҙ ғына улын юғалтып дүрт саҡырым йүгергән әсәнең ауыр хәлен хәҙер генә аңлайым...

Әсәһе Фатима инәйем яғынан яҡын туғаныбыҙ — сәсәк ауырыуынан һуң шаҙра битле Сабит ағайым Үтәбаев бар ине Ҡунарсыла (Бөйөк Ватан һуғышында ятып ҡалды, әсәйем уның исемен үҙенең ейәненә — минең улыма ҡушты). Ҡаҙаҡ арбаһының төбөнән төшөп ҡалмыш шаҙра битле бер малайҙы юлдан табып, Рахманғол исемен ҡушып, үҙҙәренең улы итеп аҫырап үҫтергәндәр. Сабит ағайым шул йәйҙә, сирек шешә һәм күпмелер аҡса тоттороп, Рахманғолдо ҡымыҙға йәйәүләткәс (Сәнкем-Биктимерҙәге буш торған өйөбөҙҙө колхоз ҡымыҙхана итеп файҙалана, ә Мәликә әбейем ҡымыҙсы ине), мин эйәрҙем дә киттем. Ҡымыҙ алып ҡайтып килешләй, иҫке Ҡасанҡый-Сала зираты тәңгәлендә уңға ҡайырылып, тирмән быуаһы алдындағы йәйрәү һыу ситендә хәл алырға ултырҙыҡ — бик эҫе ине көнө. Сарсап килгән Рахманғол, ярға ятып һыу эсәһе урынға, сирек шешәнең гәзит ҡағыҙлы бөкөһөн тешләп һурып алып, байтаҡ ҡына ҡымыҙҙы ҡарынына ғорҡолдатып бушатты, миңә лә бер уртлатты ла шешәнең бушаған урынына быуанан һыу тултырҙы. Бәләкәс инем, һис ни өндәшергә башыма килмәне, әммә сабый күңелемдә юйылмаҫлыҡ ҡара тап ҡалдырҙы был... Рахманғол, бауыры аҫтынан ел үткәрерлек буйға ҡалҡынғас, барыбер үҙенең ҡаҙаҡ далаһын юҡһынып, Яйыҡ аръяғына ашты (ә ир еткәс бер килеп әйләнде, шулай ҙа).

Ауылыбыҙҙағы йәнә лә бер яҡын туғаным Камалитдин олатай Солтанов, үҙенең ишле балалары ҡатарына ҡушарлатып, сабый сағынан аҫырап үҫтергән һәм башҡортҡа әүерелгән Лүңке тигән урыҫ малайы ла бар (уға арнап, «Ленька — Лүңке» тигән шиғыр яҙғанмын), әле булһа Ҡунарсыла Алексей Николаевич Мостряков атлы бынамын тигән башҡорт уҙаманы көйөнсә йөрөй...

Шул йылдың көҙөндә Ленинград ҡалаһы яғында әллә ниндәй фин һуғышы ҡабынып, рәхәтен бер йыл да күрә алмаған баяғы сығынсы автомобилебеҙҙе йөрөтөүсеһе Пахомов ағай менән ҡуша фронтҡа алып киттеләр ҙә икеһе лә әйләнеп ҡайтманы шунан. Володька исемле дуҫыбыҙ ҙа әсәләре менән бергә күсенеп китте ҡайҙалыр.

1939 йылғы уҡыу йылында, тейешле һигеҙ йәшем тулмаһа ла, мәктәбебеҙгә башҡалар менән бергә ныҡышып барып ингәйнем һәм, ныҡышып йөрөй торғас, уҡырға ҡалдырылғайным (латинса әлифбаны шунда танының). Йәйге каникулда беҙҙе, бөтә мәктәп уҡыусыларын, Буденныйса оло мыйыҡтар үҫтергән олпат һынлы колхоз бригадиры — баяғы Искәндәр олатай Һаҙлыйылға башындағы ҙур баҫыуға тары ерен утатырға алып барҙы, иртәнән кискәсә тырышып сүп үләндәрен йолҡтоҡ, тамағыбыҙ кипкәндә Һаҙлыйылға ситенә ятып һыу эстек. Көн төшлөктән ауышҡанда Искәндәр олатай ауыл яғынан кире әйләнеп килеп, эшебеҙҙән ҡәнәғәт булып, ҡайтҡас та бөтәбеҙгә уның йорт ҡапҡаһы алдына әсәйҙәребеҙҙең яулығын тотоп килергә ҡушты. Унда йыйылған тиҫтерҙәрем янына

мин барып еткәндә олатайыбыҙ, ҡапҡаның арҡыс ағасына тимер бизмән аҫҡан да, эргәһендәге бүҫкәрәк тоҡтан һоҫоп алып, килгән беребеҙгә тауыҡ күкәйе эсендәгеләй сағыу сөм-һары төҫтәге тары ярмаһын берәр ҡаҙаҡтан (дүрт йөҙ грамм) үлсәп өләшеп тора, был мөғжизәгә ышанмайыраҡ аптырап ҡалған миңә лә ул шундай уҡ тос өлөш сығарғас һәм яулығымды бөрөп төйөнсөкләп тә биргәс, түбәм күккә тейерҙәй ҡыуанып йүгерҙем — колхозыбыҙға үҙ ғүмеремдәге тәүге күрһәткән хәләл хеҙмәтем һәм хәләл эш хаҡым ине был...

Китәбеҙ Үзбәкстанға

Күңелле генә уҡып йөрөгәнемдә, беренсе кластан һуң мәктәбебеҙҙән тайырға тура килде — тол ҡатын хәлендә кәмһетелеп йәшәүҙән тамам интеккән әсәйем, Андижан ҡалаһында милиция бүлеге сәркәтибе булып эшләгән, әсәйемдең бер туған ҡустыһы Хәбибулла абзыйымдың саҡырыуы буйынса, Һунарсылағы өйөбөҙҙө Байназаров Әхмәҙулла тигән ағайға һатып, минең яратҡан йондоҙҡашҡа ҡыҙыл һыйырыбыҙҙы (“Һыйыр тураһында йыр” тигән хикәйәм бар) Сәнкем-Биктимерҙәге Ғилаз бабайымдарға ҡалдырып, ҡаралтыларҙы төйнәп багажға һалып, ә «Зингер» тегеү машинаһының киндер сепрәккә төрөлгән өҫкө өлөшөн әсәйем ҡулына тотоп, Бибиғәфифә оләсәйем менән мине һәм беҙгә тағылып шул яҡтағы туғандарына юлланыусы Әбдрәшитова Миңнура апайҙы ла эйәртеп, алыҫ сәфәргә сыҡты. Шуныһы иҫтә ҡалған: колхоздың көлтә арбаһылай һелкенеп тә шығырлап барған ағас вагондың сумаҙандар һала торған иң өҫкө буш һәндерәһенә йоҡларға менгәнемдә ағас һаплы салғы бәке табып алып шатландым — үҙ ғүмеремдәге беренсе бәкем ине был...

Андижан ҡалаһының иҫке шәһәрендә гүзәл-бейек манаралы ямиғи (соборный) мәсет янындағы (совет хакимиәте был ҙур майҙанлы һоҡланғыс комплекстан «айҡау-сайҡау баҙары» яһағайны, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында унда фронт өсөн кейем тегеүсе фабрика урынлашты) 2-нсе Пилләкәш[16] урамында Арипжан әкә тигән үзбәктең бейек балсыҡ диуарҙар менән ҡоймаланған иркен ихатаһындағы шулай уҡ балсыҡтан буралған боронғо атхананың икенсе ҡатында ҡасандырғы ат ҡараусылар торлағына фатирға урынлаштыҡ. Әүәлге үзбәк йорттарында өй йылытҡыс мейес тигән нәмә юҡ — иҙән уртаһына дүрткелләп ҡаҙылған соҡор өҫтөнә дүрт тояҡлы тәбәшәк өҫтәл ҡуйып, уға оло юрған (үзбәксә “күрпә”) ябып, тыштағы усаҡтан сүлмәккә һалып алған тере ҡуҙҙы соҡор уртаһына ултырталар ҙа ғаилә ағзалары бөтәһе тиң өҫтәл тирәһенән юрған

Һүр. 12. Йыһат. Андижан, 07.07.1941

[16] Пилләкәш — ебәк ҡорто аҫыраусылар.

аҫтына (соҡорға) аяҡтарын тығып, йылынып ултыралар йәки, юрған ситен эйәктәренәсә тартып, шул ятҡан урындарында йоҡлап ҡалалар. Аяҡтары йылынһа ла, арҡаларынан һыуыҡ үтеп, ҡара көкһәү менән ауырып үләләр, ти торғайны медицинанан хәбәрдар булған әсәйем. Ысынлап та, ырашҡылы-һыуыҡ февраль айы еттеме, йүткереп үлә башлайҙар — быны бөтә мәхәлләне яңғыратып ҡатын-ҡыҙҙарҙың сеңләүенән беләбеҙ. Сеңләүҙең алыҫҡа ишетелерлек көслө булыуы маҡтала.

Беҙҙең торлаҡта Рәсәйҙең ябай тимер мейесе — «буржуйка» ҡуйылған, һыуыҡ айҙарҙа ғузапая (мамыҡ һаламы) яғып йылытабыҙ өйҙө. Әсәйем көн дә баҙарға барып, бер бәйләм ғузапая һатып ала, уны ялланып эшләүсе олпат үзбәк ағай арҡаһына йөкмәп килтереп китә. Әммә өй йылыны тотмай, өшөйбөҙ.

Яҙғыһын йонсоуҙар онотола, ихата ожмах баҡсаһына әйләнә. Төрлө емеш ағастарын, ғәжәп хуш еҫле роза гөлдәрен һуғарып, ихатаны уратып арыҡ аға, дүрткелләп ҡаҙылған һыу йыйғыс хауздары (бассейндары) тирә-яҡҡа һалҡынса сафлыҡ бөркөлдөрә, ихатаның беҙгә ҡаршы төпкөл яғында иһә хужаның шул уҡ балсыҡтан бейек итеп, эсле-тышлы күркәм биҙәктәр һалып эшләнгән йорто, диуарындағы сөйөндә иһә ытырғаныс саяндарҙы һалып тонсоҡторған мамыҡ майлы быяла шешә аҫыулы тора (кешенең саян саҡҡан урынын шул майҙы һөртөп дауалайҙар). Беҙҙең яҡлап уң ҡулдағы диуар буйында нан (көлсә) йәбештереп бешермәле әҙәм һыйырлыҡ ҙур көршәк мейес (тәндер), ә арыраҡ мөйөштә балсыҡтан дөйөм бәҙрәф, хәҙерге заман туалет ҡағыҙы урынына унда эстәге бер һикәлтәлә — ваҡ ҡына итеп кителгән балсыҡ киҫәктәре... Елле-дауыллы төндәрҙән һуң иртәнсәк тышҡа сыҡһаң, арыҡ (канал) өҫтө тулып донъялағы иң тәмләнеп бешкән алмалар аға — мин алып ашай инем. Ихатаның бәҙрәфкә ҡаршы яҡ мөйөшөндә ҡуш йоҙроҡтай эре алмалар биргән, ләкин тамаҡты ҡурыуы (быуыуы) сәбәпле «буҡаҡ алма» аталып, ашарға ярамаған шаҡтай йыуан олонло ҡарт алмағас бар ине, төнгө дауылдарҙың береһендә ул биленән шартлап һынды. Иртәгәһен хужабикә

Һүр. 14. һулдан уңға: Йыһат, Бәхтиямал еңгәм, Ринат, Фәрит Солтановтар һәм Ғәйникамал еңгәй Мусаҡаева. Андижан, 1941.

Мотабархан апа оләсәйемә килеп, ҡото осоп илай-илай: «Бынан егерме йыл элек вафат булған ҡайным миңә асыуланған — төндә ҡайтып, зил-зилә ҡуптарып, буҡаҡ алманы ауҙарып китте»... — тип зарланды, асыуланған мәрхүм ҡайныһының күңелен табыу өсөн, уның рухына баяғы тәндерҙә өс тәүлек буйына

сыраҡ (факель) яндырып тотто (хәҙер белеүемсә, утҡа табыныусы сурашторасылар дине ҡалдығы).

Андижанға “Нужа бабай” ҡыуып килтергән яҡташтарыбыҙ байтаҡ, бигерәк тә, үзбәккә барып, биш-алты балалы булғас, үзбәк ире балсыҡ диуар араһында ташлап китеп, илашып йөрөгән татар ҡатындары йыш осрай ине. Үҙебеҙҙең яҡтан килеүселәрҙең күбеһе беренсе итеп беҙҙең өйгә һуғылалар ҙа милиция бүлегендә мөһим эш башҡарған Хәбибулла абзыйымдан паспорт тигән нәмә алышып биреүен көтөп яталар ине. Шундайҙарҙың бер нисәһенең ҡыҙҙары (мәҫәлән, шаҙра битле Ғиззәт ағайҙың ҡыҙы Зөбәржәт) менән дуҫлашыуым, иҙәнебеҙҙә ырғый-һикерә уйнауыбыҙ хәтерҙә. Үҙебеҙҙең ихаталағы Тажихан, Мәйсәрәхан исемле үзбәк ҡыҙҙары менән дә бик дуҫ инем.

Ә быңдағы минең икенсе өйөм — ҡаланың арғы осондағы Һибәтулла (әсәйемдең бер туған ҡустыһы) абзыйымдың беҙҙеке кеүек үк шөкәтһеҙ генә фатиры. Ул да милицияла эшләй, Бәхтиямал еңгәйем иһә Фәрит, Ринат исемле ҡустыларым менән өйҙә генә хужабикә булып ултыра. Бигерәк тә Һибәтулла абзыйымдың патрондарҙан бушатылған, ҡара ҡарға һыртылай йылтыраған оло алтатарын тотоп ҡарау бик ҡыҙыҡ ине миңә.

Фәрит ҡустым йыш ҡына, аҡса ялбарып, атаһының быуынына ҡорт булып төшә (ә мин өйҙә лә бер кемдән дә бер нимә лә һорамаҫҡа күнеккәс, сәйер күренә ине). Атаһы биргән һумлыҡ ҡағыҙҙы усына йомарлап, икәүләшеп яҡындағы «Пьяный базар»ға[17] йүгерәбеҙ, тәмле лимонад алып эсәбеҙ.

Бильдинский тигән, Иҫке һәм Яңы ҡаланы тоташтырған, ике яғына арыҡты тирәсләп бейек тополдәр үҫтерелгән хәтһеҙ оҙон урамды буйлап, ҡаланы урталай бүлеп үткән тимер юлды аша атлап, аҙнаһына бер нисә тапҡыр барып әйләнәм уларға. Әсәйем дә, сөмкә тотоп, Урта Азия эҫеһендә талсыға-талсыға, йыш тапай был урамды — ашар аҙыҡты Яңы ҡалалағы махсус милиция дөкәненән («закрытый магазин»дан) һатып алып ҡайта, ҡайһы саҡ уның яурынына арҡылы һалынған оҙон килбәтле үзбәк ҡарбузы ла була. Балаҡтарын һәм еңдәрен төрнәгән ялан аяҡлы, мыҡты кәүҙәле үзбәк ағай иртә-кисен Бильдинский урамға, оло күнәге менән аҙымы һайын арыҡтан һыу һоҫоп алып, тигеҙ итеп йәйелтә һибеп, һауаны сафландыра, рәхәт һалҡынлыҡ тарала. Елле көндәрҙең береһендә күҙем алдында тополь ауып, аҫтында ҡалған йәш кенә бер урыҫ егете башы ярылып үлде...

Бильдинский урамынан уңға боролоп, иҫке күсә (урам) буйлап китһәң, һул яҡта — бейек диуар менән уратылған иҫке зират. Уның төрлө сағыу төҫтәргә биҙәкләп эшләнгән һәм даими бикле торған дәү ҡапҡаһы үҙенең гүзәллеге менән хайран ҡалдыра ине. Бына шул изге сихриәттең теге яғында, диуары емерек урындан зиратҡа кереп, һис нәмәгә иҫтәре китмәгән ҡиәфәттә кесе һәм оло ярауҙарын итеп ултырыусы үзбәк нәҫелле ир-аттың был йәмһеҙ ҡылығын башыма һыйҙыра алманым...

Тимер юлды арҡылы сығып «Пьяный базар» яғына бер уҙғанымда иһә рельс буйында ҡара мазутлы шпалда муйынынан башы ҡырт-өҙөлгән урыҫ ағайҙың

---

[17] Иҫерек урыҫтар гел айҡалып йөрөгәнгә шулай ҡушылғандыр.

күҙәһен күреп тетрәнем, шунан биреле ғүмерем буйына рельстәргә һәм шпалдарға ытырғанып ҡарайым...

Үҙенсәлекле үзбәк тормошон сәйерһенеп күҙәтеп йөрөр инем. Ҡатындары ирҙәренең баҙарҙан нан (көлсә) йәки ит, дөгө, йәшелсә алып ҡайтыуҙарын диуарҙарынан сыҡмайынса сабыр көтөп, әсе ҡатыҡ менән баш йыуып (сәсте оҙон үҫтерә) һәм сәс тарап, йәки бала ҡарап өйҙә ултыра, сыҡҡанда ла йөҙө кешегә күренмәҫлек ҡара ҡыл иләкле бөркәнсек — пәрәнжә бөркәнеп китә (совет ҡанунына ныҡлы таянған йәштәр генә йәшермәй ине йөҙҙәрен). Һәр ихатала опиум мәге үҫә, уны ҡуҙлы «хур-хур»ға (ҡалъянға) һалып төтөнөн тарталар, бишектәге сабый балаларына ла мәк ҡайнатып эсерәләр — иламай йоҡлай ҙа ята. Бишек тигәнең — төбөн тишеп сүлмәк ҡуйылған бәләкәй генә бәүелтмәле карауат — яраузары шул сүлмәккә йыйыла. Сабыйҙы салҡан һалып, ҡуҙғалмаҫлыҡ ныҡ итеп биләүләйҙәр (бығаулайҙар, тип әйтке килә), шуға күрә үзбәктәрҙең башы оҙонә-осло һәм арттан ялпаҡ булып боҙолоп үҫә. Хәлле ҡатын-ҡыҙҙарҙың аҫыл сеүәктәренең табандары баҫҡаны һайын ғыршылдап (беҙҙәге саҫкау ҡар шығырлағандай) тауыш бирәкәй итеп тегелгән — ирҙәре һәр баҫҡан аҙымын белеп торһон өсөндөр, тиҙәр ине... Ә ҡаланың күркәмлеген тәшкил иткән сәйханаларҙа ир-ат заты киң урындыҡтың табын түренә аяҡ бөкләп түңәрәкләнеп ултырып, бер йотом ғына яһалған һөтһөҙ әсе йәшел сәйҙе бөтәһе бер быяланан (касанан) сиратлап һемерә — түңәрәк буйынса ҡулдан-ҡулға күсә ул. Ә уртала — опиум мәге һалып тоҡандырылған баяғы «хур-хур» (ҡалъян), уның иҫерткес төтөнөн дә сиратлашып һуралар ҙа иҙерәп ултыралар. Беҙҙәге киоскыларға оҡшаш дөкәндәрҙә төрлө дәүмәлдә һәм көмөш биҙәкләп эшләнгән ҡынлы үзбәк бысаҡтары һатыла (йорт хужабыҙ Арипжан әкә шундайҙарҙың береһендә һатыусы ине), һәр ир заты билбауында насыбай һауыты менән йәнәш ҡынлы бысаҡ йөрөтә. Әленән-әле мәхәлләлә (микрорайонда) кемдеңдер көнләшеү арҡаһында ҡатынын һуйып үлтереүе тураһында ишетелә, ундайҙарҙы милиция ла тота алмай ғәҙәттә: фәләнсәнең «быҡынына пысаҡ тыҡып, Афған ашты» (йәғни Афғанстан сиге аша сығып китте), ти ҙә ҡуялар...

Әммә тамаҡ төптәренән уралып сыҡҡан үзбәк йырҙары әсир итәләр ине мине. Мәҫәлән, ошо йәшемә етеп тә, онотолмаған ҡайһы бер шиғри юлдар, куплеттар бар:

> Миниң урамалим шайи, уртасида бар Айи...

(Минең шәлем шайы-биҙәкле ебәктән, уртаһында бар Айы). Шуныһы бик ҡыҙыҡлы: башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары шәл бәйләгәндә һалған «Ай» биҙәктәре үзбәк шәлдәренә лә һалына һәм шулай уҡ «Ай» атала.

> Далада тайчиҡ кишнәйди, ат булам диб, — яр-яр!
> Өйдә киленчәк йығлайди, ят булам, диб, — яр-яр!

(Килен оҙатыу әйтеше). Йәки:

Дутарим «дың!» итәди, Мәрғиләнгә етәди,
Мәрғиләнниң ҡизлари ачиҡ алма икәди.
Ачиҡ алма пишипти, тал күчәгә төшөпти.
Тал күчәңиз тар икән, юлда базаз бар икән,
Ул базазниң хатини шайи күлмәккә зар икән.
Шайи күлмәгиң шайтана — су апкилиң ҡумғанда,
Баш тарайлик айванда...

Былар барыһы ҡарнай менән сорнай тигән, тын өрөп көй сығармалы ҡоралдарға эйәреп башҡарыла.

Йорт хужабыҙҙың өйөндә изге йома һайын ҙур ҡаҙанда тәмле хуш еҫ аңҡытҡыс былау бешереп, ағай-энеләре менән йыйылышып ултырып хозурланалар, оло быялаға (касаға) һалып беҙгә лә керетәләр ине. Роза гөлдәренең татлы еҫтәре аңҡыған иҫерткес-серле тымыҡ кисәләрҙә ошондай хозур мәжлес барған балахананан (балкондан) бөтә мәхәлләгә наҙлы һандуғас һайрауынан кәм булмаған гүзәл моң тирбәлеп тарала — шау ебәктән кейенгән, биттәренә алһыу кершән яҡкан, ҡаштарын сөм-ҡарайтҡан һылыуҙарҙан һылыу йәш ҡатын, хужабикә Мотабархандың бер туған һеңлеһе, бөтәһен таң ҡалдырып һәм әсир ҡылып йырлай ҙа йырлай. Көндөҙҙәрен эргәбеҙҙәге ҡапҡанан атлап кергәнендә уның сихри һылыулығын күреп шаҡ-ҡата инем (һигеҙ йәштәге малай!). Нәзәкәтле шул тымыҡ кисәләр көтмәгәндә һандуғасынан яҙҙы — һылыуйәндең «быҡынына» ла «пысаҡ тыҡып Афған ашты»лар...

Арыҡ-канал һыуҙары мөлдөрәп ағып, аллы-гөллө сәскәләргә төрөнгән, теләнде йоторлоҡ емештәре бихисап мул өлгөргән, ҡыҙыҡлы ғөрөф-ғәҙәттәре, йыр-моңдары менән зауыҡландырған Үзбәкстан тупрағынан мине ҡапыл биҙҙерткән һәм күңелемә бер ҡасан да юйылмаҫлыҡ ҡурҡынысл шом һалған тетрәндергес бер ваҡиға булып алды. Иртә менән уянып, иҙәнгә түшәлгән йоҡлау урынымдан (беҙҙең бер карауат та юҡ ине) торорғамы, тормаҫҡамы тип, йылы юрған аҫтында иҙерәп ятҡанымда, нимәгәлер йөрәгем тайҙай уйнаҡлап, ҡапыл ҡалҡынған ыңғайыма осама ниндәйҙер осло беҙҙең ҡот осорғос ауырттырып ҡаҙалыуынан аҡырып ебәрҙем. Әсәйем менән абзыйым шунда уҡ йәһәтләнеп, йәмһеҙ-йыуантыҡ ете быуын ҡойроҡло һәм осло-үткер ҡаяулы, алғы ике тарбаҡай ҡулы беҙҙәге ҡыҫаланыҡылай ҡайсы-ҡыҫҡысл ытырғаныс йән эйәһе саянды эләктерҙеләр: «Бәхетең — ун ике быуынлы түгел, юғиһә үлер инең!» — тип «йыуаттылар». Шундағы йола буйынса, иҙәнгә ҡапланған быяла табағы өҫтөнә, уртала буш урын ҡалдырып, уратып кәрәсин ҡойҙолар ҙа саянды нәҡ урталыҡҡа ултыртып ут төрттөләр, ут дүңгәләгендә ҡамалып ҡалған яуызйән, ифрат ытырғаныс сыйылдап, зәһәр ҡаяулы ҡойроғон өҫкә ҡайтарып, үҙенең елкәһенә үҙе ағыуын ҡаҙап дөмөктө. Арипжан әкәнең баяғы саяндар тултырылған мамыҡ майлы шешәһен алып килеп, саян саҡҡан осамды майланылар, шуның менән тамамланды шифалау һәм дауалау...

Ауылда беренсе синыфты үтеп килһәм дә, Хәбибулла абзыйым етәкләп көҙөн мине урыҫ мәктәбенең беренсе класына илтте: икенсе синыфтан башлауы

ауыр булыр, йәшең дә үтеп бармай. Уның ҡарауы, урыҫса уҡып, кеше булып сығырһың, тине.

Урыҫсаға баштан уҡ йәнем тартманы, ауылдағы Володька менән һин дә мин аралашҡан һүҙ тоҡсайым да йә тишелеп ҡойолған, йә бүҫкә булып сыҡты. Класта ла, тәнәфес ваҡыттарында ла минең өсөн ете ят бер телдә генә һөйләшкән, башҡа телле һәм башҡа төҫлөләрҙе асыҡтан-асыҡ үгәйһетеп ҡараған ҡыҙҙарҙың һәм малайҙарҙың араһында ҡапҡанға эләккән ҡырағай йәнлек ҡиәфәтендә өҙгөләнеп ултырҙым. Эргәмдәге саф урыҫса һөйләшкән үзбәк ҡыҙынан да екһендем...

Иртәгәһенә үк ул мәктәпкә барыуҙан ҡырҡа баш тартҡас, мәхәлләнең үзбәк мәктәбенә илтеп тапшырғайнылар, үҙ тәбиғи мөхитемдә һыуҙағы балыҡтай йөҙҙөм дә киттем — «яҡшы»ға ла «отлично»ға уҡыным. Өҫтәүенә, көн һайын һәр уҡыусыға бушлай ғына түп-түңәрәк булки менән бер стакан сәй ҙә бирәләр ине.

Булмышымды шаңҡытып, өйөбөҙгә аңлайышһыҙ ҡайғы килде — оләсәйем Бибиғәфифә ошо алыҫ үзбәк ерендә вафат булды ҡапылтын. Аҡ кәфенгә төрөлгән кәүҙәһен ике тәгәрмәсле бейек үзбәк арбаһына һалып (мине эргәһенә ултырттылар), артынан йәйәүле эйәреп, ҡоро ҡомло йәмһеҙ дала юлынан үләндәре ҡыуарып-көйөп бөткән зиратҡа керҙек. Ҡәберҙәргә беҙҙәгеләй бағана йә яҙыулы таш ҡуйылмаған, уба өҫтәрендә сәйгүн-сынаяҡ күренгәләй. Оләсәйемде ҡәбергә төшөргәнде алыҫтанырак ҡарап торҙом. Ләхете беҙҙәгеләй тәбәшәк эсле түгел — әҙәм ултырмалы бейек итеп алынған (мәйетте ултыртып күмәләр, имеш, тип тә ишеттем, әммә оләсәйемде ҡайһылай һалғандарын күрә алманым). Ятҡырҙыларммы, ултырттыларммы, уныһы иҫтә ҡалмаған. Балсыҡ геүәләләр (ҡалыпһыҙ йоморо кирбестәр) менән буранылар ләхетте, ҡомло үзбәк тупрағынан оҙонса уба өйөлдө — йән тартмаған ят яҡтарҙа ятып ҡалды оләсәм... Тимер юл станцияһында машинист булып эшләгән, Бильдинский урамы буйлап Һибәтулла абзыйымдарға барған юлдың урталығындағы бәләкәй генә балсыҡ ыҙмала Ғәйникамал еңгәйем менән йәшәй генә башлаған Әбдрәшитов Хәйрулла абзыйым да, (оләсәйем Бибиғәфифә менән бер туған Бибиғәзизә инәйемдең өлкән улы) паровозының мейесенән өҫтөнә ут ҡабып, янып үлде. (Еңгәмде ауылға ҡайтып алып киткәйне, туйҙарына әсәйем мине лә алып барғайны)... Ҡала ситендәге ҡышлаҡта йәшәгән Теләүембәтов Сабит ағай менән Мәликәниса еңгәйгә лә оло бәхетһеҙлек килде — туптай тәгәрләп йөрөгән Әминә исемле гүзәл ҡыҙсыҡ урамдағы хауҙға батып үлде. Ҡайғыһынан күҙҙәрен алартып, аҡылын юйырҙай яҙаланған меҫкен әсәһенең илап шешенгән йөҙө күҙ алдымда әлегәсә...

Йәнем тартҡан үзбәк мәктәбендә уҡып, үзбәк булып уҡ китер инем дә, бәлки, ләкин уҡыуым был юлы ла ҡапыл ғына өҙөлдө. Йәйге каникулым ваҡытында, эҫе июнь айы ине, Хәбибулла абзыйым һис көтмәгәндә эштән ваҡытынан элек, ҡыҙмасараҡ булып ҡайтып инде лә, ғүмерҙә булмағанса, һаран күҙ йәштәре менән һулҡылдап, фашистар Германияһы беҙгә баҫып кергән — ҡанлы һуғыш башланды, тип шомло хәбәр һалды... Оҙаҡламай үҙен дә, Һибәтулла һәм Фәхритдинов Ғабдрахман (Мәликә инәйемдең улы) абзыйҙарымды ла, мине шиғырҙар яҙырға өйрәтеп маташҡан Таҙ Ғөбәй Ҡарасанов һәм мишәр Әбдрәшитов Ғөбәй ағайҙарҙы ла, Теләүембәтов Сабит, Байназаров Хәмзә, Әбдрәшитов Шәйхулла һәм Ҡотлобаев Сапый, Биккужин Насип, Ташбулатов

Ғиззәт ағайҙарҙы ла (Хәбибулла абзыйым уларҙың ауылдан ҡасып килгән һәр беренә паспорт йүнәтешеп биргән) һуғышҡа һыпырып алып киттеләр ҙә мәңгелеккә күбеһе ятып ҡалды. Хәбибулла абзыйымды иһә бер-ике айҙан уҡ яраҡһыҙ табып ҡайтарҙылар — мин белмәгән сәйер сиргә һабышҡайны абзыйым. Бер ни менән дә ҡыҙыҡһынмай, беребеҙгә лә иҫе китмәй, бер кем менән дә йүнләп һөйләшмәй, үҙенә нимә кәрәген дә белдермәй — аңҡы-тиңке йөрөнө. Аҙыҡ-түлеккә һәм кейемгә карточка системаһын кереттеләр — бөтәһе лә фронтҡа, тылдағыларға йән аҫырарлыҡ ҡына булһа ла еткән. Беребеҙ ҙә бер ҡайҙа ла эшләмәгәс, йән башына көнөнә дүртәр йөҙ грамм бысыҡ (яртылаш сей) арыш икмәге менән көн күрҙек, уныһын да таң тишегенән һыу буйылай оҙон сиратҡа баҫып алдыҡ, сират тороп та икмәк етмәй, буш ҡул ҡайтыусылар ҙа ғәҙәти хәлгә әйләнде. Көндәлек ризыҡты алып ҡайтҡас, дүрт өлөшкә бүләһең: өсөһө — көнөнә өс тапҡыр үҙәк ялғарға, дүртенсеһе — килгән ҡунаҡты һыйларға. Ҡайһы саҡ ҡала ситендәге колхозға барып эшләп, хаҡына кукуруз күсәндәре йөкмәп ҡайтабыҙ, йә иһә бейек өрөк ағастары башында тороп ҡалған емештәрен йә — менеп, йә — таяҡ бәреп төшөрәбеҙ. Ҡалала бурлыҡ, кеҫә ҡараҡлығы, кеше талау йышайҙы. Сиратта айлыҡ икмәк карточкаһын урлатҡан бисара ҡатын-ҡыҙ урамда үкереп илап йөрөнө, ләкин ай бөтмәй тороп яңы карточка бирелмәй һәм бер кем дә ярҙам ҡулы һуҙа алмай. Ас ҡарғаларҙай өйөрләшеп баҙар майҙанын ҡыҙырған урыҫ малайҙары үзбәктәр түкөрөп ташлаған өрөк төштәрен йыйып, таш менән ватып, мәмесен ашайҙар ине, ә мин унан ерәндем... Юлдар киҫелмәҫе борон нисек тә булһа илгә ҡайтып йығылырға — ил өҫтөндә сыпсыҡ аҫҡа үлмәй ул, тигән ҡарарға килеп, әйберҙәрҙе төйнәнек, сәфәр аҙығы әҙерләргә керештек. Ауылдағыларға күстәнәскә тип, кипкән өрөк — ҡураға һатып алдыҡ. Тимер юл билетынан артҡан аҡсаларыбыҙҙы тотоноп, «коммерческий» тип аталған, ҡиммәт хаҡҡа карточкаһыҙ ҙа иркен һатҡан магазиндан ҡара арыш икмәге һатып алып, бер килке сохарый киптерҙек. Әсәйем баяғы «закрытый магазин»дан карточкаға бирелгән эре шаҡмаҡлы кер һабындарын бөтмөрләп йыйнап барған икән — һуғыш ваҡытындағы был затлы тауарҙы ҡул осонда тоторға айырым ҡәҙерләп төрнәнек. Тик күпме тырышһаҡ та, юл аҙығыбыҙ аҙ ине. Ни ҡылырға белмәй ҡаңғырып йөрөгәндә, Хоҙай Бабай теләгәнебеҙҙе сығарып ҡуйҙы алға. Фәрит ҡустыларымда булғандан һуң, Бильдинский урамының һул яғындағы ниндәйҙер ҡаҙна йортоноң буйынан уйланып үтеп барһам, бина төбөндәге подвал тәҙрәһен ышыҡлаған суйын рәшәткә өҫтөндә дүрткелләп тә киртләсләп ҡырҡылған ҡағыҙҙарҙың туҙрап ятыуын абайлап туҡталдым — ташҡа баҫылған яҙыулы һәм түңәрәк мисәтле был нәмәләр — көндәлек шаҡмаҡтарын ҡайсылап алып бөткәндән һуң ҡала торған һәм инде һис кемгә лә кәрәкмәгән карточка төпнамәләре ине. Әммә байтаҡтарының ҡырҡылып бөтмәүе, күптәрендә алдағы көндәрҙең биш-алты көнлөк икмәк нормаһы һаҡланыуы сикһеҙ ғәжәпләндереп, шундайҙарын тиҙ генә йыйнап алдым һәм... ысынлап та күктән яуған хазинаға эйә булыуыбыҙҙы аңланыҡ. Әсәйем шул ҡалдыҡ-боҫтоҡ карточкаларға алып ҡайтҡан икмәктәр юл сохарыйҙарына әйләнеп, юлға сығырға мөмкинлек бирҙе. Хәйрулла абзыйымдың баяғы йәшләй генә, бер бала ла таба алмай тол ҡалған ҡатыны Ғәйникамал еңгәм дә беҙҙең менән бергә ҡайтырға булды. Бәхтиямал еңгәйҙәремә

барып, хушлашып килдек. Улар ҙа ауылға юлланырға йыйналған — беҙҙең артыбыҙса ук ҡуҙғалмаҡсылар икән. Хуш бул, Андижан!

Дүртәүләшеп, (үҙебеҙ өсәү һәм Ғәйникамал еңгәм) Ташкентка килеп төштөк, икенсе поезға күсеп ултырырға тейешбеҙ. Ләкин беҙҙең тарафҡа билет бирмәйҙәр — урын юҡ, күпме көтөргә кәрәклеге билдәһеҙ. Күҙгә ҡара һыуыҡ, ә вокзал тигәнең беҙҙең кеүектәр менән лыҡама тулы, артыҡ бер кемде лә индермәйҙәр. Вокзал алдындағы киң майҙанды ла, сумаҙан һәм төйөнсөктәрен өйөп һалып, юлаусылар биләгән. Улар араһында йолҡош кеҫә тунаусылар һәм сумаҙан ҡараҡтары йөрөй темеҫкенеп. Беҙ ҙә бер урын табып, һалҡын ташҡа әйберҙәребеҙҙе өйөп, ҡараҡтарға бирешмәҫкә тирәләтеп ултырҙыҡ. Алмашлап билет сиратыбыҙҙы барларға, сәйгүн менән ҡайнар һыу алырға, бәҙрәфкә йөрөп киләбеҙ. Көтөп ултырыу аҙнанан ашып китте, әммә билет юҡ та юҡ. Бер нәмә лә һөйләшмәҫ, бер кемде лә тыңламаҫ булып үҙгәргән Хәбибулла абзыйым, кемгәлер үс итеп һәм мине уғата сәйерһендереп, аяғындағы штиблеттарын, ойоҡтарын сисеп һалды ла, түҙеп торғоһоҙ һалҡын ташҡа лап-лоп баҫып, ялан аяҡ йөрөй башланы. Әсәйем ныҡ асыуланғас, шешенгән ялан аяҡтарына штиблеттарының һалҡын резин калуштарын эләктереп алды, муйынын эскә тартып, көштәйеп, ҡайҙалыр ҡыҙырынып йөрөнө. Ҡара һыуыҡ һеңгән ташта ялан аяҡланып йөрөгәс, табандары уттай яналыр, шуға сыҙай алмайҙыр, тип уйланым, әммә һорарға тартындым. Хәйер, уның да миңә, исмаһам, бер генә һүҙ ҡушҡанын да хәтерләмәйем.

Ултырыуҙар икенсе аҙнаға һуҙылғас, ниһәйәт, ҡулға билет эләкте, ләкин шуның менән бергә шаҡтай бәхетһеҙлеккә тарыныҡ — сохарыйҙарыбыҙҙың бер өлөшө һалынған ҙур сөмкәбеҙҙе урлап алып киттеләр (ошо етмеш йәшемдә лә, Ташкент вокзалын иҫкә төшөрһәм, йөрәгем жыулап китә). Әммә иң ҙур бәхетһеҙлек — үҙебеҙ ҙә абайламайынса «сборный поез»ға эләгеүебеҙ ине. Бындай поезды башҡалар алып китә алмаған йәки ниндәйҙер сәбәптәр менән разъездарҙа бүленеп ҡалған ҡалдыҡ-боҫтоҡ вагондарҙан төҙөйҙәр һәм ул поезд разъезд һайын башҡаларға юл биреп, хатта икешәр, өсәр тәүлек буйы запас юлда туҡталып торор имеш... Шулай ҡаңғырып көндәр һәм аҙналар үтте, лыҡама тулы вагондағы йонсоулы әҙәм балалары саманан ашып асыҡты ла бетләне (кешеләрҙең өҫ кейемдәрендә үрмәләп йөрөгән ҡырмыҫҡалай эре беттәрҙе үҙем йыш күрҙем). Разъездарҙың береһендә беҙҙекенә йәнәш юлға килеп туҡтаған, моғайын, фронтҡа китеп барған хәрби эшелон һалдаттарының да астан киҫелгәнлеге күренеп тора ине. Бынамын тигән йәп-йәш егеттәр, ирҙәр (Урта Азия төркиҙәре) вагондарҙан һибелделәр ҙә, үҙ-ара аҡса йыйып, яҡындағы ҡышлаҡтан көр тана малы етәкләп ҡайттылар, рельс буйында уҡ һуйып, итен бүлешеп алдылар. Күп тә үтмәй, котелоктар аҫылған усаҡтар дөрләне, хатта вагон тәҙрәләренән дә тәмле һурпа еҫе танауға бәрҙе. Яңы туналған тиреһен һалдаттарҙың аҡсаһыҙҙарына ҡырҡҡылап биргәндәр, моғайын. Күҙ алдымда тора һаман: бер йәш һалдат, тегеләрҙән ҡалған усаҡ алдында сүкәйеп ултырып, тере ҡуҙҙа тире киҫәген өтә һәм әленән-әле, тыйыла алмайынса, тиренең эс яғында туналғандан ҡалған, ҡуҙ өҫтөндә бөрсөкләнеп ҡайнай башлаған майҙы шурылдатып ялап ала (һуғыш осоронда

ауылда үҙем дә шуның өлгөһөндә кәзә тиреһен, шешкә кейҙереп, мейес ялҡынында өтәҫләп ашаным)...

Ҡыҫып-ҡымтып сәйнәштергән сохарыйҙарыбыҙ бөткәс, әсәйемдең баяғы кер һабындарын станцияларҙа икмәккә алмаштырып ашаныҡ. Арал диңгеҙе башындағы Ҡазалинский тигән, ысынлап та беҙҙең өсөн ҡазалы ҡалаға етәрәк, Хәбибулла абзыйым һуҙылып ятҡан өҫкө һәндерәнән яман һаҫы таралды, көллө вагон нәфрәтләнеп шаулаша, күҙ астыртмай беҙҙе әрләй башланы, әсәйем ни ҡылырға ла белмәйенсә сәбәләнде. Ниһәйәт, Ҡазалинский станцияһына туҡталып, вагонға аҡ халатлы, носилкалы әҙәмдәр йүгереп инде лә эсе үтеп иҫһеҙ ятҡан абзыйымды носилкала алып сығып киттеләр. Был юлы поезд аҙ ғына торғанлыҡтан, ауырыу артынан эйәрә лә, адресын һораша ла алманыҡ — Солтанов Хәбибулла Ғәбиҙулла улы тигән егет мәңгелеккә эҙһеҙ юғалды шулай. Уның донъяға килеүе лә көтөлмәгәнсә булған. Олатайым Ғәбиҙулла менән оләсәйем Бибиғәфифәнең тыуған һәр бер балаһы ҡыҙ булғанлыҡтан, нәҫелебеҙ ҡоромаһын тип, олатайымдың яҡын ҡустыһы Солтанов Камалитдин менән Мәстүрә килененең (ул күберәген ул тапҡан) яңы тыуған уланын үҙҙәренә алғандар — Сәнкем-Биктимер обществоһының метрика дәфтәрендә лә 1909 йыл тыуыусылар рәтендә ул, 26-нсы итеп: «Һибәтулла, 20 декабрҙә. Атаһы башҡорт Ғәбиҙулла Билал улы Солтанов, анаһы Бибиғәфифә Мөхәммәтзариф Байназаров ҡыҙы. Сәнкем-Биктимерҙә», — тип теркәлгән. Ниһәйәт, уллы булдыҡ инде, тип торғанда, баяғыса, көтмәгәндә (бирһә, бирә бит Хоҙай!), киләһе 1910 йылдың 5 августында уҡ Бибиғәфифә оләсәйем тупылдатып үҙе малай таба, Хәбибулла тип ҡушалар исемен...

Хәбибулла абзыйымды носилкала елдереп алып сығып киткәстәре, вагонда һаҫыҡ дарыу һиптереп дезинфекция яһанылар, абзыйымдан бушанған һәндерәгә икенсе берәү йәһәтләп менеп ятты...

Барса мөмкинлектәребеҙ тамаҡҡа китеп бөтөп, башҡа сара ҡалмағас, күстәнәскә тип һаҡлаған кипкән өрөк-ҡурағаларҙан да елдәр иҫте... Аслыҡтан тамам киҫелеп, йонсоп, Андижандан сығып китеүебеҙгә теүәл ай үткәс кенә, Хоҙайға шөкөр, күҙҙәребеҙ ҡарайып көткән Жултый станцияһына килеп төштөк. «Бирәм тиген ҡолона — сығарып ҡуйыр юлына», — тигәндәй, Хоҙай Бабай әгәр Андижанда баяғы икмәк карточкаһы ярпыларын ҡаршыма килтереп һалмаһа, белмәйем, ҡайтып етә алыр инекме икән (ул мөғжизәне әлегәсә ғәжәпләнеп уйлайым)...

Көн кискә ауышып барһа ла, әсәйемде, иртән килеп алырға тип, әйберҙәребеҙ менән бергә кескәй вокзалда ҡалдырып, һис нимәгә ҡарамай, Ғәйникамал еңгәм менән эйәртенешеп, йүгерә-атлай ауылға йәйәүләнек. Жултыйҙың Һаҡмар күперенән сыҡҡас, юл ситендә көйәҫ елгә тирбәлеүсе үҙебеҙҙең яҡтың күперек башлы күк әремдәре, тәбрикләп ҡул болғаған иң ғәзиз туғандарыбыҙҙай, күңелде елкендерҙе. Олобайыбыҙға килеп еткәс, ҡанатланып осоп барғандай хис иттем, Ҡаҫмарт күперенән йүгереп сыҡтым. Ғәйникамал еңгәйемдең атаһы Мусаҡаев Ҡунаҡкужа олатайҙың ауыл осонда Тәрәнкүл ситендәге балсыҡ ыҙмаһына барып кергәндә, ҡараңғы төшкәйне инде. Хужабикә Зәйнәп инәй миңә шунда уҡ сөмөкәй сүгәтәлә ҡаймаҡ һалып туҡылған ҡуйы

ҡатыҡ килтереп бирҙе, бындай ҙа татлы тәғәм, гүзәл тормош була икән донъяла, тип кинәндем. Беҙҙән бер аҙнаға һуңлап юлға сыҡҡан Бәхтиямал еңгәмдәрҙең әллә ҡасандан уҡ инде ауылда йәшәп ятыуҙарын ишетеп аптыраштыҡ, беҙҙе юлда үлгәнгә һанағандар.... Ә шулай ҙа илгә иҫән-һау ҡайтып йығылған беҙҙән дә бәхетлерәк кеше юҡ ине. Ғәрәсәтле оҙон юл буйына зарланып бер өн дә сығармайынса беҙҙең менән бөтәһен бергә кисергән, ата-бабалар сабынлығы Олобайҙан еләә-юрта мине үҙенең ата йортона алып ҡайтҡан тал сыбығылай нәҙекәй билле, матур ҡоңғорт йөҙлө Ғәйникамал еңгәм әлегәсә яңыра хәтеремдә. Һуғыштан һуң ул һигеҙ йыл буйына армияла йөрөп мыҡтыланған фронтовик егет Байназаров Фәзрахман абзыйға тормошҡа сыҡты, береһенән береһе уңғыраҡ мыҡты уландар үҫтереп, бәхетле йәшәнеләр.

Иртәгәһенә Ҡунаҡкужа олатай ат егеп, ыстансанан әсәйемде алып ҡайтты. Шул уҡ көндө икебеҙҙе Сәнкем-Биктимергә — Ғилаз бабайымдарға илтеп ҡуйҙы. Һунарсылағы өйҙө һатып китһәк тә, Сәнкемдәгеһе көтөп ултыра икән. Матур кәкре мөгөҙлө, маңлайы аҡ йондоҙло, әсәйем әйтмешләй, һауған һайын гөбөрләтеп бер күнәк һөт биргән һыйырыбыҙҙы[18] ла, ярай, аҫырап торорға Ғилаз бабайыма ҡалдырып киткәнбеҙ. Үҙ өйөбөҙ ҡарауһыҙ һәм мейесһеҙ булғанлыҡтан, уларҙа өйҙәш ҡыш сыҡтыҡ. Шул арала әсәйем Эйек арьяғындағы Спасский ҡасабаһында бер йыллыҡ курста уҡып ҡайтып (мине Ғилаз бабайымдар ҡараны), колхозыбыҙҙың ветеринария санитары («мал духтыры») булып эшкә кереште.

Илдәге тормошобоҙ

Яҙғыһын йәмле май айында көтөүҙәге һыйырыбыҙҙың ҡырҙа — Әүлиә зиратлы Һыулау тәңгәлендә быҙаулап ҡалыуын хәбәр иттеләр, Ғилаз бабайым менән ат егеп барып, ҡыҙыл тәне аҡ сыбарлы орғасы быҙауыбыҙҙы арбаға һалып алдыҡ, елене ҡаҙандай ташҡан, ҡамыштай имсәктәре һөт тиртеп ҡабарған һөйөклө һыйырыбыҙ арба артынан ҡалмай мөзөлдәп юртты. Мин шунда уҡ быҙауыбыҙға «Шатлыҡ» тип исем ҡуштым. Минең кеүек үк сикһеҙ ҡыуанған әсәйем һыйырыбыҙҙы йәһәт кенә гөбөрләтеп һауып алып (ә мин эргәһендә ҡарап ултырҙым), донъяла иң тәмле ризыҡ булып тойолған ыуыҙ ҡоймағы ҡойҙо, иң бәхетле хистәр кисереп ҡорҙоҡ беҙ ул табынды. Әммә иртәгәһенә үк көтөлмәгән ҡайғы һуҡты йөрәккә: гөбөрләтеп һауған һыйырҡайыбыҙ, бәләкәс сағымдағы танауынан ҡан сәптергән атайымды иҫкә төшөрөп, матур башҡайын бер — уңға, бер — һулға ташлап, көйшәгән йәшел үләндәре танау тишектәренән килеп ята ине. Шул уҡ көндө, яңы тыуған быҙауын һәм беҙҙе етем ҡалдырып, яҡты донъянан китте. Шул көндәрҙең шатлығын һәм тетрәнеүен күп йылдарҙан һуң да онота алманым — баяғы «Һыйыр тураһында йыр» тигән йәшлек хикәйәмде яҙҙым...

Илебеҙ тиран Сталиндың ҡаты ҡулы аҫтында интеккән ул йылдарҙы саҡ ҡына иҫкә төшөрһәм дә йөрәгемә ҡан һауа: иркен һулыш алырға ла ярамаған ҡыҫым аҫтында ас-яланғас йәшәнек, ауырыуҙан да, аслыҡтан да халыҡ күпләп ҡырылды. Бер генә миҫал килтерәм: Сәнкем-Биктимерҙә беҙгә уткүрше булып

---

[18] "Һыйыр тураһында йыр" тигән хикәйәмдә һынландырылған.

серек кенә ситән өйҙә ҡара фәҡирлектә әсәле-ҡыҙлы Атанғоловалар йәшәй ине. Ғаилә башлығы һуғышҡа китеп юғалған, яңғыҙ улы Хаматҡолдо ла япон һуғышына алып киттеләр; уның өйҙә ҡалған апаһы Мөнирә көтөү көтә, һеңлеһе Ғәлимә колхоздың бөтә ҡара эштәрендә даими ҡырҙан ҡайтмай, сәстәре ағарып ҡартайған Хәбирә инәй өйҙә асыға, сөнки бер генә баш мал-тыуарҙары ла, ҡош-ҡорттары ла юҡ, ә колхоз ашарға бирмәй – фронтҡа тип ҡырсып алып китеп торалар. Үҙ күҙҙәрем менән күрҙем: бахыр Хәбирә инәй, аслыҡҡа түҙә алмай, ишек алдын һөрөп яңы ғына сәселгән бәрәңге баҡсаһының бураҙна буйына сүкәйеп ултырып, ҡулдары менән ерҙе соҡоп, тупраҡ аҫтындағы бәрәңге бүлбеләрен эҙләп ала ла йәшерен генә бешереп ашай… Ошо ғына ла етмәһә, ситән өйҙә ятыр урындары ла ҡалманы: яуыз бригадир кешеләрен эйәртеп инеп, урындыҡ таҡталарын ҡутарып алып китте (колхоз кәрәгенә тотонорға)…

Төрлө сәбәптәр менән һуғыштан ҡалған ир-ат бик һирәк ине, улар колхоздың, бригадаларҙың эреле-ваҡлы етәкселәре – эшем эйәләре булып алғандар ҙа иртә-кисен сыбыртҡы шартлатып ас-яланғас ҡатын-ҡыҙҙы, бала-сағаны эшкә ҡыуалар. Колхоз келәтенән уларға, аҡмаһа ла тама, тигәндәй, тамаҡ ялғарлыҡ өлөш сығарыла. Әммә уларҙың да үтә намыҫлылары асыға...

Шундайҙарҙан күҙе яҙыу танымаған, мәгәр үтә намыҫлы һәм егәрле коммунист булараҡ колхоздың бөтә ҡара эштәрендә көнө-төнө егелеп йөрөп эшләгән һәм йылдың-йылына иң алдынғы “ударник” һәм колхоз идараһы ағзаһы итеп һайланып килгән, ыйыҡлатылған аттай арыҡ Садиҡ олатай бар ине. Бер йылдың көҙөндә көнбағыштан арыу уңыш урылып, шуның бер-нисә центнеры, ҡырсып алып китмәйенсә, колхоз файҙаһына (һәм райондағы түрә-мүрәләр өлөшөнә) ҡалдырылғас, ҡышҡыһын күрше урыҫ ауылы Каировканан бер фелә҆к май һыҡтыртып ҡайтарҙылар. Һыҡтырта барған ике ауылдаш майһыҡҡысханала ҡайһылай туйғансы мәмес һәм жмых ашап, артынса көрөшкәнән туйғансы йылы май ҙа һемереп “күтәрелеп” ҡайтыуҙарын кинәнеп һөйләгәнде ишетеп ҡалған Садиҡ олатай, Каировкаға тағы ла ылау юлландырыу тураһында идара ултырышында һүҙ сыҡҡас, аяғөҫтө тороп ихлас өндәшә:

-- Минең хәлемә лә керегеҙсе әле, иптәштәр! Көнө-төнө эшләп йөрөп, шыйыҡ мосай ыумасынан ғәйре төхөр күрмәй аҫка киҫелдем тамам. Инде мине ебәрегеҙ май һыҡтыртырға – күтәрелеп ҡайтайым!

Һүҙһеҙ риза булалар: өс санаға тейәлгән көнбағыштың ылау башлығы итеп оҙаталар Садиҡ олатайҙы. Ә унда май һыҡҡан ерҙә булған хәлде алтмышынсы йылдарғаса ҡыҙыҡ итеп һөйләне ауыл халҡы, ә мин шуны үҙе күреп белгән Сафуат абзыйымдың ауыҙынан ишеттем.

Имеш, тәүҙә бер-ике ус мәмес менән жмых һыныҒын тыҡшынып алған да Садиҡ олатай, майһыҡҡыс һемәгенән сөмөрҙәп кенә ағылып торған йылы майҙы тимер көрөшкәгә тултырып:

-- Коммунист һәм идара ағзаһы булһам да, миндә лә тамаҡ бар – мин дә әҙәм балаһы! Бер күтәрелеп алайым әле, егеттәр! – тигән дә күҙ йомоп түңкәреп тә ҡуйған. Ә төнгө юлда ҡайтҡанда... саҡ ҡына сыҙап бара ла ылауҙы туҡтата, салбарын төшөрөр-төшөрмәҫтән үк юл ситенә сүкәйеп ултырып сутырлата икән бахырың. Күп туҡтатаһың, төн һыуыҡ, юл оҙон, тиҙерәк ҡайтырға кәрәк, тип

юлдаштары нык әрләгәс, юлйөрөштө тиҙләтеү әмәлен йәһәт уйлап тапкан ударник-коммунист: сананың башкарамаһынан һуҙылған аркан осон яланғас биленә көрмәп, сана артына сүкәйгән килеш баяғы хәжәтен юл буйынса тукталмайынса башкарған...

Илленсе йылдарҙа тамактар шөйлә туйып, өҫ-баш та кәҙимгесә бөтәйеп, күҙҙәр асыла башлағас, колхоз клубында бөйөк Еңеүгә арналған тантаналы йыйылышта олатайыбыҙ йәш быуынды патриотик рухта тәрбиәләү йәһәтенән ялкынлы телмәр тотоп:

-- Һеҙ белмәйһегеҙ, балалар, ул йылдарҙа беҙҙең кайһылай тырышканды... Ал-ял белмәй көн-төн эшләнек, бесән етешмәйенсә астан арыкланып күтәрткән колхоз аттарын ошо клубтың ана анауы өрлөктәренә анауы йыуан тырма тештәрен кағып, бауыр аҫтарынан бау үткәреп аҫып куйып тәрбиәләнек![19] – тип ысқындырғайны, көллө зал шаркылдап көлдө...

Садик олатайҙың, кабык һымак корошкан эскерһеҙ бәндәнең, теңкәһенә тейгән кушаматы бар ине – “Кабык”. Ике кеше һөйләшеп торған ергә тап килеп, “кабык” һүҙе колағына салынып калһа, үҙен үсекләйҙәр икән тип уйлап, асыуынан дөрләп кабынып ҙа китер ине...

Хәҙер аптырап уйлайым: шундайын арыкланған кеше, көн-төн егелеп эшләп, нисек үлмәй калды икән?..

Ас-яланғас бала-сағалар бер кабым икмәк һорап, күҙгә карап ятып үлделәр...

Ауырығанды больницаға һалыу тигәнде белмәнек – ятты ла үлде кеше …

Беҙҙең дә хәл мөшкөл ине, әммә әсәйемдең тырышлығы менән бер-нисә баш мал-тыуарҙан, кош-корттан өҙөлмәнек – шулар коткарҙы беҙҙе. Шуға күрә мал кәҙерен белеп, мал йәнле булып үҫтек.

Күҙ төбәп көтөп торған яңғыҙ һыйырыбыҙ үлеп һыктатты, тигәйнем. «Шатлык» тигән орғасы быҙауыбыҙ, ана шулай, тыумыштан ук үкһеҙ калып, йөрәк өҙгөс илап бакыра-бакыра, кыҙғаныслы-һыҙланыулы кайғыбыҙға әүерелде. Беҙ уны һауын һыйырлы Ғилаз бабайымдарға бирҙек һәм Мәликә әбейем уны, һыйырҙары быҙаулағансы ыумас ыуып эсереп, бара-тора бахыркайҙың ауыҙы һөткә лә тейенеп, инәһе кеүек үк буралай һыйыр итеп үҫтерҙе; ләкин уның кыҙыл-сыбар һынкайын күргәнем һайын, йөрәгем әрнеп, уны туйҙырғансы имеҙә лә алмай киткән инәһен — ак йондоҙ маңлайлы һыйырыбыҙҙы иҫкә төшөрә инем. «Шатлығ»ыбыҙҙың беренсе орғасы быҙауын, йортобоҙҙа һыйыр токомон ялғап ебәрергә тип, беҙгә бүләк иттеләр һәм мин уны тап шулай «Бүләк» тип исемләнем. «Бүләг»ебеҙ күҙебеҙ алдында олпат һыйыр булып үҫте, оләсәһенә окшап, күп һөтлө ине малкай. Тик уның ғүмере лә, оләсәһенеке кеүек үк, йөрәгебеҙҙе һыҙлатып, фажиғәле осланды (уның хакында — алдарак)...

Әсәйемдең төп эше лә, минең укыуым да шунда булғас, Һунарсыға күсеп киттек, үҙебеҙгә алыҫырак туған Мөхипъямал инәйҙең балсык иҙәнле йоҙроктай ғына ситән өйөндә өйҙәшлектә йәшәнек. Ашағаныбыҙ — ыуалып торған күкшелт мысай (сүп үләне ашлығы, сөнки ысын игенде, һепереп-кырсып алып, фронтка оҙатып торҙолар) икмәге лә күкшелт мысай ыумасы, мысай өйрәһе ине, уныһы ла

---

[19] Ә был хәл ысынлап та булғайны.

бик аҙ тәтегәнлектән, ҡышҡы өҙөктә барлы-юҡлы урманыбыҙҙан «тал бөрөһө» тигән зәһәр сырмалсыҡтың орлоғон йыйып, ағыуынан арындыртыу өсөн, һыуҙа ҡайнатып түгеп, өйрә итеп ашаныҡ; һурпала был бөртөктәрҙең кәкре эт ҡойроғо һымаҡ тырпайған бөрөләре сәйер күренер ине. Етерлек ҡайнатып түкмәгән әҙәмдәр ағыуланып та йонсой. Колхоздың бер-нисә түрәһе генә ашаған бойҙай икмәген төштә лә күрмәҫ инек...

Колхозсылар йырланы:

Персиҙәтел ашай бойҙай он,
Беҙ ашайбыҙ мосай он.
Үлмәйенсә ҡышты сыҡһам,
Эшләмәйем, сысайым!

Әммә яҙға сығып тағы ҡара ергә, күк үләнгә баҫыу менән үк нәҙерҙе оноталар – ең һыҙғанып, билде биштән быуып, колхоздың ҡыр эштәренә егеләләр...

Һыйырыбыҙ булмаһа ла, кәзә үрсетә башланыҡ; өйөбөҙҙә аҡ заты юҡлыҡтан, кәзә ите берҙән-бер тотанаҡ булды. Көҙөн һуйып аҫҡан тәкә түшкәһен ҡышҡы һыуыҡтарҙа аҙлап ҡына тотона һәм ул ризыҡ яҙғаса етер, тип күҙ төбәп тора инек, кәстрүлгә һалып солан асамайына аҫҡан һуңғы киҫәк итте һалам түбәһен һүреп алып киттеләр...

Көндәр йылыға тартыу менән, колхоздың ҡарауһыҙ торған өйөн ҡулдан килгәнсә йүнәтеп, үҙебеҙ һуҡҡан кирбестән мейес сығартып, үҙ аллы йәшәүгә күстек. Әсәйем иртәнән ҡара кискәсә санитарлыҡ ҡорамалдары, шешәле дарыуҙар тултырылған ауыр сөмкәһен күтәреп, тауҙан-тауға, ферманан-фермаға ауырыу малдарҙы дауаларға унарлаған саҡрымдарҙы йәйүләп йөрөп, арманһыҙланып ҡайта, ләкин колхоз идараһы өлкәнәйеп барған тол ҡатындың ауыр хеҙмәтен һис тә иҫәпкә алмай, егеп йөрөрлөк ат-арба һорап ялбарыуҙарын гел кире ҡаға ине (унан һуңғы санитарҙар бөтәһе лә ат егеп йөрөнө). Йөҙәрләгән баш малдарға энә менән дарыу ҡаҙауҙағы иң ҡара эш тиһеңме, һыйыр малдарының арҡаһын уҡранан арсалап һаҫы-зәһәр креолин шыйыҡсаһы менән ышҡып йыуыу, башмаҡтарҙың ҡутырлы таҙҙарын ағас бысаҡ менән ҡырғыслап таҙартыу, ҡорсаңғы аттарҙы махсус камерала, ағыулы төтөндән сәсәй-сәсәй, көкөрт яғып ыҫлау һәм камеранан сығып торған ат баштарын муйындарынаса креолин шыйыҡсаһы менән шүткеләп йыуыу, ҡойроҡ аҫтары һаҫыған һарыҡтарҙы бәйләп һалып, мыжғып торған ҡорттарын эҫкәкләп сүпләү һәм дарыулау тиһеңме, аттарҙың ҡамыт тейеп сейләнгән яраларының әшәке эрендәрен йыуып таҙартыу тиһеңме — барыһы ла әсәйемдең ҡулдары менән башҡарыла, ләкин быны күреүсе, баһалаусы юҡ ине, кешене кешегә һанамаған заманалар ине шул. Күп ялбарып йөрөй торғас, әсәйемә ике тәгәрмәсле арба (таратайка), еген аты бирҙеләр; ул иһә атайымдың колхозға ингән сағында дөйөләштерелгән Күгаты ине, янбашына ҡамыт тейгәнлектән төҙәлмәҫлек яраланып, эшкә ярамағанлыҡтан, "үҙе егеп йөрөһөн дә дауалаһын" тип кенә тотторғайнылар. Ат, әлбиттә йүнле егергә яраманы, илке-һалҡы ғына йөрөнө, ә көн һайын йылғаға

алып төшөп тояғынаса ағылып һаҫыған һәм ҡатҡан эренен йыуыу бурысы миңә тейҙе. Арбаһы ла иҫке-моҫҡо булып, тиҙҙән күсәре һынғас, үҙемә имәндән күсәр сабып йүнәтергә тура килде. Әммә инвалид аты ла, арбаһы ла оҙаҡламай юҡҡа сығып, әсәйем ҡабат йәйәүлегә әүерелде...

Мәктәптә лә мохтажлыҡ кисерәбеҙ — яҙырға ҡәләм һәм ҡағыҙ, ҡара таҡтаға һыҙырға аҡбур юҡ. Боронғоларҙың әмәлен иҫкә төшөрөп, ҡаурый ҡәләм яһайбыҙ ҙа ҡулға эләккән гәзит, китап биттәренә үҙебеҙ ерек ҡабығынан ҡайнатып алған көрән ҡара, йәки йәшкелт төҫтәге ҡаҙ үте менән яҙабыҙ. Ҡышҡыһын парта өҫтөндәге ҡара һауыттарыбыҙ туңа, ҡулдарыбыҙ өшөп ҡата — өҫ кейемен һалмайынса ҡалтырап ултырабыҙ. Бер синыфташым күрше татар ауылынан Мирсәй Әмирҙең «Ағыйдел» тигән ҡалын ғына китабын алып ҡайтып, яҙыу дәфтәре итеп ҡулланды, их, уҡып сыҡһаң ине шуны, тип ҡыҙығып ҡарай инем. Каникулдарҙа йәй буйына өлкәндәр менән бергә колхоздың ҡыр эштәрендә тырышып ҡатнаштыҡ, һуғышҡа киткән ағай һәм олатайҙарыбыҙҙың дошманды еңеп ҡайтыуын тиҙләтергә бөтә көсөбөҙҙө һалдыҡ.

Һүр. 14. Йыһат. 07.07.1950

Яҙғыһын ауылдың өс малайы — мин, Ирек, Талғат, муйыныбыҙға орлоҡло тоҡсай аҫып, ат һабаны алдында оҙон бураҙнаға бөртөкләп көнбағыш сәсеүебеҙ хәтерҙә; ә минең арттан орлоҡтарҙы ҡаплаттыртып һөрөп килеүсе һабансым — буласаҡ хәләл ефетем Саниәның әсәһе Сәхипъямал еңгәй ине (оҙон ерән ҡуш толомло һылыу еңгәйем әле лә күҙ алдымда)...

Әйткәндәй, туҡһанынсы үҙгәрешле йылдарҙа, яңы Рәсәй хөкүмәтенең ҡарарына ярашлы, минең йәштәштәремә лә, шул йылдарҙағы хеҙмәттәрен дөрөҫләүсе танытмалары булған сүрәттә, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға тиңләштереп льготалар (матди файҙалар) бирелде, ә минең шуларҙы юллап алырға йылғырлығым етмәне...

Һуғыш йылдары уҡытыусылары ғәҙәттә ситтән ебәрелмеш ағайҙарҙан ғибәрәт булғанлыҡтан, фронттан һоро шинель кейеп ҡайтҡан ике ағай ярылып ҡалды хәтерҙә. Беренсеһе — Һаҡмар аръяғындағы ҙур татар ауылы Шишмәнән Ғибат ағай — госпиталдә яраһын төҙәткәндән һуң алты айға ялға ҡайтарылған һәм шул ваҡыт эсендә беҙгә уҡытыусы итеп ебәрелгән. Башҡортса белмәгәнлегенән, вата-емерә һөйләй, ә беҙ уның татар һүҙҙәрен ҡыҙыҡһынып тыңлайбыҙ. Һәр хәлдә, яҡшы тойғо ҡалдырған күңелемдә, тауышы ла әлегәсә ҡолаҡ төбөмдә кеүек. Ләкин алты айын да тултыра алманы — кейеп ҡайтҡан шул һоро шинеле менән үк кире алып киттеләр, артабанғы яҙмышы миңә билдәһеҙ.

Икенсеһе — үҙебеҙҙең ауыл Үтәбаев Ғәлиулла олатайҙың өлкән улы Ғәлләм ағай. Фронттан ул башкөлләйгә ҡайтарылған — һыңар бөйөрөн һәм ике ҡабырғаһын алдыртҡан, тиҙәр ине. Уң яҡҡа кәкерәйеп йөрөй, күҙҙәре зәһәр асыулы, мөйөштәренә төкөрөк ҡатҡан ирендәре бар донъяға мыҫҡыл белдереп ҡыҫыулы; бер ваҡытта ла бер кемгә лә йылмаймай, һөйләшкәндә әсе (ағыулы)

төкрөгөн сәсә. Шулай ҙа ул беҙҙе күп укытманы — юғарылағы түрәләр унын ауылдаштарына ғәййәр мөғәмәләһен тейешле баһалап, ауыл советына рәйес итеп күсерҙеләр (әйткәндәй, ҡырҡынсы йылдар аҙағында мин унын кәнсәләрендәге быяла шкафынан М.Ю. Лермонтовтың томдарын һорап алып уҡыу бәхетенә ирештем — үҙенең элекке уҡыусыһы икәнлеген иҫендә тотҡандыр инде). Бына шунда төбәгебеҙҙең сикләнмәгән хоҡуҡлы хакимы итеп күрһәтте лә инде ул үҙен: һуғышҡа олағып юғалған ирҙәрҙең күп балалы ҡатындарын ырҙын табағы юлында аңдып тороп, бер ус иген менән тотоп, өҫтөнән акт төҙөп, йәмғеһен бер ылаулыҡ итеп йыйнар ҙа район прокуратураһына этап менән оҙатыр; ә унда йәһәт хөкөм ҡороп, ауылдағы сыулашып ҡалған бала-сағаларын ас-яланғаслыҡҡа дусар ҡылып, бисара һалдаткаларҙы Тоҙтүбә төрмәһенә шахтала тоҙ киҫергә ебәрерҙәр ине. Һунарсынан, мәҫәлән, һуғыштың тәүге йылында уҡ һәләк булған Сөйәрембәтов Ҡолмөхәммәт Баймөхәммәт улының тол ҡалмыш ҡатыны Ғәйникамал еңгә, берeһенән береһе вағыраҡ биш балаһын әлһерәп бөткән ҡәйнәһе ҡарсыҡ (унын Ҡолмөхәммәттән кесерәк икенсе улы ла һуғышта ятып ҡалды) ҡарамағына ҡалдырып, шул Тоҙтүбә төрмәһендә биш йыл ултырып ҡайтты... Һәм Сәнкем-Биктимерҙән Рәҡиғә апай, колхозыбыҙҙың ирҙәрҙән дә шәберәк эшләп йөрөгән беренсе ударнигы, бәләкәс кенә яңғыҙ ҡыҙын һуҡырайған әсәһе Фатима ҡарсыҡҡа тапшырып, шулай уҡ төрмә шахтаһында тоҙ киҫергә ебәрелде...

Бына ошо ҡәтғи закон ҡурсалаусының үҙенә тигәндә "бармағы кәкре" икәнлеген дә күреп һабаҡ алырға тура килде.

Һуғыш бөткәс, үҫмер генә сағымда, күп йыллыҡ ҡаты ауырыуҙан имгәнгән аяғымды һөйрәкләп йөрөй башлағас, еңелерәк эш булһын типме, әллә уҡымышлылығымды иҫәпкә алыпмы, мине колхоздың келәтсеһе (кладовщик) итеп тәғәйенләгәйнеләр, ләкин түрәләрҙең өмөтөн аҡлай алмай ҡыландым, буғай. Ҡыңғырлыҡтар менән килешмәүсән оторо холҡома барып, келәт бураларындағы аҙыҡ-түлекте "иҙән аҫтынан" кимереүсе ике аяҡлы ҡомаҡтарҙың шымартҡан юлын киҫтем, теңкәләренә тейҙем. Хатта иң ҙур түрәбеҙ колхоз рәйесенә тиклем (эскесе бер наҙан ағай) уратыбыраҡ йөрөргә тырышты мине. Шул осорҙа түрәләрҙең еген аттарын ҡарауыс һәм бөтә йомоштарын үтәүсе Әхмәҙи олатай яҡшы ат егелгән ҡырандаста келәт алдына дөбөрҙәп килеп етте лә, оҙон тоғон беләгендә һәлендереп, буранан он тынҡыслап бирергә ҡушты.

-- Идаранан бойороҡ ҡағыҙың бармы һуң? – тигәс, тейешһеҙ талабымдан аптырап:

-- Бәй, ниндәй ҡағыҙ-мағыҙ тағы? Был бит силсәүит Ғәләм Үтәбаевҡа – үҙе ебәрҙе! – тине. Келәт ишеген шартлата ябып йоҙаҡлағас, кинәйәле баш сайҡап, ҡырандасҡа буш тоғон һалып ҡайтып китте. Һәм... шул йылда уҡ урыныма икенсе кешене ҡуйҙылар ҙа мин, "ҡомаҡ"тарҙың касафатынан ҡотолоп, иркенләп һулыш алдым...

Түрәләргә бәйле ошондай уҡ сетерекле хәлде күп йылдарҙан һуң да Өфөлә, "Ағиҙел" журналы редакцияһында эшләп йөрөгәнемдә кисерергә тура килде.

Баш редакторыбыҙ Рәйес Низамов (ҡорҙашым) ниңәлер мине юғарыраҡ вазифаға үрләтергә ниәтләнеп, КПСС обкомындағы партфункционерҙар менән

алдан һөйләшеп, журналдың яуаплы секретаре итеп ултыртып ҡуйғайны. “Был эш ҡулыңдан килә, ләкин ярып һала торған ҡырыҫлығыңдан ҡотол – обкомдағылар менән бер төптән тарт, сөнки әлегә һынау осоро үтәһең” – тип дуҫтарса киҫәтте ул. Тик ул холҡомдан ҡотолорға уйлап та ҡараманым һәм был, әлбиттә, юғарылағы һынаусыларымдың күңеленә хуш килмәне. Түҙемлектәрен тамам ҡаҡшатҡыс һуңғы тамсы *ла* үҙемдән – халыҡ шағиры Мостай Кәримгә журналда сыҡҡан бер шәлкем шиғырҙары өсөн гонорар ҡуйғанымда булды. Эш шунда: баҫмабыҙҙың гонорар фонды бик бәләкәй, авторҙарға әжере аҙ эләгә һәм әҙиптәр матди яҡтан даими мохтажлыҡ сигә. Бына мин уларға, яуаплы секретарь булараҡ, дөйөм ҡаҙандан өлөш сығарып ултырам һәм үҙемсә ғәҙеллек һаҡларға тырышып бизмәнләйем. Әйтәйек, йыл һайын бер-нисә китап нәшерләп кинәнеүсе һәм ғөмүмән “балда-майҙа йөҙөп” йәшәүсе Мостай ағайға гонорарҙы һәр шиғри юл өсөн – ике һум, ә башҡаларға, ниндәй генә талант эйәһе булһа *ла*, етмеш тин генә түләйҙәр... Мохтажмы ни Мостай быға? Тейһен, әйҙә, барыһына *ла* берәр һумдан!

Рәйес ҡорҙашым миңә ышанғандыр инде – гонорар исемлегенә ҡарамайынса уҡ, буғай, ҡул ҡуйып ебәргән. Һөҙөмтәлә гонорар алыу көнөндә халыҡ шағиры баш редакторҙың эш кабинетына ҡара янып ажғырып килеп ингән һәм бик ауыр кисерҙе быны Рәйес ҡорҙашым... Ә мин иһә партия өлкә комитеты ҡаршыһында “һынау осоро”н үтә алмауымды шәйләп еңел һуланым да, һәр ҡайҙа -- хакимиәттә *лә*, шиғриәттә *лә* барыбер бәндәнең бәндә булып ҡалыуын яҡшы төшөнөп, элекке урыныма төшөп ултырҙым...

Инде Ғәләм ағайға кире ҡайтайыҡ.

Ауыл башкөлләй егеттәрһеҙ ҡалһа *ла*, ә еткән ҡыҙҙарыбыҙ быуа быуырлыҡ булһа *ла*, «шәп кейәү» булырҙай Ғәләм ағайҙың кемгәлер күҙе төшөүен, йәки ҡыҙ-ҡырҡындың уға ҡыйшандауын һис хәтерләмәйем — барыһы *ла* «силсәүит»тән ҡурҡалар ине, буғай. Һуғыш еле ҡыуып килтергән ҡасаҡтар байтаҡ ине ауылда, араларында таяҡҡа юбка кейҙергәндәй ҡорош-оҙон буйлы, сиртһәң ағыуы сәсрәп торор уҫал Глафира ҡарсыҡ менән уның олоғайған ҡыҙы — почта бүлеге башлығы Вера бар ине; почта бүлеге бинаһы ауыл советы бинаһына ҡаршы ғына ине; ә почта бүлегенә йәнәш бүлмә — Вераларҙың фатиры ине. Көндәрҙеңме, төндәрҙеңме береһендә, көтмәгәндә, Ғәләм менән Вера ҡауышҡандар булып сыҡты. Ғәләмдең атай нигеҙенән, ҡултыҡ аҫтына бар мөлкәтен — ҡыҙыл тышлы ҡолаҡ мендәрен ҡыҫтырып, урам буйлап эре атлап уҙыуын һәм почта бинаһындағы Вера фатирына инеп китеүен барса халыҡ тамаша ҡылып торҙо... Өйҙәрендә «ғаилә бураны» ҡупһа, шулай уҡ ҡыҙыл ҡолаҡ мендәрен ҡыҫтырып ҡайтып китер, артынан ҡәйнәһе Глафира ҡарсыҡ ирҙәрсә һүгенеп ҡалыр; ә һуңынан шул уҡ юл менән ағайыбыҙ Глафира ҡарсыҡтың тупһаһына килеп тубыҡланыр, ҡарсыҡ уны, ирҙәрсә яман һүгенеп, суҡынырға мәжбүр иткәс кенә, буҫағанан үткәрер... Һәм артабан Глафира ҡарсыҡтың иртә-кисен дә, төшкөһөн дә, кәнсәләрҙәге кейәүен йорт эштәренә саҡырып: «Һалля-я-ям, йопфоймайт!» — тип почта менән ауыл советы араһын яңғыратыуы ғәҙәти хәлгә әүерелде *лә* ауылдаштар ҙа түрәне үҙенең күҙе артында тап ҡәйнәһенән ишетелгәнсә атап йөрөтөрҙәр ине...

Һуғыш осоронда фронттан ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтып китеүселәрҙән береһе — ауылдың ҡара төндәрен нурлаусы Шәмсыраҡ Яхия ине. «Шәмсыраҡ» тигән ҡушаматының мәғәнәһе бик нурлы. Сөнки һуғыш ваҡытында шәмгә филтә ҡалманы, ә филтәһеҙ шәм яғыу, кис ултырыу юҡ ине. Бына бер заман ҡыш көнө Аҡманова Миңсылыу апайымдың өйөндә өйҙәшлеккә урынлашҡан колхоз идараһына барып керһәм, мейес буйында Зильгерман, Зильберман тигән ҡасаҡтарҙың еткән ҡыҙҙары менән урыҫса тел сарлашып, оҙон һоро шинель кейгән, шинеленең итәге хатта кирза итегенең ҡуныстарын ҡаплаған һомғол һынлы Аҡманов Яхия ағай тора (Миңсылыу апайымдың атаһы яғынан ҡустыһы ла ине ул). Шунан һуң да мин уны, телгәр Яхия ағайҙы, шул уҡ урында йыш ҡына осрата инем, ләкин осратҡаным һайын уның оҙон шинеле шөйлә ҡыҫҡарыбыраҡ ҡалғандай күренә ине. Шуныһы ифрат сәйер: фронтовиктың шинеле ҡыҫҡарған һайын, төнгө ауылымдың тәҙрәләре яҡтыраҡ та, оҙағыраҡ та балҡый; элек кистән үк ҡараңғылыҡҡа сума торған тәҙрәләр ҙә яҡты нур менән көләсләнеп бағалар.

Яхия ағайҙың ҡыҫҡа ял осоро бөттө, кире фронтҡа китеү өсөн, тимер юлға сығарасаҡ ылауҙың егелеүен көтөп, ул баяғы мейес буйына баҫты — шинеленең итәге хәҙер тубыҡтарына ла етмәҫлек сонторайғайны.

— Шәмсырағыбыҙ китә, инде ни хәл итербеҙ?.. — тине оҙатыша килгән апайҙарыбыҙҙың береһе.

- Шәмсыраҡ, ғәфү ит, иҫтәлеккә тағы ла берәр филтәлек кенә алып ҡалайыҡсы! — тине икенсеһе. Яхия ағай ризалашып иҙән уртаһына баҫҡас, шинеленең итәген, мөртөлдәтеп, ҡайсы менән бер сабыуынан икенсеһенәсә арҡылыға буйлатып мөнтәнеләр — ҡыҙҙарға филтәлек булды, итәк тағы бер илегә ҡыҫҡарҙы.

— Ошо филтәләр янып бөтөр-бөтмәҫ үк, утта янмай, һыуҙа батмай, кире әйләнеп ҡайта күр инде, Шәмсыраҡ! — тип, ике битенән супылдатып үбеп оҙаттылар нурлы һалдатты... (Ҡайтты һәм балалар үҫтереп, бәхетле оҙон ғүмер йәшәне).

Хәтеремдә матур төш кенә булып ҡалған ағайҙарымдың береһе – Солтанов Ямырҙа олатайым менән Бибиғәҙилә (мишәр) инәйемдең 1924 йылғы берҙән-бер ғәзиз балаһы Язаритдин абзыйым ине. Һуғышта ул танк командиры булараҡ батырлыҡтар күрһәтеп (шул хаҡта район гәзитебеҙҙә лә яҙылды), өс тәүлеккә генә ялға ҡайтарылды ла Мөхәммәҙиәр (боронғо исеме Мекетә) ауылының бик һылыу бер ҡыҙына өйләнеп китте. Олатайым тирмәнсе ине, тирмән йортонда геүләп барған туйҙы беҙ, малайҙар, тәҙрәгә һырышып ҡараныҡ һәм шунда он һырығандай аҡ һаҡаллы олатайымдың, ҡыҙып-ҡыҙып:

Гуляй, гуляй, Маша –
Пока воля ваша!
Когда замуж заберем –
Тогда воля наша! –

тип таҡмаҡлап бейеүе ғүмерлеккә күңелемдә ярылып ҡалды. Ә Язаритдин абзыйым кәләш ҡуйынында бер төн генә йоҡлап кире фронтҡа китте лә Курск

дуғаһындағы дәһшәтле алышта танкыһында янып ҡалды (күрше Шишмә ауылындағы әсәһе яғынан яҡын туғаны Зәбихулла абзый тап шул һуғышта булып, шуны үҙе күргәнлеген һөйләне һуғыштан ҡайтҡас). Солтанов Ямырҙа Бикмырҙа улының шәжәрәһе ошоноң менән өҙөлдө…

Һуғыштың ҡыҙыу мәлендә үк көмөш миҙал тағып ҡайтҡан беренсе герой-һалдат — Рамаҙан ағай Һунарсин булды ауылыбыҙ тарихында. Аяҡ-ҡулы ла теүәл, башы ла үҙ урынында, әммә фронттан башкөлләйгә ҡайтарылған, тинеләр. Сәбәбе — фашист пүләһе түгел, ә «Кох таяҡтары» имеш. Ҡарлы окопта ятҡанында күкрәгенә үтеп кергән дә төҙәлмәҫлек туберкулез йәки сихут сиренә һабыштырған ағайыбыҙҙы ул «таяҡтар».

Минең буласаҡ хәләл ефетемдең атаһы Ғиниәтулла ағай ҙа тап шул сәбәпле ҡайтарылғайны һуғыштан: «Кох таяҡтары» ватыҡ танкыһын йүнәтеп танк аҫтындағы ҡарҙа ятҡанында кереп оялаған уға. Ҡайтыуы менән уны хеҙмәт фронтының яуаплы урынына — колхоздың орлоҡ келәтенә ҡуйғайнылар мөдир итеп. Ҡышҡы сатлама һыуыҡтарҙа яҙғы сәсеүгә орлоҡ таҙарттырып ятҡанында баяғы «Кох таяҡтары» уғата аҙғынланып, ут эсенән башы иҫән сыҡҡан ағайыбыҙҙы ҡәбергә илтеп һалды. Рамаҙан ағайға ла шундай уҡ яҙмыш юралған имеш...

Хәтерҙә, Рамаҙан ағайыбыҙҙың көмөш миҙал тағып ҡайтыуын ишеткәс тә, беҙ, малайҙар, тай-тулаҡтай дөбөрләшеп, йәштәр кис ултырған өйгә эркелдек. Шуныһына рәхмәт: малай-шалайҙар тип ҡыуманылар — апайҙарыбыҙ киң күңеллелек күрһәтте. Быларына ла сират етер, быларын да һыпырып алыр был һуғыш, тигәндәрҙер инде... Һике йөҙлөгөнән урын ҡалмаһа ла, мейес буйына индереп һалған сытыр-утын өҫтөндә кинәнеп ултырабыҙ, ә ике күҙебеҙ — ишектә. Бына Рамаҙан ағайыбыҙ бер нисә үҫмер ҡушаһында дөбөрләп килеп керҙе, энәнән-ептән генә йәшел һалдат кейемен, киң ҡунислы кирза итеген күреп иҫебеҙ китте. Әммә тамам һушыбыҙҙы алғаны — һалдаттың киң күкрәгендә балҡып янған, «За отвагу» тип яҙылған аҡкөмөш миҙал ине. Йылдар үткәс кенә белдем: айырым шәхси батырлыҡ өсөн генә бирелә икән был миҙал һалдатҡа (Рамаҙан ағайыбыҙ уны штык һуғышында бер нисә фашисты сәнсеп үлтереп алған). Рамаҙан ағай, итәғәтле сәләм биреп, һике ситенә ултырырға ла өлгөрмәне, йәштәр унан, шау-гөр килешеп, фашистарҙы ҡайһылай ҡаҙап дөмөктөргәнен һөйләп биреүҙе үтенделәр. Рамаҙан ағай хисләнеүҙән ырығып тороп, мейес алдында ятҡан оҙон киҫәүҙе штыклы мылтыҡ һымаҡ алға һоноп тотоп: «Бына ошолай итеп!» — тип, һыңар аяғын һике йөҙлөгөнә баҫҡайны, саҡ ҡына торған һике тигәнең өҫтөндә теҙелешеп ултырған ҡыҙҙары менән ҡуша дөһөр-шатор емерелеп төштө лә китте, көлкө баҫты өй эсен...

Йәйгеһен бесән ваҡытында кистәрен ауыл клубында йәштәрҙең уйыны ҡыҙҙы. Төбәгебеҙҙең төрлө ауылдарынан, хатта Һаҡмар аръяғы татар яҡтарынан да матур-матур ҡыҙҙар, һирәк-мирәк һуғыштан ҡайтҡан егеттәр, ә күберәген етеп килгән үҫмерҙәр эркелер ине. Жултыйҙың Нуғай биҫтәһенән яҡшы ат егеп, әшнәләрен ҡушарлата ултыртып, суйын ҡаҙан кеүек ҡара түңәрәк йөҙлө, яҫы ҡайыш билбаулы Миңнәхмәт килә; ҡыңғыраулы саратский гармунының тере әҙәм теле менән, берсә, һулығып илауы, берсә, гөлдөрләп көләүе Олобайҙың уртаһынан уҡ ауылыбыҙҙы һиҫкәндертеп ебәрә лә йәштәрҙе клубҡа өйөрә...

Беҙҙең һымаҡ ыбыр-сыбырға урын юҡ эстә — тыштан нигеҙ буйында тороп, асыҡ тәҙрә төптәренә аҫылынып шәйләйбеҙ. Иң ҡыҙыҡ күренгәне — ҡуныстарының аҡ эслеген ике иле тышҡа әйләндереп кейгән (шундай мода бар ине) йылтыр хром итекле Рамаҙан ағайҙың бейеп килеп берәй ҡыҙ ҡаршыһына баҫҡанында уң аяғы үксәһенең ҡапыл үргә сөйөлөп китеп төшөүе (бейеү стиле ине). Гел генә ҡабатланғас, беҙ, малайҙар, күренеште үҙебеҙсә бик оҫта файҙаландыҡ: тәҙрә төбөнә ваҡ ҡына таштар өйөп, ағайыбыҙҙың бейеп килеп баҫыуын сабырлыҡ менән көтәбеҙ ҙә һуңғы аккорд биреп үксәһе сөйөрөлгән мәлдә генә унда ташборсаҡ ырғытып өлгөрәбеҙ. Һис ни шәйләмәгән ағайыбыҙ ташборсаҡты, рогатканан атҡандай ҡыҙыулатып, үксәһенән йыраҡҡа сөйөп ебәрә, таш барып тейгән тәңгәлдә шау-шыу ҡуба...

Игендәрҙе көс-хәлгә урып бөтөп, алыҫ Тирәкле яғындағы баяғы Этбауырүҙәк баҫыуына эҫкертләп өйөп ҡуйғас, көҙгө ямғырҙар баҫылыу менән шунда ырҙын ҡороп, ҡара көҙҙән алып ҡыш буйына шул игенде комбайндан үткәртеп һуҡтыртыу башланды, төнгө ырҙын ҡарауылсыһы итеп батыр һалдат Рамаҙан ағай тәғәйенләнде. Иген һуҡтыртыусылар ылауҙарҙа ауылдан иртүк килеп, көнө буйына эшләп, кис ҡайтып китәләр, ә Рамаҙан ағайыбыҙ колхоздың ҡайһылыр кулактан ҡалған ҡатҡан толобон кейеп, төнгөлөккә иген ҡарауылларға ҡала. Ана шулай ҡыш үтә һәм Этбауырүҙәк баҫыуына «Рамаҙан ырҙыны» тигән исем бирегә. Ләкин әйтәһе килгән һүҙем әйтелеп бөтмәне әле.

Ырҙындағы ашлыҡ тамам һуғылып, фронтҡа оҙатылып бөткәс, яҙға табан Рамаҙан ағайҙың, өҫтә әйтелгән Ғиниәтулла ағай һымаҡ уҡ, «Кох таяҡтары»нан йүнкеп, хәстә яҫтығына ятыуы мәғлүм була. Шул айҙарҙа, ғәҙәттәгесә, халыҡтың ашарына бөтөп, тамағы аҫка киҫелеп, күп бала-сағалы һәм һыйырһыҙ ғаиләләрҙә шешенә лә башлайҙар. Бына шул саҡ Рамаҙан ағайыбыҙ, ятҡан урынында кистәрен хәбәр йөрөтөп, тол ҡалмыш һалдат ҡатындарын берәм-һәрәмләп эргәһенә алдырта. «Рамаҙан үлергә йыйынған — үҙе менән бергә һуғышҡа киткәндәрҙең хәләл ефеттәре менән бәхилләшә», — тиҙәр был хаҡта. Ләкин Рамаҙандың уйы башҡаса: «Бына һеҙҙең, бахырҡай һалдаткаларҙың, хәл-әхүәлен ҡайғыртам. Бала-сағаларығыҙ ас. Бөгөн-иртән быҙауларға тейешле һыйырҙарығыҙ ҙа юҡ, булғаны ла ҡаҡ аҙбарҙа утлыҡса кимереп тора. Бригадир менән һөйләштем — ылауҙар бирәсәк. Бергә-бергә йөрөгөҙ. Минең ырҙынға (йәғни Рамаҙан ырҙынына) барып, малдарығыҙға ашатырға һалам-фәлән тейәп ҡайтығыҙ, буран сығып юл ҡалмаҫы элгәре. Һаламды, минең ырҙындағы фәләнсә рәттәге кәбәндең төгәнсә башындағы көрттө йырып төшөп, кәбән төбөндә өйөлөп ятҡан кәбәкте тоҡтарығыҙға тултырып алығыҙ, аръяғын үҙегеҙ белерһегеҙ. Әммә утыҙ ике тешегеҙҙең араһынан ярты өн дә сыҡмаһын. Быны мин һеҙгә әйтмәнем, ә һеҙ ишетмәнегеҙ!»

Шул рәүешле юл ҡалғансы ауылдың өс урамынан әллә нисә ылау барып ҡайта Рамаҙан ырҙынына. Астан үлергә етешкән һалдат балалары шул «һалам»ға тотоноп тере ҡала. Бакты иһәң, көмөш миҙаллы Рамаҙан ағабыҙ ҡышҡыһын ырҙын ҡарауыллағанда ғәҙеллек буйынса һалдаткаларға тейешле бойҙайҙы бер нисә кәбән төбөнә күмеп ҡалдырған...

Инде фронтовиктарыбыҙҙың төпсөгө тураһында. Төпсөгө, сөнки һуғышҡа эләккән һуңғы быуын — 1927 йылғыларҙың береһе ине ул, ауылдашыбыҙ Йәнбирҙин Әнүәр тигән уҙаман. Туғыҙҙан үрелгән һәм ҡара дегет һеңдертелгән оҙон ҡайыш сыбыртҡыһын һөйрәп көн дә кистәрен көтөүҙән ҡайтышлай (ауыл малдарын көтә ине) Һаҙлыйылға буйындағы тимерлек алдына туҡталып, ниндәйҙер йән асыуынан тештәрен ҡыҫып, шунда торған ат һабанын оҙон сыбыртҡыһы менән кинәнепме-кинәнеп яра — хатта сәғәткә һуҙыла үле тимерҙе туҡмауы. Был шөкәтһеҙ күренеште көн дә үҙе эшләгән орлоҡ келәте алдынан сәйерһенеп күҙәтеүсе буласаҡ мәрхүм ҡайным Ғиниәтулла абзый бер саҡ егеттән һорай ҡуя:

— Әнүәр ҡустым, ниңә һабанды туҡмайһың?

— Мин һабанды туҡмамайым.

— Нимәне туҡмайһың һуң?

— Совет власын туҡмайым, — тип ысҡындыра тегеһе (ярай, силсәүит Ғәлләмгә барып етмәгән — йәшләй генә башын ашарҙар ине)...

Армияға алынаһы көҙөндә Әнүәр таҡта фургон менән иген ташый ырҙынға (баҫыуҙағы комбайн бункерынан). Арбаһына ултырып төшкөләккә ашарға ҡайтҡанында ла, кискеһен дә өйгә бер күнәк «ҡыҙыл балсыҡ» күтәреп керә лә (имеш, мейес һыларға) тиҙ үк мейес араһына илтеп ауҙара икән.

— Балам, ни ҡылыгың был? — тип һорай икән ых-гых килеп мәшәҡәтләнгән улынан Мәғрифә инәй.

— Үҙем һуғышҡа киткәс мейес төтәмәһен, тип, ярыҡтарын балсыҡ менән бөтәштерәмен, әсәй.

Егерме етенсе йылғыларҙы ла алып бөтөп, ҡыштың яртыһы ауышып, Мәғрифә инәй менән кинйәһе Хөбәйбә тамам асығыр ваҡыт еткәс, алыҫ Манчжурия еренән серле хат килеп төшә: «Аслы-туҡлы йәшәгәнегеҙҙә әсе төтөн йотоуҙары һис еңел булмаҫ, әсәй. Мейестең ярығы асылмаҫы борон, Хөбәйбә һеңлем бесәй кеүек үрмәләп кенә мейес араһына керһен дә, иң төптәге ҡалҡыбыраҡ торған кирбесте ҡымшатып, ҡулын тығып ҡараһын; шунан һуң нимә эшләргә икәнен үҙегеҙ белерһегеҙ».

Ағаһының яҙғандарын үтәгәс, шатлығынан ҡысҡырып ебәргән Хөбәйбә: «Әсәкәйем, төтөн тигәне — бойҙай икән дә баһа!» Баҡтиһәң, совет власының нимә икәнен яҡшы төшөнгән Әнүәр, күнәгенең өҫтөнә генә ҡыҙыл балсыҡ ҡаплатып һалып, бойҙай кереткән икән...

Тик шуныһы, манчжур гаоляндары араһында ете йыл хеҙмәт иткәндән һуң да һағынып-зарығып ҡайтманы шул Әнүәребеҙ тыуған-үҫкән иленә — «икмәккә бай Ташкент»ҡа олағып юғалды. Ере өсөн йәнен бирерҙәй аҫаба башҡорт тоҡомон да биҙҙерткән шул ғәзиз тыуған төйәгенән уны һабан туҡматыуға тиклем апарып еткереүсе «һөйөклө» совет власы...

Бына шулай ағылды беҙҙең «баллы балалыҡ» осоро...

Көндәрҙең береһендә Бәхтиямал еңгәйем хат эсендә алған фронт гәзите ҡырҡындыһын Фәрит ҡустым миңә килтереп күрһәтте — Һибәтулла абзыйымдың һуғыштағы батырлыҡтары, немец фашистарын нисек итеп ҡыйыу ҡырыуы тасуирланғайны унда һәм мин быны менән сикһеҙ ғорурланып, «Фәрит

ҡустыма» тигән тәүге шиғырымды сығарҙым: «Тау баштары тап-таҡыр,/ Табыла унда баҡыр./ Һуғышҡа киткән атайың/ Ордендар тағып ҡайтыр», — тигән юлдар бар ине унда (әммә ул да ҡайтманы)...

Инде татарса уҡырға...

Белмәйем, беҙ торған колхоз өйө башҡа берәүгә кәрәктеме икән, мин үҙебеҙҙең башланғыс мәктәпте уңышлы тамамлағас, ҡабат Сәнкем-Биктимергә — Ғилаз бабайымдарға күсенеп ҡайттыҡ (үҙебеҙҙең өйҙөң Ғилаз бабайымдар яҡ аҫҡы бер нигеҙһе сереп төшкән, ә мейесен колхоз һүтеп алғайны) һәм мин Жултыйҙағы ете йыллыҡ мәктәптең бишенсе татар синыфына уҡырға барҙым. Ҡасандыр беҙҙең мул бесәнле Олобайҙы баҫып алмаҡ булып бабаларыбыҙ менән ҡан ҡойошҡан Нуғай биҫтәһендәге киң күңелле Кәлимулла бабайҙың (һуңынан уны ырҙындағы колхоз игенен ҡарауыллағанда бурҙар һуғып үлтерҙе) өйөнә килтереп урынлаштырҙы әсәйем, ул бабай атайымдың яҡшы дуҫы булған. Минән кесерәк Сәлисә исемле бик үткер ҡыҙҙары (хәҙер Һунарсыла беҙ һатып киткән йортта йәшәй, уҡытыусы), Әмир тигән аҙ һүҙле, алсаҡ күңелле улдары бар (барыһы ла мөләйем аҡ йөҙлө нуғайҙар ине). Тормоштоң ауырлығына, өйөбөҙҙән килтергән аҙналыҡ ризыҡтың наҡыҫлығына, ул ғына ла етмәһә, үҙемдең күңел ҡайтарғыс сирләшкә (төндәрҙә ҡай саҡ бәүелһеҙләнә инем) булыуыма ҡарамаҫтан, бөтә ғаилә миңә яҡты йөҙ, күңел йылыһын бирҙе, ә йомарт ҡуллы хужабикә Лотфиә әбей үҙ балаһылай ихлас ҡараны мине.

Татар синыфында уҡыу күңелле булманы әммә: «Башҡырт, башында биш ҡорт», «Ун башҡыртҡа — бер иман», «Исәүән башҡырт», — тигәндәрен ишетеп ҡыйырһытылдым. Татарса «ч» өнөнә телем әйләнмәгәнлектән, урыҫса ҡаты «ч» итеп әйтеүемдән дә, өҫтөмә әсәйем ҡулдан һырып кейҙерткән ҡалын сепрәк бишмәтемдән дә көләләр ине синыфта. Ошолар бөтәһе Жултыйға ҡарата йәмһеҙ тойғо ҡалдырҙы. Ләкин яғымлы яғы ла онотолмай: мәктәптәге үҙемдең синыфташым Сәхәбитдин тигән алсаҡ малай менән бик ныҡ дуҫлаштым. Уҡыуҙан ҡайтып баш-күҙ алыу менән үк, уларға йүгерер инем, сөнки Хөснөтдин исемле һомғол буйлы ағаһы тимер юл станцияһы янында боронғо казактар казармаһына һуғыш ваҡытында килеп урынлашҡан Боғорослан татар-башҡорт педучилищеһендә уҡый (әйткәндәй, шағир Марат Кәримов, журналист Мәргән Мырҙабәков, Дауыт Юлтыйҙың улы Таң да шунда уҡып киткәндәр), училищеның ул заман өсөн шаҡтай бай китапханаһынан алған китаптарын уҡырға бирә миңә (үҙебеҙҙең мәктәптә китапхана юҡ). Шуның аша беренсе тапҡыр Жюль Верндың татарсаға тәржемә ҡылынған романдары менән таныштым, бер керешһәм, өҙөлә алмайынса, иҫем китеп һыу кеүек эсер инем.

Уҡыусылар тау яғына мәктәпкә тура юлдан йөрөһөн өсөн, Мәрҙеғәлләм тигән мәктәп директоры Суртанлы йылғаһы аша бейек итеп таҡтанан һалдыртҡан тар ғына, ләкин оҙон «Мәрҙеғәлләм күпере»нең боҙлауыҡтарына тая-тая йүгереп сыға инек тә ҡаршылағы текәнән ҡыҙыу жыйлатып санала шыуа инек кистәрен. Шундай бер мәлдә санам ситкә ҡайырылып, уң аяғым боҙланып ҡатҡан

яр киртләсенә бәрелде, тороп баҫа ла алмаған, фатирыма санала һөйрәп алып ҡайтып ташланылар ҙа тиҙ арала өйгә лә илтеп ҡуйҙылар. Тарамыштары тартылып шешкән аяғым биллеген дауалап ун биш көн ятҡас ҡына, ҡәҙимгесә атлап мәктәпкә килдем. Әлегәсә шуны иҫемдә тотоп, текәнән санала шыуған бала-сағаны күрһәм, аяҡтарығыҙҙы йыйнап ултырығыҙ, тип киҫәтәм.

Яҙ ҙа килеп етте. Йәйәүләп яҙғы каникулға ҡайтып барғанда, Ҡаҫмартыбыҙ ҡапыл ташып китеп, Олобайыбыҙға йәйелгән боҙло һыу диңгеҙенән оҙон араны бил тиңентен кисеп үтергә тура килде, ҡайһы тәңгәлдәрҙә күкрәктән ине һыу. Өшөп-ҡатып, баштан-аяҡ лысма һыу килеш, Һунарсылағы әлеге Миңсылыу апайымдарға (Бибиғәфифә өләсәйем менән бер туған Бибилатифаның ҡыҙы) көскә килеп йығылдым. Дөрләп янған мейес алдында ҡыҙынып, өҫ-башымды киптереп, иртәгәһенә лә мине көтөп торған, ажғырып ташҡан Һаҙлыйылғаны йәнә лә билдән кисеп сығып, Сәнкем-Биктимеребеҙгә — Ғилаз бабайҙарға өйҙәш йәшәгән әсәйем янына саҡ ҡайтып еттем. Һыуыҡ ныҡ үткәнлектән, һул аяғым тубыҡтан түбән тубалдай шешеп китеп, хәстә түшәгенә йығылдым — 1944 йылдың яҙы ине был.

Ятыуым оҙаҡҡа һуҙылды. Һуҙа алмай гел бөкләп тотҡанлыҡтан, шул аяғым тубыҡ быуынынан ҡатып, «Г» хәрефе шикелле кәкрәйеп ҡалды. Шешек ярылып, ҡан ҡатыш эрен, һөйәк кимектәре ағылды, һис кенә лә төҙәлә алмаған сей яраға әйләнде. Ҡуҙғала алмайынса, бөтәһе аҫтымда булды... Өйҙәге һәммәбеҙгә бер буй урындыҡ (һике) ине, шунда төрлө еҫ аңҡытып һәм ыңғырашып хәрәкәтһеҙ мин ятам. Үҙҙәре лә саҡ һыйышып йәшәгән бер бүлмәле тар ғына өйҙә киң күңеллелек менән беҙҙе түҙеп торғоҙған Ғилаз бабайыма, Мәликә һәм Латифа әбейҙәремә мең рәхмәтлемен — мәрхүмдәрҙең йәне йәннәттә булһын!

1945 йылдың да йәмле яҙын, шул көйөмсә тубыҡ сәнсеп һике башында ятҡан килеш, тәҙрәнән донъяны зарығып ҡарап ҡаршыланым. Күҙ алдымда урам ситләп күк әремдәр ҡалҡынды, күбек кеүек бөҙрә баштары талғын елгә бәүелде. Тышҡа атылып сығырҙай тилереүсене, уғата йөрәкһетеп, сихриәтле-тылсымлы ауаздар ҡолағыма яғылды, йәнемде иркәләне: «Һуғыш бөткә-ә-ән! Беҙ еңде-е-ек!» Бынан да ҙурыраҡ бәхет, изгерәк хәбәр юҡ ине...

Минең хаҡта ауыл гиҙгән ғәйбәттәрҙе лә килтереп еткерерҙәр ине: әжәл ҡорто кимерә икән аяғын, оҙаҡламай үлергә тейеш икән... Яңғыҙ балаһының ошондай хәлгә тарыуынан әсәйемдең йөрәккенәһе ҡайһылай ҡанһырағандыр — Хоҙай үҙе генә белә.

Әммә йәшәү теләге көслө ине — урынымдан тороп ултыра башланым. Марля бәйләме тышына һүлдәре һарҡып сыҡҡан, тубыҡ быуынынан баяғы «Г» хәрефенә оҡшап кәкрәйеп ҡатҡан хәрәкәтһеҙ аяғымды ҡулдарым менән алға этәреп шыуҙыра-шыуҙыра, һике йөҙлөгөнән төштөм, бейек буҫағаны үттем, бесәй һәм ҡаҙ үләндәре күпереп үҫкән йәшел донъяға сумдым. Ярам быуына эркелешкән себендәрҙе ҡыуалап, сағыу ҡояшта ҡыҙындым...

Оса менән шыуышып йөрөүҙән арынырға, һыңар аяҡҡа булһа ла баҫырға кәрәк ине. Ҡурысын һыҙырып алған йәш йүкә ағасының һуйҙан һөйәндәрен һоратып алып, аҫҡы башын тубығым тәңгәлендә ҡайыш ҡулса менән ҡыҫып нығытып, шуға тиклемге өҫкө өлөшөн ҡап-урталай буйҙан-буй ярып сығарып,

һуҙған ҡулым етерлек тәңгәлдә шул ярымталар араһына арҡыс тотҡалар ҡуйып, уларҙы ике яҡтан ҡаҙаулап тоташтырып, өҫкө осҡа ҡултыҡ таянысы беркетеп, фронттан ҡайтҡан аҡһаҡтарҙан күрмешләй, ҡултыҡ таяҡтары әтмәләп алдым, һул аяғым «Г» хәрефеләй артҡа кәкрәйгән килеш, тертәңләп атлап киттем. Шулай аҡһауымды күргән бәғзеләр: «Һунарсыла уҡығанында ҡултыҡ таяҡ таянып уйнағайны, көҫәгәнен бирҙе Хоҙай», — тип, әллә ҡыҙғанып, әллә үсәп һөйләнеләр...

Һүр. 15. Һулдан: атайым һәм И.Д. Пудовкин. Сабатар ҡасабаһы, 1933.

Ҡыбырлай башлауым менән үк, башҡа сығыу — үҙ аллы йәшәү сараһын күрҙек. Был саҡ өйөбөҙ мейесһеҙ, ә Ғилаз бабайымдар яғына ҡараған бураһының иҙән өҫләп аҫҡы бер ниргәһе сереп төшкән дә өй эсе күренеп тора ине (әлегәсә шул хәл төшөмә керә). Әсәйем ҡайҙандыр һыңар ғына бүрәнә заты тейәп килтереп, шуны мин тишеккә керетерлек итеп үлсәп юныштырҙым да, Ғилаз бабайым оҙон һуйыл-рычаг ярҙамында бураны шаҡарып күтәрткәс, бүрәнәне тишеккә ҡыҫтырып, төшөп китмәҫкә бармаҡ йыуанлыҡ ҡорос тырма тештәре ҡағып нығыттыҡ, ә ярыҡ-йороҡтарын балсыҡ һылап бөтәштерҙек (шунан биреле, ошо йәшемә еткәнсе, ҡурҡынислы төш күреп тертләп уянам: Сәнкем-Биктимерҙәге шул өйөбөҙҙөң аҫҡы ниргәһендәге тишеген бөтәштерергә өлгөрмәйенсә ҡыш еткән имеш...). Ҡалын ҡарағас таҡтанан юнылған мейес ҡаҙнабыҙ ҙа, һүтеп алынып, солан мөйөшөндә һаҡланған икән, алай ҙа. Урынына кире ҡороп, эсенә тупраҡ төйгөсләп тултырҙыҡ. Ҡаҫмарт һыуы Һаҡмарға ҡушылған тәңгәлдә Ырушала (Рощала) яр буйы ҡомло балсыҡ ине — әсәйем менән шунда төшөп өс йөҙләп кирбес һуҡтыҡ (Хисамитдын олатайымдан алдыҡ ҡалыпты). Һуңынан был «Кирбес һуғам» тигән шиғырымда сағылды.

Кирбестәрҙең етмәгән ике йөҙләбен Һунарсынан — Бәхтиямал еңгәмдән һатып алдыҡ та (шуның менән дә кәсеп итә ине ул) шул уҡ ауылдың башҡорт мейесе оҫтаһы Йәмилә апайҙы саҡырып (Солтановтарҙың бер тармағының ҡыҙы ул — Мусаҡаев Толомғужаға кейәүгә биргәндәр) килтереп, мейес сығартып алдыҡ (һуңынан мин үҙем дә өйрәндем ул һөнәргә). Ут яғып ебәреп, мөрйәбеҙҙән тере төтөн борлатҡас, беҙҙән дә бәхетлерәк кеше булмағандыр, моғайын.

Абруйлы фельдшерыбыҙ Илья Дмитриевич Пудовкиндың (һүрәттә уңдан И.Д. Пудовкин һәм атайым. Сабатар ҡасабаһы, 1933 й.), атай дуҫының, өйрәтеүе буйынса, тубыҡ быуындарымды йылыта һәм тартып ҡымшата торғас, аҡрынлап

яҙлыға һәм аяҡ осом ергә тейер хәлгә килә башланы, сей ярам ғына һис тә уңалмай ине. 1946 йылдың йәйендә колхозыбыҙ идараһы Солтанов Хисамитдин олатайымды, бер арыҡ ат ектертеп, мал-тыуар дауаһына һаҫы дарыу — креолин ҡайтартыу өсөн, Ырымбур ҡалаһына юлландырҙы, ул шундағы «профессорға күрһәтергә» мине лә арбаһына ултыртып алып китте. Насар ат тояғы менән юлда өс кис ҡунғас ҡына, саҡ барып еттек ҡалаға; йәй айы тип өҫтөмә хатта бишмәт тә алмағанлыҡтан (әсәйемдең дә башы етмәгән), даланың төнгө һыуығында дер-ҡалтырап, арбалағы бесәнгә күмелеп ятып таң аттыра инем, ә ниндәйҙер бер ауыл эргәһендә аҙғын ҡаҙаҡтар атыбыҙҙы урлап китә яҙҙылар...

Ауылда мин Юлдашбаев Сәйетбаттал тигән дуҫымдың иҙән аҫтына йәшерелгән, сөнки «халыҡ дошмандары»ның әҫәрҙәре рәүешендә тыйылған Булат Ишемғолдоң — урмандағы партизан тураһындағы «Ҡарағош», Ибраһим-Ҡыпсаҡтың Ырымбур, ундағы Зәки Вәлидов хәрәкәте хаҡындағы «Түңәрәк өҫтәл» тигән китаптарын һорап алып уҡығайным, һәр саҡ шулар хаҡында уйланып йөрөнөм. Каруанһарай тәңгәленән йөрәгем жыулап уҙҙым...

Олатайым ҡала биналарының береһенә килтереп, саллана башлаған өскөл һаҡаллы, урыҫ бабай ҡиәфәтендәге профессорға алып кереп күрһәткәс, аяғымдың марля бәйен систертеп, ярам тирәһенә бармағын баҫып-баҫып ҡараны ла: «Астемиелит», — тип, йөҙөн саҡ ҡына йыйырып һөйләнде, дарыу алырға рецепт яҙып бирҙе. Өйөбөҙҙә булған барлыҡ аҡсаны — егерме биш һумлыҡты, күлдәгемә ҡуйын кеҫәһе тегеп, һалып ебәргәйне әсәйем; Хисамитдин олатайым шуға ишаралап, «бир, бир» тип шыбырлағас, ояла-ояла, сығарып һалдым өҫтәлгә. Профессор, шундайын да ҙур аҡса алдында һис тә иҫе китмәгәнлеге менән мине хайран ҡалдырып, аҡсаны тырнап алып кеҫәһенә тығырға һис уйламай, һул ҡулы менән өҫтәл тартмаһын асты, уңының илтифатһыҙ хәрәкәте менән шунда ышырып төшөрҙө лә ябып та ҡуйҙы... Уның яҙыуы буйынса аптеканан алған күрән төҫтәге ҡуйы һәм күңел укшытҡыс балыҡ майлымы, әллә татлымы дарыу, байтаҡ ваҡыт ерәнә-ерәнә эсһәм дә, шифалы булып сыҡты, буғай — ярам йәйлап бөтәште лә, баҫҡанда ауыртһа ла, ҡултыҡ таяҡтарын ташлап, кәкре башлы һыңар ғына таяҡ ярҙамында туйтаңларға керештем, бер йылдан һуң унырһын да сүплеккә быраҡтырҙым.

1947 йылда колхоз идараһы, әсәйең ҡартайып бара — урынына кеше кәрәк, ә һинең ише аҡһаҡйәнгә ғүмерлек икмәк булыр, тип, мине район үҙәгебеҙ Йәнсурала (Бәкәтәрҙә) асылған ветеринария санитарҙары әҙерләүсе алты айлыҡ курсҡа юлландырҙы. Шиғырҙарҙы ла арыу уҡ ҡына яҙыштыра инем инде, фатирым хужабикәһенең бер һылыуға күҙе төшөп йөрөгән мыҡты кәүҙәле еткән улы Рафаэль, һылыуҙың төҫ-ҡиәфәтен миңә ситтән генә күҙләттертеп, шуға бағышланған мөхәббәт шиғыры яҙып биреүемде үтенде һәм был уңышлы килеп сыҡты ла, буғай, сөнки мин курсты тамамлап ҡайтып киткәс тә егет, хат аша үтенеп, мөхәббәтнамәләрҙең дауамын бер нисә тапҡыр яҙҙыртып алды, аҙаҡ уларҙың ҡыуанысла ҡауышыуын ишеттем. Әммә, аҡыл һәм оҫталыҡтан да бигерәк, хыялыйлығым өҫтөнлөк иткән, буғай, сөнки, үрмәксенән күрмәкселәй, бөйөк Гоголь дә әҫәренең ҡулъяҙмаһын утҡа яҡҡан, тип рухланып, өйрәнсек тәүге

шиғырҙарым һәм әкиәт-поэмаларым теркәлгән бер нисә ҡуйын дәфтәремде мейескә ырғытҡан булдым...

Бер-ике йыл ғына эшләгәнмендер «мал духтыры»лыҡта, әсәйемә ярҙамлашып; артабан колхозда келәтсе лә (кладовщик), хисапсы ла булып йөрөнөм. Трактор һабансыһы ла (прицепщик), бесән тырматыусы ла, ат егелгән «лобогрейка» тигән машинала иген урыусы ла булдым — ни ҡушһалар, шуны үтәргә тырыштым. Аттар етешмәй, күпселек эштәрҙе үгеҙ егеп башҡарҙыҡ. Ағастан юнып үгеҙ ҡамыты яһарға, ат ҡамыттарына йүкәнән — мөйәт, ә яҙғы һабанда ҡайыш тәртәгә (постромкаға) ҡурыстан ыңғырсаҡ үрергә өйрәндем. Шулай уҡ йәш йүкә ағастарының ҡабығы ҡурыстан бик шәп сабаталар үреп, һабанда йә бесәндә йөрөгән туған-тыумасаның аяҡтарын бөтәйттем, ҡыр эшендәге был еңел һәм әрһеҙ кейемде үҙем дә яратып кейҙем. Ошо һөнәргә урыҫтан өйрәнгәнлектән, сабатаны үксәнән башлап үрҙем (ә татар сабатаһын башынан башлайҙар). Күҙ асҡыһыҙ әсе бурандарҙа баяғы Аҡай һәм Килмәк батыр ихтилалсылары гиҙеп йөрөгән тарихи Тирәкле йылғаһы буйындағы баҫыуыбыҙ Тирәкленән, үгеҙ санаһына баҫыраулап тейәп, ферма малдарына көндөкөн-көнгә һалам ташыныҡ, ә кистәрен шул уҡ арыған үгеҙҙәр менән туғайҙан өйгә яғырлыҡ утын килтерҙек, Һунарсыға төнгө уйындарға, кино ҡарарға йөрөнөк (бригадирҙың ҡаты тыйыуына ҡарамай, арып ҡайтҡан малҡайҙарҙы урлап егә инек). Бер саҡ зәһәр февраль һыуығында (селләлә) бөтмөр бригадирыбыҙ Фәзрахман абзый Байназаров етәкселегендә туғайыбыҙҙан ҡоро-һары ағас ауҙарып, биш-алты үгеҙ санаһына тейәп, Яйыҡ йылғаһы буйындағы Донская ҡасабаһының май заводына утын һатырға киттек, аҡсаһына колхоз малдарына ялатырға таш тоҙ һатып алып ҡайттыҡ. Китеп барышлай уҡ ҡаршы әсе елгә битемде туңдырып, ҡара янып шешенеп киткәнлектән, оҙаҡ ҡына төҙәлә алмай этләндем. Шунан биреле әсе елле һыуыҡтан биттәремде йәшерәм — бер туңған тән тиҙ өшөнөүсән икән ул...

Һүр. 17. Уңдан: туғаным Ирек Фәсхитдин улы Абдрашитов

Алдынғы лобогрейкасы тип район гәзитенә яҙҙылар (минең өсөн был ғәҙәттән тыш тулҡынландырғыс хәл ине), ашыҡтырып комсомолға ла алдылар (ялҡынлы комсоргыбыҙ — урыны ожмахта булғыры Ғизылбанат апай Мусаҡаева ине) — сикһеҙ елкенеү-канатланыу хистәре кисерҙем.

Күнектем мин иртә йәштән уҡ
Түгеп хәләл күкрәк көсөмдө.
Үпһәм ерҙе, ҙурлап, эштән һуң,
Ерем һөйҙө нурлап көнөмдө.

Ҡайнар тирем күпме аҡҡандыр
Маңлайымдан эш ҡыҙыуында...
Йөрәк әммә дәртле ҡаҡҡандыр,
Ләззәт иткәндер ыҙаһын да.

Эште һөйҙөм, эштән биҙмәнем, —
Ҡалъя өмөт итмәнем елдән.
Көрәшемдең ғәҙел бизмәне
Эш тауҙарын йөкмәтте көн дә.

Үтте шатлыҡ күпме елкетеп,
Көтә шатлыҡ күпме алдымда!
Илем ҡушһа, изге йөк итеп,
Күтәрермен Урал тауын да!

1951.

Матвиенко тигән бик усал агроном бар ине, осраған берәүҙе йә — «насар һөрәһегеҙ», йә — «насар ураһығыҙ» тип һүгер ине һәм уны үҙенең артында «Арыҡ Урыҫ» тип атап йөрөтөрҙәр ине. Бына шул урыҫ мине оҙаҡ күҙәткән дә, 1950 йылда мәсьәләне район етәкселеге күләмендә ҡуҙғатып, ауыл хужалығына етәксе кадрҙар әҙерләү буйынса Ырымбур өлкәһе өс йыллыҡ урта мәктәбенә колхоз иҫәбенән ебәреп уҡытырға ҡарар сығарткан. Урта мәктәп, тигәс, шатланып ризалаштым, сөнки миңә, башланғыс белем менән генә ҡалған кешегә, ниндәй ҙә булһа урта белем алырға кәрәк ине. Бик тырышып уҡыуым менән бергә, буш ваҡыттарҙы өлкә китапханаһында Ҙур совет энциклопедияһын аҡтарып үткәрәм,

Һүр.17. Алғы буйҙа уңдан икенсе -- Йыһат курсташтары араһында. Ырымбур, 01.04.1951

мәҡәләләрен, бер-бер артлы, сарсап килеп һыу эскәндәй йотлоғоп һеңдерә инем. 1951 йылдың йәйендә ун һигеҙ йәшлек егет көйөмсә сабыйҙар сире ҡыҙамыҡ менән ауырып (булмай торған хәл!), егерме көн больницала ятып (һирәк осраҡты күрһәтергә медицина институты студенттарын килтерәләр ине), ел өрһә тәгәрәрҙәй хәлһеҙләнеп сыҡтым...

Беренсе курсты уңышлы ғына тамамлап, көҙгө бер сулала ауылға ҡайтҡас, минең йылғыларҙы армияға һыпырып ала башланылар. Сәлимә абыстайымдың улын — яңы ғына кәләш алған Ирек Әбдрәшитов туғанымды ла оҙатып

ебәргәндәр. Был ҡайтыуымда Талғат дуҫымдың да ике көн элек кенә китеүен әйттеләр. Аптыраңҡырап, өлкә вокзалынан уны оҙатышырға һәм икенсе курста уҡыуымды дауамларға Ырымбурыма йүнәлдем.

Ул саҡтағы ҡанун буйынса, ҡартайған яңғыҙ әсәнең минең һымаҡ яңғыҙ улын армияға алмайҙар — кисектерәләр ине. Өҫтәүенә, дәртләнеп керешкән уҡыуым да осланмаған. Әммә йәшерен эске хисем тынғылыҡ бирмәй: хәрби хеҙмәткә бик барғы килә, минең һымаҡ аҡһаҡлыҡ кисереп ҡыйырһытылған йәш егеткә — бигерәк тә. Үҙеңде башҡалар рәтенә ҡуйғы, бер кемдән дә кәм түгеллегеңде тойғо килә. Шул уҡ ваҡытта уңышлы ғына барған уҡыуымды тамамлау, урта белемгә эйә булыу теләге көслө...

Ырымбурҙан — Балтикҡа...

Ырымбурыма ҡайтып (Һүрәттәге алғы буйҙа уңдан икенсе Йыһат – курсташтары араһында. Ырымбур ҡалаһы, 01.04.1951.), хәрби хеҙ-мәткә саҡырылыусыларҙың ҡырмыҫҡа иләүеләй мыжғып торған өлкә туплан-дығындағы казармаларҙың береһендә Талғат дуҫымды көскә эҙләп таптым да, ошо декабрҙең аҙаҡтарында уҡ эшелонға тейәләсәктәрен белеп, уны оҙатырға мотлаҡ киләсәгемде әйтеп сыҡһам... фатирымда үҙемә лә хәрби комиссариаттан саҡырыу ҡағыҙы (повестка) көтөп ята.

Йөрәгем “жыу!” итеп китте — ғүмеремдәге иң мөҡәддәс һынау сәғәте һуҡты! Баҡтиһәң (аҙаҡ аңлауымса), һалдатлыҡҡа саҡырылмыштарҙың аҙмы-күпме белемлерәктәренең һаны етешмәй икән, шуға күрә минең кеүек льготалыларҙың да байтағын һыпырып алғандар. Быны мин, дөрөҫөн генә әйткәндә, Хоҙай Бабайыбыҙҙың үҙемә изге әмерeләй ҡабул ҡылдым да (тимәк, Илаһыбыҙ әсәйемдең дә хәлен иҫәпкә алған һәм уны ла ярлыҡаған) яҙмышымдың елкәнле ҡайығын ел ыңғайына ҡуйырға, ә кәрәгендә ҡуш ишкәкләп алға табан ишергә ниәтләндем. Рәсмиҙәрҙең ваҡыты ҡалмаған икән — иртәгәһенә үк ҡыҙыулатып комиссияға ҡуйҙылар. Ныҡ тулҡынланып керҙем, зәғиф-зәңкилек кисергән йәш кешегә хәрби хеҙмәт бойомға ашмаҫ хыял булып тойолдо. Әгәр ҙә ки алынып та, тегендәге һуңғы медицина комиссияһынан бырaҡтырылып ҡайтһаң, хурлығынан үлерлек: былтырғыһын бер-нисә тапҡыр ана шулай үтмәй ҡайтҡан ауылдашыбыҙға ҡыҙҙарыбыҙ “Үтмәҫ дауар” тигән ләҡәп һыланы... Юҡ, яҙмағандыр инде миңә армияла хеҙмәт итеү, үҙеңде башҡаларҙан һис кенә лә кәм булмаған ысын ир-уҙаман итеп тойоу...

Һүр. 18. Талғат Сапи улы Ибраһимов.

Һул аяғымдың (ул ғүмергә ҡыҫҡараҡ та, бәләкәйерәк тә булып ҡалды) бирсәләнгән яра эҙенә теклəп ҡараған докторҙарҙың шик-шөбһәһен бөтөрөрлөк һүҙҙәр әйтеп («ауыртмай!» тип), көрләгөмдө күрһәтеүгә ирештем — дәртле әүҙемлегем, бәлки, арбағандыр уларҙы... Һәр хәлдә, 1951 йылдың 23 декабрендә тимер юл вокзалына ағылыусылар теҙемендә Каруанһарайыбыҙ манараһы

эргәһенән өнһөҙ хушлашып үттем, ә көтөлмәгән был яңылыҡты әсәйемә бергә уҡыған һабаҡташым Фәйзрахман абзый ҡайтып әйтергә тейеш ине...

Мал тейәй торған тауар вагондарының һәр береһендә 30-40 кешелек команда булып, ҡат-ҡат һәндерәләрҙә ятып барабыҙ, урталыҡтағы тимер мейескә бер туҡтауһыҙ алмашлап таш күмер яғабыҙ (күмер саңына шайтандарҙай ҡарайҙыҡ). Кесе ярауҙы — ишек ярығынан, олоһон оло станцияларға туҡталғас атҡарабыҙ. Шул туҡталыштарҙа тәүлегенә бер тапҡыр йылы аш ашаталар, ҡалғанын һәр командаға ҡоролата бүлеп бирәләр. Эшелон шундайын оҙон, бәндәләре бихисап — юл буйы, бер үк поезда барһаҡ та, Талғат дуҫымды хатта осрата ла алманым. Шулай ҙа бер нәмә йәнемде елкендерҙе — көнбайышҡа диңгеҙгә табан дөрәбеҙ һәм беҙҙе Балтиҡ флотының хәрби моряктары һағауыллап килә. Барып еткәс хәл иткес һуңғы комиссия була ла берәүҙәр — хәрби диңгеҙ флотына, икенселәр төҙөлөш батальондарына (стройбатҡа) айырып алына, тинеләр. Мин иһә, “Мы — из Кронштадта” тигән кинофильмде күргәндән һуң, бала сағымдан уҡ моряктарға ғашиҡ — бөтә көсөмдө һалып диңгеҙ флотына эләгергә уҡталдым. Унан килеп, аҡһаҡ-туҡһаҡ Йыһаттың, ҡоро ерҙә генә лә түгел, ә Хәрби диңгеҙ флотында хеҙмәт итеүе — үҙе бер мөғжизә бит!

Һалҡын Ырымбур ҡышынан һуң ебешкәк ҡарҙары мәреп ятҡан Ленинградҡа килеп төштөк, киноларҙа ғына күргән мөһәбәт Невский проспекттан төнгө тынлыҡта шаптор-шоптор шәре кисеп барабыҙ. Аяҡтарымда калушлы “сүсинкә” быйма, нәҡ ауыртҡан һул аяғымдың калушы вагонда уҡ юҡҡа сыҡҡанлыҡтан (Ырымбур ыштаналары мейескә яҡты, буғай), “сүсинкә”м эсе лырҡылдап килә, һыуыҡ тейеүҙән ҡурҡам. Бер туҡталыуҙа лырҡылдаҡ һыуҙы түгеп, аяғымды муйынымдағы шарф менән солғап кейҙем — форсаты тейгән һайын, тиҙ генә сисә һалып, шарфты һығып, ҡорораҡ башын урайым... Ян-яҡтарҙағы бейек биналарҙың матурлығына иҫтәребеҙ китеп аңшайып барабыҙ, әммә хозурланырға һис әмәл юҡ — ҡыуалар ҙа ҡыуалар... Бөйөк Достоевский әҫәрҙәренән уҡып белгән, биналары һәр дүрт яҡлап нәҡ таш ҡоҙоҡтай текә торғоҙолған һәм ҡояш нурҙарынан да, йәшеллектән дә мәхрүм ҡалған оло дүрткел ихатаға килеп керҙек, йорттарҙың береһенең подъезында аҫкы ҡаттан өҫкәсә киртләс-киртләс баҫҡыстарында бөтә команда ултырып таң аттырғас, бина эсендә ятырға урын бирҙеләр. Урамға сығармайҙар, команда-команда ихатала сират тороп, дал баҙарындай оҙон ашханала ултырып ашайбыҙ. Икмәктәре бысыҡ — Ырымбур ыштаналары уны, туп итеп йомарлап, баштар аша бер-береһенә бәрешә...

Һүр. 19. Йыһат -- матрос.
Кронштадт, 1952.

Бер саҡ шулай тышта сират торғанда, иҫләмәҫтән, итле аш еҫе боҫоратыусы кухняның артҡы ишегенән Талғат дуҫым атылып килеп сыҡты ла, үҙемде ҡосаҡлап алып, ҡулыма күҫәктәй байһөйәк (бешкән ит) тотторып китте — ашнаҡсылар командаһында ҡаҙан ҡолағы тота имеш... Дуҫымдан мин бер яңылыҡ та ишеттем: стройбатҡа эләгеүселәр һуғышта нык емертелгән Ленинградты

тергеҙергә ҡала, ә флотҡа һайланмыштарҙың бөтәһен йәнә “еҙ иләктән үткәреп”, икегә — һигеҙ һәм ун синыф белемлеләрҙе диңгеҙҙә йөрөргә, ә дүрт синыфлыларҙы ҡоро ер хеҙмәтенә айырасаҡтар. Мин үҙем мотлаҡ диңгеҙҙә йөрөргә тейешмен, тип хәл ҡылдым һәм, иң мөһиме, Ырымбурҙағы 2-нсе курста уҡыуымды һигеҙ синыфҡа тиңләп, шундай белемем бар, тип тәүәккәл белдереп (танытма-фәлән һорамайҙар ине), хәрби комиссияның иғтибарын яуланым. Бизмән табағына, моғайын, ошом баҫып төшкәндер (ул заманда “һигеҙ синыф”лылар ҙа һирәк ине бит) — “диңгеҙ бүреһе” булырға теркәнеләр, дуҫым иһә стройбатта гүзәл ҡалала ҡалды. Ә мин ҡаланың бер Невский проспектынан башҡаһын күрмәгән килеш, мунсанан уҡ моряктарҙың атаҡлы ҡара хөлләһенә баштан-аяҡ төрөнөп (кейеп килгәндәрем, ни тиклем генә ҡыҙғаныслы булһа ла, кәбән хәтлем итеп быраҡтырылған дөйөм өйөмдә ятып ҡалды), төнгө Невский проспектынан икенсе тапҡыр хәрби аҙымлап уҙҙым да, үҙем өсөн серҙәр менән тулы диңгеҙҙе хәрби катерҙа кисеп, баяғы кинофильмдән белгән шанлы ҡәлғә Кронштадҡа еректем... Әммә ауылда яңғыҙ башы — ҡараусыһыҙ тороп ҡалған, ауыр эшләп, күп эшләп һаулығы ҡаҡшаған, илле алтынсы йәше менән барған әсәйемде уйлап ҡайғырам; үҙемде, берсә, ғәйепле, берсә, хаҡ тойоп өҙгөләнәм...

Уҡыу әтрәтендә аслы-туҡлы (туйғансы ашау – хыял ине) бер-ике ай һалдат һабағы алып, Ватанға тоғро хеҙмәт ҡылырға ысын күңелдән ант итеп, бер ниндәй ҙә хәрби һөнәргә лә өйрәтелмәҫтән, бер төркөм егет ашығыс рәүештә (караптарҙа кешеләр етешмәгән) Балтиҡ флотының төп төйәге Таллинға оҙатылдыҡ — “база мина тральщигы” тип аталған, палубаһы күбәләй ҙур миналар һәм һыу аҫты кәмәләренә ҡаршы сорғолтмалы бомбалар менән тығыҙ йыһазланған, командаһы йөҙ кешелек карапҡа килеп керҙек. Хәрбиҙәрҙең ашау сәғәттәре уҙған, йоҡларға йыйынғандар — өнһөҙ-тынһыҙ ас ҡарынлай ятырға әҙерләндек. Ләкин буласаҡ хеҙмәттәштәребеҙ көтмәгәндә шау-гөр килеп табын ҡороп ебәрҙеләр — өҫтәл тулы күпереп бешкән икмәк, тоҙло кәбеҫтә һәм помидор, ә иҫте иң китәргәне —

Һүр. 20. Беҙҙең карап. Һыуҙа -- фашист минаһы

бер ҡулың менән айғолағынан маҡып, икенсеһе менән елкә тиреһен семтеп тотоп ҡойроғонаса һыҙырып ебәргәнеңдә супылдап майҙары тамып торған һутлы һәм һимеҙ Исландия селедкалары ине (был һыйҙарҙы палубалағы мискәләрҙән

теләгән ваҡытта теләгәнеңсә алып тыҡшынырға мөмкин имеш)... Кронштадтан ҡарындарыбыҙ киҫелеп килгән беҙ бахырҙар, өнөбөҙмө был, төшөбөҙмө, тигәндәй, өнһөҙ-тынһыҙ ҡолаҡ һелкетеп көйшәнек, "былайһа, йәшәргә була икән бында", тигән ҡарарға килдек...

Кәрәкле һөнәргә караптың үҙендә өйрәнергә тейеш инек, моторсылар бүлегенә тәғәйенләнеләр мине. Хеҙмәтемдең аҙағынаса караптың өй дәүмәллек төп дизель моторҙарының береһен (улар икәү) хеҙмәтләндерҙем, баштан-аяҡ солярканға һәм машина майына батып йөрөнөм (өҫ-баштарыбыҙҙы һәм яҫтарыбыҙҙы үҙебеҙ йыуҙыҡ). Дөһөрҙәгән тимер "дәжжал" эргәһендә һәр дүрт сәғәт һайын вахтала торҙоҡ, бушанған һәр дүрт сәғәтебеҙҙә бөтмәҫ-төкәнмәҫ хәрби уйын тревогаларында ут ҡапҡандай йүгерештек (йоҡлау фарыз түгел — егет бул!). Мотор тәрбиәләүҙән тыш, палуба һәм трюмдарҙы ялтыратҡансы ышҡып сығыу ғына түгел, май үткәрмәҫ костюмдар кейеп караптың иң төбөндәге (бушатылған) солярка һәм машина майы цистерналарына ла төшә, үрмәләп йөрөп бысраҡ ҡалдыҡтарҙы йыя, йыуып таҙарта инек. (Һүрәттә беҙҙең хәрби карап. Эргәлә йөҙә беҙ юҡ итергә тейешле фашист минаһы). Бер һүҙ менән әйткәндә, бәләкәйҙән тупраҡта аунап, саң йотоп күнеккән мин-ябай ерекмәнде матрос хеҙмәте уғата әрһеҙләтте, кәрәккәндә һис нәмәнән ытырғанмаҫҡа өйрәтте.

Диңгеҙҙең төрлө шарттарҙағы хәлдәрен күрергә тура килде — тау бейеклек тулҡындар ажғыртҡан штормдарын да, күҙ иңләмәҫ осһоҙ-ҡырыйһыҙ һыу яланының күҙгә һымаҡ шып-шыма һәм һип-һил штилдәрен дә. Матрос өсөн диңгеҙ хеҙмәтенең иң ҡыйыны — штормдарҙа табан аҫтындағы палубаның һиртмәләй сайҡалыуы, йәки ҡапыл умырылып аҫҡа төшөп киткәнендә йә ҡалҡҡанында бөтә булған эс-бауырыңды тамағыңа ҡапландырҡан, үҙәгеңдән ҡарының атылып сығып китерҙәй уҡшытҡан, башыңды ҡыҫып сатнатҡан "диңгеҙ ауырыуы"лыр. Бирешеүселәр койкаға лыпан яталар ҙа, вахтаға һәм тревогаларҙа һикереп тороу түгел, баштарын да ҡалҡыта алмайҙар. Минең менән килгән ике урыҫ егетен ошо зәхмәт сигенмәй ыҙалағас, диңгеҙҙә йөрөргә яраҡһыҙ тип таптылар ҙа ярға "списать" иттеләр. Баштан уҡ мин был яуыздың үҙен матҡып бығауларға, бер нисек тә ҡоҫмаҫҡа һәм ҡоламаҫҡа өйрәндем — әҙәм балаһы еңмәгән һынауҙар юҡтыр ул... Диңгеҙ өҫтө ялтыр күҙгә йөҙөләй шыма ятҡан штилдәрҙә командир карапты туҡтата — рәхәтләнеп һыуҙа ҡойоноп алырға рөхсәт бирә. Кейемдәрҙе палубаға теҙеп һалып, диңгеҙгә ырғылабыҙ. Әммә ҡайһы бер

Һүр. 21. Йыһат карапта -- хеҙмәттәштәре араһында. 01.05.1953

хеҙмәттәштәребеҙ һыуҙан ҡурҡа — йөҙә белмәйҙәр икән. Карап уставында команданы йөҙөргә өйрәтеү бойоролмауы бик аптыратты мине.

Әммә хәтерҙә нығ уйылып ҡалғаны — штормдан һуң һыу өҫтөнә бәшмәктәрҙәй ҡалҡып сыҡҡан һәм мөгөҙҙәрен тырпайтышып йөҙөп йөрөгән әжәлдең үҙеләй ҡара миналар — үткән һуғыш “күстәнәс”тәре ине. Сауҙа һәм балыҡсы суднолары был “улъя”лар күҙҙәренә салыныу менән үк эфир аша ярға хәбәр итә лә уларҙы беҙ, ашығыс барып етеп, пушкаларҙан атып батырабыҙ. Шулай ҙа иң хәтәре — һыу яланында һыу аҫтында аңдып ятҡан бәрелмәле, магнитлы һәм акустикалы миналарҙы диңгеҙ киңлектәрендә, иген баҫыуында бураҙналап һабан һөргәндәй, һигеҙ йөҙ метрлы оҙон трал һөйрәп йөрөп шартлатып таҙартыу, тыныс тормош судноларына әжәл ҡырынан юл асыу. Артта, карап корпусын тетрәтеп, “гөрҫ” тә “гөрҫ” шартлау яңғырай, күккә йыуан һыу бағаналары урғыла.

Миналарҙы траллаусы (юҡ итеүсе) ошондай хәрби караптар ул осорҙа һуғыш шарттарындағы хеҙмәтте үтәүсе һанала, шартлатылған һәр мина өсөн командаға фәләнсә һум түләнеп, мина яландарын һөрөп үткәрелгән хәтәр сәғәттәр өсөн дә фәләнсә һум өҫтәлә, ә шундай күпмелер сәғәтен тултырған тралсы карап командаһының һәр береһенең сираттағы айлыҡ ялына (отпускыға) йәнә ун биш тәүлек ял өҫтәп бирелә (мин фәҡирегеҙгә лә шундай ял насип булды)... Диңгеҙҙә йөрөп ҡайтҡан һайын, Таллинн ҡалаһына ҡыҫҡа ваҡытлы ялға сыҡҡан сәғәттәрҙә республика китапханаһына, мәшһүр йырсы Георг Отсты тыңларға опера театрына йөрөнөм.

Үҙемдең хәләл бөтә хәрби бурыстарымды үтәүҙән тыш, әҙәбиәтте лә үтә лә һөйгәнлектән һәм китаптарҙы йотлоғоп уҡығанлыҡтан, йәмәғәт башланғысындағы өҫтәлмә вазифа — карап китапханасыһы эшен дә бик теләп йөкмәнем, база китапханаһының байтаҡ ҡына аҫыл китаптарын үҙебеҙгә күсертеүҙәренә өлгәштем (матростар ҡалын романдарҙы яратып уҡый ине). Үҙемә Өфөнән “Әҙәби Башҡортостан”ды ла алдыртам (журналды редакцияның үҙенән гәзит ҡағыҙына бандероль итеп төрөп ебәрәләр ине), шиғырҙарымдың «Моряк һүҙе» тигән береһе лә тап шунда 1953 йылда ташҡа баҫылып сыҡты:

Ҡай берәүҙәр әйтә: «Һеҙ — моряктар,
Диңгеҙҙәрҙә үтә күнегеҙ.
Ҡоро ер тип китмәй һис иҫегеҙ,
Ярҙа йәшәү һеҙгә күңелһеҙ!»

Юҡ, ҡоро ер бик ҡәҙерле беҙгә, —
Тыуған булған өсөн һөйәбеҙ.
Ғәзиз булған өсөн уны һаҡлап,
Шашҡын диңгеҙҙәрҙә гиҙәбеҙ.
1953. Таллинн.

Ауыр диңгеҙ хеҙмәтен шулай ҙа ауырһынмай кисерҙек, дөйөм дуҫлыҡ хисенә ҡоролған мөхит нығ ярҙам итте. Командала урыҫ телле түгелдәребеҙ уҫҡа һыйырлыҡ ҡына — бер ҡытай егете, ике татар һәм мин йәғни бер башҡорт инек,

әммә һис кем һис ваҡытта ла беҙҙе “нацмен” тип түбәнһеткәне, айырып ҡарағаны булманы, барыбыҙ бер ғаиләләй татыу йәшәнек — шундай ҙа гүзәл заманалар бар ине... Бөтәбеҙ ҙә бер төптән, әлбиттә, Бөйөк Октябрь революцияһында яулап алынған һәм Бөйөк Ватан һуғышында фашизм үләтенән һаҡлап алып ҡалынған социалистик ҡоролош, илде етәкләүсе Коммунистар партияһы өсөн йәнебеҙҙе фиҙа ҡылырға әҙер инек. Социализм юлына баҫҡан Ғәмәл Әбдел-Насер етәкселегендәге Египетҡа 1955 йылда Англия һәм АҠШ баҫымы көсәйгәс һәм Насер ҡорал менән ярҙам итеүҙе һорап совет хөкүмәтенә мөрәжәғәт ҡылғас, флот караптарында Египетты яҡлап митингылар үткәрелде һәм беҙ, матростар, сикһеҙ нәфрәтләнеп, карабыбыҙ менән беҙҙе шул ғәрәп илен яҡлау өсөн йүнәлтеүҙәрен үтендек, хистәребеҙ ысын йөрәктән ине...

Шуға тиклемге диңгеҙ хеҙмәте ваҡиғаларының береһе — И.В. Сталиндың вафаты булды. “Теге донъя”ға оҙатҡандарын бөтә команда палубала шыҡая баҫып тороп, радионан тыңланыҡ (артынса уҡ шул хаҡта яҙған бер нәҫерем һаҡланған), партия политбюроһы ағзаларының (шул иҫәптән Л.П. Берияның) илай-илай һөйләгәндәре хәтерҙә ярылып ҡалды.

1955 йылда Балтик флотына СССР Оборона министры Советтар Союзы маршалы Г.К. Жуков килде һәм Таллиндың офицерҙар клубындағы осрашыу кисәһенә караптан мине лә ебәрҙеләр. Тимер маршал Ҡара диңгеҙ флотындағы катастрофа (ҙур хәрби караптың түңкәрелеүе һәм күп ҡорбандар) һөҙөмтәһендә флоттарҙың “гайкаһын бороп” йөрөй икән... Август айында уның фарманы менән хәрби диңгеҙ флотында хеҙмәт итеү арауығы элекке биш йылдан дүрт йылға ҡыҫҡартылып, 1956 йылдың 19 ғинуарында мин дүрт йыл йәш ғүмерем үткән тимер карап менән дә, күк йөҙө мәңге ҡобарыулы Балтиҡ диңгеҙе менән дә бер айҡан хушлаштым. Эшелонға тейәлерҙән алда ҡайтыусылар перронға теҙеп ҡуйылғас, йылғыр моряктарҙың тороп ҡаласаҡ һөйәркәләре, ҡайһы берҙәре сабый балаларын күтәреп килеп, илашырға, ҡауғалашырға кереште...

Был юлы Мәскәүгәсә баяғы мал вагондарына тынҡыслап килтерһәләр ҙә, артабан беҙҙе үҙ тыуған төйәктәребеҙгә ҡәҙимге пассажир поездарында тараттылар; Ҡазан вокзалында поезға билет көткәндә, һалдат хеҙмәтенән ҡайтып барыусы бер үзбәк егете менән таш иҙәндә аҫтыбыҙға – уның һоро шинелен түшәп, минең ҡара шинелде бөркәнеп бер-нисә тәүлек йоҡлап йөрөнөк. Элегерәк хәрби хеҙмәттән ялға ҡайтышлай Мәскәүҙә Ленин мавзолейына инеп сыҡҡайным; был юлы ла шунда үзбәк егетен эйәртеп барып, Ленин менән Сталиндың ҡушарлап ятыуын күрҙек тә поездарыбыҙға ашыҡтыҡ. Мин, әлбиттә, бөтә башҡа донъямды, шул иҫәптән ғәзиз әсәйемде лә бер яры ҡалдырып тороп, туған әҙәбиәтебеҙҙең ысын мәркәзе булған һәм йәнем-тәнемде сихриәтле арбаған Ағиҙелле Өфөбөҙгә тура уҡталдым... Дүрт йыл буйы тимер карап ҡыҫымында һуғыш фәндәренә генә бирелеп, бик ныҡ үҙгәргәнмендер, күңелем тимерҙәй ҡатҡандыр, тип уйлаһам да, елеп барған вагон тәҙрәһенән Башҡортостаным тупрағына бағыуым, уның саф елдәрен һулауым менән үк ашҡынып, йөрәгем тилереп типте:

Оҙаҡ йылдар йөрөп ҡайтамын

Тыуып-үҫкән ғәзиз илемә.
Йәшлек юлым ситтә һүтелде,
Патронташ аҫып билемә.

Дүрт йыл буйы ғилем өйрәндем —
Тыуған илде һөйөү ғилемен.
Ватан өсөн дошман боғаҙын
Сәйнәргә лә әҙер инем мин!

Йәнем менән янып йөрөнөм
Илем өсөн, тиреп бар көсөм.
Шуның өсөн янмай йәшәһә,
Егет тыуа ергә ни өсөн?!.

Ҡаршы ала, боҫрап, баҫыуҙар,
Дүрт йыл көткәс, еткәс ир булып...
Күңелкәйем сыңрап түгелә
Бураҙнама, сабый йыр булып...

Япраҡтарҙың серле сырлауы
Итә икән тиле һаман да!
Әле лә ныҡ тулғып шатланам
Ҡыяҡтарҙа ысыҡ янғанда.

Әле лә мин буҙлап илайым,
Әле лә мин тулап көләмен.
Йәшәүемдең ябай байманын
Илкәйемә алып киләмен.

1956.

Өфө урамдары

Мәскәүҙән сыҡҡан «скорый» поезд вагонының тәҙрә төбөндә ҡара төндө тишерҙәй текләп киләм. Икһеҙ-сикһеҙ ҡараңғылыҡта баҙырлауыҡ утрауҙар булып электр уттары йымылдаған эреле-ваҡлы станциялар оҙон асфальт перрондарында кешеләрен ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡымырйытып ҡаршы ала ла дәррәү оҙатып ҡала. Алҡынып-алҡынып алға илткән лакомотив минут һайын, секунд һайын Өфөмдө яҡынайта, тәгәрмәстәр фәҡәт «Өфөм, Өфөм» тип кенә туҡылдай минең өсөн.

Уфа, тиһең дә тораһың,
Уфа күренәме ни?

Сит илдәрҙә йөрөү менән
Күңел һүреләме ни?

Уфалары, Уфалары,
Эрезинке туплары.
Һиндә янһа ялҡынлары,
Миндә яна утлары.

Уфа юллары быяла,
Таш булһа таймаҫ ине.
Уф, йөрәккәйләрем яна,
Һин булһаң янмаҫ ине.

Уфа ҡайҙа, Уфа ҡайҙа —
Уфа бейек тауларҙа.
Хаҡ яҙһа бер күрешербеҙ
Саҡ-Суҡ сыҡҡан айларҙа.

Шуны уйланып барам: «Каруанһарай»ыбыҙ башҡорт күңеленә киң билдәле булһа ла, Ырымбурыбыҙ тураһында бер йыр ҙа ишеткән юҡ. Силәбене иҫләткән:

Силәбе, Силәбе,
Силәбенең силәге.
Силәбенең ҡыҙлары —
Бешкән ҡурай еләге, —

тигән бер куплет ҡына мәғлүм беҙҙә. Ә бына Өфөгә, Ағиҙелгә һәр башҡорттоң күңел ҡылдары тартылған...

Башҡортостанымдың баш ҡалаһында санэпидемстанцияның эше тейешле кимәлгә ҡуйылған икән — вагондан төшөп вокзалға кереү менән үк, станцияның карантин бүлегенә йүнәлттеләр (шуны үтмәйенсә тороп, Өфөнөң рәсми ханаларының береһендә лә ҡабул ҡылмайҙар имеш). Һаҫы креолинмы, башҡа дарыумы еҫен аңҡытҡан ҡара һабын менән йыуынып сығып, эҫе мейескә элеп ҡыҙҙырылған (бөжәктәрҙән арындыртыу өсөн), көйөк еҫтәре һеңешкән матрос хөлләләремде кейенеп, шағыр-шоғор ыңғырашҡан ағас трамвай вагонында бейек тауҙан ҡалаға үрмәләгәндә заманында шул уҡ юлдан ҡаҡ арбала һелкенеп уҙыусы Туҡайҙы хәтерләнем. Үҙәктәргә үткес февраль һыуығынан вагон тәҙрәләре, шулай уҡ кондуктор мәрйә үҙе һәм туҡталыштарҙа ишектәр асылып-ябылыуын иҫкәртеү өсөн тартып ҡыңғырау сылтыратҡыс йыуан сүс арҡан — бөтәһе лә ап-аҡ ҡырау атып бәҫәргән. Ырымбурҙа уҡығанымда уҡ ҡалалағы иң арзан ҡунаҡхана — «Колхозсы йорто» икәнлеген белгәйнем, сумаҙанымды күтәреп, шунда барып урынлаштым да күңелемдә тәрән мөхәббәт ҡаҙанған «Әҙәби Башҡортостан» (хәҙерге «Ағиҙел») журналы редакцияһын эҙләп киттем. Башҡортостанымдың баш ҡалаһы урамдарында күпселектең урыҫса һөйләшеүенә әллә ни иҫ китмәһә

лә, мосолман йөҙлө әҙәмдәрҙең, күрәләтә башҡорт булғандарының да, береһе лә башҡортса һөйләшмәүе, Петербурҙың Пушкин заманы аристократтары үҙ-ара французса аңлашҡандай, татарса ғына сусылдауҙары күңелемдә сәйер тойғо ҡалдырҙы, әммә быны ишетмәмешкә, күрмәмешкә һалыштым. Аңшайып бара торғас, ниһәйәт, биналарҙың ишек баштарындағы һәм яңаҡтарындағы белдереүҙәрҙең (вывескаларҙың), һирәк-һаяҡ булһа ла, башҡортса ла яҙылғанлығын абайлап сикһеҙ шатландым (ә шулай ҙа иң элек урыҫса, шунан һуң ғына башҡортса булыуы, башҡорт теленең беренсе урынға ҡуйылмауы кәмһетте күңелемде). Ни тиһәң дә, күңелле ине милли автономиябыҙ баш ҡалаһының Ленин урамынан шул яҙыуҙарға йотлоғоп атлап барыуы!

Өфө урамдары,
Өфө урамдары,
Үтте минең алтын бала саҡ,
Үтте минең ялҡын-үҫмер саҡ
Һеҙҙе уйлап, һеҙҙе һағынып!
«Өфөкәйем!» — тиеп табынып!..

Зарығыпҡай ситтә йөрөнөм,
Илкәйемә ҡайта алмайса.
Ҡурҙы тынды һағыш һөрөмө
Һәм бешерҙе. Күренеп янмайса...

Хыялыма бына ирештем! —
Өфөмдөң мин нәк үҙәгендә!
Күҙгә ҡарап һәр йорт, һәр кеше
Йөрәк һүҙкәйен теҙә генә!

«Ит»!
«Һөт»!
«Китап магазины»! — тиеп,
Уятам ҡысҡырып һәр йортто.
Ләззәтләнеп үҙем уйлайым:
«Бына бит ул ере башҡорттоң!»

Мәшһүр Туҡай ошо урамға
Күтәрелгән бер саҡ был тауҙан.
Һытҡан йөҙөн, арба, һикертеп,
Сирле үпкәһен йолҡҡолауҙан...

Килсе, тороп гүрҙән, һин, шағир,
Заман Өфөһөнә тағы ла! —
«Зим»мы, “Зил»мы, әллә трамваймы
Илтер ине «Китап» яғына!

Күрер инең, рәхәт кинәнеп,
Яңырған хөр милләт үҙәген.
Башҡорт операһын тыңлар ҙа
Күҙләр инең халҡым биҙәген

Биналарҙан... (Башым эйәмен
Шағир яҡты рухы ҡаршында!).
Ҙур хыялдар туплап килгәнмен,
Туған Өфөм, — йылы ҡаршыла!

Типмә ситкә уйсан улыңды,
Бир көс ныҡлап аяҡ баҫырға!
Оҙаҡ йылдар йыйнап йөрөгән
Хистәремде илгә асырға!

Ҡайтарырмын, тимен, унлата,
Итһәң әгәр тик бер илтифат.
Бик һағынып ҡайттым диңгеҙҙән,
Булайымсы улың мин — Йыһат!..

Таштарыңды үбәм ҡосаҡлап,
Тапмаммы, тип, әсәм һөйөүен,
Тапмаммы, тип, атам һөйөүен...

Хәйерлегә булһын килеүем...

21.11.1956.

Ләкин ундай һөйөүҙе әҙерләп тормағандар икән шул — Өфөм миңә был юлы эшләр эш тә, һыйыныр мөйөш тә бирмәне (был хаҡта «Метеор» исемле иҫтәлегемдә яҙғанмын). Ҡорт саҡҡан айыуҙай сәбәләнеп йөрөп, яңы төҙәлөп ятмыш ҡала-ҡасабаларға — Күмертауға, Павлов ГЭС-ына, Салауатҡа барып морон төртөүҙәрҙән дә ҡананы ғына танауым. Ә бит, хатта башҡайыма таш яуһа ла, Өфөлә тороп ҡалаһы, әҙәбиәт усағына яҡын булаһы ине!..

Һуңғы сиктә Ағиҙел йылға пароходствоһының алты айлыҡ моторсылар курсына эләгеп, шуның Ҡултыҡтағы (Затондағы) ятағында ҡыш сығып, йылға өҫтө боҙҙан арсалғас та 11-енсе һанлы буксир-теплоходта ҡара көҙгәсә Ағиҙел, Ҡариҙел буйҙарынан йөк тейәлгән баржалар, һалдар тарттыртып йөрөнөк. Шул тормоштан алып, шул теплоходта тәүге проза әҫәрҙәремде — «Ҡултыҡ пираттары», «Тулҡын өҫтөндәге күбектәр» тиген сатирик повестар һәм тағы сатирик хикәйәләр, «Йөрәк яраһы», «Урман бабай» исемле моңһоу әҫәрҙәремде яҙҙым. Һуңғыһы 1957 йылда «Пионер» журналында донъя күреп, тик 1967 йылда (ун йылдан һуң!..) ғына балалар өсөн айырым китап булып та баҫылып сыҡты.

Айғолағынан маҭкып ҡоро ергә алып ырғытылған балыҡтай, күпме генә тулап-ынтылып ҡараһам да, Өфө мине прописканан үткәрмәй, ул ултырған изге

Ҡоба тау ҙа минең өсөн оторо-кирегә магнитланған — Ырымбур далаһы яғына бырағтырып этәрә ине. Әҙәбиәтебеҙҙең ҡаҙанында ҡайнап ижад итермен, тигән мөҡәддәс өмөтөмдән өҙөлөп, йылғаларҙа навигация туҡталып эш ҡалмаған, торорға мөйөш тә юҡлыҡтан, шул уҡ 1956 йылдың ҡара көҙөндә ауылыма юлландым, тыуған тупраҡҡайыма аяҡ баҫтым:

Туфлиҙарҙы һалып ырғытып,
Ялан аяҡланып йөрөйөм.
Табандарым тойоп һөйөнә
Йылылығын атай еренең.

Туҙғыта ел ҡалын сәсемде —
Уйнай бирһен, эшем юҡ унда!
Күктәр күкрәп йәшен атһа ла,
Уяталмаҫ хыял-йоҡомдан.

Бабаларҙың баллы был ере
Атамды һәм мине туйҙырған.
Йылғалары, хәтфә ҡырҙары
Һөйөү тойғоларын тойҙорған.

Ошо ерҙең Айлы төнөндә
Төндәй күҙҙе тәү ҡат үпкәнмен.
Быҫҡаҡ ямғыр яуған көнөндә
Өйҙән «мәңге» сығып киткәнмен...

Ялан аяҡланып йөрөйөм,
Ҡайтып урау-урау юлдарҙан.
Һуңғы һулышымды алырға
Ҡайҙа илтеп йығыр еларбам?..

1956.

Ауылда

Хеҙмәттә сағымда уҡ әсәйемдең, исмаһам, утын-бесән яғынан ярҙам булыр, тип, ауылыбыҙҙың мал-тыуарын көтөргә ялланмыш бер урыҫ ғаиләһен өйҙәшлеккә индереүен белгәйнем. Ҡайтырым алдынан ғына улдары өйләнгән дә ғаиләбеҙҙе ыраҡҡан...

Шинкаренколар яғымлы ла, игелекле лә, үҙебеҙ кеүек үк ябай ҙа әҙәмдәр булып сыҡты — ус яҫыһындай ғына бер бүлмәле өйҙә, йәмғебеҙ алты йән булып, тарһынмай донъя көттөк; бер нисә йылдан һуң өмә итеп үҙҙәренә йорт һалышып сығарғас ҡына, әсәйем менән икебеҙ тороп ҡалдыҡ.

Ҡайтыуымса уҡ колхоздың ҡара эштәренә егелдем; йылдыҡын-йылға, арымай-талмай, һәр йылдың дүрт миҙгеле бойорған ерекмәнлек бурысымды башҡарҙым. (Һүрәттә: колхоз малдарына һалам ташыусылар. Һулдан уңға Ҡыуатов Атауылла, Солтанов Йыһат, Бикҡужин Урал һәм Иҡсанов Урал). Төбәгебеҙҙә мин иген сәсмәгән баҫыу, мин кәбән ҡоймаған ялан ҡалманы, буғай. Ҡара көҙгәсә ҡара саң-туҙанға батып, трактор һабанының төрәндәрен көйләп туңға һөрөп йөрөгәнемдә, иртәгә Бөйөк Октябрь байрамы тигән көндә, мине коммунистар партияһының ағзаһы итеп алдылар — 1959 йылдың 6 ноябре ине. Ғүмеремдә тәрән эҙ ҡалдырған был ваҡиғаны мин, намыҫым ҡушҡанса йәшәү, теләһә ниндәй осраҡтарҙа ла намыҫ ҡануны буйынса эшләү, тип һананым, тормошобоҙҙоң етешһеҙлектәренә, бәндәләрҙең ҡыңғырлығына уғата аяуһыҙыраҡ ҡарар булдым. Был иһә шәхси яҙмышымды күрәләтә утҡа илтеп тығыу ине...

Һүр. 22. Һалам ташыусылар, һулдан уңға: Ҡыуатов Атауылла, Солтанов Йыһат (ултыра), Бикҡужин Урал, Иҡсанов Урал.

Ул йәй һыуыҡ һәм ямғырлы килгәйне, өҫтән йылы көпө-күфәйке төшмәне. Игендәр ишелеп уңған, әммә тиҙ генә урып-йыйып алырҙай көс-ҡеүәт юҡлыҡтан, күбеһе һыу-һүл аҫтында серәп ҡалған. Ырҙын табаҡтарында ла көшөлдәр тау-тау өйөлөп төтәп ята, алтындай тары, гәрәбәләй бойҙай бөртөктәренең күрәләтә күгәреп-янып юҡҡа сығыуы (ғүмерҙә булмаған хәл!) йөрәкте әрнетә. Шулай ҙа халыҡтың күңеле көр: СССР Министрҙар советы рәйесе, яҡташыбыҙ Георгий Максимилианович Маленьков ҡул ҡуйған хөкүмәт ҡарары буйынса, эш хаҡына һуғыштан һуң тәүге тапҡыр туҡ йәшәрлек иген бүлеп биргәндәр, айҙыҡын-айға аҙ-маҙ ҡулаҡса ла эләгә икән — бығаса, бит, ҡағыҙ битенә һыҙылған «таяҡ» хаҡына эшләп йөрөнөк...

Мин хеҙмәттә ваҡытта ҡайҙандыр ситтән килтереп ҡуйылған, дүрт-биш йыл эсендә ауыл халҡын ҡаҡҡа таяндыртып киткән колхоз рәйесе «Бибиков-татар» тураһында шомло риүәйәттәр йөрөй; береһе лә уны, ауыҙынан гелән әшәке һүгенеү генә ағылып торған бәндәне, исем-фамилияһы менән атамай, үҙе йыш ҡабатлағанса, «Һуйбрат» (урыҫтың «ауыҙыңа фәләнем» тигән оят һүҙенән) тип кенә ләҡәпләй ине. Эш йәшенән уҙған, йөрәк өйәнәге менән интеккән әсәйемде лә ул, йыш ҡына өйгә баҫып кереп: «Ниңә фәләнсәңде ҡармап ултыраһың, кәбән ҡойорға сыҡмайһың?!» — тип һүгенеп китер булған... Бына шул бөлдөргән колхозды ҡабат аяҡҡа баҫтырыу һәм сәскә аттырыу теләге менән янып йөрөгән, ошоғаса КГБ-ның район бүлеген етәкләгән капитан Ғәләүитдинов, хәрби хеҙмәтенән арынып, ауылыбыҙға килгән дә колхоз рәйесе итеп бер тауыштан һайланған...

Ауылыбыҙ күҙгә күренеп үҙгәреш кисерә ине: колхозға еңел һәм йөк автомобилдәре, яңы тракторҙар, комбайндар һатып алғандар, бер келәтте замананың сыра яғып эҙләп тә таптыртмаҫ байлығы — машиналарға кәрәкле тимер-томор (запчастар) менән шығырым тултырғандар; ауыл һыртына ҙур итеп таштан иген келәте, гараж, ҡошҡорт фермаһы төҙөп ҡуйғандар; тыуған ауылым Сәнкем-Биктимерҙең күрке булған мәсеттең манараһын ауҙарып, Һунарсыға — мәктәп, ә мәгәзәйен — клуб итеп күсереп һалғандар (ундағы магазин да элек ауылыбыҙҙың мәҙрәсә бинаһы ине); фермаларҙа һарыҡ, һыйыр малдары ишәйгән, һөт һауымы күҙгә күренеп артҡан. Сөнки элекке КГБ кешеһе булараҡ, дилбегәне ҡулында йомарлап тотоп, колхозды ҡаҡшатҡыс уғрылыҡтың, эскеселектең, әрпешлектең тамырын ҡорота башлаған, тырышып эшләгәндәрҙең ҡәҙерен белгән. Илке-һалҡылыҡты, тәртипһеҙлекте ене менән бер күргән. Ләкин ул мин ҡайтыуҙың икенсе йылында уҡ ҡапыл ғына ҡаты сиргә һабышып үлеп китте, башлаған изге эштәре өҙөлөп ҡалды. Ауыл ҡабат иҫке ҡанунына ҡайтты: «Колхоз — үҙебеҙҙеке. Һораһаң — бирмәй, урлаһаң — күрмәй»... Шундай шарттарҙа янып-көйөп йәшәргә яҙҙы миңә лә...

Һүр. 23. Уңдан һулға: Сафуат абзыйым, Самат ҡәйнешем. 01.09.1962

«Ырымбур» өлкәһе булып оҙаҡ ҡына йылдар донъя көтһәк тә, «бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай», тигәндәй, барыбер баш Башҡортостан тарафына тартыла, әүәлгесә Башҡортостан һаналғы килә ине.

Шул йылдарҙа төбәгебеҙҙәге сәмле йөрәк егеттәрҙе ойоштороп, СССР Верховный советы президиумы рәйесе Климент Ефремович Ворошиловҡа күмәк ҡултамғалы ғариза яҙып ебәрҙек: 1934 йыл ҡырҡып алынған районыбыҙҙы кире-ҡабат Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһына ҡайтарып ҡуйыуҙарын һорап. Бер айҙан һуң Мәскәүҙән атҡарылған яуап (уны беҙгә Ырымбурҙан түрә килеп уҡып ишеттерҙе) артабан был йүнәлештә ҡарпыуҙан төңөлдөрҙө: ҡабат ҡуша алмайбыҙ, ә мотлаҡ Башҡорт АССР-ында йәшәргә теләүселәр унда тотҡарлыҡһыҙ күсеп китә ала, тиелгәйне унда... Тыуып-үҫкән еребеҙҙе — Олобайыбыҙҙы, тауҙарыбыҙҙы, йылға һәм туғайҙарыбыҙҙы, бабаларыбыҙ күмелгән зираттарҙы һәм, ниһәйәт, тарихыбыҙҙы нисек итеп ташлап китейек инде?!.

Шулай ҙа үҙ еребеҙҙә боронғо ата-бабаларыбыҙса инсафлы йәшәге килә. Ауылдағы әрпешлек, уғрылыҡ, тәртипһеҙлек тере елкәмә тейә, намыҫымды керләтмәйенсә шуларға ҡаршы тороу, көрәшеү иһә дуҫтан да дошман яһай — дошмандарымдың һанын арттыра ине.



Ғилаз бабайымдың берҙән-бер улы, Сафуат абзыйым (һүрәттә Абдрашитовтар: уңдан һулға Сафуат һәм ҡәйнешем Самат, 01.09.1962.), мәҫәлән, игелекле, эскерһеҙ, йор һүҙле зат булыуы менән бергә, хәмер һемереү менән ифрат мауығыр, эштәрен үҙ ағышына һалып отолор ине. «Һуйбрат» заманынан уҡ колхоз келәтсеһе булып шымарып алһа ла, һуңғы йылда ревизия ваҡытында келәтендә һигеҙ центнер аш тоҙоноң етешмәүе фашланып, колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында ревизия комиссияһы рәйесе, ҡәҙимге ауылса итеп: «Келәтсе Әбдрәшитов Сафуат Ғилаз улы колхоздың һигеҙ центнер тоҙон ашаған», — тип хисап биргәс, бөтә зал шарҡылдап көлгән, һәм баяғы яманатлы һигеҙ центнер тоҙҙо ашау тураһындағы оторо хәл ауылда ғибрәтле риүәйәткә әйләнгән. Әммә абзыйыбыҙҙың иҫе китмәй: келәт асҡыстарын ташлап, МТС системаһына морон төртә лә, трактор бригадабыҙҙың шул МТС-ҡа буйһонмош хисапсыһы булып, үҙенең «ашау» һәләтен шунда күсерә. Һөҙөмтәлә тракторсылар ҙа абзыйыбыҙҙың тере елкәһенә тейеп, ерҙәрҙе дөрөҫ үлсәмәй, теүәл иҫәп алып бармай, тип, эшенән сығарҙылар ҙа урынына мине ҡуйҙылар.

Хуш күңелле Сафуат абзыйым бының өсөн үпкәләмәне миңә. Әммә ул ҡалдырған мираҫ ярайһы уҡ шаҡ-ҡатырҙы: эҙһеҙ юғалмыш яғыулыҡ күләмдәрендә генә түгел, ер майҙандарында ла көслө ине хилафлыҡ. Күҙ йомоп ҡына ҡалдыраһы урында, хаҡлыҡ юллау «сир»ем ҡуҙғалды ҡапыл. Быға, бәлки, ауылдаштарым әйтмешләй, «үтә намыҫлы булып маташыу»ым, кешеләр менән уртаҡ тел табырға теләмәүем, колхоздың энәһен сәлдергәнде лә дөйәләй күреп ҡанығыуым сәбәпселек иткәндер. Һәр хәлдә, яна-көйә йүгереп йөрөп колхоздың һәр баҫыуының майҙанын теүәл үлсәп алып, идараның тимер һандығында һаҡланмыш карта-схемаға сағыштырып ҡарағас, утыҙ гектар һөрөнтө еребеҙ етмәй сыҡты ла: «Сафуат колхоздың утыҙ гектар ерен ашаған», тигән мәрәкә таралды йәнә. Баҡты иһәң, тракторсылар, юҡмыштан табыш алыу өсөн хәйләгә

һалышып, баҫыуҙарҙы йыл да сигенә еткермәй хәрәмселәп һөргән, ә хисапсы уларҙың эшен баяғы карта-схемалағы тулы майҙаны буйынса ғына «үлсәп», һөрөлмәй ҡалған өлөшөн дә һөрөлдө тип, эш хаҡы яҙған, яғыулыҡты «яндыртҡан», — ҡыҫыр ҡалдырылған утыҙ гектар ерҙән дә иген урып алынды тип иҫәпләнгән. Яғыулыҡ мәсьәләһендә лә минең тарафтан теүәл иҫәп-хисап керетелгәс, норманан тыш сарыф ителеүҙәр асыҡланды ла етешмәүе тракторсыларҙың «елкәһенә һуға» башланы, ә элек былдай хәл бөтөнләй булмаған — бүре лә туҡ, ҡуй ҙа теүәл ҡала килгән. Эшмәкәрлегемә бригадала әсе нәфрәт көсәйҙе, һәр береһе бүреләй ҡырын ҡарай, аяҡ сала башланы. Ошо килешмәүсәнлегем менән ҡара ҡарғалыҡтағы аҡ ҡарға хәленә ҡалып, ябай ерекмән тормошом бик ҡатмарланып, аҙым һайын кәртәләр аша атларға тура килде.


3
Һин шулай асыҡтан әҙ: белемең нинди? 10 класс бармы? Аттестатың? Һәр бер шундай документың булһа, мин һине Мәскәүҙәге А. М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәрергә булышырға әҙермен [illegible]! Унда махсус [illegible] уҡый.
Шуға күрә [illegible], һинең [illegible]. Мин бындай [illegible], бел.
Шулай асыҡтан [illegible] минең [illegible] бер [illegible]

Туғайыбыҙҙа утын киҫеп өйһәм йәки берәй ҡыуаҡлыҡта ҡаса-боҫа (сөнки рөхсәт итмәйҙәр!) ҡул салғыһы менән бесән сабып күбәләһәм, ҡайтарырға ылау бирмәй йонсоталар, һөҙөмтәлә урлап алып китәләр. Ә ҡалай ҙа аҙлап-аҙлап лапаҫ башына ташып өйгән бесән-һәсәнемде, көҙгөһөн идара комиссияһы килеп үлсәп, колхоз сабып һәм килтереп биргәндәй, алаһы эш хаҡымдан шул бесәндең хаҡын тотоп алып ҡалалар (ошоғаса төш күреп ҡурҡып уянам: имеш, Өфөгә китеп оҙаҡ йөрөгәнмен дә ҡышҡылыҡҡа бесәнһеҙ тороп ҡалғанмын)... «Борос» тигән сатирик стена гәзите сығарыуым да күптәрҙе әсеттереп, теңкәләренә тейеүсегә әйләндем...

Таулы ер булған-лыҡтан, баҫыуҙарыбыҙ үтә ваҡ һәм бер-береһенән алыҫ, ә бригада техникаһы бер үк ваҡытта ҡырҙарҙың төрлө яғында бүленеп эшләй — сажин таяғымды йөкмәп баҫыуҙан-баҫыуға өҙлөкһөҙ йүгерергә, хәрәмселеккә юл ҡуймаҫ һәм эшләгәндең эшен юғалтмаҫ өсөн, һәр ерҙә лә өлгөрөргә кәрәк ине. (Әлегәсә күңелһеҙ төштәр күрәм: имеш, тракторсылар йәнәштереп бергә һөргән йәки урған баҫыуҙың ыҙандарын үҙ ваҡытында уҡ үлсәргә өлгөрмәгәнмен дә кемдең күпме эшләгәнлеген билдәләр әмәл ҡалмаған...). Бер-ике йыл шулай

өҙәләнеп эшләгәс, хеҙмәтем тейешенсә баһаланмайынса, вазифамды үҙем теләп башҡа берәүгә тапшырҙым да колхоздың ҡара эштәренә егелдем...

Тормош нисек кенә ҡыйын булмаһын, Аллаһы Тәғәлә тарафынан күңеленә яҙыусылыҡ мөһөрөн һуғып тыуҙырылған әҙәм балаһы яҙа ла яҙа икән ул... Тик шуныһы йәнде ҡыя: әүәле Башҡортостанымдың тере тәне булып та, аҙаҡ Ырымбур өлкәһенең бер районы итеп ҡалдырылған төбәгемдә башҡортса матбуғат юҡ, ә Өфөгә ебәргәндәрем йә балталай һыуға бата, йә “ташҡа баҫырға яраҡһыҙ” тигән хөкөмгә дусар була. Тешемде ҡыҫып, йөрәгем һыҙлап йөрөгәндә, көтмәгәндә, күктән фәрештә осоп төшөп (һүрәттәге ҡулъяҙманы ҡарағыҙ) шәфҡәтле ҡанаттары менән йәнемде ҡосҡандай булды:

Йыһат туғанҡай!

Бик оҙаҡ ваҡыттар тауыш бирмәй, һине билгеһеҙлектә газаплаганым өсөн гәфү ит. Бик үтенәм.



Мин ауырыным, бик ҡаты ауырыным. Баш менән. Больница – йорт – Кавказ. Шулай үтте көндәр. Миңә килгән әйберҙәрҙе бүтән берәү ҙә укымаган.

Ә бына яңы гына баш-күҙ алып киләм кеүек. Әйберҙәреңде “сукно аҫтынан” һөйрәп сыгара башланым. Поэмаң М. Тажиҙа. Ҡалгандарын беҙ Әсгәт Мирзаһитов менән укыйбыҙ. Ҡәләмең якшы. Һин – яҙыусы булырга тыуган кеше! Һин быны бел һәм үҙеңде һакла, кара, үҫтер. Танауыңды күтәрмә был һүҙҙәр өсөн, ләкин ҡәҙереңде бел.

Әле был әҫәрҙәрең баҫылып та ҡуймаҫ. Сөнки был замандарҙа сатираның абруйы төшөп тора бит...

Ә “Урмандар” – китәсәк. Кем белә, бәлки, тегеләрен дә баҫып булыр.

Был хатта мин бүтән мәсьәлә күтәрәм. Һинең алдагы яҙмышың тураһында уйлайым. “Белемһеҙ акыл – ҡанатһыҙ ҡош”, -- ти гәрәптәр. Һиңә укырга – иң якшы мәктәптә укырга кәрәк. Дөрөҫ, һин күп укыган күренәһең, ләкин системалы белем кәрәк. Һин миңә ашыгыс яҙ: белемең ниндәй? 10 класс бармы? Әгәр ҙә шундай документың булһа, мин һине Мәскәүҙәге А.М.

Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәреүҙе тәьмин итеүҙе өҫтөмә алам! Унда махсус йәш яҙыусылар уҡый.

Шуны уҡып бөтһәң, һинән беренсе дәрәжәләге прозаик сығасаҡ. Мин бындай һүҙҙе ғүмеремдә икенсе генә кешегә (беренсеһе Мостай Кәрим. -- Й.С.) *әйтәм, бел.*

Шулай, ашығыс рәүештә һорауыма яуап бир һәм, әгәр ҙә урта белемең бар икән (документально), -- мин тәкдим иткән институтҡа уҡырға китергә әҙерлән, көҙ үк.

Хәҙергә хуш. Сәләмәт бул. Яҡын күреп, ***Ғәйнан Әмири.*** 11.04.1957.

Г. Уфа, Ленина, 2, кв. 36, Амири Г.Г.

P.S. *Бында шундай һүҙ ҙә бара әле – фекер тыуып тора: һине берәй 10 көнгә саҡыртып алдырырға иҫәп бар. Союз иҫәбенән, әлбиттә. Мирзаһитов менән бергә хикәйәләреңде баҫырға әҙерләү буйынса эшләр инегеҙ. Ләкин был хаҡта 1-2 көндән конкрет яҙырбыҙ.* ***Әмири.***

Минең нисек ҡанатланып осоу дәрәжәһенә етеүемде һәм шул уҡ саҡта үкенеп-һыҙланыуымды белһәгеҙ ине!.. Сәғәтендә үк яҙып һалған яуап хатым был хаҡта асыҡ һөйләй:


P.S.
Бында шундай һүҙ ҙә
бара әле, — фекер
тыуып тора:
һине берәй 10 көнгә
саҡыртып алдырырға
иҫәп бар. Союз иҫәбенән,
әлбиттә. Мирзаһитов менән
бергә хикәйәләреңде баҫырға
әҙерләү буйынса эшләр
инегеҙ. Ләкин был хаҡта
1-2 көндән конкрет
яҙырбыҙ.

Һүр.24. Ғ. Әмири хаты: 1 -- 5 биттәр

Иҫәнмеһегеҙ, Ғәйнан ағай!

Кисә төнлә генә Һеҙҙең хатығыҙҙы алып бик ҡыуандым. Оҙаҡ хәбәр килмәй торғас, һуңғы көндәрҙә күңелһеҙләнә башлаған инем, Һеҙҙең әйткән һүҙҙәрегеҙ миңә ҡанат үҫтереп ебәрҙеләр. Рәхмәт, ағай, йылы һүҙ, игелекле уйҙарығыҙ өсөн. Мин бер ваҡытта ла танауымды күтәрмәм, үҙ-үҙемде әллә кемгә ҡуймам, сөнки минең бөтә теләгем, бөтә ынтылышым шәхси үҙем өсөн түгел, ә башҡорт халҡыма яҡшы хеҙмәт күрһәтеү, нисек тә уның культураһын, рух байлыҡтарын үҫтереү өсөн йүнәлдерелгән. Бала сағымдан уҡ мин туған халҡымдың быуаттар буйына ирек яулап яҙған данлы тарихы менән ғорурландым, уның йырмондарға бай булыуын күреп шатландым, ләкин, шул уҡ ваҡытта, әҙәбиәтебеҙҙең, искусствобыҙҙың сағыштырмаса арттараҡ барыуын һиҙеп һыҙлана инем. Туған халҡым бәхете өсөн йәшәргә теләп янам мин, ағай. Әгәр ошо ниәтемә ирешә алһам, бик бәхетле булыр инем. Аҙыраҡ лирикаға бирелеп киттем, буғай, ғәфү итегеҙ. Практик мәсьәләләргә күсәйем.

Берәй 10 көнгә Өфөгә килергә, тигән тәҡдимегеҙҙе бик-бик шатланып ҡабул итәм. Мөмкин булһа, шуны ойоштороғоҙ әле, ағай; хикәйәләрҙе үҙем дә әҙерләшһәм, бик шәп булыр ине. Унан, миндә йәнә бер әйбер бар – ирекле (аҡ)

шиғырҙа яҙылған повестең беренсе киҫәге. Шуны ла үҙегеҙгә уҡып, кәңәштәр алыр инем. Шулай итеп, мин шатланып риза Өфөгә барырға.

Ә белем мәсьәләһенә килһәк, һеҙ хаҡлы: системалы белем миндә юҡ. Минән тормаған сәбәптәр арҡаһында мин урта белемһеҙ ҡалдым. Өҙөп-йолҡоп, тигәндәй, туғыҙынсыныҡын үтә башлаған инем (Чкалов ҡалаһындағы колхоз председателдәре әҙерләү урта мәктәбендә), хәрби хеҙмәткә алып киттеләр. Аттестат юҡ. Шулай эштәр...

Әҙәбиәт институтында уҡыу минең өсөн донъялағы бөтә бәхеттәрҙең иң өлкәне булыр ине. Хыялдарымдың сорғолошо булыр ине ул, ағай.

Үҙегеҙҙең хәлдәр нисек? Тамам һауыҡтығыҙмы? Сәләмәтлек, уңыштар теләйем. Хушығыҙ, хат көтәм. **Йыһат Солтанов.**

Шуныһын да әйтеп үтергә кәрәк: юғары белемгә өлгәшкәнемдән һуң да Мәскәүҙә уҡыу хыялымдан төңөлмәнем – А.М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институты түбәһе аҫтындағы ике йыллыҡ Юғары әҙәби курстарға китергә ынтылып ҡараным, унда урындағы Яҙыусылар союзы юлландырмаһы менән генә ҡабул итәләр ине. Союзыбыҙ председателе Ә.М. Мирзаһитов үтенесемде һалҡын тыңланы, ә идараның абруйлы ағзаһы Зәйнәб апай Биишева: “Юҡ! Беҙ унда Янибай Хамматовты ебәрәбеҙ!” – тип ҡырт-киҫте. Әммә Янибай Хамматов ағай Мәскәүҙә үтмәне – унда һүҙе үтемле “әҙәби генерал”ыбыҙ Мостай Кәрим ҡаршы төшкән, тинеләр...

1957 йылда түбәмде күккә тейҙертерҙәй тағы ла бер ваҡиға булып алды — әйткәнемсә, «Урман бабай» тигән матур ғына хикәйәм баҫылған «Пионер» журналының 7-нсе һаны көтмәгәндә почта аша Өфөнән килеп төштө лә, күкрәгем тулы ҡыуанысыма сыҙай алмай, тай-тулаҡтай тулай-тулай, ергә ятып аунаным...

Үҙебеҙҙең өлкә матбуғатына урыҫса ла яҙыштыра башлағайным, «Южный Урал» гәзитенә ебәргән очеркым (Мөхәммәткамал ахун хәҙрәт Дәүләтшин заманында ауылыбыҙҙа ахун писаре булып эшләгән урыҫ Тимофеевтың башҡортлашҡан һәм әле Жултыйҙа йәшәп ятҡан Александра исемле ҡыҙы — әсәйемдең әхирәте хаҡында) уңыш ҡаҙанмаһа ла, икенсе береһе Мәргән Мырҙабәков редакторлығындағы «Ленинское племя» исемле йәштәр гәзитендә, минең, урыҫса яҙған булып та, ылғый башҡортса фекерләүемде урыҫ теле ҡалыбына йәтешләтеп, ташҡа баҫылып сыҡты — колхоздың алдынғы һауынсыһы, буласаҡ хәләл ефетем — уңған мишәрбикә Сания Ғиниәтулла ҡыҙы Әбдрәшитова тураһында ине ул (шуға күрә нисек бар — шулай ҡаралама ҡулъяҙманан ошонда күсереп биреүҙе тейешле һананым):

Һүр. 25. Ҡәйнәм Сәхибъямал балалары менән; һулдан уңға: Мәскүҙә, Самат, Сания. 1942.

«...Шел суровый 1945 год. После тяжелых боев наши славные войска прорвались к подступам фашистского логова — Берлину. Каждому досмерти хотелось дожить до светлого дня Победы, своими глазами увидеть радостные лица родных и близких. Но воины продолжали отдавать свои жизни за счастье тех, кого они защищали и кому суждено было после них оставаться на земле...

Из фронта приехел уже смертельно больной солдат Гинният Абдрашитов. Он был худ и бледен, тяжело дышал, при кашле из легких обильно выделялась кровь. Гинният утешал себя только тем, что хоть перед смертью увидит обрадованные лица жены, старой матери и детей. Но жена, скованная тяжелым недугом, обреченно лежала в постели и он сделался вторым горем для семьи.

Сании тогда было шесть лет. Она беспечно играла с подружками на улице и ей неведомо было еще, что очень скоро не станет люмимого отца, а спустя месяц после этой тяжелой утраты похоронят и матери, что останется она круглой сиротой... На всю жизнь Сании запомнилась горестные слова соседки-старушки, сказанные ею в день похорон. Она своими сухими старушечьими руками жалостливо гладила ее по голове и слезами в глазах приговаривала:

— Ох дитя, дитя! Даже не знаешь, какая ты несчастная... Не найдешь уж ты на земле счастья своего, доченька...

Проходили годы, вместе с годами росла и Сания. Родина не покинула сирот на произволь судьбы, заботилась о них, выхаживала, воспитала. Никогда не чувствовала Сания на себе горькую участь сироты-малолетки, о которых рассказывали старые люди, пережившие тяжелые царские времена. Она, а также старшая сестра, братишка — все троем учились в школе, ходили сыты и обуты, были веселы. Когда Сания окончила семилетку, сестра уже работала учительницей. Знакомые советовали и Сании последовать по стопам сестры. Но у нее были другие думы. «Буду в родном колхозе работать» твердо решила она.

Һүр. 26. Уңған һауынсылар (һулдан) Сания, Сәлисә Абдрашитовалар. Сәнкем-Биктимер ауылы, 1957.

Однако встретилась неожиданная преграда. Бригадир никак не хотел допускать ее на полевые работы.

— Разве сможешь ты там работать? На бричках солому возить — это не легкое дело, тут даже взрослые еле справляются, — говорил он. Стоял на свем твердо, никак не хотел поддаваться мольбам девочки. Сания даже заплакала, но и это не помогло.

Однажды возчица одной брички уехала на базар и Сания целый день работала вместо нее. Утром возчица пришла на свое место, однако Сания и ее знать не хотела. Бригадир вынужден был бричку оставить за Санией, а возчицу отправил на другую работу.

Так всю зиму Сания проработала в транспортной звене. Девушки были дружные, работа у них спорилась и радостно была на душе у Сании. Она привыкла к физическому труду, окрепла, дышала сплошным здоровьем. А весной в деревню пригнали брюцеллезных коров, нужны были старательные, молодые руки и стала Сания дояркою. Это было в 1955 году.

Ей закрепили десять коров. Не было еще у девушки должной сноровки и грубых кормов в колхозе было маловато. Однако не во духе Сании было предаваться бесплодным унылиям. Она боролась за каждый грамм концентрата и сена, изучила характер, склонности каждой коровы. И советы просить у старших товарищей зазорным для себя не считала. В результате добилась большой победы: годовой план удоев перевыполнила и вышла в передовые среди доярок. Ее назначили старшей дояркой и выбрали членом правления колхоза. (Һүрәттә Һул-дан уңға колхоз һауын-сылары Абдрашитова-лар: буласаҡ хәләл ефетем Сания һәм ике туған апаһы Сәлисә. Сәнкем-Биктимер, 1957).

А когда происходили выборы в местные Советы, народ выбрал ее депутатом сельского Совета. Прибавились новые хлопоты. К ней многие люди стали обращаться жалобами, просьбой, а иногда просто за добрым советом. Надо было заведующему МТФ помочь в укреплении трудовой дисциплины, на заседаниях правления колхоза решать вопросы развития колхозного производства, да и за коровами ухаживать. Девушка похудела, лицо ее осунулось, но глаза ее по-прежнему светились радостным огоньком. В 1956 году она от каждой фуражной коровы надоила 1900 литров молока вместо 1600 по плану.

Һүр. 27. Сабит улым менән. Май, 1963.

В первое время нелегко приходилось Сании работать старшей дояркой. Она была моложе всех, поэтому доярки неохотно слушались ее. Бывали и такие случаи, что с кем-нибудь и поссориться приходилось. Но Сания любила трудиться и с этим своим качеством увлекла и остальных за собой.

Надо было очистить силосную яму. Там лежал толстый слой полугнилого силоса и казалось, что удалить его простыми лопатами совсем невозможно.

— Без трактора тут не обойтись! — говорили люди. Но Сания не ждала прихода трактора, потому что трактор нужен был там, в поле, где шла культивация поля будущего силоса — кукурузы. Она взяла вилы и начала тяжелую массу из ямы выкидывать вверх. Вскоре подошли остальные доярки и закипела работа. За четыре дня яма была полностью очищена и подготовлена к закладке нового урожая.

Когда ощущался острый недостаток рабочих рук, доярки помогали и полеводческой бригаде. Они чистили зерно на токах, активно участвовали в субботниках по сеноуборке. Своими силами крыли крышу коровника и обмазали его. Во

всех работах Сания принимала активное участие, являлась первым инициатором и вожаком. 1957 сельскохозяйственный год завершила Сания большой победой: ею получено от каждой фуражной коровы по 3279 литров молока, а по плану предусматривалось только лишь 1900 литров. За этот трудовой подвиг комсомолка Сания Абдрашитова награждена Почетной грамотой Зиянчуринского РК КПСС и Райисполкома, а также ценным подарком.

— Золотые руки у нашей Сании! — говорят колхозники про нее с любовью. Они уверены, что передовая доярка не успокоится на достигнутом, будет бороться за новые трудовые победы во имя процветания нашей любимой Отчизны.

Так и не сбылось предсказание соседской старушки про горькую долю сироты. Преобрела Сания своего большого счасья — счастья вдохновенного труда и радостных побед, без которых нельзя жить человеку на земле.

Село Сянким-Биктимер, 26.01.1958».

Әлбиттә, замана һәм соцреализм ҡанундары ҡушыуынса, яҡты буяуҙар менән генә яҙырға тырышылған, әммә етемдәр иңенә яҡкан әсе тормош һабаҡтары үтәләй күренә барыбер. Шул уҡ ваҡытта был һылыуҙың ысынлап та егәрлелеге һәм уңғанлығы, ҡайнар йөрәк ялҡыны бәрелеп тора күҙгә. Уның фиҙакәр хеҙмәтен баһалаған миҙалдар һәм бер ҡосаҡ маҡтау ҡағыҙҙары араһынан икеһен генә күрһәтәм: 1957 йылда Ырымбур өлкә башҡармаһы тарафынан "Лучшая доярка области" тип бирелгән танытма һәм өлкә малсылыҡ тармағын күтәреүҙәге хеҙмәттәре өсөн 1958 йылда Мәскәүҙән атҡарылған "Почет грамотаһы", уға ВЛКСМ Үҙәк Комитеты секретаре А. Шелепин ҡул ҡуйған. Әммә минең яҙмышыма бәйләгән яҙмышы бик үк татлынан булманы — тормошоноң әсе-сөсөһөн арттырҙы ғына, буғай... Юҡҡамы ни хатта етмеш йәшемдә лә, әрнеү ҡатыш, ошолай тип яҙғанмын:

Һүр. 28. Кинйәбикә ҡыҙыбыҙ Таңнура. 1966.

Ыңғыраша бисәм... күрә төштәр...
Һаташыулы уның төштәре.
Ауылымдың алдым һылыу ҡыҙын,
Ҡайһы көнгә ҡалды эштәре...

(«Ағиҙел» журналының 2002/12 һаны, 10-ынсы бит).

Баяғы «Шатлыҡ»ыбыҙҙан тыуған «Бүләк» тигән һыйырыбыҙ тап шул 1958 йылда ағалтындай ап-аҡ төҫлө орғасы быҙау табып биргәйне, «Алтын» тип

исемләнем уны. Үкенескә ҡаршы, киләһе йылында ауылдың бөтә һыйырҙарынан ҡан алып, ҡайҙалыр лабораторияла тикшереп, күбенеһен бруцеллез ауырыулы итеп таптылар ҙа малҡайҙарҙы юҡ итеү сараһын күрергә ҡуштылар һәм юлын да өйрәттеләр — колхоздың дәүләткә ит һатыу бурысы иҫәбенән ит комбинатына илтеп тапшырырға ла аҡсаһын колхоздан алырға (планды үтәтеү өсөн, махсус эшләнгән, тинеләр...). Гөбөрләтеп һауып эскән «Бүләг»ебеҙҙе башҡа һыйырҙар ҡатарында йөк машинаһына тейәп, Ырымбурҙың үҙендәге ит комбинатының батҡаҡлы ихатаһына илтеп төшөрҙөк, малҡайымдың йәштәре мөлдөрәп ағып торған күҙҙәренә ҡарай алмай боролоп сығып китеп, йөрәгем ҡанһырап ҡайттым...

Ваҡыт етте — өйләнәм!

1959 йылда Саниям менән никахлашып өйләнештек, миңә — 27, ә уға 22 йәш бара ине. «Ҡараҡуян» тигән туғайҙан тирәк бүрәнәләр киҫеп, атай йортоноң ҡаршыһына бәләкәйерәк яңы өй буратып кергәйнек, иҫке өйҙө лә яңыртып, Һунарсыға күсереп һалырға ине ниәт. Килен итеп шул яңы өйгә алып ҡайтҡанымда кәләшем ҡырандастан, йола буйынса, көр кәүҙәле башмаҡ булып етешкән баяғы ағалтындай ап-аҡ төҫлө «Алтын»ға таянып төштө; алдағы йыл быҙаулатып та алып, 1965 йылда Өфөгә күсеп киткәнебеҙсә гөбөрләтеп һауырға насип булды уны. 1960 йылдың ғинуарында беренсе балабыҙ — улыбыҙ донъяға тыуҙы, әсәйем уға, һуғышта үлеп ҡалған баяғы Үтәбаев Сабит ҡустыһының иҫтәлегенә, Сабит тип исем ҡушты. (Һүрәттә Сабит улым менән, май 1963.).

Бөтөп барыусы ауылыбыҙҙа донъя көтөүе еңел булмағанлыҡтан, беренсе башлап Сафуат абзыйым Һунарсыға күсеп киткәс, бөтәбеҙҙең баштар шул яҡҡа ҡарап боролғайны инде. Улым тыуған йылдың август айында иҫке өйөбөҙҙө һүтеп, бүрәнәләрен, Солтанов Фәрит ҡустымдың бәләкәй трактор арбаларына тейәп, Һунарсының яңы урамы буйына илтеп бушаттым да, өмә итеп, тиҙ генә күтәртеп тә ҡуйҙым. Өмә ашын шул Фәрит ҡустым — Бәхтиямал еңгәйемдәрҙә үткәрҙек. Тора-бара тауҙан таш сығарып, нигеҙенә таш тыҡтым, асамайҙарын ултырттыҡ. Ләкин түбәһен ябырлыҡ таҡта ла, ҡалай ҙа, шифер ҙа табып булмай — барыһы ла дефицит. Үҙенән ҡуптарып алынған иҫке ҡалайҙарын ипкә килтереп, үҙ таҡталарын ҡағып, 1961 йылдың яҙ башынан уҡ ҡалайҙарын үҙем яба башланым — кешеләрҙән күреп йөрөп өйрәнеүем буйынса. Әммә ҡалайҙың байтаҡ өлөшө тутығып серегән — түбәгә етмәй ҡалды. Ары сабып, бире сабып, йүн сығара алмағас, Сәнкем-Биктимерҙә әлегәсә үҙебеҙ йәшәп торған өйҙө һатып ебәреп, үҙ уйым буйынса, түбәлек һәм таҡталыҡ аҡса ҡоршаным. Үҙебеҙ иһә, ваҡытлыса күсенеп, Саниямдың ҡустыһы Самат һәм филаж сиренән ҡуҙғала алмай ятҡан картәсәһе Бибисәрә әбейҙәрҙең ситән соланына һике һалып урынлаштыҡ. Ә мин һаман, Һунарсынан ҡайтып килмәйенсә, тиерлек, өйҙө эшләп бөтөрөү сараһын күрҙем. Бер үк ваҡытта колхозда ла йүгереп йөрөп эшләнде... Бөтәһенә хәлем етмәҫ тә ине, әгәр ҙә ки башҡортомдоң өмә тигән изге йолаһы булмаһа; үҙем дә кеше өмәһенән ҡалманым, миңә лә гел килделәр —

бүрәнәнең ауыр башын күмәкләшеп күтәрҙек.

Самат ҡәйнешемдең өй бурарға иҫәп тотоп йыя башлаған бүрәнәләре бар ине — киләсәктә ҡайтарып биреү шарты менән (ләкин Самат Урта Азияға башын алып сығып китеүе сәбәпле был шарт үтәлмәй ҡалды) шуларын һорап алып, бәләкәйерәк кенә булһа ла, төкөтмә лә өҫтәнек.

Ҡәйнештәрҙең баяғы ситән соланында ваҡытлыса йәшәгәнебеҙҙә арты насар һөҙөмтәле күңелһеҙ хәл булып алды: Һунарсының Наилә исемле бер йәш кенә ҡыҙы (сыбыҡ осо туғаным) менән яна-көйә һөйөшөп йөрөгән ҡәйнешем, һис кенә лә көтмәгәндә, шул ҡыҙыйҙы кәләшлеккә ҡасырып алып ҡайтып шаҡ-ҡатырҙы һәммәбеҙҙе. Бер ниндәй ҙә көслөк юҡ, икеһе тиң риза булышҡан икән; сөнки ҡыҙҙың әсәһе (беҙҙең Солтановтар нәҫеленән кейәүгә сыҡҡан инәйебеҙҙең ҡыҙы) һәм бер туған ағаһы менән апаһы бирергә теләмәгәстәре, ҡасҡандар ҙа киткәндәр... Бына хәҙер, тиҫтәләгән йылдарҙан һуң, аптырап һөйләшәбеҙ: ниңә шунда уҡ Саматҡа, ҡыҙҙы кисекмәҫтән кире илтеп ҡуй, тип ҡаты торманыҡ икән? Хәйер, ҡыҙҙың да һис ҡайтырға уйы юҡ ине. Өҫтәүенә, ҡәйнешем: «Беҙ уның менән әллә ҡасан уҡ...» — тип тә ысҡындырғас, ауырыу Бибисәрә әбей ятҡан өйгә үҙебеҙ кереп ятып, соландағы һикебеҙҙе икеһенә ҡалдырҙыҡ.

Һүр. 29. Сабит улыбыҙ менән ҡыҙыбыҙ Илмира. Һунарсы ауылында, май, 1963.

Иртәгәһен, таң беленеүгә, ҡобаралары осоп ҡотһоҙланған илселәр — Наиләнең бер туған еҙнәһе Динам менән ике туған еңгәһе Һәҙиә ярһып килеп етте, Наиләне шунда уҡ ҡулынан һөйрәкләп алып ҡайтып китергә ине ниәттәре. «Нимә тип был хәйерсе өйгә килдең?!» — булды еңгәһенең тәүге һүҙҙәре. Ләкин беҙҙе ҡыҫылдыртмайынса йәштәр менән үҙҙәре генә һөйләшкәс, ниәттәре үтәлмәй, күшкәттәре шиңеп ҡайтып киттеләр, беҙҙең менән һөйләшеп тә торманылар. Бына шунан һуң ауылда миңә дошман нәҫел дә хасил булды. Наиләләрен барыбер Саматтан көслөк менән айырып алып киттеләр ҙә ҡайҙалыр Урта Азияға олаҡтырҙылар. Ауылдан да, баяғыларҙан да биҙгән Самат ҡәйнешем дә Ҡаҙағстандың Кентау ҡалаһында йәшәгән апаларына юл алды, ләкин баяғы дошман нәҫел быларҙың барыһына ғәйеплене минән күреп хасланды. Һәм шуға барып етте — ҡараңғы мөйөштә күмәкләшеп һөжүм иттеләр миңә...

Өйөм түбәһенең өстән бер өлөшө ябылмаған килеш тора — ҡайҙандыр ҡалай табырға кәрәк ине. Тапҡан-таянған аҡсаны бергә туплап, Ырымбурға йүнәлдем, ләкин бер ерҙә лә ҡалай юҡ. Башым ҡатып, магазиндар ҡыҙырып йөрөгәнемдә, Жултыйҙан Ғибат ағай тигән таныш уҡытыусыны осраттым: ул да йортоноң түбәһен ябырға ҡалай эҙләп юлланған, әммә таба алмағас, хужалыҡ тауарҙары магазинында һис кем алмай тауҙай өйөлөп ятҡан, яҡшы ҡорос ҡалайҙан бөгөп яһалған оҙонса икмәк йәйләүҙәрен күп итеп һатып алған да төкләп-төкләп тимер юл вокзалына — багаж итеп һалырға оҙата ине. «Юҡты бар итеп булмаç — барын яҡшылап файҙаланырға кәрәк. Бер ҙә иçең китмәһен — йәйләүҙәрҙе сүкеп төҙәйтәһең дә, «шап!» иттереп ябаһың да ҡуяһың түбәңә!» — тине ул. Үрмәксенән күрмәксе, мин дә күп итеп йәйләүҙәр һатып алдым да, ауылыма ҡайтартып, һәр береһен сүкеп төҙәйтеп, һис ҡайҙан да олифа заты табып булмағанлыҡтан, көнбағыш майын ҡаҙанда ҡайнатып алып, шуның менән майланым да, баяғы Ғибат ағай әйткәнсә, «шап!» иттереп яптым да ҡуйҙым түбәмде. Тырыша торғас, көҙгә тиклем өйҙө өлгөртөп, яңы нигеҙгә керҙек. Ихатамдың урам яғын, штакетник тигән ябай ғына нәмәне лә һис таба алмайынса, колхоз эштәренән бушанған һәр сәғәтемдә штакетник урынына туғайҙан һуйҙан (төҙ) тал һабаҡтарын елкәмдә күтәреп ташып ураттым (ҡаҙау урынына алты миллиметрлы тимер сым ҡырҡып ҡаҡтым), ә ихатаның ҡалған яҡтарына селектән ситән үрҙем, уратма буйҙарына эс яҡлап йәш уçаҡ үçентеләрен, баяғы Ҡасанҡый-Сала янындағы ҡороған быуа ләменән һурып алып, бәләкәй ҡул арбаһында ҡайтарып, теҙеп ултыртып сыҡтым (“Уçаҡтарым” тигән шиғырым да бар; уçаҡ япраҡтарының ел иçкәндә көмөштәй йылтыр һырттарын күрһәтеп шаулауына ғашиҡ булғайным). Алмағастар, ҡарағат ҡыуаҡтары үçтерҙем. Сафуат абзыйым ярҙамында ихатала саф һыулы ҡойо ҡаҙып, ҡыҙғылт өйәңке ағасынан бура бурап төшөрҙөм. Әбрәкәй, мунса, баҙ, мал аҙбары, ҡош-ҡорт кетәге яһаным. Баҙыбыҙға тултырып бәрәңге һала, мискә-мискә ҡыяр һәм помидор, ҡарбуз, кәбеçтә тоҙлап ултырта инек.

Һүр. 30. Ҡаçмарт буйында байрам. Уңдан һулға алғы буйҙа Абдрашитов Сафуат, Байназаров Динам, Сөйәрембәтов Фәсхитдин; артҡы буйҙа Ҡарасанов Әмир, Солтанов Йыһат, Байназаров Спартак, Йәнбирҙин Айрат, Байназаров Фоат. Һунарсы ауылы, 60-ынсы йылдар.

Ҡышҡыһын баҙҙан яңы алынған бәрәңге бик тәмле булғанлыҡтан, аҙна һайын баҙ асып, үҙебеҙгә — бер күнәк, мал-тыуарға кәрәгенсә алабыҙ уны. Мин

сығып баҙ асырға тотоноуым менән үк, ялан кәртәлә торған кәзә-һарыҡ, алғы тояҡтарын ситәнгә терәп, минең яҡҡа ҡарап шарылдап баҡырышырға тотона, ә ағалтындай аҡ һыйырыбыҙ «Алтын», аҡ мөгөҙлө ҙур башын ҡапҡа өҫтөнән сығарып, танау тишектәрен тыржайтып, ер ярһытып туларға ла баҡырырға керешә; үҙҙәренә тигән йәшелсәне турап, көрпә болғатып биргәс кенә баҫыла тауыштары (әлегәсә күҙ алдымда теҙелешеп, баҡырышып һынлана малҡайҙарым)...
(Һүрәттә Сабит улым менән ҡыҙым Илмира, май 1963 йыл).

Һүр. 32. Һулдан уңға алғы буйҙа Ғәйнан Әмири, Мадрил Ғафуров; артҡы буйҙа Вәзих Исхаҡов, Йыһат Солтанов. Өфө, 70-енсе йылдар.

Улым ҙурайғансы уҫаҡтарым да бүрәнәлек булып үҫер ҙә, Сабитыма йәнәшә йорт һалырмын, тип, ихатаны ҙур ғына биләгәйнем — тәүге көндәрҙән үк унда ҡыяр, помидор, ҡауындар гөрләтеп үҫтерҙек; урам буйынан уҙған халыҡ башын бороп ҡарап, еҙ самауырҙай тумарлап ятҡан эре-эре ҡыуындарҙы күреп, «ысын түгелдер был» тип аптырап һөйләнер ине. Шул уҡ урамда өс-дүрт өй аша ғына әбейе Бибилатифа менән ғүмер һөргән Ғилаз бабайым, кәкре башлы таяғына таянып, көн дә ҡауын ашарға килеп урар, балаларыбыҙ менән шарҡылдашып көлә-көлә хәтһеҙ уйнағас, ирәүәнләнеп сәй эсеп ҡайтып китер ине. Әсәйем үткән һәр берәүҙе саҡырып керетә лә ишек алдындағы аласығыбыҙҙа шәкәрҙәй татлы ҡауын, ҡыҙарып бешкән ҡуш йоҙроҡтай помидор менән һыйлай алдынан ҡалғансы. Шулай ҙа төндә оло кирза итек эҙҙәрен һалған насар холоҡлолар, ҡойма аша ырғып төшөп, ҡауын баҡсабыҙҙы иҙҙе; ә икенсе бер төндә аласыҡтағы өймәләмә тулы табаҡ помидорҙан елдәр иҫте... Бер-бер артлы ике этемде аттылар, өсөнсөһөн, көсөк кенә көйөнсә, үҙем юҡта урлап алып киттеләр (ошо һыҙланыуҙарымды «Ыласыным» тигән хикәйәмә һалғанмын).

Һунарсыла ана шулай йәшәгәнебеҙҙә бер-бер артлы яңы кисерешшатлыҡтар килде — Илмирә, Таңнура тигән ҡыҙҙарыбыҙ ҙа тыуып, өс баланың ата-әсәһе булдыҡ; улар минең «Ила, балам», «Бала һаҡлау», «Далам ҡылғаны» кеүек шиғырҙарымда сағылды. Саниям был бәпестәрҙе, әлбиттә, тәртә араһында йөрөп ҡолонлаған бейә бахырҙай, һис бер ниндәй декретлы ялһыҙ (ундайҙы белмәй ҙә инек) — колхоздың һарыҡ фермаһында эшләп йөрөгәне килеш тапты («Кисер мине» тигән әрнеүем):

Ғәфү ит һин мине, йәшлегемдә
Булдым аңыш — күпте белмәнем.
Килен итеп өйгә төшөргәндә
Устарымда алып инмәнем.

Баллы төнөбөҙҙө балһыҙ иттем,
Ә һуңынан ал-ял белмәнем.
Буйындағы һыйпап тере йәнде
Тилергәндә, «рәхмәт» тимәнем.

Ҡорманым йорт лайыҡ хан ҡыҙына,
Тапманым тун лайыҡ һыныңа.
Күҙҙәреңдең изге сағыулығын
Һалалманым фани йырыма.

Тәртә араһында ҡолонлаған
Байтал кеүек, эшкә егелдең.
Ыжғыр буранда бит илтеп ҡуйҙым
Бесән санаһында үҙеңде.

Малай тапҡан тигәс иртәгәһен,
Килә алмай ҡалдым бер аҙна.
Аҙашҡан да туңып үлгәндер, тип,
«Тынысландырғандар» бер аҙға...

Кисер мине, шунан һуң да һаман
Ултырманым камил аҡылға.
Тапҡан бereң... Бесән санаһында,
Арбаһында... сыҡтың хаҡ юлға.

Көнөн-төнөн бағып колхоз малын,
Сабый имеҙергә йүгерҙең.
Ашарға ла беҙгә һин бешерҙең,
Өҫ-башты ла йыуып өлгөрҙөң.

Ҡырыҫлығым менән мыжыҡлығым
Рәхмәтемдән булды күберәк.
Бөтәһе лә ятты бер яурынға,
Бөтәһен дә тартты бер йөрәк.

Ожмахыңдың хаҡын ҡайтарырлыҡ
Рәхәтлектәр бирә алманым.
Әрнетергә һине, буғай, ҡайта
Фәҡәт ошо әрнеп яҙғаным.

1.01.1996.

Шул уҡ ваҡытта иң юғары белемгә лә өлгәшеү һаман мөҡәддәс хыялым булғанлыҡтан, ҡоро ярға сығарып ырғытылған бахыр балыҡтай, үҙемдә юҡ рәсми урта белемде ҡайһылай итеп алырға белмәй, оролдом да бәрелдем. Бәхеткә ҡаршы, күрше ауыл Жултыйҙың урта мәктәбендә беҙҙең кеүектәргә киске уҡыу ойошторолғас, үҙебеҙҙең һигеҙ йыллыҡ мәктәп директоры Үтәбаев Сәлмән Ғәлиулла улы етәкселегендә ныҡ ҡына юллап йөрөп, шул Жултый киске урта мәктәбенең филиалын астырттыҡ ауылда һәм эштән һуң кистәрен тырышып урта белем алырға керештек. Биш-алты уҡыусы инек, минән шәберәктәре лә бар ине (мәҫәлән, Фәрит ҡустым Солтанов), тик күбебеҙгә түҙемлек, ныҡышмалылыҡ етмәне. Һөҙөмтәлә Жултыйға иң һуңғы имтиханға яңғыҙым ғына барҙым һәм урта белем тураһында аттестат алып ҡайттым.

Һүр. 31. БДУ-ла ситтән тороп уҡыусылар.
Артҡы буйҙа һулдан беренсе Солтанов Йыһат. Өфө, 1965.

Алдан алдырып әйткәндә, 1963 — 1969 йылдарҙа, колхозымдың ҡара эштәрендә егелеп йөрөгән килеш, ситтән тороп уҡып, Башҡорт дәүләт университетын да тамамлап сыҡтым. Шуны ла әйтергә кәрәк: үҙ ғүмеремдә миңә, тейешле белем алыу өсөн, төрлө ваҡытта һәм төрлө мәктәптәрҙә, үҙ әсә телемде ҡалдырып, төрлө өс телдә уҡырға тура килде: татар, үзбәк, урыҫ телдәрендә; ләкин һәр саҡ ул телдәрҙә уҡыуым башланғыс хәлендә өҙөлә килде — Хоҙай Бабай үҙ телемдә генә уҡырға бойорғандыр, күрәһең. Ысынлап та, аҙмыш миңә үҙ аллы уҡыу барышында урта белемде лә, юғары белемде лә үҙемдең башҡорт телемдә фекер йөрөтөп алырға яҙҙы — башҡорт аҙыусыһы өсөн был ифрат та мөһимдер.

Хәтеремдә, вузға кермәҫем борон әле, Өфөгә бер килеүемдә «Ағиҙел»селәр Әсғәт Мирзаһитов, Фәрит Иҫәнғолов менән хозур табында күңелле генә ултырғайным әңгәмәләшеп. Һүҙҙән һүҙ сығып, юғары белем алыу тураһындағы хыялым мәғлүм булғас, Фәрит Иҫәнғолов үҙенең түшендәге зәңгәр эмаль ялатылған вуз ромбигын ысҡындырып алып, минең түшемә таҡты. Ни әйтергә лә белмәй тулҡынланып, аптырап торғанымда:

— Мин быны ваҡытлыса бирәм. Үҙ ромбигыңды алғас, кире ҡайтарырһың, — тине ул. Шул шарт менән ҡул ҡыҫышып килештек һәм мин быны шиғырымда («Бурыс») нығыттым:

Ҡул ҡыҫыштым бөгөн ғүмерлеккә
Дуҫ булырға, ҡәләмдәш менән.
Хеҙмәт юлым, түккән моңом, тиһәк,
Мин әле бик бәләкәс кенә.

Ҙур йөрәген бирҙе дуҫым миңә,
Сыҡ һин, тине, еңеп көрәштән.
Шул нур-йөрәк менән минең йөрәк
Күкрәгемдә хәҙер берләшкән.

Үҙ йөрәгем бер мәл олоғайып,
Ҡайтарырмын дуҫҡа бүләген.
Ай арҡылы нурын ҙур Ҡояштың
Алмайҙыр Ер бушҡа төндәрен.

1962.

Ниһәйәт, юғары белемгә эйә булғас, университеттың күк эмалле ромбигын түшемә тағып барып, ҡәләмдәшемдең үтескә биреп торған ромбигын, рәхмәт әйтеп, тантаналы рәүештә үҙенә ҡайтарҙым (ә ул иһә был тарихты хәтерләмәй ҙә, имеш...). Ошо мәлде көрәү өсөн, ай-һай, күп көс сығарырға, көрәшергә тура килде миңә. Өлкән ҡәләмдәштәремдән Ғәйнан ағай Әмириҙең йомарт йөрәк йылыһы, игелеге рухымды нығ ҡанатландырып күтәрҙе (һүрәттә һулдан уңға алғы буйҙа Ғәйнан Әмири, Мадрил Ғафуров; артҡы буйҙа Вәзих Исхаҡов, Йыһат Солтанов. 70-енсе йылдар; уның хаҡында махсус «Мәңге ғашиҡ» тигән әҫәремдә яҙғанмын). Һары таңдан ҡара кискәсә ҡырҙа колхоз эшендә йөрөп, телде арҡыры тешләрҙәй арманһыҙ ҡайтып, ашығыс ҡапҡылап алам да, китаптарыма тотонам — диванда ултырған килеш йоҡлап китә инем. Ярай, бисәм, әсәйем түҙемле булды һәм барыһын да аңланы, йорт эше ваҡлыҡтарын, мөмкин булғанса, үҙҙәренә йөкмәне...



Һүр.33. Йыһат Солтанов семинарҙа. Өфө, 1962.

Прозамды баһалау

Бер үк ваҡытта ижадым менән дә янып-көйөп йәшәнем. Аяғөҫтө йөрөп яҙыла торған шиғырҙарҙан тыш, үҙем, үҙемдең ауыл һәм, ғөмүмән, осоромдоң йәнгә тейгән колхоз тормошонан алып, күңелемде болоҡһотҡан мәсьәләләрҙе һалып, бөтә ҡыйынлыҡтарға ла бирешмәй, йәшлек намыҫын ыуалтмай, ысын кеше булып ҡалған егеттең үҙ һөйләүендә «Кеше тураһында йыр» тигән (ғәмәлдә автобиографик) романымдың ҡулдан ике йөҙ биткә яҡын өлөшөн аҡ ҡағыҙға төшөргәйнем.
Өфөнән Муса ағай Ғәли ебәргән хат-тәҡдим буйынса, 1962 йылдың йәйендә уҙғарыласаҡ йәш яҙыусылар семинарына, тип, бер шәлкем шиғыр, яртылаш яҙылған шиғри роман менән бергә баяғы сәсмә романымдың бер талай өҙөгөн, «Хеҙмәт» исемле шулай уҡ автобиографик повесемде почта аша шунда юлландырғайным, сөнки прозалағы тәүге ҙур эшемә ҡарата «ысын яҙыусы»ларҙың башланғыс фекерен белергә, әгәр ҙә улар хуплаһа, эшемде тамамлап ҡуйырға теләгем ҙур ине. Семинарҙың ҡатнашсылары иң күмәк булған шиғриәт бүлеге — Яҙыусылар берлегенең берҙән-бер ҙур бүлмәле «Әҙәби Башҡортостан» («Ағиҙел») журналы редакцияһында, ә проза буйынса ултырыш коридорҙың ҡаршы яғында — Яҙыусылар берлегенең тар ғына һыйҙырышлы консультанттар кабинетында бер юлы барҙы гөрләп. (Һүрәттә Йыһат Солтанов йәш яҙыусылар семинарында, 1962 йыл). Йәнем-тәнем менән шиғриәткә тартылыуымды еңеп, ҡап-уртаға ярылып булмағанлыҡтан, был форсатта прозам хаҡында фекер ишетеүҙе мөһимерәк һанап, баяғы кабинетка кереп ултырҙым. Мин фәкирегеҙҙең әҫәрҙәрен танылған яҙыусылар — яҡташым Сәғит ағай Агиш, журналдың яуаплы сәркәтибе Ғәли ағай Ибраһимов, сәсмә әҫәрҙәр бүлеге мөдире Фәрит ағай Иҫәнғоловтар тикшергән икән. Тик уларҙың телмәренән күңелемдә ауыр тойғо яралды — романымды дауам итеүҙең һис тә кәрәкмәгәнлеген, сөнки ҡәләмем яҡты совет ысынбарлығына яҡтылыҡ өҫтәмәүен, әҙәбиәтебеҙҙең социалистик реализм талаптарына тамсы ла яуап бирмәгәнлеген тәрән әрнеү ҡатыш мейемә һеңдереп, хыялым селпәрәмә килде, өмөттәрем өҙөлдө.

Бына яҡташ ағайымдың төп фекере:

«...Әгәр ҙә мин повесте генә уҡып, ике хикәйәне уҡымаған булһам, Йыһат Солтанов тураһында һәйбәт фекерҙә ҡалмган булыр инем...

...Уҡыусыға асыҡ булһын өсөн, ҡыҫҡа ғына сюжетты һөйләп бирәйек. Ғәлим тигән 24 йәшлек егет колхозға армиянан йөрөп ҡайта, армияла ул флотта хеҙмәт иткән. Башта ул колхозда теләһә ҡайҙа ебәрһәләр — шунда эшләп йөрөй. Аҙаҡтан уға колхозда иҫәпсе — учетчик хеҙмәтен бирәләр. Ошо эшкә керешкәс, ул колхоздағы етәкселәрҙең, председатель, парторгтан алып бухгалтер, бригадир, трактористарҙың — бөтәһенең дә алама кешеләр икәнен күрә. Бөтә эштә лә күҙ буяйҙар. Райкомға тамамланмаған эштәрҙе алдап, тамамланды тип бирәләр. Шоферҙар бензинды урлап, үткенселәргә һаталар. Ғөмүмән, колхозда Ғәлимдән башҡа бер йүнле кеше юҡ... Колхоз председателе, элекке мәктәп директоры, бик ҡара буяуға буялған. Ул хатта институтты ла хәйләләр, алдауҙар менән тамамлаған. Авторҙың әйтеүе буйынса, бик һәйбәт стена газетаһы сығарыла, ләкин уның ғәмәлдә бер төрлө лә тәьҫире юҡ. Уҡыйҙар

ҙа көләләр, саралар күрелмәй. Хатта газетаны йыртып ташлаусыларға ла бер нәмә лә булмай...

24 йәшлек Ғәлим һалдатта үткән ғүмерен — әрәм булған йәшлек тип һанай.

Ҡыҫҡаһы, повестә бөгөнгө көндөң бер яҡты яғын да күреү юҡ...

С. Агиш».

Ғәли ағай Ибраһимов фекерҙәрен үҙенә хас теүәллек, бөхтәлек һаҡлап теркәгән:

«Йыһат Солтановтың «Хеҙмәт» повесе һәм өс хикәйәһе хаҡында рецензия (бөтәһе 6 табаҡ күләмдә).

Йыһат Солтановтың мин уҡып сыҡҡан әҫәрҙәре араһында эшләнеп бөткәнгә яҡын, тип әйтерлек, уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итерлеге — «Йөрәк һыҙлай» хикәйәһе. Хикәйәнең яҙылышы, теле башҡаларға ҡарағанда уңышлыраҡ, бында һоҡланып уҡырлыҡ итеп яҙылған тәбиғәт күренештәре, һалсылар тормошо, мөхәббәт күренештәре, иҫтә ҡалырлыҡ портреттар бар. Бигерәк тә Дания исемле ҡыҙҙың образы уңышлы сыҡҡан.

Ошоларҙы уҡып та Йыһат Солтановта яҙыусыға кәрәкле оҫталыҡ, тормоштоң айырым һыҙаттарын күрә белеүсәнлек, күргән нәмәләрҙе әҙмә-әҙ яҙа белеү һәләте бар, тип әйтергә мөмкин...

...Авторҙың дөйөм етешһеҙлектәре хаҡында әйтеп үтке килә. Иптәш Солтанов тормоштоң үҙендә йәшәгәнлектәнме, йәмғиәттәге тиҫкәре яҡтарҙы күп белә. Шуға күрәлер, ул гел тиҫкәре яҡтарға, ҡара таптарға ғына иғтибар итә. Ә тормоштоң ыңғай яҡтарын, беҙҙең йәмғиәттең өҫтөнлөк яҡтарын күрә белмәй, алдынғы кешеләрҙең көрәшенә иғтибар итмәй...

Юғарыла әйтеп үтелгән дөйөм етешһеҙлектәр Й. Солтановтың «Хеҙмәт» повесенә лә бик хас. Уның төп геройы хисапсы Ғәлим колхоздағы бөтә етешһеҙлектәргә ҡаршы көрәшә. Ул үҙе образ булыу яғынан көслө генә эшләнгән. Ул ерҙең кәрәкле тәрәнлектә һөрөлмәүен дә, эшләнгән эштең күләмен арттырып күрһәтеүҙе лә, яғыулыҡтың әрәм-шәрәм ителеүен дә күрә, шуларға ҡаршы көрәшә. Был атаҡлы звеновод Загладаның игенсе намыҫы өсөн көрәшен хәтерләтә. Уның мәҡәләһендә шундай, әлеге повестәгесә етешһеҙлектәр ҙә күрһәтелә. Ләкин ундай хәлдәр тормошта осраһа ла, әҙәбиәттә улай күрһәтеү мөмкин түгел. Нисек инде ул хисапсы Ғәлим бер үҙе генә тырыша. Бер ярманан бутҡа буламы? Ә был колхозда председатель Йәрмит тә, парторг Бикмурзин да, уның ярҙамсыһы ла, бригадир Дәүләт тә, бухгалтер ҙа — бөтәһе, бөтәһе лә насар, эш өсөн тырышмайҙар, эсәләр, һөйләшеүҙә тупаҫтар, ялҡауҙар. Ғөмүмән, автор ниндәй ҡара буяуҙар таба алған — бөтәһен дә улар өҫтөнә ҡоя. Шуныһы характерлы: уларҙың бер яҡшы яҡтары ла юҡ, исемдәре телгә алыныу менән үк, тиҫкәре икәнлектәре аңҡып тора...

...Ниңәлер Й. Солтановта һәр әҫәрҙә «кәмһетелгәндәр» мотивы өҙөлмәй, ҡабатлана бирә. Повестә лә, «Йөрәк һыҙлай» хикәйәһендә лә — шул мотив. Был, бигерәк тә, «Ягымһыҙ кеше йылмая» исемле хикәйәһендә ныҡ сағыла. Уның төп геройы егерме йыл төрмәлә ултырған. Ҡайтҡас та уға шундай ҡараш. Был тәбиғи ҙә, ләкин күбәйеп кенә китә...

...Йыһат Солтановтың әлеге әҫәрҙәренә ҡарағанда өмөт бар, был әҫәрҙәрен дә ул кәрәкле художество кимәленә еткерә алыр тип уйлайым.

Ғәли Ибраһимов».

Өсөнсө рецензентым да шулай уҡ, хикәйәләремдең ыңғай һәм кире яҡтарын анализлап, минең өсөн төп мәсьәләгә күсә:

«Йыһат Солтановтың был әҫәрҙәре, — ти ул, — *иң тәүҙә тел байлығы менән ыңғай тәьҫир ҡалдыра. Йәш яҙыусыла шаҡтай камиллашҡан художестволылыҡ, образлылыҡ күҙгә ташлана. Пейзаж һүрәтләүгә авторҙа ҙур оҫталыҡ бар. Башлыса кеше образдары ла ыҡсым, тере итеп тормошсан һүрәтләнә.*

Әҫәрҙәрҙең барыһына ла характерлы булған төп етешһеҙлектәрҙең береһе — тормош дөрөҫлөгөн биреүҙә ахырғаса тоғро булмау, уҡырға эффектлыраҡ булһын өсөн, йыш ҡына хәл-ваҡиғаларҙы шаҡ ҡатырырлыҡҡа тартымыраҡ итеп бирергә тырышыу...

«Хеҙмәт» повесенең ыңғай яҡтары шаҡтай күп. Ул, башта әйткәнемсә, ярайһы өлгөрөп еткән художестволы, лексик яҡтан бик бай, төҙөк тел менән яҙылған. Һүрәтләү саралары тереләр, яңылар, тапҡырҙар. Образдар башлыса (айырым-айырым ҡарағанда) күҙ алдына баҫырлыҡ итеп һүрәтләнгәндәр. Улар телдәре менән дә, төҫтәре менән дә бер-береһенән айырыла.

Тик әлеге образдар нисбәтендәге самаһыҙлыҡ бик ныҡ күҙгә ташлана. Бер Ғәлим образы ғына ыңғай. Ҡалғандары барыһы ла тиҫкәреләр. Элекке хисапсы — ялҡау, эшлекһеҙ, эскесе. Тракторист Насырый — эскесе, ҡараҡ, күҙ буяусы. Бригадир Дәүли — күҙ буяусы, дан артынан ҡыуыусы. Председатель Йәрмит — һауаланған, тупаҫ, карьерист кеше. Бухгалтер — ҡағыҙ ҡоло, ҡараҡтарҙы ҡаплап тороусы, һәр ваҡыт колхозға хыянат итеүҙе талап итә. Завмаг Иван Дмитриевич «шешә менән һатып ала, шешә менән теш һындыра». Парторг Рәүф Бикмурзин насар кеше. Прокурор тураһында ярты ғына һөйләм бар — уныһы ла насар кеше. Ахырҙа Ғәлимә исемле агроном ҡыҙ матур ғына булып килеп инә, ләкин уның ыңғай героиня буласағы әҫәрҙә күренеп өлгөрмәй...

Фәрит Иҫәнғолов».

Төп етешһеҙлегемде яҡшы төшөнөп төңөлдөм: яҡты совет тормошоноң ҡараңғы яҡтарын ғына яҙа икәнмен; ундай ҡараңғы яҙыусыға яҡты совет иленең матбуғат юлы бикле. Ләкин бит мин ҡараны күрәләтә аҡ тип әйтә алмайым — ытырғанып тартынам...

Шулай итеп, хәҙер яҡшы аңлауымса, хөрмәтле хөкөмдарҙарым дөйөм ҡабул ителгән кодекс буйынса хөкөм ҡылдылар мине — тоталитар рухлы совет әҙәбиәтенең социалистик реализм ҡануны шундай ине бит... Үҙҙәренсә, моғайын, ҡулсыр баланы көршәкте ярмаҫы борон ҡурсаларға тырыштылар — бының өсөн үпкәләп булмай ине. Әммә беренсе ҙур әҫәрем яртылығында килеш өҙөлөп ҡалды...

Прозабыҙ маһирҙарынан әлеге үҙемә ҡағылышлыны алып бөтөп, күрше бүлмәләге шиғриәтселәр ултырышына йүгерҙем; унда һөйләшеүҙең иң ҡыҙған мәле — Рәшит Назаров шиғырҙары тураһында яҙыусылар берлеге рәйесе Назар Нәжмиҙең ялҡынлы телмәренән һуң фекер алышалар ине. Шиғриәтебеҙгә Бабичтан һуң яңы даһи тыуғанлығын самалап, баштан уҡ ошонда ҡатнашмауыма үкенә биреберәк ҡуйҙым. Тәнәфескә сығып, коридор башындағы ҙур тәҙрә ҡаршыһына баҫҡас, мине танып белеүсе шағир йораттары: «Ҡайҙа йөрөйһөң, әй, ниңә ултырышҡа килмәнең?» — тип төпсөнөргә кереште. «Ә мин проза бүлегендә ултырҙым», — тип аҡланған арала, ҡаршымда ғына боролдатып тәмәке тартып торған һарғылт-һоро туҙғыҡ-бөҙрә сәсле, яҫы урыҫ маңлайлы һәм танаулы, йәше буйынса үҙемә тиҫтер булырҙай бер уҙаман, күҙҙәрен ҡыҫа биреп киң йылмайҙы ла: «Вот әй! Шағир башың менән проза тылҡып йөрөйһөңмө? Ә мин бында һинең хаҡта бынамын тигән телмәр һөйләп ташланым тағы», — тигән булды. Башҡалар ҙа: «Шәп телмәр, шәп!» — тип дөрөҫләгәс, ҡыҙыҡһыныуым артты, ләкин, үҙ ғәҙәтемә барып, артыҡ төпсөнөп торманым. Өҫтәүенә, үҙем кеүек үк ябай ғына күренгән, иҫке кирза итекле һәм шағирәнә олпатлыҡһыҙ был кешене күңелем өнәмәне. Шулай ҙа һорашып белдем — Рәми Ғарипов тигән шәп шағир икән. Ултырыштар тамамланғас, Сәғит ағай Агиштың, миңә төбәп: «Яҡташымды өйгә алып ҡайтырға ине лә бит, үкенескә ҡаршы, бөгөн генә еңгәгеҙ иҙәнде буяған шул, — тип мәрәкәләүе хәтерҙә. Минең менән бергә проза буйынса һөйләшеүҙә ҡатнашҡан һәм бындағыларҙың барыһын да белгән Саҡмағош егете (тиҫтерем) Фәнил Мансуров, берәр «ярты» ҡыҫтырып, Рәми Ғариповтарға барырға өндәһә лә, баяғыса, риза булманым (иртәгәһен Фәнил һөйләүенсә, Рәмиҙең ғаиләһе саҡ һыйышып йәшәгән бүлмәлә таң атҡансы бик күңелле ултырғандар). Үҙем һымаҡ уҡ элекке моряк дуҫым — Күмертауҙан шахтер шағир Хөснулла Түләкәйев менән мине, көтмәгәндә, Әсғәт ағай Мирзаһитов Горсовет туҡталышындағы фатирына алып ҡайтып шәп ҡунаҡ итте, ә иртәнсәк (ял көнө ине) күрше генә йортта йәшәгән Фәрит Иҫәнғоловтарҙа күмәкләшеп һыйландыҡ. Уларҙан сығыуыбыҙға, киоскынан гәзиттәр алырға килгән шағир (һәм тиҫтерем), Башҡортостан китап нәшриәтенең редакторы Шакир Биҡҡолов осрап, һәм ул дәррәү яҡындағы магазинға йүгереп барып килеп, урам аша Ғафури баҡсаһына керҙек, һуҡмаҡ буйлап төшә торғас, соҡорҙағы тимер торбанан сопорлап ағылыусы һалҡын шишмәгә юлығып, тамаҡтарҙы шуның менән йыуҙырта-йыуҙырта, нәүбәттәге шешәне бушаттыҡ. Үҙ ғәҙәтемә барып, баҡса ҡапҡаһы башындағы «Парк им. М. Гафури» тигән яҙыуҙы күреүҙән күңелем боларҙы ла: «Был ни хәл? Ниңә башҡортса түгел?! — тип һораным. — Былай барһа, башҡорт теле бөтәсәк бит!..»

Һүр. 34. Йыһат менән Шакир Биҡҡолов (һулда). Трусковецк, 22.03.1973.

— тип көйәләндем. Шакир Бикҡолов өндәшмәне, ә Мирзаһитов менән Иҫәнғолов күҙгә-күҙ ҡарашып алды. «Юҡҡа иҫең китмәһен, — тине Фәрит Иҫәнғолов. — Кәм тигәндә, яңынан егерме биш йыл йәшәйәсәк әле башҡорт теле, тимәк, беҙҙең ғүмергә етә». Ә Мирзаһитов үҙенең олпат-һалҡын тауышы менән ҡаты итеп киҫәтте: «Бынан һуң һин, ҡустым, бындай һүҙҙәр һөйләмә — ахыры яман бөтөр»... Ауыҙымды ҡымтыным да башҡаса был икәү янында бер ваҡытта ла «ундай һүҙҙәр һөйләмәҫкә» тырыштым... Әйткәндәй, Мирзаһитов ғүмере буйына ярым башҡортса, ярым татарса һөйләште, ә Иҫәнғолов, табындарҙа бергә ултырғанда иҫереп алһа, ярым татарсамы, ярым сыуашсамы сусылдарға керешер ине (йәшлегендә татармы, сыуашмы мәктәбендә уҡыған, тиҙәр). Улар икеһе серҙәш һәм яҡын дуҫтар ине. Ә минең беренсе китабымды («Урман бабай», 1967), «Пионер» журналынан хикәйәмде үҙе күсертеп алып, донъяға сығаран, шуның менән яҙыусылығыма юл асҡан ҡорҙашым Шакир Бикҡоловтың шәхси тормошо бәхетһеҙ осланды: көтмәгәндә баш ауырыуынан ҡатыны вафат булып, икенсе йылына үҙе лә шундай уҡ сиргә һабышты; шул сәбәплелер инде, үҙ-үҙен белештермәй, бер мәл шулай Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитовтың «Әсәләр көтәләр улдарын» тигән пьесаһы буйынса Башакадемтеатр сәхнәһендәге премьераһы барышында партерҙың бишенсе рәтендә бөтә залға әҫәрҙән үҙенең ҡәнәғәтһеҙлеген яңғыратып белдерә, һөҙөмтәлә етәксе даирәләр тарафынан аҫтыртын эҙәрлекләнеп йөрөп ваҡытынан элек китте донъянан... (Һүрәттә һулдан уңға Шакир Бикҡолов һәм Йыһат Солтанов. Трускавец ҡалаһы, 22.03.1973 йыл).

Ғафури баҡсаһында барған тел яҙмышы тураһындағы күңелһеҙ һөйләшеүгә килгәндә, йор тәбиғәтле Хөснулла дуҫымдың һис кенә лә иҫе китмәне кеүек; ғүмерҙәребеҙ дауамында семинар көндәрен хәтерләгәндә лә ни бары: «Сәғит Агиштың иҙәне буяулы булһа ла, Әсғәт ағай менән Фәрит ағайҙыҡы буялмаған булып сыҡты бит, әй!» — тип хихылдап көлөр ҙә ҡуйыр ине.

Өфөгә күсеп килгәндән һуң мин тиҫтерем Рәми Ғарипов менән ныҡ дуҫлашып, ысын ҡорҙаштарға — арҡадаштарға әүереләдек, ижадсы тормошоноң байтаҡ әсе-сөсөһөн бергәләшеп татыныҡ. Шуныһы ла үҙемсә: дуҫымдан мин бер ваҡытта ла «теге саҡта шиғриәтселәр ултырышында минең хаҡта ҡайһылайыраҡ һөйләнең?» тип белешергә башыма ла килмәне һәм ул да иҫләмәне быны (шулай уҡ уның менән бергәләшеп фотоға төшөү ҙә уйыбыҙға кереп тә сыҡмағандай). Фәкәт үҙе был донъянан киткәненә егерме бер йыл үткәс кенә, тәүҙә гәзит битендә, ә унан һуң «Әҫәрҙәр»е йыйынтығының икенсе томында (475 — 476 биттәр) тулҡынланып та, ғәжәпләнеп тә уҡыным шул йыйнаҡ һәм тос телмәрҙе:

«Йыһат Солтанов.

Төнгө хәбәр.

Төн. Көтмәгәндә-ниткәмәгәндә генә бераү ишек шаҡыны. Әле бер кем үтмәгән һуҡмаҡтан үҙ һуҡмагын ярып, үҙ алдына гына үҙенсә моң көйләп, тормоштоң асыһын-сөсөһөн күп татыган, кемдер тарафынан байтаҡ ҡына рәнйетелгән, ләкин үҙенең гәжәп саф күңелен, кешелеген, үҙенең кешелек бәҫен һаҡлап ҡалган бер юлсы ишек шаҡыны. Был шаҡыуҙа бер ниндәй тупаҫлыҡ та, ҡыҫҡырынып-екеренеп торган талап та, бер һөмһөҙлөк тә юҡ. Был шаҡыу ниндәйҙер кешенең кешелегенә ышаныусан, гәжәп

кешелекле, хатта кеселекле, үҙенең йылы күңел төбөнән сыҡҡан ихлас һүҙенә ихлас яуап табырына шик-шөбһәһе булмаған тыйнаҡ өмөт менән ҡараған кешенең шаҡыуы.

Һис бер икеләнеүһеҙ ишек асаһың. Күңел күҙең алданмаған.

Бөтөнләй көтмәһәң дә, күптән көткән, күптән күңелең эҫенеп бөткән бер теләктәге үҙ кешең килеп инә. Өйөңә түгел, туп-тура күңелеңә инә.

— Йыһат Солтанов икән дәһә, нишләп былай күҙгә-башҡа күренмәй йөрөнөң? Һине бит беҙ күптән көткәйнек, әйҙә, рәхим ит, беҙ бит һин күреп белмәһәң дә тойоп белгән күмәк дуҫтарың. Һинең моңоң тураһында ла, кеше булыуың тураһында ла бер ултырып һөйләшке, кәңәш-төңәш итке килә. Ырымбур хәлдәрен аҡтарып һал, әйҙә!.. Ил ирҙән, ир илдән туямы — бик хуш килдең, төклө аяҡтарың менән, тип ҡаршылайһың уны. Матбуғаттағы һуңғы һанды уҡығас, беҙҙең әҙәби ҡор һаман ишәйә, түңәрәкләнә бара, тип ҡыуанаһың.

Мостай Кәрим әйтмешләй, яңы шиғыр ғына түгел, ә Яңы шағир килде, тиергә мөмкин, Йыһат шиғырҙары менән танышҡас.

Киң кейем туҙмаҫ, тигәндәй, Йыһат Солтановҡа ошондай кәңәште бирге килә.

Моңоң яҡтыраҡ булһын, дуҫҡай. Үҙеңдең шәхси тормошоңда төрлө күңелһеҙ хәлдәр булһа ла, үҙ яҙмышыңа ил күҙе, заман зирәклеге, конкрет тормош солғанышы менән ҡара. Үҙенсәлекле тауышың көрөрәк, баҙығыраҡ, ҡыйыуыраҡ булһын. Күҙ күремең дала киңлектәрен иңләрлек булһын. Үҙ моңоң менән әүрәмә, башҡаларҙың да йөрәк ҡағышын той — үҙ итеп күр. Ер-һыуыңдың сағыу буяуҙарын, йорт-аймағыңдың йор һүҙҙәрен, беҙ ишетмәгән мәҡәл-әйтемдәрен, ҡарт-короларыңдың мәғәнәле тел төбөн, далалағы Яңы тормош һыҙаттарын — бөтәһен-бөтәһен дә танһыҡ өсөн генә түгел, танһыҡ ҡанһын, күңел һоҡланһын өсөн алып кил.

Һеҙҙә лә бит егерменсе быуаттың 64-енсе йылылыр[20]*, һеҙҙә лә ер юлдаштарының осоуын күҙәтәләрҙер, һеҙҙә лә бала-саға космонавт булып уйнай торғандыр, һеҙҙә лә ҡайырып сирәм күтәрәләрҙер, дала буйлап вольтлы электр тогы ташыусы ҡорос бағаналар атлап уҙалыр, бына тигән коммунистик хеҙмәт кешеләре барҙыр, ҡарттарҙың да биш ваҡыт намаҙ ғына уҡымай, «Ырғыҙ», «Абай», «Йәш гвардия» китаптарын уҡығандары барҙыр. Кешеләр араһында яңы мөнәсәбәт, яңы заман ҡараштары ерегеп киләләр.*

Бына шуларҙы ла күрергә, тойорға һәм моңона ҡушылып йырларға кәрәк!

Шунһыҙ бөгөн әҙәбиәт була алмай!»

Шул уҡ бер балыҡ башы — баяғы сәсмә әҫәрҙәремде тикшергән абруйлы өс прозаиктың соцреализм талаптарына яңғыраш дөйөм фекерҙә булған бит был да! Телмәрҙе үҙ ваҡытында тыңлай алмай ҡалһам да һәм унда «моң»ға, минең моңома, ҡағылышлы һүҙҙәрҙән бихәбәр йөрөһәм дә, нигеҙҙә моңома теләктәшле Рәми Ғариповтың был рәсми урындағы рәсми телмәренең тәьҫире, ижадыма ҡарата башҡаларҙың мөнәсәбәтендә ҡыйыш көҙгөләгеләй боҙолоп, кире яҡлап сағылды, шиғырҙарымды бәғзеләр яҡты совет ысынбарлығынан, тормошобоҙҙан зарланыу, ысынбарлыҡтың ҡара яҡтарын ғына күреү тип баһалап, кире ҡағыу кеүәһе күтәрелде — аҫтараҡ был хаттарымда сағылыр. Һәм мин шуларға яуап итеп «Моң тураһында» тигән шиғырымды яҙырға мәжбүр булдым:

---

[20] Телмәрен ҡағыҙҙан көндәлегенә күсереп ҡуйыу йылы, булһа кәрәк.

Моңло булыу — зарлы булыу түгел.
Айыра бел зарҙы моңдарҙан.
Зарлы бәндә күҙ йәшен ағыҙһа,
Моңло кеше йырҙар сығарған.

Йырһыҙ йәшәү — үтә ҡыйын, тиҙәр,
Йәшәп булмай моңһоҙ бөтөнләй.
Ҡая ғына һаҡлай хисһеҙ тынлыҡ,
Ҡая ғына тора һелкенмәй.

Кешелектең көсө — моң кисереү.
Тыуа шағир моңдар эсенән.
Игелек һис көтмә был донъяла
Моңон юйған йүнһеҙ кешенән!

Моңдар, моңдар, тормош һуҡмағымда
Үткәрҙем күп һеҙҙе йөрәктән.
Булдығыҙ һеҙ мине кешелеккә,
Хислелеккә, йырға өйрәткән.

30.11.1962.

Семинарҙа шиғырҙарыма ҡарата Рәми Ғариповтың йылы һүҙ әйтеүе тураһында ишетеп ҡанатланғас, «Төнгө хәбәр» исемле йыйынтыҡ итеп әҙерләгән ҡулъяҙмамдың машинкала баҫылған бер данаһын, талант эйәһе ҡорҙашымдан һынау үткәртәйем, тип, Рәмигә уҡырға бирҙем: «Әгәр хуплаһаң, яҙыусылар берлегенең шиғриәт секцияһында тикшертергә ине ниәт», — тинем. «Ярай, эшләрмен», — тип, папканы ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып алды (шул кисендә үк ул ҡулъяҙманы ҡайҙалыр торғоҙоп ҡалдырған — юғалтҡан булып сыҡты һәм уны минән алыуын кире ҡаҡты), бер аҙ ҡыҙмаса булыуы ғына хәүеф һалды һалыуын (һуңғараҡ яҡшы белдем: йәш шағирҙар унық эргәһенә «ярты» ҡыҫтырмайынса йөрөмәй — тәмәкене, хәмерҙе ныҡ ярата икән ҡорҙашым)...

Ауылыма ҡайтып китеп, түҙемһеҙлек менән Рәмиҙән хәбәр көттөм, ләкин «шылт!» иткән дә тауыш юҡ ине, ә үҙем һорашып хат яҙыуҙы тыйнаҡһыҙлыҡ һананым. Өҫтәүенә, «Ағиҙел» журналына ебәргән әҫәрҙәрем дә, һыуға батҡан балталай, хәбәрһеҙ сума торҙо...

1963 йылдың йәйендә, урта белем тураһында өлгөргәнлек аттестатымды алыу менән үк, Өфөгә тумарылдым — ниһәйәт, вузға инергә. Бер түгел, өс балам, ҡартайған әсәйем бар, колхозда көн күрешебеҙ шәптән түгел — аҙым һайын ҡамасаулайҙар, йәнде киҫәләр, ләкин уҡығы ла уҡығы — белемле булғым килә! Ошо йәшемдә һәм ғаилә хәлемдә нисек итеп биш йыл буйына ситтә студент хәлендә йөрөрөмдө күҙ алдыма ла килтерә алмай инем, дөрөҫөн әйткәндә; ләкин үҙемде күҙ йомоп упҡынға ташланырға тәүәккәлләнгән бәндәләй тоя инем — ни булһа ла булыр... Әммә бәхетемдән (Хоҙай Бабай бойороуы буйынса) тирә-яғымда

айныҡ аҡыллы ағайҙарым бар булып сыҡты, хәйерле юлға баҫырға ярҙамлашты. Башҡорт дәүләт университетының ситтән тороп уҡыу бүлегенә кереп, әйтеп үтеүемсә, эшләп йөрөй-йөрөй эйә булдым юғары белемемә...

Муса ағай Ғәли, шиғриәт секцияһы рәйесе, ҡыш һуҙымында баяғы шиғри йыйынтығымды иренмәй уҡып сығып, секция ағзаларынан һәм башҡаларҙан да уҡытып, килеүемде көтөп кенә торған икән. Йәйге эҫе көндәрҙең береһендә «Ағиҙел» журналы редакцияһы бүлмәһендә секция ултырышы булды (Рәми юҡ ине, буғай), йыйынтығым ғәмәлдә ыңғай баһаланып, айырым китап итеп баҫтырып сығарырға тәҡдим ителде нәшриәткә. Кемдәрҙең яҡлап һөйләгәне хәтеремдә ҡалмаған — яҡшылыҡтар онотолоусан икән ул (яҡшылыҡ эшләү — тәбиғи хәл итеп ҡаралыуҙандыр). Әммә Уран Кинйәбулатов тигән, телевидениела эшләгән һәм йыр текстары яҙыу маһиры булған мыҡты кәүҙәле йәш шағирҙың (Кәтибә апай Кинйәбулатованың бер туған ҡустыһы, тинеләр) яныпярһып мине юҡҡа сығарыуы иҫемдә... Әммә икенсе бер сағыу ваҡиға күмә был моңһоу иҫтәлекте — 80-енсе йылдарҙа булды бер хәл: «Урал батыр шәжәрәһе» тигән тарихи-мәҙәни хеҙмәтем «Ағиҙел» һандарында баҫылып сығып, авторы юғары даирәләр тарафынан «милли сикләнгәнлек»тә ғәйепләнеп, әҙәбиәтебеҙ генералдары суҡмарҙарын башыма ҡундырған ауыр осоромда баяғы Уран Кинйәбулатов Ленин урамында осрап, ҡоластарын йәйеп ҡосаҡлап алды ла, шул әҫәрем өсөн мең-мең рәхмәттәр әйтеп: «Һиңә булған хөрмәтемде нисек кенә итеп белдерәйем икән һуң? Әгәр хәлемдән килһә, ошо урында аяҡтарың аҫтына йомшаҡ келәм булып түшәлер инем!» — тип алдымда баш эйҙе...

Ситтән тороп уҡыуымдың йәтеш яғы бар ине: кануни рәүештә, ҡайҙа ғына эшләһәң дә, йылына ике тапҡыр (ҡыш, йәй) вузға барып зачеттар һәм имтихандар тапшырып ҡайтырға ун биш көнлөк һәм айлыҡ түләүле ял бирәләр — үҙенән-үҙе юл төшә Өфөмә, тимәк. Редакцияларға керәм, әҙиптәр менән аралашам, әҫәрҙәремде уҡыйым һәм уҡытам. Өйҙә саҡта почта аша аралашыу ҙа бара. Әммә шуныһы, минең һымаҡ ҡара эшсегә матбуғатҡа үтеп кереү, ташҡа баҫылыу ифрат ауыр ине шул...

Ҡорҙаш менән хатлашыу

Иҫәнмеһең, Рафаэль ҡорҙаш!

Һағыныслы сәләмдәр ебәреп, Йыһат.

Өфөнән ҡайтып киткәндән биреле (йәғни Яңы йылдан һуң) мин һиңә, бына, дүртенсе тапҡыр шиғырҙар ебәрәм инде. Ләкин һинән бер ҙә яуап ала алғаным юҡ, ҡорҙаш. Хаттарҙы заказлап һалғайным — барып етергә тейештәр инде, үҙемсә. Ниңә яуап яҙмайһың, әллә ваҡытың юҡмы? Нәмәләрем тураһында редакция фекерен белгем килә. Бер хәбәр ҙә килмәгәс, бушҡа эшләп ятмайыммы икән, тигән уй килә күңелгә.

Һүр. 35. Й. Солтанов, Р. Сафин "Ағиҙел" журналы редакцияһында. 1970

Повесемде лә аҡрынлап эшләйем. Ваҡыт етеңкерәмәй. Башҡорт дәүләт университетына йәйге йыйылышҡа барыуыма эшләп өлгөртә алһам, яҡшы булыр ине, тим.

«Йәш көстәр»гә шиғырҙарым индеме, «Ағиҙел»дең 3-өнсө һанында әлеге нәмәләр баҫыламы? Мин ул һанды, күҙем ҡарайып, көтөп торған булам инде. Ләкин: «Баҫылмағандыр, берәй сәбәп сыҡҡандыр», — тигән шикле уй борсой. Сөнки минең өлөшкә ундай «сәбәп»тәр бик йыш тейеп тора ул. Яҙмыш шулайыраҡ...

Үҙең ни хәлдә, ҡорҙаш? Яҡшы ғына ял итеп ҡайттыңмы? Нимәләр өҫтөндә эшләйһең? Ижад пландарың ниндәй?

Мин колхозда эшләйем, грузчик һ.б. булып. Ҡыш буйы һалам ташыныҡ. Яҙғы сәсеүҙә орлоҡ ташыясаҡмын (машинала, тейәүсе булып). Шулай хәлдәр. Ситтән тороп уҡығас, ваҡыт бик аҙ.

Эшеңдә уңыштарға ирешеүеңде теләп, **Йыһат**. 13.04.1964.

Рафаэль ҡорҙаш!

Ике шиғыр ебәрәм, ваҡыт тапһағыҙ, ҡарап сығығыҙ әле.

Мин былтыр йәш яҙыусылар өсөн үткәрелгән семинарҙан һуң Өфөнән ҡайтҡас, әлеге һөйләшеп ҡуйыу буйынса, үҙемсә яҡшы тип һаналған 24 шиғырымды ебәргәйнем. Ни өсөндөр һеҙҙән яуап булманы. Алдығыҙмы уларҙы? Унан алда ебәрелгән шиғырҙарҙы ла баҫтырманығыҙ (хәтерегеҙҙәме, һеҙ улар эсенән дүртәүен «С.Б.» газетаһына бирергә булғайнығыҙ?).

Мөмкин булһа, зинһар, шиғырҙарымдың яҙмышын хәл итегеҙ әле. Үтенәм. **Йыһат Солтанов**. 16.04.1963.

Һәм бына һис көтмәгәндә Өфөнән шаңҡытҡыс сәләм:

Йыһат ҡорҙаш!

Иң тәүҙә һинең алдыңда ғәфү үтенәм. (Һүрәттә уңдан һулға Р. Сафин, Й. Солтанов “Ағиҙел” редакцияһында 1970 йыл). Шиғырҙарыңды оҙаҡ яткырып ташлағанмын. Ҡул теймәне, буғай. Уларҙы бит бик кәйеф барҙа ғына бик ҙур иғтибар менән уҡырға ине иҫәп. Бына бөгөн, ниһәйәт, уҡып сыҡтым. Һәм минең нисек шатланғанымды күҙ алдыңа килтерә алырһыңмы, юҡмы! Теге ваҡытта мин һиңә һаҡһыҙыраҡ: «Һин, шағир булыуҙан бигерәк, прозаик», — тигән фекерҙе әйтә биреп ҡуйғайным шикелле. Яңылышҡанмын. Һин — шағир ҙа, Йыһат. Бына тигән шиғырҙарыңды уҡыным әле. Һин шиғри бальзамды, беҙҙең шикелле,

крандан ағыҙып түгел, ә шишмәнең үҙенән ҡуш услап алып эсәһең. Һинең донъяға ижади ҡарашың бар. Һинең шиғырҙарҙа, бөтәһенән элек, тормош тәжрибәһенән килгән фекерҙәр ярылып ята. Шуларҙы һин, ҡытыршыраҡ формала булһа ла, үҙеңсә әйтеп бирә беләһең. Әлбиттә, яҙыу алымың ысынлап та бер аҙ ҡытыршыраҡ. Ләкин шөкәтһеҙ түгел. Ошо ҡытыршылыҡтың үҙенең яҡшы яғы ла, насар яғы ла бар. Яҡшы яғы шунда: шиғырҙарың бик тәбиғи ағалар. Ышандыралар. Ә был — ҙур нәмә. Насар яғы инде шунда: уларҙың ритмдары күп осраҡта тигеҙһеҙ булыуы ҡолаҡты яра биреп ҡуя. Һикәлтәле юлға оҡшап китәләр. Мин хәҙергә һинең шул етешһеҙлегеңә генә иғтибар итеүеңде һорайым. Сөнки был бик мөһим етешһеҙлек. Һөйләү манераңдың ҡырыҫыраҡ булыуын етешһеҙлек тип иҫәпләмәйем. Ул — хатта яҡшы ла. Ә бына шиғыр техникаһының ҡайһы бер закондарына буйһонорға кәрәк тип уйлайым.

Бер строфаны ғына тикшереп ҡарайыҡ.

Көрәш ятты һәр саҡ алдымда,
Хисләнергә ваҡыт булманы.
Һәм мөхәббәт миңә алыҫтан
Ғына тартынып ҡул болғаны.

Тәүге ике юлы шыма. Дүртенсе юлы инде абындыра. Беренсенән, «ғына» киҫәксәһен «алыҫтан» һүҙенән айырып, икенсе юлға күсереп яҙыу шиғырҙы бик боҙа. Икенсенән, дүртенсе юлдағы һүҙҙәрҙең килеше бөтөнләй урынлы түгел. Сағыштырыу өсөн ошо уҡ юлды үҙгәртеп әйтеп ҡарайыҡ:

Һәм тартынып ҡына алыҫтан
Ҡул болғаны миңә мөхәббәт.

Ритм бөтөнләй икенсе бит. Һин быны белмәйһең түгел, беләһең. Ә бары тик шиғырҙы шымартып ултырырға ғәҙәтләнмәгәнһең генә. Ә бит ул кәрәк. Һынлы сәнғәт оҫталары бит бер ниндәй формаһыҙ таштан да ниндәй гүзәл һын барлыҡҡа килтерәләр. Материалың бит һинең бай. Әйҙә, ҡорҙаш, ошо булған материалды эшкәртергә иренмәйек. Үҙ эшебеҙҙең оҫтаһы булырға ирешергә тырышайыҡ.

Бына шул минең һиңә ҡарата төп кәңәшем. Кәңәш кенә түгел, үтенесем дә. Сөнки, һиҙәм, һиндә һәр кем дә эшләй алмай торған нәмәләрҙе эшләргә мөмкинлек бар. Бер мәлде мин йәшлек тәүәккәллеге менән шундай юлдарҙы ла яҙып ташлағайным:

Минең ҡулдан килер шундай эштәр:
Эшләй алмаҫ уны һәр кем дә.

Был, әлбиттә, бик тыйнаҡ әйтелмәгән. Ләкин үҙ-үҙеңә ҡарата шундай ышаныс һәм ныҡышмалылыҡ менән эшләү насар түгелдер.

Шулай итеп, әйҙә, Йыһат ҡорҙаш, шиғыр өҫтөндә скульпторҙар ныҡышмалылығы менән эшләйек. Фекере, образдары булһа, ҡалған яғы былай ҙа үтә ул, тип ҡарамайыҡ.

Редакциялағы был шиғырҙарыңды һайлап, бер аҙын йәштәр һанына индерергә тырышырбыҙ. Ул турала һөйләшеп тә ҡуйҙыҡ. Ә ҡалған яғын уйла әле.

Унан һуң журналдың үҙенә генә ҡағылышлы бер һүҙем бар. Һин бит инде хәҙер беҙҙең ғаилә ағзаһы булып киттең. Хәҙер киләһе йылға ҡарата журналға яҙылыу бара. Уны үҙегеҙҙең тирәлә (үҙегеҙҙең ауылда булһа ла) таратыуҙа һин дә булышһаң ине. Бына шул.

Сәләм менән, эшеңдә уңыштар теләп, журналдың поэзия бүлеге мөдире **Рафаэль Сафин**. 8.10.1963.

«Яҡшы һүҙ — йән аҙығы», — тигән мәҡәлдең ҡөҙрәтен тойҙом шунда; табандарым әрһеҙ ерҙән ҡубынып, ҡулдарым ҡанатҡа әүерелеп, осоп барғандай инем. Йөрәгемде усыма һалып, тигәндәй, яҙҙым хатты:

Рафаэль ҡорҙаш!

Бөгөн һинең 8.10.1963. яҙған хатыңды алып, уҡыным һәм, шатлығымдан, ни эшләргә лә белмәнем. Көтмәгәндә булды был хәл!

Мин һиңә шиғырҙарымды бик ҡыймай ғына ебәргәйнем һәм уларға быңдай йылы ҡараш күрһәтелер тип өмөт тә итмәй инем. Шулай ҙа шиғырҙарымдың гелән кәбәктән генә тормауына күңелем ышана ине минең; йөрәгем, бошоноп, унда тос йәҙрә орлоҡтарҙың да төрөнөп ятыуын, ләкин уларҙы ни өсөндөр бүтәндәр күҙгә элмәүен, иҫәпкә алырға теләмәүен һиҙенеп һыҙлай ине...

Ошо көнгә тиклем мин үҙемде, шиғыр яҙыу минең ҡулдан килмәй, мин — шағир булырлыҡ кеше түгелмен, тип ышандырырға тырыштым һәм эстән генә, һиҙҙертмәй, көйөнөп йөрөнөм. Бына ни өсөн шулай булды был.

Бер заман мин 40-50-ләп шиғырымды (уларҙың байтағы быйыл мин һиңә ебәргән шиғырҙар араһына ингән) Өфөгә ебәреп ҡарағайным. Бер ни тиклем көткәс, яуап хаты килде. Хикәйәләре менән бөтә халыҡҡа танылған прозаик иптәш тарафынан яҙылғайны был рецензия. Был ағай, шиғырҙарымдағы рифма, ритм сатаҡлыҡтарын бик дөрөҫ күрһәтеү менән бер рәттән (мин быны үҙем дә белә инем һәм ҡайһы бер өлкән быуын шағирҙары ижадында ла шундай уҡ күренештәрҙе осратҡанлыҡтан, был шулай китә бирә икән, тип уйлай торғайным), ундағы шиғыр юлдарына ишелеп ятҡан моңдо ул рух төшөнкөлөгө, пессимизм тип атаны, һәм ижади киләсәгемә кресть тартып ҡуйҙы. Һуңғыһы менән мин риза булманым. Моң эсенә төрөнөп ятҡан ялҡынды күрергә теләмәүҙәре рәнйетте мине...

Шул йылды миңә Өфөгә барырға, редакцияға инергә тура килде. Был юлы мин үҙемдең шиғыр яҙыу тәжрибәмә ҡарата, рәсми рәүештә, тағы ла үлтергесерәк баһа, һөҙөмтә ишеттем. Редакцияның яуаплы секретаре М. Тажи ағай миңә, туранан-тура: «Беҙ һиңә күптән әйткәйнек бит инде, шиғыр яҙма, ә проза менән генә шөғөллән, тип. Һинән шағир сыҡмай!» — тине. Ошо ваҡиғанан

һуң мин шиғыр яҙыуҙы бөтөнләй ташларға ҡарар иттем. Шиғыр китаптарын уҡымаҫҡа, шиғырға ҡарата үҙемдә нәфрәт тойғоһо тәрбиәләргә тырыштым. Йылдан артыҡ шулай яҙмай йөрөнөм. Ләкин был килеш йәшәү мөмкин түгел ине. Мин үҙем өсөн генә яҙа башланым. Уларҙы камиллаштырып, шымартып ултырыуҙы кәрәкмәгән эш тип һананым. Ниңә юҡ өсөн ваҡыт уҙғарырға, улар барыбер донъя күрмәйәсәктәр бит! Йөрәгемдә ҡайнаған тойғоларҙы һурып алып, мине бер аҙ бушатһалар — булды!

Ләкин тора-бара, мине тағы өмөт саҡкылары биләй башланы. Шиғырҙарымды тағы ла бер тапкыр ебәреп ҡарау теләге уянды. Һәм бына, көтмәгәндә, һеҙҙән шундай дәртләндергес хат алдым!

Мин, әлбиттә, ниндәйҙер гений булғанмын да, мине баһаламағандар, тигән фекер үткәрергә теләмәйем, о юҡ, ҡорҙаш! Әгәр шулай аңлаһаң, бик ҙур яңылышлыҡ булыр ине. Мин бында һис тә үҙем хаҡында түгел, ә поэзияның бер биҙәге булған моң хаҡында һүҙ алып барғым килә. Сөнки минең йөрәгем моңға бәйләнгән, шиғырҙарым, яҙған саҡта, моңға уралып сыға (һәр хәлдә, үҙемә шулай тойола). Һәм шул моң арҡаһында улар «рух төшөнкөлөгө», «пессимизм» тип аталдылар ҙа инде.

Әлбиттә, беҙҙең хәҙерге тормош өсөн төшөнкөлөк хас түгел; беҙгә дәртле йырҙар, шиғар-лозунгылары шартлап торған утлы шиғырҙар кәрәк. Ләкин был ғына моңдо шиғыр донъяһынан һыҙып ташларға нигеҙ бирмәй әле. Сөнки моң — кеше күңеленә хас тәбиғи тойғо ул. Дәртһеҙ кеше булмаған кеүек, моңһоҙ йән дә булмай. Моң кисереү (быны аһ-зар менән бутарға ярамай) — кеше күңеленең иң нескә, иң гөманлыҡлы тойғоларының береһе ул. Йөрәген моң тирбәтмәгән әҙәм илгә, кешеләргә булған һөйөүҙең, яҙғы бөрө еле булып йөрәк аша күкрәп үтеүсе саф мөхәббәттең барлығын белә алмай. Моңдо халыҡ тыуҙырған һәм уны хисапһыҙ күп нескә һыҙаттар менән байытҡан. Әгәр беҙҙә революция еңгән икән, социализм төҙөлөп бөтөп, бөйөк коммунизм осорона китеп барабыҙ икән — моңдоң да көнө бөткән, дәрт кенә тороп ҡалған, тигән һүҙ түгелдер. Былай уйлаусыларҙы мин, етәкләп, халыҡ күңеле дәрьяһына килтерер инем һәм: «Ана, ҡарағыҙ, унда сайпылған тулҡындарҙың тауышына ҡолаҡ һалығыҙ!» — тир инем. Улар унда шатлыҡтарҙың да, дәртлектәрҙең дә, моңдарҙың да, халҡымдың мең-мең төрлө бүтән яҡты тойғолары менән ҡуша аралашып, иҫәпһеҙ күп тулҡын булып тәгәрләгәнен күрерҙәр ине...

Халҡым миңә иң ҙур судья ла, уҡытыусы ла. Халыҡ күңелен тыңлай белгән кеше ундағы иң нескә хистәрҙе лә тотоп ала ала. Мин шуны аңланым: халҡым моңдарҙы дәрт менән бергә, бер хоҡуҡта ҡулланып йөрөтә. Космик ракеталар осоронда ла кешегә моң кәрәк икән. Иғтибар итегеҙ: хәҙерге көндә лә кешеләр боронғо моңло оҙон көйҙәрҙе яратып тыңлай бит. Мәжлестәрҙә ултырғанда берәү оҙон көйҙө һыҙҙырып ебәрһә, бөтөн табын шым ҡалып уны тыңлай һәм, аҙаҡтан, иҫәпһеҙ күп алҡыштар менән тәбрикләй. Өфө радиоһы тапшырған моңло йырҙарҙы, башҡорттар ғына түгел, татарҙар ҙа һөйөп һәм йотлоғоп ҡабул итәләр. Күрәһегеҙ, йырҙарҙы тыуҙырған социаль ерлек емерелгән, ләкин йырҙар яңы ерлектә лә шанлы ғүмерҙәрен дауам итәләр. Сөнки халыҡ күңелендә уларҙың зыңғырлап һуғылыу ҡылы өҙөлмәгән...

Моң — күп ҡырлы кеше тойғоһоноң бер гүзәл һыры ул. Әгәр беҙ уны поэзия ерлегенән һыҙып ташлаһаҡ, уҡыусыны иң гүзәл тойғоларҙың береһен кисереүҙән мәхрүм иткән һәм шиғырҙы ярлыландырған булыр инек. Халыҡ, әлбиттә, шағирҙар моңдо танымай икән, тип, үҙенең моңға булған ҡарашын үҙгәртмәҫ инде. Шатлыҡ, дәрт тойғолары менән бер рәттән, ул һаман моң эҙләүен, моң кисереүен дә дауам итер. Шағирҙарҙың китабында тапмаһа, ул уны үҙе сығарыр. Ләкин ул уны ҡайһы ваҡыт дөрөҫ, ә ҡайһы ваҡыт яңылыш идея менән һуғарыр. Әҙәбиәт арҡылы халыҡ аңына тәьҫир итә торған мөһим рычагтарҙың береһе беҙҙең ҡулдан ысҡынған булыр... Бына шуларҙы иғтибарға алып, ошондай фекер әйтке килә: әгәр ул яҡшы идея күтәреп, шул идеяны халыҡ күңеленә нескәлеклерәк юл менән алып барып еткереү өсөн килһә, моңға ҡаршы күҫәк күтәрмәйек әле беҙ! Моң йәшәргә тейеш, ләкин ул, шағирҙар ҡәләме аҫтында, уҡыусыға һағыш-хәсрәт, аһ-зар килтереү өсөн түгел, ә уның законлы кешелек тойғоһон ҡәнәғәтләндереп, шул уҡ ваҡытта уны киләсәккә ышаныс, Ватанға, халыҡҡа, партияға оло мөхәббәт, эшләнеп ятҡан бөйөк эштәрҙең ҡәҙерен белеү тойғоһо менән байытырға тейеш. Әгәр ошо күрһәтелгән вазифаларҙы уңышлы йөкмәп килә алһа, шағир йөрәгенән һарҡылып шиғырға төшкән уйсан моң һис тә «пессимизм емеше» тип аталырға тейеш түгелдер, минеңсә.

Ошо юлдарҙы уҡығас, был мырҙа моңло шиғырҙар ғына ижад итеп йәшәргә йыйына икән, тип уйлай күрмә тағы. Һис тә улай түгел. Кеше өсөн хас тойғоларҙың бөтәһе лә етерлек миндә. Әгәр шул күп төрлө тойғоларҙың тик береһен генә бөтә шиғырҙарыма һалып ҡуллана торған булһам, мин бик ярлы һәм бәхетһеҙ булыр инем. Шағир ижадында хистәр, тойғолар бриллианты бөтә ҡырҙары менән балҡып тоҡанырға тейеш.

Кескәй тәжрибәмдәге төп һыҙаттарҙың һинең тарафтан ыңғай баһаланышы, ысынлап та, ҡанатландырҙы мине, ҡорҙаш! Һин шиғырҙарымдың тышҡы ҡабығы үтәләй ысын үҙәкте күрә алғанһың. Шиғыр техникаһы яғынан ебәргән етешһеҙлектәрем тураһындағы һүҙҙәреңде тулыһынса ҡабул итәм һәм дөрөҫ тип иҫәпләйем. Һинең хатты уҡыу һөҙөмтәһендә шиғырҙарыма ҡабат күҙ йөрөтөп сыҡҡас, бына ошондай нәтижәгә килдем. Ысынлап та мин, һин әйтмешләй: «Фекере, образы булһа, ҡалған яғы былай ҙа үтә ул», — тиеберәк уйлағанмын икән шул. Ә инде: «Шиғырҙарҙы скульпторҙар ныҡышмалылығы менән эшләйек», — тигән саҡырыуың һәм бер ниндәй формаһыҙ таштан да гүзәл һын барлыҡҡа килтереүсе скульпторҙар ижады тураһындағы образлы миҫалың мине үҙ ҡәләмемә бөтөнләй икенсе күҙлек аша ҡарарға рухландырҙы. Эйе, ҡорҙаш, эйе, тормош тәжрибәләрен һәм халҡым күңелендә ятҡан гәүһәр тойғоларҙы, бихисап рухи байлыҡтарҙы камил формаға ла һала белергә кәрәк! Ә инде яҙыу манерамдың бер аҙ ҡытыршыраҡ булыуын йәғни шиғыр юлдарының һөйрәлеберәк килеүен йөкмәтке тарафынан талап ителгән сара, тип аңлатҡым килә, шулай ҙа. Ағастары япраҡҡа төрөнөп ултырған елһеҙ йәй айында ҙур йылғаларҙың талығып ҡына ағышын күргәнең барҙыр бит һинең? Мәҫәлән, Һаҡмар һыуының. Шаулап-ажғырып аҡҡан һай кисеүҙе үтеп, түбәнерәк барһаң, сикһеҙ тәрән уйға һәм моңға сумып, бер нисә саҡырым буйына талығып, тыныс

һәм яй ғына ағып ятҡан тәрән йәшел ятыуҙы күрәһең. Ул уйлы, моңло булғаны өсөн шулай талығып яй ғына аға, һөйрәлеп аға кеүек...

Тағы ла өҫтәп, шуны әйтке килә: халҡы араһында, ҡарурмандағы ағастарҙай, тығыҙ һөйкәлеп йәшәгән кеше — төрлө төҫтәге буяуҙар араһына ташланған киптергес ҡағыҙҙы — промокашканы хәтерләтә. Промокашка бит яҙыу ҡараларының ҡараһын да, ҡыҙылын да, зәңгәрен дә, һайлап тормаҫтан, бөтәһен бер дәрәжәлә һеңдермәйенсә булдыра алмаған кеүек, әҙәм балаһы ла халыҡ тойғоларының төрлө биҙәктәрен: дәртен дә, моңон да һәм бүтәндәрен дә, айырмайынса, үҙенә ҡабул ҡыла. Ул биҙәктәрҙең иң яҡшыларын шиғыр аша халыҡҡа кире ҡайтарғанда, уларҙың бер генә тимгелен дә һүрелтмәй, юғалтмай, киреһенсә, шағир күңелендә яралған яңы тимгелдәр һәм идеялар менән тулыландырып, байытып бирергә кәрәк.

Ҡәҙерле ҡорҙаш! Быға саҡлым мин үҙемде ҡанаты һындырылған ҡош итеп һиҙә инем. Ләкин һинең ысын дуҫлыҡ хисе менән, минең көсөмә ышаныс белдереп яҙған илһамландырғыс һүҙҙәрең миңә яңынан ҡанат ҡуйҙы. Түбәм өҫтөндә тәрән бейеклек күрҙем һәм шул бейеклекте яулау мөмкинлеге барлыҡҡа ышандым. Иң мөһиме ошо!

Ҡанатҡа эйә йән — осорға, күккә күтәрелергә тейеш. Ләкин шағир поэзия күгенә үҙен бөтә донъяға күрһәтеү өсөн түгел, ә бөтә донъяға күктән һүнмәҫ ут йолоп алып биреү өсөн күтәрелә.

Мин шулай аңлайым.

Бына һеҙгә тағы ла бер нисә шиғырымды ебәрәм. Үҙегеҙ нисек ҡарарһығыҙ...

Иҫән бул, ҡорҙаш, ижадыңда уңыштарға ireш.

Йыһат Солтанов. 14.10.1963.

Йыл буйына айның алмай йөрөнөм был илереп-тилереүҙән, ә Рафаэль ҡорҙашымды донъялағы иң ҡәҙерле дуҫтарымдың береһе итеп күрҙем. 32-нсе йыл тыуғандарҙың утыҙ ике йәше тулған 1964 йылдың 3 декабрендә (үҙемдең тыуған көнөм) илһамланып ошо шиғырҙы яҙҙым:

Утыҙ ике

*Ҡорҙашым **Р. Сафинға**.*

Утыҙ икене лә еткерҙек бит! —
Утыҙ ике тапҡыр Ер шары
Беҙҙең менән һыҙҙы түңәрәген,
Сорнап алды йәй һәм ҡыштарҙы.

Утыҙ ике тапҡыр, күк күгәртеп,
Беҙҙең өсөн яңы йыл тыуҙы.
Донъя ғәмен йыйған күңелдәрҙе
Шампанский йә урт-йәш йыуҙы.

Утыҙ ике тапҡыр, өмөт итеп,
Күҙ аттыҡ беҙ төпһөҙ күктәргә.
Утыҙ ике тапҡыр һәм йөкмәндек
Ватан артҡан изге йөктәргә.

Утыҙ ике төрлө һөнәр тирҙек,
Утыҙ ике яҙмыш кисереп.
Һәм ышанам: беҙҙең саф йөрәктәр
Етмешкә лә беҙҙе еткерер[21].

Беҙҙең нәфрәт, беҙҙең мөхәббәттәр
Утыҙ икеләтә пак булды.
Күкрәктәрҙең күкрәп-тетрәүҙәре
Йондоҙланып күккә атылды.

Һөйөклө дуҫ, ләкин һөймәнек беҙ
Утыҙ ике төрлө ҡояшты.
Табында ла, ҡанлы яуында ла
Намыҫыбыҙ булды юлбашсы.

Тайпылманыҡ тоғро юлыбыҙҙан,
Аяҡтарҙы йылан саҡһа ла.
Шуға ла шул бөгөн күбебеҙҙең
Бәғерендә яра һаҡлана.

Һөйөклө дуҫ, тоғро дуҫым минең,
Ҡаршылайбыҙ ғүмер байрамын.
Утыҙ ике тапҡыр бирәбеҙ һүҙ
Тапатмаҫҡа Намыҫ байрағын.

Һин — Өфөлә, ә мин ауылымда,
Тик йөрәктәр тибә бер тигеҙ.
«Ҡояш алып ергә ҡайт!» — тиһәләр,
Менеп китер инек икебеҙ.

Һөйөклө дуҫ, икәү күтәрәйек
Икеләтә нурлы бокалды,
Утыҙ икенсе йыл тыуғандарҙың
Утыҙ ике йәше айҡанлы.

Һөйөклө дуҫ, утыҙ ике тапҡыр
Ант итәйек илде һөйөргә.

---

[21] Күрәҙәлегем дөрөҫкә сыҡты: ҡорҙашым Рафаэль Сафин 2002 йылда — 70 йәшен тултырып китте был донъянан; ә мин иһә был хәтирәләрҙе 71-енсе йәшемдә яҙып ултырам.

Көн килһә лә, ҡара төн килһә лә,
Халҡым өсөн, тиеп, еңергә!

Утыҙ ике әжәл кисермәбеҙ,
Ләкин беҙҙең кискән бер әжәл
Ил алдында антты үтәү булыр —
Халыҡ өсөн түгел бер ни жәл!

Һөйөклө дуҫ, тоғро дуҫым минең,
Күтәрәйек нурлы бокалды
Утыҙ икенсе йыл тыуғандарҙың
Утыҙ ике йәше айҡанлы!

3.12.1964.

Әҫәрҙәр ҙә бит донъяға үҙ яҙмышы менән тыуа. Был шиғырҙы «Йондоҙ ямғыры» йыйынтығыма кереткән булһам да, дуҫым Рәми Ғариповтың һүҙен тыңлап, алып ташлағайным, шунан һуң да ул бер ваҡытта ла матбуғатта сыҡ-маны. Әйткәндәй, шулай уҡ икенсе дуҫым Рафаэль Сафиндың хупламауы ар-ҡаһында «Мостай Кәримгә» тигән шиғырым да ҡулъяҙмала килеш ятып ҡалды. Ә Рәмиҙең үҙе хаҡындағы бер нисә шиғырым, күпме генә боронғо һәм нығлы дуҫтар булһаҡ та, үҙе үлеп байтаҡ йылдар уҙғас ҡына яҙылды...


Яҙыусы Зиннур Солтановҡа СССР Яҙыусылар союзы ағзалығына
Рекомендация

[illegible]

3.11.70.

Һүр.36. Р. Сафиндың мине тотанаҡлауы

Рафаэль әйткән «һөйрәлеүсе ритм» тәү сиратта «Буранлы юлда» тигән шиғырға бәйле булып, төбәгемдеңҡарлы-буранлы алыҫ Тирәкле юлынан өшөп-ҡатып колхоз малдарына һалам ташыған саҡтарҙы иҫкә төшөрә. Атауылла дуҫым йөрөткән ҡарышлауыҡлы трактор, осһоҙ-ҡырыйһыҙ аҡ диңгеҙҙә тулҡындарҙы ярған карап һымаҡ, аҫҡа бер батып,

бер ҡалҡып, эс бошорғос талғын дырылдап бара; тауышы бер көсәйеп, бер һүлпәнәйеп сыға; ә ҡарышлауыҡ табанлы «тимер ат» артында беҙ — санала бейек йөк башында буран өйөрмәһе эсендә һерәйешеп ултырып киләбеҙ. Шул хәрәкәт ыңғайына тракторҙың талғын ауазылай оҙон моң — һөйрәлеүсән ритмлы шиғыр үҙенән-үҙе ярала күңелемдә...

Һүр. 37. Йыһат, Сабит, Сания Солтановтар.
Өфө, август 1965.

Рафаэль ҡорҙаштың баштан уҡ миңә һирпелгән йөрәк йылыһы һәм яҙғы беренсе ҡояш нурҙары тәьҫирендә һалҡын ҡарҙы йырып сығыусы нығыш аҡ-сәскәләй бирешмәйенсә үркелеүсе талымһыҙ шиғриәтемде, кеше булараҡ үҙемде лә хөрмәтләүе, әйтә алам, оҙаҡ йылдарғаса һүрелмәй күңелемде биҙәне. Яҙыусылар берлегенә ағза итеп алынғанымда фатихалап биргән яҙыуы ла (ҡулъяҙмаһы өҫтәрәк) тап ошо хаҡта һөйләй бит:

Яҙыусы Йыһат Солтановҡа СССР Яҙыусылар союзы агзалыгына ***Рекомендация.***

Мәглүм ки, яҙыусылыҡҡа иң якшы рекомендация – ул яҙыусының китаптары. Йыһат Солтановты мин шагир итеп нығырак беләм. Уның "Йондоҙ ямгыры" исемле шигри китабы үҙе үк бик һәйбәт рекомендация.

Йыһат Солтанов тормош багажы ҙур булган, әҙәбиәткә үҙенең ныҡлы ҡарашы менән килгән, яҙыусының төп ҡоралы телде үҙенсә якшы белгән етди әҙип. Унан, шигри әҫәрҙәр генә түгел, ҙур күләмле проза әҫәрҙәре лә көтөргә хаҡлыбыҙ. Сөнки ул был өлкәлә лә етди заявкалар бирҙе.

Унан һуң миңә, Йыһат менән бергә эшләгән, уны, яҙыусы итеп кенә түгел, ә кеше итеп тә арыу уҡ белгән әҙәмгә, уның кешелек сифаттары ла ҡәҙерле. Уның менән яңы яҙылып бөткән әҫәрең һәм артабангы ижад пландарың хаҡында рәхәтләнеп һөйләшеп ултырып була.

Мин, 1960 йылдан биреле Яҙыусылар союзы агзаһы булараҡ, Йыһат Солтановҡа СССР Яҙыусылар союзы агзалыгына фатихамды бирәм.

Р. Сафин. 03.11.1970.

Ҡорҙашымдың хатындағы матбуғат таратыу тураһындағы нәсихәтенә килгәндә, әллә ҡасан уҡ, ауылыма ҡайтҡас та башлағайным ул эште. Даими алдыртҡан «Ағиҙел»емде үҙемдән һуң башҡаларға уҡыттым, «Совет Башҡортостаны» гәзитен, көндөкөн көнгә ҡуша тегеп, китапхана уҡыу залының өҫтәлендә ҡалдырҙым. Башҡорт матбуғатына өйҙән-өйгә йөрөп өгөтләп яҙҙырттым. Бына шуға бер миҫал булырҙай хатым:

Һаумыһығыҙ, иптәштәр!

Бына мин һеҙгә тағы ла бер шиғыр ебәреп ҡарайым.

Ғинуар айында бер, февраль айында бер тапҡыр шиғырҙар ебәргәйнем, Рафаэль ҡорҙаш ни өсөндөр яуап яҙмай. Әллә өйҙә юҡмы? Әйберҙәрҙең редакция тарафынан нисек баһаланғанын белмәгәс, икеләнеп торам. Билдәһеҙлек.

«Ағиҙел» журналына ҡағылышлы бер-ике һүҙ. Беҙҙең бригаданан быйыл 23 кеше «Ағиҙел»гә яҙылғайны, ләкин, яңы йылдың инде өсөнсө айы китеүгә ҡарамай, беренсе һанын да күргәнебеҙ юҡ. Элемтә бүлеге: «Беҙ бер ни ҙә белә алмайбыҙ, Өфөнән ебәрмәй тоталар», — тип яуап бирә. Тейешле урынға шылтыратып, бына шул мәсьәләне хәл итһәгеҙ ине. Эштәр былай барһа, киләһе йыл подписчиктарҙан ҡолаҡ ҡағыу мөмкин бит.

Иҫән булығыҙ, яуап яҙығыҙ. Бөтәгеҙгә лә ижади уңыштар теләп, **Йыһат**. 11.03.1964.

Хуш, ауылым!

Өфөләге «шеф»тарым Рафаэлде лә, Рәмиҙе лә боронғо Петербурҙағы урыҫ аристократтары һымаҡ итеп күрә башланым; сөнки улар минең кеүек ҡара эштәр араһында болғанмайынса, сәскәле яҙ йырсылары — һары һандуғастар һымаҡ, нәзәкәтле үҙ телдәрендә генә һөйләшеп, саф шиғриәт менән генә һулайҙар кеүек ине. Ә мин көндәлек әрһеҙ эштәремдә янып йәшәйем, КПСС-тың үҙем сикһеҙ ихтирам иткән генеральный секретаре Никита Сергеевич Хрущевтың ялҡынлы сәйәсәте менән мөкиббән мауығам, ижадым да ана шул тормош һулышынан тын ала. «Шеф»тарым кеүек йылына бер нисә бөртөк шиғырҙы ювелирҙай йыбанмайынса шымартаһы, йылтыратаһы, гәүһәрләтәһе урынға, ҡырыҫ тормош киҫәген тормош ҡаяһынан ҙур дәүмәлдә умырып алып, ҙур жанрҙар менән йөҙәтәм Өфөнө. Шул рәүешле 1963 йылда — «Крематорий», 1964 йылда — «Милиция иптәшкә өндәшеү», «Химия һәм игенсе», «Ашлама һәм фашлама», «Йөрәк илауы» тигән поэма һәм плакат-поэмаларымды яҙғанмын; шуларҙың ылғый ауыл тормошло өсөһөн «Совет Башҡортостаны» гәзитенә тәҡдим ҡылып, әҙәбиәт бүлеге мөдире Рәми Ғариповтан: «Һин, ҡартым, поэзия менән булаш. Тиреҫ ул поэзия матдәһе түгел», — тигәнерәк ҡәтғи яуап алғанмын... Шул ваҡыт мин йөрәк һыҙлатҡыс ауыр хистәр кисереп, бөтә үткән ғүмеремде, йәшлек йылдарым һүрелеп ҡалған һәм мәңгелеккә юғалған тыуған ауылым Сәнкем-Биктимерҙе, ҡәҙерле ауылдаштарымды иҫемә төшөрөп ултырҙым...

Һүр. 24. Уңдан һулға ауылдаштарым Сания, Сәлисә Абдрашитовалар; Луңке – Алексей Николаевич Мостряков, Насибулла Ғибаҙулла улы Абдрашитов, Александр Шинкаренко, Көлбәкова Рабиға, Солтанов Ким Хисамитдин улы, Мәхүбә һәм Раҡия Абдрашитовалар.

«Һәнәк» журналына ла ваҡ ҡына сатирик хикәйәләр ебәреп ҡарағайным, ләкин Марат Кәримов тигән мин белмәгән берәүҙән (торараҡ белеүемсә, ифрат талантлы яҡташым булып сыҡты, халыҡ шағиры дәрәжәһенә күтәрелде) кире ҡағылыу хаттары алдым (ижадым ул теләгәнсә юғары кимәлдә булмағанғалыр инде). Был яҡтан да өмөтөм тамам өҙөлдө, тигәндә генә, көтмәгәндә, миңә таныш түгел Ғабдулла ағай Әхмәтшиндән һөйөнөслө хәбәр килеп төштө, оҙаҡламай баяғы хикәйәләрем “Һәнәк” журналында бер-бер артлы ташҡа баҫылып та сыға башланы. Баҡтиһәң, Марат Кәримовты үрләтеп, Мәскәүгә ВЛКСМ Үҙәк Комитеты мәктәбенә уҡырға ебәргәндәр, урынында миһырбанлы Ғабдулла ағай эшләй башлап, аҙаҡ уның үҙе иҫкә алыуынса, өҫтәл тумбаһы аҫтында ҡаҡланып ятҡан ҡулъяҙмаларымды һөйрәп сығарған...

1965 йылдың йәйендә сираттағы уҡыуымдың сираттағы бурыстарын үтәү буйынса вузға барғанымда үҙ ғүмеремдәге көтөлмәгән боролош булды: «Һәнәк» журналының баш редакторы Идиәтулла ағай Әсәдуллин (һуғышта Ғ. Әхмәтшин ағай менән бергә булған) миңә журналда эшкә ҡалырға тәҡдим яһаны, өҫтәүенә, фатир һымаҡ бер мөйөш тә тәтетмәкселәр икән (машинистка Фәхриә апайҙан бушанған). Күп уйлап торорға ла, ғаиләм менән кәңәшләшергә лә форсат юҡ — күҙ йомоп ризалыҡ бирҙем (үтә яуаплы мәлдәрҙә шулай ҡапыл хәл итеү ғәҙәтем бар). Ауылға хәбәр итеп, ғаиләмде күсереп алырға әҙерләй башланым фатирҙы. Унда ризалашҡандар (бүренең башы урманға ҡарағанлығын яҡшы беләләр бит инде!), урын-ҡаралтыны юлға әҙерләп төйнәштерергә керешкәндәр.

Тиҙҙән ҡатыным, Сабит улымды алып, фатир күрергә килеп етте, өсәүләп фотоға төштөк (һүрәтен теркәйем: 1965 йылдың авгусы); бик үк хушһынмаһа ла

(үҙе тар ғына, уңайлыҡтары юҡ, бәҙрәф — тышта, дүрт ғаиләгә бер кухня), риза булып ҡалды һымаҡ. Эшемдән ял һорап алып, күсенергә ауылға ҡайтып киттек. Әсәйем ҡарсыҡ унда, үҙ ғүмерендә юл йөрөп күргән кеше, әйберҙәрҙең бер килкеһен тараҡкан, бер килкеһен багажға тапшырырлыҡ итеп төйнәкләп өлгөрткән. Һәр төрлө танытмалар менән ҡоралланып, районыбыҙ үҙәге Һарыҡташҡа барып, ҡатыныма үҙ ғүмерендәге тәүге паспортын алып ҡайттым. Күсеп китеребеҙ тирә-яҡҡа йәшен тиҙлегендә таралып өлгөргән, мине ғәжәпкә ҡалдырып, һәр береһе күрергә һәм хушлашырға тип килә. Ата-бабалар заманынан йыйналған ҡәҙерле ҡомартҡыларҙы ла әрәм-шәрәм итеп ташлап бөтөрҙөм: күҙемә аҡ-ҡара күренмәй, фәҡәт Өфө һәм әҙәбиәт, әҙәбиәт, әҙәбиәт кенә ине белгәнем... Атай йортона, ярай, алыусыһы табылды — осһоҙ ғына хаҡҡа булһа ла осорҙом, юғиһә ауылда күҙ көйөгө булып ҡарауһыҙ ултырыр ҙа, түбәһенән һыу үтеп, ватыҡ ишек-тәҙрәләренән ел уйнап, емерелеп төшөр ине барыбер (Урта Азияға олаҡмыш Сафуат абзыйымдың өйө ана шулай юҡҡа сыҡты бит).

Иртән сәфәрләнер көндө, ихатамды буйлап йөрөп, ҡулдарымдың йылыһын һаҡлаған бөтә нәмәләрем менән йөрәкһеп бәхилләштем.

Үҙем ултыртҡан уҫаҡтар
Менән бөгөн хушлаштым.
Әйтте улар: «Беҙҙән биҙеп,
Ҡала менән дуҫлаштың!..»

Ҡулдарымдан ер тырнаған
Ҡаралыҡ та китмәгән.
Торам ҡарап уҫаҡтарға,
Ағыҙып йәш тикмәгә.

Уҫаҡтарым, уҫаҡтарым,
Тик һеҙ белдегеҙ барын.
Һеҙгә генә аҙмы тапҡыр
Һөйләнем йөрәк зарын!

Төндәр булды йоҡламаған,
Йылмаймаған көндөҙҙәр.
Олон төптәренә һеҙҙең
Һалдым аҙмы юл-эҙҙәр!

Сыңҡ-сыңҡ итеп иланығыҙ,
Тәңкәгә тәңкә ҡағып,
Ҡаштарыма минең әгәр
Ҡуйырһа ҡайғы-һағыш.

Сырҡ-сырҡ итеп көлдөгөҙ һеҙ,
Маңлайым Айҙай янһа.
Һеҙҙең күрһәткән хөрмәткә
Бирә алмайым баһа.

Тик шуны ғына әйтәмен:
Китәмен — мәңге түгел.
Бер ҡайтмаһам, бер ҡайтырмын,
Юҡһынып илде күңел.

Тик, урамдан уҙғанымда,
Мине һеҙ ят итмәгеҙ.
«Буйға үҫтереп еткермәй,
Китте ташлап...» — тимәгеҙ.

Тәңкә япраҡтан битемде
Сирттерегеҙ бер генә.
Йәшем, булып ҡайнар йәшен,
Тамыр тыуған еремә.

30.08.1965.

«Ленька — Лүңке» тигән шиғырымдың геройы Мостряков Алексей Николаевич (башҡортҡа әйләнгән урыҫ) күк төҫөндәге «Беларусь» тракторына еккән арбаһын ихатабыҙға килтереп ҡуйҙы, тимер юл станцияһына алып китәһе ҡаралтыларыбыҙҙы шуға тейәп бөтөрөп, үҙебеҙ ҙә менеп ултырыша башланыҡ. Тап шул мәлдә Яйыҡ буйы Алабайталдан Сانияның яҡын туғаны Фәриҙә апай йәйәүләп килеп етте: быйыл һыйырҙары ҡазаланған да беҙҙең һыйыр һатаһыны ишеткән икән. Бынығы ла яҡшы булды, «Алтын»ҡайҙы кемгә ҡалдырырға белмәй баш ҡатып торғанда. «Алтын»ыбыҙ ҙа, бөтәһен дә һиҙенгән-аңлағандай, аҡ филтәнән ишелгән бауҙы аҡ башына ҡарышмай ғына кейҙертте; Фәриҙә апайҙың етәгенә ыңғайлап, бынан күпме быуаттар элек Муйтән бабабыҙ киткән изге Ҡуңыр Буға юлынан күктәге шау-йондоҙлоҡтар араһына кереп юғалды...

Трактор нәҙек тамағынан зәңгәр төтөн ҡулсалары борҡотоп дырылданы, шул саҡ Сабитымдың Данил тигән әшнә малайы, танауынан оҙон маңҡаһын сосолтоп, йөрәк өҙгөс әрнеү менән үкереп илап ҡайтып китте.

Урам тулы халыҡ ине — ауылдаштар хәйерле юл теләп ҡалырға йыйылған. Ғилаз бабайымдың ҡысҡырып-ҡысҡырып тәкбир әйткән ауазы яңғыраны. Күҙ йәштәремде йотоп, аҫҡа ҡарап ултырҙым... Йүгереп киткән трактор арбаһы артынан Ғилаз бабайым тәкбир әйтә-әйтә эйәреп барҙы. Ҡул болғап ҡалған ауылдаштарҙың йөҙҙәре лә, һындары ла мәңгелектең томаны эсенә күмелде...

ИКЕНСЕ КИҪӘК

Өфөлә

Ябай ауыл малайы

«Ябай ауыл малайы»ның (шулай тип һанайҙар ине мине) Өфөгә килеп урынлашыуы баш ҡала өсөн, әлбиттә, иҫ китерлек ваҡиға булмағандыр. Тәүге йылым ҡалаға һәм эш урынына күнегеү, яңы хеҙмәттәштәр менән уртаҡ тел табып йышылыу һәм, ниһәйәт, ғаиләмде туйҙырыр икмәк табыу хәстәрлектәренә күмелеп үтте. Иң ҡыйыны — ҡәләмдәштәр араһында йәйелгән һәм һис кенә лә туҡталырға уйламаған хәмер затлы эскеселеккә ылығып йәшәп китеү, кемдең арбаһына ултырһаң — шуның йырын йырлап ҡына ылауҙан ҡоламай бара алыуың ине. Ул осорҙа ғөмүм ил буйынса ҡотороноп ”сәскә атҡан” был киҙеү күренекле һәм күренекһеҙ ҡәләм эйәләрен дә нығ ҡаҡшатты шул: редакцияларҙың күбеһендә эш көнө редакторҙан ҡасып-боҫоп рюмка тотоуҙан башланыр ине, абруйлы оло быуын әҙиптәренең дә күбеһе (тәртипле һәм инсафлы Сәйфи Ҡудаштан һәм “һалҡын кеше” Әкрәм Вәлиҙән ғәйреләре) шул һөрөмдә бергәләп ҡайнашыр ине. Әйтәйек, ярым һуҡыр һәм һаңғырау яҡташым Сәғит Агиш, кәкре таяғына таянып, көн дә иртән редакцияларҙы әйләнеп сыға, башҡалары ла һуғылмай үтмәй һәм был тап “Һәнәк”тәге “күтәренке” сәғәттәргә тап килә. Ә гонорар алыу (“Һәнәк”тә айына бер-нисә тапҡыр) көндәрендә ул саҡтағы матбуғат йортондағы (Карл Маркс урамы, 25) хәмер-хөмөрлө буфетта ағай-эне бигерәк тә кинәнеп байрам итә, һәр беребеҙ ғаиләләргә “ярым төҙөк, ярым боҙоҡ” хәлдә ҡайтабыҙ, ә ҡайһы берҙәребеҙ, ярты юлда һөрлөгөп, төрлө мажараларға осрап, ҡаланың айныҡтысханаһына ла тарый. Шундай мажараларҙың береһен әйтәйем.

Шул Карл Маркс 25-тә касса “амбразура”һы ҡаршыһында сират торабыҙ: алдараҡ – Сәғит Агиш, унан ҡала бер-нисә кеше аша “Һәнәк”тәшебеҙ (үҙе парторг) Рәйес Ғабдрахманов, уның артынса беҙ, ҡалған “Һәнәк”селәр. Рәйес ағай Ғабдрахманов шунан бер-ике ай элегерәк кенә кисен эштән “күңелле” ҡайтып барышында һыңар аяғын һындырып, ике ҡултыҡ таяғына таянып йөрөп ята, әммә барыбер “күңелле” ғәҙәтен ҡуймай. Бына Сәғит ағайыбыҙ, ҡарт юморист, “амбразура”нан үҙ әжерен алды ла, артына боролоп ҡарап, ҡатын-ҡыҙҙыҡылай бәләкәй генә ҡулындағы бер ус ҡағыҙ аҡсаны һелкеп, урыҫсалап “юморланы”:

-- Раис Габдрахманов, айда, пошли другой нога ломать!

Һәм иртәгеһен күңелһеҙ хәбәр килде: Сәғит ағайыбыҙ, баяғы буфеттағы хиссиәтле табыныбыҙҙан хозурланып ҡайтып барғанында, Коммунистик урам асфальтендә үҙ аяғына үҙе һөрлөгөп, ҡулын һындырған...

Атаҡлы Баязит ағай Бикбай менән дә аптыраткыс хәл булған. Шул йылдарҙа тимер юл вокзалы яғындараҡ Карл Маркс урамындағы йортта йәшәй ине ул (ингәнем дә бар). Ваҡиға йәйге селләлә моронлап, ағайыбыҙ ул заманда хәлле кешеләр генә кеймәле буй биҙәкле ебәк пижамала тимер юл вокзалы янындағы мунсаға киткән; елле ҡайын миндек менән йәне теләгәнсә сабынып сыҡҡас, еңгәйгә ҡайтып етере алдынан ҡанды йүгертергә тип, вокзал ресторанына кереп ултырған да поезд туҡталған арала вагондарынан төшөп, уның өҫтәленә һырып шешә бушатыусы шундай уҡ буйлы пижамалы йомарт ике офицерға

табындаш булған. Поезд ҡуҙғалыры алдынан ғына, ялҡынлы тостарының осона сыға алмай, буфеттан бер-ике шешәне эләктереп, өсөһө (Баязит ағайыбыҙ ҙа!) туғандарса ҡосаҡлашып, вагонға саҡ менгәндәр; купеға инеп ултырып, күңелле шөғөлдө ары дауам иткәндәр һәм Баязит ағайыбыҙ буй-буй пижамала килеш Өфөләге фатиры урынына Мәскәүҙең Ҡазан вокзалына барып төшкән. Ҡапыл иҫенә килеп, ҡаса-боҫа, тигәндәй, такси яллап, консерваторияла уҡып ятмыш йәш композитор Заһир Исмәғилев йәшәгән дөйөм торлаҡа барып етә был, ә тегеһе уны ҡосаҡлап ала, таксисты ризалаштырып, бүлмәһендә ятҡырып ял иттертә. Шулай баш-күҙ алғас, пижамаһы өҫтөнән ҡустыһының алмаш костюмын кейеп алған әҙип ағайыбыҙ әҙәпле генә ҡиәфәттә Рәсәй Әҙәбиәт фонды (Литфонд) идараһына барып инә (унда уны яҡшы беләләр) һәм, баш ҡалала милли опера либреттоһы яҙып ята торғас көрсөккә таяныуын һөйләп биргәс, ярҙам фондынан ярайһы ғына аҡса алып сығып китә. Беҙ ҡапсыҡта ятмай бит: ағайыбыҙҙың Өфө мунсаһынан нисек итеп “өйөнә ҡайтып етеүе” тураһындағы күңелле мажара тиҙ арала бер килке Мәскәү зыялылары араһында таралып, күп йылдар буйына шешәле табындарҙа һөйләнеп йөрөмәле көләмәс төҫөн ала; бер заман шуның нигеҙендә кинорежиссер Эльдар Рязанов үҙенең “Новый год или с легким паром” тигән билдәле фильмен эшләп данлана...

Редакциялар урынлашҡан Матбуғат йортоборҙо аҙаҡ иҫке урыҫ зираты өҫтөнә биналап күсерҙеләр, ә зираттың ҡалған өлөшөндә лә бөтөрөү эштәре бара. Шундағы миләш һәм ҡайынлыҡтар араһындағы бер-нисә урында ҡала хәмерйәндәре дүрткел ҡәбер таштарынан өҫтәл-эскәмйәләр әтмәләгәндәр ҙә йәйге эҫе көндәрҙә шул күләгәле табындарҙа йыйналышып эсәләр – урам аша ғына араҡы кибете, милиция ла әруахтарҙы борсомай... Главпочтамтта хаттар эшкәртеү бүлегендә эшләүсе ҡатыным Санияға йәш хеҙмәттәш ҡыҙҙарҙың береһе һөйгән егете менән шунда юлығыуын һөйләгән: “Рауил Бикбаев тигән ифрат йомарт шағир бар икән: табыныбыҙға туҡталды ла, ҡысҡырып шиғыр һөйләп, бер-икене “төшөрөп” алғас, ҡеүәтләнеп, “бөгөн минең байрамым, егеттәр!”, тип һөрәнләп, магазиндан бер юлы бер йәшник араҡы килтертте!”

Шул зиратҡа бәйле тағы ла бер эпизод ҡалған иҫтә (Булат Рафиҡов үҙе һөйләне). Ул саҡта ҡала хакимиәте шул бөтөрөлгән зираттағы мәрхүмдәрҙең туғандарына уларҙы башҡа зираттарға күсереп күмергә рөхсәт иткәйне (быны ҡала бюджеты иҫәбенән ойоштороғайнылар, буғай), урыны-урыны менән асылған һәм мәйете алынған ҡәбер соҡорҙары өңшәйеп ятыр ине. Тирәһендә ҡыҙарып миләш бешкән бер миҙгелдә нескәлекле “күңел күтәреп” йөрөүсе ҡәләмдәштәребеҙ Булат Рафиҡов, Ғәзим Шафиҡов, Миәссәр Басиров һәм Александр Филиппов шунда киләләр ҙә, бушанған ҡәбер эсенә төшөп ултырып, баштары өҫтөнә эйелеп үҫкән миләш емештәре ҡабып эсәләр. Кеше ҡәберенән сығыу ҙа еңел түгел икән шул: Булат, аяғын һындырып, бер-нисә ай буйына ҡултыҡ таяҡтарына таянып йөрөнө...

Әммә хәмер бәләһенең шауҡымында ижади һулыш асылыу осраҡтары ла булды. Мәҫәлән, зыярат буйындағы һуҡмаҡтан эшкә барған саҡтарымда Ҡауи Мөфтәхитдинов тигән ашҡын-шашҡын хисле бер шағирыбыҙҙың берәй мәрйә ҡыҙын ауыҙына ҡаратып ялҡынлы шиғырҙарын тиреп тороу мәлдәрен күргеләй

инем. Баш ҡаланың Орджоникидзе районында йәшәгән билдәле шағирыбыҙ Абдулхаҡ Игебаев, мәҫәлән, “йәшел йылан” зәхмәтенән тап минең кеүек үк күҙҙәре тоноп ҡайта ла фатирына, дыуамалланып, көсө еткән мебелдәрен берәм-берәм өсөнсөмө, дүртенсеме ҡат тәҙрәһенән тышҡа быраҡтыра башлай. Ғәрәсәтле шау-шоуға күрше-күлән ҡуҙғалып, милиция пәйҙә булып, ағайыбыҙҙы һалҡын йортҡа “ҡунаҡҡа” алып китәләр, район судъяһы Хәкимйән Зарипов (шулай уҡ әҙип), ҡыҙған башты ул саҡтағы ҡанун буйынса тиҙ генә хөкөм ҡылып, ун биш тәүлеккә ултыртып ҡуя. Шул арҡала камерала ижад ялҡыны ҡабынған шағир илһамланып ҡәләменә тотона, бәләле хәмер һуҡмағынан мәңгелеккә ваз кисергә ант итеп, бынамын тигән ялҡынлы поэма яҙып сыға зиндандан һәм уны “Совет Башҡортостаны” гәзитендә ташҡа баҫтыртып илде шаулата (әҫәрҙе үҙем ҡыҙыҡһынып уҡыным -- ҡәләмдәшем Хөрмәт Биҡҡол шәхси архивынан алып биргән гәзит киҫентеһенән). Ошонан һуң ағайыбыҙ ысынлап та яуыз “йәшел йылан”дың ғүмерлек тере дошманына әүерелде. Тик шуныһы үкенес: заманалар үтеү менән дә үҙ көсөн юғалтмаған фәһемле шиғри әҫәрҙе авторҙың бер йыйынтығында ла күрмәйбеҙ.

Ғөмүмән, заманының ошо ағыулы сире арҡаһында ҡәләмдәштәр араһында “запой” (айҙар буйына туҡтамай эсеү) менән интегеүселәр ыраны: Динис Исламов, Ғабдулла Әхмәтшин, Мостай Кәрим, Шакир Насиров, Александр Филиппов, Абдулхаҡ Игебаев, Ғәзим Шафиҡов, Булат Рафиҡов, Ирек Кинйәбулатов, Ғәйфулла Вәлиев, Әнүр Вахитов (һуңыраҡҡы быуындарҙы әйтеп тормайым)... Мостай Кәрим менән уның фронтташ дуҫы Ғабдулла Әхмәтшин бер саҡ Ҡорған ҡалаһындағы атаҡлы докторға барып дауаланғас, тәүгеһе шөйлә һауыҡһа ла, икенсеһе шул көйгә ҡалды һаман. Б. Рафиҡов, А. Игебаев, А. Филиппов та, егеттәрсә үҙтеләкле дауаланып, зәхмәт быумаһын дауамлатмаҫлыҡ рухи ныҡлыҡ таптылар, әммә байтаҡтарыбыҙ бынан арына алмайынса, ваҡытынан элек китте “теге донъя”ға...

Бындағылар бөтәһе лә бер үк вуздарҙа бергә уҡып, бер оянан сыҡҡан “себештәр”, шуға күрә бер-береһен яҡшы белеп, ҡыуаныста ла, ҡайғыла ла бер-береһен тотанаҡлап, иңгә иң терәп йәшәйҙәр. Минең бер кемем дә юҡ, үҙемде сит илдән килгән эмигрант хәлендә хис итәм -- таяныс һәм терәүҙәрҙе үҙеңдең түҙмерлегең, егетлегең генә булдыра, ә шулай ҙа теләһә ниндәй мөхиттә һәм сүрәттә лә кешелегеңде һаҡлап ҡалырға кәрәк.

Бүре араһында — бер үҙем, тип,
Бүреләнеп, кешем, олома.
Сөнки кеше — кеше килеш ҡала,
Таш яуһа ла йөрөр юлына.

Сүгеп әгәр яуыз ҡаршыһында,
Яһилланып кинәт олоһаң,
Үкен, бәндә, үкен тыуғаныңа —
Ҡотолмаҫһың бүре булыуҙан...

Кеше була кеше — бил бөкләмәй
Ғорур үтһә генә донъяла.
Бүрелеккә башын һалған бурҙар
Бүре өйөрөндә юғала.
3.11.1962.

Ә шулай ҙа «ябай ауыл малайы»на баш ҡалала аҡыл таҫлап баш ватырға ярамай — уның өсөн "өҫтәге өлкән ағай"ҙар барыһын да энәһенән ебенәсә уйлап һәм әҙерләп ҡуйғандар. Әҙәбиәт — ярым урыҫса, ярым татарса, ярым башҡортса — ниндәйҙер ярым һаҡау телдә яҙыла, сөнки башҡорттоң үҙенең, һуңғы һүҙҙе әйтеү хоҡуғын ҡаҙанған "шағир-генерал" ағайыбыҙ ауыҙ тултырып әйтмешләй, «бер нимәһе лә булмаған». Әгәр башҡортһоң икән, шуға шөкөр итеп йәшә һәм үҙең дә шулай яҙ. Башҡортостан тарихы тип ауыҙыңды ла асма — уның тарихы (Бөйөк Октябрь революцияһына тиклемгеһе) шулай уҡ ғүмерҙә лә булмаған һәм булырлыҡ та түгел. Башҡортостандың баш ҡалаһында ҡала балалары өсөн ниңә башҡорт мәктәбе юҡ, тип тә тыбырсынма — яманатлы Мөхәммәтша Буранғолов һ.б. кеүек һөрһөп бөткән «башҡорт милләтсеһе» булырһың. Бына шул билдәле ҡыҫаларҙа ғына һәүетемсә юртаҡлап барһаң, тәртә тибеп һындырырға маташмаһаң — иң шәп башҡорт икәнһең дә, мырҙаҡай!

Ләкин «ябай ауыл малайы» үҙенең коммунислығын, ә Коммунистар партияһы программаһында, СССР Конституцияһында милләттәрҙең сәскә атып үҫеше, һәр кем үҙенең милли телендә теләгәнсә аралашыу, белем алыу хоҡуғының ҡануни гарантияланыуын һис кенә лә онотորға теләмәй. Бигерәк тә үҙенең уҡыу йәшенә етеп килгән берҙән-бер улын һәм ҡыҙҙарын ул баш ҡалабыҙҙа мотлаҡан үҙенең башҡорт телендә уҡытырға яҫҡына...

1967 йылда баш ҡаланың бер килке зыялылары ҡалабыҙҙа башҡорт мәктәбе астыртыуҙы юллап йөрөй башланыҡ. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының филолог-ғалимы, сығышы буйынса минең ырымбурҙашым Иҙел Агишев ең һыҙғанып етәкләне был эште. Ғаризаны, йөҙ илле кеше ҡул ҡуйып, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетына, БАССР Министрҙар Советына бер юлы юлландырҙыҡ. Йөҙ иллебеҙ исеменән вәкил булып кергән дүртебеҙҙе (И. Агишев, Ә. Вахитов, К. Әхмәтйәнов һәм эшсе синыф вәкиле Аҡбашев) КПСС өлкә комитеты сәркәтибе Т.И. Ахунйәнов иптәш эттән алып — эткә һалып һүгеп сығарҙы (Әнүр Вахитовты «синең сыман эчкечегә тағын ни кирәк?!» тип битәрләгән). «Йөҙ илле ҡултамға — фикция. Һәр кем үҙенең башҡорт мәктәбенә уҡырға бирәсәк балаһының исем-фамилияһын, тыуған йылын күрһәтеп ҡул ҡуйһын!» — тип талап ҡылдылар артабан. Һөҙөмтәлә шөрләгән ағай-эненең күп өлөшө тарҡалып, талап ителгән документҡа утыҙ кеше ҡул ҡуйҙыҡ, балаларыбыҙҙы асыласаҡ башҡорт синыфына уҡырға бирәсәктәребеҙҙе гарантияланыҡ. Рәсми тупһаларҙы шымартып йөрөй торғас, Красин урамындағы 91-енсе урта мәктәптә (элекке етем балалар йорто) ҡала балалары өсөн башҡорт синыфы асырға рөхсәт бирелде. Буш бүлмә булмағанлыҡтан, беренсе ҡаттағы киң коридорҙың бер башын арҡыры бүлеп, синыф бүлмәһе яһанылар, парталар ултырттылар. Беренсе уҡытыусы итеп — Ураҡсина Венера Заһит ҡыҙы, тәрбиәсе итеп Ишемова Роза Ғаҡил ҡыҙы тәғәйенләнде (был эшкә тәүәккәлләнеү өсөн

уларға ла йөрәкле булыу кәрәк ине). Әммә ата-әсәләрҙең беренсе йыйылышында уҡ ҡатмарлыҡ килеп сығып, башланған эш тарҡала биреп ҡуйҙы: КПСС-тың ҡала комитетынан һәм ҡала советынан килмеш ике вәкил (береһе — Зәйнәп Перчаткина, атаҡлы режиссер Абдулла Ғиләжевтең ҡатыны)), башҡорт телендә уҡытыуҙың милләтселек шауҡымы менән ата-әсәләрҙе ҡурҡытып, күпселек ата-әсәләр үҙ ғаризаларынан баш тартып ҡайтып киттеләр, ун бер бала ғына ҡалды синыфта (шуларҙың дүртәүһе яҙыусыларҙың — Йыһат Солтановтың улы Сабит, Әнүр Вахитовтың улы Азамат, Булат Рафиҡовтың ҡыҙы Гөлсәсәк, Зөфәр Ғәбсәләмовтың ҡыҙы Әлфиә ине). Баштарыбыҙға таш яуһа ла тарҡалышмаҫҡа һүҙ ҡуйышып, беренсе уҡыу йылын башлап ебәрҙек. Зөфәр Ғәбсәләмовтың ҡыҙы атлап йөрөй алмаҫлыҡ сиркәш булғанлыҡтан, Зөфәр уны көн дә мәктәпкә елкәһендә йөкмәп килтерер һәм алып ҡайтып китер ине.

Шуныһын да әйтмәй булмай: балаларын башҡорт синыфына уҡырға биреүҙәрен үтенеп-өгөтләп йөрөгәнебеҙҙә яҙыусыларыбыҙҙың байтағы төрлө сәбәптәр табып баш тартты. Мин үҙем, мәҫәлән, Шакир Янбаев менән Рәйес Низамовҡа морон төрткәйнем, тәүгеһе үҙҙәренең янындағы урыҫ-татар мәктәбен хәләл ефете «Хәдичә Ахметовна» һәм башҡа ата-әсәләр менән бергә яҡшы итеп йүнәтеүҙәрен, шуға күрә ул яҡшы мәктәптән китмәйәсәктәрен белдерҙе (Хәдичә Ахметовнаға афарин! — ике улын да сусылдап һөйләшкән татар телле итеп үҫтерҙе). Рәйес Низамов ҡорҙашым иһә «Ағиҙел» журналының редактор урынбаҫары ине — милләтселектә ғәйепләп алып ташлауҙарынан шөрләне. Ул ғына ла етмәһә, партия өлкә комитетына эш менән кергәнендә ул: «Һәнәк»тә эшләп йөрөгән Йыһат Солтанов башҡорт мәктәбендә киләсәктең милли кадрҙары тәрбиәләнәсәк», — тип әйтте, тип ысҡындырған икән, Т.И. Ахунйәнов иптәш тиктомалдан минең фәҡир шәхесемә иғтибарын йүнәлтеп: «Нинди адәм ул — төсенә ҡарағанда ҡырғыҙмы, әллә нинди дә булса башҡа берәй жоратмы?» — тип, башҡортлоғомдо белә тороп та, түбәнһетеүле һорашҡан -- зыялылар араһында ошо хәбәр таралды... Шулай итеп, хатта минең ҡиәфәтемдән дә йөҙ сыйыра башланылар. «Ябай ауыл малайы»ның «милләтсе»гә әүерелә барыуының йылға башы булды был...

«Милләтсе» булараҡ махсус күҙәтеү ҡалпағы аҫтына алыныуым яйлап ҡына һиҙҙертә башланы үҙен. Әҙәм рәтле фатир алырға сиратым етһә лә, ҡала үҙәгендә төҙөлөп бөткән нәшриәт йортонан өлөш сығармай, ҙур ғына ғаиләм менән ҡаланың шайтан барып етмәҫ Черниковка осонда «Курочкина гора» биҫтәһендәге тар ғына һәм уңайлыҡһыҙ (кер йыуырға эҫе һыуҙы күнәкләп мунсанан һатып ала инек) ике бүлмәгә күсенеп китергә мәжбүр ҡылдылар. Ул яҡҡа троллейбус та, трамвай ҙа, ҙур автобустар ҙа йөрөмәй, йоҙроҡтай ғына машинаға әҙәм балалары, күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй, бер-береһен тапашып илашып менә, илашып төшөп китә — шул шарттарҙа көн дә иртән баяғы башҡортса беренсе синыфта уҡып йөрөгән балаҡайымды үҙем эшкә барышлай алып китәм, алып ҡайтам... Шулай ҙа теште ҡыҫып түҙҙек, мәктәпте ташламаныҡ. Балалар башҡортса һөйләшеп, башҡортса уҡып, башҡорт булып үҫтеләр. Өс йыл араһында өс синыф булғас, Достоевский урамында төҙөлөп яткан урта мәктәпте 20-нсе һанлы башҡорт мәктәбе итеп юллап алдыҡ (өс синыф шунда күсенде), быны артынан да

шул уҡ Иҙел Агишев менән уға килеп ҡушылған Мөхәммәт Исҡужин уҙамандар күп йөрөнө. Иҙел Агишев менән мин уҡыу корпусына өҫтәп уҡыусылар өсөн ятаҡ бинаһы төҙөтөүҙе һорап ингәнебеҙҙә Министрҙар Советы рәйесенең урынбаҫары Рамаҙан ағай Өмөтбаевтың бик ыңғай һөйләшеүе хәтерҙә (ләкин бинаны һалмаҡҡа ҡаҙып өлгөрткән котловандарҙы, күрше йорттарҙағы урыҫ-татарҙарҙың хөсөтөнә күрә юғарынан тыйып, күмдертеп ташланылар). Оҙаҡ көтөлгән мәктәбебеҙҙе, ниһәйәт, 1970 йылда асыу тантанаһына йыйылдыҡ, шунда балалар һәм ата-әсәләр ҡаршыһында «Бәхет һарайы» тигән ошо шиғырымды тулҡынланып уҡыным:

Сентябрҙең тәүге аҡ таңын
Аса һеҙгә шат көҙ — йәш егет.
Хуш килдегеҙ алтын һарайға,
Илкәйемдең ялҡын йәшлеге!

Тәбрик итә нурлы кластар —
Тора урғып белем шишмәһе.
Нур-шишмәнән гәүһәр күкрәккә
Йотоп-йотолоп ҡына эсәһе!

Аҡ күңелдең аҡыҡ ярына
Яғылмаһын ҡара наҙанлыҡ! —
Аҡбур менән ҡара таҡтаға
Ап-аҡ антты һыҙып яҙайыҡ!

Ауыр саҡта, талғыр саҡта ла
Хыялдарҙа көлһөн яҙ айы! —
Шул саф антты ҡайнар йөрәккә
Ырыҫ менән ырып яҙайыҡ!

Бөрөнән дә бөркөт үҫтерер,
Ныҡ үтәлһә намыҫ ҡушҡан ант.
Һона Ватан һеҙгә ҡуш ҡулын —
Бейектәргә сорғор ҡуш ҡанат!

Барһын арбап тылсым телендә
Мәғрифәтле таң һәм кисәләр.
Белем серҙәрен бит тәү башлап
Әсә теле менән сисәләр!

Әсәм телен — белем асҡысын
Мираҫ итеп алған көр быуын
Мираҫ итер ерҙең мең телен,
Туған итер ерҙең мең моңон!

Башҡортостан, гүзәл гөлбостан,
Ҡуя алға һеҙҙең мең һорау.
Илдең тырыш ҡыҙ һәм улдары
Булығыҙ, ти көмөш ҡыңғырау!

Төклө аяҡ менән уҙығыҙ
Мәғрифәттең мәрмәр баҫҡысын.
Алдығыҙҙа — бәхет һарайы,
Ҡулығыҙҙа бәхет асҡысы!

25.08.1970.

Тантанаға килеүселәр, бина алдында өйөрләнеп, коллектив фотоға төштөләр, ә мин, бындай сараларҙы “показуха” һанағанлыҡтан, көлөмһөрәп ситтән күҙәтеп торҙом (хәҙер ул фото баҫмаларҙа ҡабатланып, ундағы кешеләрҙең ҙур эшкә ҡатнашы булмағандары ла “20-се башҡорт мәктәбен юллап йөрөп астыртыусы зыялылар” һанала).

«Һәнәк», «Башҡортостан ҡыҙы» журналдарында эшләгән тынғыһыҙ йылдарым фельетон һәм мәҡәләләр яҙыу өсөн Башҡортостан буйлап өҙлөкһөҙ командировкаларҙа йөрөп, редакцияларҙа кеше әйберҙәрен ипкә килтереп үтте, өйҙә ултырып яҙышырға ваҡыт ҡалманы; эштән арып ҡайтҡандан һуң, төндәрен генә үҙ ҡәләмемә тотона инем. Көтмәгәндә көн тигәнең битен дә күрһәтте миңә: Башҡортостан китап нәшриәтенең балалар әҙәбиәте бүлегендә эшләп йөрөгән ҡорҙашым Шакир Бикҡолов 1957 йылда “Пионер” журналында сыҡҡан “Урман бабай” тигән хикәйәмде айырым китап итеп нәшриәт планына индереп ебәргән (1967 йылда донъя күрҙе). Ә йән атып йөрөгәнем — китап булып сығыуын күҙҙәрем ҡарайып көткән шиғри йыйынтығым ине. Яҙыусылар берлегенең шиғриәт секцияһында ыңғай баһаланып, нәшриәткә тәҡдим ителһә лә, унда төрлө сәбәптәр менән йылдан-йыл кисектерелә килә ине. Интегеп-зарығып, ил ағаһы дәрәжәһендәге Мостай Кәрим менән гәрсә яҡынлығым булмаһа ла, булышлығын өмөт итеп, түбәндәгесә ялбарырға тәүәккәлләнем:

“Иҫәнмеһегеҙ, Мостай ағай!

Был хатты яҙып, ваҡытығыҙҙы алғаным өсөн ғәфү итеүегеҙҙе һорайым. Башҡа әмәл ҡалмағанға ғына баҙнат иттем. Солтанов Йыһат тигән кеше борсой һеҙҙе.

Рөхсәт итһәгеҙ, тәүҙә саҡ ҡына үҙем менән таныштырып китер инем. 1932 йылда тыуғанмын, үткән юлым: колхоз — хәрби диңгеҙ флоты — колхоз — “Һәнәк” журналы редакцияһы. Ошо көндә лә шул редакцияла эшләгән булам. 1953 йылдан башлап, ваҡытлы матбуғатта байтаҡ ҡына шиғырҙарым, хикәйәләрем, повесем баҫылып сыҡты. Бынан өс йыл элгәре үк шиғырҙарымды туплап, секцияла тикшерткәйнем. Хуплап, нәшриәткә тәҡдим иткәйнеләр. Ләкин ул йыйынтыҡ ошо көнгәсә донъя күрә алмай ята нәшриәттә. Йыл да вәғәҙә итәләр ҙә оноталар. 1966 — 1967 йылдарҙы “юбилей йылы, план тығыҙ” тинеләр, 1968

йылғы планға индерергә вәғәҙә итеп килделәр. Быйыл тағы, 1968 йыл "юбилей арты йылы" булғанлыҡтан, минең китапты 1969 йылға күсерҙеләр. Унан килеп, ярты табаҡлыҡ бер хикәйәм кесе йәштәге мәктәп балалары өсөн быйыл сығырға тейеш булғанлыҡтан, шуны китапҡа иҫәпләп: "Йәш яҙыусының китабын йыл да сығарып булмай инде ул", — тип кенә ебәрәләр (баш редактор менән директор әйтә). Бына шулай һаман "йәш" булып йөрөйөм, ағай. Ә минең ҡорҙаштар инде кәмендә 5-6 китаптың авторы.

1957 йылдың майында Башҡортостан Яҙыусылар союзы мине Һеҙҙең имза ҡуйылған телеграмма менән тиҙ генә саҡыртып алғайны. Мәскәүҙәге Әҙәбиәт институтына уҡырға ебәрмәк булғанһығыҙ икән. Ләкин минең белемем ул саҡта 4 (дүрт) класс ҡына булғанлыҡтан, бара алмай ҡалдым. Союздағы иптәштәр миңә урта белем алырға наказ биреп ҡайтарҙы. Үкенескә ҡаршы, мин ул саҡ Һеҙҙең үҙегеҙҙе күрә алманым — Мәскәүҙә инегеҙ. Һеҙгә еткерергә вәғәҙә итеп, киләсәктә мин уҡыясаҡ урта мәктәптең адресын яҙып алып ҡалдылар союзда. Оҙаҡламай мәктәп директорына Һеҙҙең исемдән мине нисек тә уҡырға урынлаштырыуҙа ярҙам күрһәтеүҙе һорап яҙған хат килеп төштө. Шуға ҡанатланып, мин колхозда эшләп йөрөгән көйөмсә тәүҙә үҙ алдыма, унан һуң ситтән тороп уҡып, 1963 йыл әлеге мәктәптә урта белем алып сыҡтым һәм ситтән тороп Башҡорт дәүләт университетында уҡый башланым. Хәҙер 4-енсе курстамын. Бына шулай бер саҡ минең яҙмышымды хәл итеүҙә лә ҡатнашҡайнығыҙ Һеҙ, ағай. Бөгөнгө көн һаман китабымды сығара алмай, үҙ быуындаштарымдан ныҡ артҡа ҡала барғас, был юлы инде ярҙам һорап Һеҙгә үҙем мөрәжәғәт итергә батрысылыҡ ҡылдым. Йыйынтыҡты 1968 йыл планына керетеү өсөн берәй тел ярҙамы бирһәгеҙ ине, ағай. Китап "Йондоҙ ямғыры" тип атала, күләме 3,5 (өс ярым) табаҡ самаһы. Ошо арала ғына Рафаэль Сафин менән Рәми Ғарипов уны тағы ла бер ҡат уҡып сығып, яҡшы баһа бирҙеләр. Байбурин да арыу фекерҙә.

Мин үҙем хәҙер "Ерем, кешеләрем" тигән яңы повесемде тамамлап киләм. Быйыл уҡ "Ағиҙел" журналына тәҡдим итергә уйлайым[22].

Һау булығыҙ, ағай.

Боросғаным өсөн тағы ла бер тапҡыр ғәфү үтенеп, **Йыһат Солтанов.**

Адрес: Өфө — 25, Свердлов урамы, 94, кв. 9.

19.02.1967.

Көндәрҙең береһендә: "Мостай Кәрим хатыңды тотоп китап нәшриәтенә кергән, китабыңды барлашҡан", — тигән хәбәр ҡолағыма ирешкәс, эштең ыңғай боролош алырына өмөт итеп йөрөһәм дә, һис бер үҙгәреш булманы — һүҙе үтмәгәндер инде, күрәһең (ә бәлки, китабымдың 1969 йыл планынан да төшөрөп ҡалдырылмауы уның арҡаһындалыр). Хатыма яуап та килмәне. Ә Рәмиҙәрҙең һүҙе һүҙ түгел ине ул замандарҙа...

Әйткәндәй, 1966 йылда «Совет Башҡортостаны»ндағы эшенән ҡыуылып (редакторы Абдулла Исмәғилев менән килешә алмай), һыныҡ икмәкһеҙ, тигәндәй, интегеп йөрөгән Рәми Ғариповтың көтмәгәндә «Башҡортостан ҡыҙы»на эшкә урынлашыуына рухи булышлыҡ иттем. 1968 йылда яңы асылған шул

---

[22] "Ерем, кешеләрем" романы шунан һуң 29 йыл үткәс кенә — 1996 йылда донъя күрҙе.

журналдың редакцияһына хеҙмәткәрҙәр йәлеп итеү эше бара ине. Баш редактор итеп раҫланған Кәтибә апай Кинйәбулатова минең эш урыныма — «Һәнәк» журналына килде лә, аулаҡҡа саҡырып алып, миңә «Башҡортостан ҡыҙы»ның яуаплы сәркәтибе булып барырға тәҡдим итте: «Тәртиплеһең, белемлеһең — бергәләшеп яйға һалырбыҙ журналды», — тине. Ымһындырғыс тәҡдимдән мин баш тарттым: «Һәнәк» мине эшкә саҡырып алды, торлаҡ бирҙе. Бер биш йыл да эшләмәй ташлап китеү — килешмәҫ», — тинем. Шунда уҡ контртәҡдим яһап өлгөрҙөм: «Ул эшкә Рәми Ғариповты алығыҙ, апай!» — «Ай-һай, уныһы барып сыҡмаҫ шул, — тип баш сайҡаны апайым. — Ахунйәнов ныҡ ҡаныҡҡан бит уға». Был һөйләшеү тураһында бер кемгә лә белдертмәҫкә вәғәҙәмде алып (ул вәғәҙәне бына хәҙер генә беренсе тапҡыр боҙам), хушлашты апайыбыҙ. Ә эштән һуң Рәми менән ғәҙәттәгесә шешә янында икәүҙән-икәү ҡалғас: «Былай интегеп йөрөүеңә сик ҡуйырға кәрәк — һинең өсөн ҡулай эш урыны бар», — тинем. — «Ниндәй эш ул?» — тине дуҫым, ҡаштарын емереп. «Сер итеп кенә әйтәм, берәүгә лә һөйләмә. Кәтибә апай журналына яуаплы сәркәтип эҙләй». Ҡул һелтәп көлдө Рәми: «Һин, ҡарт, алйып бараһыңмы әллә? Ахун таяғы (обком секретары Ахунйәновты шулай тип атар ине) яҡын да юлатмаясаҡ мине». «Ә һин күҙ йом да өлкә комитетҡа Ахунйәновтың үҙенә кер, кандидатураңды ҡыйыу тәҡдим ит. Бынан бит һин бер нәмә лә юғалтмайһың, ә приобрести можешь: «Пролетариату нечего терять кроме своих цепей, приобретет же он весь мир!» — тигән дәһә Маркс менән Энгельс бабайҙарыбыҙ. Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ!»

Һуңғы дәлил Рәмигә ныҡ тәьҫир итте: «Ысынлап та, шулай итәйем әле, иртәгә үк ҡаршыһына баҫайым!» — тип йәһәтләп ҡайтып китте. Һәм иртәгәһенә үк шатланып килеп ҡулымды ҡыҫты — кергән һәм Ахунйәнов иптәш бер һүҙһеҙ риза булған.

Шул уҡ йылда Рәми, журналды бергәләшеп юлға һалышырға, тип, ныҡышып, мине үҙе эргәһенә эшкә ҡоҙаланы, дуҫым менән бергә ултырып эшләргә шатланып ризалаштым. “Һәнәк” редакторы Идиәт ағай Әсәдуллин да, йәш журналды нығытырға кәрәк тип, үҙенең ризалығын бирҙе. Ләкин әйтергә кәрәк: Рәми менән бергә эшләүебеҙҙең бәйгеһе оҙон булманы — ылғый ҡатын-ҡыҙ коллективының кухня ваҡлыҡтары һымаҡ ығы-зығыһынан биҙәрләп, 1969 йылда «Ағиҙел» журналы редакцияһына әҙәби тәнҡит һәм публицистика бүлеге мөдире булып эшкә күстем; ә фәҡәт үҙ режимы (төндә ултырыу, көндөҙ төш еткәнсе йоҡлау һәм тәүлектең теләгән бер сәғәтендә хәмергә ылығыу) менән генә йәшәргә теләгән Рәми, баш редактор Кәтибә апай Кинйәбулатова һәм редакцияның әүҙем хеҙмәткәре Әнисә һылыу Таһирова менән килешә алмай (Рәми өҫтөнән йыш бирелгән ялыунамәләр Т.И. Ахунйәнов кабинетында ғауғалы тикшерелә ине), 1972 йылда эшенән тайҙыртылды...

1968 йыл йәйгеһен «Башҡортостан ҡыҙы» редакцияһының эше буйынса Бөрйән районына барғанымда үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр Шүлгәнташ мәмерйәһенә кереп сыҡтым, шунда ҡабынған тәрән хис һәм кисерештәрҙән айный алмайынса тилереп йөрөп, аяғөҫтө, тигәндәй, бер ай эсендә өр-яңы әҫәремде — «Минең шәжәрәм» тигән поэмамды яҙып өлгөрттөм. Рәмиҙән был әҫәрем хаҡында берәй нәмә ишеттемме, юҡмы икән — әйтә алмайым хәҙер. Әммә

уның 1969 йыл көндәлектәренә «Шәжәрәм»дең шаукымы һирпелеп ҡалған (үҙе үлеп күп йылдар үткәс кенә матбуғатта мәғлүм булды):

Һәр кемдең үҙ «Шәжәрә»һе булһын!

...Бынан бер нисә йыл элек мин Йыһат Солтановтың «Төнгө хәбәр» тигән ***ҡулъяҙма шиғырҙар йыйынтығы***[23] *менән танышҡас, беҙҙең әҙәби ҡор һаман ишәйә бара, тип ҡыуанып, көндәлеккә ошо һүҙҙәрҙе яҙып ҡуйғайным. Уның тәүге китабы сығыу менән был фекер көсәйә генә төштө. Мостай Кәрим әйтмешләй, әҙәбиәтебеҙгә Яңы шиғыр китабы ғына түгел, ә Яңы шағир килде, тиергә мөмкин.*

Йыһаттың тормош юлы ла бик күптәр өсөн, айырыуса Нур Хәбиров менән Шакир Ғәлин өсөн, ғөмүмән, бөтәбеҙ өсөн дә бик фәһем алырлыҡ. Йыһат мәктәптә уҡып ни бары дүрт класс бөткән. Һуңынан аяҡтан яҙып, байтаҡ йылдар урынынан да ҡуҙғала алмай ятҡан. Тик үҙенең иҫ киткес ныҡышмалылығы, ихтыяр көсө менән әҙәбиәт өсөн аяҡҡа баҫып, — ҡайҙа тиһегеҙ?! — Балтиҡ хәрби флотына киткән. Үҙ алдына уҡып, урта мәктәпте тамамлаған һәм бына хәҙерге көндә өс бала атаһы булып, эшләгән көйө Башҡорт дәүләт университетын тамамлап, «Ағиҙел» журналында бүлек мөдире булып ултыра. Хикәйәләр ҙә, повестар ҙа яҙа. Ә иң мөһиме — ғәжәп оригиналь шағир ҙа. Шулай уҡ уның тел байлығы, фантазияһы, тәрән белемле булыуы, эш һөйөүсәнлеге, ихтыяр көсө мине хайран ҡалдыра. Йыһат универсаль талант эйәһе, тиер инем мин. Бәлки, был үҙенсә бер ҡаһарманлыҡтыр ҙа әле. Был һүҙҙәрҙән уның һис тә башы әйләнеп китерлек йомшаҡлығы юҡ. Сөнки ул бик күп һынауҙар үткән, үҙенең тамырҙары менән үҙ халҡының оло тарихына ерегеп үҫкән баҙыҡ нәҫел ағасы тамырҙары хаҡында йыр яҙған, үҙенең шиғри шәжәрәһен тапҡан кеше.

Тимәк, әҙәбиәткә килеү юлдары ла әҙәбиәттең үҙе кеүек үк төрлөсә һәм ҡыҙыҡ. Ысын талант үҙ быуынынан 15 йылға һуңлап[24] *килеп тә үҙ ҡорҙаштары араһында үҙ урынын табырға мөмкин икән...* (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» — 1998; 582 — 583-өнсө биттәр).

«Минең шәжәрәм» Башҡортостан совет автономиялы республикаының яҡынлашып килгән 50 йыллыҡ юбилейы айҡанлы рухланып яҙылғайны; яңы ғына Мәскәүҙән яҙыусыларҙың ике йыллыҡ курсында уҡып ҡабилиәтләнеп ҡайтҡан ялҡынлы шағир Абдулхаҡ ағай Игебаев та шул уҡ дата айҡанлы «Урал тауышы» тигән ҙур күләмле поэмаһын килтереп һалғайны «Ағиҙел» редакцияһына, ләкин журналда минең әҫәрҙе бирергә булдылар (ул «Ағиҙел»дең 1969 йыл 11-енсе һанында донъя күрҙе), ә Абдулхаҡ ағайҙыҡы «Совет Башҡортостаны» гәзитендә баҫылып сыҡты. Был әҫәрҙе ижадымдың сорғолошо итеп күргән ҡәләмдәштәрем миңә ихлас күңелдән уңыш юраны:

Протокол. 9 ғинуар 1969 йыл. Поэзия секцияһы.

---

[23] Тимәк, элегерәк миңә танымаһа ла, был йыйынтыҡтың үҙ ҡулында булғанлығын таный.

[24] Рәми ҡорҙашым яңылыша: “сит илдәрҙә” йәшәгән Йыһат Солтановтың, һис тә әҙәбиәткә түгел, ә әҙәбиәтебеҙ усағы булған Өфөгә, Башҡортостанға һуңлап килеүе тураһында ғына һүҙ барыуы мөмкин. Сөнки Рәми Ғариповтың шиғыры беренсе тапҡыр 1950 йылда “Әҙәби Башҡортостан” журналында ташҡа баҫылһа, минеке лә шул уҡ журналда 1953 йылда сыға.

Ҡатнашалар: Х. Ғиләжев, Ә. Мирзаһитов, Ғ. Әмири, Ф. Иҫәнголов, В. Исхаҡов, Й. Солтанов, М. Сөндөклө.

Йыһат Солтановтың «Минең шәжәрәм» исемле поэмаһын тикшереү.

Фекер алышыу.

Ғ. Әмири. Был поэма үҙенсәлекле генә сюжет менән яҙылған. Мин был әҫәрҙе өс-дүрт тапҡыр уҡыным инде. Поэма Р. Нигмәти әҫәрҙәре стилендә эшләнгән. Был вариантын ул ныҡ ҡына ҡараған.

Поэма бар. Ләкин әле ҡытыршы урындары ла юҡ түгел. Прозаизм да ныҡ һиҙелә. Редактировать итергә кәрәк.

Әгәр журналға тәҡдим итергә булһа — ҡыҫҡартырға кәрәк буласаҡ.

Фекерем ыңғай.

Ф. Иҫәнголов. Мин һөйөндөм. Тап Октябрь тураһында тупланған әҫәр.

Х. Ғиләжев (реплика). Патетика бар!

Ф. Иҫәнголов. Миллилек һәм тоташ донъяға ла әйтеп була торған әйбер бар бында. Бөтә донъя тураһында һөйләүе менән дә әһәмиәтле. Традиция ғына һыймай торған форма табылған. Бәлки, Маяковский ҙа юҡҡа ғына шулай яҙмағандыр.

Публицистика көслө.

В. Исхаҡов. Поэма, ысынлап та, ҡыуандыра. Патетика көслө бирелгән. Автор кантон менән генә эш итмәй, ә донъя күләме менән мөнәсәбәттә.

Замечаниелар: тарих дөрөҫлөгөнә айырыуса иғтибар итергә кәрәк. Был яҡтан Ҡараһаҡал, Батырша тураһында ла уйланмай булмай. «Ленинизм шәүләһе» — икенсе төрлө әйтеү урынлы булыр ине. Поэмаға ыңғай баһа бирәм.

Ә. Мирзаһитов. Мин икенсе тапҡыр тыңлайым. Автор ашыҡ-бошоҡ төҙәткәнгә оҡшамай. Айырыуса интернациональ-социалистик йөкмәткеһе менән һәйбәт. Мин дә Вәзихҡә ҡушылам. «Ленинизм шәүләһе»н икенсе һүҙгә күсерергә кәрәк.

«Сирмеш» тип әйтмәҫкә кәрәк. Тағы бер ясность: тарихи факттар буталсығыраҡ бирелә. Бабич исеме лә аҡланмай әле.

Әҫәрҙең тәүге өлөшө монотонлыраҡ уҡыла. Ҡарарға кәрәк.

Әҫәр донъя күрергә тейеш.

Х. Ғиләжев. Был әҫәре менән Й. Солтанов быға тиклем әйтелмәгән, дөрөҫө, ҡайһы берәүҙәр әйтергә теләп тә, әйтә алмаған фекерҙе әйтә алған. Был йәһәттән ул байтаҡ ҡына шағирҙарҙың моронона сиртте. Әҫәрҙә дөйөм кешелек заботаһы көслө бирелгән.

Шағирҙың позицияһы дөрөҫ: коммунист-интернационалист позицияһы. Бында Межелайтис телгә алынды. Ә бит уның ижады ла ана шул позицияла яҙыла.

Эпосты хәтерләтә.

Ҡайһы бер урындарҙы ҡарап сығырға кәрәк булыр. Ҡайһы бер орг. саралар ҙа күрербеҙ. Авторға ярҙам итеп, подстрочник эшләтергә кәрәк буласаҡ.

Ҡарар: Йыһат Солтановтың «Минең шәжәрәм»ен китап нәшриәтенә тәҡдим итергә.

Председатель: ***Ғ. Әмири****.*

Секретарь: ***В. Исхаҡов****.*

Ултырыш осланыуға, ирәбе ағайҙарым Вәзих Исхаҡов менән Фәрит Иҫәнғолов эргәмә килеп ҡулымды ҡыҫып, пинжәгемдең түшенә Ғәлимов Сәләм

исемендәге комсомол бүләгенең билдәһен тағыр өсөн йәһәтләп тишек тишә башларға кәңәш иттеләр, ә Яҙыусылар берлеге рәйесе Лоҡман-Хәким ағай Ғиләжев иһә поэмам тексының бер данаһын кисекмәҫтән радиокомитеттың әҙәби тапшырыуҙар бүлеге мөдире Яҡуп Ҡолмойға илтеп бирергә ҡушты — Бөйөк Октябрь юбилейы көндәрендә шиғриәтем эфирҙан тос яңғырарға тейеш ине. Пинжәгемдең түшенә тишек тишергә йыйынмаһам да, һуңғыһын тиҙләтеп үтәнем, ә Хәким ағай үҙ сиратында Яҙыусылар берлеге иҫәбенән поэмамдың урыҫсаға юлма-юл тәржемәһен дә эшләттерҙе (Шамил Анаҡтан) — исемем урыҫ әҙәбиәтендә лә мәғлүм булмаҡсы имеш... Ләкин секция һәм Хәким ағай билдәләгән изге маҡсаттар береһе лә бойомға ашманы — ҡотоптан ҡапыл боҙло һыуыҡ бәргәндәй, яртылыҡ юлында туңып ҡалды; ошонан һуң йыш ҡына редакцияла, редактор Әсғәт Мирзаһитовтың эш өҫтәле йәнәшәһендә, уның менән ни тураһындалыр шыбырлашып ултырыусы КГБ кешеһе (“Ҡара һаҡаллы ҡыпсаҡ”) үҙенең сәйер визиттарын йышлатты; Мирзаһитовтың миңә ҡарата мөнәсәбәте һиҙелерлек һыуынды һәм шиклеләнде — органдарҙың ҡалпағы аҫтында йәшәүемдең асыҡ дәлиле ине был... Әммә яҙмышымдың ҡағып-һуғыуҙарына күнегә-күнегә эт ҡайышына әүерелгәнлектән, ҡәләм тибрәтеүсе байтаҡтарыбыҙға хас булған әсе хәмерле “ижади кризис”ҡа бирелмәнем -- “Ағиҙел”дә “Портреттар” тигән шиғри шәлкемем баҫылып сыҡты һәм был юлы ла, ҡәләмдәштәремдең үле тынлыҡ һаҡлауын боҙоп, боҙланып барған күңелемде Ғәйнән Әмири ағайымдың аҡ ҡағыҙ битенә яҙылған йылы һулышы иретте:



Зиһат!

Ике “Портрет”ты уҡып сыҡтым. “Эт йәнле” хаҡында бер ни ҙә әйтмәйем. Шулай ҙа, минеңсә, был бик тә шәп повесть материалы. Ихтыяр көсө, рух баһадиры хаҡында повесть.

Ә “Өҫтөнбикә” -- тетрәткес. Был әйбер -- Көнбайыш илдәрендә XIX быуаттан киң таралған классик балладалар кимәленә яҡынлашҡан. Үҙе -- бик тә колоритлы. Башҡорт материалында һәм рухында. Тағы -- мин һәр ваҡыт һоҡланып йәшәгән башҡорт ҡатынына дан йыры ла был.

Молодец, Зиһат!

Могайын, һин беҙҙең әҙәбиәттә баш етерлек эштәр башҡарырһың әле. Һаулыҡ бирһен үҙеңә.

15.VI.69. ***Әмири.***

1969 йылда «Йондоҙ ямғыры» (элекке исеме «Төнгө хәбәр») тигән шиғри йыйынтығым, оҙон-оҙаҡ көттөрөп, Ғәйнан ағай Әмириҙең йәмәғәтселек башланғысындағы редакторлауында, ниһәйәт, баҫылып сыҡты. Китапҡа ҡарата «Ағиҙел» журналында Рауил Бикбаевтың «Аҫыллығын тойоп донъяның...» тигән ыңғай ҡарашлы мәҡәләһе күренде. Һәм, бигерәк тә, Ғәйнан ағайымдың сикһеҙ-ихлас ҡыуаныслы фекернамәһе күңелемде шифалап тора һаман:

Йыһат туғаным!

Бына «Йондоҙ ямғыры»ның корректураһын ҡарап сыҡтым. Сыҡтым да шатлыҡтарға сумдым: «Ниндәй ғәжәп китаптың редакторы булыу бәхете төшкән минең өлөшкә!» — тинем. Ысынлап та, ғәжәп китап был! Кескәй генә ул. Әммә — имән сәтләүегә кеүек кескәй. (Шундай сәтләүектән дәһә, таш-ҡаяға баҫып, ел-дауылдарға баш эймәй, горур шаулап торған мәңгелек имән үҫеп сыға).









Ғәжәп китап был. Кескәй генә ул. Уға тупланған шиғырҙар ҙа саҡ ҡына. Тик улар йә ынйы бөртөгө кеүектәр (ынйы бөртөгө бик ваҡ — ә ниндәй ҡиммәтле!), йә бойҙай орлоғолай (яҙын ул «Ҡулына йәшел ҡылыс тотоп сыға»саҡ!), йә тылсымлы бөрөләй. Эйе, был китапта бөрөләр ҙә күп. Ләкин тамсы ла шикләнмәҫкә мөмкин: улар мотлаҡ япраҡ ярырҙар, сәскә атырҙар — ил күрке булып гөрләрҙәр.

Ғәжәп китап ***бу.*** *Халыҡсан. Просто халыҡсан ғына түгел, —* ***башҡортсан!*** *Унда, уның һәр юлында (тиерлек) башҡорт йөрәге тибә, башҡорт һулышы бар; уның уйы, хисе — бөтәһе лә һинең, Йыһат туғаным, башҡорттоң бик оло йырсыһы булып күтәреләсәгеңә, осасағыңа ишара, шикләнмәйем! Һәм был һүҙҙәрҙән һинең башың әйләнеп китмәйәсәген дә беләм. (Бөркөт балаһын космосҡа алып менһәң дә, уның башы, моғайын, әйләнмәҫ ине).*

Тағы нимә тим?

Миңә хәҙер 59-ынсы йәш. Йылтырауыҡ тәтәй күреп сәбәкәй саба торған сағым үткән. Ынйыны ябай быяланан айыра беләмдер тип уйлайым.

Хоҙайым, һиңә сәләмәтлек, оҙон ғүмер бирһен. Бер ҡасан да ваҡлана күрмә, гел генә шулай эре булып йәшә.

Ҙур ышаныс менән —

Ғәйнан Әмири.

10.10.1969.

Ләкин шәхесем һәм ижадым тирәһендә үле бушлыҡ (вакуум) хасил ҡылыу, ниндәй генә уңыштарға өлгәшһәм дә, күрмәй-белмәй, өндәшмәй ҡалдырып оноттортоу, ниндәй генә әҫәремде булһа ла, матбуғатка сығартмайынса тотҡарлап

тонсоҡтороу — яҙыусыны үлтермәйенсә лә юҡ итеү механизмы сәйәси яҡтан миңә ҡарата яҡшы көйләнгәйне инде һәм обкатка (шымартыу) үтә лә башлағайны. Яҙылып ятҡан поэмаларым, романдарым, тарихи әҫәрҙәрем киләсәктә уҡыусыларына барып етә алмайынса 20-30 йылдар буйынса яҙыу өҫтәлемдең тартмаларында быуылып ятасаҡтар ине. Ләкин быларҙы ул саҡтарҙа башыма ла килтерә алмайынса, ауға эләгеп ярға сығарылған балыҡтай, үрле-ҡырлы һикеренә, сәбәләнә башланым.

Ә шулай ҙа тормош, шарлап аҡҡан йылғалай, һаман да алға дөрә, ижад шишмәм дә, тынғы белмәй, урғылыпмы-урғыла ине.

Һәм бына тағы:

Протокол №2.

1971 йылдың 5 февралендә проза секцияһының ултырышы булды. Унда Ф. Исәнголов, Ә. Мирзаһитов, Ә. Вахитов, Р. Низамов, Ш. Янбаев, А. Клюшкин, Х. Зариповтар ҡатнашты.

Председатель: Ш. Янбаев.

Секретарь: Х. Зарипов.

Көн тәртибе:

1. Йыһат Солтановтың «Коммунист» тигән повесен тикшереү.

Әҫәр буйынса һөйләнеләр:

1. Ф. Исәнголов. Повесте кинәнеп уҡып сыҡтым, бер тында һәм мауығып уҡыным. Был әҫәр минең күҙ алдымда Йыһатты бик күтәрҙе. Шул совет власы урынлашҡан йылдарҙағы трагик ваҡиғаларҙы һүрәтләүгә бағышлана әҫәр. Был — Башҡортостан тарихындағы иң киҫкен, ауыр моментын художестволы асыуға ынтылған һәм быға шаҡтай дәрәжәлә өлгәшкән дә әҫәр.

Сәгитов — комиссар образы шаҡтай тулҡынландырғыс итеп асылған. Ундай коммунист — комиссарҙар тормошта булды, шул уҡ Ш. Хоҙайбирҙин дә Сәгитовтың прототибы була алыр ине. Төп герой Сәгитовтың эше дөрөҫ башҡарылған. Ошо уҡ ваҡытта уға еңелерәк бирелгән нәмәләр ҙә бар. Әйтәйек, Әһлиуллин штабына килеп төшкәс, ул өс тотҡондо тикшермәйенсә ҡотҡара. Ниндәй генә бирелгән коммунист булһа ла, ул уларҙы тикшермәйенсә сығарып ебәрмәҫ ине.

Төп геройҙың үлеме менән дә килешмәйем. Сәгитов йәшәргә тейеш, уның йәшәргә хаҡы бар. Уның үлеме әҫәрҙең йөкмәткеһен йомшарта. Был хаҡта авторға уйларға кәрәктер, тип уйлайым.

Ә унан повестәге ваҡиғаларҙы дөйөм республика, ил ваҡиғаларына бәйләп бирергә кәрәктер.

2. Ш. Янбаев. Йыһаттың шул ваҡыттағы ваҡиғаларҙы ҡуйы буяуҙар менән яҙыуы мине һөйөндөрҙө. Шул замандағы ҡойолған ҡан менән яҙылған кеүек әҫәр һәм ул ышандыра. Ошо уҡ ваҡытта тәнҡит замечаниеларым да бар. Беренсе, Сәгитов образына бәйле шуларҙы әйткем килә. Төп геройҙың ҡайбер поступкалары уйланып етмәгән кеүек, минеңсә; Әһлиуллин менән мөнәсәбәтен логикаға ҡоророға кәрәктер. Восстаниеның сәбәптәрен дә Сәгитов образы аша асырға кәрәкмәйме икән? Сюжет һыҙығын ҡайтанан уйлап ҡарарға кәңәш итер инем мин. Ә унан буяуҙарҙы бик

ҡуйыртып ебәрә автор. Был образдарҙы аңлауҙы ҡыйынлаштыра. Сәғитовтың үлеме менән дә килешә алмайым.

3. Ә. Вахитов. Әҫәрҙе мин бик мауығып уҡыным. Юғарыла әйткән иптәштәрҙең фекере менән килешәм. Комиссар Сәғитовтың образы асыҡ булып күҙ алдына килеп баҫа, ләкин уның аҙаҡ йомшарыуы менән килешмәйем. Урыны менән автор фальшҡа ла бирелеп китә. Комиссарҙы идеал итеп кенә күрһәтергә ынтылыу кәрәкме икән? Артыҡ субъективизмға бирелеү ҙә бар кеүек. Ә унан серлелек хаҡында ла уйлап ҡарарға кәрәктер. Ғөмүмән, повесте яратып уҡыным.

4. Р. Низамов. Мин Әһлиуллин һәм Барановский образдары хаҡында әйтергә теләйем. Уларҙы герой булараҡ әҫәрҙә тағы ла нигеҙләп эшләргә кәрәктер, тип уйлайым. Кешеләрҙең башын киҫеп алып килеү кеүек деталдәр бик аяныс, ләкин улар кәрәкме икән?

5. Ә. Мирзаһитов. Иптәштәрҙең һөйләүе менән мин ризамын, улар бик уйлап һөйләнеләр. Повестәге конкретлылыҡ шул дәүерҙәге ысынбарлыҡҡа тура киләме? Әйтәйек, повестең ерлеге Көньяҡ Урал райондарында нигеҙләнә. Шул яҡта бронепоездың үтеүе мөмкинме? Быны асыҡлай төшөргә кәрәктер.

Әһлиуллин образына килгәндә, ул бик тиҫкәре планда бирелгән. Ул ваҡытта шул тиклем яуыз ниәтле командир булғанмы? Әгәр ҙә шулай икән, комиссар Сәғитов фетнәселәр янына китергә тейеш түгел ине, ә Әһлиуллин, Барановскийҙар менән көрәшер өсөн отрядта ҡалыуы үҙен аҡлар ине.

Автор хис кешеһе, ләкин шуға ҡарамаҫтан ул урыны менән натуралистик тасуирлауҙарға бирелеп китергә тейеш түгел.

Мин Йыһаттың ижадын яратам, был әҫәре уның үҫеүен күрһәтә, ул замечаниеларҙы иҫкә алып повесен йәнә бер ҡат ҡарап, төҙәтеп эшләп сығырға тейеш.

6. Х. Зарипов. Әҫәр — үҙенсәлекле. Бер темп менән бара ла бара. Даже бүлекләп тә тормаған. Ҙур әҫәр яҙырға мөмкинлеге бар. Мәҫәлән, төп геройға психологик дәлилләүҙәр етмәй. Әһлиуллинды уйларға кәрәк. Үҙенең уйҙары бирелмәй. Лев Толстой, герой үҙ-үҙе менән көрәшһә көслө була, ти бит.

7. Й. Солтанов. Замечаниеларҙы ҡабул итеп ҡабат эшләргә һүҙ бирҙе.

***Ҡарар:** Әҫәрҙе эшкәрткәндән һуң, китап нәшриәтендә баҫып сығарырға тәҡдим итергә.*

*Председатель: **Ш. Янбаев**.*

*Секретарь: **Х. Зарипов**.*

Ләкин башҡорт совет әҙәбиәтенең рәсми органдары һәм рәсми шәхестәре республиканың юғарыраҡ органдары тарафынан Йыһат Солтановҡа ҡаршы

Һүр. 44. "Ағиҙел" журналы редакцияһында уңдан һулға алғы буйҙа Муса Ғәли, Хәким Ғиләжев, Әсғәт Мирзаһитов, Суфиян Сафуанов, Шакир Янбаев; Артҡы буйҙа Фәрит Исәнғолов, Вәзих Исхаҡов, Рафаэль Сафин, Хәсән Назаров, Йыһат Солтанов, Мәхмүт Һибәт. 1969 йылдың сентябре.

көйләнгәйне шул инде; әҫәрең ниндәй генә яҡшы булғанда ла, мотлаҡ кире генә ҡағыласаҡ ине. Һәм тап шулай булды ла. Секция ултырышында башҡалар менән бергә «Коммунист»ҡа ҡарата ыңғай фекер әйткән рәсми кеше Әсғәт Мирзаһитов, бара-тора, 180 градусҡа бороллдо ла: «Повестә тасуирланған 1920 йылғы баш күтәреү — бөтә Башҡортостанға һәм башҡорт халҡына хас күренеш түгел, ә әҙәби әҫәр объекты булырға лайыҡһыҙ үтә локаль эпизод ҡына ул», — тигән үлтергес һығымта бирҙе; шуның менән мин совет хакимиәте өсөн һис бер әһәмиәтһеҙ һәм зарарлы эш эшләп маташыусы насар уйлы (йәғни милләтсе) бер авторға әйләндем; былдай нәмәне матбуғатта сығарырға һүҙ ҙә булырға тейеш түгел, тигәнгә ҡайтып ҡалды. Ни өсөн, ҡайҙан тыуҙы хөрт сәбәп?! Аңлай алмай йөҙәнем. Әммә был үтә иртә өлгөрөп еткән «бөйөк коммунизм гражданы»ның (Ә.М. Мирзаһитовтың) ысын йөҙөн, бәхтиһәң, ысын шағирыбыҙ мин фәкирегеҙгә тиклем үк — 1963 йылдың 3 ғинуарында уҡ күреп киҫәткән икән дә:

«Агиҙел» редколлегияһында «Аманат»ты[25] тикшерҙеләр, — тип яҙа Рәми Ғарипов. — Рафаэль уҡып бөткәс, берәһе лә һүҙ башлай алмай, ауыр тынлыҡ урынлашты. Бөтәһененң дә йөҙө етди, бөтәһе лә үҙ эсенән генә һөйләшә ине. Хәким ағай, ахырҙа, Әхнәф Харисовҡа һүҙ бирҙе. Харис ағай ғәҙәтенсә «ҡапаҡ» тимәне.

— Шиғыр ҡобайырҙың бөтә мөмкинлектәрен файҙаланып, до предела эшләнгән. Һәр бер юлы ҡойоп ҡуйылган. Уйландыра ла икенсе уйҙар тыуҙыра. «Теле юктың иле юҡ, /Иле юктың ирке юк», — тигән категорически формулировка менән килешеп булмай, — ти.

[25] Унының «Аманат» тигән билдәле шиғыры тураһында һүҙ бара.

Ғөмүмән, бик йомшаҡ түшәп, ҡатыға ултыртты. Был түшәген Әсғәт Мирзаһитов күтәреп алды. Шиғыр эшләнеше ягынан, уныңса, классически эшләнгән. Ләкин идея йәһәтенән партия программаһына тура килмәй. Йәнәһе, хәҙер, ассимиляцияға юл тотҡанда, бөтә телдәрҙең берләшеүенә барғанда, был шиғыр төрлө толкованиеларға юл ҡуясаҡ». (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» 1998; 430-ынсы бит).

Ҡот осорғос! Әҙәби мөхитебеҙҙең тын алғыһыҙ тынсыулығын, ә оҙаҡламай шул тынсыулыҡты уғата нығыраҡ ҡуйыртырға «Ағиҙел» журналының баш редакторы, шунан һуң Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе итеп ҡуйыласаҡ һәм әҙәбиәтебеҙҙә ҡәтғи рәүештә шул «партия программаһы»ның «милләттәрҙе ассимиляциялау» сәйәсәтен бойомға ашырыу өсөн йонсоткос оҙаҡ йылдар — ғүмере буйына ең һыҙғанып-балаҡ төрөп көрәшәсәк эшем эйәһенең булмышы асыла бында. Бына шундай яһилйәндәр беҙҙең ижади яҙмышыбыҙ менән юғарынан бойоролғанса һәм үҙҙәре теләгәнсә уйнаны...

Секцияла ыңғай баһаланыуҙың эҫе мәлендә үк «Коммунист»ың илле битлек бер өҙөгөн, шул йылдарҙың матур йолаһы буйынса уҡыусыларҙы алданыраҡ таныштыра торорға, «Совет Башҡортостаны» гәзитенә илткәйнем; Мирзаһитов һымаҡ иптәштәр һис тә көтмәгәндә ул редакция биргән «Комиссар» тигән исем менән һандан-һанға баҫылып килеп сыҡты, ижадым тураһындағы ҡыҫҡа ғына «кәрзин» менән фотом да бар ине.

Был фактҡа һуңлабыраҡ һарыуҙары ҡайнаған Мирзаһитов һәм ярандары оторо фекерҙәрен партия өлкә комитетына еткергәндәр һәм уның өгөт-нәсихәт бүлеге мөдире Урал Насир улы Бакиров (дөйөм алғанда итәғәтле һәм яғымлы йән) был факт өсөн гәзиттең баш мөхәррире Абдулла Ғиниәт улы Исмәғилевте саҡыртып алып «бешергән», тинеләр; шунан һуң ул Исмәғилев («держиморда» тип йөрөтәләр ине үҙен) алдағы ун йылға минең морон алдында редакция ишеген япты.

Баяғы «локаль эпизод» тигән һылтау менән Мирзаһитов иптәш «Коммунист»ы «Ағиҙел»гә яҡын юлатмағанлыҡтан, ҡулъяҙмамды Башҡортостан китап нәшриәтендә лә алманылар, сөнки күптән нығынған ҡағиҙә буйынса, башлап «Ағиҙел» журналында донъя күрмәгән әҫәрҙәр китап булып сығырға ла лайыҡлы түгел ине. Шул рәүешле «Коммунис»ым ҡулъяҙмала килеш тонсоғоп ҡалды.

Әйтеп үтеүемсә, 1969 йылдың көҙөндә мине “Ағиҙел” журналы редакцияһының публицистика һәм очерктар бүлегенә мөдир итеп эшкә алдылар. Эш күләме ҙур – гелән сейле-бешеле әйберҙәр килә лә миңә шуларҙың барыһын да “кондиция”ға еткереп бирергә кәрәк ине. Авторҙарҙы эшенә һәм талантына ҡарап ҡына баһалауым да ҡытыршылыҡтар тыуҙырҙы.

Тураһын әйткән — туғанына ярамаған, тигәндәй, әлеге лә баяғы шул тиктормаҫ телем менән бәлә-ҡазаларымды ырата ғына инем. Мәҫәлән, 1971 йылда бөтәбеҙ бергә баш баҫып эшләп ултырған «Ағиҙел» редакцияһы бүлмәһендә күңелле ығы-зығы ҡупты: әҙәбиәтебеҙҙең уҙаманы Мостай Кәрим, яңы ғына ҡәләмдән сыҡҡан «Салауат» тигән трагедияһын журналға килтереп биреп, бөтәбеҙҙе сикһеҙ бәхетле иткән, имеш. Әле уҡымаҫтары борон уҡ, һәр хеҙмәткәр

«тере классик» ағабыҙға әҫәре хаҡында яғымлы һүҙҙәр яуҙырырға, ҡайнар алҡыш ҡуптарырға атлығып тора, шуның форсаты сығыуын ғына көтә... Баш редакторыбыҙ Мирзаһитов, әллә ошо дөйөм күңел күтәренкелеген иҫәпкә алып, әллә әҫәрҙең авторына әйтеләсәк тәбрик һүҙен дөйөм ҡаҙандан бер юлы тослата һоҫоп биреү теләге менән, трагедия ҡулъяҙмаһын уның авторы икенсе әйләнеп килгәнгә тиклем үк бөтәбеҙгә лә бик тиҙ уҡып сығырға ла үҙ фекерен әйтә торорға ҡушты. Әммә беренсе булып уҡыуҙан барыһы ла тайшаныбыраҡ ҡалғас, ҡулъяҙманы мин алып ҡайтып киттем дә төн сыҡҡансы уҡып та килтерҙем һәм, ахмаҡйән, иртән эш башлар алдынан уҡ бөтә коллективҡа шартлатып әйттем: «Уҡып сыҡтым. Ләкин, үкенескә ҡаршы, бөйөк батырыбыҙ Салауат Юлаевҡа лайыҡлы әҫәр тыумаған. Ундай әҫәр киләсәктең иң талантлы авторы тарафынан ғына яҙылыр, тип өмөт итергә генә ҡала»...

Бөтәһе (шул иҫәптән Мирзаһитов та) һыу уртлағандай шымдылар ҙа, минең тарафҡа баш ҡалҡытып та ҡарамай, баш баҫып эшләргә керештеләр, сөнки «бөйөк классиг»ыбыҙҙың ижадына кире ҡараш булырға тейеш түгел... «Шылт!» иткәнде лә Мостай ағаһына йүгереп барып еткереүселәр һәр даим булғанлыҡтан, көфөрлөгөм көнөндә үк ирештерелде адресатына. Күккә күтәреп маҡтауҙарға ғына күнеккән әҙип, билдәле, ниндәйҙер Ырымбур малайының ҡағиҙәне боҙоуын күтәрә алманы. Әммә трагедияның үҙәге баҙыҡ түгеллеген үҙенең рәссам йөрәге менән ул үҙе лә тойғандыр һәм шул хаҡта борсолоуын ошо ҡырҡа әйтеп биреүем арттыра ғына төшкәндер, сөнки барса һарай халҡы королдең кейемен маҡтағанда ла бер сабыйҙың: «Король яланғас бит!» — тип ҡысҡырыуы (Х.-Г. Андерсен) донъяның аҫтын өҫкә килтереп түңкәрә...

Әҫәр 1972 йылда «Ағиҙел»дең февраль һанында уҡ тиҙләтеп баҫылып сыҡты, Башҡорт академдрамтеатрында «шаулап» барҙы һәм спектакль Салауат Юлаев исемендәге дәүләт бүләге менән билдәләнде, матбуғатта фәҡәт мәҙхиәләр генә суҡлап-суҡлап яуҙырылды. Әммә, әммә... «Король яланғас бит!» — тигән яңғыҙ ҡысҡырыу барыбер күп йылдар буйына королгә тынғылыҡ бирмәгән, ҡолаҡ итен кимергән...

«Һүҙ — СССР яҙыусыларының VIII съезы делегаттарына» тигән рубрика аҫтында 1986 йылғы «Ағиҙел»дең 6-нсы һанында Мостай Кәримдең «Еңеп сығыу көтә» тигән нәүбәттәге шанлы мәҡәләһе баҫыла («Литературная газета»ның 1986 йыл 29 ғинуар һанынан тәржемәләп биргәндәр).

«Салауат» трагедияһында, — ти ул, — *бер нисә быуын инде халыҡтың аңында барлыҡҡа килгән ярһыу яугир, йөрәкле батыр һәм йыраусы булып торған традицион образға ҡапма-ҡаршы рәүештә, Салауат Юлаев шәхесен һәм уның тарихи миссияһын һүрәтләүҙә әҙер өлгө буйынса түгел, ә полководец, шағир, дәүләт эшмәкәре сифатында ҡылған эштәренә һәм ҡылыҡтарына баһа биреү юлын һайланым. Ауыр уйҙар менән һеңгәҙәп, әсе шик-шөбһәләр менән ытырғанып, батыр киләсәк алдында һәм выждан алдында үҙе етәкселек иткән һәм йырсыһы булған халыҡ восстаниеһының үкенесле тамамланғаны өсөн яуап тота. Хаҡ, әммә бойомға ашмаҫлыҡ эшкә меңдәрсә, меңдәрсә кешене әйҙәгән был ир кем һуң? Яҙыҡ эшкә олоһо ла, кесеһе лә дәррәү күтәрелер инеме ни? Әгәр ул хаҡлы икән, ниңә һуң еңелгән? Ул ҡапма-ҡаршылыҡлы уйҙар сорнауында.*

Шулай итеп, мин халыҡ хәтерен геройға ҡарата үҙ концепциям менән айҡарға баҙнат иттем, шуның менән ***ҡайһы бер ғилми даирәләрҙең ҡаршылығына осраным»...***

Ҡылансыҡланмайыҡсы, Мостай ағай! — ниндәй «ғилми даирәләр» ул баҙнат итеп ҡаршы килһен инде һеҙҙәргә?! Һеҙгә ҡаршы һүҙ әйтеү — елгә ҡаршы төкөрөү, йәки үҙ башыңа үҙең һуғыу менән бер ине бит, әлегәсә ул шулай. «Король яланғас бит!» — тиеп, бер ниндәй ҙә «ғилми даирәләр» түгел, ә эскерһеҙ сабый йән генә әйтер ҙә һалыр ине... Әгәр “ғилми даирәләр” ҙә тап шулай әйткән булһа – бигерәк тә шәп, әлеге һөмһөҙ Й. Солтанов хаҡлы, тимәк!

Ә «геройға ҡарата үҙ концепцияғыҙ»ға килгәндә, хөрмәтле Мостай ағай,

Һүр. 45. Актерҙар йортонда “Алтын көҙ” шиғриәт байрамы. Уңдан һулға Рәми Ғарипов, Әхмәт Ғайсин, Тимер Арыҫлан, Назар Нәжми, Мостай Кәрим, Йыһат Солтанов, Хөснулла Түләкәйев, Марат Кәримов, Рауил Бикбаев, Кәтибә Кинйәбулатова. 1972 йылдың ноябре.

йомшаҡ ҡына әйтһәк, шапшаҡ концепция бит: һеҙ күрһәтергә яҫҡанған ул рухы өтөк Салауатты үҙ заманы тарихи документтарының береһендә лә осрата алмаҫһығыҙ! Үкенмәгән ул үҙенең эштәре өсөн! Үҙегеҙҙән өҫтәрәк бойороп ултырмыш кемдәргәлер яраҡлашыу, уларҙың боҙоҡ күңел ҡылында уйнарға маташыу түгелме был? Көллө халыҡ көләс-нур тип таныған һәм белгән Көндө (ҡояшты) «ҡара батҡаҡ йомарлағы» тип алъюҫыҡтан иғлан ҡылып ышандырып буламы илде?!. Ана шул ышандыра алмағанға ла бит эстән өҙәләнәһегеҙ, баяғы ҡысҡырыҡ сабыйға өҙлөкһөҙ йоҙроҡ төйөп киҙәнәһегеҙ:

«Әммә туғанлыҡ тауына артылыу процесы тамамланмаған һәм бөтә проблемалар ҙа хәл ителгән, шөбһәләр ҡалмаған, бөтә ҡарғалар шымған, бары тик культура вәкилдәренең берсә үҙ халҡына йәш өҫтәргә, нисек тә булһа боронғологон иҫбатларға йәки тарихта өлөшөнә төшмәгән ҡаҙаныштарҙы уныҡы тип һанарға, йәки әкиәти ҡаһарманлыҡтарға күмергә маташыуҙарҙы һәм теләүселәрҙе күҙ уңында

тотам... Күмәкләп сигелгән матур биҙәкле келәмдән нисек тә булһа үҙ ебеңде һурырға, уртаҡ думбыранан үҙ ҡылыңды тартып алырға, уртаҡ йырҙан үҙ һүҙеңде йолҡорға — тағы бына ошондай һарыу ҡайнатҡыс тенденция бар. Төрлө ҡәбиләләр һәм халыҡтар борон-борондан күмәкләп туҡыған келәм, бергәләп көйләгән думбыра, уртаҡ йыр ул саҡта ни хәлгә төшөр? ***Башҡортостандағы*** *һәм башҡа ҡайһы бер тарафтарҙағы төрки телдә яҙған* ***ҡәләмдәштәрем*** *ҡайһы берҙә* ***бына ошолар менән мауыға.*** *Әйтергә кәрәк, бер улар ғына түгел... Ошондай ваҡ нәфселәнеү, минең уйымса, хуплауға лайыҡ түгел һәм зыяндан башҡа файҙаһы юҡ»...*

Донъя яратылғандан алып Уралында көн күреүсе башҡорт халҡының рухи-мәҙәни тарихын һәм уның сал боронғолоғон матбуғатта иғлан ҡылыусы әҙип ул саҡта әлегә тик берәү — Йыһат Солтанов булғанлыҡтан, ағабыҙҙың кем биленә типкәнлеген ҡәләмдәштәр ҙә, рәсми етәксе әһелдәр ҙә яҡшы беләләр һәм тейешле сараһын күрәләр ине. Уртаҡ келәмдән үҙ ебен һурып алып, совет илен ҡаҡшатыусылар «бер улар ғына түгел», тип яһил киҫәтеп ҡуйыуы ла тәрән мәғәнәгә эйә — АҠШ Үҙәк темеҫкенеү идаралығының да (ЦРУ) мәкерле эше был йәнәһе (тимәк, Йыһат Солтанов шулар тирмәненә һыу ҡоя)... Сығырынан сығып ҡабарынған үҙбелдекле яһилйәнгә ҡарыулашып һүҙ әйтергә заманында ирек бирмәһәләр ҙә, хәҙер инде (үҙе иҫән саҡта, иншалла!) мәрхүм дуҫымдың шулай уҡ әллә ҡасанғы — 1957 йыл 16 март көндәлеге менән яуап ҡайтарам: *«Минең өсөн Башҡортостан темаһы изге, был минең — тормошом, ҡайғым, шатлығым. Был минең горурлығым һәм кәмһенеүем. Был минең — йөрәгем.*

Мостай Кәримгә ул — ҡайын япрағы; ел иҫкәндә шаулай, ел иҫмәһә — юҡ. Ел ҡайһы яҡтан иҫә — ҡайын япрағы ла шул яҡҡа елберҙәй. Шуның өсөн ул: «Мин башҡортмон», — тимәй, ә «Россиян мин», — ти». (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» 1998; 233-өнсө бит).

Мостай Кәримдең “яҡын дуҫы” Назар Нәжми ҙә уны ғәҙел баһалап, 70-енсе йылдарҙа уҡ күптәребеҙгә ишеттереп әйткәйне: “Хандар өсөн йырлаусы һарай шағиры!” Дөп-дөрөҫ, шуға күрә лә ғүмере буйына режимдың һыйлы табынында яланып тамаҡ туйҙырҙы. Заман зауҡын ошолай үҙенсә төшөнөп, эс серҙәрен көндәлектәренә лә (“Ағиҙел” журналының 2006 йылғы 10 -- 11 енсе һандарынан был мемуарға өҫтәлмәләр керетәм) теркәгән икән:

“Шағирға ғүмер бакый йә таш, йә һөйәк ырғыталар. Һайла!”

Һуңғыһын һайланы, әлбиттә. Хатта “теге донъя”ға ла хан арбаһында үтеү яйын ҡармалай бит ағайым:

“Байҙарҙы дуҫтары ерләй, ярлыларҙы – туғандары, һуҡбайҙарҙы ергә былай ғына тапшыралар. Ваҡыты еткәс мине кем ерләр икән?”

Фанилыҡта хандар, әлбиттә, өлөш сығара ала, ләкин ысын дуҫ була алмай:

“Бер-беребеҙ менән уртаҡлашырлыҡ оло серҙәребеҙ, ижади серҙәребеҙ, бүлешерлек шиктәребеҙ, икеләнеүҙәребеҙ юҡ... Франсиско Гойяның дуҫтарына һөйләрлек серҙәре лә, сер һөйләрлек дуҫтары ла булған. Минең бер дуҫым бар (мин Өфөнө әйтәм), тик ул минең серҙәремде күтәрерлекме икән?”

Һәм йәнә:

“Үҙ әҙәбиәт мөхитемдә мин ҡай саҡ Рим аллаһына оҡшаш – ихтирам итәләр һымаҡ, ярҙам көтәләр, ҡурҡҡан да төҫләләр, әммә яратмайҙар. Ҡурҡҡан кешене яратыу мөмкин түгел”.

Дөрөҫ, ялағайҙар, алдын-артын шапылдатып ялаусылар менән тулы булды “бөйөк аға”ның ян-яғы, хатта күҙҙәрен гүр тупрағы ҡаплағас та, бер-береһенән уҙҙырырға тырышып ярамһаҡландылар, мөртәттәр. *Ләкин* ундайҙарға баһа үҙ ваҡытында уҡ бирелгән, ҡылыҡтарына өҫтән генә ҡарап көлөп йөрөлгән:

“Елгә еленләп ғүмер уҙғарыуҙар, йыйын эшкә ашмаҫ кешеләр өсөн һоранып йөрөүҙәр (хаҡ әйтә: эшкашмағандарҙы ғына ҡолаҡтарынан өҫкә тартып, эшкашҡандарҙың башына һуғып йәшәне! – Й.С.), *йыйын йүнһеҙҙе яҡлап йөрөүҙәр ярты ғүмеремде алды. Йылдарымдың байтаҡ өлөшө заяға үтте. Ҡурҡып йәшәнем... Намыҫһыҙҙар, яуыздар, бәгерһеҙҙәр шул ваҡытта үҙ мәнфәғәттәре өсөн мине эшкә екте... Мин ғүмер буйы тигәндәй үҙемдең булмаған, әммә һәр ваҡыт бар икәнен тойған мундирымдың бөтә һәҙәптәре лә ҡаптырылған көйө йәшәнем. Гел генә һәҙәптәрҙе ысҡындырырға теләнем, ҡай саҡ был килеп тә сыға, тик аҙаҡҡа тиклем түгел. Эш нимәлә һуң?”*

Эш бай табынынан ырғытылған һөйәктә, әлбиттә, үҙең әйтеп бирҙең бит!

1972 Яңы йылға бер көн генә ҡалды, тигәндә, «Совет Башҡортостаны»ның әҙәбиәт бүлеге хеҙмәткәре шағир Хәсән Назаров мине телефон аша ҡабалан саҡырып алып, быуыныма ҡорт булып төштө бит, әй: «Яңы йыл менән ҡотлап халыҡҡа өндәшкән ялҡынлы мәҡәлә кәрәк, иртәгә үк наборға төшөп китәсәк — таң атҡансы әүмәләп килтер, ағай, юғиһә янасаҡбыҙ!..» — «Коммунист» тигән әҫәремдән өҙөктө баҫҡанығыҙ өсөн ни булғанын беләһегеҙ — Абдулла Исмәғилев атып бәрәсәк барыбер», — тип «кәзәләнеп» ҡараһам да, уныһын үҙ өҫтөмә алам, баҫмай һис әмәле юҡ, сөнки шундай материалһыҙ сыҡһа, уға ла эләгәсәк, ә һинән башҡа бер кем дә уны төн ултырып яҙып килтерә алмай, тип һалпы яҡҡа һалам да ҡыҫтырғас, яҡташымдың һүҙен йығырға ҡыймай, ризалашып ҡайтып киттем дә машинка яҙмаһында биш битлек шул публицистиканы яҙып, үҙ ваҡытына килтереп тә еткерҙем; һәм ул гәзиттең 1972 йыл 1 ғинуар һанында һис бер тотҡарлыҡһыҙ донъяға сыҡты:

Яҙ, Башҡортостан!

Йоҙроҡ кеүек йомарланған Ер шарына йәнә лә яҡты көн килде.

Биш бармаҡтай биш ҡитғаһын биш төрлө ғәм менән сорнап, биш төрлө юл-йүнәлеш юрап 1972 йыл килде. Кешелектең көр яҙмышын ҡайнар усына йомарлап тотҡан эшсән йоҙроҡ-планета икһеҙ-сикһеҙ йыһан юлдарынан яңы саҡрым бағанаһын ҡағып уҙҙы. Был саҡрымда уҙған менән киләсәк, иҫке менән яңы, аҡ менән ҡара осраша. Был саҡрымда һәр ике яҡ үҙенең көсөн һынаша. Ер шарының миллион-миллион ир һәм ҡатындары был саҡрымда, күҙҙәренә аҡ күренмәй, ҡара ҡайғы йотоп тешләнеп уҙалар. Әлеге биш юл-йүнәлештең иң ҡараһы-билғауырына дусар булғандар улар. Ә миллион-миллион бәхетлеләр өсөн иһә был Яңы саҡрым — офоҡтарҙың тағы ла киңерәк асылыуы, барған һайын айбарланыусы ҡояшлы-айлы икһеҙ-сикһеҙ аҡ донъя ул.

Ҡәҙерле кешеләрем, аҡ киләсәкле, киң офоҡло Совет Башҡортостанының тулы хоҡуҡлы граждандары! Һеҙ, беҙ — үҙебеҙ бит ул иң бәхетле аҡ донъяның төп хужалары! Алдыбыҙға ҡалҡынып ҡарайыҡсы — офоҡтар ҡайһылай асыҡ. Тирә-яғыбыҙҙы боролоп байҡайыҡсы — донъя ниндәй киң. Табан аҫтыбыҙҙа үҙенең ҡышҡы күркенә — һөттәй аҡҡа төрөнгән тыуған еребеҙ. Әйтерһең, тик беҙҙең өсөн, төн сыҡҡансы ғәзиз еребеҙ үҙенең саф аҡ никах күлдәген кейгән...

Сал Иртыштан алып көр Иҙелгәсә, йор Яйыҡтан алып тын Ҡамағаса, Чукот диңгеҙенән алып Балтик диңгеҙенәсә, Төньяҡ Боҙло океан һәм Аҡ диңгеҙҙән — Ҡараҡом һәм Каспийгәсә ике ҡитғаны иңләп-буйлап ятҡан икһеҙ-сикһеҙ бөтә еребеҙ, әйтерһең, беҙҙең алда йәйелеп киткән ап-аҡ ҡағыҙ — яҙыр өсөн асып һалынған аҡ ҡағыҙ. Уға яҙыу өсөн бөйөк хоҡуҡ ҡәләме донъяла тик һеҙҙең менән беҙгә — Совет Социалистик Республикалар Союзының граждандарына бирелгән. Һәм тағы ла шуға иғтибар итегеҙ, ҡәҙерле яҡташтарым: һеҙҙең алдағы аҡ табаҡҡа эре хәрефтәр менән «СССР — 50» тигән, был донъяла иң ырыҫлы, тылсымлы һүҙ — ҡотлоларҙан ҡотло нур-һүҙ бар. Тимәк, 15 герблы, 150 телле татыу милләттәр республикаһына быйыл теүәл 50 йәш тула. Был беҙгә Яңы атлап ингән 1972 йылдың алтын бүләге. Изге йола буйынса ошо данлы бүләкте ҡотлап, Ватандың аҡ бит-ҡағыҙына беҙ, һәр ҡайһыбыҙ, үҙенең ҡултамғаһын йөрәк уты менән яндырып һаласаҡ. Ул уттарҙан ҡабынған факел быуаттарҙан — быуаттарға йылъяҙма булып дөрләп барасаҡ. Тәүлектәрен, сәғәттәрен, минуттарын һәм секундтарын алдан уҡ һанап-көйләп ҡуйған егәр яңы йыл шул тамғалар өсөн бына һәр беребеҙҙең күҙ алдына теүәл 365 көн-юлға бүленгән, һәр юлы утлы ҡәләм осон көтөп кенә торған ап-аҡ затлы йүнәлеш-өлөшөн асып һалған.

Эшсе иптәш! Һинең ҡултамғаң ҡуя торған ҡәләмең — станогың, ул тынғы белмәй әйләнһен.

Колхозсы-ерекмән иптәш! Баҫыу һәм ҡырҙарҙа түккән һәр тамсы хәләл маңлай тирең илгә яңы муллыҡ килтерһә, һинең ҡултамғаң шул булыр.

Яҙыусы һәм ғалим, пограничник һәм космосты яулаусы! Һеҙҙең йөрәк тибешегеҙ билдәләр ҡултамғағыҙҙы. Ә бөтәбеҙҙең дә ҡулдарыбыҙ, йөрәктәребеҙ, аҡылдарыбыҙ берегеп, әлеге мәңге һүнмәҫ факелды дөрләтһен.

Эйе, алдыбыҙҙа яңы асып һалынған аҡ ҡағыҙ — 1972 йыл — һәм СССР-ҙың алтын 50 йыллығы. Эшсән йоҙроҡ-планетабыҙ осһоҙ-ҡырыйһыҙ йыһан юлына ҡағып үткән яңы саҡрым бағанаһы ошо ике утлы һанды үткән менән киләсәктең, иҫке менән яңының, аҡ менән ҡараның ҡап-урталыҡ араһын аныҡ билдәләү өсөн ҡуйылған. Ерҙәге бар һуҡырҙарҙың күҙен асыу, өмөтһөҙҙәр өсөн өмөт маяғы ҡабыҙыу өсөн ҡуйылған. Был нур бөркөп тороусы маяҡ ҡара төндәрҙә лә барлыҡ биш ҡитғаға тиң балҡып күренә, көслө прожектор менән бөтә кешелек донъяһының үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген ҡапшап ҡарарға форсат бирә.

Башҡортостаным минең! Бөгөн ап-аҡ ҡар бөркәнгән баҫыуҙарың, яландарың, ҡаяларың, эшсән ауыл һәм ҡалаларыңдың күген күмгән шау-электр диңгеҙҙәрең менән һин ҙур Ватандың башындағы аҫыл аҡыҡҡа ынйы-гәүһәрҙәр батырып эшләнгән ҡиммәтле таж һымаҡ балҡып күренәһең. Берәүҙәр һине бик ҙур тере йөрәккә, көрәшеү өсөн һонолған эшсән ҡулға, йәки ҡайын япрағына оҡшатып йырлайҙар. Икенселәр осоп барған бөркөткә, ҙур Ватандың билендәге

ҡораллы кобураға йәки Урал батырҙың алмас ҡылысына тиңләп данлайҙар. Өсөнсөләр һине, илдең күҙ ҡараһы, тип атайҙар. Ләкин былырҙың бөтәһен бергә ҡушып әйткәндә лә аҙ булыр, беҙҙең йөрәк хистәрен биреп бөтөрмәҫ һымаҡ. Был донъяла һинең менән сағыштырырлыҡ тик бер генә нәмә бар — ул да булһа һин үҙең, һин үҙең, Башҡортостан!

Туған халҡым! Һине имәндәргә тиңләр инем мин, тик улар мәңге йәшәмәй. Аҡҡан йылғаларға оҡшатыр инем, ләкин улар ҙа мәңге аҡмай. Мәғрур тауҙар менән сағыштырыр инем, әммә тауҙар ҙа ишелеп төшә. Ә һин, туған халҡым, ике осо ла төпһөҙ йыһанға китеп олғашҡан офоҡ һыҙығы кеүекһең: Һин мәңге булған, барһың һәм мәңге буласаҡһың. Икегеҙ ҙә бер-берегеҙгә тиң килгәнһегеҙ, туған халҡым һәм тыуған Башҡортостан! Әммә донъяла иң ҙур тиңлек тә бар әле: илдәр менән илдәрҙең, милләттәр менән милләттәрҙең тиңлеге. Шул бәхеткә ирешеү өсөн күпме быуаттар буйы күпме халыҡтар ҡан түкте, зар-иланы, емеректәр аҫтында күмелеп ятып ҡалды. Ләкин кешелек донъяһы һаман халыҡтарҙың тиң ғаиләһе, дуҫлығы хаҡына йән атып, көрәшеп йәшәне. Ата-бабалар шул изге юлда аҡты ҡаранан, дуҫты дошмандан айырырға өйрәнде. Улар Башҡортостан намыҫы өсөн генә түгел, ә Рәсәй намыҫын һаҡлап Кузьма Минин, Дмитрий Пожарский ополчениеларында, Петр I батшаның төрөк, швед походтарында һәм Наполеонға ҡаршы Ватан һуғышында ҡан ҡойғанда ла, батшалыҡтың нигеҙен дер-ҡаҡшатып тетрәткән Иван Болотников, Емельян Пугачев кеүек ҡыйыу уҙамандарҙың яуҙарында урыҫ һәм башҡа милләт туғандары менән ҡуша изге берҙәмлек өсөн ғәзиз баштарын һалғанда ла, икеләнеп тормай, оло бер хаҡиҡәт өсөн йән бирҙе. Ул хаҡиҡәт иҙелгән барлыҡ милләттәр өсөн дә уртаҡ, ә иҙеүселәр өсөн ҡара гүр ташы ине. Ошо хаҡ юлда минең халҡым алтындай саф аҡ күңелен сағыу Ленин нуры менән балҡытып, совет Ватаны өсөн Шәһит батырҙарын, Шайморатов генералдарын бирҙе, СССР-ҙың гражданы тип аталыу хоҡуғын үлемесле оло яуҙа ҡулына ҡорал тотоп, ҡайнар ҡандарын түгеп аҡланы. Шуға ла бөгөн совет кешеһенең тормошҡа ышанысы ныҡ, барыр юлы яҡты, торор ере киң. Халыҡтарҙың быуаттар буйы килгән хыялы күкрәп тормошҡа ашты: ерҙә туғанлыҡ иле бар, ул ил беҙҙеке, исеме уның — СССР.

Яңы йыл менән күрешкәндә беҙ иҫке йылды ла хөрмәтләп оҙатабыҙ, сөнки ул бөтөн совет халҡы өсөн бик иҫтәлекле булды. 1971 йылда беҙ һигеҙенсе биш йыллыҡты уңышлы үтәнек, киләсәккә яңы пландар ҡороп ҡуйҙыҡ. Партияның XXIV съезы ул планды хуплап, алдыбыҙҙа офоҡ ҡапҡаларын асып ебәрҙе. Бөтөн ил берҙәм һулыш менән тын алып, эш өҫтөндә күкрәк киреп, бәрәкәтле Яңы йылға аяҡ баҫты. Башҡортостан кешеләре лә илдең тигеҙ, тыныс ритмы менән берҙәм юл ала. Беҙ беләбеҙ: 1972 йылдың саҡрым бағанаһынан алға ҡарай һәр бер совет гражданын башланмаған бөп-бөтөн бәхет көтә.

Бер үк ваҡытта Ер шарының миллион-миллион ир һәм ҡатындары был саҡрымды, күҙҙәренә аҡ күренмәй, ҡара ҡайғы йотоп тешләнеп уҙалар. Ҡара капитал сылбыры быуған бәхетһеҙ илдәрҙең кешеләре улар. Монополиялар, концерндар, синдикаттар — империализмдың ҡара һөлөктәре — был илдәрҙең күкрәк ҡанын эсә һурып. Капиталдың аҡса сейфынан төшкән шомло күләгә кешеләрҙең барыр юлдарын быуып, күҙ алдарын ҡараңғылата. Долларҙар һәм

фунттар астарҙың, яланғастарҙың өҫтөнә, аҡ япма йәки аҡ икмәк булып түгел, ҡара ҡурғаш булып атыла. Вертолеттар бамбук үҫкән ауылдарға, кендек әбейе алып түгел, ә ҡатын һәм сабыйҙарҙың өҫтәренә ут ишелдереү өсөн напалм тейәп оса. Ер шарының байтаҡ ҡара ҡитғалары уймаҡтай аҡҡа зар әле.

Ватаным минең, бөйөк Совет иле! Диңгеҙҙәрҙән диңгеҙҙәргәсә ниндәй аҡ булып сикһеҙ йәйрәп ятаһың һин. Хатта төпкөл ер аҫтың да тик аҡлыҡтан ғына торалыр төҫлө. Ошо бөйөк Ватан хаҡына ҡайнар хеҙмәткә генә түгел, ә утҡа ла, һыуға ла, үлемгә лә инеү тәүәккәллеге ярала йөрәктәрҙә. Күҙ ҡарабыҙҙай күреп һаҡларбыҙ, Ватан, һине!

Беҙҙең эшсән йоҙроҡ һымаҡ йомарланған Ер шары һаман дауам итә үҙенең ҡыҙыу хәрәкәтен. Ал да, ял да юҡ уға — фәҡәт хәрәкәт, тайпылышһыҙ алға хәрәкәт кенә. Беҙҙең Ватан хәрәкәте лә Ер шарының мәңгелек хәрәкәте менән бергә ҡушыла, ә һәр совет кешеһенең эш-хәрәкәте — Ватандыҡы менән бергә. Был алға барыш мәңгелек, уны туҡтатыр, йәки тайпылдыртыр ҡеүәт юҡ. Эшсе йоҙроҡ-планета саҡрымдарға бағаналар ҡаҡҡан һайын, Ер шарында тутыҡ сылбырҙар өҙөлөп, ҡара таптар ҡойолоп төшә, аҡлыҡ арта бара. Беҙҙең йөрәк уты менән аҡҡа һалған ҡултамғалар бөйөк Ватан иңендә яңы заводтар, ҡалалар, иген баҫыуҙары булып әүерелеп, уҙылған йылдың һәр көнөндә мәңге янар факелдар ҡабыҙып, бер ҡулдың биш бармаҡтарылай йомарланған, һаман-һаман бер-береһенә яҡыная барған биш ҡитғаны ҡомарлап йылыта. Был бармаҡтар яҙлыҡмаһын өсөн, Ер шары эшсе йоҙроҡ булыуҙан туҡтамаһын өсөн ырыҫлы үҙ тамғаңды яҙ, Башҡортостан!

Ҡайһындай ғына булһа ла, ихлас йөрәк хистәремде һалғайным шул, Башҡортостаным менән ғорурланып...

Телеп һалыр телебеҙ...

Ләкин ҡыуанысым оҙаҡҡа барманы, күңелем күген интектергес ҡара болот ҡапланы. Гәзитселәрҙең әйтеүенсә, мәҡәләмдең сыҡҡан көнөндә үк, юлына кемдер арҡылы төшкәндәй ярһып-туҙынып, әҙәбиәтебеҙ генералы Мостай Кәрим редакцияға килеп кергән; тура редактор бүлмәһенә лап-лоп атлап уҙып, тауыш күтәргән. Беренсенән, минең текстағы: «Сал Иртыштан алып күр Иҙелгәсә, йор Яйыҡтан алып тын Ҡамағаса, Чукот диңгеҙенән алып Балтиҡ диңгеҙенәсә, Төньяҡ Боҙло океандан һәм Аҡ диңгеҙҙән — Ҡараҡом һәм Каспийгәсә ике ҡитғаны иңләп-буйлап ятҡан икһеҙ-сикһеҙ бөтә еребеҙ»... — тигән, тарихи Башҡортостаныбыҙға ла, хәҙерге СССР-ға ла берҙәй ҡағылышлы һүҙҙәрҙе Башҡорт АССР-ы территорияһын баш-баштаҡланып киңәйтергә маташыусы милләтселек шауҡымы, тип атап, шуға юл ҡуймыш редакцияны сәйәси зыян эшләүҙә ғәйепләгән. Быға йәнә Мостай Кәримдең баяғы классикаға әйләнгән, Башҡортостан картаһын Рәсәй ҡайынының бер япрағына тиңләгән шанлы йырын кире ҡағыу, ә, униңса һәм күптәребеҙсә, «Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң ғына барлыҡҡа килгән» башҡорт халҡын «һин мәңге булған, барһың һәм мәңге

буласаҡһың», тип мәңгеләштереү бәләһе лә өҫтәлгән... Дөрөҫөн генә әйткәндә, шағирәнә ҡоласы киң, белем даирәһе тар инсан -- әҙәбиәтебеҙ генералы тарафынан яһалған бик ауыр һәм ҡурҡыныс ғәйепләү ине был... Әле әйткән “белем” мәсьәләһен уйлап сығармағанмын, бына ул хаҡта уҙаманыбыҙҙың үҙенең үк ихлас таныуы (баяғы “Ағиҙел”дәге көндәлектәренән):

“Белем запасым һәр ваҡыт әҙ булды... Әлбиттә, бында нимәлер бар, хатта яҡшыһы ла бар: мин үҙемдең белемемдә максимум файҙаланам. Шул уҡ ваҡытта ҡурҡып та йәшәнем: бына-бына юҡҡа сығырмын төҫлө”.

Ошо ғына ла етмәһә, ике ай ҙа үтер-үтмәҫтән, «ябай ауыл малайы»ның ауыртҡан башына тимер таяҡ һуғылды: намыҫлы һәм тәртипле коммунист булараҡ, партбюробыҙ сәркәтибе Фәрит Исәнғолов тәҡдимен кире йыҡмай, әҙәби телебеҙҙең бөгөнгө хәле һәм бурыстарыбыҙ тураһында яҙыусыларҙың февраль айында буласаҡ ҙур йыйылышында сығыш яһарға әҙерләнеп, төп докладтан һуң фекер алышыуҙа ун биш минутлыҡ телмәр уҡып ташланым...

Милли әҙәбиәтебеҙҙәге тел сәйәсәтенә туранан-тура ҡағылышлы һәм үҙем өсөн ифрат күңелһеҙ эҙемтәле беренсе ҙур сығышым булғанлыҡтан һәм ул бығаса матбуғатта донъя күрмәгәнлектән, ул тексты, ҡайһы бер етешһеҙлектәренә лә ҡарамай, ошо урында мәғлүм ҡылыу хәйерле, тип һанайым.

Халыҡ теле — океан

Бөгөнгө был йыйылыштың хәйерле сәғәттә йыйылыуын, көн үҙәгенә ҡуйылған мәсьәләнең мөһимлеген, докладсының ул мәсьәлә буйынса бик актуаль проблемалар ҡуҙғатыуын, шуның менән ошонда үткер һөйләшеү өсөн фекер уятыуын ыңғай билдәләп үтмәй мөмкин түгелдер. Ул ҡуҙғатҡан проблемалар һаны байтаҡ һәм уларҙың һәр береһе айырым доклад талап итерлек. Шуның өсөн бында һәр кем үҙен үтә борсоған бер йүнәлеште һайлап алып, эс серҙәрен сисер, тип уйлайым. Мин дә һуңғы ваҡытҡа тиклем көндәлек эш тәжрибәмдә осрата килгән, күҙгә күренеп бармаһа ла, яҙыусылар араһында яҡшы ғына бәхәс тыуҙырған, күп ваҡытта аңлашылмаусанлыҡҡа килтергән, һәр беребеҙгә, ҡул-аяғы менән булмаһа, итәге менән булһа ла ҡағылып үткән, бәлки, бөгөнгө йыйылыштың да көн тәртибен билдәләүҙә ҙур урын тотҡан бер мәсьәләгә ҡағылмаҡсымын. Был мәсьәлә беҙҙең үҙебеҙ — яҙыусылар тарафынан тыуҙырылған, ҡырҡыулаштырылған һәм яҙыусылар тарафынан хәл ителергә лә тейеш. Был иһә яҙа атмайынса, йәки йомшаҡ түшәк йәймәйенсә, туранан-тура бәхәс алып барыуҙы һорай. Шуға ла мин телмәремдә күрәләтә ҡырыҫ ҡорҙом.

Бөгөн башҡорт яҙма әҙәби теленә көтөлмәгән яҡтан һөжүм башланды.

Башҡорт әҙәби теленең именлеген, көрлөгөн, ғүмерен ҡурсалау бурысын йөкмәүселәр — яҙыусылар үҙҙәре һөжүм итә.

Ҡыуанып ҡул сабырға тейешме беҙ хәҙер, әллә ҡанлы йәштәр түгеп иларғамы?

Юҡ, беҙ бының икеһен дә эшләмәйәсәкбеҙ, сөнки башҡорт әҙәби теле тигән мәғрур Уралтауҙың ҡаяларының ныҡлығын, уның тамыры Ер-әсәнең нәҡ үҙәгенә — башҡорт халҡының йәнле һөйләшеү теленә барып тоташҡанлығын һәм уның гранит итәгенә бәрелеүсе мәшәҡәтле тулҡындарҙың күбек булып ситкә

һирпеләсәген беләбеҙ. Башҡа нәмә борсой беҙҙе был юлы: нимә мәжбүр ҡыла хөрмәтле аҡһаҡалдарыбыҙҙы (бында йәш самаһы һәм ҡайһы быуын вәкиле булыу күҙ уңында тотолмай: улар араһында төклө эйәклеләр ҙә, төкһөҙҙәре лә бар), быуынһыҙ урынға бысаҡ менән һелтәнеп, һөрәнләп ел тирмәне өҫтөнә яуға ташланырға? Донкихотлыҡмы? Ләкин мин улар араһында моңһоу йөҙлө, хуш күңелле идальгоны күрмәйем. Беҙҙең һаҡаллы һәм һаҡалһыҙ рыцарҙарыбыҙҙы һөрән һалдыртып яуға әйҙәгән нәмә, минеңсә, бүтәндә. Ҡылыстарҙы сатрашларға мәжбүр ҡылған был сәбәп — башҡорт теленең диалекттары һәм уның яҙма әҙәби телебеҙгә мөнәсәбәте мәсьәләләре. Шуға булған ике ҡараш, уны ике төрлө аңлау — баррикаданың ике яғына өйөрә яугирҙәрҙе.

«Башҡорт яҙма әҙәби теле тупланып, ҡалыплашып бөткән — диалект һүҙҙәрен яҡын юлатмаҫҡа кәрәк!» — тип сың ора һаҡаллы һәм һаҡалһыҙ аҡһаҡалдарҙың бер килкеһе.

«Башҡорт яҙма әҙәби теле әле ҡалыплашып бөтмәгән, ул һаман тупланыу, формалашыу өҫтөндә, тимәк, диалект һүҙҙәренә аҡ юл булырға тейеш!» — тип рельс һыныҡы ҡаға һаҡал үҫтергән һәм үҫтермәгән һаҡалтайҙарҙың бер килкеһе. Ҡалған халыҡ, ҡап-уртала ҡалып, эштең ни менән бөтөрөн көтә. Ике яҡтың ҡайһыныһы хаҡлы һуң? Икеһе тиң хаҡ та, нахаҡ та һымаҡ.

Тәүге тезисты ҡарайыҡ. «Башҡорт яҙма әҙәби теле тупланып, ҡалыплашып бөткән»... Ҡайһындай ҙа яғымлы моң! Бәүелеп кенә ят та йоҡла. Эйе, ысындан да ул шулай «тупланып, ҡалыплашып бөткән»ме? Тарихҡа күҙ һалайыҡ. Ул ике өлөшкә бүленә: Бөйөк Октябргә тиклемге һәм Бөйөк Октябрҙән һуңғы осор. Бөйөк Октябргә тиклем башҡорт әҙәби теле халыҡтың ауыҙ-тел ижадында йәшәп килгән. Бөйөк Октябрҙән һуң халыҡ үҙ яҙмаһына эйә булып, шул әҙәби телде ҡағыҙға күсергән. Элек үҙ-ара, өй-ара, ырыу-ара ғына һөйләшһә, хәҙер уның көр тауышы ҡитғалар аша ишетелгән. Уны башҡорт яҙыусылары ишеттергән. Ярты быуат эсендә был яҙма әҙәби тел бөгөнгө хәленә етеп көрәйгән. Бына ошо көрлөк сәбәп бирә лә инде, әҙәби тел бөгөн тамам «тупланып, ҡалыплашып бөткән» тип ҡарҡ кикереп диалект һүҙҙәрен арҡҡы ҡапҡаға һөрөүселәргә. Ләкин бындай көрлөк беҙгә теге һимергән, күкәй һалыр юлы бөрөшкән тауыҡты хәтерләтә түгелме?..

Дөрөҫ, әлеге «ҡарый»ҙар әйткән, «тупланып-ҡалыплашып бөткән», бер килке йылғыр әҙәбиәтселәрҙең «әҙәби тел»е бар ул беҙҙә, барлыҡҡа. Ботаҡ-сатағы ла, ялы-ҡойроғо ла юҡ: телеграф бағанаһылай шыма, йәки һыу кеүек һемереп эсерлек. Аңлашылалыр, бында Һәҙиә Дәүләтшина, Зәйнәб Биишева, Ғариф Ғүмәр, Мостай Кәрим кеүек оло яҙыусыларыбыҙҙың тормоштоң үҙеләй киң һулышлы, тулы ҡанлы телен, әлбиттә, күҙ уңында тотмайым. Теләйбеҙме, юҡмы, шулай ҙа танырға ла тура киләлер: оло ағым менән бер ҡатарҙан, тел мәсьәләһендә шишмә һайлығы кисереүселәр аяҡ остары менән генә йырып ағыҙған «әҙәби тел»ебеҙ ҙә бар шул беҙҙең. Был — утыҙынсы йылдар аҙағынан алып алтмышынсы йылдарғаса булған ярҙар араһында биләмәләнгән бер килке «әҙәбиәт» теле. Ҡабатлайым: бөтә әҙәбиәтебеҙҙең түгел, ә бер килке әҙәбиәт теле. Ул ҡасандыр Магелланды әсир иткән Тымыҡ океан кеүек тын ғына ята. Сайпылмай ҙа. Күбекләнмәй ҙә. Моряктарса әйтһәк, «полный штиль». Унда

магелландарға ғына түгел, хатта төбө тишек кәмә эйәләренә лә күкрәк киреп ярҙан-ярға хозур сәйәхәт ҡылырлыҡ. (Йөрәклеләргә, әлбиттә, унда ла дауылдар булған, ләкин хәҙер һүҙ улар хаҡында түгел!). Арҡырыһы-буйы ла, тәрәнлеге лә бер ҡарауҙан табалағы һыу шикелле үтә күренеп торған был ташҡа үлсәйем әҙәби тел — үҙенә күрә бер эсперанто теле ул. Яҡынса өс мең һүҙ унда. Өс мең һүҙҙе әүеш-тәүеш килтереү тыуҙыра шул үтәнән-үтә күренмәле эсперантоны. Һәм ул ирекле көндән түгел, ә беҙҙең тарафтан башҡорт телен белмәүҙең ғәзиз балаһы булып донъяға килгән. Әгәр ошо ғәзиз баланы донъяның иң етлеккән, камил мөғжизәһе итеп һанаһаҡ, башҡорт яҙма әҙәби телен «тупланып, ҡалыплашып бөткән» тип тә ҡабул ҡылырға тейешбеҙ.

«Диалект һүҙҙәрен яҡын юлатмаҫҡа кәрәк!» Ниндәй пафос, ниндәй яугир ынтылыш менән һуғарылған һөрән! Ошо һөрән һөрөлгәндән һуң, һурмай ҡара хәнйәр һәм ҡылыстарҙы!.. Ләкин беҙҙең алмас ҡылыстар ниңәлер, хас дошман муйынында түгел, ә бер-беребеҙҙең танау осонда осҡон сәсрәтә. «Диалект һүҙҙәре», «диалектизм» тигән төшөнсә, дошман яҡ булаһы урында, ике-ара ҡап-уртала баррикада булып ҡалҡып сыға. Бына шул саҡ йөрәкте ғәм семетеп ала ла инде: йәғни беҙ, ҡәләм эйәләре тип аталған әҙәмдәр, «диалект һүҙҙәре», «диалектизм» тигәндең бөтә мәғәнәһен һәм унан сыҡҡан бурыстарыбыҙҙы тулы мәғәнәһендә аңлап етәбеҙме икән?.. Әммә көндәлек эш тәжрибәһендә редакцияларҙа ҡылыс сатрашлатыуҙарҙың сәбәбенә күҙ һалыу — үҙе үк беҙҙең был мәсьәләлә бер ҡатлы сабыйҙар икәнлегебеҙҙе асыҡ дәлилләй. Быңдай сабый (һаҡаллымы ул, әллә юҡмы — эш унда түгел), әҙәбиәт донъяһына тәпәй баҫып ҡалғып тороуҙың икенсе көнөндә тирә-яғына ҡаранып, күңеле ҡанғансы ярға ятып һүҙ ағымынан бер һемерә лә үҙ иңкәйе һыйҙыра алғанса ҡосаҡлай даръяны, шуның менән оло диңгеҙҙе ҡосоп алдым тип уйлай. Ғәмәлдә иһә ҡосағында ҡорсаңғы тай ҙа эсеп туймаҫлыҡ шәре-күләүек кенә. Диңгеҙ тигәне лә уның диңгеҙ түгел, ә океандан бүленеп ҡалған, аҡрынлап ҡорорға дусар ҡылынған Арал, йәки Каспий күле генә. Шул бер ҡолас диңгеҙе менән быңдай «белгес» халыҡ теле океанының лоцманы булыу вазифаһын ала үҙ өҫтөнә. Янып-көйөп эшкә тотона. «Тонған таҙа диңгеҙебеҙҙең сафлығын һаҡлайыҡ, болғансыҡ сит ағымдарға юл ҡуймайыҡ!» — тип ысын күңелдән ҡурсалап яр һалыр ул, ләкин шул «сит ағым»дарҙың -- үҙен оло океанға тоташтырғыс йәншишмә икәнлеген, «болғансыҡ» менән ҡуша диңгеҙгә йәшәү алып килгәнлеген һис абайламаҫ. Әгәр шулай түгел икән, ниңә беҙҙең мәрхәмәтле редакцияларҙа һаман да шул өс мең һүҙле эсперанто теленә тартымлыҡ көслө, ә редактор ҡулы һәр бер өс мең беренсе «шыршау» һүҙҙе ҡулъяҙманан ҡыя сабып ырғыта? Һәммә редакциялар ҙа, һәммә редакторҙар ҙа ундай икән тип уйлау яҙыҡ булыр ине; әлбиттә, редакторҙар араһында ла барҙыр йүнле кешеләр. Был әйткәндәр, баяғыса, ҡосағында бер ҡолас диңгеҙ йөрөтөүселәр нәҫеленә ҡағыла, ләкин, үкенескә ҡаршы, бөгөн әле тел мәсьәләһендә ил кейенер затлы тундар йыш ҡына осраҡта шуларҙың «диңгеҙ» аршыны менән беселә. Бында улар — тулы хоҡуҡлы тунсы. Һәм һәр тунсы үҙ аршыны менән үлсәй. Әммә тунсылар өсөн дә уртаҡ бер сифат бар, был — аршындарҙың наҡыҫлығы. Шул сифатҡа тел белемебеҙҙең үтә һүрән дөрләүе, хатта ҡай саҡ янғын булып ҡабыныуы ла хеҙмәт итеп ҡуя үҙенсә. Әйтәйек, наҡыҫ

аршын эйәһе берәй ҡулъяҙмала автор телендә үҙ «диңгеҙ»е өсөн ят карап булған һүҙҙе осрата. Пресонаждар телмәрендә булһа бер хәл, әммә автор телендә ул бындай «крамола»ға һис кенә лә түҙә алмай, арт һынын күгәүен тешләгән аттай тибенеп сәбәләнә башлай. Аҡыллы башын ҡашып, башта «Башҡортса-русса һүҙлек»те (22 мең һүҙ) асып ҡарай ул (сөнки бындай бәндә алдан уҡ үҙенең артын нығытып ҡуйыусан була). «Русса-башҡортса һүҙлек»кә лә (46 мең һүҙ) күҙ һала. Уларҙан улъя тапмай, йәки «диалектизм» тигән арыҡ ҡуянға тап булып, кәштәнән ике томлыҡ «Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге»н тартып төшөрә. Баяғы һүҙ бында ла йә юҡ, йә «диалектизм» тамғаһы аҫтына алынған. Шуны күреп сәмләнгән «белгес» башҡорт әҙәби теленең сафлығы, камиллығы хаҡына йән атып фекер йөрөтә башлай, һәм әлеге дөрөп килгән «башпыртһыҙ» һүҙҙе ҡәләмдәшенең ҡулъяҙмаһынан йәнтәслим йолоп ташлай. Хаҡ һорау тыуа: халыҡ теле тигән бөйөк океандың «һүҙлек» тигән ҡуш ҡатырға араһына ғына һыймай тулауы өсөн һүҙ ғәйеплеме ни?..

«Йондоҙнамә» асыусылар ысулы менән «Башҡорт һөйләштәре һүҙлеге»нең икенсе томын (унда көньяҡ — минең һөйләш) ҡул тейгән тоштан тоттом да асып ҡараным. «Ҡ» хәрефенә ҡағылды бармаҡ. «Ҡатыға башланған» һүҙҙәрҙең бөтәбеҙ өсөн дә үтә уртаҡ һәм аңлайышлыларына туҡталып тормай, «томанлыраҡ»тарын бер рәттән бер бағанаға күсереп алдым. Китаптың (1-енсе том) инеш һүҙендәге төп ҡағиҙәләр ошондай:

1. Башҡорт әҙәби теле көнсығыш һәм көньяҡ диалекттарға нигеҙләнә (5-енсе бит).
2. Әлегә тиклем һөйләштәрҙә киң таралып, әҙәби тел нормаһынан тыш йөрөгән һүҙҙәр әҙәби телдә урын алырға хаҡлы (8-енсе бит).
3. Һүҙлектәрҙә әҙәби телгә хас булмаған һүҙҙәр генә туплана (8-енсе бит).
4. Һүҙлектәге һүҙҙәр әҙәби телдәге эквиваленты менән аңлатыла (10-ынсы бит).

Тимәк, беҙҙең алда саф диалект һүҙҙәр, әҙәбиәтебеҙ баҫыуынан аҡһаҡалдар таяҡлап ҡыуа торған диалектизмдар һүҙлеге.

Ләкин күсереп яҙғандарымды көнсығыш диалекты һүҙлегендәге (1-енсе том) шул уҡ баш хәреф һәм теҙем һүҙҙәре менән йәнәш ҡуйып сағыштырып ҡарау мине көтөлмәгән хәлгә килтерҙе. Бына ул таблица (йәнле телдә ике диалекттың да активында булып та, һүҙлектә бер диалектҡа ғына ҡайтарып ҡалдырылған һүҙҙәр ҙә осраны, улар шаҡмаҡ йәйәләр эсенә алына):

Көньяҡ диалект	**Көнсығыш диалект**
Ҡалғал тороу	—
—	[Ҡалғыу]
Ҡамыл II	—
Ҡандала үләне	—
Ҡанүлән	—
Ҡанығыу	Ҡанығыу
—	[Ҡаныу]

Ҡарағура	Ҡарағура
Ҡаран	Ҡаран
Ҡаскалаҡ	—
Ҡаҫмаҡ I	Ҡаҫмаҡтаныу (мәғәнә бер)
Ҡаҫмаҡ II	Ҡаҫмаҡ
Ҡатыҡ	Ҡатыҡтау (мәғәнә бер)

Таблицанан күренеүенсә, «диалектизм» тоҙағына башы ҡапҡан ун бер һүҙҙең алтыһы бер үк мәғәнәлә ике диалектта ла ҡулланылып йөрөй, берәүһе көньяҡ диалектта бар, ә көнсығышта юҡ. Йәнә һүҙлектә фәҡәт көнсығыш диалектҡа ҡаратылған, ләкин көньяҡ диалект һөйләштәрендә лә киң таралған, «Башҡортса-русса һүҙлек»кә лә (Мәскәү, 1958 й.) индерелгән ике һүҙ (ҡалғыу, ҡаныу) осраны; тимәк, улар ҙа ике диалект өсөн дә уртаҡ байлыҡ булып сыҡты. Һөҙөмтәлә тикшерелгәндәр араһынан һигеҙе — ике диалекттың да активында. (Ә телсе ғалимдарыбыҙҙың бер килкеһе танырға теләмәгән *өсөнсө диалект* тураһында әйтеп тә тормайым). Ул ғына ла етмәһә, беҙҙең таблицала тәүге бағаналағы көньяҡ һөйләш мөлкәте булған тағы ла өс һүҙ (ҡамыл, ҡандала үләне, ҡанүлән) Башҡортостандың бөтә районларында ла ҡабатланмаҫҡа ихтималлы айырым географик шарттарға һәм ундағы көнкүрештең специфик сығанағына бәйле уникум — үҫемлек атамалары булғанлыҡтан, теләйме-теләмәйме, икенсе диалект та ул һүҙҙәрҙе үҙенеке итеп алмайынса хәле юҡ. Сөнки холҡо камил әҙәм бер саҡта ла был һүҙҙәрҙе һүҙлектә бирелгәнсә «әҙәби телдәге эквиваленты менән» алмаштырып, ҡамылды — «иген һабағы» (был үҙе хата, сөнки ҡамыл көньяҡ диалектта иген һабағын түгел, ә һабаҡтың урғандан һуң ҡалған төбөн — стерняны аңлата), йәки «стебель» тип, ә ҡандала үләнде — шул уҡ көньяҡ диалекттың Дим һөйләшенсә «ҡанҫиәр сыбығы», йәки аңлатмалағыса «ҡыуыҡ ауырыуын дауалай торған үлән — лекарственная трава, употребляющаяся при восполении мочевого пузыря» тип һөйләмәҫ бит инде. Күрәһегеҙ, һүҙлек төҙөүселәр һуңғы үлән исеменең хатта урыҫса аңлатмаһын да таба алмағандар.

Инде тағы ла күҙ ҡырында ике һүҙ: «ҡалғал тороу» менән «ҡаскалаҡ» тороп ҡалды. «Ҡаскалаҡ»тың дөйөм әҙәби һүҙ рәүешендә «Башҡортса-русса һүҙлек»кә инеүен иҫәпкә алһаҡ, беҙҙең алда «ҡалғал тороу» яңғыҙы ғына ҡалғып тороп ҡала. Ләкин баланың йөгөнөкләп тәпәй баҫҡандан һуң беренсе ҡат аяғөҫтө ҡалғаллап тороуын асыҡ итеп күҙ алдына баҫтырған был берҙән-бер тере һүҙҙе, йәнле һүҙҙе, башҡа ҡайҙан табырбыҙ? Һүҙлектә әшкәртелгәнсә, «ҡаҙыҡай тороу» тип, йәки «впервые встать на ножки (о ребенке)» тип атарбыҙмы инде беҙ уны?..

Осраҡлы ғына ҡул аҫтына килеп ингән һәм «диалектизмдар» тип мөһөрләнгән һүҙҙәрҙең йөҙ проценты ла ике диалектҡа ла хас уртаҡ байлыҡ булып сыҡты; тимәк, дөйөм әҙәби телебеҙгә хас уртаҡ байлыҡ — әҙәби тел фонды булып сыҡты. Был ҡауғалы хәлдән, тупиктан хәҙер кем ҡотҡарыр беҙҙе?.. Әлеге наҡыҫ аршынлыларға юл ҡуйһаҡ, улар, һис шикһеҙ, беҙ тикшергән ун өс һүҙҙең ун өсөн дә (ә бөтөнләй бер һүҙлеккә лә инмәгән һүҙҙәрҙе ни көтә?!.) «диалектизм» тип һыҙып ырғытасаҡ, сөнки шуны дөрөҫләгес ике томлыҡ һөйләштәр һүҙлеге бар. Бындай «белгес» теләгән бер һүҙгә ҡарата: «Мин белмәйем, тимәк, ул юҡ», —

тигән серек принциптан сығып эш ҡыла. Тик беҙ белмәгәндән генә Ер шары — әйләнеүҙән, һыуҙар — ағылыуҙан, елдәр иҫеүҙән туҡталырмы ни?!. Бармаҡ битендәй ерле, бер ус ғәскәрле кәрлә *Лихтенштейн дәүләтенең барлығы, бәлки, төшөбөҙгә лә кереп сыҡмағандыр, ләкин бынан ғына ул юҡ булып ҡалмай, донъя* атласынан һыҙып ташланмай — унһыҙ донъя ла бөтөн түгел. Ә халыҡтың һәр бер һүҙе — донъя телдәре атласының тере күҙе — ерҙә йөҙәр дәүләттәрҙе ерләп тә йәшәп килә. Шул тере күҙҙе тере тәндән яҙыусы үҙ ҡулы менән соҡоп ырғытһа — бына аяныс хәл ҡайҙа!..

Инде бая телгә алынмыш рельс һынығы (сың) ҡағыусыларҙың — эйәгенә төк үҫтергән һәм үҫтермәгән «һаҡалтай»ҙарҙың тезисына киләйек. «Башҡорт яҙма әҙәби теле әле ҡалыпланып бөтмәгән... диалект һүҙҙәренә аҡ юл булырға тейеш!» — тиҙәр улар. Был да яугирлек билдәһе: дауылдарға һыуһап йәшәү сағыла был һүҙҙәрҙә! Карап әҙер, капитандар бар — халыҡ теле океанының икһеҙ-сикһеҙ киңлектәренә тулҡын ярып сығаһы, төпһөҙ тәрәнлектәренә сумаһы ғына ҡала. *Ләкин беҙҙең киң күкрәкле капитандарыбыҙ, океан түренә елкән-ҡанат кереп* еләһе урында, маңлай менән яр емереп танау емертеү, ынйы тип ҡомташ киҫәктәре тырнап сығарыу менән мәшғүл. Матбуғатта хөкөм һөргән орфографик сыбарлыҡ, үҙэшмәкәрлек «сәтләүектең мәмесен ташлап ҡабығын сәйнәмәйбеҙме, йәки уң ҡулың ни эшләгәнен һулы беләме икән» тигән фекергә килтерә. Мәҫәлән, биш йыллыҡ, ҡыҙыл армеец, ҡыҙыл (аҡ) гвардеец, ғайәт, ғашиҡтәр, ниһайәт, хаҡиҡәт, фиҙакәр һ.б. шуның ише һүҙҙәрҙең һәм ғәрәптән инмеш исем, фамилияларҙың ике төрлө яҙылып йөрөүе, әҫәрҙәрҙә екһеҙ ергә «яңы» һүҙ ҡыҫтырып уйнатыу һәм шуның менән башҡа урында ысынлап та нәжәғәйләнеп балҡырҙай һүҙҙәрҙең дә бәҫен ебәреү, күҙ ҙә йоммай “самауыр”ҙан «үҙҡайнатҡыс» уйлап сығарыу кеүек ҡыңғырлыҡтарҙың ҡырҡ көндә бер булһа ла тыуғылап тороуы шул хаҡта һөйләй түгелме?..

Ләкин быныһы әле ҡазаның башы ғына. Уның мыҡты кәүҙәһе, тояҡтары — баяғы сың ороусылар яғында. Һуңғы ваҡытта редакторҙар ҙа әлеге наҡыҫ аршын сирткән фәҡир таҡмаҡҡа баҫып: «Әҫәреңдең персонаждарын, миңә тимәгәйе, эт телендә һөйләт. Әммә-ләкин автор телмәренә диалектизмдарҙы ҡыҫтырма!» — тип әйтеүсән булып китте. Шуның арҡаһында беҙҙең әҫәрҙәрҙә геройҙар һәм персонаждар — нормаль башҡорт әҙәби телендә, ә автор үҙе эсперанто телендә һөйләшәләр. *Ләкин* етешһеҙлектәрҙе бер яҡҡа ғына әүештереү ҙә дөрөҫ булмаҫ: бында ғәйеп атта *ла*, тәртәлә *лә* бар. Ҡайһы бер повестәрҙә, романдарҙа баштан алып ахырғаса авторҙың тел байлығы, фекер ҡеүәһе һайығып, персонаж һәм геройҙарҙы бер яҡҡа әүештереп «байыҡтырыу», уларҙы ҡыуаҡан, Дим буйы йәки башҡа яҡ һөйләштәренсә һаҡаулатып һөйләштереү «йола»һы юл алды. Һаҡау «аҡсарҙаҡ»тан илле алла, мең мулла менән саҡ ҡотолоп, ауыҙ тултырып «аҡсарлаҡ» тип әҙәм рәүешле яҙа ғына башлағайныҡ, ҡуңғылдап торған ҡуңғыҙ урынына, Хоҙай биргән «ғ» өнөн эскә йотоп, «ҡуңыҙ» осорорға керештек. Ошо ҡалып менән барһаҡ, оҙаҡламай бөтә Сыңғыҙҙар ҙа — «Сыңыҙ», дуңғыҙҙар ҙа «дуңыҙ» булып китәсәк һәм үҙебеҙ ҙә, яңғыҙ ҡалаһы урында, «яңыҙ» тороп ҡаласаҡбыҙ. Ундай сая миҫалдарҙы йөкләп-йөкләп килтерергә була, тик уны һис тә нормаль хәл тип кенә атап булмайҙыр. Бындай үҙэшмәкәрлек, әлбиттә,

башҡорттоң әҙәби тел байлығына бармаҡ башындай ҡырсынташ та өҫтәмәй, тик өҫтәйҙер әҫәргә аҙ-маҙ «колорит». Ләкин бындай колоритты душа никтер не варит... Эштең ошолай «кәкес» тороуы ҡуҙғата ла инде бөгөнгө һөйләшеүҙе.

Дөрөҫ, һөйләшеү кәрәк, бәхәсләшеү кәрәк, сөнки алдыбыҙҙа торған мәсьәлә ифрат та ҡатмарлы бит. Уның сутырмаҡлы юлдарында, докладсыбыҙ әйткәнсә, йәштәр генә түгел, ә ил ағаһы булып йышылған аҡһаҡалдарыбыҙ ҙа ҡай саҡ һөрлөгөп ҡуя икән ул. Эштең ни тиклем ҡатмарлылығы шунан күренә. «Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1970 йылғы 25 февраль һанында филология фәндәре докторы Ғәли ағай Сәйетбатталовтың «Арыш башағы» романының теле тураһында» тигән бик шәп мәҡәләһе баҫылып сыға. Фәрит Исәнғолов (бөгөнгө докладсыбыҙ) әҫәрендәге «яңы» һүҙҙәргә иғтибар бирә автор. «Был һүҙҙәрҙе ҡулланып, яҙыусы уларҙы башҡорт әҙәби теленә индереп ебәрҙе, тимәк, киләсәктә улар һүҙлектәрҙә лә урын аласаҡ, — ти ул. Артабан ошолай дауам итә: — Дөрөҫ, ҡайһы бер осраҡтарҙа бик һирәк кенә булһа ла Фәрит Исәнғолов һөйләмдә һүҙҙе урынһыҙ ҡуллана. Мәҫәлән, йоғошло ауырыуҙар палатаһына *тыҡшынып* йөрөүсе булманы. Күренеүенсә, бында «ныҡышып» урынына «тыҡшынып» һүҙе ҡулланылған, — ти Ғәли Сәйетбатталов. — Шуны ла әйтергә кәрәк, — тип дауам итә, — был һүҙҙе яҙыусының «Аҡҡошом минең» повесендә лә осратабыҙ. Унда ла был хәл ҡылым урынһыҙ бирелгән. «Ә һин, Сәрүәров, үҙ хәлеңде белмәй, оҙатырға *тыҡшынып* (ныҡышып. — *Ғ.С.*) торған булаһың». Бындай лексик хата киләсәктә Ф. Исәнғоловтың әҫәрҙәрендә булмаҫ тип ышанырға кәрәк, юғиһә ул аҡ нәмәгә төшкән ҡара тап һымаҡ, әҫәрҙе йәмһеҙләп тора», — тип йомғаҡлай мәҡәләнең авторы.

Хәтерләйем, шул мәҡәлә баҫылып сыҡҡандың иртәгәһенә «Ағиҙел» журналы редакцияһына пенсия йәштәрендәге бер дәү ағай килеп инде лә мәҡәлә авторына ҡарата ихлас үпкәһен белдерҙе. «Татар лөғәтенән ҡараным, — тине ул, — татарҙа «тыҡшынып» тигән һүҙ бар, ул тап Фәрит Исәнғолов ҡулланған мәғәнәлә. Туғандаш телдең һүҙ байлығын файҙаланып яҙыусы дөрөҫ эшләгән, ә Сәйетбатталов уҙаман шуны «ныҡышып» һүҙе менән алмаштырырға итә», — тине ул.

Минең дә зитҡа тейгәйне был мәҡәлә, шуға күрә мин дәү ағайға ошолай яуапланым: «Тыҡшынып һүҙе, бәлки, татарҙа барҙыр һәм ул, һеҙ әйткәндәй, тап Фәрит Исәнғолов ҡулланған мәғәнәлә йөрөйҙөр — уныһы миңә ҡараңғы. Ләкин мин шуны беләм: башҡортса «тыҡшынып», «тыҡлығып», «тыҡлығышып» тигән айырым өс һүҙ бар, ныҡ ҡына таралған улар. «Тыҡшынып» тигәне — «кеше юҡта йәки форсаты тейгәндә туйғансы, ғарыҡ булғансы ашанып» тигәнде аңлатһа, «тыҡлығып», «тыҡлығышып» тигәне — тәүгеһе берлек, икенсеһе күплек формаһында тап һеҙ, мин, Фәрит Исәнғолов, Ғәли Сәйетбатталов — дүртебеҙ ҙә — дөрөҫ уйлаған, ләкин әлегәсә беребеҙ ҙә үҙ әҫәрендә дөрөҫ итеп үҙ урынына ҡуйып яҙа ғына алмаған мәғәнәлә йөрөй. Тимәк, беҙ дүртебеҙ ҙә хаҡ та, нахаҡ та бер юлы, шуға күрә бер-беребеҙгә үпкә лә юҡ».

Күренеүенсә, «тыҡшынып» һүҙен Ф. Исәнғолов урынһыҙ ҡуллана, Ғ. Сәйетбатталов уны урынһыҙ «ныҡышып» һүҙе менән төҙәтә һәм, һүҙҙе яңылыш урынға ҡуйыу — әҫәрҙең йән үҙәген өҙөү икәнде күҙ уңында тотоп, киләсәктә был

хата ҡабатланмаҫ, тип юрай. Шуға күрәлерме, Фәрит Иҫәнғолов ағайыбыҙ ҙа шул уҡ «тыҡшынып»ты шул уҡ тейешһеҙ мәғәнәһендә, хәтерем буталмаһа, тағы ла өсөнсөгә — «Ир-егеткәй менән ат башы» романына ла тыҡшып керетә...

Аҡһаҡалдар һөрлөккән ерҙә беҙгә тәкмәс атырға ла ярай икән, тигән нәтижә яһарға йыйынмайым. Бер генә һығымта сығарырға була бынан: беҙ, яҙыусылар, ғалимдар, халҡыбыҙҙың тел байлығын, ресурстарын белеп еткермәйбеҙ икән; был өлкәлә, ҡырыҫ ҡына әйткәндә, ҡара наҙанбыҙ икән. Шуның арҡаһында әҙәби телдең байлығына тарлыҡ килә. Ошо факт бөгөн беҙҙең алда торған бурыстарҙың бер ултырып ҡына бер самауыр сәй эсеү түгеллеген иҫбатлай. Тел мәсьәләһе яҙыусыларға ла, тәнҡитселәргә лә, ғалимдарға ла, хатта китап уҡыусыларға ла ғәҙәттән тыш түҙемле, сабыр, һаҡ булыуҙы һорай. «Диалектизм» ярлығы аҫтында типкеләнеп, йәки ҡаш яһайым тип күҙ сығарылып, әҙәбиәттең кәртә артында хужаһыҙ малдай ҡаңғыртылып йөрөтөлгән өйөр-өйөр һүҙҙәребеҙ араһында халыҡтың тиңһеҙ хазиналары, аҫыл гәүһәр-яҡуттары ята бит. Донъя яратылғандан биреле халыҡ уны майҙай танҫҡалап йыйған, ишәйткән, мәрйен һымаҡ бөртөкләп теҙгән, ә беҙ бер һуғыуҙа уны сәсрәтергә, елгә осорорға әҙер, сөнки беҙҙә ысын диалектизмды — йөрәге өлпөрәп тибеп торған тере һүҙҙән, кәбәкте бойҙайҙан айырыу һәләте етеңкерәмәй. Ете үлсәп ҡарамай тороп, ҡырҡа сабып өҙөү өсөн ҡылыс күтәрәбеҙ, танау особоҙҙа ут сәсрәтәбеҙ, ә ул ҡылыс тигәнебеҙ ике башлы наҡыҫ ҡына аршын таяғы булып сыға. Йола буйынса таяҡтың бер башы уны күтәреүсеһенең үҙ башына төшөргә тейеш ине лә бит, әммә улай түгел шул әҙәбиәттә: икеһе лә төшә әҙәбиәткә, ә таяҡ күтәреп һелтәнгән йылғырйән имен уртала ҡала. Ахырызаманғаса шулай тымыҡ күлдә йәшәрмен тигән мут уй уға яңынан-яңы киҙәнеш өсөн дәрт бирә. Тик был уның үҙ-үҙенә һалған ау ғына. Мурҙа йәлдәүенә ингән сағында шамбы ла бит күл уртаһында кинәнеп йөҙөп барам, тип уйлай. Ләкин уны, күпме генә шыйғалаҡ булһа ла, айғолағынан һөйрәп ярға ырғыталар. Әҙәбиәттә лә, моғайын, шулай булыр, Каспий диңгеҙен ҡосаҡлап алдым тип тынсыу күләүек менән үҙ-үҙен алдап, мөрәхәтһенеп донъя көтөүселәр күҙҙәрен ҙурыраҡ асып, халыҡ теленең иҡһеҙ-сикһеҙ океан киңлегенә лә ҡараш ташлар, уның мәңгел тылсымлы шауына ҡолаҡ һалыр. Сөнки ошо залда ултырып беҙ тыңлаған, беҙ күтәргән, беҙ бәхәсләшкән мәсьәләләр фәҡәт беҙҙең һәр беребеҙгә генә, хатта башҡорт әҙәбиәтенә генә лә ҡайтып ҡалмай, ә бөтә совет әҙәбиәтенә лә ҡағыла, бөтәбеҙ өсөн уртаҡ улар. Беҙ беләбеҙ: яҙыусы ҡулланған һәр «яңы» һүҙ әҙәбиәттең ҡырҡ иләгенән иләнеп, ҡырҡ һелкеүесенән һелкелеп, үҙенең яйын, урынын, баһаһын табасаҡ, кәбәктәре елгә осасаҡ. Игендең иләккә ишелеп инеүе ҡаза түгел — инмәй ҡалыуы ҡаза. Былтырҙан биреле «Литературная газета»ла «Язык и время» рубрикаһы аҫтында бөйөк урыҫ теленең океанын һайыҡтырыусыларҙан ҡурсалап алып барылған ҡыҙыу дискуссия үҙе шуға ҙур дәлил. Евгений Винокуровтың шул гәзиттә быйыл 16 февралдә баҫылып сыҡҡан «Со словом шутки плохи» тигән мәҡәләһендәге ҡайбер борсоулы һүҙҙәре, моғайын, беҙгә лә ҡағыла.

«Я боюсь, — тип яҙа ул, — *как бы после нашей дискуссии о языке редакторы не взялись с новой силой выправлять стихи начинающих, не начали бы с еще большим*

рвением обстругивать молодых. Есть редакторы, которые до того «добросовестны», что не оставляют в стихах ни одного живого слова.

Лев Толстой писал о придирающихся критиках: «Они хотят, чтобы я стругал, а стружки не было».

Если все одухотворено большой мыслью, «стружка» не страшна».

Эйе, хаҡ һүҙҙәр: ҡоласы киң моряктарға ҡурҡыныс түгел океан! Улар барыбер күбектәрҙе ярып алға барасаҡ, төбәлгән ярға сығасаҡ. Тик быны өсөн һәр беребеҙ үҙенең заман яҙыусыһы булараҡ туған тел алдында йөкмәгән ауыр вазифаһын һуңғы сиккәсә еткереп аңларға, күңелендә ойоп ятҡан ғәмһеҙлеккә, наҙанлыҡҡа ҡаршы үлемесле яуға сығырға бурыслы. КПСС-тың XXIV съезындағы докладында Леонид Ильич Брежнев әйткәнсә, илдә бөгөн партия тарафынан ижади эш, емешле талпыныш өсөн нигеҙ була алырлыҡ эшлекле, тыныс политик климат тыуҙырыла; был климат, минеңсә, үҙе үк тел, әҙәбиәт мәсьәләһендә лә таяҡтың ике башына көс төшөрөүҙе юҡ итә, бөтәбеҙ өсөн өмөтлө тырыш хеҙмәт, дәрт, илһам сығанағы булып тора.

Йыһат Солтанов.

Өфө, 23 — 27.02.1972.

Әлбиттә, күренеп тора, Коммунистар партияһының һәм совет хөкүмәтенең илдә аҫтыртын үткәрелгән ваҡ милләттәрҙең телен бөтөрөү, урыҫлаштырыу сәйәсәтенә ҡаршы һәм уны Башҡортостанда үткәреүселәргә ҡаршы йәшерен баш күтәреү — «улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла» тип өндәшеү һымағыраҡ ине был. Сөнки ул ҡурҡыныс сәйәсәт шул тиклем дә тамыр йәйгән, хатта урамда транспорт туҡталыштарында башҡортса һөйләшеп торһаҡ, «ниңә былдырлайһығыҙ, ниңә урыҫса һөйләшмәйһегеҙ?» тип килеп бәйләнерҙәр ине; ә мин йәшәгән коммуналь фатир кухняһында: «Башҡорт бөтә икән — быйылдан башлап паспорттарына милләттәрен «урыҫ» тип яҙасаҡтар», — тигән хәбәрҙе кинәнеп тәкрарланылар...

Телмәрем артынса уҡ бик ҡабалан тәнәфес иғлан ҡылынып, президиумда ултырғандарҙың (КПСС өлкә комитеты секретаре Т.И. Ахунйәнов, әҙәбиәтебеҙҙең тере классигы Мостай Кәрим дә бар), ҡобаралары осоп, түрәләр бүлмәһенә ашығыс йүнәлеүҙәренән үк, ҡыйыш атып та тура тейҙереүемде, үҙем өсөн һөҙөмтәләре һис тә яҡшы булмаясағын шәйләнем. Йыйылыштың докладсыһы, партия ойошмабыҙҙың бюро секретаре Фәрит ағай Иҫәнғолов эргәмдән йөҙө томһорайып үтеп китте. Мин трибунанан төшөү менән үк, залдағы ҡәләмдәштәр, миңә тап булмаҫ өсөндөр инде, ташҡа бәрелгән терегөмөштәрҙәй, юлымдан сәсрәнеләр; әммә кеше күрмәгәндә килеп ҡулымды ҡыҫыусылар ҙа булды... Елкәм сымырҙап тойҙом: “һалҡын һуғыш” һулышы... Шомло тынсыу мөхиттән арынмаҡҡа, елтерәп ишек алдына сыҡтым, унда ҡорҙашым Рәми Ғарипов, ғәҙәтенсә, ҡуйы төтөн араһында тәмәке борлатып тора ине. Күҙендә йылылыҡ тойолмай: «Бынамын тигән памфлет бит был!» — тине лә ашығып китеп барҙы. «Совет Башҡортостаны» гәзитендә әҙәбиәт бүлеге мөдире булып эшләһә лә, ул да, башҡалар кеүек үк, ошо памфлетты ташҡа баҫып сығарырға тип, күңел өсөн генә булһа ла, ауыҙын да асманы — ҡулъяҙмала көйөнсә ҡалды ятып... Ишек алдында яңғыҙлыҡта бер аҙ тумбығып торғас, сығышымдың шомло һөҙөмтәләрен уйлай-

уйлай, яй ғына атлап ҡайтып киттем, алда нимәләр көткәнен һәм кем тарафынан көтөлгәнен яҡынса һиҙенә инем.

Редакциялағы реакциялар

Сүп өҫтөнә сүмәлә, тигәндәй, башҡорт әҙәби теле тураһындағы был «крамолалы» сығышымдан һуң дүрт ай үтер-үтмәҫтән, үҙ башыма үҙем теләп тағы ла бәлә алдым — «Ағиҙел»дең 6-нсы һанында Назар Нәжмиҙең яңы поэмаһына һәм «Ҡарҙар яуа» исемле шиғри йыйынтығына бағышланған «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» тигән ҙур ғына күләмле (бер табаҡлыҡ) мәҡәләм донъя күрҙе лә үҙемде яңы ҡойон эсендә ҡалдырҙы. Эш шунда: икеһе лә сағыу талантлы фронтовик шағирҙарыбыҙ Назар Нәжми һәм Мостай Кәрим араһында, бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай, тигәндәй, башҡорт шиғриәтендәге лидерлыҡ өсөн йәшерен көрәш барғаны, был аҫтыртын алышта тәүгеһе япа-яңғыҙы ҡалып, республика түрәләренә ныҡ яраҡлашҡан икенсеһе иһә үҙенең буйтлы сәйәси суҡмарын ышаныслы нөгәрҙәре — журналдың даими редколлегия ағзалары Муса Ғәли, Ғилемдар Рамазанов, Ғайса Хөсәйенов, Рафаэль Сафиндар ҡулы менән «ҡундырыуы», шул арҡала Назар Нәжми ижадына «Ағиҙел»дә һәр төрлө кәртәләр ҡоролоуы редакцияла эшләгәндәрҙең береһенә лә сер түгел ине. Был хәрәкәт баш редактор Мирзаһитовты алмаштырған йәштәшем Рәйес Низамов заманында ла һүрелмәй дауамланды, шуны дәлилләүсе итеп ошо урында Назар Нәжмиҙең редакцияға атҡарған бер нисә дана рәсми хатын килтерәм (бер ҡайҙа ла ташҡа баҫылмағандар):

1. «Агиҙел» журналының редакторы иптәш Рәйес Низамовҡа.

Уҙган йылдың декабрь урталарында, тейешле сотрудниктарыгыҙҙың урынында булмауы гына сәбәпле, «Һәр нәмәлә шигыр ята» тигән циклымды үҙегеҙгә тапшыргайным. Шул көндән һуң биш ай ваҡыт үтеп бара.

Март урталарында журналдың шигриәт бүлеген алып барган һеҙҙең сотрудник иптәш Абдулхаҡ Игебаев менән шигырҙар тураһында һөйләшеү булды. Һөйләшеү ваҡытында иптәш Игебаев: «Шигырҙар минән үттеләр, ләкин редколлегияла шундай фекерҙәр булды», — тип, шигырҙарым тураһында замечаниеларын әйтте.

Был һөйләшеүҙәргә тиклем Мостай Кәрим дә, редколлегия агзаһы буларак, журналдың һорауы буйынса укып сыҡҡан икән. Ул ҡайһы бер һүҙҙәрҙе алмаштырганын һәм «Ҡайҙа барырга?» тигән шигырга бер-ике позитив строфа өҫтәү теләген белдерҙе. Уның теләге тураһында мин уйланым һәм ундай теләктең шигырга сит тән (ятбауыр) булып инәсәген Мостай Кәримгә иҫбат иттем.

А. Игебаев иптәш менән һөйләшкән саҡта ла уның шигырга булган ҡайһы бер замечаниелары ышандыра алманы. Шулай булгас, мин: «Шигырҙар, үҙегеҙҙең әйтеүегеҙгә ҡараганда, һеҙҙән үткән икән, редколлегияның фекере тураһында башҡалар, һуңгы һүҙҙе әйтә торган кешеләр, һөйләшһен», — тинем. Шунан һуң Абдулхаҡ Игебаев өс тапҡыр өйгә шылтыратҡан (игтибары өсөн уга ҙур рәхмәт) һәм: «Шигырҙар тураһында

һөйләшергә ине», — тигән. Тимәк, мин тағы Игебаев менән һөйләшергә тейеш булам дабаһа.

Шиғырҙарҙы, гөмүмән, әҙәби әҫәрҙәрҙе, төп ике осраҡта: 1) ул әҙәби әҫәр булыуҙан алыҫ торһа; 2) үҙенең идея сатаҡлыҡтары арҡаһында беҙҙең ысынбарлыҡ өсөн зарарлы булһа, баҫырға мөмкин түгел.

Ул журналда мин дә эшләп киткән кеше. Бынан 24 йыл элек һеҙ ҙә, Игебаев та тәүге әҫәрҙәрегеҙҙе килтерә инегеҙ. Шул әҫәрҙәрҙе, бик йомшаҡ һәм өйрәнсек булыуҙары арҡаһында, бик оҙаҡҡа һуҙмайынса, яңынан эшләп, баҫып сығарыу хәленә килтерергә тура килә ине. Журнал эшендә ундай хәлдәр йыш осрай. 24 йыл эсендә һеҙ ҙә, берегеҙ яҙыусы, берегеҙ шағир булып, кешеләргә ярҙам итерлек, шул иҫәптән минең шиғырҙарҙы ла баҫып сығарырлыҡ хәлгә килтерерлек кимәлгә күтәрелгәнһегеҙҙер, тип уйлайым.

Әгәр ҙә биш ай буйы уларҙы бер ни ҙә эшләтә алмаһағыҙ (редакция шиғырҙар менән бик тулмағандыр, минең шиғырҙарҙы ла ҡарап сығырға ваҡытығыҙ булғандыр, тип уйлайым), шул «бер ни ҙә эшләтә алмауығыҙ»ҙың сәбәптәрен хат аша (телефон аша йәки өҫтәл янында һөйләшеүҙе кәрәк тапмайым) яҙып ебәреүегеҙҙе, зинһар, түбәнселек итеп һанамағыҙ.

Сәләм менән: ***Назар Нәжми.*** *8 апрель 1974 йыл.*

Күп тапҡырҙар «атылған ҡарт бүре» төп сәбәптең ниҙән һәм кемдән торғанлығын белә, әлбиттә, тик шуны редакция хеҙмәткәрҙәренән рәсми рәүештә атап әйттертергә теләй. Әммә... суҡмарсының исем-шәрифен асып һалырға уларҙың да башы ике түгел бит...

2. ***«Ағиҙел» журналы редакторы иптәш Р. Низамовҡа.***

Рәйес ҡустым!

Үҙган йылдың декабрь айында уҡ һеҙгә бирелгән шиғырҙарымдың ни өсөн баҫылмауҙары тураһында һорап, ошо йылдың апрель башында яҙған минең хатыма быға тиклем бер ауыҙ һүҙ ҙә яҙмауығыҙҙы бер нисек тә аңлатып булмай.

Минең һеҙгә хат яҙғаныма тиклем үк, шиғырҙарым редколлегияла ике тапҡыр тикшерелгән икән дә шунан һуң да, кем тура килә шунан шиғырҙар тураһында фекер һорап, үҙегеҙҙең шикләнеүҙәрегеҙҙе белдергәнһегеҙ икән. Һеҙҙең әҙип һәм кеше буларак, шулай уҡ редактор буларак та иң башта үҙ фекерегеҙ, үҙ инаныуығыҙ булырға тейеш түгелме һуң? Унан һуң алты ай буйына шул тиклем шикләнеп ҡарарға, мин башҡорт поэзияһының шундай намыҫын юғалтҡан шағирына, уның бер ҡараҫкыһына әйләндемме ни? Был ҡыланышығыҙ мине бик нык йәберләне. Артабан да йәберләнеүҙәрҙән үҙ-үҙемде яҡлап алып ҡалыу өсөн берҙән-бер сарам ҡалды — шиғырҙарымды кире алырға мәжбүрмен.

Назар Нәжми. *7.06.1974.*

3. ***«Ағиҙел» журналы редакторы иптәш Р. Низамовҡа.***

Рәйес ҡустым!

Мин һеҙгә икенсе хат яҙып (7.06.1974), шиғырҙарымды редакциянан кире алыуым тураһында хәбәр иткәйнем һәм һеҙҙең ул хатты уҡығанығыҙҙы беләм. Мин ысынлап та шиғырҙарымды кире алдым, ләкин, ни эшләптер, уларҙы (ниндәйҙер экземпляры ҡалғандыр, ахыры) 28 июнь көндө редакцияла тағы тикшергәнһегеҙ һәм «Ҡайҙа

барырға?», «Имән» тигән шиғырҙарҙы шәлкемдән алып ташлап, 10-ынсы номерға баҫырға хәл иткәнһегеҙ икән.

Шәлкемде һеҙҙең журналда баҫтырыуҙан ошо хатым менән, официаль рәүештә, баш тартам һәм, авторлыҡ хоҡуғымдан файҙаланып, улар менән минән башҡа шундай мөғәләмә итеүҙе тыям.

Ишетеүемсә, минең беренсе хатыма яуап яҙырға ла (Мостай тәкдиме буйынса) булғанһығыҙ икән, ләкин бынан һуң инде ул хаттың да әһәмиәте-хаҡы тишекле бер тин икәнлеге үҙенән-үҙе асыҡ.

Һеҙ редакторлаған осорҙа журналда башҡаса художество әҫәрҙәре тәкдим итмәҫкә вәғәҙә бирәм һәм шул уҡ ваҡытта быйылғы йылда ике генә үтенесемде үтәүегеҙҙе һорайым: апрель айында журналға «Кем уйлаған?» тигән автобиографик уйланыуҙарымды һәм уҙған ай башында якут шағиры Михаил Тимофеев шиғырҙарының тәржемәләрен тәкдим иткәйнем. Беренсеһе журналдың яртылаш тәкдиме менән эшләнгән эш һәм эстәлеге менән минең өсөн (бәлки, минең өсөн генә лә түгелдер) бик мөкәддәс әйберҙәр тураһында яҙылғанға һәм, башҡорт шағиры булараҡ, фәкәт үҙебеҙҙә генә баҫтырырға мөмкин булғанға күрә, ҡарап сыҡһағыҙ, баҫырға мөмкин тигән хәлдә оҡшамаған урындары булһа (уның бер-ике урында булыуы бик мөмкин), редколлегия ултырышына саҡырһағыҙ ине.

Икенсеһе тураһында, А. Игебаев менән һөйләшкәндән һуң, «Ағиҙел»дә баҫыласаҡ, тигән хәбәрҙе авторына ебәреп, фотоһүрәтен дә һораткайным. Уны кире ҡағыу минең өсөн түгел, ә автор өсөн күңелһеҙ булыр, тип уйлайым.

Назар Нәжми. *1 июль 1974 йыл.*

Әммә-ләкин ул заманда, ҡайһындай ғына талантлы һәм исемле әҙип булһаң да, елгә ҡаршы төкөрөп йәки маңлай менән таш ярып булмай ине шул: шағирыбыҙ ҙа редколлегия ағзаларының ҡаршылығын улар ҡуйған талаптарҙың бер килкеһен ҡабул ҡылыу юлы менән ашатлап үтергә тырыша:

4. ***Рәйес ҡусты!***

Бына сәғәт ярымдан яңы йыл башлана, ә мин һиңә ошо хатты яҙып ултырам. Редколлегия ағзалары яҙған фекерҙәр менән бергә кире ҡайтарылған ҡулъяҙмамды бөгөн алдым. Уны Яңы йыл алдынан, байрам алдынан юрый ебәргәндәй, ебәрмәһәгеҙ һәйбәтерәк булыр ине лә; ләкин мин, барыбер, байрам итмәй, ауырып постелдә ята инем. Шул килеш бөтәһен дә ентекләп бер нисә тапҡыр уҡып (шул иҫәптән ҡулъяҙмамды ла) сыҡтым.

Минең уйымса, редколлегия ағзалары яҡшы ниәттән сығып, бик диҡҡәт менән уҡығандар, күптәренең фекерҙәре үҙемдең икеләнеүҙәрем һәм шикләнеүҙәремә тура килә. Уны яҙғанға бер айҙан теүәл бер йыл тула һәм ул ваҡыттағы минең йәнемдең ниндәй хәлдә булыуын бик иғтибар менән уҡыусы кеше аңларға ла мөмкин ине (редколлегия ағзаларын әйтәм). Бына хәҙер йөрәк әҙерәк урынына ултырғас, әле редколлегия ағзалары күҙенә салынмаған сатаҡлыҡтар ярылып ята. Мин, әлбиттә, ҡарап сығасаҡмын.

Шул ғына күңелдә төйөр ҡалдырҙы: минең алда ғына түгел, хатта башлап яҙыусылар араһында ла ижади авторитеты булмаған Ғ. Рамазановтан (һинең өсөн,

бәлки, авторитеттыр) уҡытмаҫҡа ла мөмкин ине. Үҙегеҙ ҙә күргәнһегеҙҙер, ул үтә асыулы (раздраженный), фекерҙәрен һис төрлө лә нормаль тип иҫәпләп булмай. Ни эшләйһең инде — һәр кемдең үҙ фажиғәһе булмайынса булмай. Уның фамилияһын индереү (ифрат хәҡиҡәт булһа ла) минең тарафтан йомшаҡлыҡ булғандыр. Мин уны (шул урынды) бер кем әйтмәгәндә лә алып ташлар инем.

Иң оҙон яҙғаны һәм фәлсәфә һатҡаны — М. Ғәли. Уның ҡайһы бер фекерҙәренә ҡолаҡ һаласаҡмын. Ләкин миңә ни эшләргә? Минең шәхесемде йәберләүгә (оскорбление) тиклем барып еткән урындар һәм фекерҙәр хаҡында ҡайҙа һөйләшергә? Уны редколлегия рамкаһында хәл итеп буламы? Шул турала, бәлки, яҙып та ебәрерһегеҙ? Үтенесем шул.

Шул тиклем оҙаҡҡа һуҙғанығыҙ өсөн үпкәм бик ҙур. Уны бынан биш-алты ай элек тә ҡайтарып була ине бит.

Сәләм менән: ***Назар Нәжми.*** *31.12.1974.*

Күренекле шағирыбыҙҙың сағыу ижадына ҡарата бына ошондай яһалма тотҡарлыҡтар, рәнйетеүҙәр булғанда, башҡаларға ниндәй һан инде!.. Шуларҙы күрә-йөрөй тороп, үҙ намыҫым ҡушыуынса, шағир яҡлы булмайынса ҡала алманым ләкин һәм, әйтеп үтеүемсә, «Ағиҙел»дә баяғы ҙур мәҡәләмде сығарыуға өлгәштем. Шуның ҡыуанысынан алйып йөрөп, тигәндәй, уны-быны белештермәй йәмле йәйҙе лә үткәргәс, көтмәгәндә, көҙгө болотһоҙ бер көндә баш осомда тертләтеп күк күкрәне: КПСС-тың өлкә комитеты секретаре Т.И. Ахунйәновҡа минең өҫтән ғәрәсәтле ялыу яҙған бер бәндә. Етәкселәребеҙҙе (Мирзаһитов, Низамов, Ибраһимов) Т.И. Ахунйәнов бүлмәһенә дәррәү саҡыртып алып, «ниндәйҙер Йыһат Солтановтың ылғый милләтсел рухлы һәм эстәлеге үтә шикле мәҡәләһен» ташҡа баҫып сығарғандары өсөн бик ныҡ «бешкәндәр». Өлкә комитетына был мәкерле ялыуҙы, йәштәшем Рәйес Низамовтың миңә сер итеп кенә тишеүенсә, «күренекле шағир, ғалим, журналдың редколлегия ағзаһы Ғилемдар Рамазанов яҙған»; сәйәси ғәйепләүенән тыш, ул хатта минең мәҡәләләләге бер нисә тапҡыр ҡабатланмыш *«асыл»* (сущность) һүҙенә лә, уның артында урындағы юғары хакимиәткә ҡаршы йәшерен мәғәнә тойоп, бик ҡаты бәйләнгән икән. Мәсьәләнең сәйәси яғы әһелдәргә асыҡ булғанғалыр инде, үҙемде тик бер йүнәлеш буйынса — баяғы серле һәм сетерекле һүҙ «асыл»дың «крамола» асылын асырға саҡырттылар, буғай: быны минән өгөт-нәсихәт бүлеге инструкторы Биктимеров иптәш бик оҙаҡ һәм бик ныҡлап ныҡып төпсөндө. Быға яуап итеп әҙәби тел нормалары тураһында «Правда» гәзитенең 1972 йыл 9 октябрь һанындағы «Любить, беречь, знать» тигән мәҡәләһен күрһәткәс (һүҙҙең ни хаҡта барырын киҫәткәйне бер иптәш) һәм: «Әгәр авторҙың идея позицияһы дөрөҫ булһа, айырым һүҙҙәренә бәйләнеү — наҙанлыҡ йә ахмаҡлыҡ билдәһе ул», — тип нәҡ «Правда»лағыса ныҡып аңлатҡас, йөҙө ҡапыл бурҙатланған түрәм гәзитте тотоп та ҡараманы, ләкин: «Нимә тора ул «асыл» тигән һүҙеңдең аслан артында?» — тип үҙ сиратында ныҡыны. «Тыуған иленде, туған халҡыңды, туған телеңде һөйөү — йәғни ысын совет патриотизмы», — тигәс, өндәшмәй, китергә мөмкинлекте белдереп ҡул һелтәне.

Шуның менән осланды, тип еңел һулап йөрөүем бушҡа булды, сөнки киләһе 1973 йылдың 1-енсе һанында уҡ үҙем баш баҫып эшләгән «Ағиҙел»ебеҙҙә

баш редакторыбыҙ Әсғәт Мирзаһитовтың Йыһат Солтановҡа туранан-тура ҡағылышлы баш мәҡәләһе баҫылып сыҡты. КПСС Үҙәк Комитетының «Әҙәби-сәнғәт тәнҡите тураһында»ғы ҡарарына яуап итеп, *«журнал биттәрендә тәнҡит материалдарына киңерәк урын бирелә башланы, — тип әйтелгәйне унда. — Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әҙәби тәнҡиттең идея-теоретик сифатын күтәреү әлегә хәл ителеп бөтмәгән мәсьәлә булып тора.* ***Фәнни йәһәттән бәхәсле, социаль-синфи характеристикаһы төҫһөҙ һәм буталсыҡ мәҡәләләрҙең (Йыһат Солтанов. «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр».*** *«Агиҙел» журналы, 1972 йыл, 6-нсы һан)* ***баҫылып сығыу факты шуның менән аңлатыла».*** Ләкин күҫәгенең еле бының менән генә лә осланманы — рәсми органдар тарафынан Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының сектор мөдире, партия өлкә комитетының элекке әүҙем хеҙмәткәре Нур Зариповҡа әҙәби тәнҡитебеҙҙең бөгөнгө торошон, уңыштарын һәм етешһеҙлектәрен асыҡ билдәләп, баяғы Йыһат Солтановтың тәнҡиттәге зарарлы ҡылығын сәйәси һәм ғилми яҡтан нигеҙләп фашлау, зарарһыҙландырыу бурысы махсус йөкмәтелгән икән -- ҙур күләмле мәҡәләһенең өстән бер өлөшө фәҡәт шул бурысты үтәүгә сарыф ителеү ҙә асыҡ һөйләйҙер быны...

Заманаһының әҙәбиәтебеҙгә тоталитар режим идеологияһы һулышын өрөүсе өлгөлө бер әҙәби-сәйәси ҡомартҡыһы буларак, шул бер өлөшөн килтереп үтеү фарыздыр.

«Әҙәби тәнҡиттә иң алама күренеш, — тип билдәләй ғалимыбыҙ, — *тәнҡитсенең субъектив бер яҡлылылығы, әҙәби әҫәрҙе баһалауҙа ниндәйҙер тар ҡараштан сығып ҡына эш итеүе. Ошоноң гәҙәттән тыш бер миҫалын мин былтыр «Агиҙел» журналының 6-нсы һанында баҫылған Йыһат Солтановтың «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» тигән мәҡәләһендә күрәм. Был мәҡәлә... үҙенең предметына ла, сәнғәт закондарына ла, яңы талаптарға ла битараф түгел түгелен. Асылда Назар Нәжмиҙең «Дуҫ тураһында ун бер йыр» тигән лирик поэмаһына ҡарата яҙылһа ла, уның төп объекты ошо бер әҫәргә генә лә ҡайтып ҡалмай. Солтанов, Н. Нәжмиҙең «Ҡарҙар яуа» тигән китабына таянып, шағирҙың үҙенсәлекле поэтик таланты хаҡында уйлана.*

Мәҡәлә бер поэтик асыш менән башлана, шуның менән уҡыусының күңелен баштан уҡ үҙенә ылыҡтыра. «Ҡурайсылар иле» Йәнсура районында шиғыр байрамында булған бер хәлде яҙа автор. Байрамға килгән шағирҙар иртән йоҡонан уяныуға хужа «бер ҡосаҡ һуйҙан ҡурай» күтәреп инә. Инә лә бәйләмдән көпшәләрҙе берәм-берәм алып тарта башлай. Бер үк көйҙөң төрлө көпшәнән төрлөсә сығыуын ишетеп, тыңлаусылар хайран ҡала. «Бер үк сағыл башында үҫкән бер үк оҙонлоҡтағы таҡыябаш ҡурайҙарҙың һәр ҡайһыһының тик үҙенә генә тартым сихри моңо бар ине. Бәйләмдәге ахырғы ҡурай барыбыҙҙы ла әсир итте, уйға ҡалдырҙы», — ти автор.

Тап ана шул һуңғы ҡурай һүҙ барасаҡ шағир ижадына аһәңдәш йәнәшәлек — ассоциатив образ итеп алына, тәнҡитсенең шиғриәт донъяһына юл башы булып тора.

Һүҙ юҡ, уңышлы башлам. Ысынлап та Назар Нәжмиҙең башҡаларҙа ҡабатланмаҫ үҙ тауышы, үҙ моңо бар. Мәҡәләнең маҡсаты — ана шул үҙенсәлекле поэтик тауыштың төп мәғәнәһен, идея-эстетик айышын, авторса әйткәндә, **асылын** *табыу, шуны уҡыусыларға еткереү. Күренеп тора, маҡсат һис шикһеҙ изгелекле.*

Ләкин тәнҡитсе, үҙе лә нескә күңелле шағир булғанга микән, баштан уҡ хистәргә бирелеп, оло шағирҙың бай ижадына бары теге нәҙек ҡурай көпшәһенән ҡарарға тотона.

Назар әҫәрҙәрендәге унһыҙ ҙа нескә ҡылдарҙы тәнҡитсе шул саҡлы нескәртеп ебәрә, улар инде, үтә нык тартыуҙан шартлап өҙөлөр сиккә етеп, йөрәк әрнеткес гел бер төрлө моң-зар, ысынлап та нәҙек ҡурайҙан сыҡҡан әсе тауыш һымаҡ яңғырай башлайҙар. Һөҙөмтәлә күп ҡырлы, күп ҡыллы Назар Нәжми поэзияһының асылы башлыса бер нотаға — шағир күңеленең ниндәй сәбәптәндер үтә нескәргән бер мәлен, ҡаршылыҡлы кисерештәрен сағылдырған «Ҡарҙар яуа» шиғырына ҡайтарып ҡалдырыла. Шуныһы гәжәп, был шиғырҙа асылған моңло япраҡтарҙың «күҙгә күренер бөрөһө булып йомарлана башлауын» мәҡәлә авторы шағирҙың «Ике һыбай» тигән шиғырында күрә. «Шағир зиһенен ике тарихи шәхестең (йәғни Петр I менән Салауат Юлаевтың. — Н.З.) халыҡ аңындағы һәм бронзалағы монументаль бөйөклөгө арбап биләй, уны яңы асышҡа әйҙәй, — ти тәнҡитсе һәм, шиғырҙан өҙөк килтергәндән һуң, шулай дауам итә: — *Беҙҙең алда үҙенең арҙаҡлыһын, йән әсеһен быуаттарҙың рәхимһеҙ елдәре аша именлек фатихаһы һыбайлатып алға сығарыр ике көстөң, ике титандың барлығы бермә-бер беленде — бөрө йомарланды...»*

Цитатаны өҙөп, фекерҙе асыҡлап үтәйек. Тәнҡитсенең әйтергә теләгәне — шағир ижадында «йомарланған бөрө» — донъяла ике көс, ике титандың йәшәүе. Уларҙың береһе батша булһа, икенсеһе — халыҡ иркен яулап, батшаларға ҡаршы барыр Салауатише батырҙар. Ярайһы, мәғәнәле фекер. Ләкин тәнҡитсе туҡталып ҡалмай, әҫәргә бәйләнеше булмаған, тәтәй һүҙҙәргә төрөп өс һорау ҡуя. Береһендә постаментҡа баҫтырылған ҡайһы һыбайлы — Петр I-енсеме, әллә Салауатмы — «киләсәклерәк» булыуын, икенсеһендә ҡайһы титан киләсәк өсөн «түтә юлдарын түшәп, киң офоҡ ҡапҡаларын» асып ҡалдырыуын, өсөнсөһөндә «бәндәләрҙең хакимдары — тере батшалар үҙҙәре изге фатиха биреп баҡыр атҡа атландырған, баҡыр көптә мәңгеләштерелгән «батшаларҙан да юғары» ҡалҡыныуҙың мәғәнәһе, һуңғы **Асылы** *нимәлә» булыуын һорай. (Солтанов «асыл» һүҙен һәр урында баш хәреф менән яҙа).*

Мәҡәлә авторы был һорауҙарға яуап биреүҙе кәрәкле һанамай, әммә уның тел төбөн аңлауы ҡыйын түгел. Беренсе һәм икенсе һорауҙарында автор, әлбиттә, ***Салауатты Петр Беренсенән өҫтөн ҡуймаҡсы****. Ләкин мәсьәләгә тарихи күҙлектән ҡарайбыҙ икән, бер-береһенә нисбәттәш булмаған Петр менән Салауатты сағыштырыу, төрлө дәүерҙә йәшәп, төрлө яҫылыҡта дан ҡаҙанған был тарихи шәхестәрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу — үҙе үк ҙур хата, уларҙың һәр ҡайһыһының үҙенә башҡа ҙур тарихи хеҙмәттәре булғанлығын танымау тигән һүҙ. Был инде тарихҡа* ***марксистик фәнни методологиянан*** *түгел, ә әлеге-баяғы* ***таҡыябаш ҡурай*** *көпшәһе аша ҡарау бәләһе генә.*

Өсөнсө һорауҙың айышын мәҡәләләге бирелеш формаһында тиҙ генә аңларлыҡ түгел. Һүҙ бында, әлбиттә, шул уҡ Салауат батыр тураһында бара. Ләкин тәнҡитсе уның үҙ ваҡытында башҡарған эштәренең тарихи мәғәнәһен түгел (уныһы инде һәр кемгә билдәле), ә уның «һуңғы асылын», йәғни, шиғырҙа әйтелгәнсә, «Иҙел ярында батшаларҙан да юғары» баҫҡан һыбайлының мәғәнәһен һорай. Әлбиттә, беҙ, Салауат һәйкәленә шиғырҙа бирелгән поэтик характеристиканан ситкә тайпылмайынса, был мөһәбәт һәйкәлдең мәғәнәһен, халыҡтың азатлыҡ юлында ҡорбан булған ҡаһарман улдарына бөгөнгө хөрмәте, тәрән ихтирамы, уларҙың ил ҡаршыһындағы батырлыҡтарын мәңгеләштерергә теләүе ул, тип кенә аңлатыр инек. Ләкин тәнҡитсе башҡасараҡ яуап көтә кеүек. Уйын метафораларға төрөп, ул дауам итә: «Шағир бына

ни хаҡта өҙәләнә. Тынғы белмәҫ йырсы йөрәгенең иң түренә инеп йомолған бөрө, асылыу сәбәптәрен кисереп, йән ярғыс елдәр һорай. Ҡай саҡ шағирға был бөрө елдәре мәңге иҫмәҫ, япраҡ ярылмаҫ, яҙҙы көтмәйенсә үк зәһәр ҡыш биләп алыр төҫлө тойола».

Был зәһәр юлдарҙы уҡығас, авторҙан һорамайынса һис булмай: Шағирҙы шул саҡлы «өҙәләндергән» нимә һуң ул? Ниңә ул бөрөләрҙең асылыуы өсөн, шул ҡәҙәр «йән ярғыс елдәр» кәрәк, ниндәй елдәр улар?

Әлбиттә, тәнҡитсе быларҙы асыҡлап тормай, әйткән фекерҙәрен артабан шағирҙың «Ҡарҙар яуа» шиғыры менән раҫларға тырыша. Ләкин «Ҡарҙар яуа» тәнҡитсе уйҙарын һис кенә лә раҫламай. Әйтеп үткәнебеҙсә, был әҫәр шағир күңеленең бер моңһоу мәлен, асығыраҡ әйткәндә, ғүмер уҙыуға бәйле булған эске кисерештәрен генә сағылдыра:

> *О, миндә лә ҡарҙар яуа,*
> *Яуа ҡарҙар — йылдар ҡары.*
> *Ғүмер тигән урманымда*
> *Ҡойола ағас япраҡтары.*

Быңдай кисерештәр — һәр кемдә була торған тәбиғи кисерештәр. Әммә Солтанов был хаҡта уйланып тормай, Нәжми ижадына иҫ китерлек операция яһай. Үҙ күңелендә тыуған «Асыл»ға яраҡлаштырып, шағирҙың төрлө шиғырҙарынан айырым строфаларын йолҡоп ала ла яңы композиция төҙөй: «Ҡарҙар яуа» шиғырына — «Ниндәй хәл был?..» тип башланған шиғырынан беренсе строфаһын:

> *Ниндәй хәл был?*
> *О көндән-көн*
> *Ҡайғы баҫа мине,*
> *Тиҫкәре яҡтан иҫәме*
> *Әллә заман еле?..*

һәм уныһына «Мин дә ҡалам...» тигән шиғырының урта еренән:

> *Моңһоҙ ҡоштар! Һеҙҙең менән бергә*
> *Мин дә ҡалам — китер ерем юҡ.*
> *Минең дә бар осор ҡанаттарым,*
> *Ләкин ташлап китер ерем юҡ.*
>
> *Булмаһын да! Ә бит ер ни күрһә,*
> *Беҙгә яҙған шуны күрергә.*
> *Беҙгә яҙған ошо ерҙә тыуып,*
> *Ошо ерҙә йәшәп үлергә, —*

тигән ике строфаһын килтереп ялғай. Ялғай ҙа (ана шулай! тигәндәй) «йөрәк йыртып өндәшергә мәжбүр шағир», тип ҡуя. Һәм, ниһәйәт, композиция тәнҡитсенең шундай нарығы менән ослана: «Ул (йәғни Н. Нәжми. — Н.З.) эсендә нимә бар — шуны һөйләй, йөрәген һыҙлатҡан хистәрҙе зирәк уҡыусы менән уртаҡлаша. Һәм уҡыусы уны аңлай».

Юҡ, аңламай һәм аңларлыҡ та түгел был. Сөнки Солтанов композицияһында беҙҙең бай рухлы хөрмәтле шағирыбыҙ үҙенең күп ҡырлы поэтик һынында түгел, ә, салыш көҙгөләге һымаҡ, гәҙәттән тыш салшайтылған ҡиәфәттә, хәҙерге тормоштан йәм тапмайынса төңөлгән, төшөнкөлөккә бирелгән пессимист шағир ҡиәфәтендә күҙ алдына баҫтырыла. Юҡ, юҡ, Назар Нәжми — «Ҡапҡалар», «Йыр тураһында баллада», «Байраҡ менән һөйләшеү», «Дуҫ тураһында ун бер йыр» һәм «Күлдәк» кеүек мәшһүр

поэмаларҙың, меңәрләгән уҡыусыларҙың күңел түрендә урын алған тәрән йөкмәткеле нәфис шиғырҙарҙың авторы ундай түгел! Республикабыҙҙың иң юғары бүләге Салауат премияһы менән бүләкләнгән «Ҡарҙар яуа» китабында ла беҙ, Солтанов уйлағанса, «тынғы белмәҫ йырсы йөрәгенең иң түренә инеп йомолған» бөрөләрҙең, «асылыу сәбәптәрен кисереп, йән ярғыс елдәр» көтөүен дә, шағирҙың үҙ уҡыусыларына «йөрәк йыртып» өндәшеүен дә, «йөрәген һыҙлатҡан» хистәрҙе лә күрмәйбеҙ. Әгәр һарыҡ түшкәһен балта менән тураҡлаған һымаҡ, поэтик контексты ла ваҡлап, өҙөп-йолҡоп алмаһаң, ундай ғәҙәттән тыш әсе тауыш Солтанов композицияһына ингән шиғырҙарҙа ла һис һиҙелмәй. Ул шиғырҙарҙың мәғәнәһен тәнҡитсенең прозаик теленә күсереп бер һүҙ йәки хатта шиғырҙың үҙенең теге йәки был строфаһы менән генә лә әйтеп еткереп булмай. Уларҙың тәрән поэтик мәғәнәһен, нәфислеген тотошлай алғанда ғына тойорға һәм дөрөҫ аңларға мөмкин.

Солтанов мәҡәләһендә Н. Нәжми ижадының партиялылығын «аңлатыуы» шулай уҡ ғәҙәттән тыш субъектив характерҙа.

«Назар Нәжми поэзияһына ла бына ошо «бер бөтөн»лөк, икенсе һүҙ менән әйткәндә, баштан-аяҡ партиялылыҡ тойғоһо хас, — ти тәнҡитсе һәм дауам итә. — Ләкин ул үҙенең партиялы поэзияһын, лирик шағир буларак, бүтәндәрҙекенә оҡшамағанырак, шөйлә нескәрәк һәм нәзәкәтлерәк үҙ ҡурайы менән раҫлай. Ысын затлы ҡурай моңон яндан көйәҫләп иҫкән елдәр түгел, ә көпшәнең урта-үҙәген буйлатып өргән тыуған ерҙең утлы һулышы үҙе тарта үҙәкте өҙгөс итеп».

Күрегеҙсе, ҡурай моңона бәйләп, йәнә күпме метафора, ни саҡлы кинәйәле образдар: «яндан көйәҫләп иҫкән елдәр» һәм шул елдәргә ҡаршы — «тыуған ерҙең утлы һулышы»! Нисек аңларға инде уларҙы?

Үҙ ижадындағы изге һәм шул уҡ ваҡытта бөтә ысын совет шағирҙарыныҡынан принципиаль айырылмаған партиялылыҡ тойғоһон шул ҡәҙәр «нәзәкәтләндереүгә» Н. Нәжми нисек ҡарай торғандыр, уныһы беҙгә мәғлүм түгел. Әммә бында бөтә ҡатғилығында шуны әйтмәй сара юҡ: партиялылыҡ — яҙыусыларға ғына түгел, ә бөтә совет халҡына, үҙенең граждандыҡ бурысын, социаль яуаплылығын тәрән аңлаған һәр совет кешеһенә ***уртаҡ*** *тойғо, коммунизм идеалдарына тоғро хеҙмәт итеү теләге. Шуға күрә, инде ярты быуаттан ашыу ең һыҙғанып, бөтә Рәсәй халҡы менән бер төптән, бөгөн коммунизмдың нигеҙ таштарын һалыусы башҡорттарҙың ҡайнар һулышын прогрессив кешелектең яҡты идеалдарына ыңғай иҫеүсе заман елдәренә ҡаршы ҡуйыу — төптө хата.*

Килтерелгән факттарҙың мәҡәләләге бирелешендә эҙлекле рәүештә үҫтерелә килгән тығыҙ бәйләнеш һиҙелеп торһа ла, мин уларҙы, әлбиттә, авторҙың нимәгәлер иҫәп тотоп, алдан уйланған ниндәйҙер идеологик концепцияһы тип һанарға теләмәйем. Улар — һәйбәт шағир, әммә әҙәби тәнҡит өлкәһендә тәжрибәһе етешмәгән Солтановтың артыҡ хистәргә бирелеп эш итеүе, ҡатмарлы мәсьәләләргә үтә бер яҡлы, тар ҡарашы арҡаһында килеп сыҡҡан аймылышыуҙыр тип кенә уйлайым.

Мәҡәләгә шул саҡлы ентекләп туҡталғанбыҙ икән, был, беренсенән, бер Солтановты ғына түгел, ә башҡа таланттарҙы ла артабан хата юлға төшөп китеүҙән һаҡлау, иптәштәрсә ихлас күңелдән иҫкәртеү өсөн кәрәк булһа, икенсенән, беҙҙең редакцияларҙа авторҙар менән эштең әлегәсә тейешле юғарылыҡҡа ҡуйылмауын, принципиаль талапсанлыҡ етешмәүен күрһәтеү өсөн эшләнде».

Был «иптәштәрсә» киҫәтеүҙең мәғәнәһен тылҡып тороуҙың кәрәге юҡтыр, моғайын...

Шуныһы серле һәм ҡыҙыҡ: ошо оло тәнҡиткә осрамыш мәҡәләмдән күпкә һуңыраҡ — йәғни йыл аҙағындараҡ, дуҫым Рәми Ғарипов та минең «тайғаҡ юл»ға баҫты ла ҡуйҙы — баяғы Н. Зарипов ҡамсылауына эләккән минең Салауат һәм Петр I һәйкәлдәрен «сағыштырыуым» менән бер үк аһәңле лә, яңғырашлы ла «Салауат батыр» тигән шиғырын яҙып, уны телевидениеның тура эфирында уҡып, ғауғалы тарихҡа тарыны. Рәмигә хас булмаған был ялҡытҡыс оҙон шиғыр ҙа, Рәмиҙең күпселек «сәйәси» шиғырҙары кеүек үк, әҙәбиәттең социалистик реализм ҡанундарына ныҡ тура килтереп һәм совет хакимиәтен данлап йырлауға ҡоролһа ла, ленинизм идеяларын ел иҫмәҫе борон уҡ елдән ҡурсаларға күнеккән рәсми әһелдәрҙе уның ни бары ике юлы ғына һиҫкәндертеп сығырынан сығарҙы:

«Батшаларга башын эймәгәнде,
Башҡаларга башҡорт баш эймәҫ!»

Авторҙың шул «башҡалар» тигәненән, әгәр ҙә теләгең булһа, замананың телдән төшмәгән «океан аръяғы империалистары»н да, шулай уҡ Рәми үҙе «Ахун таяғы» тип атаған һәм уға һөнәре буйынса эш бирҙертмәй йөҙәткән республикабыҙ күләмендәге бер фирҡәле етәксене лә, һәм, әлбиттә, хатта Кремлдекен дә тоҫмалларға мөмкин ине — әһелдәрҙе ана шул өркөттө лә. Мәҙәниәтебеҙ тарихындағы был эпизод төрлөсә боҙоп һөйләүҙәргә дусар ителгәнлектән, ҡырыҫ документ теле менән сикләйек:

Хоч 1972 г.

В ОТДЕЛ ПРОПАГАНДЫ И АГИТАЦИИ
ОБКОМА КПСС

тов.БАКИРОВУ У.Н.

С целью постоянного ознакомления телезрителей с лучшими образцами башкирской поэзии мы почти ежемесячно передаем новые стихи башкирских поэтов. Обычно эти стихи читают сами авторы. В последние месяцы на голубом экране выступили поэты Назар Наджми, Муса Гали, Ангам Атнабаев, Рафаэль Сафин и др.

16 ноября этого года со своими новыми стихами, которые одобрены в секции поэзии Союза писателей, выступил Рамий Гарипов.

В его произведении под названием "Салават-батыр", посвященном лауреату Государственной премии тов.Тавасиеву, есть такие строки:

"Хас дошмандар әле хөр халкымдың
Юлдарына күпме таш өймәс,
Батшаларға башын эймәгәнде,
Башкаларға башкорт баш эймәс!"

Это четверостишие, не отвечающее идейной требовательности нашей поэзии, было вычеркнуто. Во время подготовки передачи (перед трактовой репетицией) в присутствии режиссера Сайфуллина и ассистента режиссера Насретдиновой, старший редактор литдрамы еще раз предупреждал автора о том, что он не должен читать эту строфу. Рамий Гарипов согласился и дал слово не читать эти строки. Несмотря на неоднократное предупреждение, автор прочитал их в эфире.

Я, будучи редактором этой передачи, на другой же день после передачи связался по телефону с товарищем Гариповым и спросил у него: "Почему же Вы, несмотря на предупреждение, прочитали зачеркнутые строки?" Он ответил, что помнил о предупреждении, но прочитал их намеренно и всю вину берет на себя. Т.е. автор поставил работников



2.

телевидения в такое положение, когда ничего уже нельзя было изменить. Если бы он не дал согласия на сокращение стихотворения, то, естественно, не был бы допущен к экрану. А так мы были уверены, что он слово свое одержит.

Ст.редактор художественных
передач студии телевидения -

(Р.ХУСАИНОВ)

Гл.редактор художественных
передач студии телевидения -

(Р.СТРИЖКОВА)

Ошо шағирәнә «гөнаһы» өсөн Рәми Ғариповты Т.И. Ахунйәнов саҡыртып алып, «башҡорт милләтсеһе» рәүешендә «ҡыҙыу таба»ға баҫтырғас, шағир юғалып ҡалмаған: *«Атам татар, әсәм урыҫ мәрйәһе, ҡатыным украинка — ҡайҙан килеп мин башҡорт милләтсеһе булайым?!»* — тип, төтәһә лә, янмайынса ғына сыҡҡан, тинеләр... Ысынлап та, уның милли сығышы мәсьәләһе бәғзеләрҙең башын ҡатырғыс ине шул: рәсми яҙыуын асып ҡарарға уның паспорты булманы (бергәләшеп райондарға йәки башҡа ҡалаларға командировкаға барғаныбыҙҙа ҡунаҡханаларға урынлашҡанда ғәҙәттәгесә паспортын талап ҡылһалар, берҙән-бер документын — «СССР Яҙыусылар союзы ағзаһы» тигән танытмаһын биреп ҡотолор ине), һәм ул тыуған Салауат районының Загс бюроһы архивында ла уның шәжәрәһенә ҡағылышлы һис бер яҙыу-мәғлүмәт юҡ, ә ул саҡта уларҙың ауыл Советы үҙәге булған Илтәй ауылындағы барса Ғариповтар иһә милләттәре буйынса саф *татарҙар* имеш... «Башҡорт милләтсеһе» рәүешендә даны сыҡҡан шағирҙың төбө-тамырын юллау менән шул саҡтың партия өлкә комитеты секретаре Т.И. Ахунйәновтың да шөғөлләнеүен шағирҙың тол ҡатыны иҫтәлегендә шәйләйбеҙ. Һөйләшеү Рәми үҙе иҫән сағында, партия өлкә комитетында бара. Текста ҡыҫҡартып бирелгән **«Т.И.»** — Т.И. Ахунйәнов, **«К.Т.»** — Культура бүлеге мөдире Клара Төхфәтуллина, ә **«Н.В.»** — ҡағылып-һуғылып эшһеҙ йөрөгән Рәмигә эш биреүҙәрен һорап килгән уның ҡатыны Надежда Васильевна Ғарипова.

*«**Т.И**. Он пишет стихи, от которых веет не нашим, не советским, в них боль за ушедшее, которое он хочет вернуть, он против советской власти.*

***Н.В**. Но ведь мы читаем с большой любовью и интересом Черкасова «Хмель» и можно не раз перечитывать этот роман, хотя он начинается с декабристов.*

***К.Т**. Почему он видит мир не таким, как я, например?..*

***Т.И**. Мы хотим, чтобы он больше обращался к нам и писал то, что нам надо, о том, что вокруг нас... Мы хотим склонить его на нашу сторону, поэтому «бьем рублем»...*

***Н.В.** Но вы бьете рублем не только его, но и наших детей.*

***К.Т**. Мы слышали, что вы голодаете.*

***Н.В**. Сколько же можно бить? Не издавать, не выпускать в эфир и не давать работу?*

***К.Т**. Почему он так старательно воспевает свое, башкирское? Вы и детей своих отдали в башкирскую школу учиться, зачем?*

***Н.В**. Язык отца они обязаны знать.*

Т.И**. Кроме того, я **изучил биографию Рами, у него башкирского очень мало.** Это нас и удивляет. **Писал бы он на татарском — все было бы по-другому.

***Н.В**. Ну что же здесь плохого? Атнабай... всегда остается самим собой, говорит только на татарском.*

***Т.И**. Да, Атнабай самый порядочный в этом отношении, хотя по документам он — башкир».* (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, III том. Өфө «Китап», 2001; 343, 344-енсе биттәр).

Ата-бабаһы аҫаба башҡорт булып та, татарса һөйләшеп йөрөгәс, башҡорт телен үҙенеке һанамағас, шағир Атнабай тап шуныһы менән шағир Ғариповтан шәберәк тә, ҡәҙерлерәк тә икән, тимәк...

Тамырҙарҙы тикшереп белмеш секретарҙең тел төбөндә шул ята: Рәми Ғариповтың атаһы яғынан ғәзиз бабаһы — ҡасандыр ошо яҡҡа күсеп килмеш «ҡазан кешеһе», ә әсәһе тарафынан олатаһы — башҡорт, оләсәһе урыҫ мәрйәһе икән. Хәйер, шағирҙың үҙ шиғри билдәләмәһе лә тап килә: *«Миндә татар хәйләһе бар, уҫаллығы урыҫтың,/Башҡорт башы, башҡорт йәне — бәлки, шул да ырыҫтыр».* (Рәми Ғарипов. Әҫәрҙәр, II том. Өфө «Китап» 1998; 506-нсы бит). Йәғни татар, урыҫ, башҡорт ҡаны бергә ҡушылыуҙан хасилмын, шул өс милләттең төп сифаттарына эйә булыуым, бәлки, минең өсөн бәхеттер...

Зәңгәр экрандан баяғы шиғырын уҡыу һөҙөмтәһендә Рәми 1973 йылдың-йылы буйына эшһеҙ йөрөп ғүмер уҙғарҙы — бер редакцияла ла ҡосаҡты киң йәйеп ҡаршыламайҙар ине. Аҙ-маҙ гонорар алыр өсөн әҫәрҙәрҙе лә ташҡа баҫтыртып булмағанлыҡтан, Яҙыусылар берлеге янындағы әҙәбиәтте пропагандалау бюроһы аша райондарға һәм ҡалаларға сығып китеп, әҙәбиәт кисәләрендә шиғыр уҡып аҙ-маҙ аҡса табыу әмәле генә ҡалды, ә был иһә «әсе һыу» эсергә һәүәҫ шағирҙы хәмер һаҙлығына уғата нығыраҡ этәрҙе...

Ә уның ҡорҙашы Йыһат?..

Алдымда бына ошо оло афиша ята шаҡырайып:

«11 ғинуар 1974 йыл. Башҡортостан Яҙыусылар союзы.
Актерҙар йортонда (Пушкин урамы, 94)

Шиғыр байрамы

Тимер Арслан, Әнгәм Атнабаев, Рауил Бикбаев, Муса Ғәли, Рәми Ғарипов, Әхмәт Ғайсин, Абдулхаҡ Игебаев, Мостай Кәрим, Марат Кәримов, Ирек Кинйәбулатов, Рафаэль Сафин, Йыһат Солтанов, Әнисә Таһирова, Тимер Йосопов.

Кисә сәғәт 7-лә башлана.

Рәхим итегеҙ!»

Исемлек «аршын буйлы» эре хәрефтәр менән яҙылған. Шағирҙар араһынан өсөһөнөң (икеһе — Рәми Ғарипов менән Йыһат Солтанов, өсөнсөһө — эсмәйенсә лә иҫереп йөрөмөш бахыр бер мәхлүҡйән ине) исем-фамилияһы ҡара ҡәләм менән уратып һыҙылған. Һәм шул шиғыр байрамы көнөндә үк афиша ситенә үҙ ҡулым менән сәпәлгән аңлатмам да бар:

«Был исемлектәге ҡара түңәрәк менән уратылған өс шағирҙың трибунанан халыҡҡа шиғыр уҡыуын КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты секретаре Т. Ахунйәнов тыйҙы (был өсәүҙе исемлектән үҙ ҡулы менән һыҙып ташланы).



Йыһат Солтанов. 11.01.1974.»

Үҙебеҙҙән бер иле лә ҡалмайынса йөрөгән «ҡара һаҡал»ыбыҙҙың — оҙонаяҡ, ҡара көндәребеҙҙең ҡуйыра төшөүен күрһәтте был.

Бер килке шул ҡаралыҡтарҙың күңел даръяһынан йәнде рәнйетеп ағылышын эҫе мәлендә үк аҡ ҡағыҙға теркәп тә ҡуйғанмын икән, бына ул:.

«15.11.1972.

«Мине гәйепләйҙәр»...

Бер ваҡытта ла үҙемә үҙем бындай «дело», «досье» асырмын тип башыма ла килмәгәйне.

Тормош тигәнең уйламағандарыңды һала икән алдыңа.

40 йәшем тула торған йылда, әллә аҡыллыланыуым, әллә аҡылһыҙланыуым сәбәпле, баш осомда ҡара болоттар ҡуйырып, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты һ.б. тарафынан мине системалы рәүештә эҙәрлекләү башланды. («Һәнәк» журналында эшләгәнемдә үк, өлкә комитетының яңы секретаре Т.И. Ахунйәнов миңә ҡарата үҙенең был һәләтен күрһәтә биреп ҡуйғайны, хәйер). Сәбәбен үҙемә әйтмәй эҙәрлекләйҙәр — *идет организованная травля тихой сапой.*

Парадокс: коммунисты коммунистар эҙәрлекләй, ниндәйҙер ярлыҡ йәбештерергә теләй... Эш ныҡлап шунан башланды.

Яҙыусылар союзының партбюроһы, 1972 йылдың ғинуарында — февралдең аҙаҡтарында асыҡ партйыйылыш була, унда хәҙерге башҡорт әҙәби теленең хәле төп мәсьәлә итеп ҡуйыла; шуға алдан уҡ фекер туплап килеп, йыйылышта сығып һөйләрһегеҙ тип ышанабыҙ, тигән стандарт хат менән мөрәжәғәт итте яҙыусыларға. Бюро ағзаһы Ноғоман Мусин үҙе лә күреп, мине йыйылышта актив

ҡатнашырға өндәне. Мин риза булдым һәм үҙемде борсоған ҡайбер фекерҙәрҙе ҡағыҙға һалып, ун биш минутлыҡ телмәр әҙерләп килдем. Йыйылыш Актерҙар йортонда булды. Башланыр алдынан Н. Мусин һәм партбюроның яңы һайланған секретаре Ф. Иҫәнғолов докладтан һуң беренсе итеп һүҙҙе миңә бирәсәктәрен иҫкәрттеләр. Һәм шулай булды ла. Мин, бик ныҡ тулҡынланып, «Халыҡ теле — океан» тигән телмәремде һөйләнем трибунанан. Коммунистар бик ҡәнәғәт тыңланы, оҙаҡ ҡул сапты. Залға төшкәс тә, һуңынан да аулаҡ урында минең ҡулды ҡыҫтылар. Уйламағанда, докладсы күтәреп сыҡҡан «төп йүнәлеш» онотолоп, бөтә коммунистар һәм партияһыҙҙар мин ҡуҙғатҡан мәсьәләне төп йүнәлеш итеп күтәреп һөйләнеләр. Тик Ф. Иҫәнғолов һ.б. бер нисә кеше генә мине бысраҡҡа һалып тапарға тырышты, ләкин күпселек минең яҡлы булып ҡалды. Бына шунан һуң ҡуйыра башланы ла инде баш өҫтөмдә болоттар... КПСС өлкә комитеты бюроһында «Совет Башҡортостаны» гәзите редакцияһының йыллыҡ эше тикшерелде, шунда, башҡа бер нисә иптәштең (Р. Бикбаев, И. Ғиззәтуллин, Р. Әхтәров) ыңғай ҡабул ҡылынған әҫәрҙәре менән бер ҡатарҙан, минең яңы йыл һанында («Сов. Башҡ.», №1, 1972) сыҡҡан «Яҙ, Башҡортостан!» тигән публицистик мәҡәләмә (ул редакция заданиеһы менән бик ашығыс, бер төндә ултырып яҙылғайны) ҡарата ғәйепләү ташланды: ул мәҡәләлә башҡорттар йәшәгән ер итеп «Иртыштан — Волгағаса, Яйыҡтан — Ҡамағаса» араны алыуым кемдеңдер сикәһен ҡыҫҡан. Шуныһы ҡыҙыҡ, шул уҡ, тип әйтерлек, положение шул уҡ 1972 йылдың 1 Май байрамы уңайы менән Мостай Кәримдең «Тепло родного очага» тигән мәҡәләһендә ап-асыҡ ҡабатланды һәм АПН агентствоһы тарафынан бөтә ғәләмгә таратылды (Башҡортостан үҙәк матбуғатында бөтә өс телдә баҫылып сыҡты). Шул уҡ ваҡытта... минең «Совет Башҡортостаны»нда сират көтөп ятҡан әҙәби әҫәремде — нәшриәттә сығып килмеш «Таң нурҙары» китабынан өҙөктө (ә ундай өҙөктәр ғәҙәти рәүештә баҫыла килә ине) оторо кире ҡаҡтылар, һәм унан һуң да үҙҙәренең заказы буйынса (заказды редактор түгел, ә ауыл хужалығы бүлеге хеҙмәткәре Аҫылғужа Баһуманов биргәйне) яҙылған хикәйәмде («Ҡотлобикә») редактор А. Исмәғилов ҡотороноп алып ташланы (ул, бик ныҡ ҡыҫҡартылып, шаҡтай бәҫһеҙләнеп, «Ҡыҙыл таң» гәзитенең 1972 йыл октябрь айы һандарының береһендә «Солдат хатыны» исемендә донъя күрҙе) һәм гәзиттә әҫәрҙәремә тулы бойкот иғлан ҡылдылар. Ул ғына ла етмәһә, «Ағиҙел»дең 1972 йыл 6-нсы һанында сыҡҡан мәҡәләмде («Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» — Назар Нәжмиҙең «Ҡарҙар яуа» китабына ҡарата) үҙем больницала ятҡан саҡта «Ағиҙел» редколлегияһы ағзаларын һәм хеҙмәткәрҙәрен саҡыртып алып, КПСС-тың өлкә комитетында секре-тарь Т.И. Ахунйәнов кабинетында Ахунйәнов инициативаһы һәм ҡуҙғатыуы менән махсус тикшергәндәр, пропаганда бүлеге мөдире У.Н. Бакиров доклад яһаған. Нигеҙе — Ахунйәновҡа кемдәрҙер тарафынан (Ахунйәнов фамилияларын әйтмәгән) урыҫ телендә яҙылған биш битлек донос-хат. Ахунйәнов мине бик ҡаты ғәйепләп һөйләгән, уға ҡушылып, мине туҡмаҡ аҫтына һалып, Яҙыусылар союзының партбюро секретаре Фәрит Иҫәнғолов «ялҡынлы» телмәр тотҡан. Нәтижәлә минең больницанан сығыуға сюрприз: административ киҫәтеү һәм баш редактор Ә. Мирзаһитовтың: *«Бынан һуң һине* ***айырым контроль*** *аҫтына алырға!»* — тигән күп мәғәнәле һүҙе...

Сылбыр реакцияһы дауам итә: 1972, 1973 йылдар планынан китап нәшриәтендә лә китаптарымды һыҙып ташлағандар; 1974 йылға ғына вәғәҙә итәләр «Минең шәжәрәм»де сығарырға, ләкин ул да ҙур ҡурҡыныс аҫтында: сөнки Башҡортостан китап нәшриәте директоры Нуритдинов, йыллыҡ план тураһында һүҙ барғанда, бөтә редакторҙарына минең хаҡта бөтә ғәләмгә ишеттереп киҫәтеү яһаған: *«Ул егетте ныҡ ҡарарга* (тикшерергә. — *Й.С.*) кәрәк, ***он не так думает!»*** Был — уның һүҙҙәре. Тимәк, мин, Коммунистар партияһының фиҙакәр бер боецы булһам да, башҡа идеология кешеһе булып сығам түгелме?..

Шуны коммунист кеше, ҙур етәксе кеше әйтә...

Өлкә комитетында, «Бөйөк туғанлыҡ тураһында йыр» өсөн ғәйепләгәндә, журналда минең бүлектән сыҡҡан тағы ла бер материал — шағир Н. Нәжми менән әҙәби тәнҡитсе К. Әхмәтйәновтарҙың диалогтары ла «крамола» билдәләмәһенә дусар ҡылынған. Унда мине, журналдың бүлек мөдире булараҡ, субъективизмға юл ҡуйыуҙа ғәйепләгәндәр (Н. Нәжми башҡорт шағиры Шәйхзада Бабичты бөйөктәр араһында телгә ала, ләкин Мостай Кәрим дә бит уға мин әйтеп үткән «Тепло родного очага» мәҡәләһендә шундайыраҡ юғары баһа биргәйне!.. Әйткәндәй, 1968 йылда Назар Нәжмиҙең «Һайланма әҫәрҙәр» томының тиражы ташҡа баҫылып һәм китап итеп төпләнеп бөткәс, Т.И. Ахунйәнов бойороғо менән бөтә тираждан Шәйхзада Бабич шиғырынан эпиграф бирелгән бер битен йыртып ташланылар ҙа урынына «битараф» бит йәбештереп сыҡтылар)...

Хәҙергә шул».

Ошо урында өҙөлгән күңелһеҙ сәхифәм...

КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитетының, КГБ-ның (йәки МГБ-ның? -- исеме әллә нисә тапҡыр үҙгәртелһә лә, асылы бер килеш ҡалды) һәм улар күрһәтмәһен туранан-тура тырышып бойомға ашырыусы Яҙыусылар союзы һәм уның "генералитет"ының, башҡорт милләтле әҙиптәрҙән "башҡорт милләтселеге" эҙләп, ижадсыларҙы тонсоҡторғос ҡыҫым аҫтында тотоу-ҙарынан интегеп йәшәгәнемдә сә-ләмәтлегем һиҙҙертеп ҡаҡшай башланы. Быға яҙыусылар араһында өмөтһөҙлөктән киң таралған эскеселек тә булышлыҡ итте, әлбиттә... Бөтә нәмә сағыштырғанда асыҡ беленә, тигәндәй, бер көн бинаның "Ағиҙел" журналы редакцияһы урынлашҡан бишенсе ҡатына текә баҫҡыстан ҡорҙашым Әнүр Вахитов менән ҡушарлап менеп барғанымда хәлдәребеҙҙе хәтәрлекте нык тойҙом да тетрәнем: Әнүр Вахитов, тыны быуылып, туҡтай-туҡтай ғыж-ғыж һулыш ала, үҙемдең дә шөйлә тын ҡыҫылыуы һиҙелә... Ошонан һуң ҡырҡа ҡарар иттем: етте, эсмәҫкә! Һәм алдағы ун йыл буйы тамсы ла хәмер ҡапмайынса йөрөнөм (үҙ ваҡытында Рәми дуҫыма ла етди тәҡдим иткәйнем дә, тыңламаны). Хәлемдең ыңғай яҡҡа үҙгәреүенә йәнә бер яҡшы сара булышлыҡ итте – Ағиҙел буйында Өфөнән түбәндәрәк урынлашҡан Бочарово тигән ерҙән баҡса һатып алып, физик хеҙмәт һәм саф һауаға өлгәштем. Баҡсалы булыуыма, гәрсә үҙе быны шәйләмәһә лә, Ғәйнан ағай Әмириҙең нәүбәттәге игелеге туранан-тура булышлыҡ итте, сөнки мин ул сафлыҡ төйәген Ғәйнан ағай арҡаһында донъя күргән "Минең шәжәрәм" (тәүге исеме "Ерем, һиңә өндәшәм" ине) тигән китабымдың гонорарына алдым, ә был иһә йонсоҡкос ҡара көндәремде аҙ ғына булһа ла

яҡтыртты. Хакимиәт тарафынан аҫтыртын ҡара исемлеккә теркәлеп, ҡағылып-һуғылып йөрөгәнемдә китап нәшриәтенә Ғәйнан Әмири яҙған рәсми рецензия күрмештәремде ыңғай яҡҡа үҙгәртте. Был ваҡыт мин, күңел тынысһыҙлығынан ауырыуға һабышып, больницаға ятҡайным, ағайымдың, мине эҙләп килеп, редакцияла ҡалдырған сәләмен алдым:

19.09.1973.
Йыһад, ауырыйһың икән... Тиҙерәк сәләмәтлән инде бер үк!
Бына рецензияны ҡалдырам. ***Ғ.Ә.***

Рецензия. "ЕРЕМ, ҺИҢӘ ӨНДӘШӘМ".
Йыһат Солтанов. Шиғырҙар һәм поэмалар.

Йыһат Солтанов башҡорт әҙәбиәтендә яңы исем түгел. Уның ижади яҙмышы бик оригиналь. Әҙәбиәткә ул китап биттәре аша түгел, ә тормоштоң үҙенән – уның да тәрән төбөнән, шаулы тулҡындарын, ташҡындарын үтеп килде.

Й. Солтанов башта уҡ ике жанрҙа ла – поэзия һәм прозала – көсөн һынап ҡараны. Һәм башта уҡ икеһендә лә һиҙелерлек уңыштар ҡаҙанды. Бына тиҫтә ярым йыл инде поэзияға ла, прозаға ла хыянат итмәй эшләп килә.

Солтановтың прозаһын төплө өйрәнеп ҡарағаным юҡ, шуға күрә уның был жанрҙа ниндәй ҡаҙаныштарға өлгәшеүен өҙөп кенә әйтә алмайым. Әммә поэзияла ул ҡолас киреп йөҙә ала. Солтанов-шағирҙың тауышын хәҙер бер кемдеке менән дә бутау мөмкин түгел.

Солтановтың поэзияһында, ғөмүмән, һәм ошо яңы китабында шундай сифаттар күҙгә ныҡ ташланып тора: киң ҡоласлылыҡ, гражданлыҡ пафосы, халыҡсанлыҡ һәм идея асыҡлығы. Был сифаттар "Ерем, һиңә өндәшәм" йыйынтығында тағы ла ҡалтайыбыраҡ күренә башлағандар.

Йыһат Солтанов тыуған ерен – Уралын уллыҡ һөйөүе менән һөйә, уға бөтә йөрәгенән дан йырлай. Тик ул, башҡа ҡайһы бер йәш шағирҙар шикелле, Бпашҡортостанды "өҙөп алып" йырламай, ә Ҙур Тыуған илдең – Рәсәйҙең, СССР-ҙың, хатта донъяның бер өлөшө итеп күрә, шуға ҡыуанып, шуның менән ғорурланып йырлай.

"Уралыма" тигән шиғырҙа шундай юлдар бар:

Уралҡайым,
Тартты Ҡояш, Айың:
Хаҡ ҡулымды ҡуйып ҡашыма,
Офоҡтарың байҡап менеп баҫтым
Күккә ашҡан сағыл ташыңа.

Донъя иркен, донъя ниндәй иркен,
Бейектәрҙән баҡһаң, Уралым.
Ҡояш, Айың – яҡын менгән һайын,
Нурға ҡанып ҡарап торамын.
....

Күрһен донъя – беҙҙең ҡулда улъя,
Бөгөн беҙ көр, ғорур, байбыҙ ҙа.
Урал батыр бөрккән йәншишмәнең
Шифалары етә Союзга.

Күкрәп ҡалккан илең-тиңең менән
Һин кирәһең, Урал, күкрәк.
Беҙҙең ҡараш инде – үткерерәк,
Беҙҙең тауыш инде көрөрәк!

Түбәндәге строфа айырыуса характерлы, унда шағир ҡайһы бер ҡараштар менән туранан-тура полемикаға инә:

Һине йырлау, һинең өсөн үлеү –
Ҡалыр һаман ерҙә иҫкесә.
Ләкин Урал аша офоҡ күрмәү –
Яңы түгел инде, минеңсә.

Шағир Й. Солтанов бик дөрөҫ – партиялы, интернациональ позицияла тора.
Был яктан "Ҡурай" шиғыры ла бик әһәмиәтле:

И ҡурайым, йөрәк ҡағышым,
Салт тояһың заман ағышын.
Ленин моңо менән ҡауышһың –
Һине тотмаҫ үлем биҙгәге.

Икенсе бер шиғырында Й. Солтанов үҙенең граждандыҡ позицияһын ошолай билдәләй:

Ҡурай тартып,
Ҡумыҙ сиртеп кенә
Йәшәү бөттө йырсы, шағирға.
Заман шундай:
Барабандар бәреүен дә һорай
Яуға барырға!

Й. Солтановтың поэзияһында патриотизм темаһы үҙәк урындарҙың береһен алып тора. Һәм ул интернационализм темаһы менән органик үрелеп бара:

Терһәктәргә терһәк терәп бпаҫтыҡ,
Яурындарга яурын ялгап баҫтыҡ
Нисә йыһан,
Нисә мәмләкәт –
Баррикада ташына.

Күпме устар ҡыҫып тотҡан тыуҙа
Күпме милләт ҡаны уттай ҡыҙа,
Күпме халыҡ хисе ташыла
Капиталдың ҡара башына!

Был юлдар Солтановтың күп шиғырҙары өсөн – лейтмотив.

Йыйынтыҡ ҙур. 5-6 табаҡ тәшкил итәлер, моғайын. Унда бик яҡшы, уртасараҡ һәм йомшағыраҡ әҫәрҙәр ҙә бар.

Хәҙер китапҡа тупланған әҫәрҙәр хаҡында конкрет фекерҙәр...

...Й. Солтановтың теле яҡшы. Ғөмүмән, ул юғары тел культураһына эйә булған шағир, әҙип. (Шулай ҙа, йәйәләр эсендә генә әйтеп китергә кәрәктер: шағир ҡайһы саҡта диалектизмдар менән кәрәгенән артыҡ мауыҡмаймы икән? Хәйер, был өлкәлә мин үҙемде специалист һанамайым, шулай булғас – хөкөм сығарыусы ла була алмайым. Был мәсьәләне нәшриәт редакторҙары ҡарамағына ҡалдырам).

Китапҡа ҡарата минең бүтән бер төрлө лә күрһәтмәләрем юҡ. Әйтелгән етешһеҙлектәрҙе иҫәпкә алып, ҡулъяҙма өҫтөндә бер тын эшләгәндән һуң, китапты мотлаҡ баҫып сығарырға кәрәк. Бөгөнгө башҡорт поэзияһына ул яңы бер ҡаҙаныш булып өҫтәләсәк.

Ғәйнан Әмири. 07.08.1973.

Ни тиһәң дә, Хоҙай Бабай бар бит ул: бирәһе килгән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына! Әҙәбиәтебеҙ “генерал”ы Мостай Кәрим һәм уның эйәрсендәре мине төрлө мөнбәрҙәрҙән “милли яҡтан сикләнгән” (“национально ограниченный”) тип тамғалап, төпкә батырырға, ижадымды тонсоҡтороп ҡалдырырға ҡәһетләнгәндә, нисәмә йылдар донъяға сыға алмай ҡаҡланып ятҡан китабыма ҡарата Ғәйнан Әмириҙең китап нәшриәтенә биргән ошо рәсми рецензияһы, әйтерһең дә, минең өҫкә өйөлгән баяғы ҡара яланы алып ташлау өсөн махсус яҙылғайны! Һөҙөмтәлә, урыҫтар әйтмешләй, “лед тронулся” – шул китабым 1974 йылда “Минең шәжәрәм” тигән исем менән донъяға сыҡты...

Назар Нәжми менән Мостай Кәримдең ҡапма-каршылығы, үҙ-ара «борсаҡтары бешмәүе»нең ҡара шауҡымы Мостай Кәримде «как с гуся вода» сылатмайынса үтһә лә, бер Назар Нәжмиҙе генә түгел, ә бөтә әҙәбиәтебеҙҙе киңгәтә — гөнаһһыҙйән башҡаларға ла һөрөмө һылана ине. Хәтерҙә: 1976 йылда «Ағиҙел» журналының редколлегия ағзалары һәм хеҙмәткәрҙәре ҡатнашлығында Назар Нәжмиҙең «Урал» исемле өр-яңы поэмаһын авторҙың үҙе уҡыуында тыңлап тикшереү ойоштороллдо, ул сараның йәшерен бар маҡсаты — әҫәрҙе журналға үткәртмәү икәнлеге ап-асыҡ ине. Был йәһәттән авторҙың төп оппоненты — Ғайса Хөсәйенов икәнлеге алдан уҡ билдәле ине миңә. Мостай (ул үҙе юҡ ине) нөгәрҙәре, автор позицияһынан милләтселек еҫе аңҡый, тип, яҡшы һунар эттәреләй тырышып еҫкәнделәр. Ғайса Батыргәрәй улы үҙенә бойоролған бурысты ышанысл ы үтәне — аңлашылып торған нәмәләрҙе лә аңлашылмай тип, әҫәрҙең идея үҙәге нығ аҡһай тип, яуаплы төп мәсьәләләрҙә гелән ҡаршы һөйләне. «Бының менән нимә әйтергә теләүегеҙ аңлашылмай!» — тип поэма

авторының сабырлығын тамам ҡаҡшата башлағас, үҙем тороп яуапламайынса түҙмәнем: «Әгәр тыуған Уралыңды, тыуған Башҡортостаныңды, туған милләтеңде йәнең-тәнең менән бирелеп һөйһәң, аңлашыла ул, хөрмәтле Ғайса ағай!» — «Быны менән нимә әйтергә теләйһең?» — тип күҙлегенең быялаларын тап уҫал Берияныҡылай һалҡын ялтыратып киршәлгәс: — «Быны менән мин шуны әйтергә теләйем: белеүемсә, Мәскәүҙән уҡып ҡайтҡас һеҙҙе «буласаҡ Белинскийыбыҙ» тип йөрөткәндәр. Әммә һеҙ, үкенескә ҡаршы, Виссарион Белинский ҙа, Ғайса Хөсәйенов та була алманығыҙ!..» — тинем. Күҙҙәрен бер аҡырайтып ҡараны ла өндәшмәне, ә Назар Нәжми, үҙенең йор ғәҙәтенсә, бөтә залды яңғыратып шарҡылдап көлөп ебәрҙе. Гүзәл поэмаһын ул, «Ағиҙел»гә үткәртә алмаған ҡарауы, күпмелер ваҡыттан һуң «Совет Башҡортостаны»нда ташҡа баҫтырҙы; ә минең өлөшкә ғүмере буйына ҡуйынында таш йөрөтәсәк йәнә бер яһилйән өҫтәлде...

Әммә "бөйөк Мостафа Сафич"ҡа яуҙырылған мәҙехселәр хорын боҙоп, хаҡлыҡты күҙенә тура ҡарап бәреүселәр ҙә бөтмәгәйне, был хаҡта уның, М. Кәримдең, баяғы көндәлектәр битенә лә теркәлгән:

"25.10.91. ...Өфөләге минең "коллега"лар бер нисә тапҡыр шундай гәйеп таҡты, туранан-тура: "Халыҡ өсөн һин нимә эшләнең?" – тигән һорау ҡуйҙы".

Быҥдайҙарҙың иң сағыуы Зәйнәб апай Биишева ине, әлбиттә. Хәйер, Мостай Кәримдең үҙенә һүҙ бирәйек:

"5.02. 79. Малеевкага гинуарҙың 18-ендә килгәйнем. Төп корпустың икенсе ҡатына урынлаштырҙылар. Ишек асып, коридорга сыгыуым булды, ҡаршы яҡтан да ишек асылды. Бүлмәнән Зәйнәб Биишева килеп сыҡты.

-- Һаумыһыгыҙ? Һеҙ ҙә бында икәнһегеҙ, -- тинем.

Сәләмемә шундай яуап алдым:

-- Һеҙҙең ни хаҡыгыҙ бар минең менән исәнләшергә? Нимәгеҙ бар һеҙҙең, бахыр. Минең халҡым бар. Мине халҡым ярата.

-- Ярай улайһа, мин һеҙҙе күрмәнем дә, белмәнем дә.

"Фекер алышыуҙар" ошоноң менән бөттө. Мин яңы корпусҡа күстем. Ул бүлмә генә түгел, бер бүлмәле квартира булып сыҡты. Иркен, яҡшы. Тыныслыҡта һәм яңгыҙлыҡта рәхәт сигәм...

Биишева менән ашханала гына осрашабыҙ. Урамда мине күреп ҡалһа, әллә ҡайҙан кире боролоп китә. Ни зыяным тейҙе икән минең уга? Бирҙе миңә Хоҙай бер "дошманды". Уның менән дошманлаша ла алмайым. Дошман булгас, ул үҙеңдән ҡайтыш булмаһын. Шулай ҙа был кеше миңә нисәмә йыл бәйләнә инде".

Ил инәһе булырҙай апаның "бәйләнеүе" юҡҡа ғына түгелдер! Көндәлектәрҙең авторы үҙе үк шуны әйтеп биргән дәбаһа:

"30.04.90. ...Үҙемә үҙем эпитафия сыгарҙым:

"Был ҡәберҙә Мостай Кәрим үҙе ята,
Үлеүе хаҡ, тик тыуыуы булган хата".

Афарин!

Партия өлкә комитетының «башҡорт милләтселеге»нә ҡаршы көрәшеүсе идеология фронтында төп күҙ-колағы һәм уҫмаҡсыһы — трибуналарҙан трибуналарға йөрөп тамаҡ ярыусы һәм әҙәбиәтебеҙҙәге алмаштырғыһыҙ трибун-шағир Мостафа Сафа улы Кәримов (Мостай Кәрим) ине шул. Милләт, тел мәсьәләләрендә оҙон ғүмере буйына әсә телен яҡлап бер генә шиғри юл да, хатта һүҙ ҙә яҙмаған, бер кемдең дә бер ниндәй ҙә яҡлауына мохтаж түгел «бөйөк урыҫ телен» кемдәрҙәндер үҙенең күҙ ҡараһындай ҡурсалап, рәсми трибуналарҙан гел шапырынып ғауға һалған, ә башҡорт теле файҙаһына үҙ ғүмерендә тик бер тапҡыр юл ыңғайында ғына, ғәйбәткә юл ҡуймаҫ өсөн генә өлөш сығарған (мәҫәлән, берҙән-бер “тәжрибә”һе — 1954 йылда партконференцияла “гәпергән” телмәре) йылғыр сәйәсмән, партия һәм совет тотанағы, органдарҙың рупоры һәм күҙәтсеһе Мостай Кәрим быға тиклемге үҙенең шанлы алыштарында «һөрһөп бөткән башҡорт милләтсеһе Мөхәммәтша Буранғолов»ҡа ҡаршы уңышлы көрәштә туплағайны сәйәси капиталын. Ҡоро ҡалаҡ ауыҙ йырта, тигәндәй, ҡоро һүҙ генә булмаһын өсөн, бына шуны күрһәткес бер документтан аяныс ғибрәтле өҙөк:

Үҙәк Комитет тарафынан «ыш» иткән дә ел иҫмәне, бөтәһе лә үҙ урынында ҡалды, ә Мостай Кәрим үҙенең шул алмаштырғыһыҙ вазифаһында — «яңы хан Р.

Хәбибуллин»дың «вәзире» рәүешендә бөгөлә-һығыла хан усын ялап һәм һәр ҡасан да үҙе булып ҡалғандарҙы аҫтан киҫеп йөрөнө...

Яҙҙым «Ядкәр»...

Эйе, «**Я**дкәр». «**Я**дкәр» (йәки “яҙкәр”) һүҙенән — «**я**ҙыу», «**я**тлау» һүҙҙәре хасил булмыш, ә һис тә «**йә**дкәр — **йә**ҙеү — **йә**тләү» түгел. Быны̡ң шулай икәнлеген шул исемле романымда (Башҡортостан китап нәшриәте. 1992, «Ядкәр») ентекле аңлатҡанмын. Шуға күрә редакциялар текстарымдағы «**я**дкәр»ҙәрҙе «**йә**дкәр» тип төҙәтмәһен, кемдәрҙеңдер наҙанлығын миңә япһармаһын ине!..

«Ядкәр»... Үҙебеҙ йәшәгән дәүерҙәге халыҡ тормошоноң ҙур ғына бер киҫәген, йән әрнеткес проблемаларын сәнғәт саралары менән киң ҡоласлы

Һүр. 46. Һулдан уңға: Яныбай Хамматов, Йыһат Солтанов, Зиннур Нурғәлин.
Баймаҡ, 17 – 21.12.1982. Башҡорт әҙәбиәте көндәре

сағылтыу теләге яҙыусылыҡ булмышымды биләгәндән-биләне һәм тәбиғи рәүештә роман жанрына ныҡлап керешеүемә этәрҙе — прозаиктарҙың күптәре өсөн ҡануни хәл ине был. Әммә башҡорт совет әҙәбиәтендә үҙ башы һәм йөрәге менән уйлап белмәй торған, ләкин дипломлы ҡанунсылар исемлегендә йөрөтөлгән әҙәби тәнҡитселәребеҙ тарафынан барыбыҙға эталон итеп тағылыусы тере классик Мостай Кәримдең һис тә киң ҡоласлы түгел, ә аршынлап, йәки ҡарышлап ҡына үлсәмле, кеҫәгә генә һалып йөрөтмәле бәләкәс прозаһы ла бар ине һәм ул проза ҡалын китаптарға, тере классиктың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, «ҡабарынҡы фолианттар»ға (мәҫәлән, Яныбай Хамматов, Ноғоман Мусин романдарына) ҡаршы ҡуйыла ине. Хамматовтың роман артынан роман сығарыуына эсе бошоп һәм уның «Бөртөкләп йыйыла алтын» тигән маҡтаулы әҫәренең алтынын «ком» менән бутап, РСФСР яҙыусыларының V съезында Кремль һарайынан ошолай вәғәзләне ул:

«В обстановке всевозрастающей нивелировки в искусстве, заурядность и серость, ремесленничество и подделки возводятсы в степень незаурядности, приравниваются к эталонам и, таким образом, смещаются критерии, смешиваются ценности. Если добытые уже ***золотые россыпи*** *смешивать* ***песком,*** *в выигрыше всегда будет песок, в*

проигрыше — золото... От подобных писаний мы высокомерно отварачиваемся: «Это за пределами художественной литературы!» — говорим мы. А они, локтями расталкивая робких и совестливых, выходят сначала в пределы толстых журналов, оттуда перекочевывают в пределы ***пухлых фолиантов*** *и собраний»...* («Советская Башкирия» гәзитенең 1980 йыл 12 декабрь һаны).

Әйткәндәрен һүҙҙә генә ҡалдырмай, әүҙемләнеп бойомға ла ашырҙы: мәҫәлән, Яныбай Хамматов Мәскәү нәшриәтендә сығарырға әҙерләнгән романын Мостай Кәрим нәшриәт планынан алдыртып ташлауы тураһында оҙаҡ зарланып йөрөнө (ә Башҡортостан китап нәшриәтенә һалған шауҡымы былай ҙа аңлашылалыр)... Әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалының «ҡалын романдар»ҙы кире ҡағыуын Башҡортостан Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитов үҙенең даими эш ҡоралы итеп алды, уның ошо эш алымы, тора-бара, Мәскәү матбуғатында ла («Литературная Россия» гәзитенең 1987 йыл 13 март һаны), үҙебеҙҙә лә киң сағылды:

«Был йәһәттән иң күп шау-шоуҙы Яныбай Хамматов тыуҙырҙы. Уның тәүге әҫәре — «Бөртөкләп йыйыла алтын» романы художестволы эшләнеше ягынан яҡшы баһа алгайны. Тик ул һуңынан шул уҡ алтын йыуыусылар тураһында художестволы кимәле түбән булган йәнә дүрт роман яҙып, ***«гигантомания»*** *менән «ауырыуҙа» тамгаланды»...* («Ағиҙел» журналының 1987 йыл 9-ынсы һаны, 4-енсе бит).

Иң мөһиме, романдарҙың художество сифатын күтәреүҙән дә бигерәк, уларҙың күләмен «кеҫәгә генә һалып йөрөтөрҙәй» кесерәйтеү өсөн көрәшергә кәрәк, сөнки бөгөнгө кешенең ҡалын романдар уҡырға ваҡыты юҡ, тип асыҡтан-асыҡ раҫлап, күрәләтә тайғаҡ юлға баҫты әҙәбиәт етәкселегендәге «генерал»дарыбыҙ. Тимәк, Лев Толстой, Федор Достоевский, Иван Гончаров томдарының да көнө бөттө, тигәнгә табан юл алдыҡ...

Ошондай ғәрәсәтле шарттарҙа яҙылды «ҡалын» романым; тәүге варианттарында ул ҡәләмдәштәргә уҡытҡанымда «Ятлағандарға — ядкәр» һәм йәнә Зәйнәб апай Биишеваның тәҡдиме менән «Мотал һәм башҡалар» исеме менән дә йөрөп алды бер талай. Әммә рәсми тикшереүгә секцияға ул үҙенең бөрәгәй исемендә ҡуйылды:

1974 йыл. Протокол №4.

1974 йылдың 4 мартында Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының проза секцияһы бюроһының ултырышы булды. Секция эшендә Әнүр Вахитов, Яныбай Хамматов, Фәрит Исәнголов, Ногоман Мусин, Шакир Янбаев, Ғәйниә Әбсәләмова, Хәкимйән Зарипов, Динис Бүләков, Йыһат Солтанов ҡатнашты.

Көн тәртибендә: Йыһат Солтановтың «Ядкәр» романын тикшереү.

Председатель: Ә. Вахитов.

Секретарь: Д. Бүләков.

Фекер алышыуҙа ҡатнашты:

1. Ногоман Мусин. *Тәүге ике өлөштә төп геройҙар менән танышыу бирелә. Шунан ниңә «Хәреф йыйыусынан бер һүҙ» килеп инә? Сәйерерәк. Автор ҙа булып сыҡманы, абстракт һөйләүсе булып ҡалды. «Тәлмәрйен» һүҙен асыҡлау бәхәсенең кәрәге*

бармы икән, тип уйланылды. Шунда ук «камса», «үрмес» һ.б. биреү, аңлатыу кәрәкме икән? Атаман Дутов, йәш Дутов, килеп инә, был — әҫәр башына бер ойотҡо һалып ҡуя, ләкин был үҫеш бирмәй. «Аҡ ҡайын» бүлегендә Яңы геройҙар Иван, Яков, Люба инә. Сюжет һыҙығы — ҡыҙыҡ ҡына. Тәүге дүрт бүлекте йыйнаҡлау кәрәк. Хәреф йыйыусының икенсе һүҙе арыу ғына — бурһыҡ мәсьәләһе. Артабан автор әҙәбиәт, тарих, ижад тураһында фекер йөрөтә. Бүлек оҙон түгел, тәрән фекерле, матур. Ләкин ошоларҙы артабан ҡабатлай башлау ваҡлай. «Хәреф йыйыусынан өсөнсө һүҙ» — һыуыр, ҡомаҡ хаҡында. Ләкин ул нимәгә кәрәк булды икән, автор ни әйтергә теләй? Аҙаҡ әйтә: 600 меңләп башҡорт астан үлә, ләкин ниңә — позиция асыҡ түгел. Былдай фекер йөрөтөү ярамай. 8-енсе бүлектә тағы ла тарих тураһында бәхәс ҡуйырып китә. Алда телгә алынған нәмәләр ҡабатлана. «Хәреф йыйыусының дүртенсе һүҙ»е — тоже уйландыра, тик фекерҙе тарҡата төҫлө. Артыҡ байыҡтырылған — әкиәт, легенда һ.б. менән әҫәрҙең дөйөм бирелешенә зарар итмәйме? «Аҡ ҡайын төбөндә аҡ бәпес һикертеү» — матур ғына, ләкин диссертацияның тәүге өлөшөн биреү кәрәкме? Күҙ алдында барырлыҡ эпизодтар әкиәт менән өн араһында юғала кеүек. «Бишенсе һүҙ» — ҡатмарлы мәсьәләләр. Шовинизм мәсьәләһе килеп инә. Йәнә әкиәт ҡулланыла, ә уны бит төрлөсә бороп була. Бигерәк тә шовинизм мәсьәләһендә һаҡ булырға кәрәк. Аҙаҡ булған тарихи ваҡиғалар әйбәт бирелгән, шулар менән сикләнергә ине. «Катастрофа» — Әгләм улының яңы баҫҡысҡа күтәрелеүен күрһәтә, бик кәрәктер, ләкин оҙон. Гөлзифа менән айырылышыуы — төрлөсә, буталсыҡ, сиге юҡ кеүек, ялҡыта башлай. Был бүлекте саҡ ҡына уйлабыраҡ яҙырға кәрәк ине. Әҫәрҙә «Ҡара кеше» бар. Тәүге вариантта был ҡотоҫҡос кеше — ҡараҫҡы ине. Әгләм улы Дилбәрҙе яратҡас, «Ҡара кеше» тағы күренә, килешмәй. «Хәреф йыйыусының алтынсы һүҙ»е — башҡорт хөкүмәте тураһында бара. Был урында уҡыуы ҡыйыныраҡ. Люба менән танышыу шәп, Дилбәр менән танышыу — шәп! Ләкин Әгләм улы менән Дилбәр бәхәсендә тарих тураһында йәнә ҡабатлана. Әгләм улының үлергә йөрөүе лә аҡланмай. «Хәреф йыйыусының етенсе һүҙ»е лә арыу ғына, тормошсан. «Ҡайҙа һин, Дилбәрем» матур. Бында әйбәт бара. Ләкин расаға, милләткә бүлеү килеп инә, был эш һаҡ хәл ителә бит. «Мөғжизәнең тыуыуы» — һәйбәт. Автор нисектер ошонда әҫәрен йомғаҡлаған кеүек. «Алмас ҡылыстар ялтлаған яҡта» — артыҡ кеүек. Очеркса яҙылған. Ямап ҡуйған, йөйлө. Яңы тыуасаҡ әҫәрен төҫмөрләтеп кенә ҡуйғанда, етмәйме икән.

Йәмғеһе: Йыһат ғәжәп эш эшләгән, киң, ҙур фекер йөрөтә. Ғөмүмән, ҡайһы бер нәмәләр сәйер тойолһа ла, был — буласаҡ романдың сюжет яңылығылыр, тимен. Йыйнаҡлап, ныҡлап ҡарап сыҡҡас, әҫәр бар, тип уйлайым.

2. ***Фәрит Иҫәнғолов****. Ноғоман ентекле һөйләне, был беҙҙе күп нәмәнән ҡотҡара.* ***Фекерем бер: минеңсә, башҡорт романистары араһына күркәм, һәйбәт яҙыусы килә.*** *Роман сәйерерәк ҡабул ителәләр, беҙ бер төрлө өйрәнгәнбеҙ инде, ана шул сәйерҙән сәйерерәк нәмәләрҙе генә һәйбәтләү бурысы тора. Иң төп бурыс — әҫәргә ниндәй фекер һалған, форма — үҙенә ҡала. Уның эше. Әҫәрҙә «камса» термины үҙен күтәрә алһа, аптырарлыҡ түгел. Автор тарафынан тарихҡа, шәхестәргә, матурлыҡҡа баһа биреү — трактат, монография һ.б. кеүек бара.* ***Автор тарихты шәп белә. Айырыуса күркәм эш итә лирик эпизодтар яҙғанда.*** *Әҫәр тарҡаумы? Беҙ, күнеккән традицион роман яҙыусылар өсөн — үтә тарҡау. Уҡыусылар өсөн дә тарҡау. Уҡыусыны, бәлки,*

күнектереү кәрәктер. Ләкин һәр саҡ мөмкинме? Был форма бар ул — ләкин ул яңы. Ләкин эш — матурлыҡҡа төрөп бирелгән дарыуҙа — әҫәр шулай ҡабул ителә.

Тарихҡа мөхәббәт һөйләүҙе уҡыусы яратмай. Тарихсы һөйләгәнсә түгел, ә сәнгәтсә килһә автор — һәйбәт булыр ине. Тарих һөйләү — ялангас. Фекер шул: әҫәрҙе таҙартып сыҡһаҡ, «Агиҙел»дә баҫтыра алырлыҡ әҫәр бар. Ләкин икенсе ҡурҡыныс тыуа: социаль, политик йәһәтен, гөмүмән, төп йәһәтен автор эстетика аша бирергә тейеш. Формаль рәүештә таҙартып сыҡһа, баналь бер әҫәр тора ла ҡала. Проблема ҡайҙа? Шул һорау тыуа. Бында саф тарих, саф политика бармай. Бында тарихтың предметы хаҡында һүҙ күп. Тарихҡа инеү — күп урын ала. Унда бәхәсһеҙ урындар күп. Былар минең ҙур шиктәр. Романдың йөкмәткеһе, форма менән эште хәл иткәс, ***бик яҡты, бик матур, бөгөнгө көн художник күҙлегенән ҡаралған әҫәр тыуасаҡ.*** *Унан килеп, юҡҡа ғына бәхәс асылып китә. Тенденцияларыңды бик матур башлайһың, ләкин аҙағына тиклем еткермәгәнһең. Романды шулай күргем килә.* ***Күргәне лә һәйбәт, ә күрәһем килгәне — тағы ла һәйбәтерәк.***

3. Яныбай Хамматов*. Фекерҙәр алда әйтелгәндәргә тап килә. Әҫәр формаһы ягынан яңы, ҡабул итеүе ауыр. Әҫәр бик тарҡау. Төрлө хикәйәт, әкиәттәр кәрәгенән артыҡ. Кантчеканың үҙен тотоуы ла килешмәй.*

Ваҡига ике төрлө бара: үҙ теле менән, образлы яҙыуы — шәп, ә инде тарихҡа инеп китһә — уҡыуы ҡыйын. Уларҙы образлаштырырга кәрәк ине. Ҡоро диалдогтар күп. Автор күберәк үҙе һөйләй. Бүлектәр ***эзопса*** *— әйтеп бөтөрмәй мәгәнәне. Ҡоро тарих. Ногоман, бер аҙ эшләргә, ти, бында ең һыҙғанып, бөтөнләй, урыны менән таратып ебәреп, бик нык ултырырга кәрәк. Дуртов тураһында кәрәкме? Партияга инеү өсөн гариза? Политик хатага урын ҡалдырмаймы? Игтибар итергә. «Катастрофа» — һәйбәт. Шәмиголов тураһында асыҡланмай ҡала. Татар-башҡорт автономияһы тураһында кәрәкмәҫтер? Һаҡ булырга кәрәк. «Алмас ҡылыстар» бөтөнләй йәбешмәй.*

4. Шакир Янбаев*. Беҙҙең әҙәбиәттә был форма ниндәйҙер кимәлдә бар ул. Ләкин классик әҙәбиәттә бик хаҡлы ҡулланыла. Йыһат был форманы индерһә — ҡыйыулыҡ булыр ине. Хикәйәттәрҙең байтагының яңылыҡ булмауы күңелде ҡыра. Мәҫәлән, Хужа Насритдин тураһында. Публицистиканың, гәзит очергының инеп китеүе — шәп түгел. Тел: үтә йомарт. Буяуҙар артыҡ ҡуйырып, бөҙрәләнеп китә. Стиль, һүрәтләүҙәрҙең бер-береһенең ҡабатланыуы күп — былар натурализмга килтерә. Таҙартаһы урындар күп.*

Һүр. 47. Уңдан һулға Зөлфәт Шаһбазов, Йыһат Солтанов, Абдулхаҡ Игебаев, Ғәли Ибраһимов, Г. Шәфиев, Ғәйниә Әбсәләмова, Әсғәт Мирзаһитов, Вәзих Исхаҡов “Ағиҙел” журналы редакцияһында. 1972.

Тарихҡа төпкәрәк төшәйек, ти, ләкин был күренмәй. Әллә ул яу ғына һаламы? Һуңғы глава — артыҡ. Бында кеше образы аша художестволы асыш юҡ. Әҫәрҙе шаштырыбыраҡ яҙыу ғәләмәте бар, саҡ ҡына психҡа оҡшаш итеп яҙылған, тем более «аҫылынам» тигәне — йәбешмәй. Әҫәр оҙон, уҡыуы ауырыраҡ, йыйнаҡлатырға кәрәк.

***5. Ғәйниә Әбсәләмова**. Форма тураһында һөйләшелде, образдарға ҡаг-ылғы килә. Ваҡиға бер ай эсендә бара. Кеше яҙмыштары бик ныҡ бәрелешә. Нагрузка. Философия — уйланыусан, бәхәскә бай. Төп герой көсһөҙ күренә. Ҙур маҡсатлы кеше — бөгөлөп ҡала. «Ҡара кеше»нең бер күренеп ҡалыуы етәлер. Ул — ҙур эш эшләргә тыуған ҙур кеше, үҙен ҙур тоторға тейеш. Дилбәр образы: ул бик юғары фекер йөрөтә белә, тарих буйынса. Уның яҙмышын уйларға кәрәк ине. Үлеме ышандырмай. Роман художник исеменән алып барыла. Ул тоже бик эрудированный, ышандырмай. Быны мотивировать итеү кәрәк. Бәхәстәр күберәк ваҡ мәсьәләләр буйынса алып барыла. Даһи (гений) тураһында күп әйтелә. Яңғыҙ ҡайын тирәһе сәхнәне хәтерләтеп ҡуйҙы.*

***6. Д. Бүләков**. Формаһы тураһында бында һүҙ күп булды. Әлбиттә, формаһы менән ҡатмарлы, ауырыраҡ. Ләкин, иптәштәр әйткәнсә, бөтөнлөк етмәйерәк, ваҡиғалар бер-береһе менән тығыҙ бәйләнеп етмәй. Бөтә ваҡиғаларҙы бер епкәрәк теҙергә ине. Дилбәрҙең нисек итеп был ижад йортона эләгеүен нигеҙләргә ине. Уның Йәүҙәт менән бәхәсе оҙаҡҡараҡ һуҙыла, ялҡыта. Бында ҡабатлауҙар ҙа күҙгә ташлана. Йәүҙәт образы ла уңышлы ғына. Тел яғынан әҫәрҙе ныҡ эшкәртергә кәрәк (унда автор тел матурлыҡтары менән мауыға төшә). Айғыр-толпарҙарҙы урталағы бағанаға яҡшыраҡ, бергәрәк бәйләүҙе күҙ уңында тотһа ине автор. Теләк шул.*

***7. Хәкимйән Зарипов**. Йыһатта Достоевский алымдары бар. Шағир хисе нык ағыла романда. Бер яҡтан был — шатлыҡлы, икенсе яҡтан уйландыра. Нигеҙҙә иптәштәрҙең фекере менән килешәм. Художник шул тиклем тарихты нык белә. Мотивировать итеү кәрәк. Тарихи әйберҙәрҙе, бәлки, Ғамзаттың «Мой Дагестан»ындағы кеүек бирергә кәрәктер. Главалар ҙурыраҡ. Бородиноға ике мәртәбә барыу артыҡ кеүек. Дилбәр менән осрашыу матур.*

8. Әнүр Вахитов**. **Роман бик уйландыра торған әҫәр. Композицияһы ҡыҙыҡлы.** Өс быуын вәкилен алған да — сағыштыра. Тәүгеһе легендарный итеп бирелә. Икенсеһе — драматизм менән һуғарылған яҙмыш. Өсөнсөһө — йәш художник яҙмышы — лирик планда бирелә. Былар һәйбәт, ләкин әҫәрҙең композицияһы уйландыра. Өс быуын да мин тип һөйләшә. Тарих күп. Әҫәрҙең конфликты булмағангамы икән, әллә ул килеп сыҡмаған? **Бөтә алған геройҙары ла талантлы кешеләр, һәр береһенең үҙ донъяһы бар, уларҙы туплау кәрәк.** Әҫәр тарҡау. Артабан эшләүендә уңыштар теләйек, яңынан эшләргә кәрәк, **шунан шикһеҙ тәҡдим итергә нәшриәткә.

Председатель: ***Ә. Вахитов.***
Секретарь: ***Д. Бүләков**.*

Ниндәйен дә егәрле, хәстәрлекле, яҡшы кешеләр булған беҙҙең заманда: ҙур күләмле һәм ҡатмарлы композициялы, формаһы менән сәйер-яңы һәм етешһеҙ яҡтары ла күп романды йыбанмай уҡып сығып, энәһенән-ебенәсә тикшереп, үҙҙәренең белеме, сәйәси инанысы, совет әҙәбиәтендә хөкөм һөргән социалистик реализм ҡанундары буйынса талапсан ҡараштарын ихлас асып һалғандар, кәмселектәрен бөтөрөргә игелекле кәңәштәрен биргәндәр. Романдың

«Ятлағандарға ядкәр» тип исемләнгән һуңғы электрон тексында шул игелекле кәңәштәрҙең барыһы ла, тип әйтерлек, иҫәпкә алып эшләнгәнлеге күренә.

Ғәмәлдә ыңғай баһаланған һәм нәшриәткә тәҡдим ителгән, ә барса булған килешмәгән урындарын яңынан эшләп сығырға авторҙың көсөнән килерлек. Тикшереүҙе уңышлы үтеүем тураһында республиканың көндәлек матбуғаты ла хәбәр итте:

Проза секцияһы ултырышы.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы ҡаршыһындағы проза секцияһының сираттағы ултырышы булды. Унда яҙыусы Йыһат Солтановтың ҙур күләмле әҫәре — «Ядкәр» романы тикшерелде.

Роман хаҡында фекер алышыуҙа бер төркөм яҙыусылар һәм тәнҡитселәр ҡатнашты. Сығыш яһаусы Фәрит Иҫәнголов, Ноғоман Мусин, Яныбай Хамматов, Шакир Янбаев, Ғәйниә Әбсәләмова, Динис Бүләков, Хәкимйән Зарипов һәм Әнүр Вахитовтар романға нигеҙҙә ***ыңғай баһа бирҙеләр.*** *Әҫәрҙе камиллаштырыу маҡсатында күп кенә кәңәштәр ҙә әйтелде. Ғөмүмән алғанда,* ***роман — авторҙың ижади уңышы тип баһаланды.*** («Ҡызыл таң» гәзитенең 1974 йыл 10 март һаны).

Башҡортостан Яҙыусылар союзында.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы эргәһендәге проза секцияһының сираттағы ултырышы булып үтте. Унда шағир һәм прозаик Йыһат Солтановтың «Ядкәр» исемле романы тураһында һөйләшеү булды. Фекер алышыуҙа Фәрит Иҫәнголов, Яныбай Хамматов, Ноғоман Мусин, Шакир Янбаев, Әнүр Вахитов, Динис Бүләков, Ғәйниә Әбсәләмова һәм Хәкимйән Зарипов ҡатнашты. Сығыш яһаусылар ***формаһы яғынан бик үҙенсәлекле был романды ыңғай баһаланылар.*** *Әҫәргә ҡарата ҡайһы бер кәңәш һәм теләктәр әйтелде.* («Совет Башҡортостаны» гәзитенең 1974 йыл 17 март һаны).

Ни тигәндә лә, беренсе ҙур әҫәремә ҡарата шөйлә ҡыуаныслы, өмөтлө нарыҡлау ине былар һәм мин ошо ҡулъяҙмамдың яҙмышы үтә ыҙалыҡлы-оҙон да, ғауғалы ла булырын, күп йылдар көрәшеп йөрөп, уның ҡыҫҡартылып имгәтелгән, «яңы форма»ның еҫе лә ҡалмаған вариантын ифрат ҙур ауырлыҡтар аша ғына, тик ун һигеҙ йылдан һуң ғына көс-хәл менән донъяға сығара алырмын, тип һис кенә лә башыма ла килтермәнем. (Ғөмүмән, минең мөһим әҫәрҙәрем 20 — 30 йылдан һуң ғына — аяҡ салыусыларым хакимиәттән йә донъянан киткәс кенә сыға тора донъяға. Шөкөр, шуларҙы күрергә Дәү Хоҙай миңә оҙон ғүмер биргәндер).

Ғүмерем буйына холҡомдоң бер сифаты тынғылыҡ бирмәне: теләһә ниндәй шарттарҙа ла аҡты — аҡ, ҡараны — ҡара тип таныу һәм бәндәләрҙең ҡыңғырлыҡтарын, уларҙың биләгән вазифаларына ҡарамайынса, тура ярып әйтеү. Әмир Гәрәйевтең Башҡортостан китап нәшриәтендә баш редактор вазифаһы башҡарыуын һәм ундағы беҙҙең китаптарҙың яҙмышы менән теләгәнсә уйнай алыуын яҡшы белә тороп та, уның «Ҡарағайлы яҙҙары» тигән һәм графоманлыҡ кимәлендәге (хәйер, артабан да был әҙәми зат шул кимәленән күтәрелә алманы) повесен бер йыйылышта ҡаты тәнҡитләгәйнем. Шул уҡ төндә

төш күрҙем: көр итеп үҙем үҫтергән, тамырҙарынан олоно буйлап ябалдашынаса көслө ағым булып күтәрелеүсе тормош һуттары үтәнән-үтә күренеп торған тере тирәгем күҙем алдында, көтмәгәндә, төбөнән ҡырҡҡандай һуттары туҡталып шиңде лә ергә лыпан йығылды. Тертләп ояныу менән үк, күңелһеҙләнеп уйланым: «Бөттө, нәшриәттәге китабым юҡҡа сыҡты!..» Юрауымдың дөрөҫлөгө шул көндәрҙә үк дәлилләнде: нәшриәттең махсус курьеры «Әүеҫлек башы аулаҡта» тигән шиғри ҡулъяҙма йыйынтығым һалынған папканы, ых-бых килеп, әллә ҡайҙа Черниковка осондағы өйгә килтереп ташлап, ҡағыҙға ҡул ҡуйҙыртып алып китте. Бына Әмир Гәрәйевтең «сәләм»е:

Башҡортостан китап нәшриәте, №725, 7 октябрь 1974 й.

Хөрмәтле Йыһат Солтанов иптәш!

Ҡулъяҙмағыҙ менән ентекләп танышып сыҡтыҡ. Йыйынтыҡҡа тупланған әҫәрҙәрегеҙҙә байтаҡ ҡына кәмселектәр булыуы асыҡланды.

Беренсенән, шиғырҙар һәм поэма кесе йәштәге мәктәп балаларына тәғәйенләп яҙылһалар ҙа, улар балалар аңлап ҡабул итеү өсөн бик ауыр күренәләр.

Икенсенән, әҫәрҙәр оҙон, тарҡау, уларға фекер бөтөнлөгө етешмәй, ә айырым шиғырҙарығыҙ, йомғаҡлау өлөшө булмағангамы, тамамланмаған кеүек тойолалар.

Кесе йәштәге балалар өсөн яҙылған әҫәрҙәрҙең бер тема тирәһендәрәк ойошҡан булыуы йыйынтыҡты отошлораҡ яһар ине.

Ҡулъяҙмағыҙҙы, әлегә нәшриәттең тематик планына индереү мөмкин булмағанға күрә, кире ҡайтарабыҙ.

Эшегеҙҙә уңыштар теләп, нәшриәттең баш редакторы:

Ә. Гәрәйев.

Әмир Гәрәйев унда ултырған саҡта сыҡмаясаҡ китабың, тигән приговор ине был. Ысынлап та, кире ҡағылған ошо йыйынтығым оҙаҡ йылдар үҙемдә «ҡаҡланып» ятып, нәшриәттән Әмир Гәрәйев эҙҙәре һыуынғас ҡына, 1990 йылда «Аҡсарлаҡ» исемендәге китап булып ташҡа баҫылып сыҡты.

Күңелгә йылылыҡ биргәндәре лә булды: ул йылдарҙа республика гәзиттәре, ни тиһәң дә, әҙәбиәтебеҙгә яҡты йөҙ менән ҡарай — проза секцияһында тикшерелеп, ыңғай баһаланған әҫәрҙәрҙең ҙур-ҙур өҙөктәрен сығара ине биттәрендә. Романымды яңынан эшкәртеп ипкә килтергәнемдән һуң, олпат ҡына бер киҫәген «Совет Башҡортостаны» шул 1974 йылдың 12 октябрендә бирә башлағайны, ә 18-ендә, баҫылып бөтмәҫе борон, ҡапыл туҡталып ҡалды. Хафаланып редакцияға барғас, әҙәбиәт бүлегендә ошолай аңлаттылар: баҫманың өҙөлөүенә үҙегеҙҙең яҙыусылар берлеге рәйесе Ә.М. Мирзаһитов сәбәпсе. Ул, баҫма башындағы ғәҙәти редакция «кәрзинкә»һенә йәғни аңлатмаһына сиктән тыш нәфрәтләнеп, гәзиттең баш редакторына шылтыратҡан һәм партия өлкә комитеты тарафынан уға быһың өсөн «головомойка» яһаттырырға янаған. Баҡтиһәң, «кәрзинкә»ләге: «Яҙыусы Йыһат Солтанов үҙенең «Ядкәр» романының бишенсе китабын тамамланы. Ҙур күләмле итеп уйланылған әҫәрҙең был өлөшөндә...» тигән һүҙҙәр үҙенең төп етәкселек эшен әҙиптәрҙән «кеҫәгә һалып йөрөтмәле генә китаптар» яҙҙыртыуға ҡорған һәм билдәле «бөйөк» шефы менән

берлектә шул йүнәлештә ҡыҙыу көрәш алып барған түрәбеҙҙең теңкәһенә ныҡ тейгән икән... Шул арала мин эшләгән редакцияға килеп ингән Яныбай ағай Хамматов та үҙенең әле генә Яҙыусылар берлеге идараһында булыуын, унда Мирзаһитовтың, баяғы минең романдан өҙөк баҫыла башлаған гәзит бөкләмәһе менән өҫтәлгә һуғып, «ҡотороноп» ултырыуын һөйләне лә мине: «Инде уның тарафтан өҫтөңә бәлә-ҡазалар ябырылыуын көт, ҡустым», — тип киҫәтте. Өс көн эсендә мәсьәлә партия өлкә комитетында тикшерелеп, әҫәр өҙөгөн совет иленең йәшәйеше өсөн әллә ни зыянлыҡһыҙ, тип таптылар, буғай, сөнки гәзиттең 22 — 24 октябрь һандарында уны аҙағынаса еткереп баҫтылар. Ләкин Яныбай ағай Хамматов киҫәткән бәлә-ҡазалар миңә алдағы күп йылдар буйынса туҡталмай ябырылды...

Секцияла тикшереү барышында ҡәләмдәштәрем күрһәткән һәм үҙем тейешле һанаған етешһеҙлектәрен мөмкин булғанса бөтөрөп, романымдың ҡулъяҙмаһын 1975 йылдың 27 октябрендә ҙур өмөттәр бағлап «Ағиҙел» журналы редакцияһына тапшырҙым. Ләкин билдәле яҙармандар тарафынан ҡайһы бер юғары даирәләрҙә ҡаршы фекер тыуҙырылып, туҡтауһыҙ ҡуйыртылғанлыҡтан һәм ҡулъяҙмам шул арҡала һыуға батҡан балталай ҡуҙғатылмай ятҡанлыҡтан (үҙем шунда эшләгәс, күреп-белеп йөрөйөм), тейешле иптәштәрҙе йәнәһе ашыҡтырмаҡҡа ошо рәсми хат менән дә мөрәжәғәт итеп ҡараным:

В редакцию журнала «Агидель».

Я перед завершающим годом 9-ой пятилетки, в преддверии XXV съезда нашей партии завершил свой большой труд — роман «Ядкар».

Это — политический роман.

Это — роман о наших современниках.

В нем остро ставятся морально-этические проблемы человеческой деятельности в эпоху непримиримой идеологической борьбы двух мировых сил, в эпоху бурной научно-технической революции.

Вроде бы актуальная, нужная нам тема.

Однако я здесь с глубоким сожалением вынужден говорить, что это новое произведение до сих пор пылится под сукном редакционного стола.

Говорят, в романе есть образ секретаря обкома, поэтому роман должны предварительно прочитать наши обкомовские товарищи.

Меня, как писателя-коммуниста, конечно льстит такое обстоятельство, когда с моим произведением будут заниматься такие ответственные товарищи. Но у Башкирского обкома КПСС разьве мало забот, кроме нашего сугубо писательского дела?.. Я думаю, что при благожелательном рассмотрении вопрос этот могла бы быстро решать сама редакция.

Но время идет, а воз и по-ныне там...

И тут о своем дитеныше вынужден во всеуслышание кричать сам автор. Вроде бы проявлять нескромность.

Однако вспоминается мне такой забавный случай: даже сам Уолт Уитмен, после долгих мытарств со своими «Листьями травы», вынужден был изобрести такой трюк — он собственноручно сочинил и опубликовал хвалебную рецензию

на свою книгу. Между прочим, рецензия начиналась так: «Родился великий национальный поэт Америки!»

Поймите правильно, не собираюсь я уподоблять себя с великим американским поэтом. Однако и у башкирского народа есть такая мудрая пословица: «Если мы сами себя не сумеем хвалить, то кто же станет нас хвалить?»

Я себя не хвалю, но требую у тех наших товарищей, которых это касается, быстрого, беспрепятственного рассмотрения рукописи моей.

Думаю, это — священное право каждого трудящегося требовать, чтобы произведенная им продукция без лишних проволочек доходила до потребителя.

Товарищи коммунисты, касается это нас всех...

Я прошу от редакции по-товарщески чуткого отношения не к моей личности, а к нашему общему литературному делу.

Йыхат Солтанов.

1976 йыл буйы әҫәремә ҡарата юғары даирәләрҙән, ниһәйәт, мәрхәмәт яуыуын көтөп, ләкин уны көтөп ала алмайынса, нервыларымды сүбектәй туҙҙырып йәшәнем. Йыл аҙағындараҡ, ғәҙәттәгесә, халыҡ араһында алдағы йыл өсөн «Ағиҙел»гә яҙылыуҙы ойоштороу кампанияһы башланғас, халыҡҡа таратырға матур итеп буклет баҫып сығарылды, проза буйынса унда киләһе йыл баҫыласаҡ әҫәрҙәр күрһәтелгәйне:

Ғәли Ибраһимов. «Кинйә». Тарихи роман. Беренсе китап.
Әнүәр Бикчәнтәйев. «Хушыгыҙ, көмөш ямгырҙар». Икенсе китап.
Ногоман Мусин. «Мәңгелек урман». Роман. Икенсе китап.
Фәрит Исәнголов. «Ҡышҡы йәйгор». Роман.
Йыһат Солтанов. «Ядкәр». Роман.
Ғәйфулла Вәлиев. «Өстамаҡ». Повесть.
Булат Рафиҡов. «Тауҙарҙа ҡар иртә ята». Повесть.
Азат Магазов. «Атылган йондоҙҙар». Повесть.
Руслан Мәксүтов. «Такси — алтынсы яртыла». Повесть.
Вәзих Исхаҡов. «Тулҡындар ярга ҡага». Повесть.

Беренсенән, күрһәтелгән биш романдың бер йыллыҡ журналға һыйыуы мөмкин түгел; икенсенән, ул романдар теҙмәһендә минекенең аҙаҡҡа ҡуйылыуы хәүефле ине. Баш редакторыбыҙ Рәйес йәштәш Низамов, өҫтәрәк Назар Нәжми хаттарынан асыҡ күренеүенсә, «үҙ фекере булмаған» һәм партия өлкә комитеты, яҙыусылар берлеге тарафынан иҫкән һәр елгә япраҡтай ҡалтырап торған йомшаҡ күңелле бер йән булып, 1975 йылда редакцияға яуаплы секретарь итеп әлеге лә баяғы шул карьерасы бәндә — белеме һай, илһамы тар, түрәләргә ялағайлығы көслө, миңә ҡарата ҡара эсле графоман Ә.С. Гәрәйев ҡуйылғас, шул һыҙғырып сығарған елгә буйһыныуҙан арына алмай ине. «Ядкәр»ҙе ул, баш редакторыбыҙ, 1975 йылдың ноябрендә уҡып сығып, уны 1976 йылдың икенсе яртыһында йәки 1977 йылдың тәүге яртыһында баҫып сығарырға вәғәҙә биргәйне. Ләкин Гәрәйевтең ыжғыр еле көслөрәк булып сыҡты: 1976 йылдың 31 декабрендә шунын

ҡотҡоһо аша редколлегия ағзалары ауыҙынан романға яңы талаптар һәм дәғүәләр ҡылынды, былар барыһы әҫәрҙе фәҡәт тотҡарлау, йәки алып ырғытыу өсөн ине. Шуларҙың бөтәһен 1977 йылдың апрелендә Башҡортостан яҙыусылар берлеге ойошторған ҙур йыйылышта ҡәләмдәштәргә еткерергә уҡталдым:

Уртаға һалып һөйләшәйек.

Китап авторҙарының кәңәшмәһе тикмәгә саҡырылмағандыр, бында, моғайын, яҙыусының хеҙмәтенең ил алдындағы мөһимлеге, яуаплылығы, шулай уҡ автор һәм китап яҙмышы тураһында емешле фекер алышып, тәғәйен саралар күреү күҙ уңында тотолалыр. Был иһә һәммәбеҙгә ҡағылған, иң ауыртҡан мәсьәлә.

Һуңғы ваҡытта хөрмәтле идара етәкселәребеҙҙең иң ҙур трибуналарҙан тороп роман жанрыбыҙ тураһында «кирбес» тигән ләғнәтләү эпитеты ҡушып һөйләүҙәрен йыш ишетергә тура килгәнлектән, мин дә был урында үҙемде шаҡтай ғәйепле һанап баш эйәм. Сөнки 1962 йылдан биреле мин шул жанрҙа ҡарышып эшләп килдем, 1966 йылда «Ағиҙел»дә, ә 1967, 1969, 1975 йылдарҙа «Совет Башҡортостаны» гәзитендә ҙур-ҙур роман өҙөктәре баҫтырҙым. 1969 йылда «Коммунист», 1974 йылда «Ядкәр» тигән әҫәрҙәрем Яҙыусылар союзының проза секцияһы ултырыштарында тикшерелеп ыңғай баһаланды. Шунан һуң мин был ике әҫәрҙе лә артабан камиллаштырыу, матбуғатҡа әҙерләү өҫтөндә эшләнем.

«Ядкәр» романын 1975 йылдың 27 октябрендә «Ағиҙел» редакцияһына тапшырҙым.

Башҡорт һәм урыҫ халыҡтарының тәрән тарихи туғанлығын, хатта этногенетик ҡәрҙәшлеген дәлилләүҙе үҙәк проблема итеп ҡуйған был политик роман беҙҙең бөгөнгө башҡорт совет интеллигенцияһының изге социалистик Ватан, халыҡ бәхете өсөн фиҙакәр көрәше, беҙҙең сафтарҙағы идеологик таҙалыҡ, быуындарҙың күсәгилешлеге, тормошобоҙҙоң юғары әхләҡ нормаларын йәш быуынға аманат итеп биреп ҡалдырыу кеүек мөһим мәсьәләләргә арналған. Унда яҙыусылар, ғалимдар, рәссамдар, артистар, хужалыҡ һәм партия етәкселәре һәм башҡа төрлө профессия кешеләре ҡаршыһында үҙенең ҡырҡа үткерлеге менән көн үҙәгендә торған, фәнни-техник революция осоронда көсөргәнешле заманабыҙ үҙе ҡуйған мораль-этик проблемалар киң тарихи пландағы ваҡиғалар, синфи көрәш, намыҫ һәм намыҫһыҙлыҡ, мөхәббәт һәм нәфрәт, шәхес һәм йәмғиәт, кеше һәм тәбиғәт кеүек көстәр араһындағы киҫкенләшкән конфликт аша, йәнле картиналар ярҙамында сиселә. Роман формаһы буйынса бер-береһен бәйләп тултырыусы, замандарҙы берләштереүсе өс монологка — граждандар һуғышында ҡатнашҡан ҡарт быуын, бөгөнгө көрәшсе йәш быуын һәм автор монологтарына ҡоролған. Был, беҙҙең әҙәбиәт өсөн күнегелгән булмаһа ла, донъя әҙәбиәтендәге билдәле алым.

Шулай итеп, бөгөнгө көн мәсьәләләрен тарихи һәм ғилми факттар менән беркетеп күтәргән **политик роман** был.

1975 йылдың ноябрендә баш редактор (Р.Ғ. Низамов) уҡып сығып, автор менән һөйләште. Ул романды ыңғай баһаланы һәм уны 1976 йылдың икенсе

яртыһында, йәки 1977 йылдың тәүге яртыһында «Ағиҙел»дең өс һанында баҫып сығарырға вәғәҙә бирҙе.

«Ядкәр» романын редакция 1977 йылда баҫырға әҙерләй тип, «Ағиҙел»дең реклама буклеттарында ла ташҡа баҫып иғлан ителде.

Романда КПСС-тың өлкә комитеты секретаре образы булғанлыҡтан, тәүҙә уны өлкә комитетындағы иптәштәрҙән дә уҡытып алайыҡ, замечаниелары булһа, төҙәтерһең, тинеләр. Мин шатланып ризалаштым һәм «Ядкәр» тейешле иптәшкә тапшырылды. Ләкин, ярты йылдан артыҡ ваҡыт үтһә лә, үкенескә ҡаршы, роман унда ҡуҙғатылмаған булып сыҡты. Кире алып ҡайтып, фәҡәт йыл аҙағында, 1976 йылдың 31 декабрендә генә миңә редколлегия ағзаларының фекерен ишетеү насип булды. Унда, файҙалы кәңәштәр менән бергә, көтөлмәгән бәлә-ҡазалар килеп сыҡты.

Йәғни:

1. Автор тормоштан алда барырға тырышҡан; ул тормош әле үҙе хәл итмәгән проблемаларҙы (тәбиғәтте бысратыуҙан һаҡлау, тәүтел — праязык, халыҡтарҙың этногенезы) күтәрә һәм хәл итергә маташа. Ә проблемаларҙы тәүҙә тормош үҙе хәл итеп бөтмәй тороп, яҙыусы уға тотонорға тейеш түгел, имеш...
2. Геройҙарҙың артында прообраздарын төҫмөрләп булмай. Романда һүрәтләнгән яҙыусылар, ғалимдар артында беҙҙең ҡайһы конкрет яҙыусы, ғалим торғанын күрмәгәс, образдар тормошсан булмай, имеш...
3. Әҫәр стиленә ҡарата: романтик әҫәрме был, юмористикмы, публицистикмы, гротекскмы, эссемы?.. Әллә бөтәһе ләме?.. Шуларҙы билдәләүе ҡыйын, алымдарҙың барыһы ла ҡулланылған һ.б.ш. туҙға яҙмаған сәбәптәр... Әйтерһең, иң оло тормош материалдарын да үҙенә һыйҙыра алған жанр (роман) художество сараларының байлығын да үҙенә мул ала алмай...
4. Композиция мәсьәләһе. Был романдың композиция теүәллеген оппонентарыбыҙ ошоғаса күнегелгән «ваҡиғалар романы»ның үрнәгенән сығып барлай; бында иһә композиция теүәллегенең умыртҡаһын ваҡиғалар теҙмәһе түгел, ә фекерҙәр ағышы һәм характерҙар полифонияһының тәшкил итеүен күрергә лә, танырға ла теләмәй. Һөҙөмтәлә авторҙың көсөргәнешле ҡыҫым аҫтында ябай күмерҙән хасил иткән алмас кристалын кире күмергә әйләндертергә, заурядный роман эшләтергә тырышалар, тигән йәмһеҙ тойғо тыуа. Ә баш редакторҙың тәүге позицияһынан, көтмәгәндә, 180 градусҡа боролоуы уның йәки үҙ аллы фекергә эйә кеше булмауы, йәки ҡайҙандыр яһалған баҫымға тиҙ үк бөгөлөп төшә торған умыртҡа һөйәкһеҙ булыуы тураһында асыҡ һөйләй...

Автор юғарыла күрһәтелгән пункттарҙың барыһын да **хата фекер, кемдәрҙер тарафынан ҡаршы ҡоролған яһалма тотҡарлыҡ** тип иҫәпләй һәм, был осраҡта гәрсә яңғыҙ үҙе булһа ла, тулыһынса үҙ фекерендә ҡала, сөнки Хаҡиҡәт бер ваҡытта ла ябай арифметик күпселек менән билдәләнә алмай. Хатта бер үҙе генә тороп ҡалғанда ла Хаҡиҡәт мәңге Хаҡиҡәт килеш ҡала.

Оппоненттарҙың береһе (Р.Б. Байымов) әҫәрҙә обком секретаренең талантлы йәш шағирҙы ижади һәләкәттән ҡотҡарыу өсөн критик моментта уның

өйөнә хәлен белергә инеп сығыуын бюрократтарса нарыҡлап: «Обком секретаре ниңә шағирға үҙе хәл белә барһын? Аппараттағы берәй кесерәк хеҙмәткәрҙе ебәрә лә ҡуя ул...» ти. КПСС Үҙәк Комитетының Генеральный секретаре Л.И. Брежнев иптәштең: «Талант — это национальное достояние, его надо беречь», — тигән бик хаҡ һүҙҙәренән һуң был оппоненттың иҫбатлауы бик тә сәйер тойола.

Оппоненттарҙың икенсеһенең (Ғ.Й. Рамазанов) романда проблема итеп ҡуйылған тәүтел (праязык) мәсьәләһенең беҙгә нимәгә кәрәге бар, ул беҙҙә проблема түгел, тип үҙенең ғилми һәм политик һуҡырлығын авторға тағырға маташыуы, шуны әҫәргә кәртә итеп ҡуйыуы ла ғәжәп иткес аңлайышһыҙ һәм аяныслы яңғырай.

Ошоға бәйләп, заманында ауыҙыбыҙҙы ныҡ бешергән, терһәкте тешләргә мәжбүр ҡылған рухи һуҡырлыҡтың бер нисә классик өлгөләрен иҫләйек.

1. Күп йылдар буйы генетиканы, генетика атаһы Менделдең бөйөк асышын «антинаучный фәстереү», реакцион тәғлимәт, тип һәләк итеп йөрөнөк. Аҙаҡтан, уның бөйөк асыш икәнлеген тамам төшөнөп, генетика фәнен илдә ҡабат тергеҙеү өсөн күпме көс түктек һәм түгәбеҙ!..
2. Кибернетика фәнен — «буржуаз шарлатанлыҡ», уның атаһы Винерҙы «шарлатан» тип көлөп йөрөнөк. Аҙаҡтан, XX быуаттың был фәнни-техник революцияһы өлкәһендә йоҡлап ҡалғанлығыбыҙҙы төшөнөп, илай-илай тигәндәй, уны ҡыуып етергә мәжбүр булдыҡ...

Беҙ һүҙ алып барған тәүтел — праязык та донъялағы халыҡтарҙың этногенезын билдәләүҙәге үҙенең әһәмиәте яғынан генетика һәм кибернетика менән бер кимәлдә тора, уның киләсәге ҙур.

Тәүтел — праязык аша беҙ, был ғилми ҡорал донъяның ҡайһы лагеры ҡулында хеҙмәт итеүгә бәйле рәүештә, донъя халыҡтарын бер-береһенә яҡынайта, туғанлаштыра, йәки уларҙы бер-береһенән айыра, дошманлаштыра аласаҡбыҙ. Әгәр был идеологик ҡорал беҙҙең социалистик лагерҙа тиҙерәк үҙләштерелһә, ул баштан уҡ тулыһынса беҙгә, коммунизм идеалдарына тоғро хеҙмәт итәсәк. Ә киреһенсә булһа, ул беҙгә һөҙөмтәләрен әлегә күҙ алдына ла килтерә алмаҫлыҡ зыянлыҡ менән янай. Был — стратегик ҡорал. Бөгөнгө империализм аполегеттары тарафынан «кеше азатлыҡтары» маркаһы аҫтында глобаль кимәлдә алып барылған идеологик көрәш иртәгә тағы ла нескәрәк һәм тәьҫирлерәк хөлләгә — халыҡтарҙың «ырыу-ҡәрҙәшлеге», тел һәм тарих, этногенетик территория һ.б. мөнәсәбәтлегенә төрөнәсәк. Хәҙерге маоизм идеяларына ағыуланған Ҡытайҙың беҙҙән «үҙ территорияларын» дәғүәләүе быға бер асыҡ миҫал.

Империалистик илдәрҙең идеология штабтары шуны алдан һиҙенеп, кешелек донъяһындағы йәш фән — тәүтел (праязык) өлкәһендә интенсив эш алып бара.

Был фән беҙҙең илдә әлегә кәрәк булғанға ҡарағанда аҙыраҡ өйрәнелә, ә Башҡортостанда ул бөтөнләй юҡ: беҙҙә бер вузда ла, ғилми институтта ла уның менән планлы рәүештә берәү ҙә шөғөлләнмәй.

Тәүтел (праязык) менән беҙҙең республикала, моғайын, айырым энтузиастар ғына үҙ алдына эшләйҙер. Шундайҙарҙың араһында был фәнгә иң

тәрән итеп инеүсе, иң бай фактик материал туплап, эшкәртеп, әһәмиәтле асыштарға ирешеүсеһе — (тыйнаҡһыҙлығымды кисерегеҙ!) мин фәҡирегеҙ буламдыр. Ғәфү итегеҙ: был хаҡта хәбәр итерлек мәғлүмәтле кеше булмағас, фән хаҡына үҙемде үҙем әйтергә тура килә. Тимәк, романда мин, уның художество-нәфис ҡиммәттәренән тыш, бөтә кешелек донъяһы өсөн актуаль булған һәм киләсәктә лә актуаль ҡаласаҡ ғилми проблема ла ҡуям. Шул ыңғайҙа уҡ проблеманың хәл ителешен дә бирәм. Әгәр киң полотнолы «Ядкәр» әҫәре автор тарафынан уйланылған күләмдә һәм кимәлдә донъя күрһә[28], ул бынан һуң йөҙ йыл үткәс тә кешеләргә үткер ҡорал булып хеҙмәт итәсәк.

Әйтәйек, нефтселәр тураһындағы «производство» әҫәре, беҙҙең әҙәбиәттә авторҙары тере саҡта уҡ проблемаһы иҫкереүгә дусар булған «кукуруза проблематикалы» йәки нефтселәрҙең «турбобур» проблематикалы әҫәрҙәребеҙ кеүек үк, 40 — 50 йыл эсендә үҙ әһәмиәтен юғалтасаҡ, сөнки улар бөгөнгө көн өсөн күпмелер кәрәк булған, ләкин **тактика** әһәмиәтендәге генә әҫәр. Ғалимдарҙың иҫәпләп сығарыуынса, 50 йылдан һуң Ер шарында бөтөнләй нефть ҡалмаясаҡ һәм нефть сығарыу проблемаһы ла булмаясаҡ. Ә «Ядкәр» үҙенең проблематикаһы буйынса, үткән замандан бөгөнгө аша киләсәккә күпер һалыусы **стратегия әһәмиәтенә эйә ул.** Бындай романдарға ла юл ябылмаҫҡа, уларҙың алыҫҡа ата торған стратегик ҡорал икәнен онотмаҫҡа, улар ҙа тиҙерәк донъя күрергә тейешлеләр.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, беҙҙә әҫәрҙең яҙмышын хәл ҡылғанда шәхси симпатиялар һәм антипатиялар хөкөм һөрә, буғай. Һәр хәлдә, минең үҙемдең әсе ижади яҙмыш дәлилләй шуны.

Бына алдымда документ, уның төп нөсхәһе, моғайын, Яҙыусылар союзының папкаһына тегелгән:

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы секретаре ип. В. Исхаҡовҡа.

Һеҙҙең миңә 8.01.1973 йыл ебәргән хатығыҙға яуап итәм:

Башҡортостан китап нәшриәтендә «Ерем, һиңә өндәшәм» исемле шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығым 1974 йыл планында сығыуҙы көтөп ята; унан тыш:

«Аҡ ҡайындар араһында» — повесть һәм хикәйәләр китабын (күләме 20 табаҡ) — 1975;

«Йәшел йылан күрмәге» — сатирик повесть һәм хикәйәләр йыйынтығын (күләме 10 табаҡ) — 1976;

«Һаҡмар-һыу»[29] романын (күләме 20 табаҡ) — 1977;

«Коммунист» романын (күләме 20 табаҡ) — 1978;

«Кипаристар сәскә атҡан саҡта» романын (күләме 15 табаҡ) — 1974 — 1979 йылдарҙағы нәшриәт планына индереүегеҙҙе ныҡлап һорайым.

Иҫкәртмә. Күрһәтелгән әҫәрҙәрҙең бөтәһенең дә аҡ йәки ҡаралама ҡулъяҙмаһы әҙер, улар тик һуңғы эш стадияһын — нәшриәткә әҙерләп биреүҙе көтә.

Яҙылаһы әҫәрҙәр — пландарым хаҡында әлегә әйтмәй торам.

---

[28] Ә ул, үкенескә ҡаршы, 1992 йылда ғына һәм бик ныҡ ҡыҫҡартылып, имгәтелеп донъя күрҙе.

[29] 1996 йылда «Ерем, кешеләрем» исемендә сыҡҡан китабым.

Ихтирам итеп, ***Й. Солтанов.*** *12.01.1973.*

Беҙҙә күп эшләгән кешене яратмайҙар, тиҙ эшләгәндe бигерәк тә. Ләкин мин, документтан күрәһегеҙ, күп эшләһәм дә, тиҙ эшләүселәр, бигерәк тә әҫәрҙәрен тиҙ ташҡа баҫтырыусылар категорияһына ҡарамайым. Сөнки 1973 йылдың ғинуарында уҡ ҡулъяҙмалары әҙер булған (ә мин романдарымды 1962 йылда яҙа башланым һәм бер туҡтауһыҙ ошо көнгәсә һаман яҙам) күрһәтелгән китаптарымдың әле береһе лә ташҡа баҫылып донъяға сыҡҡаны юҡ.

Башҡорт АССР-ының 50 йыллығына арнап яҙылған, «Ағиҙел»дең 1969 шул оло юбилей йылғы байрам һанында баҫылып сығып, йәмәғәтселек тарафынан яҡшы баһаланған «Минең шәжәрәм» поэмаһы, күҙҙәрҙе ҡарайтып, ни бары биш йыл үткәс кенә китап булып сыға алды. Ә минеке менән бер йылда уҡ баҫылған башҡа өс иптәштең поэмаһы икенсе йылында уҡ китап нәшриәтендә донъя күрҙе.

Егерме йыл буйына яҙып, ваҡытлы матбуғатта һынау үткән хикәйәләр һәм повестәремде әле булһа китап итеп сығара алғаным юҡ.

Сатирик повесть һәм хикәйәләр йыйынтығым да, бая аталған «Коммунист», «Кипаристар сәскә атҡан саҡта» тигәндәрем дә ята һаман.

Ләкин мин араҡы эсеп урамда эт һуғарып йөрөмәнем, «яҙыусы яҙырға тейеш» тигән девиз буйынса һаман баш ҡалҡытмай эшләнем һәм эшләйем.

Һөҙөмтәлә «Ядкәр»ҙең хәле үҙегеҙгә билдәле.

Шулай ҙа һаман эсеп-иҫереп, эт һуғарып йөрөмәйем. Эшләгәндe яратмаһалар ҙа эшләйем.

Һәм, әлеге документта планлаштырылғанса, быйыл, «Һаҡмар-һыу» тигән яңы романымды бөттөм, иптәштәргә уҡырға тапшырам.

Шул уҡ план буйынса «Коммунист» романының ҡулъяҙмаһын камилләү эштәре бара.

Тимәк, мин яҙыусылар союзы идараһының һорауы буйынса мәғлүм иткән планымды үтәп киләм. Ләкин союз менән нәшриәт кенә миңә шәфҡәтлелек күрһәткәне юҡ — әҫәрҙәрем ҡулъяҙма хәлендә һаман. Әгәр игенсенең сәскән игенен урып алдыртмай яткырып ҡалдырһалар, йәки уны малдан тапатып мәсхәрәләһәләр, игенсе түҙер инеме?.. Ә яҙыусы түҙә... Ғәҙелһеҙлек был.

Шулай ҙа үҙ әҫәрҙәрендә уның төп хужаһына — уҡыусыларға еткерә алмай яфа сигеү, этлек күреү, материаль мохтажлыҡта интегеү — күтәреп булмаҫлыҡ йәбер.

Башҡортостан Яҙыусылар союзынан, китап нәшриәтенән «Ядкәр» романын нәшриәт планына индереп, килешеү төҙөшөп, миңә ҡулъяҙманы тағы ла ныҒыраҡ камиллаштырыу өсөн бер йыл иркенләп ултырып эшләрлек материаль мөмкинлек биреүҙәрен һорайым. Шундай гуманлы шарттар Ғәли ағай Ибраһимовҡа (иншАлла!) «Кинйә» романының ҡулъяҙмаһы әҙер булмаҫы борон уҡ тыуҙырылды лаһа. Ә минең ҡулъяҙма әҙер, уның ҡайһы бер етешһеҙлектәрен бөтөрәһе генә бар.

Ҡояш бөтә кешегә лә бер тигеҙ яҡтырта бит. Шул ҡояш аҫтында уңып бешкән башаҡтарҙы төбөндә яткырып серетеү — аяныслы хужаһыҙлыҡ был.

Йыһат Солтанов. Апрель, 1977.

1977 йыл миңә, ғөмүмән, башынан уҡ йөрәк өҙгөс шәхси ҡайғылар килтерҙе. Февраль айында мәктәпкә киткән Сабит улым урамда шағир Тимер Йосоповты осратып, ҡорҙашым һәм дуҫым Рәми Ғариповтың һис көтмәгәндә ҡапыл вафат булыуы хәбәрен алып ҡайтҡас, тетрәнеп, өйҙән сығып йүгерҙем...

Үлеренән ике йыл элек кенә тап килешкәндә, алдыма ҡуйған рюмкаһын кире этәреп, өҙә ҡырҡып әйткәйнем: «Эсеүҙе ташлайыҡ, ҡорҙаш. Һаман былай барһаҡ, түҙә алмаясаҡбыҙ — үләсәкбеҙ бит. Мин үҙем ташланым, һиңә лә бөгөндән ташларға кәңәш итәм». — «Юҡ инде, — тип ҡырт өҙҙө дуҫым, — эсеүем — эсеү, мин уны ташламаясаҡмын!» (Әйткәндәй, яҙыусы Б.З. Рафиҡов та «хәмер командировкаһынан» тамам төҙәлеп, «Ағиҙел»дә мин, Абдулхаҡ ағай Игебаев ултырған бүлмәлә өсөнсө иптәш сифатында әүҙем эшләй башлағас, ошоға оҡшаш кәңәште ысын күңелдән уға ла биргәйнем. Эш шунда: иртәнсәк һуңлабыраҡ килһәм, яңы хеҙмәттәшебеҙ яңғыҙы (Абдулхаҡ ағайҙың өйҙә ижад көнө ине) хозурланып, түшәмде күтәртерлек итеп тәмәке бороллатып ултыра, төтөнө балта аҫырлыҡ ҡуйырған.

Һөйләшеү ҡыҫҡа булды: «Абау, ниндәй зәхмәт ояһы был?!. Үләһең бит былайһа — ташла тәмәкене!» — «Ю-у-уҡ инде, — тине һуҙып, — ташламайым! Донъялағы берҙән-бер ҡыуанысым бит ул минең!» (Һәм шул «ҡыуаныс»ы әҙәмде ваҡытынан элек фани донъянан алып китте)...

Ә Рәми менән булған баяғы һөйләшеүҙә, уның ҡырҡа яуабынан күңелем бик ныҡ ҡайтып: «Улайһа мин бынан һуң һинең янына килмәйәсәкмен, сөнки, нисә генә ҡарама, янында — "шәкерттәрең" тигән эскесе өйөр, алдында хәмерле шешә!..» — тип асыуланып сығып киттем дә, ысынлап та, уға барып йөрөүемде туҡтаттым; осраҡлы тап килешеүҙәр ҙә ҡыҫҡа ғына һөйләшеүҙәр булғылай ине. Эшенән һуңғы тапҡыр ҡыуылыуына тиклем бер арала ул йәнә «Башҡортостан ҡыҙы» журналында баш редактор Рәкиә Рөстәмова ҡулы аҫтында хеҙмәткәрләнеп алды. Редакцияларыбыҙ матбуғат йортоноң бер үк ҡатында ине. Эш сәғәттәре аҙағынан бер кисәлә, яңы яҙған шиғырымды тотоп, эргәһенә кереп ултырҙым, бөтә халыҡ таралышҡан — икәүҙән-икәү генә оҙаҡ гәпләштек. Ул, бар ихласлығын һалып, киләсәктә кәрәк булырын алдан күреп, буғай, зәңгәр копировка аша (копияһын үҙендә ҡалдырырға) йәш шағирәләргә шиғриәт серҙәре буйынса йылы эстәлекле хаттар яҙып мауыға — бер нисәһен уҡып та ишеттерҙе. «Кәтибә апайҙан һуң был редактор менән эшләү ҡайһылайыраҡ?» — тип белешкәс, илар хәлгә етеп: «Их, әйтмә лә инде, ҡарт! Булыр ҙа булыр кеше, әммә бындай ҙа яуыз, ҡара йөрәкле булмаҫ! — тине лә, үткәндәрен иҫләп, буғай, бер килке тын ултырғас: — Кәтибә апай менән бергә эшләү осоро, быны менән сағыштырғанда, үҙе бер ожмах булған икән ул!» — тип өҫтәне...

Рәми Ғарипов төптән үҫкән имән кеүек таҙа кәүҙәле, бер сиргә лә бирешмәүсән зат булып, «үҙ ғүмеремдә бер тапҡыр ҙа поликлиника тупһаһын аша атлап кергәнем юҡ», — тиер ине. Тик аҙаҡҡы йылдарында ғына ваҡыт-ваҡыт йөрәгенең тибеүҙән туҡтап тороуын (аритмиялыр?) һәм яңынан эшләп китеүен йылмайып ҡына әйткеләп ҡуйһа ла, табиптарға күренгәне булманы. Тажикстанға һуңғы оҙайлы сәфәрендә йөрөп ҡайтҡас, вагонда йоҡлап килгәнендә төшөндә

кемдер йөрәгенә хәнйәр ҡаҙауҙан ҡаты һыҙланып уяныуын (моғайын, микроинфаркт кисергән) һөйләп тә шомландырҙы, әммә быға тейешенсә иғтибар итмәгәнлектән, төшө — төш кенә булып ҡалды ла онотолдо...

Рәми ҡорҙашым менән мин, бер үк йылда тыуған йәштәштәр генә түгел, ә фекерҙәштәр ҙә булыуыбыҙҙы артыҡ сурытып тормайым. Был хаҡта уның үҙ ваҡытында миңә бүләк итә барған китаптарындағы (уларҙы аҙаҡ шағирҙың ауылындағы йорт-музейына тапшырҙым) автографтары ла тәрән мәғәнәле һөйләй:

Рәми Ғарипов. Таш сәскә. Лирика. Өфө, 1958. (Китаптың корректураһы, коленкор менән тышлап төпләнгән). Титул битендәге автограф:

"Йыһатҡа – ҡаным – Рәми. 15-16/VII. Өфө".

Рәми Ғарипов. Осоу. Шиғырҙар. Өфө, 1966. Автограф:

"Йыһат ҡарт! Шағир, әҙип тик үҙенең ғүмер юлында ҡаны менән бергә ҡушып бөтәһен татығанда ғына, шул ут йотҡандарын ҡағыҙға төрөп бирә белер теле булғандан, шул серҙе аңлар иле булғандан ғына шағир-әҙип икәнен һин беләһең. Шулай булғас, минең һымаҡ күп ҡыуыҡ осормаҫһың, тим, дуҫҡай. Көтәм. Ышанам! Рәми ҡартың. 28/IV – 66".

Рәми Ғарипов. Аманат. Йырҙар, шиғырҙар, ҡобайырҙар. Өфө, 1969. Автограф:

"Йыһат ҡорҙашыма – һин йәшәгәнгә мин бәхетле!
Йәшәйек әле, йәшәйек!
Дошмандың эсе китеп ятһын!
Ни ҙә булһа әйтербеҙ!..
70-енсе йыл, 9/I – (ҡанлы көн икән...)".

Рәми Ғарипов. Горицвет. Уфа, 1969. Автограф:

"Йыһат ҡартҡа – минең "знакум" һаҡалы[30], шулай ҙа сәс-һаҡал аҫтында беҙ икенсе бер <u>донъя</u> йөрөтәбеҙ.
Шул донъя иҫтәлеге!
Йәшәп ҡарайыҡ әле, -- Рәми. 13/II – 70".

Рәми Ғарипов. Аманат. Йырҙар, шиғырҙар, ҡобайырҙар. Өфө, 1969. Был китапты шағир Шакир Ғәлингә бүләк иткән, ә ул иһә, "һаҡла" тиеп, миндә ҡалдырып торғайны, ун йыл үткәс (Рәми үлгәс) кереп алып китте. Шакирға яҙылған автограф:

"Шакир ҡартҡа, -- һине күрһәм, халҡымдың ҡот осҡос <u>талантын да</u> күрәм, <u>фажиғәһен дә</u> күрәм; бәй, күргәс ни, <u>үҙемсә көн күрәм</u>, тик мин

---

[30] Мөнтәлеп сыҡҡан урыҫса китабына ҡәнәғәтһеҙлек белдерә.

киткәс, юҡҡа-бушҡа күҙйәш ҡойоп ултырмағыҙ, бура бурағыҙ, итәк тулы бала-сағa үҫтерегеҙ!.. Ҡалғаны – Аманат! Рәми. 10/II – 70″.

«Интернат-мәктәп» (хәҙерге Р. Ғарипов исемендәге гимназия) туҡталышында «хрущевка» йортоноң беренсе ҡатындағы ике бүлмәле фатирында бала-сағалары ишәйеп һәм ҙурайып барһа ла, Яҙыусылар берлегенән киңерәк торлаҡ һорап ғариза яҙманы, сөнки быныһы өсөн дә фатир хаҡын айҙыҡын — айға үҙ ваҡытында түләргә хәле етмәй, йорттар идаралығы әленән-әле электр сымын өҙөү йәки йылы һыуҙы ябыу менән янаған хаттар ебәреп йөҙәтә ине. Ана шулай ғаризаһы булмауға ла ҡарамаҫтан, көтмәгәндә, Яҙыусылар берлеге рәйесе Әсғәт Мирзаһитов менән Литфонд директоры Зөлфәр Хисмәтуллин ағайҙар көндәрҙән-бер көндө Рәмиҙе үҙҙәре идараға саҡыртып алып, Рихард Зорге урамындағы туғыҙ ҡатлы яңы йорттоң етенсе ҡатындағы өс бүлмәле фатирға ордер тотторалар. Нигеҙ туйына бер килке яҡын ҡәләмдәштәре үҙ-ара иғәнә һалышып, кейем шкафы һ.б. нәмәләр алып барып ҡотланыҡ...

Бына шул ҡотло төйәгендә 1977 йылдың февралендә, үҙе донъяға килгән айҙа, Рәми яңғыҙы ҡала (тыуған көнөн дә балалары менән генә үткәрә) — ҡатыны Надежда Васильевна эше буйынса аҙна-ун көнгә Мәскәүгә командировка алып, бер ыңғайҙан Мәскәү янындағы Переделкино ҡасабаһына әсәһенең хәлен белергә киткән (шул көндә Рәми командировканан ҡайтып, улар икеһе Өфө аэропортында ҡыҫҡа ғына мәлгә осрашып аймылыша). Шағир тирәһендәге шау-шоулы өйөр (“шәкерттәре”), иркенлектән файҙаланып, һәр береһе шешә ҡыҫтырып, тигәндәй, шағирҙы тыуған көнө менән ҡотларға эркелә, өйҙә ҡоролған көслө тантана аҙна-ун көнгә һуҙыла...

Надежда Васильевнаның шул саҡтағы һөйләүенсә, ул Мәскәүҙән ҡайтып ингәндә мәжлес инде таралған, зал эсе — тәмәкенән ҡара һөрөм, өҫтәл өҫтөндә — күбәләй өйөлгән тәмәке төпсөгө һәм рюмкалар, ә кухня иҙәнендә буш шешәләр үтеп кергеһеҙ рәүештә тумарлап ята... Ә минең тоҫмаллауымса, моғайын, был хәлгә бәйле ир менән ҡатын араһында буран да ҡубынғандыр...

Ошо урында Рәмиҙең күптәнге кисерештәрен иҫкә төшөрөү урынлы: *«Йөрәк ауырта. Миңә инде был донъянан тайырға ла ваҡыт инде».* (Әҫәрҙәр, II том, 493-өнсө бит). *«Ниндәй генә нәжестә ҡойонһам да, ниңә һуң мин бер яҡтылыҡҡа, яҡшылыҡҡа, сафлыҡҡа ышанам икән! Бәлки, минең бөтә фажиғәм дә шундалыр... Әллә минең бөтә ғүмерем ҡот осҡос бер хата микән? Ә үҙем: «Хаталар ҙа булыр тормошоңда,/Тик тормошоң хата булмаһын», — тигән булам. Инанам, яҙам. Бала саҡтан биреле ошо ғазаптарҙы кисерәм. Ниңә? Үҙеңдең бишегең тирбәлгән өрләктәге тырма тешендә йөрәгең туҡтаған кәүҙәң тирбәлеп тороу артығыраҡ түгелме икән был донъяла?..* (Шағирҙың аҫылынып үлеү уйы ла булған, тимәк... — *Й.С.*). *Инде тегендә (әрәүергә) былай ҙа күп ҡалмаған, үҙ ҡулдарым менән һыҡмайынса ла шартлар был йөрәк»...* (Әҫәрҙәр, III том, 67-нсе бит). *«Осто донъя ситлегенән тарһынып күңелем ҡошо» (Ғ. Туҡай) — минең хәлгенәм ошо...*

Онотмайым тыуған көнөмдө (онотмаҫ өсөн үлер көнөңдө). [Тыуған көнөндә үлергә йыйынғандай... — *Й.С.*]. *Кешенең бөтә ғүмере ҡыҫҡа бер һыҙыҡҡа һыя: 1932 — 1999(?)»...* (Шунда уҡ, 71-енсе бит. Ләкин шағир аҙаҡҡы цифрында яңылышҡан –

туҡһан туғыҙғаса барып етмәне). *«Мин кешеләр өсөн йәшәйем — кешеләр мине аңламаны... Иртәгә миңә — 45. Өфө аэропортында миңә шул тиклем ғәзиз тауыш исемемде атап ҡысҡыра: Надя.*

Беҙ инде бөтөнләй ят кешеләр, тиерлек. Ләкин үтелгән ғүмер, ғүмеремдең үткән 21 йылы 21 хәнйәр булып йөрәккә ҡаҙала.

Тағы ла мин киткәндәгесә мәғәнәһеҙ һөйләшеү. Йөрәк өҙгөс әрнеү!..» (Шунда уҡ, 76-нсы бит).

Һәр хәлдә, ҡатыны ҡайтҡандың кисенә үк Рәмиебеҙ йөрәге ауыртып йығылған; Надежда Васильевна, өйҙә телефон юҡлыҡтан, лифттағы микрофондан йорттар идаралығының диспетчерына өндәшеп, «тиҙ ярҙам» саҡырттырған һәм шағирҙы Туҡай урамындағы 1-енсе больницаға илтеп һалғандар. Надежда Васильевнаның әйтеүенсә, Рәми тарафынан бер ниндәй ҙә хәүеф-хәтәр һиҙелмәгән, фәҡәт тәмәке килтереүен генә үтенеп ҡалған... Шағирҙың баяғы үҙе тураһында әйткәне аҡтыҡҡаса тура килеп, дауаханаға ул унең тупһаһы аша *атлап* инмәгән, ә күтәреп керетеп, күтәреп алып сыҡҡандар...

Әммә-ләкин, әммә-ләкин... күп йылдар буйына тынғы бирмәгән, таныш-белеш араһында быш-быш һөйләшелгән шомло риүәйәтте лә ошо урында мәғлүм итмәйенсә булмай -- Рәмиҙең ғәмәлдә ҡайһылай үлеүе тураһындағы имеш-мимеш был, уны миңә байтаҡ ҡәләмдәштәремдән ишетергә тура килде. Бына иң ышаныслыһы -- Кәтибә апай Кинйәбулатова һөйләгәне: өйҙә ғаилә бураны уйнағанда Рәми туалетҡа инеп киткән дә, оҙаҡ ваҡыт сыҡмағас, ҡатыны Надежда Васильевна ишекте асып ҡараһа, иренең бауҙа муйынынан аҫылынып тороуын күреп, сығып югергән һәм шул уҡ подъездағы Рәмиҙең шешәләшен -- сантехникты алып килеп, мәйетте бау-боғалаҡтан алғандар. Надежда Васильевна Рәмиҙең 1-енсе интернат-мәктәптәге уҡытыусыларының береһенә (Кәтибә апай исемен дә әйткәйне, Роза, буғай, -- онотҡанмын) телефондан шылтыратҡан һәм ул югереп килеп еткән...

Һәм бына өҫтәлмә мәғлүмәт: шағир вафатынан һуң егерме ете йыл үткәс яҙып алынғаны:

21.03.2004.

Надежда Васильевна Ғарипова менән унең фатирында Рәмиҙең үлеме тураһында һөйләштем (шағир хаҡындағы иҫтәлектәр йыйынтығын баҫмаға әҙерләүем барышында ҡайһы бер материалдарҙы алырға барғайным).

Рәми Урта Азиянан күпкә һуңлап ҡайтҡан, өҫтәүенә, өйөнә тура ҡайтмай, Баймаҡтағы ҡыҙы янында булған... Надя эше буйынса Мәскәүгә командировкаға ебәрелеп, аэропортта самолетҡа ултырырға торғанында, ниндәйҙер бер самолет пассажирҙары аэровокзалға инә башлай ағылып, шулар араһында, туҡталып, портфелен иҙәнгә ҡуйған сағында Рәмиҙе күреп ҡалып: “Рәми!” — тип ҡысҡыра Надя. Рәми, тертләп, салт-әйләнеп ҡарай. Ҡабалан ғына бер-ике ауыҙ һүҙ һөйләшкәс, Надя сәфәрен дауам итергә — самолетҡа ултырырға мәжбүр була...

Надя Мәскәүҙән, ул заманға хас, егерме килограмм ит күтәреп ҡайтып төшә. Аэровокзалдан улы Азаматҡа шылтыратып, февраль һыуығында йоҡа ғына кейенгән улы уны килеп ала (таксиҙа ҡайтып китәләр). *Лифт* эшләмәй, итте саҡ мендерәләр һөйрәкләп. Рәми өйҙә өҫтәле янында эшләп ултыра. (Иҫерек инеме,

тип һораным, юҡ, айныҡ ине, тине). Надяның ошо ҡайтыу көнө нисәнсе числола булғанын һорамағанмын.

В публикации Айдара Халима большое место отведено попыткам обоснования якобы «чисто татарского» происхождения северо-западных башкир. Но как известно, такие наскоки были и прежде. Всех северо-западных башкир, представителей третьего диалекта башкирского языка (кстати, я сам принадлежу к этому диалекту) объявил скопом татарами другой казанский ученый Д. Исхаков, и это дружно было подхвачено в Башкирии людьми типа Айдара Халима, Радика Сибагатова и Фарита Габдрахимова. Совсем недавно они, демагогически пользуясь лозунгами перестройки и гласности, развили бурную деятельность и успели ввести в заблуждение даже некоторых не только местных, республиканских, но и центральных ответственных органов, следствием чего и явился перевод 200 башкирских школ в северо-западных башкирских деревнях на татарский язык обучения. Как видно по заказу бывшего Минпроса на школьные учебники, в предстоящем учебном году число таких ликвидируемых школ намечено довести до 300. Дело идет об окончательном узаконении ошибочных действий прежних

руководителей республики и центра в национальном вопросе, в следствии чего за 70 лет Советской власти одна треть башкирской нации была лишена возможности обучения детей в школах на своем национальном языке. В результате сотни тысяч северо-западных башкир, отошедших по постановлению ВЦИК и СНК СССР Татарской АССР, под давлением властей давно уже записаны татарами; а в самой Башкирской АССР выросло уже три поколения, не владеющие своим национальным языком; некоторые из них, когда им лично выгодно, в анкетах отмечаются башкирами, в переписях же населения они, из-за незнания своих корней, называются татарами и по наущению татарских экстремистов ненавидят башкирский язык, башкирскую нацию. Одним словом, выступают как дегенерат Айдар Халим. Пока не будет налажено и узаконено в школах обучение башкирских детей ***всех трех диалектов*** без исключения на общенациональном башкирском языке, и впред будет продолжаться вырождение «мальчиков-одуванчиков» и деформация человеческих личностей, сокращение генофонда нации. Подобные как Айдар Халим «сыновья лейтенанта Шмидта» легко могут променять за сиюминутную выгоду не только свою нацию, но и большую Советскую Родину. И никакие ссылки на «пожелания самих родителей» обучать их детей на том или ином языке не даст никому оправдания перед судом истории. Ибо, в отличие от таких больших наций, как англичане, немцы и русские, у малых наций, подобным башкирам, чувашам, определяющей основой нации является язык. Школа обязана, с одновременным привитием в сознание детей вкуса к насущному нам как хлеб русскому языку, утвердить и их национальный язык, а не отрицать его. Вот это и будет интернационализм в действии.

Теперь коротко о столь яростно проклиняемом борзописцем Айдаром Халимом «башкирском шовинизме». Во-первых, более слабая и малочисленная в сравнении с другими башкирская нация не может выступить шовинистом в отношении более сильной и многочисленной татарской нации — это абсурд. Во-вторых, под крылами этих по выражению Айдара Халима «башкирских шовинистов» Шакирова, Ахунзянова, Султанова и др. жилось вольготно вовсе не рамигариповым, а, наоборот, айдархалимовым да фаритгабдрахимовым. Тот же Файзул Валиевич Султанов собственноручно навесил знак «Заслуженного работника культуры БАССР» на грудь вовсе не Гарипову, а его антиподу Габдрахимову. В добавок к этому на днях подписал он Указ о назначении министром Народного образования не кого-нибудь другого, а одного из рьяных ликвидаторов башкирских школ в башкирских деревнях Благоварского района Гарданова. И я не буду удивлен, если завтра Айдар Халим тоже окажется в числе поощренных республиканским государственным Указом или другим путем...

Йыһат Солтанов. 22 августа 1988 г.

Унынсы йыйыныбыҙ

Әҙәбиәт донъяһында эшлекһеҙ һәм буддыкһыҙ, игелекһеҙ һәм намыҫһыҙ етәкселәребеҙгә ҡарата йылдың йылына үҙгәрешһеҙ туплана килгән тәрән

ҡәнәғәтһеҙлек, хатта нәфрәт шарттарында нәүбәттәге унынсы йыйыныбыҙ яҡынлашты. Бөтә уй һәм теләктәребеҙ шунда ярып әйтелер, ошоғаса хәл ителмәгән мәсьәләләр, ниһәйәт, хәл ителер кеүек ине.

Яҙыусыларыбыҙҙың был ҙур форумы 1988 йылдың 27 — 28 октябрендә Актерҙар йортонда барҙы. КПСС Үҙәк Комитетының Культура бүлеге инструкторы А.С. Филин, Башҡортостан өлкә комитетының яңы секретаре Ә.М. Дилмөхәмәтов, РСФСР Яҙыусылар берлеге идараһы секретаре шағир Феликс Чуевтар килгәйне унда (өсөһө лә сығыш яһаны). Йыйынды, ғәҙәттәгесә, «башҡорт совет әҙәбиәтенең аҡһаҡалы, тере классигы» Мостай Кәрим үҙенсә олпат һүҙ менән асып ебәрҙе: *«Не высказанные до сих пор слова мы в основном за эти годы высказали*[54]*, остается только написать не написанные еще замечательные книги. И не забывать о том, что литература — не поденщик истории, она ее летописец, судья. Она не слуга момента, а служитель эпохи».*

«Бөгөнгө көн дәғүәләрегеҙҙе онотоғоҙ, башты түбән баҫып, өндәшмәй, өйҙән сүп-сарҙы сығармай, гүзәл дәүеребеҙҙе маҡтап йырлағыҙ», тигәндәй, сүлмәкте ватмаҫы борон уҡ малайҙың башына һуғып шаңҡытыу кеүек аңлашылды был миңә. *Ләкин* Мостайҙың күккә күтәреп ҡояшҡа тиңләнгән шәхси «сүлмәген» ватыусылар ҙа бар икән дәһә арабыҙҙа — Эстәрлетамаҡтың йәш яҙыусылары залға килтереп таратҡан үткер телле, йөкмәткеле прокламация делегаттар даирәһендә ҡулдан-ҡулға йөрөнө:

Вопросы к Мустаю Кариму.

После нашего письма к Вам Вы собирались приехать к нам в Стерлитамак и поговорить с нами по душам... После Вы решили, что мы этого не заслуживаем, и вообще, кто мы такие? Мы попытаемся объяснить Вам не то, кто мы такие, а то, какие мы.

Судьбы наших репрессированных личностей ввергают нас изо льда в огонь. Особенно трагичная судьба первой женщины-романиста Хадии Давлетшиной. Когда она вернулась из ссылки в 1942 году, председателем правления был Сайфи Кудаш вплоть до 1948 года. С 1951 по 1962 — Мустай Карим.

После ссылки Хадия Лутфулловна с открытой формой туберкулеза (кровохарканье) живя в Стерлитамаке, Уфе, Сулее, Бирске, ради куска хлеба вязала носки для солдат Великой Отечественной, работала ночным сторожем в заготконторе сельхозпродуктов. По самому крупному счету над романом «Иргиз» она работала с 32-го по 52 -- 20 лет! В 52 году Хадия апай писала в правленье слова: «На сегоднышний день все возможное с моей стороны множества поправок и дополнения внесены. Для дальнейшей полной обработки этой книги мне нужны очень серьезные материалы исторического характера. А для этого мне надо побыть в Уфе, в Куйбышеве, возможно, в Уральске».

Скажите, Мустафа Сафич, она просила у Вас оплачиваемую командировку? Вы дали ее??? Были ли созданы возможные по тем временам условия, чтобы Хадия Лутфулловна работала над книгой, не думая о куске хлеба?

---

[54] Тәнҡит булмаһын, өйҙәге сүп-сарҙы тышҡа сығармайыҡ, тигән һүҙелер.

Роман много раз жестоко критиковался и возвращался автору для совершенствования. Последний гонорар она получила в 1936 году за повесть «Айбика». Если присмотреться, сколько книг выпустили с 36-го по 54-ый год — год ее смерти — только два писателя, нам предстанут такие цифры... За эти пятнадцать лет Сайфи Кудаш издал двадцать девять книг. Мустай Карим — восемнадцать. Итого — сорок семь книг на двоих. Счет этот очень легко проверить по сборнику «Писатели советской Башкирии».

Наблюдая за творчеством иных прозаиков, мы ныне видим, что произведение сначала публикуется в виде отрывков в газете, затем в журнале, успевает Башкнигоиздат, завершает Москва, следуют переиздания... Соответствуют и гонорары.

По таланту и судьбе Хадия Давлетшина занимает особое место. Почему же обладательница столь большого таланта, великий гуманист по отношению к молодой смене не на словах, а на деле, умирает, не увидев материальной оценки своего творчества (жилье, продукты, очень дорогие и труднодоступные лекарства, одежда, бумага, плата за пишмашинку, дорожные расходы, книги и мн. др.)?

Да, советы Мустая Карима по роману она оценивает очень высоко, это подчеркивает не только сама писательница, но и авторы многих других воспоминаний о нем. Очень часто подчеркивают явление, естественное для литературы. Почему? Ведь это упорство становится неестественным, словно создается ***алиби.***

В письме Хадии апай Мустаю Кариму от 22 января 1952 года есть такие строки: «То, что эта книга, в которую вложена столько сил, книга, которая столь нужна для нашей советской литературы, до сих пор не может увидеть свет — дело недостойное. Башкирский бедняк и в классовой борьбе «не жалел душу, проливал кровь» — не показать это молодым — будет большой грех». В совести, в самоотреченном трудолюбии Хадии апай НЕВОЗМОЖНО УСОМНИТЬСЯ. *О каком же грехе она пишет в этом письме?*

Недавно по экранам прошел фильм «Амадей». Как только не толковала мировая литература смерть Моцарта. Авторы фильма открывают нам грех, до сих пор точно не указанный, но о котором заговорило наше Время: старательный, но ограниченный в способностях Сальери, постоянно препятствуя выходу на свет произведений Моцарта, под личиной вернейшего друга твердя о несовершенстве этих произведений, ввергает гениального композитора в творческую горячку, то есть в беспощадную борьбу со своим здоровьем и сталкивает Моцарта в могилу.

Вроде бы никто не виноват. На первый взгляд. Но мы — творцы, больше видим, глубоко понимаем. Методы бескровной войны нам прекрасно демонстрировали и годы культа, и годы застоя. Еще потому мы столь зрячи, что нас не публикуют. Все это полно высказал великий Омар Хайям в одном рубаи:

Если мельницу, баню, роскошный дворец
Получает в подарок дурак и подлец,
А достойный идет в кабалу из-за хлеба, —
Мне плевать на твою справедливость, Творец!

Если предположим, что судьба Хадии Лутфулловны — единичный случай, мы станем предателями принципа «никто не забыт, ничто не забыто». До кончины романистки оставались считанные месяцы. Она участвовала на II съезде писателей республики (лишь в качестве приглашенного, а не делегата!), хотела выступить, но ей не разрешили. Отрывок из конспекта ее выступления: «Я хочу немного остановиться на проблеме башкирского литературного языка. Нам необходимо изучить живой образный язык народа, все его богатства. Невозможно создать высокохудожественную литературу, не зная язык. А товарищ докладчик и содокладчики почему-то забыли поднять этот вопрос». Доклад обычно читает председатель правления. Вы, Мустафа Сафич. Проблемы языка Вы и сегодня обходите стороной. Хадия Лутфулловна еще в 1954 году тревожилась, но на ее беспокойство никто не обратил внимания. Вот когда надо было бить в колокол. Мы пожинаем плоды Вашей беспечности. Случайно ли сие???

Вспомним судьбу Рами Гарипова... Случайность??? С Вашей стороны, Мустафа Сафич, наблюдается постоянная глухота.

Когда-то нас до слез потрясала песня «Третий день идет снег» в исполнении Фариды Кудашевой. Теперь мы будем думать не о Вашей ране — ведь Хадия-апай, не участвовавшая в Великой Отечественной, не раненная фашистским осколком, больше десятка лет страдая кровохарканьем, бессильная от анемии, сгорая от великого долга перед народом, создала роман о революции... и умерла. Может быть, уместнее — погибла? Не было понимания, сочувствия, помощи, которые бы расплавили бы мину замедленного действия в ее душе, ветеран Отечественной Мустафа Сафич.

Хотим напомнить Вам судьбу еще одного писателя — Азат Абдуллин. Его «Тринадцатый председатель» идет на сценах всех социалистических стран, но отдельной книгой две его известные пьесы не опубликованы в его родной республике. «Последний патриарх» вошел в телепрограмму, но народ не увидел тот спектакль. Почему?

В мировом масштабе башкирская литература много лет была известна под Вашим именем. Теперь рядом с этим именем есть имя Азата Абдуллина. На мартовском пленуме правления Союза писателей СССР Сергей Баруздин отметил один парадокс: Чингиз Айтматов, Грант Матевосян, Ион Друцэ сначала были признаны во Всесоюзном масштабе. Только потом заимели спорный авторитет в родных республиках. Если случай повторяется, как мы знаем, то это уже закономерность. Значит?.. Азат Абдуллин неформально сослан из Башкирии.

Если пристально вглядеться, то в годы застоя Вы — самая уважаемая, самая авторитетная личность в нашей литературе. Ваши оценки, Ваши мнения имели роль решающую. Благословленье Мустафы Сафича или отказ стали главным критерием творческих судеб.

Владимир Дудинцев в романе «Белые одежды» четко показал своим читателям закон высокого берега: зло всегда успевает раньше занять выгодную позицию и оттуда расправляется добром. Оно очень ловко применяет и святые идеи. Вы вздрогнете от этого слова «зло»? Зададим наш вопрос проще: Хадия апай, Рами агай, Азат агай были Вашими конкурентами? Если бы романист и поэт жили дольше, печатались больше, убыло бы Вашей известности? Если бы Азат агай не уехал из Башкирии, публиковался так же, как и Вы, он меньше послужил бы международной славе своей Родины?

Естественно, и Вы в какой-то мере жертва культа, застоя. Потому Вы стараетесь заставить нас поверить, что большой татарский поэт Хасан Туфан ушел из сего мира, простив сталинизм, репрессии, 17 лет ссылки, ушел, довольный своей жизнью... Почему Вас так волнует возможность помилования не тех, кто убит, а тех, кто убил? Вас не волнуют трагедия родного языка, варварского отношения к Природе... Не странна ли Вам самому эта политика? Или оды заслонили Ваш разум? Придите в себя, Мустафа Сафич, перед светлой памятью миллионов жертв сталинизма очнитесь. Подтвердите Ваш авторитет перед поколениями, лишенными материнского языка.

Два ордена Трудового Красного Знамени, орден «Знак Почета»... Мы бы их отдали первой башкирской романистке Хадии Давлетшиной. Звание народного поэта Башкирии, орден Ленина... Мы бы присудили их Рами Гарипову за верность ленинской национальной политике. Депутат Верховного Совета... На этот высочайший пост мы бы избрали Азата Абдуллина, он не писал, что не имеет права и желания давать советы работникам колхозов и совхозов, влезших в миллионнные долги перед государством; в помощь ограбленным деревням он написал одну пьесу, в разгаре застоя предвидев идеи перестройки, мужественно приближая ее, заставил по новой воссиять ленинские планы кооперирования. Одну пьесу, но какую?! Эти спрессованные в драгоценный слиток доброта и разум, совесть и государственность четко являют нам громадный талант и гражданственность Азата Абдуллина. За этот подвиг мы бы наградили его не званием Героя Социалистического Труда, а боевой звездой Героя Советского Союза. Молодым писателям он показал ярчайший пример народности и партийности, подлинного социалистического реализма.

Мы избираем Азата Абдуллина первым Почетным членом нашего литературного клуба «Ашкадар». Ваша малая родина — Зианчуринский район относится к региону Стерлтамакской писательской организации, мы гордимся Вами, Азат Хамматович! И будем бесконечно рады, если Вы к нам приедете, побеседуете с нами. Пожалуйста, Азат агай, пожалуйста к нам в Стерлитамак!

Теперь мы попытаемся предвидеть, Мустафа Сафич, Ваши ответы и встречные вопросы к нам. Постараемся по возможности точнее ответить. Вы не против? Если Вам покажется этот диалог несерьезной игрой, будьте снисходительны, мы еще не члены Союза писателей.

И вот вопросы и ответы.

***М.К**. Почему все перечисленные грехи вы валите на меня одного?! Ведь и Сталин был не один... И как вы смеете! Кто вам дал право??! Я кровь за вас проливал!*

***Мы.** Наши отцы и деды тоже проливали за нас кровь. Мы предполагаем, что дети тех воинов, что не вернулись, согласны получить кусок железа в свои тела, если отцы вернутся невредимыми. Право на вопросы нам дал Михаил Сергеевич Горбачев, XXVII съезд партии, на которой Вы слушали о законах демократии. Вам невыгодно знать и помнить монополистов и плагиаторов башкирской литературы. Можете не объяснять. Тогда ответьте нам на один вопрос — уважаете ли Вы маршала Жукова?*

***М.К**. Да!*

***Мы**. В агрессивнейшие годы культа Жуков сумел отстоять свою честь. Теперь часто говорят, что в те времена совесть стоила головы. Как Вы посоветуете нам,*

стоит ли верить Чехову, который сказал, что хорошему человеку бывает стыдно даже перед собакой?

***М.К.** Верьте, ведь вы родились после культа, после войны, вам удобно иметь чистую совесть. Но вам не стыдно передо мной? Награды и звания мои вы бы отдали другим... Вас не спросили, когда их давали за неустанный труд, огромное терпение, умение творить и печататься при любых обстоятельствах. В конце концов, жизнь есть борьба.*

***Мы**. Воистину так. Примите же наши вопросы как саму жизнь. Мы знаем, что Вы умеете приспосабливаться к любым условиям, обстоятельствам. В годы застоя очень высоко ценилось именно это умение. Вы недовольны нашим мнением по отношению Вашим наградам... Мы же честно оставили Вам Ленинскую, Государственную премии, также международную имени Х.К. Андерсена. Вам мало? Тогда смотрите — всю бумагу, которая ушла на издание и переиздание Ваших книг делим на четыре части: I часть — Вам, II — Хадии Давлетшиной, III — Рами Гарипову, IV — Азату Абдуллину. Всмотритесь и увидьте, как сильна, разнообразна, богата башкирская литература! Она современна, остра, справедлива. При ней невозможно шакировщина, республика наша не отстает по многим жизненно важным показателям от соседних республик и областей, потому что появилось немало последователей председателя Сагадеева, он не одинок, потому с ним трудно справиться; молодежь не уезжает в Сибирь, соседние области, не ходит в холостяках из-за жилищного вопроса; дети учатся на родном языке — ведь Х. Давлетшина и Р. Гарипов имеют такое же уважение и понимание, что и Вы, потому сумели противостоять национальному нигилизму... Увы, патриотов Вы не умели и не хотели защищать. Зато Вы были другом Шакирова. Дошел до нас и такой слух, что будто бы в одном журнале за 1952 год есть Ваша ода Лаврентию Берия. Просим прощения, если это ложный слух.*

***М.К.** Ложь!!! Кто пустил этих негодяев сюда?!! Я требую лишить слова!!!*

***Мы**. Вы — генерал нашей литературы. Мы — курсанты, всего лишь учимся отделять зло от добра, черное от белого, ведь моральная серость никогда не способствовала социализму, тем более, в такой области, как литература. Она есть самосознание народа, нам ли повторять это Вам? Перестройка необходима, ведь нам после Вашего поколения остается разруха...*

***М.К**. Вы несправедливы, негуманны ко мне. Всю вину эпохи возлагаете на одного пожилого, нездорового человека. Пусть я был неправ, но я ошибался со всеми. И мертвые, и живые стали жертвой сталинизма, застоя. Не Сталина, а сталинизма!*

***Мы**. Вы были жертвой благополучной, что трудно поверить в Ваши потери. Мы знаем других — оболганных, сосланных, расстрелянных. Даже застрелившихся — лишь бы самим не умножать ряды жертв.*

***М.К**. Мне надоело вас слушать, молокососы!*

— Мы не молокососы, а дышащие газом, это разные вещи. Жизнь наша действительно борьба, не сомневайтесь. Можем ли пожелать друг-другу здоровья после столь интересной беседы? Обязаны.

Литературный клуб «Ашкадар» желает всем присутствующим здоровья совести в первую очередь, здоровья тела — во вторую.

Йыйын делегаттарының байтағы, Мостайҙың ысын йөҙөн фашлап ысын һүҙ әйтә алмай, телдәрен тешләп йөрөһә лә, Эстәрлетамаҡ йәш яҙыусылары һымаҡ уҡ ҡыйыу фекерләүселәр ҙә байтаҡ ине томорҡо залда. Тик шуныһы аяныс: был сая документты тыуҙырған Эстәрлетамаҡ яҙыусылар бүлегенең тынғыһыҙ етәксеһе Кәбир Ғүмәрҙе хирургия операцияһы өҫтәлендә “һуйҙылар”…

Рәйесебеҙ Ә.М. Мирзаһитов, ғәҙәтенсә, үҙенең бер ҡалыпҡа һалып шымартылған, ләкин йәнгә бер нәмә лә бирмәгән киҙеү докладын уҡыны. Унда әйтелгәнсә, *«хисап осорондағы биш йыллыҡтың яртыһы үҙгәртеп ҡороу һәм йәмғиәтте демократлаштырыу, үткәнгә һәм киләсәккә ҡараштарҙы ҡайтанан ҡарау билдәһе аҫтында үтте. Бөгөн ҡул ҡаушарып ҡына ултырыу мөмкин түгел. Йәмғиәттә барған ҡыҙыу, ысын-ысындан революцион үҙгәртеп ҡороуҙар үҙ оҫтаһынан юғары граждандыҡ активлығы, дөрөҫлөк, ҡыйыу ижади эҙләнеү, үҙ хаталарыңды тура ҡарап, намыҫлы таный белеүҙе талап итә.*

Бөгөн яҙыусылар алдында һан күрһәткестәре түгел, ә юғары әхләҡи әҫәрҙәр ижад итергә мөмкинлек биреүсе сифат үҙгәрештәренә өлгәшеү бурысы тора. Ил һәм халыҡ нимә менән йәшәй, шулар — экономик мәсьәләләр, билдәлелек, демократия, саф һауа һәм кешеләрҙең күңеле өсөн көрәш уларҙың ижад үҙәгендә торорға тейеш».

Һалҡын ҡанлы бер автор «Литературная газета»ла (Мәскәү, 1988 йылдың 9 ноябрь һаны) хәбәр итеүенсә: *«Прозвучало в выступлении и доля самокритики правления, и оценка работы творческих секций и Литфонда, а также Стерлитамакской писательской организации, были затронуты проблемы переводческой работы, групповых баталий, а также остро обозначившиеся в последнее время трения в области межнациональных отношений в СП.*

Едва ли не сквозной темой выступлений в прениях стала критика руководства СП. Ему вменялись в вину келейность в принятии решений, неоправданное раздувание аппарата (Х. Гиляжев), отсутствие контакта секретариата с писательской общественностью, условно говоря, «сам-себя-издат» (Р. Мифтахов), стихийность работы, создание нетоварищеской атмосферы, порождающей групповщину (Н. Мусин, З. Султанов, Я. Хамматов). Не обошлось, к сожалению, и без перехода на личности»...

Хәбәрсенең һуңғы йөмләлә үкенеберәк яҙыуына ҡарағанда, ундағы тел тейҙерелгән «личность» — «заманабыҙҙың тере классигы» икәнлеге күренеп тора, ә уның һәм ярандарының кәйефен боҙорлоҡ тел ҡағыусы... бөтә йыйын барышы буйынса әлеге лә баяғы шул берҙән-бер генә оратор булыуын билдәләйек.

Үткән IX йыйындағы телмәремдең ҡараламаһы яҙылған ҡуйын дәфтәремде алып барып, был йыйын ағылышында яралған фекерҙәремде лә теҙеп ултырҙым шунда.

Ҡуйын дәфтәремдән:

Тетелгән тел. Беренсенән, Башҡортостан радио-телевидениеһына бирелгән сәғәттәр һаны (милли телдә) тәүлегенә күпме?

Шул сәғәттәр иҫәбенән нисә сәғәт татар телендә бара?

Икенсенән, шул уҡ нисбәттә Башҡортостан китап нәшриәтенә йылына нисә табаҡ майҙан бирелгән?

Шуның күпмеһе «башҡортлаштырылған татар теле»ндә ташҡа баҫыла? (Башҡорт телен аҫтыртын татарлаштырыу, сөнки этнопсихика, һүҙ байлығы, грамматик строй башҡа).

Башҡортостанда нисә башҡорт, нисә татар гәзите бар? (Һуңғылары бөтәһенең өстән ике өлөшөн тәшкил итә). Нисә башҡорт районында гәзит татарса ғына сыға (ә башҡортсаһы юҡ)?

Татарстанда, көнсығыш райондарының төп халҡы аҫаба башҡорт булһа ла (ул территорияны Ленин Татар АССР-ына ҡырҡып биргәндә — 193 мең башҡорт, переписте ҡара), бер башҡорт гәзите лә юҡ һәм булғаны ла юҡ.

Уға китһә, урыҫлаштырыу яҡшыраҡ булыр ине, сөнки урыҫ культураһы юғарыраҡ.

Беҙҙең китаптарҙың теле...

Это — смешанный, парализованный язык. Он, я уверен, татароязычным писателям в такой же степени противен, как и нам, башкироязычным. Подумайте, что было бы, если бы вдруг Пушкин и Шевченко стали бы публиковаться на таком же полурусско-полуукраинском парализованном языке?!.

Скажете, этого быть не может и не должно. Но однако именно такое издевательство над языком происходит в книжном издательстве и на сценах театров советской Башкирии. Где же выход из этого допущенного нами в своем доме скверного положения?

Есть три выхода.

Первый и самый простой выход — это отказ самих же татароязычных писателей парализовать свой язык, сочиняя на испорченном ими же башкирском языке, то есть писать по-татарски и издаваться в предоставленном им партией и правительством СССР Татарском книжном издательстве в Казани. По-настоящему талантливые авторы так и делают. К сожалению, талантливых очень мало, а серое большинство авторов оседает здесь, в Уфе. Таких даже из самой Казани выгоняют в Уфу (например, пресловутого Айдара Халима). Именно такие идут здесь на всякие ухищрения, вплоть до парализации языка, лишь бы только издаваться, вступить в Союз писателей. Стало быть, от таких Казань легко избавляется, а Уфа не может.

Поэтому есть и второй выход — профессиональный перевод их сочинений на нормальный башкирский язык. Чтобы их переводил за гонорары квалифицированный башкироязычный литератор, а не работница машбюро за копейки или даже даром, как это делается до сих пор.

Третий и самый сложный выход — это издание сочинений подобных писак на языке оригинала здесь, в Уфе. Но однако не отнимая и так безмерно малого листажа, выделенного партией и правительством для развития именно башкирской национальной культуры. В таком случае Москва для них должна будет изыскать дополнительный издательский фонд, в крайнем случае изымая его из доли Татарского книжного издательства, ибо он пойдет на благо именно татарской культуры. Москва должна тогда поступать аналогично и с радиовещанием, и с телевидением. Только при таком решении не будут ущемлены интересы башкирской культуры.

Ә ошоғаса башҡорт фондының яртыһын татарҙар файҙалана («башҡортса әҙәбиәт» маркаһы аҫтында). Боҙоҡ телдә «башҡортса» китаптар баҫтырып, театрҙар эшләтеп, башҡорт әҙәби телен эстән емертеү, уны шыйыҡландырып, зәғифләтеп, аҫтыртын рәүештә татарлаштырып барабыҙ...

Тарихи ракурс. Беренсенән, башҡорттар, дөйөм массаны алғанда, Ҡазан ханлығын Иван Грозный ғәскәрҙәренән әллә ни яҡлашып бармай, ә, киреһенсә, Ҡазан ханлығына ҡаршы сығалар ҙа үҙҙәре теләп Рәсәйгә ҡушылалар.

Икенсенән, Ҡазан ханлығы ҡыйратылғас, татар мырҙалары (татар халҡы түгел!) урыҫ хөкүмәтенә хеҙмәткә күсә, ирек һөйөүсе башҡорт халҡын «тышаулау»ҙа, иҙеүҙә, восстаниеларын баҫтырыуҙа ҡатнаша, самодержавиеға тоғро хеҙмәт итә (мәҫәлән, Тевкелев).

Өсөнсөнән, батша самодержавиеһы, баш күтәргән башҡорттарҙың ерҙәрен вәғәҙә ҡылып, һәм ул ерҙәрҙе биреп, башҡорт күтәрелештәренә ҡаршы татарҙарҙы һөстөрә, бер халыҡты икенсеһенә ҡаршы аяҡландыра. Шулай итеп Башҡортостанда үлтерелгән һәм ситкә һөрөлгән башҡорттарҙың аҫаба ерҙәрендә килмешәк татар ауылдары хасил була, был ауылдар батша колонизацияһының һәм татарлаштырыуҙың форпостарына әйләнә.

Дүртенсенән, мәҫәлән, башҡорттарҙы физик яҡтан бөтөрөү (геноцид) сәйәсәте алып барыла (Неплюев проекты һ.б.). Деталь: Аҡай батыр күтәрелешенән һуң, дәүләт кимәлендә рәсми рәүештә, «башҡорт» тигән һүҙ — «дошман» тигән һүҙ итеп иғлан ҡылына һәм *һәр башҡортҡа «башҡорт» тигән яҙыу* — ***«бүре билеты»*** (хәҙерге паспорт урынына) тотторола; шундай билетын янында йөрөтмәһә, ул закондан тыш тип иғлан ителә; теләгән бер ерҙә теләгән бер кешенең талабы буйынса башҡорт ана шул «башҡорт» тигән таныҡлығын — «бүре билеты»н сығарып күрһәтергә тейеш була, ә теләгән берәүгә шул урында уҡ башҡортто тотоп туҡмау, үлтереү хоҡуғы бирелә. Башҡорт ауылдарына татар муллалары ҡуйыла, мәҙрәсәләрҙә уҡытыу татар телендә алып барыла. Шундай геноцид шарттарында байтаҡ башҡорт милләтен йәшерергә — үҙен «татар» атарға мәжбүр була, Аҡай восстаниеһын дөрләткән төньяҡ-көнбайыш Башҡортостанда башҡорттарҙы татарлаштырыу көсәйә...

Ләкин ошо үлемесле-ауыр шарттарҙа ла халыҡ барыбер ваз кисмәй башҡортлоғонан (мәҫәлән, Ғәли Соҡорой, уның улы Ғарифулла Кейеков яҙмалары).

Ғаяз Исхаҡи шовинизмы һ.б.

Башҡорт тамырына балта йәнә лә бер тапҡыр беҙҙең совет осоронда сабыла (Минзәлә, Аҡтаныш, Бөгөлмә, Сарман, Аҙнаҡай, Әлмәт райондары аҫаба башҡорттарын татар итеп яҙҙыртыу, Башҡортостанда ла мәктәптәрҙә уҡытыуҙы һаман иҫке мәҙрәсә телендә — татарса дауам итеү).

Мин үҙем башҡорт теленең төньяҡ-көнбайыш диалектына яҡын һөйләш аҫаба башҡорто. Минең миҫалымда күрергә була: ауылымда мәктәп башҡорт телендә булғас, мин — башҡорт телле башҡорт. Ә шул уҡ аҫаба башҡорттарҙың ҡасандыр беҙҙең ауылдан күсеп ултырған һәм беҙгә ете саҡрымда ғына булған Яңауыл-Ғафар башҡорттары — тулыһынса татарға әүерелгән, сөнки уларҙы мәктәптәрендә татарса уҡытҡандар. Шул уҡ минең тыуған районда аҫаба башҡорт

ауылы Ҡабан бар (Ваҡытлы Башреввоенсовет рәйесе Б. Шәфиевты аҡтарға тотоп бирешкән ауыл). Ул ауылдың балалары ла татар мәктәбендә уҡый, татарса һөйләшә. Шуға күрә уларҙың да йә — татар телле башҡорт, йә башкөллләй татар булып үҫәсәктәре көн кеүек асыҡ. Был Ҡабан ауылы миҫалы — бөтә төньяҡ-көнбайыш башҡорттарҙың аянысҡы хәлен кәүҙәләндерә — үҙенең милли теленән мәхрүм ҡылынған башҡорт нәҫеле...

В республике в области литературной политики начиная с 1937 года, когда были безвинно обвинены в национализме, арестованы и репрессированы выдающиеся деятели башкирской культуры, взяло верх уродливое понимание таких понятий, как интернационализм и национализм. Все серое в литературе, творимые иноязычными авторами-приспособленцами на так называемом (суррогатном) башкирском языке, усиленно поддерживалось и объявлялось ярчайщими проявлениями интернационализма. А все талантливое, творимые башкироязычными писателями, бралось под подозрение и держалось часто под негласным надзором на предмет выявления национализма...

Ул йылдарҙағы сәйәси әүҙемлегем, күҙ йомоп утҡа керергә әҙерлегем йыйын тиклем йыйында ауыҙыма һыу уртлап ултырыуға юл ҡуймай ине, әлбиттә. Шул уҡ ваҡытта фекерҙәремде ҡағыҙға теркәмәй барыу, трибуналағы һыуҙың ағышына буйһоноп, йәки тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа, тип һөйләү ғәҙәтем дә юҡ ине. Алдан уҡ тәүҙә телмәремдең, әгәр иркенерәк йәйелергә форсат бирһәләр, тип, мөмкин тиклем тулыраҡ вариантын әҙерләнем. Ләкин трибунаға сығып һөйләү хоҡуғын партияның өлкә комитеты секретаре Ә.М. Дилмөхәмәтовтың үҙенән үтенеп саҡ алырға тура килде, өҫтәүенә, телмәремдең тексын ул алдан үҙе уҡып сығыу шартын ҡуйҙы. Күренеп тора: әҙәби түрәләребеҙгә тел тейҙертмәү юҫығын тота ине. Шуға күрә ул уҡырға тейешле был вариантта Мостай Кәримде тәнҡитләгән йөмләмдә уның исем-шәрифен йәшереп ҡалдырып, Дилмөхәмәтов уҡып биргәндән һуң ғына ул исемде юл араһына ҡулдан өҫтәкләп яҙып ҡуйҙым һәм шулай атап әйтеп һөйләнем дә — «эзоп теле» заманының бер сараһы булғандыр... Һәм ваҡыт та бик аҙ бирелгәнлектән, һөйләү барышында ла дилбегәне ҡыҫҡартыбыраҡ тоторға тура килде...

Ә шулай ҙа... Ә шулай ҙа...

Выступление делегата Султанова З.А. на X съезде писателей Башкирии.

За период руководства нынешнего правления во главе с его председателем Мирзагитовым башкирская литература из года в год захирела, а журнал «Агидель», издававшийся когда-то свыше 60-ти тысячным тиражом, потерял почти половину своих подписчиков. Целое поколение нации с отвращением отвернулась от родного языка, литературы. В кризисном состоянии литературы отразилась болезнь самого общества, нации. Об этом не только нашем, но и всесоюзном недуге с высоких союзных трибун начали бить в набат тревоги, к сожалению, не башкирские писатели, а русские (Сергей Михалков, Николай

Шундик), украинцы (Юрий Мушкетик). А из нашей республики по-прежнему продолжался литься сладкоголосый малиновый звон о бурном расцвете родной нации, его культуры; звон этот только недавно чередовался хлесткими ударами ржавого гонга (А. Халим) о всесильных и полудиких башкирах-шовинистах, свирепо расправляющихся у себя в республике над гражданами других национальностей. Как бы подтверждая это, или подтрунивая, журнал «Молодой коммунист» (№96 1988 г.) с великим восторгом перечислил ряд наций, вечно процветающие и как бы прочно гарантированные от гибели и исчезновения, среди которых красуются и башкиры. Это равноценно тому, если бы тяжело больнному человеку врач поставил утешительный диагноз.

Но факты — упрямая вещь и свидетельствуют они о кризисном состоянии башкирской нации. Вопрос поставлен так: быть или не быть башкирскому национальному языку, башкирской нации.

Если в конце прошлого века в 1897 году на территории Уфимской губернии проживали 899 тысячи башкир (41% к общему населению) и 184 тысячи татар (11%), то к 1970 году примерно на той же территории численность башкир стала 892 тысячи (23% к общему населению), татар — 944 тысячи (24%). Как видно, за годы Советской власти в Башкирии прирост татар составлял в 5 раза, а в то же время башкиров стало меньше, чем было их в самодержавном 1897 году. При том если до 1926 года численность восточных башкир сократилась в 1,5 раза, то численность западных башкир сократилась в 2,5 раза. Почему? Ведь западные башкиры жили и живут в сравнительно благоприятных географическо-климатических и экономических условиях, чем восточные башкиры. В одно и то же время, когда до 1970 года общая численность башкир заметно сократилась, спрашивается, каким же образом получилась так, что численность татар увеличилась в 5 раза?!

Не будем касаться разительных фактов экономической политики в республике, классическим воплощением которой является процветание запада и знаменитые хайбуллинские землянки востока.

Возьмем школы.

В 1925/26 учебном году количество школ было башкирских 572, а в 1967/68 учебном году их стало 785 (37% прироста); соответственно татарских школ было — 582 и стало 1117 (92 % прироста); русских школ — 788 и стало 1914 (143% прироста). Как видно, прирост численности башкирских школ в сравнении с татарскими отстал примерно в три раза. А в годы застоя, когда в республике был взят курс на ликвидацию нерусских национальных школ, опят-таки главный удар был нанесен башкирской школе. Например, в числе переведенных на русский язык обучения лишь в одном 1973/74 учебном году 650 национальных школ башкирских оказалось 420, а татарских — 112. И вот самое свежее данное. На новый 1988/89 учебный год число школ с обучением на башкирском языке вновь сокращается — еще на 300 единиц. Как было справедливо сказано на страницах «Литературной газеты» от 7 сентября 1988 года, такая тенденция может иметь катастрофические последствия.

Возьмем еще печать.

У меня есть данные по 21 районам западной Башкирии. Из общего количества населения этого региона башкиры составляют 43 процента, татары — 31 процент, русские — 11 процент. Как видно, башкиры здесь составляют подавляющее большинство. Однако на башкирском языке издается лишь одна-единственная газета (Альшеевская), в то же время на татарском — 21, на русском — 18. Напрашивается вопрос: мать или мачеха для нас наша Башкирия?..

На свете этих печальных фактов скажу о нашей литературе, о состоянии творческой атмосферы. Надо прямо сказать, творческой атмосферы как таковой у нас нет, она погублена ядовитыми испарениями мафиозоподобной литературной хунты "черных полковников" **с его *диктатором Мустаем Каримом*** и их всемогущей круговой порукой. После долгих лет такого пагубного режима писатели вынуждены были самоорганизоваться в группы самовыживания. Но хунта до сих пор и не без ведома вышестоящих органов прочно удерживает власть, оккупируя наш единственный журнал «Агидель» и книжное издательство, издавая и восхваляя сама себя, негласно разделяя писателей «на своих» и «не своих». Установилось такое положение, когда фактически показателем таланта является не то, что его охотно печатают, а то, что его отвергают. Это прямо отразилось в тираже журнала, который с 62 тысячи сократился до 42 тысячи экземпляров, в то же время склады магазинов завалены книгами литературных хапуг и их приспешников (такая тенденция продолжает возрастать). На этой ниве выращено целое поколение башкир, отчужденных от национальной культуры и не владеющих национальным языком. Беду эту усугубляет энергично проводимая в республике кампания искоренения башкирского языка из школ башкирских деревень. В то же время наш писательский союз, призванный быть застрельщиком спасения национальной культуры и один из самых крупных в Российской Федерации, поставлен в самые худшие условия. Мы уже давно ходатайствуем увеличить объем единственного нашего журнала, тонкого как фанера, а также возобновить издававшийся раньше альманах на русском языке «Литературная Башкирия» и на базе никем не читаемого «Блокнота агитатора» создать свой молодежный журнал. Для нас, «автономных», установлен самый малый объем листов в книжном издательстве, самый низкий гонорар. Ущемлены мы в квартирном вопросе. Но наш глас вопиющего в пустыне не слышат ни Уфа, ни Москва. Как говорится, до царя — далеко, до Бога — высоко...

Но есть еще и другая хорошая поговорка: дело нашего счастья в наших же собственных руках. Сейчас же, не выходя из зала съезда, мы должны начать решительное самооздоровление нашего организма. Для этого нам требуется полностью пересмотреть и обновлять состав правления союза, редколлегию журнала, выбирая туда только достойных, способных покончить с коррупцией. Отчитывающееся руководство во главе с его председателем, надо прямо сказать, было некомпетентным и провалило дело — об этом всем известно. Писателями несколько раз за последние годы был поставлен вопрос ребром о смене председателя и лишь благодаря позорной круговой поруки удался ему удержаться на плаву. Да, некомпетентные люди очень долго оказались во главе союза, потому что выборы были непрямыми, недемократичными. Фактически

председателя правления и главного редактора журнала выбирали не мы, а, путем административно-командного нажима на членов правления, назначала партийно-бюрократическая мафия. Поэтому наш т.н. избранники в своей деятальности не зависели от нас, от большинства, поэтому неизбежно было загнивание. Чтобы раз и навсегда покончить с этим и руководствуясь решениями XIX партконференции, предлагаю:

1. Работу правления за отчетный период оценить неудовлетворительной.
2. Председателя правления избрать путем прямого тайного голосования всех писателей-делегатов из числа нескольких кандидатур, выдвинутых ими путем открытого голосования. Для этого тайного голосования иметь отдельний бюллетень. При том фамилии кандидатов на пост председателя правления должны автоматически включаться и в другую бюллетень в список кандидатов в состав правления, ибо выдвинутый товарищ может быть не избран председателем, но может быть избран членом правления.

А призывать писателей погасить свою гражданскую активность, утихомириться и сойти с высоких трибун, как пытались добиться этого товарищи Буляков, Бикбаев, бесполезно и вредно. Это есть западня на пути перестройки. Беспокойное состояние наше будет продолжаться до тех пор, пока не восторжествует справедливость и не установится нормальная творческая атмосфера.

Мостай Кәрим тураһындағы билдәләмәм сәбәпсе булғандыр инде, моғайын, «Литературная газета» хәбәрсеһенең, баяғыса, «үкенескә ҡаршы, шәхестәргә ҡағылыу ҙа булды», — тип үкенеберәк яҙыуына...

Тәнәфес ваҡытында фоела бөтә йәмәғәт алдында асыуынан ҡыҙара бүртенгән Мостай Кәрим миңә ҡаршы атлап килеп, йоҙроҡ болғап ажғырҙы: «Султанов, ты бил меня, но запомни: Мустай никогда ничего не забывает, Мустай все помнит!»

Аптырап ҡалған ҡәләмдәштәремдең иҫтәрен китәреп мин дә, лайыҡлы яуап итеп, «тере классик»тың үҙе һымаҡ уҡ, йоҙроғомдо юғары сөйөп әйттем: «Йыһат Солтанов тоже ничего не забывает и все помнит!»

Һуңынан Назар ағай Нәжми гел генә, мине осратҡаны һайын, йоҙроғон тап минең һымаҡ күтәреп, баяғы һүҙҙәремде ҡабатлап мәрәкәләр ҙә кинәнеп көлөр ине... Ә Мостай Кәрим үҙе? Түҙмәгән, көндәлегенә теркәгән: “04.11.89. Әүәле ауылда киске уйындарға ҡайһы бер егеттәр гармун, икенселәре итәк аҫтында кистендәр килтерә торғайны. Хәҙер төрлө йыйылыштарға яҙыусылар һәм башҡа “интеллигенттар” шулай йөрөй: берәүҙәр – яҡшы ниәт менән, икенселәр күрә алмаусылыҡ һәм үс алыу теләге менән (Яныбай Хамматов, Йыһат Солтанов һымаҡтар)”.

Ағайыбыҙ шаштыра, сөнки итәк аҫтында киҫтән йөрөтөүселәр итәк аҫтынан киҫә, ә беҙ оло йыйындарҙа бөтә ҡәләмдәштәребеҙ алдында трибунаға сығып әйтә инек әйтеребеҙҙе. Шуныһы ла фәһемле: ҡәләмдәштәр араһынан “тере классик”тың күҙҙәренә ҡарап һәр саҡ тураһын ярып һалыусылар өсәү генә икәнбеҙ ҙә: Зәйнәб Биишева, Яныбай Хамматов, Йыһат Солтанов...

«Тере классик» менән булған шул хәлдән нәфрәтләнеп, һәм “Һис бер нәмәне лә онотмаусан”дың зәһәр йылан ағыуын алдан уҡ ҡайтара торайым, тип, йыйын барышында уҡ КПСС Үҙәк Комитеты вәкиленә фоелағы әлеге йәмһеҙ күренеш хаҡында белдереү яҙып бирҙем:

Инструктору ЦК КПСС тов. Филину Александру Сергеевичу от делегата X съезда писателей Башкирии Султанова Зихата Адигамовича ЗАЯВЛЕНИЕ.

Глубокоуважаемый тов. Филин!

После моего выступления с трибуны съезда с критикой народного поэта Башкирии Мустая Карима он встретил меня на перерыве в фое и, подняв кулак над головой, заявил:

«Султанов, ты бил меня, но запомни, Мустай Карим никогда ничего не забывает!»

Это является прямой угрозой расправы.

С уважением: **Зихат Султанов.** 28 окт. 1988.

Һәм Филин иптәш мине үҙе айырым күреп һөйләшеп, миңә ҡайтарған шул уҡ ҡағыҙымдың аҫҡы мөйөшөндә эҫе мәлендә үк теркәлгән аңлатмам бар:

По этому поводу тов. Филин мне сказал, что, такое поведение Мустая Карима, наверное, рузультат его старческого маразма, поэтому не стоит придать ему большое значение. И я с этим согласился.

З. Султанов. 28 окт. 88.

Биш киҫәктән хасил ошо мемуарымдың мин “нейтраль” аһәңле беренсе киҫәген генә “Ағиҙел”дә сығара алдым, ә “тере классик”ка күпмелер мөнәсәбәтле икенсеһе һәм халҡымдың йәнле тарихына бәйле ҡалғандары ла хәйерле сәғәт һуҡҡанын көтөп ята бирә. Ә ул хәйерле сәғәттең уҡтарын әле булһа Мостай мәҙхеселәре ебәрмәй тота: “Ағиҙел”дең 2006 йылғы 11-енсе һанында уны, Мостайҙы, “Урал батыр тоҡомонан” тип һайраған фольклорсы Әхмәт Сөләймәновтың шәрбәтнамәһен генә алығыҙ! Әмәлһеҙҙән иғтибар тағы ла “россиян”дың әлеге лә баяғы шул көндәлегенә төбәлә:

“Төш күрҙем. Мине ерләргә тейештәр. Әммә мин тамам үлеп етмәгәнмен. Рус побы йыназа сығырға тейеш. Ул ныҡ иҫерек көйө килде. Мин ҡаршы төштөм: “Мин иҫерек поп уҡыуын теләмәйем”. Өлкән поп килде лә: “Бөгөн минең айныҡ побым юҡ. Ул һәйбәт поп. Һин иртәнсәккә тиклем түҙә алаһыңмы? Ул йоҡлар ҙа айныр, шунан уҡыр”. Мин түҙә алам, нисек тә тырышырмын, тинем. Мин иртәгә тиклем көтөп ятып ҡалдым, ә үҙем уйлайым: “Әле үлмәгәнмен, поп уҡығас, ер аҫтында үлермен инде”.

Ошо һуңғы көндәлектәрендә үҙе әйткән ҡурҡаҡ һәм ялағай-ялған мәҙхеселәре “үлемһеҙ”ҙе ер аҫтында ла үлмәгәндер тип ҡурҡалар, ахыры, сөнки бит ул васыят шиғырында, итектәремде бергә һалып күмегеҙ – шуларҙы кейеп, яңынан ҡайтып йөрөрмөн, тип яҙғайны лаһа...

Инде йыйыныбыҙға әйләнеп ҡайтһаҡ, идараның яңы етәкселәрен һайлау барышында (был эштең формаль яғы мин тәҡдим иткәнсә башҡарылды, буғай) беҙ, бер килке делегаттар, күпме генә тырышып ҡараһаҡ та, рәйес итеп Азат Абдуллинды үткәрә алманыҡ (ул үҙе ғәйепле, сөнки сығышында: «Өфөгә күсеп ҡайтмай ғына Мәскәүҙән йөрөп эшләйәсәкмен», — тип, делегаттарҙың күңелен һүреллдерҙе), ә ҡулы оҙон, нәфсеһе аҙғындар ҡоронан булған хәмер ҡоло Динис Бүләков был посҡа партия өлкә комитетының (Ә.М. Дилмөхәмәтовтың) аҫтыртын теләктәшлеге һәм асыҡтан-асыҡ һайлау комиссияһы эшенә ҡыҫылып булышлығы, шул арҡала һайлаусылар тауышының уға күберәклеге менән үтте. «Ағиҙел» журналының баш редакторы итеп тә баяғы “Ҡараһаҡал ҡаһарманы” Б.З. Рафиҡов һайланды (ҡарға күҙен ҡарға суҡымай)...

Иҫ китә — бөтәһе лә иҫкесә — етәкселегебеҙ башында шул уҡ йылғыр өйөр кешеләре ултыра...

«Ағиҙел»дең яңы редакторы үҙ тирәһенә өйөрөп алған «яңы» редколлегия ағзаларының исемлеге лә, ниһәйәт, мәғлүм булғас, һөрһөп бөткән шул уҡ кешеләр тәғәйенләнеүенә мөнәсәбәтемде белдереп, «Башҡортостан» гәзитенә бер памфлет һымаҡ нәмә яҙып биргән булғайным (ташҡа баҫып сығырманылар):

Реплика!

ӘҘИПТӘРСӘ ӘҘӘПЛЕЛЕК

«Әҙип — әҙәпле булырға тейеш!» (М. Кәрим). — Заманабыҙҙың бөйөк аҡыл эйәһенең ауыҙынан сыҡҡан был ҡанатлы әйтем бейек трибуналарҙан, бөйөклөккә почти яҡын сәсмә әҫәрҙәрҙән әҙәби ҙә, әҙәби түгел дә мөхиткә уңышлы сәселеп, әҙәбиәтебеҙ даирәләрен әҙәпһеҙлек шойҡанынан шөйлә «курсалап» килде. Һөҙөмтәлә һуңғы ун йылда әҙиптәребеҙ әҙәбиәтебеҙҙең көҙгөһө булған «Ағиҙел» журналы биттәрен ифрат әҙәпле әҫәрҙәр — хикәйәләр, повестәр, романдар, поэмалар һәм шуларҙы йор баһалаусы әҙәпле әҙәби тәнҡит тип аталған мәҙехнамәләр менән байытты, байытты ғына түгел, сифаты менән уҡыусыны әҫәрләндереү урынына һаны менән иҫәрләндереп, редколлегия кәртәләрен бар тип тә белмәй, «Ағиҙел»де алдырыусыларҙы бер туҡтауһыҙ әҙәпле «әҙәбиәт» тип аталған, әммә хатта һыйыр ҙа көйшәмәҫ «кыу һалам» өйөмөнә күмде, сөнки ул йәмғе һаламсылар — «Ағиҙел»дең әҙәпле генә редколлегия ағзалары үҙҙәре үк ине. Тик уларҙан башҡалары (журналды уҡыусылар) әҙәпһеҙерәк булып сыҡты: шанлы ун йыл эсендә егерме мең, ә аҙағында бер юлы һигеҙ мең әҙәпһеҙ йән, һаламды сәйнәргә теләмәй, «Ағиҙел»де яҙылып алдырыуҙан туҡтаны, йәғни һалам ҡаплаған әҙәби көҙгөбөҙгә елкә соҡорон күрһәтте. Шуға ла ҡарамай, һаман әҙәплелек һаҡлап, мәжмүғә биттәрен үҙ исемдәре менән һаламлап ҡайыуҙы дауамлаған, ә «ят»тарҙың «әҙәпһеҙерәк» ынтылыштарын һәүетемсә ситкә тибәргән әҙәпле

редколлегия ағзаларының ныҡышмалы эшмәкәрлеген лайыҡлы баһалау мәсьәләһе үҙгәртеп ҡороу осорондағы әҙәпһеҙ әҙиптәр йыйылыштарында бер нисә тапҡыр күтәрелеп, һаламдары аҫтан ҡуҙрап төтәгән мәсьәләгә Яҙыусылар союзы идараһы, партбюро ағзаларының иғтибары бер юлы йәлеп ителһә лә, әҙәпле генә рәүештә ул янғын һүндерелә торҙо, сөнки шул уҡ бик әҙәпле

редколлегия ағзаларының күбеһе үҙҙәре үк бер үк ваҡытта идара һәм партбюро ағзалары ла ине... Төтөнлө мәсьәлә аҙаҡ килеп яҙыусыларҙың X съезд трибунаһында гөлтләп, бер һаламды ла имен ҡалдырмаҫтай хәтәр янғынға әүерелде, үҙгәртеп ҡороу осоронда журналды ла заманса үҙгәртеп ҡороу, бының өсөн беренсе сиратта баяғы йылғыр һалам торхандарҙан торған редколлегияны һаламһыҙландырып яңыртыу кәрәклеге үҙҙәренең үк тырпай һалам ҡамылдары менән күҙҙәренә төртөп әйтелде. Шунан һуң ике айға яҡын тәрән тынлыҡ һөрҙө «Ағиҙел» тәңгәлендә. Әҙәплеләр быны яҡшыға юраһа ла, әҙәпһеҙҙәр борсолоп ҡыҙышһа ла, ике уртала тороусы күпселек үҙгәртеп ҡороу тантанаһына инанды, сөнки юғары даирәләр инде әҙиптәрҙең эшенә ҡыҫылмауын, ысын әҙәп үҙаллы тантана итеренә ышаныуын белдергәйне. Һәм бына шулай булды ла: Яҙыусылар союзының съезда һайланған яңы идараһы ултырышында «Ағиҙел»дең редколлегия ағзаларын бигерәк әҙәпле рәүештә «яңыртып» тәғәйенләү башланды. Һәм заманса үҙгәртеп ҡороуҙың әҙиптәр өсөн дә әҙәпле эш түгеллеге бына ҡайҙа күренде: ҡайһы бармаҡты тешләһәң дә ауырта, ә «мин-мин» тигән шайтандың башына баҫыу уғата ҡыйын икән... Ошо драматик мәлдә бөйөк аҡыл эйәһенең ҡанатлы әйтеме тағы ярҙамға килде: «Әҙип — әҙәпле булырға тейеш!» Һәм әҙәпле ултырҙаштар бер бармаҡты ла ауырттырып тешләмәне, «мин-мин» тигән шайтанды ла бармағына элеп бырағтырманы: бер-берeһен, әҙәпле генә бармаҡ төртөп күрһәтеп, «редколлегия ағзалары» тигән исемлеккә теркәтте. Һөҙөмтәлә «редколлегия» көлтәһе шул уҡ элекке башаҡһыҙ-емһеҙ һәм йүнһеҙ ҡыу һаламдарҙан бөрөп бәйләнде. Алфавит һәм әҙәп тәртибе буйынса ошоғаса икеһе бергә ошо юғары әҙәпле көлтәнең тап урта билендә булып килгән әҙәпле генә икәүҙең яҙмышы әҙәпһеҙлеккә дусар була биреп ҡуйҙы-ҡуйыуын, хатта тәҙрәгә бәрелгән серәкәй безелдәүе ишетелерлек шаҡтай шомло тынлыҡ урынлашты. Сөнки ошбу азаматтарҙың икеһе тиң әлеге съезда ревизия комиссияһы тарафынан «Ағиҙел» менән нәшриәтте шәхси һауын һыйырына әйләндереүҙә һәм ғәйре егетлектәрҙә лайыҡлы баһаланып, яңы идара ағзалығына һайланмай ҡалғайнылар...

Һаламторхан ҡорҙаштар, ниһәйәт, әҙәпле генә көрһөнөп һулыш алды:

— Йәмәғәт, был икәү әүәл-әүәлдән әҙәпле көлтәнең тап уртаһында торҙо лаһа, бынан һуң да әҙәпле алфавит тәртибен боҙорға ярамаҫ, күсәгилешлелек дауам итергә тейеш, — тине ипле генә берәү. Әҙәпле генә тотанаҡлап, был элекке икәүҙе лә элекке урындарына теркәткәс кенә, съезд заңы талап иткән баяғы төп бурысҡа — редколлегияны ***яңыртырға*** йәғни әҙәплеләрҙән әҙәпле яңыларҙы өҫтәргә керештеләр һәм бөтөнләй әҙип булмаған бәғзе бер ике әҙәбиәтсе-һаламсы теркәлде көлтәгә бер тауыштан. Уларҙың да оҙаҡламай «әҙип» булып китеренә өмөт ҙур, сөнки һуңғы бер-ике йыл араһында «әҙәби тәнҡит» баҫыуында ҡамылдары ғына ҡалған бер нисәүҙең дә ҡамыл-мәҡәләнән — дәррәү һалам-повескә һәм хатта романға күсеп, һаламдан биҙгән уҡыусыларыбыҙҙың «Ағиҙел»гә елкә соҡорон борошоуҙа тос өлөш индереүҙәренә үҙебеҙ шаһит булдыҡ бит... Ҡыҫҡаһы, үҙ-ара аңлашып әҙәпле эш ҡылыу һөҙөмтәһендә «һалам генерал»дарыбыҙ кәштәләй яурындарына бер юлы идара һәм редколлегия ағзалығының һаламдан ишкән эполеттарын үҙ ҡулдары менән тағып алырға ла

әүәлгеләй башаҡһыҙ бер ҡыҫыр көлтәгә тупланырға өлгөрҙө; инде журнал уҡыусыларына дәрәжәле көлтәселәребеҙҙең һалам-ҡамыл хикәйәләрен, повестәрен, романдарын, поэмаларын һәм мәҙехнамәләрен уларҙың шул әҙәпле ҡулы аҫтындағы «Ағиҙел» биттәренән бер-бер артлы ҡабул ҡылып алаһы ғына ҡалды, сөнки маңлайҙарына талант мөһөрө баҫылып та, маңлайҙарынан әҙәпле генә тибеп ебәрелгән автор-әҙәпһеҙҙәрҙең, серәкәйҙәй күпме генә тыҙылдап бәрелһәләр ҙә, һалам эполеттар аша «Ағиҙел»гә үтеп кереүе икеле.

Йыһат Солтанов,
әҙәпһеҙерәк әҙип...

М. Буранғоловты ололау

Был йылыбыҙ шуныһы менән ҡыуаныслы булып иҫтә ҡалды: ғинуар айы Зәйнәб апай Биишеваның 80 йәшлек юбилейы менән башланһа, декабре Мөхәммәтша Буранғоловтың 100 йыллығы менән осланды. Әйтергә кәрәк, 1983 йылда уның 95 йыллығын «Ағиҙел календары» рубрикаһы аҫтында ғына булһа ла билдәләргә тырышыуыбыҙ уңышһыҙ тамамланғайны. Бына шуның күңелһеҙ бер шаһаҙәтнамәһе:

Ип. Солтанов!

Был әйбер барырлыҡ түгел. Баш менән түгел, ә... к... менән эшләнгән.

Журнал бите менән бер бит календарь әҙерләйек, Ғөбәй Дәүләтшинга ла шулай — бер бит.

Әмир Гәрәйев.
19.09.1983.

Яҙыу аҫтына М. Буранғолов датаһына ҡарата Абдулхаҡ ағай Игебаев әҙерләп биргән шул «к... менән эшләнгән» материал үҙе теркәлгән: мин белмәгән «Ләлә Фәрзүтдинова. Моңло бер йыр уның исеме (Мөхәммәтша Буранғоловтоң тыуыуына — 95 йыл)». 7,5 бит, А. Игебаев тарафынан журналдың 12-нсе һанына тәғәйенләнмеш.

Ҡағыҙ битенә үҙем дә яҙып ҡуйғанмын: «Хәсән Назарҙан шул әйтелгән күләмдә һәйбәт мәҡәлә әҙерләткәйнем, ташҡа баҫылып сығып та килә ине, корректуранан кинәт алып ташланылар, сөнки Мостай Кәрим, баш редактор Әмир Гәрәйевтең башын әйләндереп: «1952 йылдың 19 июлендә ВКП(б)-ның Башҡортостан өлкә комитеты ҡарары менән Мөхәммәтша Буранғоловтың «Башҡортостандың халыҡ сәсәне» тигән исеме тартып алынды, ул быға лайыҡ түгел», — тип ҡырҡа ҡаршы төшкән (Әмир Гәрәйев үҙе әйтте)». Бик үкендем...

Мәшһүр фольклорсы һәм драматургыбыҙҙың яҡты иҫтәлеген томалаусы был ғәҙелһеҙлек күңелемде биләп алып, тынғылыҡ бирмәгәнлектән, «Башҡортостан» гәзитендә «Мөхәммәтша Буранғоловтың «Зәңгәр шәле» тигән сәмле мәҡәләмде сығартыуға өлгәштем. Бер-ике ай үтеүгә үк, Татарстандың Яр Саллы шәһәрендә «Аргамак» атлы сүп-сар кәрзиненең (йәғни журналының) баш редакторы булып алған әлеге «ике халыҡтың улы» Айҙар Хәлим үҙенең шул керле

баҫмаһының 1994/2 һанының 102 — 105-енсе биттәрен миңә бысраҡ атыу эшенә бағышланы:

Көпә-көндез ҡычҡыртып талыйлар яки «Зәңгәр шәл»не кем язган?

Татарстан мәдәният министры Марсель әфәнде Таишев игтибарына.

«Туғандаш» башҡорт матбугатының «туғандаш» татар халкына, аның мәдәниятына пычраҡ атуы һәм, аҡылсыз ҡашынып, ике милләтне ничек кенә булса да маңгайга-маңгай чәкәштерергә тырышуы яңалыҡ түгел. Ғабдулла Тукай, Мәжит Ғафуриләрнең башҡорт булуын инде алар «раслады». Ҡол Ғали һәм Риза Фәхретдиннәр белән дә алар мәсьәләне «ачыҡлады». Күптән түгел башҡорт тел белгече Рәшит Шәкүр, Салих Сәйдәшевнең «Совет Армиясе маршы»н башҡортныҡы «итте».

Менә тагын бер «ачыш». Башҡортның күптән инде «тиле бәрән орлыгы ашаган» язучысы, публицисты, тел галиме, этнографы, фотографы, социологы һәм тагын да әллә кемнәре, әллә кемнәре сыйфатында йөрегән Жиһат Солтанов «Зәңгәр шәл» пьесасының авторы Кәрим Тинчурин түгел, ә... Мөхәммәтша Буранголов икәнлеген ачыҡлады.

...Татарстан мәдәният министрлыгы мондый оятсыз акцияне жавапсыз ҡалдырырга тиеш түгел, ул, махсус комиссия төзеп, газетаны һәм авторны тирән тикшеренүләр нәтижәсендә хөкемгә тапшырырга тиеш, диб исәплибез.

Искәндәр Камский.

Артабан гәзиттән мәҡәләм күсереп баҫылған, ләкин, «Аргамак»тың үҙ ысулы буйынса, ике урында текстың иң мөһим өлөштәрен «техник сәбәптәр» арҡаһында төшөрөп ҡалдырғандар.

Арыраҡ 106-нсы биттә баҫманың урыҫ телле уҡыусылары өсөн татар телендә баҫылғандар тураһында аңлатма — «анонс» бирелгән:

Сенсация номера: *Уфа. «Кто написал «Голубую шаль?» Перепечатка из газеты «Башкортостан». Известный башкирский мифотворец Зигат Султанов через 74 года «доказывает», что жемчужина татарской драматургии «Зәңгәр шәл» («Голубая шаль») написана не Каримом Тинчуриным, а мифологом Мухаметшой Бурангуловым.*

«Аргамак» талап ҡылған «хөкөмгә» тарттырыу була ҡалһа, баҡтыртып күрһәтергә, тип, тейешле дәүләт органынан тарихи документтың рәсми күсермәһен алып әҙерләп ҡуйҙым:

Комитет по делам архивов Совета Министров Республики Башкортостан

Центральный Государственный Исторический Архив Республики Башкортостан.

450000, г. Уфа, ул. Карла Маркса, 4, тел. 23-39-22; 22-41-96.

24.03.94 г. №95/Т

г. Уфа, ул. Уфимское шоссе, 4, кв. 119, **Султанову З.А.**

Архивная выписка из отчета Башглавлита за декабрь 1924 года о разрешенных к публичному исполнению и демонстрированию произведений:

№ п/п 20, автор пьесы Бурангулов, наименование произвед. Зангар-шаль, форма и характер произведения — в 2 действиях.

П/п Зав. главлит — подпись (неразборчива).

Основание: Ф. Р-798, оп. 1, д. 1248, л. 9. Директор архива А.А. Хисматуллин. Зав. архивохранилищем Г.Ш. Габ.

(Круглая печать).

Лəкин мине Ҡазанға «ҡунаҡҡа» саҡырманылар — əллə «Аргамак»тың ҡойроҡ аҫтын ҡорт саҡҡандай сапсыныуын һанға һуҡманылар, əллə аҡыл-фəлəн яғынан камилыраҡ булдылар...

Ошо урында кире-ҡабат үҙебеҙҙең мөхиткə ҡайтып, заманында Мөхəммəтша Буранғолов менəн Мəжит Ғафури араһында булған бер хəлде һөйлəргə тура килə. Ғафуриҙы күреп белгəн өлкəн быуын яҙыусыларыбыҙҙың бер килкеһе уның Башҡортостан автономияһын үҙһенмəүен, ҡыҙмасаланыбыраҡ алған бер осрағында, шəлдəүен ысҡындырып, "мона башҡыртҡа автономия!" тип сығарып күрһəтеүен һөйлəйҙəр ине. Шул илəмһеҙ ваҡиғаны Мөхəммəтша Буранғоловтың үҙ ауыҙынан ишеткəн кешене осратып, көндəлек рəүешендə теркəнем, бына ул:

25.07.2005

Өфөнөң Аврора урамында шағир яҡташым Мəхмүт Һибəт менəн күрешеп, йəйҙең эҫе көнө ине, бер ихатаға инеп, милəш күлəгəһендəге эскəмйəлə төрлө темаға һөйлəштек. Мəхмүт Һибəт бер иҫтəлеге менəн уртаҡлашты:

"Йəш сағымда шағир Батыр Вəлид фатирында уның поэмаһын эшлəшеп ултыра инем, телефондан Мөхəммəтша Буранғолов шылтыратып, Батыр Вəлидкə инеп сығасағын белдерҙе.

Мөхəммəтша Буранғолов.

Бер шешə ҡыҫтырып килгəн икəн, хужабикə-еңгəй ҙə, йүгереп сығып, "ярты" алып ингəйне -- хозур табын ҡороп һөйлəшеп ултырҙыҡ. Шунда Буранғолов Мəжит Ғафуриҙы иҫкə алды:

-- Башҡорт халҡының тере дошманы ине, шул бəндəгə Башҡортостандың халыҡ шағиры тигəн исем бирҙелəр...

Оло Башҡортостан төҙөлөп, хөкүмəтебеҙ Эстəрлетамаҡтан Өфөгə күсенеп килгəн саҡ, хəҙерге Карл Маркс һəм Пушкин урамдары мөйөшөндəге матбаға йортонда матбаға көнөн байрам итергə йыйылдыҡ. Докладтан һуң тəнəфес иғлан ителеп, ағай-эне тəмəке тартырға туалет бүлмəһенə ағылды. Шунда күрəм: эсеп-ҡыҙышып алған Мəжит Ғафури, шəлдəүенəн ағзаһын сығарған да: "Мона башҡыртҡа

автономия, тотсоннар төбөннән!” -- тип һүгенә (үҙенең татар телендә, әлбиттә). -- “Мәжит ағай, тыйыл инде, шәлдәүеңде элһәңсе!” -- тип үтенәләр яҡындары. Ләкин теге уғата ярһына: “Мона башҡыртларға автономия, тотсоннар...”

Түҙмәнем, елкәһенән бөрөп алып, асыҡ тәҙрәнән тышҡа бырағтырҙым: “Әгәр кире боролоп керһәң, тетмәңде тетәсәкмен!” Сатанлай-сатанлай ҡасты... -- Шулай һөйләне Мөхәммәтша Буранғолов олатай”...

Ә инде халыҡ сәсәненең 100 йыллығына килгәндә, ул арыу ғына кимәлдә үткәрелде, тантанаға саҡырыу билеты ла шаһитлай быны:

Мухаметша Бурангулов, народный сэсэн Башкирии — Мөхәммәтша Буранғолов, Башҡортостандың халыҡ сәсәне. 1888 — 1988.

Хөрмәтле иптәш Солтанов!

СССР Фәндәр академияһы Урал бүлеге Башҡортостан фәнни үҙәгенең «Почет Билдәһе» орденлы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты һәм Башҡортостан Яҙыусылар союзы Һеҙҙе Башҡортостандың халыҡ сәсәне, билдәле фольклорсы һәм яҙыусы Мөхәммәтша Буранголовтың тыуыуына 100 йыл тулыуга арналган гилми конференцияга саҡыра.

Конференция ошо йылдың 22 декабрендә Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының конференц-залында (Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 71-енсе йорт) иртәнге сәгәт 10-да асыла.

16 ғалим сығыш яһарға тейеш икән (исемдәре, темалары күрһәтелгән).

Башҡортостан Яҙыусылар берлеге был мөһим ғилми конференцияны ойоштороусыларҙың береһе итеп күрһәтелһә лә, уның етәкселәре генә түгел, хатта үҙбелдекле минән башҡа бер яҙыусы ла килмәне, шуға күрәлер инде, Яҙыусылар берлеге исеменән һөйләргә миңә һүҙ бирҙеләр.

Гәзиттәге баяғы 1983 йылғы мәҡәләмдә үк мин, тарихыбыҙҙа беренсе булыптыр, моғайын, халыҡ сәсәненең дәрәжәһен «бөйөк» тип билдәләгәйнем (редакцияға рәхмәт: ул “бөйөк” билдәләмәһен билдәле тере «бөйөг»өбөҙҙөң асыуы ҡуҙғалыуҙан ҡурҡып һыҙып ташламанылар). Ошо 100 йыллыҡ юбилей ғилми конференцияһында ла шулай уҡ, бөтәһенән айырмалы рәүештә, ауыҙ тултырып «бөйөк Мөхәммәтша Буранғолов» тип һөйләнем, был иһә артабан яҡын киләсәктә башҡаларға ла уның бөйөклөгөн лайыҡлы баһаларға прецедент булды, буғай. Шулай уҡ мин ғалимдар ҡарамағына: «Мөхәммәтша Буранғоловтың «Башҡортостандың халыҡ сәсәне» тигән хөрмәтле исеме 1952 йылда юғары органдар тарафынан юҡҡа сығарылыуы дөрөҫ булһа, Башҡортостан Юғары Советынан уның ул исеменең кире ҡайтарылыуын юлларға кәрәк», — тигән тәҡдим кереттем. Институт етәкселәре быны бойомға ашырҙымы, юҡмы — уныһы миңә ҡараңғы.

Юғары Совет рәйесенә өндәшеү

Әммә ике ай уҙыу менән үк, 1989 йылдың 25 февралендә әҙәбиәтебеҙҙең һәм сәнғәтебеҙҙең башҡа бер мөһим мәсьәләһе буйынса минең үҙемә баяғы юғары органға тура мөрәжәғәт ҡылырға тура килде:

Председателю Президиума Верховного Совета БАССР
тов. Султанову Ф.В.

Уважаемый Файзул Валиевич!

21 февраля 1989 года в Башакадемтеатре драмы им. М. Гафури состоялся просмотр сдаточного спектакля по пьесе А. Халима «Пәрей туйы», где присутствовала большая группа писателей, журналистов, театроведов, в том числе и я, зав. отделом Литературной критики журнала «Агидель». Представление ошеломило нас своей необузданной антихудожественностью и безидейностью и никто толком не смог понять, почему подобная халтура-драматургия принята академтеатром. При обсуждении спектакля, где присутствовал и министр Культуры республики С. Аминов, мы высказали единое мнение: из-за уродства драматургии спектакль не имеет права быть представленным со сцены академтеатра. Однако руководство театра, как выяснилось позже, пошел наперекор общественному мнению — на другой же день (22 февраля) состоялась премьера спектакля. В связи с этим я написал статью «Кому нужно было это?», где как писатель выразил свое отношение к спектаклю, а также действительному положению национально-культурного дела в республике в целом. Наши республиканские газеты, как Вам известно, несколько раз уже перепечатывали из центральной прессы статьи собственного корреспондента газеты «Правда» В. Прокушева, усиленно муссирующего о якобы имевшем место в республике «башкирском шовинизме», что является сплошной клеветой, ибо истинное положение таково, что как раз башкиры сами являлись и являются жертвами шовинизма. В моем статье доказательно говорится и об этом. Однако наши республиканские газеты, (например, «Совет Башкортостаны») боятся горькой истины и отказываются опубликовать такой материал. Я думаю, гласность и плюрализм, широко шагающие по стране, позволяют говорить нам народу правду, независимо от того, нравится она или нет А. Халиму, В. Прокушеву и их сторонникам, ибо и в прессе должно существовать обратная связь. Поэтому прошу Вас как глава государства ознакомиться с текстом предлагаемой статьи и соодействовать ее опубликованию в Вашем печатном органе «Совет Башкортостаны».

С гл. уважением **З. Султанов,** писатель.

Адрес: 450055, Уфа — 55, Уфимское шоссе, 4, кв. 119, Султанову Зигату Адигамовичу.
Телефон: 31-45-97 (квартира). 25 февраля 1989 г.

Әлбиттә, ғәҙәттәгесә, хатыма бер ниндәй ҙә яуап-фәлән булманы...

Һәм бына шул «Совет Башҡортостаны»н (һәм башҡаларын да) өркөткән текстың үҙе:

Кемгә кәрәк был пәрей туйы?

Владимир Ильич Ленндың туранан-тура ҡатнашлығында Башҡорт АССР-ын төҙөү тураһындағы Килешеүгә ҡул ҡуйылған тарихи көндөң 70 йыллыҡ юбилейын ҡаршыларға теүәл бер ай ҡалған саҡта милләтебеҙ яҙмышына, культураһына ҡағылышлы күп нәмәләр тураһында етди уйланырға, берсә, һөйөнөп, берсә, көйөнөп, бөгөнгөбөҙ менән бергә киләсәгебеҙҙе ҡайғыртырға тура килә. Таң һарыһында күҙҙе тырнап асыу менән бала-сағаларыбыҙҙың өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, тубырсыҡтарҙай тупырлап үҫеп килеүенә ҡыуанһаҡ, ауыҙ асып өндәшеү менән үк уларҙың телһеҙлегенә — әсә теленән мәхрүм ҡалыуҙарына йөрәк әрней. Башҡортостан тупрағында башҡортса һөйләштергән ясле, балалар баҡсаһы, мәктәптәрҙең аҙайыуы йәки онотҡанда бер осрауына ғәжәпләнмәй ҙә башланыҡ шикелле. Кескәйҙәр һәм үҫмерҙәр өсөн үҙ телебеҙҙә гәзит-журналдар сыҡмауына, балалар әҙәбиәтенең махсус нәшриәте, йәш тамашасы өсөн милли театрыбыҙ булмауына ла күнегеп барабыҙ кеүек. Шулай уҡ районларыбыҙҙа урыҫ һәм татар телдәрендә әллә нисәләгән тиҫтә гәзит нәшер ителгән ваҡыттарҙа башҡорт телендә ике генә район гәзите баҫылып, ҡалғандары башҡа телдәрҙән тәржемә ителеүенә (дубляж), ә башҡорттар 43 процент, татарҙар — 31, урыҫтар 11 процент тәшкил иткән 21 көнбайыш райондарыбыҙҙа татар телендә — 21, урыҫ телендә 18 район гәзите уҡыусыларын туплағанда, башҡорт телендә ни бары бер генә гәзит (ул да булһа дубляж!) быҫҡып янған һуҡыр шәмдәй яңғыҙ үҙе йәшәүенә лә иғтибар итмәйбеҙ кеүек. Ә мәктәп мәсьәләһе? 1925 йылдан алып 1968 йылға тиклем урыҫ мәктәбе һаны 788-ҙән 1914-кәсә, татар мәктәбе 582-нән 1117-гәсә гөрләп артһа, башҡорт мәктәбе һаны 572-нән 785-кә тиклем генә ыраны... Билдәле булыуынса, ленинсы милли политиканы тупаҫ боҙоуға юл ҡуйылған торғонлоҡ йылдарында Башҡорт АССР Мәғариф министерствоһы әсә телендә уҡытыуҙы ҡырҡа сикләп, элек милли телдә уҡыған мәктәптәрҙә балаларҙы урыҫ телендә уҡытыуға күсереү эшен ҡыҙыулатты, был зыянлы эшмәкәрлек беренсе сиратта башҡорт теленә һуҡты. Миҫал өсөн 1973-74 уҡыу йылын ғына алайыҡ: ул йылда республикабыҙ буйынса 650 милли мәктәп урыҫ телендә уҡытыуға күсерелһә, шуларҙың 112-һе генә татар, ә 420-һе башҡорт мәктәбе ине. Өҫтәүенә, бына ғына торған 1988 йылда көнбайыш башҡорт ауылдарындағы тиҫтә йыл буйы әсә телендә эшләп килгән 200 башҡорт мәктәбе бер юлы татар телендә уҡытыуға күсерелеп, милләтебеҙҙең көнбайыш диалектында һөйләшеүсе өстән бер өлөшө үҙенең милли телендә уҡып белем алыуҙан, ул ғына ла түгел, үҙ милли телен дәрес кенә итеп булһа ла өйрәнеүҙән мәхрүм ҡалды... Оҙаҡ йылдар һуҙымындағы ошондай кире күренештәр арҡаһында халҡыбыҙҙың һуңғы өс быуын кешеләренең байтағы башҡа телдә уҡып һәм һөйләшеп үҫте, милли телен танымаған, милли культураһын һанға һуҡмаған, шул нигеҙҙә башҡа милләттәрҙе һәм милли культураларҙы ла ихтирам итмәҫтәй нигилистар, сепрәк-сапраҡ һөйәрйәндәр, ҡорһаҡ ҡолдары булып етеште. Ундайҙарға һәммәбеҙ өсөн изге һаналған интернационализм төшөнсәһе лә дәүләт кеҫәһен ҡармағанда, тамаҡ ярып үҙ мәнфәғәттәрен даулағанда битлек итеп ҡулланыу өсөн генә кәрәк. Ҡыҫҡа ғына әйткәндә, ысын интернационализмдың төп нигеҙен тәшкил иткән ысын миллилекте аяҡ аҫтына һалып тапаныҡ, шуны, аяҡ аҫтынан алып, кешеләрҙең

үҙҙәренә ҡайтарырға ваҡыт етте — миллилеккә дефицит ҡырҡыулашты. Ошо яуаплы осорҙа ике күҙебеҙҙең береһе өмөт менән республикабыҙ етәкселегенә төбәлһә, икенсеһе культура әһелдәребеҙгә уҡтала — үҙ иңенә артҡан әхләҡи-политик йөктө намыҫлы егелеп тартамы һуң милли әҙәбиәтебеҙ, сәнғәтебеҙ маһирҙары? Уҡыусы һәм тамашасы күңелендәге ысын мәғәнәһендәге миллилеккә дефицитты, һыуһауҙы ни рәүешле ҡәнәғәтләндерә был зирәк ҡор? Яҡынлап килгән оло юбилей айҡанлы милләтебеҙгә, бәғере ҡата барған йәш быуын кешеләребеҙгә ҡайһындай ижади бальзам алып киләбеҙ?

Диңгеҙҙең бер тамсыһынан да диңгеҙ күренә, тигәндәй, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы орденлы һәм М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрының быйылғы яңы эше менән танышырға саҡырылғас, беҙ, бер төркөм яҙыусылар, журналистар, театр белгестәре, ана шул турала ғәмләнеп, оло өмөт бағлап барҙыҡ. Ысынлап та, театр ул әҙәбиәт, тылсымлы һүҙ сәнғәте, музыка, һынлы сәнғәт һәм башҡаларҙың бөтәһе бер төйөнгә сатрашланған балҡышлы дәү түре бит. Театрҙан милли культура кимәлен, илдең сәләмәтлеген йәки сирен асыҡ төҫмөрләп була, академия исемен йөрөткән театр иһә иң юғары мәғәнәлә милләтебеҙҙең көҙгөһө. Милләттең үткән һәм хәҙерге хәлен баҙыҡ сағылдырып күңелдәрҙе зауыҡландырыу менән бергә ул халыҡтың өмөт иткән яҡты киләсәген дә сағыу һынландырып баҡтыртырға, рухландырырға бурыслы. Милләтебеҙ кисергән хәҙерге милләтһеҙлек ауырыуы осоронда академия театры, хәстәленең башы осонда ясин сығыусы түгел, ә тылсымсы-табип булырға тейеш. Шуға ла беҙ А. Хәлимдең «Пәрей туйы» пьесаһы буйынса (режиссеры Абдулла Ғиләжев) әҙерләнгән спектаклдә атаҡлы театр коллективы юғарыла әйтелгәндәрҙең барыһын да күҙ уңында тотоп эш иткәндер ҙә Башҡорт АССР-ы юбилейына лайыҡлы ижад емеше менән килгәндер, тип көткәйнек. Әммә сәхнәнән күргәндәребеҙ башҡа шаңҡыта һуғып, йөрәкте ауырыу ҡылды. Ысынлап та, ауыҙ-моронға, ике күҙгә саң тултырғыс ҡара ҡойон уйнатып, төрлө ташландыҡ әйберҙәрҙе, сүп-сарҙы, ҡалай-ҡолай ярпыларын һауаға сөйөлдөрөп, бер-береһенә бәрелештертеп өйөрөлдөргән шау-шоулы ытырғаныс пәрей туйын хәтерләтте ҡәһәрле был тамаша — пьеса авторының бәйһеҙ хис-хыялы тарафынан һаташыуҙар донъяһынан йыйып-ҡоршап бирелгән, драматургия ҡанундарынан яҙлыҡҡан ала-ҡола ҡорама. Хәйер, драматургия тигән нәмә үҙе бынан йәйәүләп ҡасҡанлыҡтан, тамашаның сәхнәләрен, айырым күренештәрен дә ентекле анализлау, бизмәнгә һалып һәлмәкләтеү мөмкин түгел, сөнки нимә ҡымшатһаң да усыңда уҡ тарҡала ла бер табаҡҡа өйөрөлә, йүнһеҙ тарафҡа тарта...

...Сәхнә ҡырына шаҡырайтып ҡуйылғандыр Милос Венераһының билдәле шыма таш һыны. Йәнәһе күктең етенсе ҡатын ишаратлаған сәхнә түрендәге бейек һәндерәлә тора ҡайҡайып ошо һынды кәүҙәләндермеш әртисбикә — боронғо грек хөлләһенә төрөнмөш ярым-яланғас тәнле, тереләрҙән тере мөхәббәт хоҙайбикәһе. Баштүбән һөйәп теҙеп ҡуйылған ҡалай табуттармы ни — ҡалай ҡапҡаслы бүлкәләргә бүленгән сәхнә төбө. Заманабыҙҙың уртансы һәм йәш быуынын күҙалландыртырға тейешле йәнә бер өйөр ярым-яланғас һылыубикәләр, уларҙың ыҫпай кейенгән ир-ат затлы һөйәркәләре һәм хәләл ефеттәре шул «табут»тарҙың ҡалай ҡапҡастары артынан дөһөр-шатор атлығып

сығалар ҙа, көллөһө лә бер-береһе менән хәтәр әүмәкләшеп, баяғы етенсе ҡат күккә — һәндерәгә менәләр, һәндерәнән төшәләр ҙә, пәрей туйын уғата нығ туҙғытып, ҡотһоҙ ҡалай өңдәренә кире кереп китәләр — шаңҡытылған тамашасы аңы сәхнәләге хәрәкәттәр сеймәлешен ни бары ошо «логика»ға һалып юҫыҡларға һәләтле. Көллө ҡойон зәхмәттәре күҙ ҡырҡырлыҡ ут-оскон, музыка ҡоралдарының ярһыу гөрөлтөһө, шул мәхшәрҙе еңеү өсөн көсәнеп, буғай, артистарҙың һәм артискаларҙың тамаҡ ярып ҡысҡырыуҙары, иҙән тибеүҙәре хасил ҡылмыш дөйөм ғәрәсәт, какофония ике шаршау дауамынса бер туҡтауһыҙ ҡубарыла тамашасы башына. Пьеса авторы тарафынан киң билдәле «Ҡанатлы һүҙҙәр» йыйынтығынан, йыртмалы календарь биттәренән, тип әйтерлек, сүпләп алынған боронғо грек аҡыл эйәләренең әйтемдәрен геройҙарының телмәренә услап-услап һибеү ҙә, тел төбөнә һәм осона шул уҡ боронғо грек мифологияһы үрнәктәрен йәбештереп һалыу ҙа тамашасыны шаҡ-ҡатырырға көсәнеүҙең саманан сыҡҡан өйөрмәһен ауыҙлыҡларлыҡ тос аҡыл һәм логикаға ирештермәй. Бер ыңғайҙан шуны ла әйтергә кәрәк: сәхнәләгеләрҙең телмәренә көрмәлтелгән был үтә «аҡыллы» тел байлығы, әйләнгән һайын, башҡорт теленә тәбиғи булмаған һүҙҙәр, сит тел ҡалыбына һипләп һөйләм төҙөү шойҡаны менән ҡолаҡты ярып, автор тексының башҡорт теленә тәржемә ителмәйенсә, «башҡорт таҡыяһы кейҙертеп» кенә сығарылыуын фашланы — был да, әлбиттә, академия театры сәхнәһен биҙәмәне. Дер-һелкеткес мәғәнәһеҙ шул бәләнән йәнең йүнкеп көйөнөп тә ҡуяһың: был сәхнәлә быға тиклем дә ете диңгеҙ аръяғындағы грек мифтарын тергеҙеп ҡарауҙар булды, әммә улар милли сәнғәтебеҙ хазинаһына иш өҫтөнә ҡуш булып керә алдымы һуң?.. Милли үҙаң шишмәләребеҙ ҡорғаҡһыған заманала милли аңға һәм зауыҡҡа һуҡыр тин дә өҫтәмәгән нәүбәттәге был «греклаштырыу» ынтылышы мотлаҡ кәрәк инеме? Гректарҙыҡынан ҡалышмаҫлыҡ (хатта уҙып та киткән!) башҡорт мифологияһына, гүзәл халыҡ ижадына нигеҙләнгән классик әҫәрҙәребеҙ ҙә ошо сәхнәлә һынланырға юл яра алмай ята бит... Аптырап, рәнйеп, баш ҡатып, берсә, таш Венера баҫып торған ергә, берсә, ымһындырткыс тере Венера ҡалҡынған түргә зарлы күҙеңде төбәйһең, әммә хоҙайбикәләр икеһе тиң йәнһеҙ, вайымһыҙ — таш һындар рәүешенән уҙҙыра алмаған уларҙы пьеса авторының ҡөҙрәте. Уның ҡарауы ерҙәге иҙәндә лә, үрҙәге һәндерәлә лә бер ниндәй ҙә аң ҡалыбына һыя алмаған пәрей туйы туҡтауһыҙ ҡоторона — кешелек әхләгенән төңөлдөртөп ғәүрәт хәленә төшөрөлгән ялтыр-яланғас кәүҙәләр һаман бер-береһенә ҡылйыландарҙай көрмәлеп әүмәләшә, әйтерһең, пьеса авторы бөгөнгө көн йәмғиәтебеҙҙең ыңғай кәүҙәләнешен дә, кире һынланышын да тере көйөнә тотоп алып мендерә алмаған сәхнәгә, ә уның, үлеклектән дә үтеп, емтектәй бурһып тарҡалған, әхләҡи умыртҡа һөйәгенән арынған киҫәк-ярпыларын ғына күрәп килтереп өйгән. Тамашасы күңеленә таяныс бирерлек идея умыртҡаһы булмаған ана шул емтек касафаты бөгөнгө мещан күренешенең ҡайһы бер атрибуттарына төрөнөп, ҡайраҡташтай шымарған һүҙҙәрен ҡысҡырып, бәүелһеҙләнеп тантана ҡыла сәхнәлә, бәүелһеҙлектең иң юғары кәүҙәләнеш нөктәһендә тамаша залына ул: «Алға, коммунизмға!» — тип һөрәнләп тә ебәрә...

Кире ҡағыу юлы менән дә илдең яҡты идеалын раҫлау мөмкин икәнлеге билдәле. Ләкин «Пәрей туйы»нда ул раҫлау заңы зыңламай, сөнки пьеса авторы

күҙ уңында тотҡан идеал, умыртҡа һөйәге юҡ. Шуға күрә сәхнәләге өс быуын әһелдәребеҙҙең дә иҫ киткес шәп уйнауы ла, үкенескә ҡаршы, мәйетте терелтергә тырышып тын өрөү, күрәләтә мәғәнәһеҙгә йән атып көсәнеү кеүек. Ансамблдең иң юғары кимәлдәге төҙөклөгө, профессиональ ҡеүәте, әйтерһең дә: «Бына беҙҙең талант-һәләт, ә һеҙ беҙҙән шуны нимәгә сарыф иттертәһегеҙ!..» — тип бер юлы әҙиптәргә, Культура министерствоһына, театр етәкселегенә рәнйеүен белдерә һымаҡ.

Ҡабул ҡылыу спектаклен ҡарағандан һуң, фекер алышыу бүлмәһенә күптәребеҙ ана шулай шаңҡытылып килеп индек. «Академия» исемен йөрөткән, милли культурабыҙҙың шифалы йәншишмәһе булырға тейешле театрыбыҙ сәхнәһенә бындай йән иҙгес мажараның дөрөп килеп кереүе бөтөнләй аңлайышһыҙ, иҫ киткес сәйер ине. Күрәләтә етлекмәгән пьесаға нисек итеп Яҙыусылар союзының драматургия секцияһы үҙенең абруйлы фатиха ҡағыҙын биргән? Режиссер А. Ғиләжев, режиссер ғына түгел, ә профессор һәм граждан да булараҡ, ни ҡулы барып шуны ҡуйырға алған? Академия театрының баш режиссеры Р. Исрафилов, милли драматургтарыбыҙҙың ҡайһыларының иң яҡшы тип нарыҡланған әҫәрҙәрен дә был сәхнәгә үткәрмәйенсә сос һаҡта торған Исрафилов, был юлы ни сәбәпле юл асҡан икән күрәләтә бракка? Аҙаҡ килеп, Культура министерствоһы ниңә күҙ йомоп ҡалған? Өҫтәүенә, спектакль тигән нәмәләре әле өлгөрөп тә етмәҫе, белгестәр һәм йәмәғәтселек хөкөмөнә ҡуйылмаҫы, үҙ баһаһын алмаҫы элек үк, ниңә уны республика матбуғаты тамашасыларға тәҡдим ҡылырға ашыҡҡан, билеттар ҙа ай элгәре һатылған? Хатта танылған драматургтарыбыҙҙың да әҫәрҙәренә бындай иҫ киткес ыңғай шарттар тыуҙырылмай, ишектәр ҙә үҙҙәренән-үҙҙәре шартлап асылып бармай бит. А. Хәлим шул ҡәләмдәштәренән ни яғы менән айырыла, әллә уның кемдәргәлер күрһәткән айырым хеҙмәте, оло ҡаҙанышы бармы?..

Фекер алышыуҙа ана шуларҙың барыһы ла тура ярып әйтелде, күпселектең тәҡдиме лә бер булды: А. Хәлимдең «Пәрей туйы» пьесаһы буйынса әҙерләнгән спектакль, драматургияһының художество һәм идея-политик зәғифлеге арҡаһында, Башҡорт академия театры сәхнәһендә күрһәтелергә һис тә лайыҡлы түгел.

Әммә ләкин... шул йыйылыштың иртәгәһенә үк шул уҡ театрыбыҙ сәхнәһендә «Пәрей туйы»ның тантаналы премьераһы булып үтте — Культура министерствоһы менән театрыбыҙ етәкселеге Башҡорт АССР-ының 70 йыллығы айҡанлы халҡыбыҙға ана шундай бүләк әҙерләп бирҙе. Ошо хәл күңел төпкәлебеҙҙә намыҫ экологияһының да боҙолоуы тураһында һөйләмәйме? Төрлө сәбәптәр арҡаһында милли тел һәм милли үҙаң биртенеү кисергән был осорҙа ҡойон уйнатып милләтебеҙҙең күңел усағын емертергә, рухыбыҙҙы ҡаҡшатырға ынтылыш түгелме был? Йәмәғәтселек фекерен аяҡ аҫтына һалып тапау ҡасанға тиклем барыр?!

Милли театр милләт алдында үҙ бурысын намыҫлы үтәргә тейеш.

Йыһат Солтанов. 24.02.1989.

Хөрмәтле дәүләт эшмәкәребеҙ Фәйзул Вәли улының Юғары һәндерәһенән, билдәле, бер ниндәй ҙә яуап та бирелмәне, сара ла күрелмәне, буғай, — күнегелгән күндәмлек. Тормошобоҙ һәүетемсә үҙ ыңғайына аҡты. Тиҙ үк арала сәхнәбеҙҙән үҙенән-үҙе төшөп ҡалған «Пәри туйы» урынына икенсе «туй»ҙар килде...

Ә мин иһә, төрлө яҡтан ҡағыла-һуғыла, туған әҙәбиәтебеҙҙең төрлө жанрҙарында ла йән атып эшләүем менән бергә башҡорт халҡының рухи-мәҙәни тарихын тәрәндән тикшереү, шуны яҙып халҡыма еткереү юҫығындағы үҙемә күрә фиҙакәрҙәрсә юлымды дауамланым (хеҙмәттәремдең бер килкеһе, өҙөп-йолҡоп, журналдарҙа донъя күрҙе). Бер үк ваҡытта, зыңлаған замана һандалында ҡаным ҡыҙышып, утлы-дауыллы сәйәсәткә лә сумдым...

ӨСӨНСӨ КИҪӘК

Елле-дауыллы йылдар

Сумамын сәйәсәткә

1989 йыл; балыҡ башынан серей, тигәндәй, торғонлоҡтан һәм ҡартлыҡтан әлһерәп бөткән юғары етәкселек әһелдәре Коммунистар партияһының йылдар буйынса һуҙылып килгән кризисын үҙҙәренең әрпешлеге менән уғата көсәйтеп, күп милләтле Советтар Союзы халыҡтарының ҡыҙыл империя ҡыҫымына ҡаршы туплана килгән нәфрәтен һуңғы сиккә еткерҙе — илдә ижтимағи-сәйәси хәл ҡырҡа үҙгәрҙе. Шундай елле-дауыллы замана килде -- Башҡортостан республикаһын юҡ ителеүҙән ҡурсалап ҡалыу өсөн һәм республикабыҙға үҙаллылыҡ (суверенитет) даулап халыҡ урамға сыҡты, майҙандарҙы һәм залдарҙы илдең изге талаптары тетрәтте. Бындай хәлдә яҙыусының урыны, әлбиттә, халыҡ араһында ине; халыҡ беҙҙән замана заңын яңғыратҡан ҡыйыу һәм хаҡ һүҙ көттө, телмәрҙәребеҙҙе йотлоғоп тыңланы. Арабыҙҙа, әлбиттә, “как бы чего не вышло” тип, үҙ тиреләрен һаҡлап, әсе араҡы шауҡымында өйҙәрендә боҫоп ятыусылар ҙа булды (аҙаҡ улар “беҙ алыштыҡ!” тип күкрәк һуғып йөрөнөләр һәм түрәлек креслоларына үрләнеләр), ләкин эсендә йәне барҙар аҙаҡҡаса ныҡ -- кереше кирә тартылған уҡ ине. Дары һымаҡ гөлтләп ҡабынырға әҙер торған массалар алдында хаҡлыҡты ғына ярып һалған йәнле һүҙ, тере һүҙ кәрәккәнлектән (ә ундайҙы матбуғатта ташҡа баҫтырыу беҙҙең өсөн тыйылғанлыҡтан), эштән ҡайтҡас төнөн ҡағыҙға яҙып, ә иртәгәһен янып-көйөп трибуналарҙан һөйләргә -- телмәр публицистикаһына күстем, ә был иһә йөрәгемде, мейемде яндырып үткән һәм керешенән атылған уҡтай киләсәккә төбәлгән заманабыҙҙың изге шаңдауы ине. (Уҡыусыны алдан уҡ киҫәтәйем: мемуарҙың был киҫәге, тулыһынса тип әйтерлек, ана шундай туранан-тура заман заңдарына ауаздаш телмәр публицистикаһынан ғибәрәт).

Бөтә союздаш һәм автономиялы республикаларҙа, тап ошо беҙҙәгеләй, суверенитет, үҙ аллылыҡ өсөн хәрәкәт көсәйҙе. Большевиктарҙың Башҡортостанда башҡорт халҡына ҡарата 70 йыл буйына асыҡтан-асыҡ та, аҫтыртын да геноцид сәйәсәте үткәреүе һөҙөмтәһендә йән иҫәбе яғынан ныҡ кәмегән һәм кәмей барған, гүр ҡырыйына килтереп еткерелгән милләтебеҙҙе һәләкәттән ҡотҡарыу, артабанғы үҫешен тәьмин итеү ғәме борсоно манҡортлоҡҡа бирешмәгән, намыҫын юймаған зыялыларыбыҙҙы. Күп милләтле Башҡортостан суверенитеты менән бергә башҡорт халҡының йәшәүе өсөн мотлаҡ булған милли консолидация, башҡорт теленә дәүләт статусы, ергә аҫабалыҡ хоҡуғын тергеҙеү мәсьәләләре лә ҡалҡып сыҡты көн үҙәгенә. Ошо йылдың аҙағындараҡ үткәрелергә тейешле халыҡ иҫәбен алыу (перепись) эше халҡыбыҙҙың йән иҫәбен кәметкән һәм кәметәсәк ассимиляцияның сәбәптәрен һәм уны туҡтатыу юлдарын эҙләргә, башҡорттан башҡа милләт кешеләре яһаусыларҙың ысын йөҙҙәрен асырға этәрҙе. Хәйер, был оло ғәм минең өсөн яңы түгел — 1974 йылда уҡ «Ядкәр» тигән романымда (ун дүртенсе сәхифә) күтәреп сыҡҡайным уны, хатта көнбайыш диалектты ла әҙәби телебеҙгә керетеү өсөн ниндәй тәғәйен саралар күрелергә тейешлеген дә кәңәш иткәйнем, үҙемә ҡалһа... Бына шул ғәм, был юлы инде башҡаларҙың да башын ныҡ ауырттырып, 15 йылдан һуң кире әйләнеп ҡайтты, ә мине йыл башынан уҡ баяғы урам публицистикаһы өлкәһендә ең һыҙғанып

яңынан-яңы рухи-ижтимағи һөжүмгә күсергә этәрҙе. Республика гәзиттәрендә тура һүҙҙе һөймәүҙәренә лә ҡарамаҫтан, "Советская Башкирия"ла юл ярырға тырышып, түбәндәге мәҡәләмде илтеп ҡараным:

Думы о переписи

Когда думаю о предстоящей переписи населения республики, о будущем Башҡортостана, башкирской нации, невольно приходит на ум положение из статьи русского публициста Владимира Вострухина «Что вепсы нам? Что мы вепсам?» (журнал «Молодой коммунист» №9, 1988 г.). Оказывается, на территории нынешней Ленинградской области когда-то существовала страна Вепсария и многочисленный вепский народ. Теперь уже давно нет Вепсарии, а вепсов осталось всего лишь 8 тысяч душ, но вскоре их вовсе не станет — идет безудержная сплошная ассимиляция, то есть, как пишет автор статьи, вепсы «стали бежать из вепсов в русские».

Публицист, обратившись к одному из последних вепсов, дает ему такой риторический вопрос: «Но вместе с языком исчезнут и вепсы как народ. Останутся людские единицы и будут жить, есть, пить, спать, но не вспомнят никогда, что они — вепсы. Неужто не восстает ваша национальная гордость при мысли, что будут русские, грузины, литовцы, туркмены, башкиры, но не будет вепсов?»

Как видите, башкиры здесь перечисляются в ряду наций благополучных, гарантированных от исчезновения. Но так ли на самом деле? Уважаемый автор статьи, по-видимому, начитался писаний собственного корреспондента «Правды» Прокушева и небезизвестного «сына двух народов» некоего Айдара Халима о якобы могучих и свирепых башкирах, жестоко властвующих в своей республике над бедными русскими и татарами, закрывая их школы и лишая их родного языка.

Но так ли в самом деле? Если обратиться к фактам (а факты — упрямая вещь!), то они свидетельствуют о небывалом в истории кризисном состоянии башкирской нации. Вопрос стоит так: быть или не быть башкирскому национальному языку, самой башкирской нации.

Если в конце прошлого века в 1897 году на территории только одной Уфимской губернии проживали 899 тысячи башкир (41% к общему населению губернии) и только лишь 184 тысячи татар (11%), то к 1970 году примерно на той же территории численность башкир стала 892 тысячи (23% к общему населению), а татар 944 тысячи (24%). Как видно, за годы советской власти в Башкирии прирост татар составлял в 5 раз, но в то же время численность башкир стала меньше, чем было их в самодержавном 1897 году. А за пределами республики наблюдался полное их исчезновение. Например, если 1897 году в Мензелинском уезде, сплошь населенном башкирами и в советское время отошедшем в состав новообразуемой Татарской АССР, насчитывалось 193 тысячи башкир, то в 1926 году по переписи их стало только 1752 человека, а в 1939 году там башкир совсем не стало... то есть, в годы советской власти мензелинские башкиры все поголовно были переписаны как татары. При этом до 1926 года численность и восточных башкир сократилась в 2,5 раза!.. В то время, когда до 1970 года общая численность

башкир сократилась, каким же образом получилось так, что численность татар в республике увеличилась в 5 раз?

Не будем касаться разительных фактов экономической политики в республике, классическим воплощением которой является процветание отатаризованного запада и знаменитые хайбуллинские землянки башкирского востока.

Возьмем школы.

В 1925-26 учебном году количество школ в республике было башкирских 572, а в 1967-68 учебном году их стало 785 (137% прироста); соответственно татарских школ было — 582 и стало 1117 (192% прироста!); русских школ — 788 и стало 1914 (243% прироста!). Как видно, прирост численности башкирских школ в сравнении с татарскими тоже отстал примерно в три раза. А в годы застоя, когда в республике был взят курс на ликвидацию национальных школ, опят-таки главный удар наносился башкирской школе. Например, в числе 650 национальных школ, переведенных на русский язык обучения лишь в одном 1973-74 учебном году, башкирских оказалось 420, а татарских — всего 112. А вот самое свежее данное. На новый 1988-89 учебный год число школ с обучением на башкирском языке вновь сокращается — еще на 300 единиц. Как было справедливо сказано на страницах «Литературной газеты» от 7 сентября 1988 года, такая тенденция может иметь катастрофические последствия.

Как видно, и послешакировское руководство республики (Р.Х. Хабибуллин) нанесло удар в первую очередь башкирским школам в исконно башкирских деревнях запада, сотнями и сотнями превращая их обратно в татароязычные. Вместо того, чтобы действовать по благоразумному принципу: башкирской деревне — башкирская школа, татарской деревне — татарская и т.д., партбюрократия все еще действует по старому принципу: башкирской деревне — татарская школа...

А как обстоит там дело с языком местной печати?

У меня есть данные по 21 районам западной Башкирии. Из общего числа населения этого региона башкиры составляют 43%, татары — 31%, русские — 11%. Как видно, башкиры здесь составляют подавляющее большинство. Однако на башкирском языке издается (дубляж) лишь одна — единственная альшеевская газета, в то же время на татарском — 21, на русском — 18. Напрашивается вопрос: мать или мачеха для нас, башкир, Башкортостан?

За 70 лет существования Советской власти западные башкиры так и не смогли иметь возможности обучать своих детей на национальном языке — уже три поколения западных башкир пропущены через мельницу татарской школы. В то же время партийное и советское руководство республики до сих пор упорно придерживается когда-то кем то выработанной антинаучной концепции, согласно которой отстраняя их, западных башкир, от общенационального башкирского языка, а в то же время навязывая им татарский язык. (Смотрите «Открытое письмо министру просвещения» западной башкирки Раузии Гилфановой, требующей обучения детей западных башкир на башкирском языке. — Журнал «Агидель» 1988/8. Кстати, министр Гарданов до сих пор не ответил ей). Самым

справедливым решением было бы придерживаться, как уже было сказано, благоразумного принципа башкирской деревне — башкирская школа, татарской деревне — татарская и т.д., независимо от заблуждения отдельных родителей относительно роли национального языка. Ведь, не зависит же от их прихоти, например, должны ли их дети изучать в школе английский, немецкий, французский языки; а вот свой национальный язык поставлен в прямую зависимость от прихоти родителей. При этом не надо забывать что вот уже три поколения часть родителей не знает и не уважает свой национальный язык, ибо они с детства воспитаны русской и татарской школой. Но я твердо убежден, ни великий русский народ, ни 6-ти миллионный татарский народ в лице простых людей не нуждаются в том, чтобы уже в конце просвещенного XX века раздроблять и ассимилировать один из древнейших, но уже составляющий меньшинство на своей же родине башкирский народ. Корень этого вопроса уходит в глубину истории и она питается ядовитым выделением дореволюционного и послереволюционного пантатаризма, одним из идеологов которого был гитлеровский прихвостень Гаяз Исхаки. Как известно, в результате сталинских репрессий 30-х годов выдающиеся башкирские национальные кадры были ошельмованы как враги народа и физически уничтожены, в результате чего реальная власть в республике перешла в руки противников башкирского самоопределения, то есть скрытых сторонников слияния башкир в татарскую нацию, а двух республик — в единую Татарскую республику. Вот они и довели башкир до настоящего кризисного состояния. Разве можно назвать все это ленинской национальной политикой?!.

Из всего высказанного вытекает: в республике произошло глубокое искривление ленинской национальной политики. Более того, в отношении башкир это есть духовный, национально-культурный геноцид, проводимый со стороны некоторых руководящих представителей так называемого брата-близнеца татар при молчаливом согласии русского старшего брата — это есть некоторый горький результат 70-летнего успешного решения национального вопроса в Башкирии. При таком положении и в будущем можно ожидать грубых искривлений в пользу татар, например, в предстоящей переписи населения республики, ибо после упомянутых печатных выступлений Прокушева, А. Халима и других, а также после агитпоездок на запад некоторых татароязычных писателей типа Атнабаева, резко настроенных против башкирского языка, а также имея в виду их сторонников в местных руководствах, не приходится надеяться на объективность переписчиков и самой переписи. И на это важное дело будет давить груз негативного прошлого и он может оказаться решающим. И тогда мы можем оказаться в положении исчезающих вепсов.

Использованная литература:

1. Р.Г. Кузеев. Этнографическая история башкирского народа. Уфа, 1978.

2. Материалы Миннаробраза БАССР.

Примечание. *Данная статья 3 января 1989 г. была предложена для публикации редакции газеты «Советская Башкирия», но 4 января автору было отказано в этом. Мотив: «слишком резок тон статьи».*

Эйе, мәҡәләмдә нисек кенә баҫалҡы булырға тырышһам да, шул уҡ Коммунистар партияһы етәкләгән һәм ҡыҫҡа ваҡыт эсендә республикала башҡорт теленең, башҡорт мәктәптәренең ҡороткосо рәүешендә танылып өлгөргән беренсе секретарь Р.Х. Хәбибуллин мөхитендә бындай мәҡәләләр менән матбуғатҡа юл ярыуы икеле ине, әлбиттә. Шуға күрә аяныслы хәлебеҙҙе тура Мәскәүгә — Кремлгә еткерергә тәүәккәлләндем. Әллә ҡасандан йыйналып килгән материалдарыма таянып, Генеральный секретарь М.С. Горбачевтың үҙенә атҡарырға «Думы о народе» тигән исем аҫтында машинкала 75 битлек текст әҙерләгәйнем (ошо китап аҙағындағы «Ҡушымталар» бүлегендә бирелә), шуны конвертлап, Өфөләге оҙон ҡулдар тотоп ҡалдырмаһын өсөн, адресатҡа тапшырылыуын үҙемә хәбәр итәсәк «уведомление» менән 23 февралдә ебәрә һалдым Мәскәүгә. Төп текст алдынан бирелгән аңлатмам ошондай:

Генеральному секретарю ЦК КПСС тов. Горбачеву М.С.

Дорогой Михаил Сергеевич!

Это Вам пишет башкирский писатель-коммунист, не скрывая правду, чтобы помочь партии выработать на предстоящем Пленуме ленинскую национальную политику в новых условиях.

Это о трагической судьбе башкирской нации.

Башкирский народ сегодня остался в меньшинстве на своей же собственной земле — разьве этому есть оправдания?!

Современная Башкирия с обостренными отношениями между башкирами, доведенными до грани исчезновения, и татарами, захватившими реальную власть и проводившими скрытую ассимиляторскую политику в республике, — это пороховая бочка, готовая взорваться в любое время, ибо долготерпению башкирской нации уже приходит конец.

С глубоким уважением **Султанов Зигат Адигамович**, член КПСС, член СП СССР. 1 февраля 1989 г. Уфа.

Адрес: 450055. Уфа — 55, Уфимское шоссе, 4, кв. 119, Султанову Зигату Адигамовичу.

Телефон (квартира): 31-45-97.

13.03.1989 йыл 16 сәғәт 50 минутта фатирымда телефон шылтыраны — Мәскәүҙән, КПСС-тың Үҙәк Комитетынан А.Ф. Солодовников иптәш. Хатты алғандар, аҙағындағы тәҡдимде Пленум ҡарамағына бирәләр. Ә тулы күсермәһен, минең менән һөйләшһен һәм саралар күрһен өсөн, КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты секретаре Ә.М. Дилмөхәмәтовҡа ҡайтаралар...

Төңөлөүемде әйтеп тораһы ла түгел...

М.С. Горбачев иғлан ҡылған бөйөк үҙгәртеп ҡороуҙар осоро бара һымаҡ, ләкин бөтәһе лә иҫкесә, тамсы ла үҙгәрмәгән: һөйөклө партиябыҙ, кемдән зарланып ялыу бирһәң, ялыуыңды шул кем-бәндәгә «мәсьәләне хәл ҡылырға» йүнәлтә бирә һаман... Нәфрәтемдең иге-сиге юҡ ине:

Зав. сектором ЦК КПСС по межнациональным отношениям
тов. Солодовникову А.Ф.

Уважаемый Аркадий Филиппович!

13 марта с.г. после Вашего телефонного звонка мне стало известно, что Вы мои «Думы о народе», адресованное тов. Горбачеву М.С., из-за нехватки времени полностью прочитать не смогли (ознакомились лишь с началом и концом) и по этой причине для принятия мер отослали в наш Башкирский обком КПСС, тем самым предав меня на верное растерзание. Ибо, если бы Вы смогли прочитать мое послание, легко убедились бы, что я критикую не что иное, как линию Башкирского обкома КПСС, приведшую к искривлению ленинской национальной политики, в результате чего в целях обеспечения великодержавнических интересов замаскированных пантатаристов грубо ущемлены насущные интересы башкирской нации; при том я нелицеприятно критикую нынешнего первого секретаря обкома КПСС тов. Хабибуллина Р.Х., продолжающего проводить указанную линию. Эсли бы все это можно было решить в нашем обкоме, не стал бы я обратиться прямо к тов. Горбачеву. Получается, что я критикую тов. Хабибуллина за грубые недостатки в его работе и с этим обращаюсь в суд высшей инстанции, а судьей там назначается сам критикуемый тов. Хабибуллин... Здесь на местах укрепляется впечатление, что ЦК почему-то упорно не желает вникать в башкирские дела, однако в то же время проявляет завидную чуткость устремлениям татарской стороны...

Еще Вы дали понять, что ЦК КПСС искренно хочет, чтобы башкиры и татары жили в дружбе и согласии, как и прежде. Законное желание. Но мне хорошо известно, — и это подтверждается историческими фактами, — что такой многожелаемой «дружбы и согласии» в подлинном смысле этих слов, к сожалению, у нас никогда не было даже в советское время (смотрите резолюции Пятнадцатой Башкирской конференции ВКП(б), Уфа, 17-25 января 1932 г.). А было лишь подобие дружбы, камуфляж, основанный на подавление национальных чаяний башкир. В настоящее время башкирская нация, доведенная процессом татаризации до крайней черты, отбросила камуфляж, открыто проявляя свои национальные интересы, поэтому и возник в республике татаро-башкирский конфликт. А Вы хотите, как понял я по телефонному разговору, реставрировать этот камуфляж, то есть показуху. Справедливые межнациональные отношения в республике начинались складываться и укрепляться только в тридцатых годах до 1937 года при подлинно ленинском первом секретаре обкома КПСС тов Быкине Я.Б., но после ждановской кровавой бани в Башкирской АССР в руководстве взяли верх замаскированные пантатаристы (замеченные еще В.И. Лениным) и их засилие продолжается до сих пор... Чтобы добиться настоящей дружбы, необходимо восстановить попранную справедливость. А почему и как она попрана, и как можно ее восстановить — объяснено на основе подлинных фактов истории в моей вышеназванной строго документированной работе.

На основе изложенных причин считаю необходимым с Вашей стороны срочно истребовать из Башобкома обратно на рассмотрение в ЦК КПСС выше названное мое послание тов. Горбачеву М.С. Уверен, приведенный там

фактический материал и мои личные наблюдения в какой-то мере помогут ЦК и его предстоящему Пленуму выработать более верный курс для улучшения межнациональных отношений в Башкирии и в других республиках.

Надеюсь получить Ваш ответ.

С глубоким уважением **З.А. Султанов**, член КПСС, писатель.

Адрес: 450055, Уфа — 55, Уфимское шоссе, 4, кв. 119. Султанов Зигат Адигамович. Телефон: 31-45-97 (квартира). 14 марта 1989 г.

Бөтәһе лә тоталитар партияның Сталин ҡуйған ҡануны буйынса бара: шул айҙа уҡ мине КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты Пропаганда бүлегенә саҡыртып, шуның инструкторы Уразаев тигән башҡортмо, манҡортмо милләтле бер иптәш, өҫтәл аша ҡаршыһына ултыртып ҡуйып, 99 тапҡыр тыңланған һәм билдәле булған һөрһөү ҡалыптан вәғәзен миңә үсәгәндәй уҡыны (ҡулында минең «Думы о народе» копияһы):

— Күрҙеңме инде үҙеңдең ҙур хатаңды? Бейек тауҙың башына таш бәрергә ярамай — ул таш барыбер, кире тәгәрләп, үҙеңдең башыңа төшә...

Ҡыҫҡаһы, партия этикеты буйынса тейешле «һөйләшеү» үткәреп, «һөйләшеү булды» тигән минең ҡултамғамды алып (Үҙәк Комитетҡа хисап биреү өсөндөр), бер ниндәй ҙә һөҙөмтәгә килмәй ҡайтарып ебәрҙе — шуның менән эш тә бөттө. Мин дә, әлбиттә, партиямдың ҡәҙимге эш алымының һис кенә лә үҙгәрмәүенә инанып, бының өсөн Үҙәк Комитетҡа нәфрәт белдереп хат яҙыуҙың һуҡыр тингә лә тормағанлығын аңланым. Урамға сығып ҡысҡыраһы ғына ҡалды...

Шеш тә тамам тулышҡас ҡына ярыла, вулкан да һыйыша алмайынса атыла. Ойоштороусыһы кемдәр булғандыр — иҫемдә һис ҡалмаған. Шуныһы ғына хәтерҙә: телефон аша бер-беребеҙгә өндәшеп, «мотлаҡ иртәгә иртән» тигән шартҡа килешеп, бер төркөм (утыҙлап инсан) башҡорт зыялылары 1989 йылдың 10 апрелендә Башҡорт академия драма театры алдындағы Ғафури һәйкәле янында *рөхсәт ителмәгән* митингыға йыйылдыҡ. Радиокомитеттан бер нисә кеше (мәҫәлән, журналист Ринат Камалов), Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтынан бер нисә ғалимә һәм Башҡорт дәүләт университетынан байтаҡ студент килгәйне. Яҙыусыларҙан бер үҙем генә инем, буғай. Һәм был һиммәтле төркөм — ғәзиз Башҡортостаныбыҙҙа сәйәси яҙ башланыуын хәбәр иткән беренсе ҡарлуғастар инек ғәмәлдә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының диалектология секторы мөдире филология фәндәре докторы, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары комитетының рәйесе профессор Нәжибә Хәйрелзаман ҡыҙы Мәксүтованың Башҡортостаныбыҙға үҙ аллылыҡ талап итеп, шуны яулап алырға саҡырып ялҡынлы телмәр һөйләгәне онотолмай. Мин иһә, бындайын да яуаплы заманда халыҡ алдында сығыш яһағанда уйланылмаған һәм осраҡлы бер генә һүҙ ҙә әйтелмәһен, юҡ-бар һөйләп бер генә секунд та сарыф ителмәһен, тигән ҡәҙимге ҡағиҙәмә ярашлы, алдан әҙерләп килтерелгән тексымды уҡыным. КПСС-тың Башҡортостан өлкә комитеты милли мәсьәлә буйынса үҙенең элек ҡабул ҡылған ҡарарҙарын ғына булһа ла еренә еткереп үтәһен, тигән талап һәм партияның оҙаҡламай буласаҡ пленумына сәйәси тәҡдимдәр бар ине телмәремдә. Оҙон ғына булһа ла (машинкала биш бит тирәһе), аяғөҫтө торған йәмәғәт шаҡтай

ҡыҙыҡһынып һәм сабырлыҡ менән аҙағынаса тыңланы, сөнки торғонлоҡ йылдарында барыһы ла тура һүҙгә сарсағайнылар:

10 апрель 1989 йыл митингыһында телмәр

Владимир Ильич Лениндың туранан-тура ҡатнашлығында Башҡорт АССР-ын төҙөү тураһындағы Килешеүгә ҡул ҡуйылған тарихи көндөң 70 йыллыҡ юбилейын билдәләгән ошо айҙарҙа милләтебеҙ яҙмышына, культураһына ҡағылышлы күп нәмәләр тураһында етди уйланырға, берсә, һөйөнөп, берсә, көйөнөп, бөгөнгөбөҙ менән бергә киләсәгебеҙҙе ҡайғыртырға тура килә. Таң һарыһында күҙебеҙҙе тырнап асыу менән бала-сағаларыбыҙҙың өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, тубырсыҡтарҙай тупырлап үҫеп килеүенә ҡыуанһаҡ, ауыҙ асып өндәшеү менән үк уларҙың телһеҙлегенә — әсә теленән мәхрүм ҡалыуҙарына әрней йөрәк. Башҡортостан тупрағында башҡортса һөйләштергән ясле, балалар баҡсаһы, мәктәптәрҙең аҙайыуы йәки онотҡанда бер осрауына ғәжәпләнмәй ҙә башланыҡ шикелле. Кескәйҙәр һәм үҫмерҙәр өсөн үҙ телебеҙҙә гәзит-журналдар сыҡмауына, балалар әҙәбиәтенең махсус нәшриәте, йәш тамашасы өсөн милли театрыбыҙ булмауына ла күнегеп барабыҙ кеүек. Шулай уҡ райондарыбыҙҙа урыҫ һәм татар телдәрендә әллә нисәләгән тиҫтә гәзит нешер ителгән ваҡыттарҙа башҡорт телендә ни бары ике генә район гәзите баҫылып, ҡалғандары башҡа телдән тәржемә ителеүенә (дубляж), ә башҡорттар 43%, татарҙар — 31, урыҫтар 11% тәшкил иткән 21 көнбайыш райондарыбыҙҙа татар телендә — 21 район гәзите, урыҫ телендә 18 район гәзите уҡыусыларын туплағанда башҡорт телендә бер генә гәзит (ул да булһа дубляж!) быҫҡып янған һуҡыр шәмдәй яңғыҙ үҙе йәшәүенә лә иғтибар итмәйбеҙ кеүек. Ә мәктәп мәсьәләһе? 1925 йылдан алып 1968 йылға тиклем республикабыҙҙа урыҫ мәктәбе һаны 788-ҙән 1914-кәсә, татар мәктәбе 582-нән 1117-гәсә артһа, башҡорт мәктәбе һаны 572-нән 785-кә тиклем генә ыраны. Күренеүенсә, татар мәктәптәре һаны был осорҙа башҡорт мәктәптәре менән сағыштырғанда өс тапҡырҙай артты. Ленинсы милли политиканы тупаҫ боҙоуға юл ҡуйған торғонлоҡ йылдарында Башҡорт АССР Мәғариф министерствоһы әсә телендә уҡытыуҙы ҡырҡа сикләп, элек милли телдә уҡытҡан мәктәптәрҙә балаларҙы урыҫ телендә уҡытыуға күсереү эшен ҡыҙыулатты, был зыянлы эшмәкәрлек беренсе сиратта башҡорт мәктәбенә, башҡорт теленә һуҡты. Миҫал өсөн 1973-74 уҡыу йылын ғына алайыҡ: ул йылда республикабыҙ буйынса 650 милли мәктәп урыҫ телендә уҡытыуға күсерелһә, шуларҙың 112-һе генә татар, ә 420-һе башҡорт мәктәбе ине. Өҫтәүенә, тиҫтә йыл буйы көнбайыш башҡорт ауылдарында гөрләп эшләп килгән 200 башҡорт мәктәбе бер юлы татар телендә уҡытыуға күсерелеп, милләтебеҙҙең көнбайыш диалектында һөйләшеүсе өстән бер өлөшө үҙенең милли телендә уҡып белем алыуҙан, ул ғына ла түгел, үҙ милли телен дәрес итеп кенә булһа ла өйрәнеүҙән мәхрүм ҡалды... Оҙаҡ йылдар һуҙылып килгән ошондай кире күренештәр арҡаһында халҡыбыҙҙың һуңғы өс быуын кешеләренең байтағы башҡа телдә уҡып һәм һөйләшеп үҫте, милли телен танымаған, милли культураһын һанға һуҡмаған, шул нигеҙҙә башҡа милләттәрҙе һәм милли культураларҙы ла ихтирам итмәҫтәй нигилистар, сепрәк-сапраҡ һөйәрйәндәр, ҡорһаҡ ҡолдары булып етеште. Ундайҙарға һәммәбеҙ өсөн изге

һаналған интернационализм төшөнсәһе лә дәүләт кеçәһен ҡармағанда, үҙ шәхси мәнфәғәттәрен даулағанда битлек итеп ҡулланыу өсөн генә кәрәк. Ҡыçҡа ғына әйткәндә, ысын интернационализмдың төп нигеҙен тәшкил иткән ысын миллилекте аяҡ аçтына һалып тапаныҡ, шуны, аяҡ аçтынан алып, кешеләрҙең үҙҙәренә ҡайтарырға ваҡыт етте — миллилеккә дефицит ҡырҡыулашты. Ошо яуаплы осорҙа ике күҙебеҙҙең береһе өмөт менән республика етәкселегенә төбәлһә, икенсеһе культура әһелдәребеҙгә уҡтала — үҙ иңенә артҡан әхләҡи-политик йөктө намыçлы егелеп тартамы һуң аҡ һарайҙа ултырған политиктарыбыҙ, милли әҙәбиәтебеҙ, сәнғәтебеҙ, фәнебеҙ маһирҙары?.. Мәрмәр көплө аҡ һәм ҡыҙыл һарайҙарҙа әле булһа милләттән айырылғанлыҡ, томора торғонлоҡ хөкөм һөрә түгелме? Әгәр шулай булмаһа, ниңә һаман башҡорт теле көнбайыш башҡорт ауылдарынан ҡыуылған хәлдә ҡала? Ниңә һаман ғәҙел принцип: урыç ауылдарына — урыç мәктәбе, татар ауылдарына — татар мәктәбе, башҡорт ауылдарына — башҡорт мәктәбе тигән принцип тантана итмәй?!. Һуңғы етмеш йыл эсендә ана шулай башҡорт телен башҡорт мәктәптәренә индермәү арҡаһында Киров өлкәһендә тороп ҡалған 54 мең башҡорттоң, Татар АССР-ында тороп ҡалған 193 мең минзәлә башҡорттарының башҡа милләткә күсерелеп юҡҡа сығарылыуын, бөгөн иһә республикабыҙҙың үҙ эсендәге 300 мең көнбайыш башҡорттарҙың шундай уҡ хәлгә ҡуйылыуҙарын хөрмәтле етәкселәребеҙ ниңә белергә теләмәй? Ҡасан улар көнбайыш башҡорттары телен, башҡорт милли теленең өсөнсө диалектын, татар теле итеп эш ҡылыуҙан, фәнгә һәм хаҡиҡәткә ҡаршы ҡоролған, башҡорт милләтен эстән тороп емерткән һәм бөлдөрткән зәғиф милли политика алып барыуҙан туҡтар ҙа башҡорт милләтенә йөҙ менән боролор?!. Ғәҙел политика төҙөргә ҡыйыулыҡтары етмәһә, ВКП(б)-ның 1932 йылғы XV Башҡортостан конференцияһы ҡарарын ғына булһа ла (әлегәсә ул әүҙемәл!) тормошҡа ашырыуҙы тәҡдим итәм. Бына ул:

«...Конференция считает препятствием в области осуществления решений партии по национальному вопросу: совершенно недостаточные темпы коренизации госаппарата и реализации башкирского языка... и все еще недостаточную прослойку башкир в некоторых учебных заведениях и школах повышенного типа, совершенно недостаточный рост башкир в составе рабочих на отдельных крупных предприятиях, ...все еще медленный рост башкирских преподавательских кадров... Отдельные низовые парторганизации не проявили достаточно решительной борьбы с извращениями национальной политики, с проявлением великорусского шовинизма, ...с татарской великодержавнической тенденцией...

В области подбора и подготовки кадров конференция выдвигает перед обкомом и всей парторганизацией основные задачи:

Борьба с извращениями ленинской национальной политики в школе, с великорусским шовинизмом, как главной опасностью, татарской великодержавнической тенденцией по отношению к башкирам...

Решительное усиление темпа коренизации соваппарата, введение практики составления контрольных цифр коренизации по отдельным учреждениям, усиление выпуска учебников на башкирском языке, ...усиление подготовки квалифицированных преподавателей, главным образом из среды коренной национальности — башкир.

***Культурное строительство**. Конференция констатирует медленность темпа развертывания печати, особенно книгоиздания на башкирском языке и его низкое качество, узость полиграфической базы и поручает обкому развернуть книгопечатание в соответствии с задачами коренизации низших, средних и высших учебных заведений...*

Конец цитаты.

Предлагаю от имени собравшихся на митинге принимать такую резолюцию:

1. Просим бюро Башкирского обкома КПСС осуществить по национальному вопросу резолюцию XV партконференции.

2. Обратиться предстоящему Пленуму ЦК КПСС по национальному вопросу следующими предложениями:

а) в национальных республиках (автономных, союзных), а также областях, округах и других образованиях гарантировать законом в партийных, советских и правительственных руководящих органах не менее 50-и процентное представительство этноса, давшего название данной национальной республике, области, округу и другим образованиям. Остальные 50 процентов мест пропорционально разделять между представителями остальных национальностей, населяющих данную территорию;

б) язык этноса, давшего название данной национальной республике, области, округу и другим образованиям, должен быть взят под охрану государства. Для достижения этого установить законом языку этноса, давшего название данной национальной республике, области, округу и другим образованиям, статус государственного языка (наряду с русским) с обязательным преподаванием его в школах данной национальной республике;

в) Центральному Комитету КПСС и Верховному Совету СССР принять необходимые долговременные меры, чтобы навсегда исключить из нашей жизни и искоренить пантатаризм и другие подобные «измы», то есть насилие одной нации над другой;

г) обеспечить подлинное равноправие всех народов Советского Союза, наделив автономные республики всеми правами и обязанностями союзных республик. То есть гарантировать законом автономным республикам статус союзной республики...

Рөхсәт ителмәгән митинг был, тип әйткәйнем. Башҡорт АССР-ы Эске эштәр министры полковник Әнәс Хәсәнов иптәш бер взвод милиционерҙары менән беҙҙе килеп баҫҡанда, ниһәйәт, әйтәһеләребеҙҙе әйтеп бөтөргәйнек инде. Полковник Хәсәновтың яңғыраҡлы рупор аша ҡалын көр тауышы рөхсәтһеҙ митинг яһауҙың ҡанунға һыйышһыҙ икәнлеген киҫәтеп, беҙҙе тиҙерәк таралышырға саҡырҙы.

— Һеҙ бит Меңле башҡорто — ниңә татарса сусылдайһығыҙ?! — тип ҡысҡырҙы аранан берәү. Хәсәнов шунда уҡ саф башҡортсаға күскәс, саҡ ҡына тыңлап торҙоҡ та, яй ғына таралыштыҡ. Беҙ белгән осорҙа республикалағы беренсе сәйәси оппозицион митинг һәм, инсафлы ғына булһа ла, беренсе тапҡыр уны ҡыуып таратыу осрағы ине был.

1989 йылдың 17 — 18 декабрендә Өфөлә хәҙерге Ҡоролтай йортоноң (Фрунзе урамы, 40) ҙур залында башҡорт халҡы вәкилдәренең 1-енсе йыйыны үтте (1917 йылдағы тәүге ҡоролтайҙарҙың дауамы итеп, артабан уны IV башҡорт ҡоролтайы тип һананыҡ). Республиканың ҡалаларынан, райондарынан, башҡорттар күп йәшәгән күрше өлкәләрҙән 989 делегат килгәйне, араларында (Өфөнөң Киров районынан делегат) мин дә бар инем. Йыйындың төп ҡарары — «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәген ойоштороу булды. Ҡоролтай шулай уҡ «Урал» башҡорт халыҡ үҙәгенең программаһын һәм уставын раҫланы. Ҡабул ҡылынған резолюцияла республикабыҙға суверенитет яулау, Башҡортостанға — союздаш республика, башҡорт теленә дәүләт теле статусын алыу, башҡорт халҡын сәйәси, социаль һәм рухи яҡтан үҫтереү хәрәкәтебеҙҙең төп бурыстары итеп ҡуйылды. Ошоларҙы алға һөрөп ҡыҙыу фекер алышыуҙарҙа үҙ өлөшөмдө индерҙем:

Телебеҙ һәм көнөбөҙ

(Башҡорт халыҡ үҙәге «Урал» йыйынында телмәр. 18.12.1989)

Башҡортостанда башҡорт теленең дәүләт статусын ҡабул итеү тураһында һүҙ барғанда Автономиялы (?!.) Башҡорт Совет Республикаһы етәкселәре, йәғни партия һәм совет аппаратсылары, «быны халыҡ теләрме икән һуң?..» ти ҙә, күҙен тултырып ике тарафҡа ҡарай: йәнәһе, ғәзиздәрҙән ғәзиз татар ҡәрҙәштәребеҙ ни әйтер? Урыҫ өлкән ағайҙарыбыҙ ни әйтер?..

Аппаратсыларыбыҙ фәҡәт тура ҡарарға, ошо ерҙең, республиканың төп халҡының күҙенә тура ҡарарға, ғына «онота»...

Белергә теләмәһәгеҙ ҙә белегеҙ, хөрмәтле чиновник-етәкселәр: был мәсьәлә башҡорт халҡының мәңгелек бөйөк референдумында — быуаттар референдумында әллә ҡасан уҡ тайпылышһыҙ һәм кире ҡаҡҡыһыҙ рәүештә хәл ителгән. Таш быуатта уҡ бабаларыбыҙ Урал батырыбыҙ толпары Аҡбуҙаттың Таш Өйө (Шүлгәнташ) мәмерйәһе ҡаяларына үҙенең ҡан төҫлө ҡыҙыл бояуы менән шул Аҡбуҙатты изгеләштереп һүрәтләгәндән алып — ошо көндәге рәссамыбыҙ Әхмәт Лотфуллиндың «Ауылда беренсе Май байрамы» исемле сағыу ҡыҙыл байраҡлы картинаһынаса булған тиҫтәләрсә мең йылдар буйынса барған ул бөйөк референдум. Туҙға яҙған һәм ташҡа яҙған, ҡайһы берҙәре бөгөн дә Урал ҡаяларында ҡыҫҡырып-шаңғырып торған, китаптарыбыҙ аша, үлемһеҙ эпостарыбыҙ, йыр-моңдарыбыҙ, йолаларыбыҙ, биҙәү сәнғәттәребеҙ аша уҙған ул бөйөк референдум. Түгелгән ҡандарыбыҙ, өҙөлгән баштарыбыҙ, емертелгән, яндырылған иҫәпһеҙ күп ауыл һәм ҡалаларыбыҙҙың харабалары аҫтында ла күмелеп ҡалмай үтәлгән ул бөйөк референдум. 1919 йылдың 22 мартында суверенлы Башҡорт Совет Республикаһының, суверенлы башҡорт теленең мәңгелек йәшәү хоҡуғы булып ҡыҙыл нәшриәттең үҙендә ташҡа баҫылып сыҡҡан ул быуаттарҙың бөйөк референдумы һөҙөмтәһе. Һәм иманыбыҙ камил: бер ниндәй ҙә яһил аппаратсының, йәки аппаратсыларҙың хитлығы ла сикләй алмаҫ ерле халыҡтың үҙ ерендә үҙ теленең үҙ аллылығына изге хоҡуғын! Башҡортостанда башҡорт халҡының бөгөнгө көн аҙсылыҡ тәшкил итеп, беҙгә өйҙәш булып килеп ингән башҡа халыҡтарҙың һан яғынан күпселек алып китеүен башҡорт халҡына ҡаршы мәкерле рәүештә файҙаланырға тырышыусы

политикан-демагогтар ҙа яҡшы белһен: башҡорт халҡының ихтыярынан тыш башҡорт ерендә «яңы тәртип» урынлаштырыу бер ҡасан да, бер кемдең дә ҡулынан килмәйәсәк! Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының ҡарары бар был хаҡта — аҙсылыҡлы ерле милләттең күпселектәр ҡыҫымындағы изге хоҡуғын ҡурсалау-яҡлау хаҡында.

Эйе, беҙҙең борондан килгән, мәрхәмәтле бабаларыбыҙ ишекте киң асып индергән халайыҡтар -- ҡәҙерле өйҙәштәребеҙ бар был илдә. Татарҙарға, удмурттарға, марийҙарға, сыуаштарға һәм хатта урыҫтарға ла яуыз батша-батюшка тарафынан золом көнө, ғәрәсәт көнө ҡупҡан һайын, һыйыныр ек эҙләп улар һеперелеп бында килгәне һайын, асылған ул миһырбанлыҡ ҡапҡаһы. Яуыз батша һәм уның сатраптарының тыйыуҙарына, башҡортҡа ҡаршы ысын геноцид үткәреүҙәренә лә ҡарамай.

Бына шундай бер документ:

1730 йыл. — *«Записка о башкирском вопросе в Российской империи и о наилучших способах его разрешения, составленная казанским губернатором А.П. Волынским.*

Уповаю я, что несовершенно известно о состоянии башкирского народа... народ их такою жестокою злобой исполнен, а время от времени непрестанно умножается и растет... А ныне ужа русские немалое число от подушных податей беглецов в Башкиры перешло...

И хотя ныне видим, что башкирский народ является кроток, однако же не возможно сказать, что оной был в совершенном и послушании, понеже беглых принимает, несмотря ни на какие указы»...

Күренеүенсә, батша указдары тыйыуына ла ҡарамай, урыҫ һәм башҡа милләт ҡаҫҡындарын күпләп-күпләп үҙ иленә индергән, һыйындырған башҡорт уҙамандары; хәҙергесә әйткәндә, урыҫ самодержавиеһы ҡорбандарына «политическое убежище» биргән, йылыға йылан эйәләй, тиһәләр ҙә, үҙенең йылы ҡуйынына алған. Башҡорттоң ошоғаса һаҡланған аҫыл милли һыҙаттарының береһе — ысын гөманлылығы түгелме ни был?!

Һәм шул үҙенең йылы ҡуйынына алған, өйҙәш иткән, табындаш иткән ҡайһы бер милләт кешеләренең бәғзе бер Айҙар Хәлим, Сергей Матюшин кеүек бөгөнгө игелекһеҙ вә белекһеҙ тоҡомдары башҡорт халҡының шул гөманлылығына ҡарата ҡайһылай итеп белдерә һуң рәхмәтен?!. Уларҙың «рәхмәт»енең ниндәй икәнлеге барығыҙға ла мәғлүм — изгелекһеҙҙән игелек көтөү икеле.

Кисә бында, уйынлы-көлкөлө генә, хөрмәтле мөфти хәҙрәттәренең кемдәргәлер (әммә башҡортҡа түгел!) йомарт һәм мул иғәнәһе тураһында ла һүҙ ҡуҙғалып ҡуйғайны. Абруйлы тарих китабынан шуға бәйле тағы ла бер сәхифәне бәйән ҡылыуҙы кәрәкле һанайым. 1755 йылғы ҡөҙрәтле башҡорт восстаниеһы тураһында бара һүҙ:

«Особую активность проявили башкиры Гайнинской волости Осинской дороги. Они организовали повстанческий отряд во главе с Чурагулом Минлибаевым... События... серьезно встревожили оренбургского наместника И.И. Неплюева... Власти обратились с грамотой казанским татарам. Правительство, кроме того, пошло им на ряд уступок.

Было облегчено положение служилых мурз и татар, приписанных к корабельным лесам. Слишком рьяно проводившие политику христианизации Казанский и Тобольский архиереи были переведены в другие районы. Указом от 23 августа 1756 года мусульманам было разрешено строительство мечетей. Было также несколько облегчено положение податного населения Казанской губернии».

Бына шулай — башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн фиҙа ҡылған йәне, түккән ҡаны арҡаһында беҙгә ҡәрҙәш татар халҡы һәләк иткес тоталь каторга режимынан, көсләп суҡындырылыуҙан, тимәк, телен һәм динен юғалтып тулыһынса урыҫлаштырылыуҙан — йәғни этно-геноцидтан ҡотолоп ҡалған. Өҫтәүенә, элекке ҡәтғи тыйылыуҙан арынып, ауыл һәм ҡалаларҙа мәсеттәр, мәҙрәсәләр һалырға, ташҡа баҫмаханалар асып, китаптар баҫтырып сығарырға хоҡуҡ алған. Ҡайһы бер татар авторҙары башҡа ҡәрҙәш халыҡтарҙың мәҙәниәтен түбәнһетеү, кәмһетеү ниәтенән яһилланып, революцияға тиклем үк татарҙың күпме мәсете, мәҙрәсәһе, матбағаһы булғанлығын һанап маһая икән, уларҙың был ысындан да ҙур ҡаҙанышын ҡайһы халыҡ үҙенең ҡайнар ҡанын түгеп тәьмин иткәнлеген онотмаһын ине. Әммә уларҙан рәхмәт һүҙе ишетеү өмөтө юҡ...

Башҡорттоң ҡанлы ҡорбандары арҡаһында ғына был ерҙә төйәкләнеү, идара ҡылыу хоҡуғы алған, һәм әлегәсә бында — Өфөлә суҡайып ултырған, ләкин йөҙө Ҡазанға боролған мөфтиҙән дә игелек көтөүе ҡыйын: ул үҙенең бай иғәнәһен, кисә бындағы телмәрселәрҙең береһе әйткәне хаҡ булһа, туранан-тура Ҡазанға юлландырыуына ла аптырамайыҡ.

Ошо көндәрҙә мин Алматыла ҡаҙаҡ халҡының бөйөк улы Жосопбәк Аймауытовтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы булып ҡайттым. Бик күп союздаш республикаларҙан, сит илдәрҙән йыйылғайны ҡунаҡтар. Татарстан күршеләребеҙҙән дә бар ине яҙыусылар вәкиле, баяғы яманатлы Ғаяз Исхаҡиҙың ялалы мәктүбен ташҡа баҫып сығарып, башҡорт халҡының йөҙөн йыртып мәсхәрәләгән «Ҡазан утлары» журналының бүлек мөдире Тәүфиҡ Әйди тигән мөртәт. Шул яһилдың кулуарҙарҙа төрлө республика вәкилдәренә Башҡортостан, башҡорт халҡына ҡарата белдергән ҡәбәхәт «ихтирам»ын ишетеп, Өфөләге былтырғы тантаналарҙа башҡорт халыҡ шағиры Мостай Кәримдең, беренсе секретарыбыҙ Хәбибуллин иптәштең «татар игеҙәк туғандарыбыҙ» хаҡында күпертеп туҡыған ҡыуаныслы вәғәҙҙәрен ытырғанып хәтерләнем.

Баҡтиһәң, «иҫәүән» башҡорт халҡының яҙмышы бында Өфөлә түгел, ә Ҡазанда, кәм тигәндә ниндәйҙер шул Тәүфиҡ Әйдиҙәр тарафынан әйҙәлеп хәл ҡылына икән дә.

Беренсенән, татар халҡының йән иҫәбен улар бөгөндән үк теүәл ун миллионға еткергән (бығаса алты миллиондан ашыу тип белә инек). Ә «игеҙәк туған»дары башҡортто улар биш йөҙ меңгә ҡалдырған да һөҙөмтәлә теүәл бер миллион башҡортто татар итеп иғлан ҡылған һәм үҙҙәренә «ҡушҡан».

Икенсенән, Татарстан АССР-ы сиктәрен улар көнсығышҡа ҡарай Уралғаса киңәйтеп, башҡорттарға Урал артындағы административ өс районда ғына ил ҡороп йәшәргә рөхсәт ҡылғандар. «Бына шунда үҙегеҙҙең боҙоҡ телегеҙҙә һөйләшегеҙ, беҙ быға ҡаршы түгел», тип, күңел иреткес татар миһырбанлылығын да белдерҙе миңә Тәүфиҡ. «Беҙ — ун миллионлы халыҡ, бергә тупланыр өсөн

беҙгә йәшәү киңлеге кәрәк!» тип нигеҙләп тә ҡуйҙы дәғүәһен... Мин ҡан ҡәрҙәш татар халҡын, уның яҙыусыларын хөрмәт итәм, ә шулай ҙа ҡыйын булһа ла әйтәйем: шанлы 1945 йылда үҙ өңө Берлинда муйыны һындырылған биреле бер ефрейторҙың «йәшәү киңлеге» хаҡындағы билдәле доктринаһын, «драң нах остен» (көнсығышҡа поход) пландарын хәтерләтте был яман ашҡынмыштың дәғүәһе...

Ана шул дәғүәле фронтҡа ҡаршы фронт ҡора алдымы һуң беҙҙең республиканың етәкселек штабы?

Эйе, фронт бар, әммә уның кемгә ҡаршы тороуын аңлау ауыр. Сөнки:

ошоғаса егерме бер көнбайыш райондарыбыҙҙа, башҡорттар күпселек тәшкил итеүгә ҡарамай, ун һигеҙ урыҫ гәзите, егерме бер татар гәзите һәм... бер генә башҡортса (ул да булһа дубляж!) гәзит сығарыла;

фәнни яҡтан әллә ҡасан уҡ дәлилләнеп, тарихи факт булыуға ҡарамаҫтан, башҡорт теленең бер йән, бер тән тәшкил итмеш өсөнсө диалектын — көнбайыш диалектты — милли башҡорт теле тәненән яһил рәүештә ҡырҡып алыпп, уны татар теле итеп иҫәпләүҙәрен, көнбайыш диалект башҡорттарын татар телендә һөйләшә тип раҫлауҙарын һәм шул нигеҙҙә һаман яһил политика үткәреүҙәрен дауам ҡыла ошо үҙебеҙҙең етәксе-аппаратсылар;

фән ҡаҙаныштарын ана шулай танымай, инҡар итеп, беренсе секретарь булып эшләй башлаған йылында уҡ ике йөҙ, ә шунан һуң тағы ла бер нисә йөҙ башҡорт мәктәбен яптырҙы ла татар мәктәптәре итеп астырҙы ошо үҙебеҙҙең үк тәүфиҡлебеҙ Хәбибуллин иптәш;

башҡорт халҡы күпләп Урал артына — Силәбе, Свердловск өлкәләренә ҡасып сығып бөтһөн, Башҡортостан башҡорттарҙан арынһын өсөн бөтә мөмкин булған экономик шарттарҙы ла тыуҙырҙы, тормошҡа ашырҙы етәксе аппарат.

Шулай булғас, биреләнмеш Тәүфиҡ Әйдиҙәр ҡайҙан — бында сығыш яһаусы хөрмәтле делегат Мир Мөхәмәтйәнов ағай әйткән баяғы Ыҡ йылғаһы аръяғынанмы, әллә бирьяғынанмы тороп эш ҡылғанлығын айырыу ифрат ҡыйын...

Бына ниңә кисәге бер оратор, күңелендә партияға ышаныу кризисын кисереп, «Башҡорт компартияһы» төҙөү тураһында һүҙ ҡуҙғалта. Ләкин Хәбибуллин иптәш һәм ул етәкләгән аппарат бөтә КПСС түгеллеген, һәм булмаясағын да белһен ине ул иптәш. Башҡортостанда ленинсы Быкиндар, Иҫәнсуриндар, Афзал Таһировтар компартияһы ла булған. Быны бөгөнгө яҙыусы-коммунистар һәр ваҡытта ла аппараттың күҙенә ҡарап әйтте һәм әйтә, ысын үҙгәртеп ҡороу, билдәлелек, ғәҙеллек, хаҡлыҡ өсөн көрәшен дауам итә. Етмәһә, бына ошо йыйын түрендә ултырған иптәштәрҙең, ғәмәлдә яңы тыуып килгән Башҡорт халыҡ үҙәге «Урал» етәкселәренең дә, байтағы коммунист икәнлеген онотмағыҙ. Коммунистар партияһының ысын милли политика платформаһы беҙгә һөйөклө Башҡортостаныбыҙ, халҡыбыҙ, башҡорт теленең һәм мәҙәниәтенең артабан ҡаҡшамай йәшәүе, сәскә атыуы хаҡына ең һыҙғанып эшләү хоҡуғы бирә. Быны мин һеҙгә үҙем дә коммунист яҙыусы, КПСС ағзаһы булараҡ әйтәм.

Йәнә шуны ла өҫтәйем. Кисәге бер хөрмәтле ораторыбыҙ, артыҡ хисләнеп китеп, буғай, үҙе лә теләмәйенсәлер, туҙға яҙмағанырaҡ һүҙҙәр ҙә ысҡындырғаланы.

Ун һигеҙенсе быуаттағы геноцид тураһында. Уны уҙғарған яуыз урыҫ батшаһы ла, татар мырҙаһы ла юҡ инде хәҙер. Урыҫ халҡы һәм татар халҡы ул палачтар өсөн яуаплы түгел. Ул халыҡтар беҙҙең ут күршеләребеҙ, туғандарыбыҙ.

Америка аборигендарына теләктәшлек белдереүебеҙҙе бер оратор тәҡдим иткән рәүешле яҙып ебәрһәк, бөтә донъя бот сабып көләсәк беҙҙән. Сөнки АҠШ резервацияларындағы индейҙарҙың тормош-көнкүреш хәле беҙҙекенән кәм тигәндә биш тапҡырға яҡшыраҡ. Быйыл Өфөгә килгәнендә СССР халыҡ депутаты, Америкала булып ҡайтҡан Давид Кугультинов үҙе һоҡланып әйтеп китте бит быны.

Инде йыйын ҡарарына керетергә бер тәҡдим: «Халҡыбыҙҙың ҡоролтайының йәғни ҡоролоуының артабанғы туплаһышын һәм нығыныштын өҙлөкһөҙ дауам иттереү өсөн, үҙәгебеҙҙең үҙ матбағаһын — журналын булдырырға. Ул журналды «Ҡоролтай» тип атарға[55]»...

Ҡоролтайыбыҙҙың изге ҡарарҙарын мин, уның Комитет ағзаһы булараҡ, бойомға ашырыу өсөн, күберәген ҡәләмем менән эш итергә кәрәклеген яҡшы аңлағанлыҡтан, яңы йылды ҡаршылағас уҡ, Мәскәүгә тағы хат яҙа һалып ебәрҙем:

Секретарю ЦК КПСС тов. Манаенкову.

1. До сих пор, не смотря на 5 лет перестройки, в СССР неизменно продолжает существовать сталинское разделение наций на три категории:

нации I категории — это союзные республики;

нации II категории — это автономные республики;

нации III категории — это автономные области и округи.

Такая унизительная для любой нации несправедливость нашла себе оправдание даже в Платформе КПСС по национальному вопросу якобы тем, что «различия в форме самоопределения нации отразили ту жизненную реальность, что в период становления Союза народы находились на разных уровнях социально-экономического развития, существенно различались по численности, не все прошли этапы национальной консолидации, имели в прошлом или были готовы создать собственную государственность».

Но, как известно, выше названную «собственную государственность» (Автономный Башкортостан) башкиры имели уже 15 ноября 1917 года, то есть еще до Великой Октябрьской революции и также прежде чем образования самой Советской России. Впоследствии (22 марта 1919 г.) Автономный Башкортостан как государство с его правительством был признан центральной советской властью во главе с Лениным и по обоюдному Соглашению *как федеративная республика* вошла в состав РСФСР. При том государственный статус Автономной Башкирской Советской Республики в сравнении с современными союзными республиками был

[55] Был тәҡдим бер нисә йылдан һуң бойомға ашырылды — «Ватандаш» исемле журнал сыға башланы.

несравнимо выше, ибо она имела национальную армию. Однако уже в 1920 году правительство РСФСР в одностороннем порядке грубо нарушило Соглашение, отняв суверенитет республики. Таким образом, «статус автономной республики, полученный Башкирией по Соглашению 22 марта 1919 года, при Сталине, Хрущеве и Брежневе превратился лишь в ничего не дающую декларацию, еще точнее — в простую бумажку» (газета «Вечерняя Уфа» от 14 сентября 1989 г.).

В Платформе КПСС по национальному вопросу выше указанный исторический факт полностью проигнорирован — поэтому мы продолжаем числиться нацией II категории.

2. Начиная с кровавого 1937 года и вплоть до наших дней в республике сделано все для того, чтобы Башкирию оставить без башкир — ее коренных жителей. Этот вопиющий факт со всеми его цифровыми данными широко опубликован в печати и известен народу (также ЦК КПСС).

Поэтому извингите меня за резкость и разрешите спросить: что делает ЦК, Политбюро и Советское правительство для того, чтобы спасать башкирскую нацию от полного исчезновения между тисками двух братских народов — русских и татар?

Кстати, Пятнадцатая Башкирская конференция ВКП(б) в своих резолюциях уже в далеком 1932 году поставил верный диагноз этой межнациональной смертельной болезни («великорусский шовинизм и великодержавническая тенденция татар по отношению к башкирам») и определил метод ее лечения («усиление темпов коренизации совгосаппарата и реализация башязыка»). Что думает по этому поводу уважаемый Секретарь: может быть, наконец-то, пора приступить к исполнению этих резолюций?..

Зигат Султанов, писатель-коммунист. 13 января 1990 г.

Әммә башҡорт халҡының борон-борондан уҡ уға теш ҡайрап килгән яһил дошмандары — татар ҡарагруһтары, расист-шовинистары ла, яҙғы йылыла терелгән яман ҡара себендәрҙәй мыжғышып, башҡорт үҙ аллылығына һәм Башҡортостан республикаһының суверенлығына ҡаршы ең һыҙғанып көрәшеүсе, башҡорт-татар дуҫлығына таяҡ тығып болғатыусы Татар ижтимағи үҙәге (ТИУ) тигән һары һағыҙаҡ ояһы төҙөнөләр. Һәм шул үҙәк өрәктәре үҙҙәренең ағыуҙарын бөркөп йөрөнөләр бөтә тарафҡа. Шундайҙарҙың береһе тураһында «Йәшлек» гәзитендә шағирә Таңһылыу Ҡарамышеваның мәҡәләһе сыҡҡас, шуның шаңдауы рәүешендә, шул уҡ гәзиттә үҙ фекеремде белдерҙем:

Балыҡ тота алмаҫтар

Шылтырап аҡҡан саф сығанаҡ-шишмә башын расист Ғаяз Исхаҡиҙан ҡалған серек таяҡ һынығын тығып болғатыусы бәғзеләр, әлбиттә, болғансыҡ һыуҙан балыҡ тоторға яҫҡына, ә ул «балыҡ», билдәле, — туғандаш татар һәм башҡорт ябай кешеләре. Республикабыҙҙың күп милләтле дүрт миллион егәрле һәм түҙмер халҡының хәләл көс-ҡеүәтен, иғтибарын бергә туплап бөгөнгө көндә һәммәбеҙгә икмәк һәм һыу, һауа кеүек иң кәрәкле союздаш республика статусын ҡаҙаныу, елек майыбыҙҙы һурғыс үҙәк идаралыҡ аппараты,

министерстволарының колониаль талауҙарынан арыныу сараларына йүнәлтәһе урынға, яр аҫтынан — яу, тигәндәй, тарих саңына күмелгән татар-башҡорт мәсьәләһен һөйрәп сығарып, туғандаш ике халыҡты үҙ-ара ыҙғыштырырға ла үҙҙәре «һәп!» итеп бер юлы икеһенең дә муйынына атланырға самаланып ашҡына ул бәндәләр. Ҡазандың үҙендә хәл ителергә тейешле татар теленең дәүләт статусы мәсьәләһен Өфөлә хәл ҡылырға көсәнеп (урыҫ теле менән бер ҡатарҙан татар милләт-ара тел статусын Мәскәүҙән дәғүәләү урынына!), йәки Башҡорт республикаһында икенсе Татар республикаһы иғлан ҡылырға ҡырҡышып, быуынһыҙ урынға бысаҡ салыу — ике халыҡтың итәге аҫтына ут төртөп үрләргә маташыу түгелме был?!. Донъялағы иң ауыр гөнаһтарҙың да иң ауырылыр ул халыҡ менән халыҡты дошманлаштырыу — үҙҙәрен күркәм татар халҡының интеллигенцияһы иҫәпләгән бәғзеләрҙең былдай ҡылығын һыйҙыра алмайым башыма. Әммә иманым камил: ундайҙар һәм татар халҡы бер иш түгел, икеһенең араһына һыймай тигеҙлек билдәһе!

Ошо керһеҙ хаҡиҡәткә бынан дүрт ярым быуат әлгәре үк инанған беҙҙең бабалар, шуға күрә йөрәген дә, ил-йортоноң ҡапҡаларын да асып ҡуйған улар золомдан интегеп килеүсе теләгән бер милләткә — татарына ла, сыуашына ла, урыҫына һәм башҡаларына ла бер юлы. Уларға йөрәк йылыһын ғына түгел, ерен дә, малын да, ҡыҙын да биргән башҡорт — ерҙәш һәм туған итеп алған үҙенә: шул саҡтарҙа уҡ кешелекле мәрхәмәт, гөманлылыҡ күрһәтеп; талағын батша сәмреғошо талағандарға Уралында йылы төйәк, политик һыйыныу урыны биргән, хәҙергесә әйткәндә. Ошо хәлде Петербурҙан талағы ташып күҙәткән батша сатраптары 1730 йыл фарманында уҫал тыйған бабаларыбыҙ миһырбанлылығын, тик ҡөҙрәте етмәгән туҡтатырға — болғансыҡ һыу томалай алмаған илдең игелек күҙен. Ә ике ярым быуаттан һуң шул башҡортомдоң тоҡомдары үҙ өйөндә үк өйҙәштәре араһындағы бөтөп барыусы аҙ һанлы «ғаилә» хәленә ҡалырын, милләт яҙмышы ҡыл осонда сайҡалғанда өйҙәштәренән йылы һүҙ һәм тотанаҡ урынына бәғзеләрҙең ҡуйынында йөрөтөлгән таш зәхмәтенән шаңҡытылырын күҙ алдына ла килтермәгәндер ул эскерһеҙ бабалар...

Хәйер, яһил атҡан ҡуйын ташының зәхмәте башҡортҡа ғына түгел — татарға ла ҡағыла берҙәй, уға ҡалһа: Т. Ҡарамышева ҡәрендәш мәҡәләһендәге Ғ. Ғәлиев «абыҡай»ыбыҙ монологы уларҙы ла шаңҡытыр. Татар халҡы исеменән туғандаш башҡорт халҡына ҡарата геноцид политикаһын үткәрергә ниәтләнеп, расист дәғүәләрен ҡорған был болғансыҡ һыу балыҡсыһының: «Башҡырт дигән халыҡ та ул юҡ — всего лишь одичавшие татары... ҡырағай хәлгә кергән татар очтыклары... эшлексез, ялҡау горлопаннар. Аларны бит рәткә кертеп була бит только если рядом чын татар булса ғына», — тип, татар халҡын да үҙе ише «чын татар»ҙарға һәм «ҡырағай»ҙарға айырып маташыуын башҡаса ҡалай аңларға?.. Әммә бөгөнгө Башҡортостан әхүәленә ҡарата биргән төп политик баһаһы менән килешмәй мөмкин түгел: ҡайҙа ғына төртөлмә, идаралыҡ теҙгендәре ошо «абыҡай»ҙарыбыҙ ҡулында шул... «Ни дисәң дә, республика безнең ҡулға күчте бит... Кем хозяин Уфаға — шул хозяин вись республикаға... Уфада бит барлыҡ татарның Диниә назараты урынлашҡан — димәк, Уфа — татар баш ҡаласы, Ҡазаннан ҡала — икенче... Аллаға шөкөр, бер ун бер йыл ваҡытта без эшебезне

бетерербез диеп уйлыйм. Ә хәзер инде сезнең ҡойрыҡларны ҡыстыра башлый татар абыҡайларығызның йомшаҡ ҡулы, чырылдатып, аҡыртып», — тигәненән ҡасандырғы мөстәнләнгән Исхаҡи, Маҡсуди әфәнделәрҙең бөгөн килеп Өфөнөң Октябрь проспектында өрәкләнеп йөрөп ятыуҙары аңлашыла түгелме?..

Әйткәндәй, «татарның Диниә назараты» тигән рухи төйәгенең һәм, ғөмүмән, бабаларының көсләп суҡындырылыуҙан һәм бөтөүгә дусар ителеүҙән ҡалай ҡотҡарылыуының, ул ғына ла етмәһә, татар халҡына рухи терәк мәсеттәр, мәҙрәсәләр, беренсе китап нәшриәттәрен нигеҙләргә батша рөхсәтнамәһе бирелеүенең дә кем арҡаһында икәнлеген беләме икән был сәме саманан ашҡан «чын татар абыҡай»ыбыҙ? 1755 йылда Сураған батыр Миңлебаев етәкләгән ҡөҙрәтле башҡорт күтәрелешендә әлеге «ҡырағай» аталмыш халыҡтың азатлыҡ яулап биргән йәне, түккән ҡаны мәжбүр иткән бит аҡ батшаны татар халҡына ҡарата геноцид политикаһын туҡтатырға, дин һәм милли мәҙәниәт өлкәһендә лә теҙгенде бушатырға. Бына шуның рәхмәте ҡылыптыр инде, Өфөнөң бөгөнгө «чын татар абыҡай»ҙары алдағы «бер ун бер йылда», имеш, «как пычаҡ поперек горлаға» торған башҡорттарҙың «эшләрен бетерергә», бөтөрөлмәгәндәрен Урал артына һөрөргә, ә улар ҡушҡанды ғына үтәп йөрөгәндәрен «взять сторожом участокка или на ночь битум эретергә», тип ең һыҙғана...

Шуныһына шөкөрәнә ҡылайыҡ: бындай «абыҡай»ҙар болғағынан юғары тора халҡыбыҙ.

22.02.1990.

Былтыр, 1989 йылдың апрелендә үк, илебеҙҙәге сәйәси көрәш көсәйеүенең беренсе яҙ ҡарлуғастары булып, хакимиәттәр рөхсәтенән тыш сыҡҡан баяғы митингыбыҙҙа республикабыҙға үҙ аллылыҡ яулап алыуҙы беренсе бурыс итеп ҡуйыуыбыҙҙы әйткәйнем. Шунан һуңғы заманаларҙа ла башҡорт хәрәкәтенең төп шиғары булып ҡалды ул. 1990 йылдың 12 июнендә РСФСР Верховный Советы тарафынан Рәсәйҙең суверенитеты тураһында Декларация иғлан ителгәс, Башҡортостан суверенитеты өсөн беҙ алып барған көрәш реаль нигеҙгә ултырҙы, был көрәш ипкене БАССР Верховный Советы (Президиумының Рәйесе М.Ғ. Рәхимов) депутаттарына ла һирпелде. Шуға күрә үҙ аллылыҡҡа хоҡуғыбыҙҙы, уның ҡанунилығын халҡыбыҙға аңлатырлыҡ публицистикаға ихтыяж да көсәйҙе. Ошоно күҙ уңында тотоп, шул уҡ «Йәшлек» гәзитенә ошоно яҙып тапшырҙым:

Үҙ аллылыҡтың ҡоласы һәм арҡа таянысы

1

Һәр халыҡтың тик үҙенең тәүбабаларҙан аманатҡа ҡалған берҙән-бер, мөҡәддәс нәҫел төйәге — тупрағында быуын-быуын бабалары яралып-тыуып үҫкән, һөйәктәре шул уҡ тупраҡҡа иңгән, һәр ҡыяғы һәм бөжәге, ҡош-ҡорто һәм кейек-януары, эскән һыуы, һулаған һауаһы, хатта туҙанына тиклем уның менән тик уның, уның телендә һөйләшкән, уның ғына алтын бишеге булған изге ере, тыумыштан уҡ хәләл Тыуған иле бар. Шуға күрә һәр халыҡтың ана шул үҙ Тыуған илкәйендә, үҙ мөҡәддәс тупрағында мөмкин тиклем иркенерәк үҙ аллылыҡ алырға ла үҙе булып ҡалырға хоҡуғы бар. Тап ошондай изге аҫабалыҡ хоҡуҡ, ер-

һыу-һауа менән тығыҙ берҙәйлек донъя яратылғандан уҡ сал Уралдың тупрағында Башҡорт иле рәүешендә насип булған беҙҙәргә:

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы —
Атай-олатайҙарҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған —
Шунда ята батырҙар һөйәге...
Яҡшы атҡа менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаҡкай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын...

Милләтебеҙ гимны булып әүерелгән «Урал»дың был ҡанлы-шанлы шиғри юлдарында сал быуаттар аһәңе аша ғөмүми кешелек тарихының изге ҡануны рәүешендә нығытылған был хоҡуҡ — үҙ аллылыҡ хоҡуғы. Һәм беҙ уны үҙ яҙмышыбыҙға ысын-ысындан үҙебеҙ хужа булып, башҡаларҙың да бауырын ҡанһыратмай, шул уҡ ваҡытта хоҡуғыбыҙҙың туҙан бөртөгөндәй генә өлөшөн дә һөмһөҙ ҡулдар шаҡшылығынан ыуалтырға ирек ҡуймай, мөмкин тиклем ысын үҙ аллылыҡ ҡәғбәһенә барырға тейеш. Ләкин нимә һуң ул ысын үҙ аллылыҡ? Үҙ аллылыҡтың ҡоласын, уның дәүмәл сиктәрен билдәләрлек теүәл сама бармы һуң? Һәм ул нимәгә таяна?..

2

Төрлө политик төркөмдәрҙең бөгөнгө мыжғыу хәрәкәтендә, республикаларҙың декларацияларында ла төрлө-төрлө билдәләнеп сағыла бит ул. Сөнки тамам бер төҫлө, йөҙ процентлы үҙ аллылыҡтың булыуы мөмкин түгелдер — бер халыҡ та, бер ил дә ер йөҙөндә бер үҙе генә көн күрмәй, уны башҡа халыҡтар һәм илдәр уратып алған, уның мөҡәддәс теләктәре башҡаларҙың да шундай уҡ мөҡәддәс теләктәре менән йөҙгә йөҙ текәшкән... Әгәр саҡ ҡына фантазияға күсһәк, йөҙ процентлы ысын үҙ аллылыҡ ул, минеңсә, ғәрәсәтле яу ҡырында, фронттың иң алғы һыҙығында дошман менән ҡылысҡа ҡылыс сатрашландырған яугир һынында ғына баҙыҡ кәүҙәләнә: шул мөҙҙәттә үҙенең һәм иленең хаҡ яҙмышы — ҡылысында, үҙенән башҡа уға һис кем бойормай ҙа тотҡарламай — был мәлдә ул ни ҡылһа ла үҙ аллы... Бөгөнгө хаҡ яҙмышыбыҙ, үткәнебеҙ, киләсәгебеҙ, баяғылай образлы итеп әйткәндә, һәр беребеҙҙең ҡылысы осонда торған мәлдә, атай-олатайҙар ғорурлығын юйып, сал Уралдың мәғрурлығын кәмһетеп, башыбыҙҙы кире ҡабат үҙәк министрлыҡтар йәтмәһенә — колониаль ҡоллоҡҡа һалырбыҙмы?!. Автономиялы ҡолдарына үҙ аллылыҡ бирмәҫ өсөн, нимәләр генә ҡыланмай улар! Әммә улар менән генә лә сикләнмәй шул әле прогресс дошмандары.

Башҡортостандың үҙ аллылығын тыумаҫы борон уҡ быуып ташларға яҫҡынып, паспортында һәм башҡорт исемен йөрөткән, һәм башҡа милләт яһилдары ла үҙе ашаған табағына төкөрөп тибәләнә. Әйтерһең дә, Башҡортостан үҙ аллылығы бер башҡорттар өсөн генә бик кәрәк тә башҡалар өсөн ник кәрәк.

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Башҡортостан үҙ аллылығы (союздаш республика хоҡуҡтары) башҡорттарҙан да бигерәк республиканың башҡа халыҡтарына күберәк файҙалы түгелме ни? Әйтәйек, үҙ аллылыҡ арҡаһында республика табыштарының ошоғаса үҙәктең төпһөҙ ҡойоһона китеп олаҡҡан йөҙ тәңкәһе янда тороп ҡалды, ти. Республиканың төрлө милләтле дүрт миллион халҡын әгәр йөҙ кеше итеп алып, баяғы йөҙ һумды кеше башына теүәл берәр һумдан бүлеп бирһәк, кемгә күпмешәр тейер? Дөйөм халыҡтың яҡынса 40 процентын — урыҫтар, 24 процентын татарҙар, 22 процентын башҡорттар тәшкил иткәнен иҫтә тотһаҡ, баяғы йөҙ тәңкә табыштың етмеш һигеҙ һумы урыҫтар, татарҙар һәм башҡа халыҡтар кеҫәһенә сумасаҡ, ә башҡортҡа, ғәҙел бүленгән хәлдә лә, егерме ике һумы ғына ҡаласаҡ бит. Шулай булғас, кемгә күберәк файҙа — башҡортҡамы, әллә башҡаларғамы?!. Башына тай типкән бәндә генә быны аңламаҫ, замана үҙе талап иткән Башҡортостан үҙ аллылығына ҡарышыр. Штабы Ҡазанда шытҡан һәм Өфөгә лә ағыулы бер тармағын һуҙған Татар ижтимағи үҙәге (ТИУ) ана шул төп ҡарышҡаҡтар булып тора, бурһыған рухлы етәкселәре Рамазанов һәм Яуышев йөҙөндә тарих тәгәрмәсенә таяҡ тығып маташа. Татарстандың үҙ аллылығын, татар теленең ундағы дәүләт статусын хаҡлы рәүештә йәнтәслим яулап йөрөгән, ниһәйәт, шул мораттарына ирешкән был хәрәкәтселәр шул уҡ ваҡытта Башҡортостан үҙ аллылығына һәм башҡорт теленең дәүләт статусына теше-тырнағы менән ҡаршы. Татарстанды заманса тиң хоҡуҡлы итеп алып та, Башҡортостанды әлеге лә баяғы феодал тормош осорона тибеп йыҡмаҡсы улар. Шул типкене ҡеүәтләр, нығыраҡ тибер өсөн, Башҡортостанға үҙ аллылыҡ биреү-бирмәү мәсьәләһен республика халыҡтары референдумына ҡуйырға ла тамшанып маташалар. Рамазанов үҙҙәренең ошо ҡара эслелеген күптән түгел РСФСР Юғары Шураһы рәйесе Б.Н. Ельцин өфөләр менән осрашҡанда ла юғарылыҡлы трибунан тартынмай янъялланы. Башҡорт милләте үҙ ерендә үҙе генә хәл итергә хаҡлы бик нескәлекле изге эшкә татар халҡы исеменән ҡара дегет яғалар ҡарыулашып. Ошо урында татар милли хәрәкәтенең иң актив етәкселәренең береһе, Татарстан ССР-ы Юғары Шураһының депутаты Фәүзиә Бәйрәмованың шул Юғары Шура ултырышында Татарстандың дәүләт үҙ аллылығы тураһындағы мәсьәлә буйынса фекер алышыуҙа һөйләгән ялҡынлы телмәрен иҫкә төшөрәм:

«...Инде килеп Татарстан, татар халҡы үҙенә суверен дәүләт алыр өсөн йөрөй икән, быға ҡаршы төшөргә бер генә милләттең дә һәм юридик, һәм әхләҡи яҡтан хаҡы юҡ, — тине ул. — Был — бер милләттең икенсе милләт эшенә тығылыуы буласаҡ һәм, шулай итеп, халыҡ-ара хоҡуҡтар тупаҫ рәүештә боҙоласаҡ.

Был ер, тел, иман беҙгә, татарҙарға, Хоҙай тарафынан меңдәрсә йыл элек бирелгән. Беҙ бында килеп кемде лә булһа баҫып алманыҡ һәм алырға ла йыйынмайбыҙ. Беҙ бары тик хоҡуҡтарыбыҙ, милләтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн генә көрәшәбеҙ. Дәүләт һәм тел мәсьәләләрен референдумға ҡуйыу ҙа халыҡ-ара хоҡуҡтарҙы тупаҫ рәүештә боҙоу буласаҡ, һәм беҙ яҡлауҙы донъя йәмғәтселегенән һорарға мәжбүр буласаҡбыҙ. Беҙ үҙ еребеҙҙә һөйләшергә тел һорап референдум уҙғарайыҡмы, һуларға һауа, эсергә бер йотом һыу һорап референдум уҙғарайыҡмы? Үҙ еребеҙҙә гүргә инер өсөн өс аршин ер

һорап та референдум үҙгарайыҡмы?! «Татарҙарға дәүләт бирмәҫкә!» — тип ҡысҡырып йөрөү, ул — ашаған табағыңа төкөрөү, тигән һүҙ».

Хаҡ һүҙҙәр, һәм был һүҙҙәр Башҡортостан үҙ аллылығына, башҡорт халҡының, уның теленең дәүләт статусына ҡаршы күҫәк күтәреүсе Ҡазан эмиссарҙары Рамазанов, Яуышев ише һарыуы ҡайнаған татарҙарҙың үҙҙәренә үк яуап итеп ҡайтарылырға хаҡлы.

Яҙыусы булараҡ, мин шуны әйтә алам, — ти йәнә Ф. Бәйрәмова, — бында Татарстан ерендә — татар милли мәҙәниәтенең яҙмышы хәл ителә. Без, татар яҙыусылары, донъяла бары тик бында гына үзебеҙҙең китаптарыбыҙҙы баҫтырып сыгара алабыҙ, бында гына беҙҙең уҡыусыларыбыҙ бар. Татар әҙәбиәтенә тыуыу өсөн ерлек бары бында гына».

Ҡорҙашының был бик хаҡлы киҫәтеүе яусыл Яуышев әфәнденең татар халҡы исеменән башҡорт яҙыусыларына, башҡорт мәҙәниәте етәкселәренә яуҙырмыш нигеҙһеҙ дәғүәләренә йәпле яуап рәүешендә ҡайтарып бирелһен.

«Ләкин беҙ, татар яҙыусылары, — тип өҫтәй Ф. Бәйрәмова, — һуңгы ваҡыт ҙур ҡурҡыныс аҫтында ҡалдыҡ — урыҫ мәктәптәрен тамамлаган татарҙар үҙ әсә телдәрендә уҡый ҙа, яҙа ла алмаҫ хәлгә килделәр, милләт телһеҙ ҡалды. Милләтте яңынан терелтер, телле, иманлы, мәҙәниәтле итер өсөн дәүләт кәрәклеген, үҙ аллылыҡ кәрәклеген беҙ тагы ла бер тапҡыр аңланыҡ». Бәрәкалла! Бына тап шуның башҡорттарға ла эскән һыу, һулаған һауа кеүек кәрәклеген аңларға ваҡыттыр бит тап шул ҡара йәнле ТИУ-сыларға. Башҡорт милләтенең өстән бер өлөшөнөң инде дүртенсе быуыны татар мәктәптәрендә уҡырға дусар ҡылынып, хөрмәтле Ф. Бәйрәмова һүҙҙәрен ҡайтарып әйткәндә, *«үҙ әсә телдәрендә уҡый ҙа, яҙа ла алмаҫ хәлгә килделәр, милләт телһеҙ ҡалды. Милләтте яңынан терелтер, телле, иманлы, мәҙәниәтле итер өсөн дәүләт кәрәклеген, үҙ аллылыҡ кәрәклеген беҙ тагы ла бер тапҡыр аңланыҡ».* Сөнки Татарстанда ла, Башҡортостанда ла башҡорттарҙы татарлаштырыу политикаһы үткәрелде, әле лә үткәрелә — милләтебеҙ юҡ ителеү ҡурҡынысы аҫтында... Бына ошо башҡорт өсөн һәләкәтле бер осорҙа үҙҙәрен башҡорттоң «игеҙәк» туғаны иҫәпләгән ҡан ҡәрҙәштәр тарафынан, ярҙам ҡулынан да бигерәк, упҡынға тибәреүсе тимер дағалы итек үксәһен йыш күрәбеҙ, бигерәк тә баяғы яһил ТИУ яғынан. Башҡорттарҙы күрә алмаусанлыҡ (башкирофобия) күҙҙәрен тондорған функционерҙар татар халҡы исеменән эш ҡылып, татар халҡы мәнфәғәттәрен дә башҡорттоҡо менән ҡуша аяҡ аҫтына һалып тапай: административ-бойороҡлоҡ системаһының колониаль ҡоллоғо иңрәткән Башҡортостанда үҙ татарҙары ла бергә иҙелеп интекһә интекһен, мәгәр башҡорт зыян күрһен, башҡорт көн күрә алмаһын ғына бер үк... Был нимә: уларҙың ғына көн күрергә хаҡы бар, башҡаларҙың хаҡы юҡ — шулай килеп сығамы?!.

Ошо ыңғайҙан, әлбиттә, татар халҡы исеменән иманһыҙлыҡ ҡылып йөрөгән бәғзеләрҙе татар халҡы, уның прогрессив интеллигенцияһы менән тиңләргә ярамай: улар араһында ла бит башына тай типкәндәрҙән типмәгәне күберәк. Әммә башкирофобия сиренең ҡайһы вирусҡа бәйлелеген һәр кем белергә тейеш. Быуат башында уҡ башҡортто күрә алмаусы Исхаҡиҙар, Мәҡсүдовтар һулышынан бүленгән рухи лайлала мыжғып үрсене ул вирус — һуңғы башҡортҡа ясин сығып, мираҫына хужа булыу хыялы. Башҡорт шәжәрәләренә, эпостарына

татар тамғаһы һалынды, тарихыбыҙ тыйылды, башҡорт теле татар теленең бер «боҙоҡ диалекты» итеп түбәнһетелде. Тиҫтәләгән йылдар буйы КПСС исеменән бойомға ашырылған милли һәм шуға бәйле экономик, демографик политика башҡорт ерендә башҡорттар өсөн тамуҡҡа, һәләкәткә әйләнде. Башҡорттарҙы инде килеп донъя яратылғандан алып йәшәгән, ата-бабаларының изге һөйәктәре ерләнгән ғәзиз тупрағынан да тамам мәхрүм ҡылырға, баяғыса, «татар ере» тамғаһы баҫырға тамшаналар мөртәттәр. Уларҙың хатта Б.Н. Ельцинға тапшырылған шикәйәтнамәләре лә һуғарылды ошо вирус ағыуына: Башҡортостан башҡа бер кемдең дә түгел, ә татарҙың «үҙ ере» ҡылып дәғүә өҫтөнә дәғүә өйөлә унда — ошо ергә исем биргән төп халыҡты һанға һуҡмау, уны аша атлап үтергә яҫҡыныу тип аңлайым мин быны. Төп халыҡ башҡорт түгел, ә улар икән дәһә!.. 1552 йылда Яуыз Иван полктары Ҡазан ханлығын теҙ сүктергәс ҡанлы йәштәрен түгеүсе ҡасаҡ булып бабаларының бында килеп һыйыныуын, шуға тиклем башҡорттарҙың Башҡортостанда моноэтнос булыуын, ә Башҡортостан сиктәренең халыҡ-ара танылғанлығын (кенәз Андрей Курбский яҙмалары) белергә лә теләмәй, күрәһең, улар... Татарҙың «үҙ ере» тигән һүҙҙәренең мәғәнәһе баяғы Б.Н. Ельцин килеп киткәндән һуң тиҙ үк асыҡланып, Яуышев әфәнде ауыҙынан ТИУ-сыларҙың ультиматумы рәүешендә республика матбуғаты аша иғлан ҡылынды: *«Беҙҙең талаптар ҡабул ҡылынмаһа, урыҫ иптәштәр менән һөйләшеп, элекке Өфө өлкәһен аяҡҡа баҫтырыу мәсьәләһен күтәрәсәкбеҙ. Ул саҡта татар халҡының ихтыяждарын һанга һуҡмаусы булмаҫ!»* Аҙ ҙа түгел, күп тә түгел, республикабыҙ тупрағының ҡап-яртыһын ҡырҡып алыу икән дә ниәттәре!

Нәфсеһе әхләҡ бизмәненә һыймаған дәғүәсегә яуап итеп йәнә лә шул уның үҙенең абруйлы ҡорҙашы Фәүзиә ханым Бәйрәмова телмәренән фәһемле өҙөк ҡайтарып бирергә була: *«Хәҙер айырым урыҫтар тарафынан Татарстанды — Ҡазан өлкәһе итергә, Ҡазанды иһә Татарстанга буйһоноуынан сығарырга тигән мәгәнәһеҙ фекерҙәр әйтелә. Татарҙар бындай вәхшилекҡә бер ҡасан да юл бирмәйәсәктәр!»*. Ә башҡорттар иһә бындай вәхшилекҡә ҡасан да юл ҡуйырҙар, баштарын эйеп күнерҙәр, тип ымһынамы икән ни шөһрәтле ТИУ-сылар?!. Шул тиклем үк үҙ-үҙҙәрен белештермәй ашҡынмаҫтар ҙа ине, юғиһә. Күрмәйһегеҙме ни, башҡорттарҙың киләсәген башҡорттарҙан тыш хәл ҡылып, шулай уҡ бындағы урыҫтарҙан да, татарҙарҙан да һорамай, яманатлы «Иҙел — Урал штаты»ның сереп бөткән ҡараҫҡыһын тарих сүплегенән соҡоп сығарған да яңы бөйөк Татарстан ҡоршап та ҡуйған улар (һары-һоро гәзиттәрендә, әлбиттә). Ошо йылдың авгусында ТИУ ташҡа баҫып тараҡҡан «яңы» географик карта аныҡ дәлиле быны: Татарстан тарафынан тулыһынса йотолған Башҡортостан. Бына ни өсөн ҡырталашып күләгәләр менән алыша икән урындағы шанлы ТИУ яугирҙәре...

3

Юғарыла килтерелгән өлгөләрҙән асыҡ күренеүенсә, Татарстандың үҙ аллылығына ҡаршы уның дошмандары ҡайһындай шаҡшылыҡ ҡулланһа, шуларҙың барыһын тиң ТИУ-сылар бында, Башҡортостанда, Башҡортостандың үҙ аллылығына аяҡ салыу өсөн ҡабатлай. Тел әйләнмәй быға баһа бирергә.

Татарстанда татар халҡы өсөн яулап алынған хәләл үҙ аллылыҡ менән мөрәхәтһенмәй, Башҡортостан ерендә лә татар үҙ аллылығы урынлаштырырға яҫҡынып, башҡорт ҡәрҙәштәренең яҙмышын аяуһыҙ аяҡ аҫтына һалып тапайҙар. Шуның хаҡына башҡа милләттәр менән «һөйләшеп» берләшергә лә әҙерҙәр имеш. Әммә, Ф. Бәйрәмова ханым әйтмешләй, ашаған табағына төкөрөргә, йәиһә беткә үсегеп тунын утҡа яғырға риза булырмы икән һуң ул башҡа милләт вәкилдәре, шулай уҡ татарҙар ҙа? Депутаттарҙы әйтәм. Башҡортостан Юғары Шураһы ултырышында үҙ аллылыҡ мәсьәләһен алға һөрөп хәл иткәндә берәү ҙә үҙе ултырған ботаҡҡа балта сабып маташмаҫ, айыҡ аҡыл өҫтөнлөк итер тип ышанғы килә. Яҙмыштарҙы хәл ҡылғыс шул ултырышта һәр депутаттың ҡайһылай тауыш биргәнлеге исем-фамилиялары менән халыҡҡа киң билдәле булырға тейеш — һайлаусылар белһен үҙ геройҙарын. Һәр хәлдә, Башҡортостан үҙ аллылығы бер башҡорттар өсөн түгел, ә унда йәшәгән бөтә халыҡтар өсөн дә һыу, һауа һымаҡ үтә зарур.

Иншалла, күпме аяҡ салһалар ҙа, Башҡортостан үҙ аллылығы алыныр — бөгөн булмаһа, иртәгә, иртәгә булмаһа, береһе көнгә — барыбер ул алыныр. Сөнки тарих тәгәрмәсен таяҡ тығып тоткарларға ғына була, ләкин уны туктатыу мөмкин түгел, сөнки ҙә бит халыҡ үҙе әйтмешләй:

Ҡайнап ҡына сыҡҡан Иҙел аша
Тәфтиләүҙәр кисеү таба алмаҫ.
Ир-егеткәйҙәрҙең өмөткәйен
Тәфтиләүҙәр мәңге быуа алмаҫ.

Әммә рәсми үҙ аллылыҡ яулап алыу менән генә теүәлләнмәй ил ғәме: рәсми үҙ аллылығыбыҙ артабан тәғәйен эштәр, егәрле хеҙмәт һәм ҡыйыулыҡ менән генә бойомға ашырыласаҡ. Бының өсөн милләтебеҙгә өйҙәш булып бергә йәшәгән башҡаларҙың теләктәшлек һәм берҙәмлеге лә кәрәк. Үҙенең ғәзиз Татарстан республикаһында үҙ аллылыҡҡа ирешкән ҡәрҙәшебеҙ татар халҡы ла ҡан ҡәрҙәше башҡорт халҡының изге ынтылышын ихтирам итер, тапатырға юл ҡуймаҫ.

Яу ҡырының иң алғы фронт һыҙығында ысын үҙ аллылыҡ алыусан ҡылыслы яугир образын миҫаллағайным. Ҡылыслы дошмандан башын ҡыйҙыртмаҫ өсөн, алдын да, артын да ныҡ тойомлап алышыу мотлаҡ уға. Былдай саҡта яугирға иң ышаныслыһы — арҡа таянысы (арҡадаш) табыу, үҙе һымаҡ уҡ яугир менән арҡаға арҡа таяп, бер юлы ҡуш ҡылыс менән алды-артты ҡурсалау. Ошо яугир образын әгәр политик алыштар ҡайнаған бөгөнгө тыныс тормошобоҙға ла күсерһәк, быдай арҡадашлыҡты бынан дүрт быуат элгәре үк табып биргән беҙгә ғәзиз бабалар — бер-беребеҙгә тоғролоғобоҙ яуҙарҙа бергә һыналған урыҫ халҡы. Ҡитғабыҙ яҙмышын хәл ҡылырлыҡ иң яуаплы дәүерҙәрҙең һуңыраҡҡы икеһендә лә башҡорт һәм урыҫ үҙе теләп ҡул бирешеп килеште, бер-береһенә арҡадаш булды — 1557 һәм 1919 йыл. Яҡшымы, яманмы, беҙҙең башҡа арҡа таянысы юҡ, был — тарихи ысынбарлыҡ.

4

Бына инде өсөнсө яуаплы дәүер — ейәндәрҙең ейәндәре лә ғәзиз күреп ҡәҙерләрлек өсөнсө килешеү арҡылы бер-беребеҙгә ныҡ арҡа таяныслы булыу, барыбыҙҙың дөйөм йорто Башҡортостан тупрағына үҙ аллылыҡ алыу ваҡыты етте. Яҙмыштарҙы хәл ҡылырлыҡ изге эштәр атҡарғанда арҡа таяныстары баҙыҡ булырға, шик-шөбһә һәм хәүефле ғәм албырғандыртмаҫҡа тейеш. Әйтәйек, Башҡортостан үҙ аллылыҡ алыр ҙа РСФСР-ҙан кендеген сабып өҙөр, һөҙөмтәлә бындағы урыҫтар ҡасаҡ хәленә ҡалыр, тигән хафа борсой имеш ҡайһы бер әһелдәрҙе. Бының ише имештәргә урын ҡалдырмаҫ өсөн, ҡабул ҡылынасаҡ үҙ аллылыҡ декларацияһына асыҡлыҡ индерергә кәрәк, минеңсә: башҡорт милләте бер ҡасан да РСФСР, уның халыҡтары менән араларҙы өҙөргә ниәтләнгәне юҡ, беҙҙең һымаҡ йән иҫәбе аҙ милләткә, океандағы энә күҙәүендәй генә утрауҙай, башҡаларҙан айырылып, үҙ ярҙарыңа бикләнеп, йөҙ процентлы үҙ аллы булып йәшәү мөмкинлеге юҡ һәм ул булмаясаҡ та. Бөтәбеҙҙең дә бөтәбеҙ менән кендектәре берешкән, бер-беребеҙҙең ҡан тамыры бер-беребеҙгә үрешкән — уны ҡанатмайынса һис ҡырҡыуы мөмкин түгел. Һәм ҡырҡырға кәрәкме һуң әле уны — бер-беребеҙгә йәшәү һуты тиртешеү бәрәкәтен?!

Фәҡәт бер изге теләк: ошоғаса халыҡтарҙың ҡанын һурып ҡаҡшатыусы албаҫтылыҡ ҡануны: *автономиялы республикалар — колония, ә Рәсәй — метрополия* системаһы тамырынан йолҡоп ташлап мәңге бөтөрөлөргә, яңыртылған РСФСР составындағы үҙ аллы һәм киң хоҡуҡлы Рәсәй менән Башҡортостандың тигеҙ-тиң хоҡуҡлы үҙ аллылыҡ ҡануны мәңге-мәңге хөкөм һөрөргә тейеш. Йән иҫәбе күпме униң, аҙмы — бер милләт тә икенсе милләттән өҫтөн ҡуйыла алмай, береһе — бойороусы, икенсеһе буйһоноусы була алмай, закон ҡаршыһында тигеҙ хоҡуҡлылар берләшмәһе булһын ул РСФСР. Бына шунда ғына килер татыулыҡ та берҙәмлек. Ә беҙ иһә берҙәмлектә — бәрәкәт, татыулыҡ тау түңкәрә, тигән ата-баба мәҡәләнә тоғробоҙ...

Туғандарҙың Башҡортостан үҙ аллылығына бәйле икенсе бер хафаһы, төп милләт теле дәүләт теле статусына ирешһә, бөтә урыҫтарҙы ла көсләп башҡортса һөйләшергә мәжбүр итәсәктәр, имеш. Бындай көсләшеүҙең кемгә, нимәгә кәрәге бар? Йән иҫәбе аҙ ғына һанлы башҡорт милләте үҙен уратып алған башҡа милләттәрҙең океанына үҙ милли телен көсләп тағырға ынтылһа, бик сәйер ҙә, көлкөлө лә килеп сығыр ине был. Башҡорттар үҙҙәре әсә теленән мәхрүм ҡалып бөтөп бара, кешелек ҡороноң иң боронғо, үҙенсәлекле телдәренең береһе булған башҡорт теле күҙ алдында һәләк була — шуны үлемдән ҡотҡарыу, илебеҙҙең ҡабатланмаҫ бер ҡаҙанышы, байлығы рәүешендә һаҡлап алып ҡалыу өсөн кәрәк бит был статус, уны яҡлау — бер башҡорттоң ғына түгел, ә теләһә ниндәй милләтле һәр гуманистың да хаҡ кешелек бурысылыр. Әйткәндәй, төп халыҡтың теле менән бер ҡатарҙан урыҫ теле лә милләт-ара аралашыу теле статусын ала, бығаса нисек булды — шулай йәшәүен дауам итәсәк ул, тимәк. Ә республикаға исем биргән төп халыҡтың телен өйрәнеү ихтыяжы бар икән — был һәр кемдең үҙ ихтыярына, теләгенә нигеҙләнеп, оҙайлы ваҡыт арауығына (25-50 йыл) иҫәпләнергә, бының өсөн дәүләтебеҙ тарафынан уға, урыҫ теле һәм башҡа телдәр менән бер ҡатарҙан, ыңғай шарттар тыуҙырылырға тейеш тип уйлайым. Хәйер,

инде ныҡлап урынлашасаҡ баҙар мөнәсәбәттәре үҙҙәре үк тауар етештереүсене — ҡулланыусыға, кешене кешегә яҡынайта, күршеһе телендә аралаша белеү ихтыяжын арттыра.

Башҡа халыҡтарға ла һис хәүефләнер сәбәп юҡ, сөнки «Башҡорт ССР-ы үҙ территорияһында йәшәгән милли төркөмдәргә ирекле һәм бөтә яҡлы экономик, социаль һәм мәҙәниәт үҫеше мөмкинлектәре һәм хоҡуҡтарын гарантиялай».

Үҙ аллы һәм тиң хоҡуҡлы союздаш дәүләт рәүешендә үҙ-ара ғәҙел килешеү аша яңырыусы демократик РСФСР менән тығыҙ берҙәмлектә сәскә атырға, ысын-ысындан үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алып, түбән сортлы халыҡ итеп кәмһетелеп иҙелеүҙән мәңгелеккә арынырға теләй сал Башҡортостан. Ундай үҙ аллы Башҡортостан, башҡортҡа ғына түгел, унда йәшәгән барлыҡ милләттәр өсөн дә ысын-ысындан танһыҡ тыуған йорт буласаҡ, иншАлла. Башҡортостан яҙыусыларының йыллыҡ дөйөм йыйылышында ла тап ошондай ҡарар ҡабул ҡылынды. Үҙендәге милләттәрҙең барыһын да күҙ ҡараһы — ғәзиз балалары күреп ырыҫлау, милләттәр баҡсаһын балҡытып сәскә аттырыу — үҙ аллы ил Башҡортостан Совет Социалистик Республикаһы байрағының төп шиғары. Хәйерле сәғәттә, туғандар!

Быға тейешле гонорарҙы «Йәшлек» гәзите фондына күсереүҙе һорайым.

Йыһат Солтанов. Өфө, 14 август 1990 йыл.

Сәйәси мөхит ҡыҙыша

1990 йылдың авгусынан башлап ваҡытлы матбуғатта Башҡортостан суверенитеты тураһындағы Декларацияның бер нисә проекты баҫылып сыҡты, суверенитеттың дуҫтары ла, дошмандары ла ыраны. Бындай ҡаршылыҡтар БАССР Верховный Советы депутаттары араһында ла бар ине. Шул ҡатмарлы хәлдәрҙе тейешле йүнәлешкә борорға кәрәк ине. 1990 йылдың 10 октябрендә БАССР Верховный Советының ултырышы асылыр алдынан баш ҡаланың Совет майҙанында бергәләшеп Башҡорт йәштәре иттифағы һәм беҙҙең «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге ойошторған митинг һәм демонстрация үтте шаулап.

Һәм, ниһәйәт, 1990 йылдың 11 октябрендә депутаттар нәҡ шул мәсьәләне хәл ҡылырға Ҡоролтай йортоноң (Фрунзе урамы, 40) ҙур залына йыйылды. Иртән тороп, мин дә халыҡ ағымында шул тарафҡа йүнәлдем — башҡорт милли хәрәкәтенең меңләгән активисы пикетланы шул тарихи ултырыш барған бинаны. Беҙ күтәргән транспаранттарҙа: «Башҡортостанға — тулы суверенитет!», «Башкирскому языку — государственную защиту!» кеүек шиғарҙар бар ине. Залда ла тап шулар буйынса көсөргәнешле үҙ-ара алыш ҡыҙҙы...

Иртәгәһенә, 1990 йылдың 12 октябрендә, «Совет Башҡортостаны» гәзите: «Һөйөнсө! Һөйөнсө! Башҡортостан суверенитет алды!» тигән тантаналы дөйөм баш аҫтында сыҡты, халыҡҡа тарихи документтың тексы, ҡотлауҙар еткерелде:

Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының дәүләт суверенитеты тураһында

ДЕКЛАРАЦИЯ

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы Верховный Советы,

республиканың күп милләтле халҡының яҙмышы өсөн тарихи яуаплылыҡты ***аңлап,***

кеше хоҡуҡтарының Дөйөм Декларацияһында, башҡа халыҡ-ара хоҡуҡ акттарында нығытылған дөйөм кешелек ҡиммәттәренең, тәбиғи һәм социаль мөхиттең, хоҡуҡтарҙың һәм азатлыҡтарҙың өҫтөнлөктәрен ***таныұ,***

бөтә халыҡтарҙың суверенлы хоҡуҡтарын ***ихтирам итеп,***

республика территорияһында йәшәгән халыҡтарҙың экономик, социаль, политик, рухи үҫеше тураһында ***хәстәрлек күреп,***

республиканы ССР Союзының һәм Яңыртылған Россия Федерецияһының субъекты итеп ***иҫәпләп,***

Башҡорт Республикаһының 1919 йылда РСФСР составында Үҙәк Совет власы менән Килешеү нигеҙендә төҙөлөүен ***иғтибарға алып,***

автономиялы республика статусының хәҙер Башҡортостандың бөтә яҡлы социаль-экономик үҫешен тәьмин итмәүен ***таныұ,***

башҡорт милләтенең үҙ билдәләнешкә айырып алғыһыҙ хоҡуғын ***тормошҡа ашыра барып*** *һәм Башҡортостан территорияһындағы бөтә милләттәрҙең дә хоҡуҡтары тиңлеген* ***гарантиялап,***

хоҡуҡи дәүләт һәм демократик йәмғиәт төҙөү ***юлынан барып,***

уның бөтә бөгөнгө сиктәрендәге территорияһында Башҡортостандың дәүләт суверенитетын ***иғлан итә*** *һәм Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһын Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы (Башҡорт ССР-ы) — Башҡортостан тип* ***иғлан итә.***

Киләсәктә республиканың Конституцияһында, башҡа хоҡуҡи акттарында, дәүләт һәм йәмәғәт тормошонда республиканың был атамаһын уның рәсми исеме сифатында файҙаланырға.

1. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы территорияһындағы ерҙәр, ер аҫты, тәбиғи байлыҡтар, башҡа ресурстар, шулай уҡ бөтә экономик, фәнни-техник потенциал фәҡәт уның күп милләтле халҡының милке булып тора.

2. Башҡорт ССР-ының ССР Союзы, РСФСР, башҡа республикалар менән мөнәсәбәттәре Союз Договоры, РСФСР менән Договор, башҡа республика-ара договорҙар һәм килешеүҙәр менән билдәләнә.

ССР Союзы, РСФСР, башҡа республикалар менән договор мөнәсәбәттәренә инеп, Башҡорт ССР-ы үҙенең территорияһында, ССР Союзына һәм РСФСР-ға үҙ ирке менән биргән хоҡуҡтары сиктәренән тыш, дәүләт власының бөтә тулылығын үҙ ҡарамағында ҡалдыра.

3. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы уның территорияһында йәшәгән бөтә граждандарға, уларҙың ниндәй милләттән булыуына, социаль сығышына, политик инаныуҙарына, дингә мөнәсәбәтенә, башҡа айырмалыҡтарына ҡарамаҫтан, тиң хоҡуҡтар һәм азатлыҡ гарантиялай.

Башҡорт Совет Социалистик Республикаһында унда йәшәүсе бөтә халыҡтарҙың да телдәрен һәм культура байлыҡтарын һаҡлау, уларҙың тиң хоҡуҡлы йәшәүе һәм төрлө яҡлап үҫеүе тәьмин ителә.

4. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы Башҡортостандан ситтә йәшәгән башҡорт халҡының милли-мәҙәни ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә булышлыҡ итә.

5. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһында суверенитетты алыусы һәм дәүләт власы сығанағы булып уның күп милләтле халҡы тора. Халыҡтың тулы власлылығы Башҡорт ССР-ы Конституцияһы һәм закондары нигеҙендә туранан-тура, шулай уҡ халыҡ депутаттары Советтары аша тормошҡа ашырыла.

6. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының үҫеше, уның ССР Союзы, РСФСР, башҡа республикалар һәм дәүләттәр менән үҙ-ара мөнәсәбәттәре менән бәйле айырыуса мөһим мәсьәләләр Башҡорт ССР-ы Веръховный Советы, уның халҡы тикшереүенә сығарыла.

7. Башҡорт ССР-ында дәүләт власы уның закондар сығарыу, башҡарма һәм суд властарына айырылыуы принцибы буйынса ғәмәлгә ашырыла.

8. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының үҙенең закондар сығарыу системаһы бар. Башҡорт ССР-ы Конституцияһы һәм уның башҡа закондары, хоҡуҡи көйләнеүҙең ССР Союзы һәм РСФСР ҡарамағына республика тарафынан ирекле рәүештә бирелгән сфераларынан тыш, Башҡорт ССР-ының бөтә территорияһында өҫтөнлөккә эйә булып тора.

Башҡорт ССР-ының яңы Конституцияһын, Башҡорт ССР-ының башҡа закондарын һәм норматив акттарын ҡабул иткәнгә тиклем республика территорияһында Башҡорт АССР-ы, РСФСР, СССР-ҙың Башҡорт Совет Социалистик Республикаһы суверенитеты тураһында Декларацияға ҡаршы килмәгән закондары һәм закон акттары ғәмәлдә һанала.

9. Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының үҙ гербы, флагы һәм гимны була. Башҡорт ССР-ының баш ҡалаһы булып Өфө ҡалаһы тора.

10. Был Декларация ҡабул ителгән мәлдән алып ғәмәлгә инә һәм закон көсөнә эйә, Башҡорт ССР-ы Конституцияһын эшләү, республика закондар сығарыу системаһын үҫтереү, дәүләт структураларын яңыртыу, Башҡорт Совет Социалистик Республикаһының Союз Договорын, РСФСР, башҡа республикалар һәм дәүләттәр менән договорҙар әҙерләү һәм төҙөүҙә ҡатнашыуы өсөн нигеҙ булып тора.

Башҡорт ССР-ы Верховный Советы Председателе М. Рәхимов.

Өфө, 1990 йыл 11 октябрь.

Күпселек халыҡ теләктәренең (шул иҫәптән минең дә — өҫтәге мәҡәләмде ҡара!) кәүҙәләнеше ине был.

Буласаҡ беренсе президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың шул бөйөк ваҡиғаға бәйле, киләсәк өсөн бик мөһим телмәре лә бирелде гәзит битендә:

ТАРИХИ ВАҠИҒА

БССР Верховный Советы Председателенең йомғаҡлау һүҙе

Хөрмәтле халыҡ депутаттары, суверенлы Башҡортостан граждандары!

Әле генә һеҙҙең менән беҙ республикабыҙ тарихында яңы бит астыҡ, күп милләтле халыҡ тормошонда мөһим, ысын-ысындан тарихи аҙым яһаныҡ. Һеҙҙе, халыҡ депутаттарын, шулай уҡ республиканың бөтә халҡын ошо данлы ваҡиға менән ысын

күңелдән ҡотлайым! Башҡортостандың суверенлығын иғлан итеү — демократияның гәйәт ҙур ҡаҙанышы, күпселек халыҡтың уй-ынтылыштарының ысын кәүҙәләнеше. Беҙҙең халыҡ депутаттары әле генә уның мәнфәғәттәрен тулы асыҡлыҡ менән сағылдырҙы. Ышанам, балаларыбыҙ һәм ейәндәребеҙ беҙгә ошо юлды һайлап алыуыбыҙ өсөн рәхмәт уҡыр.

Хәҙер, Башҡорт ССР-ы Верховный Советы республика халҡының яҙмышы өсөн бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алғас, беҙ Декларацияның һәр һүҙе артында кешеләр, уларҙың көндәлек ихтыяждары һәм талаптары тураһында ысын хәстәрлек тороуын ғәмәлдә иҫбат итергә тейешбеҙ.

Һәр саҡ беҙҙең ерҙә унда йәшәүсе бөтә халыҡтарҙың ысын туғанлығы, бер-береңдең мәҙәниәтенә, теленә, йолаларына һәм ғөрөф-ғәҙәттәренә эскерһеҙ хөрмәт рухы хөкөм һөрөрөнә ышанам. Әйҙә, тыуған Башҡортостаныбыҙҙа тыныслыҡ, хеҙмәт, дуҫлыҡ һәм мөхәббәт кешелектең төп һиммәттәре булып торһон!

Дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларацияны бойомға ашыра барып, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республика байрағына, гербына һәм гимнына конкурс иғлан иткәс, мин дә әүҙем ҡатнаштым. Башҡорттоң борон-боронданғы дүрт юлға бүленешенә һәм һәр юлдың елберҙәгенең үҙ төҫөнөң дөйөм үҙәк дәүләт (Башҡортостан) күләмендә бергә тупланышына нигеҙләнгән дүрт (өҫтән — аҫҡа ҡарай тәртиптә) — һары, күк, ҡыҙыл, ҡара төҫтәрҙәге дәүләт байрағының һәм гербының проекттарын, тарихи нигеҙләп, «Йәшлек» гәзитендә ташҡа баҫтырып сығарҙым (тик эҙемтәһеҙ ҡалды). Ә төрлө авторҙар тарафынан тәҡдим ителгән дәүләт гимны текстарының хөкүмәт комиссияһы тарафынан йәмәғәтселек ҡарамағына һайлап алынған туғыҙы (авторҙары — Ш. Бикҡол, Х. Юлдашев, Рауил Шаммас, Т. Ҡарамышева, И. Кинйәбулатов, А. Игебаев, Й. Солтанов һ.б.) «Башҡортостан» гәзитенең 13 апрель, 17 май һандарында төрлө девиздар аҫтында баҫылып сыҡты, минеке ошолай ине:

Башҡортостан Гимны

Уралда яралдыҡ, Ҡояштан нур алдыҡ,
Ер-һыуын, һауаһын йән итеп беректек.
Башҡорттоң бишеге — Тәүтөйәк Уралым,
Баһадир илеңә бир берлек, бөйөклөк!

Ирекле, йөрәкле, мөстәҡил азат ил
Милләттең дәүләтен төҙөнө, яҙып бил.
Дуҫтарын ул ҡаҡмаҫ, яттарын буйлатмаҫ,
Көр ҡорға тупланып халыҡтар йәшәр гел!

Уралдың алтыны, йөрәктең ялҡыны
Төндәрҙе дөрләтер — сигенер һалҡыны.
Улдарын, ҡыҙҙарын бәхетле айбарлап

Дәүләтем ҡалҡынды, донъяға балҡыны!

Эй ерем кендеге, сал төйәк Уралым,
Йәшәһен егәрле ҡыҙҙарың, улдарың.
Аҡ күңел халҡыңды алҡыштһын талпынып
Быуаттан-быуатҡа Аҡбуҙат-толпарың!

Уралда яралдыҡ, Ҡояштан нур алдыҡ,
Ер-һыуын, һауаһын йән итеп беректек.
Бөркөттәр бишеге — Тәүтөйәк Уралым,
Баһадир иленә бир берлек, бөйөклөк!

Девиз: «**Манара».** 5 04.1991.

СССР Республикаларында ысын үҙ аллылыҡ өсөн халыҡтар хәрәкәте көсәйеп, элекке автономиялы республикалар ҙа үҙҙәренә союздаш республика статусын ныҡышмалы юллау һөҙөмтәһендә Мәскәүҙә СССР Президенты М.С. Горбачев етәкселегендә киңәйтелгән яңы СССР Килешеүенә республикаларҙың етәкселәре ҡул ҡуйырға тейешле 20 майға тиклем ун көнләп кенә ваҡыт ҡалғас, шуны ла көтмәйенсә (әллә хитлашып!), Президент М.С. Горбачев үҙенең ғаиләһе менән бергә йылы Ҡара диңгеҙ буйына ялға китте, йәнәһе баяғы 20 майға көрәйеп ҡайтып етергә тейеш икән...

Ләкин СССР-ҙы иҫке ҡиәфәтендә — урыҫ булмаған халыҡтарҙың ҡыҙыл төрмәһе рәүешендә һаҡлап ҡалдырырға теләүсе ҡарагруһ Кремль етәкселәренең бер төркөмө (әллә М.С. Горбачевтың үҙе менән һүҙ ҡуйышыпмы?) Мәскәүҙә сәйәсәттең ошо яңы йүнәлешенә ҡаршы ГКЧП тигән фетнә комитеты ойоштторҙо һәм СССР-ҙың һис бер үҙгәрешһеҙ әүәлге хәлендә ҡаласағын иғлан ҡылды, Мәскәү урамдарында ҡанлы бәрелештәр ҙә булып алды.

Фетнә усағы уңыш ҡаҙана алмайынса еңелгәс, уның менән бергә СССР исемле бөйөк держава ла, Коммунистар партияһының етмеш йыллыҡ диктатураһы ла мәңге әйләнеп ҡайтмаҫтай емерелгәс, анархияға тартым мөхит урынлашып, илдә йәмһеҙ болғаныштар башланды, һәр төрлө сәйәси әтрәгәләм хакимиәтте үҙ ҡулына төшөрөргә ынтылды. Бының шауҡымы күп милләтле Башҡортостанға ла ҡағылып, ямғырҙан һуң үрсеп баш ҡалҡытҡан ағыулы бәшмәктәрҙәй татар һәм урыҫ ҡарагруһсыларының һәр төрлө митинг һәм пикеттарҙан, матбуғат баҫмаларынан М.Ғ. Рәхимовҡа бысраҡ яуҙырыу сәйәси һөжүм рәүешен алды. Сетерекле шул шарттарҙа әҙиптәребеҙ үҙ һүҙен еткерҙе халыҡҡа:

Башҡортостан Яҙыусыларының дөйөм йыйылышы резолюцияһы

Үҙ аллы Башҡортостан яҙыусылары Юғары власть даирәһендә Конституцияға ҡаршы ойошторолған фетнәнең гәҙәттән тыш хәл буйынса дәүләт комитеты (ГКЧП — СССР-ҙың яңы Шартнамәһенә ҡул ҡуйҙыртмаҫ өсөн Мәскәүҙә ойошторолған баяғы фетнә тураһында һүҙ бара. — Й.С.) *тип аталған хунтаның эшен тәүге көнөнән үк киҫкен гәйепләне. Беҙ ысын күңелдән демократияны һәм хоҡуҡ тәртибен*

яҡлаусылар сафында булдыҡ. Ул көндәрҙә беҙҙең яҙыусыларҙан берәү ҙә фетнәселәрҙе яҡлап матбуғатта һәм рәсми органдарҙа сығыш яһаманы, фетнәселәргә бер ниндәй ҙә булышлыҡ итмәне. Совет халҡы алдында беҙҙең граждандыҡ намыҫыбыҙ керһеҙ һәм таҙа.

Илдә һәм республикала Конституцияға ҡаршы ойошторолған фетнәнән һуң тыуған сәйәси хәлде тикшергәндә, беҙ килеп тыуған киҫкен сәйәси хәлде хөсөтлөк ниәте менән ҡуҙғатыу һәм республикабыҙҙың етәкселегенә урынһыҙ һөжүм яһарға ынтылыусы ҡайһы бер төркөмдәрҙең маташыуҙарына иғтибар итмәй булдыра алмайбыҙ. Илдең юғары етәкселәренең гәйебен булып уҙған ваҡиғаларға һис тә ҡағылышы булмаған Башҡортостан етәкселәренә ауҙарыу тамырынан дөрөҫ түгел, тип иҫәпләйбеҙ.

Уҫал ниәттәге һәр төрлө лығырҙауҙарҙы кире ҡағып, беҙ шуны ла тәүәккәл белдерәбеҙ: Башҡорт ССР-ы Юғары Советының законлы һайланған Председателе М.Ғ. Рәхимов иптәшкә һәм республика хөкүмәтенә һөжүм итеү — Башҡортостандың үҙ аллылығына ябырылыуҙан башҡа бер нәмә лә түгел. Ә Башҡортостан яҙыусылары быны менән бер нисек тә килешә алмай. Ана шуға ла беҙ Башҡортостандың бөтә халыҡтарына мөрәжәғәт итәбеҙ: шундай ауыр мәлдә үҙегеҙҙең Юғары Советығыҙҙы яҡлағыҙ, айырым экстремистарҙың яуыз ҡотҡоһона бирелмәгеҙ.

Халҡыбыҙ ҡан ҡойоп яулап алған демократияны уға ҡаршы көстәрҙән һаҡларға һәм нығытырға кәрәк. Ысын демократия илдең һәр бер гражданины һәм уның халҡының хоҡуҡтарын, азатлыҡтарын ҡыҫыусы, мыҫҡыллаусы теләһә ниндәй хәрәкәттәр менән һыйыша алмай.

Беҙҙе шул хәл айырыуса борсоуға һала. Башҡортостандың үҙ аллылығына көрәш башлағанда милләт-ара ыҙғыштарға юл асыла. Уның ниндәй эҙемтәләргә килтергәнен илебеҙҙең башҡа төбәктәрендәге ҡанҡойоштар миҫалында асыҡ күрәбеҙ.

Ҡәҙерле туғандар, ҡан-ҡәрҙәштәр, илебеҙҙең барса милләттәре! Һеҙҙең йөрәгегеҙгә һәм фекерегеҙгә мөрәжәғәт итәбеҙ.

Үтә ҡатмарлы һәм көсөргәнешле ҡыҫҡыу көндәрҙә халыҡтарҙың быуаттан-быуатҡа күсә килгән, йөрәктәребеҙҙә тәрән тамыр алған дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ традицияларына тоғро ҡалығыҙ! Һәр төрлө ҡотҡоларға, провокацияларға отпор бирегеҙ!

Республикабыҙҙың демократик ҡаҙаныштарын һәм үҙ аллылығын берҙәм көс, берҙәм маҡсат менән һаҡлап ҡалайыҡ!

Резолюция БССР яҙыусыларының дөйөм йыйылышында ҡабул ителде.

1991 йылдың 27 авгусы. Өфө.

Мәскәүҙә иһә Б.Н. Ельцин етәкселегендә хакимиәтте үҙ ҡулына алған һәм Кремлгә кереп оялаған «демократ»тар (оло әҙип Л.-Х. Ғиләжев әйтмешләй, "дерьмократтар") өйөрө милли республикаларҙы бөтөрөргә, Рәсәйҙе тап батша самодержавиеһындағыса берәгәй һәм бүленмәҫ, тип иғлан ҡылырға йәғни Рәсәй империяһын яңыртырға аҫтыртын да, асыҡтан-асыҡ та һөмһөҙ ҡыланды, Башҡортостандағы ҡара көстәр ҙә уларға ҡушылды. Республикала килеп тыуған ҡатмарлы хәлдәр арҡаһында беҙҙең «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге башҡорт халҡы исеменән ярҙам һорап халыҡ-ара ойошмаларға өндәшергә мәжбүр булды:

«Урал» Башҡорт халыҡ үҙәгенең Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына мөрәжәғәте

...Үҙәк властарҙың оҙаҡ йылдар халыҡҡа ҡаршы милли сәйәсәт үткәреүе һөҙөмтәһендә юғалыуға дусар ителгән башҡорт милләтен һаҡлап алып ҡалыу һәм үҫтереү проблемалары БМО-ға мөрәжәғәт итергә этәрҙе беҙҙе... Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, РСФСР властары республиканың дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларацияны, шуның менән башҡорт халҡының үҙ дәүләтен төҙөүгә хоҡуғын танымай... Был осраҡта БМО таныған халыҡ-ара хоҡуҡтың төп нигеҙҙәре боҙола...

«Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге түбәндәгесә фекерләй:

1. Рәсәй — берәгәй дәүләт, тигән ялған төшөнсәнән БМО арынырға тейеш. Рәсәй әлегә тиклем урыҫ булмаған халыҡтарға ҡарата империя сәйәсәтен алып барыусы колониаль держава булып ҡала килә.

2. БМО колониаль илдәргә һәм халыҡтарға бойондороҡһоҙлоҡ биреү тураһындағы декларацияларын һәм пакттарын аҙағынаса тормошҡа ашырырға тейеш.

3. «Урал» БХҮ Рәсәйҙә йәшәгән үҙҙәренең этник территорияһынан ҡыҫырыҡлап сығарылған, күберәк һанлы халыҡтар яғынан ассимиляцияға дусар ителгән халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорт халҡының да, хәле тураһындағы мәсьәләне БМО-ның сираттағы ултырышына ҡуйыуҙы һорай.

Беҙ БМО ағзаларының изге ихтыярына, башҡорт халҡының зарын һәм ынтылыштарын аңларына ышанабыҙ.

21.09.1991.

Башыбыҙға төшкән ошо дөйөм аяныслы хәлдәр, булһа кәрәк, демократияны ҡыҫыусы урындағы чиновниктарҙы ла ныҡ албырғатып, ошоғаса ҡиң элемтә сараларына юлы ябыҡ шәхсән минең үҙемә лә шул 1991 йылдың 2 октябрендә республика телевидениеһының тура эфирынан зәңгәр экрандарға сығырға юл асты, форсаттан файҙаланып, түбәндәге телмәремде шаңғырттым:

Үҙ аллы Башҡортостан

Тыуған Башҡортостанымдың үҙ аллылығы тураһында уйланһам, Иҙелдән алып Иртышҡаса, Төньяҡ Боҙло океандан Каспий диңгеҙенәсә армытланмыш сал Уралымдай мәғрур ҡалҡынып ятҡан арыҫлан итеп күрәм баһадир илемде, күп милләтле Башҡортостаным халҡын. Әле әйтелгән географик киңлектәргә килгәндә, ул минең хыялым түгел, ә ни бары боронғо Башҡортостанымдың сиктәре генә аталды.

Башҡортостан... Сикһеҙ азатлыҡ һөйгән, ситлектәргә һыймай торған йән эйәһе арыҫлан, яраларын ялап ятыусы арыҫлан. Бына ул алғы аяҡтарына баҫты — Башҡортостан үҙ аллылығы (суверенитеты) иғлан итте. Кемдәрҙеңдер ҡулы аҫтында интегеп, дүртенсе сортлы халыҡ булып иҙелеүҙән ҡотолмаҡҡа яңы ынтылыш ине был. Сөнки бына дүрт йөҙ йыл инде күрәләтә өҙлөкһөҙ баҫып алыу, телебеҙҙән, иманыбыҙҙан, еребеҙҙән мәхрүм ҡалдыртыу дауам итә ҡанһыраған илемдә. Миңә ҡалһа, аннексия, аҫтыртын оккупация тип кенә атарға мөмкин был ҡәбәхәтлекте. Башҡортостан үҙ ирке менән Рәсәйгә ҡушылғандан һуң беренсе ун йыллыҡта уҡ башланды был аяныслы хәл. Ғифрит тәүҙә ҡушбаш сәмреғошло

Рәсәй империализмы булһа, һуңғы 73 йылда иһә урак-сүкешле Совет империализмына әйләнде, аҙаҡ килеп ҡыҙыл-зәңгәр-аҡ ҡораҡлы «демократик» (тырнаҡтар эсенә алам) Яңы Рәсәй империализмы башланды. Исемдәр һәм флагтар төрлө-төрлө, ә беҙҙе тотҡонлаған төрмә, бығауҙары — барыбер. Уға ҡалһа, «демократик» империализм тәүге икеһенән дә мәкерлерәк, ҡурҡынысыраҡ, минеңсә. Сөнки ул бөтә прогрессив донъя иғлан иткән кеше хоҡуҡтары яҡлы булып ҡылана, ана шул кеше хоҡуҡтарын ҡурсалау, йәғни ***айырым кеше*** хоҡуғын ***айырым милләт*** хоҡуғынан өҫтөн ҡуйыу һылтауы менән айырмаҡсы кешене үҙ милләтенән — беҙҙең кеүек урыҫ түгел милләттәрҙе бикләмәксе яңы заман империалистик төрмәгә. Милләт ул — бер бөтөн кәүҙә, ә кеше үҙ милләтенең ағзаһы ғына икәнлеген онотторторға самалай, күрәләтә күҙ быуа. Әйтәйек, мин, башҡорт, үҙ милләтемдең бер ағзаһы — йә аяҡ-ҡулы, йә күҙ-ҡолағы икән, ти. Дөйөм милләт кәүҙәһен төрмәлә ҡаңғыртып, һин, айырым кеше, камераңда тулыһынса үҙ аллыһың, тип әйтмәксе «демократ» империалистар. Ләкин таш ҡапсыҡ эсендәге аяҡ-ҡулдың буш булыуынан ни файҙа?!. Айырым кеше хоҡуғына өҫтөнлөк биреү политикаһы мәкерле — йән иҫәбе күп булған милләттәр файҙаһына ҡоролған. Әйтәйек, йөҙ илле миллионлы урыҫ милләте бынан бер нәмә лә юғалтмай, ә миллион ярым башҡорт милләте хатта үҙен дә юғалтасаҡ — үҙ теленән, иманынан ваз кисеп урыҫлашасаҡ йәки татарлашасаҡ. Ә татарҙы ла бит шул уҡ урыҫлашыу көтә (һуңынан). Белһен ине ошоно татар туғандар.

Башҡорт шулай үҙенең кем икәнлеген онотһа, Башҡортостан тулыһынса башҡа ҡулдарға күсәсәк, аҫтыртын аннексия — ҡануни хәлгә әүереләсәк. Бына кемдәр тирмәненә һыу ҡоя был ялған демократтар үткәргән ҡәһәрле политика. Ҡан-ҡәрҙәш татар туғандарҙы улар ҡотҡоһона бирелмәҫкә, Башҡортостан суверенитетын үҙҙәренеке күреп яҡларға саҡырам!

Эйе, былтыр ғына үҙ аллылыҡ иғлан иткән Башҡортостаным — яралы арыҫлан кеүек: бер йыл буйы башы осонда ҡара болоттар ҡуйыра, үҙ аллылыҡҡа ҡаршы көстәр ҡоторона. Улар араһында Өфөләге татар ижтимағи үҙәге тип аталыусы ғауғалы ойошманың бер устай яһилы ла бар: беҙгә ҡәрҙәш татар халҡы исеменән үҙ белдегендә һөрәнләп, Башҡортостан йөрәгенә бысаҡ ҡаҙарға шойҡанланып йөрөйҙәр. «Демократ» битлекле бәндәләрҙең милләттәре төрлөсә, әммә хыялдары бер: күп милләтле Башҡортостандың үҙ аллылығын боҙорға, дүрт миллионлы халҡын һаман әүәлгесә дүртенсе сортлы халыҡ итеп интектереп, түбәнһетеп, елек майын һурып ятырға. Хатта расизм сығанаҡлы, кешеләрҙе тән төҫө буйынса дүрт сортҡа бүлеп баһалаусы апартеид төйәге — Көньяҡ Африка Республикаһы кимәлендә лә фекер йөрөтә алмай бит беҙҙең ҡушбоғаҙ «демократ»тар: хатта «ҡара Африка»ла ла баяғы ылғый расистар дәүләте уртаһында ҡара тәнле һәм үҙ аллы негр дәүләте Лесото йәшәүенә юл ҡуйылһа, беҙҙекеләр Башҡортостан үҙ аллылығын бишегендә үк һуймаҡсы.

Яраларын ялаусы арыҫлан аяҡтарына баҫып мәғрур кирелә — үҙ баһаһын һәм ҡеүәтен тойоп эш итеүсе мыҡты көскә әйләнә. Арыҫлан менән шаярырға ярамай. Кәүҙәһен киреп торайған арыҫландай, күп милләтле Башҡортостан үҙ аллылығы ла ысын үҙ аллы дәүләт булып күрәйер. Бының өсөн башҡорт ерен

һөйөүсе һәр кешегә — башҡортҡа, урыҫҡа, татарға, сыуашҡа, мариға, йәһүдкә һәм немецҡа үҙен ҡыйыу арыҫлан итеп тойорға ла турайырға кәрәктер.

02.10.1991.

Президентлы Башҡортостан өсөн!

Шул уҡ ай аҙағында, 30 октябрҙә, БССР Верховный Советы депутаттарының ултырышында (Фрунзе урамы, 40) «Башҡортостан Президенты тураһында» закон проекты тикшерелеп, уның: «Президент башҡорт телен мотлаҡ белергә тейеш» тигән пункты, урыҫ һәм татар милләтле депутаттарҙың бер өлөшөнөң ҡаршылығына осрап, шау-шоу тыуҙырып, ҡабул ҡылынмай ҡалғайны. Был хәл шунда уҡ баш ҡала күләменә, унда ғына ла етмәһә, бөтә Башҡортостан Республикаһына йәшен тиҙлегендә таралып, башҡорт халҡының ҙур ризаһыҙлығын тыуҙырҙы, шырпы һыҙаһы ғына ҡалған дары мискәһенә әйләнде илебеҙ. Бөтә халҡыбыҙ депутаттар ултырышының дауамында берәгәйле һағайып, был сетерекле хәл яҡшы яҡҡа үҙгәреүен көттө. Эсендә йәне булған һәр кем, йөрәге бойорғанса һәм хәленән килгәнсә, депутаттарыбыҙға нисек тә булһа тәьҫир итергә тырышты. 1991 йылдың 31 октябрендә иртәнге 08.30. сәғәттә мин, телеграфҡа ашығып һәм ярһып барып, телеграмма һуҡтым:

Сессии Верховного Совета Башкирии.

Господа депутаты зяпятая голосуя против башкирского языка башкирского Президента Вы узакониваете геноцид точка Полуторамиллионная башкирская нация Вам этого не простит зяпятая вступит в новый этап национально-освободительной борьбы = ***Султанов,*** *писатель.*

Уфа — 104, Уфимское шоссе, 4, кв. 119, телефон 31-45-97.

Быңдай акциялар, моғайын, минән башҡа ла булғандыр.

Халыҡ вәкилдәре үҙҙәре лә һағайҙы һәм иҫтәрен йыйҙы, бына («Йәшлек» гәзитенең 1991 йыл 2 ноябрь һанынан):

Депутаттар хата төҙәтә

31 октябрҙә иртәнге сәғәт 9-ҙа ҡар яуып, үҙәккә үтерлек ел булыуына ҡарамаҫтан, Өфө йәштәре ижтимаги-сәйәси үҙәк бинаһы янына йыйылды. Сөнки бер көн алда республика Югары Советы сессияһында «Башҡортостан Президенты тураһында»ғы закондың «Президент башҡорт телен мотлаҡ белергә тейеш» тигән пунктын депутаттар ҡабул итмәне. Был Башҡортостандың президенты посына башҡорт милләтенән булмаган кешеләргә юл асасаҡ, башҡорт теленең дәүләт теле булыуын, уның киләсәк яҙмышын ҙур шик аҫтына ҡуясаҡ ине. Ләкин йәштәр үҙҙәрен милләттең ысын патриоттары итеп күрһәтте. Улар, Законга төҙәтмә ҡабул ителмәйенсә, депутаттарҙы бинанан сыгармаясаҡбыҙ, тигән талаптарын еткереү өсөн, үҙ вәкилдәрен сессия барган залга индереүгә өлгәштеләр. Күп тә үтмәй, ***Аҡ йорттоң ҡыйыгында эленеп торган Рәсәй флагы ҡолап төштө, ә уның***

урынында башҡорт милли байрағы елберҙәй башланы. *Көндөҙгө сәғәт 12-ләргә, ниһәйәт, депутат ағайҙарыбыҙ үҙҙәренең ҙур хаталарын аңланы, буғай. Халыҡ талап иткән төҙәтмә ҡабул ҡылынды. Йәштәр һәм БЙИ тағы ла бер тапҡыр Башҡортостан ирке өсөн көрәштә үҙҙәренең ышанысл*ы *сәйәси көс икәнен иҫбатланы.*

Д. Ислами, *БДУ студенты.*

Шуны ла хәтерләнем. Икенсе донъя һуғышы осоронда Афина Акрополендәге сал Парфенон һарайының түбәһенән фашист оккупанттарының флагын алып быраҡтырған Манолис Глезостың ҡаһарманлығын ҡабатлаусы был егет — Баймаҡ районы Темәс ауылында тыуып үҫкән студент Рәсүл Арыҫланов ине (аҙаҡ хөкөмгә тарттырып маташтылар).

31 октябрҙә БССР Верховный Советы депутаттары ҡабул иткән ошо «Башҡортостан Президенты тураһында»ғы ҡанунда республика президент һайлауҙары ошо уҡ йылдың 15 декабренә билдәләнгәйне һәм халҡыбыҙ, түҙемһеҙләнеп, шул көндө көтә ине. Ләкин...

Бәйге туҡтатылды!!!...

12 ноябрь көндө Ижтимағи-сәйәси үҙәк бинаһында Башҡортостан Юғары Советының туғыҙынсы сессияһы үҙ эшен дауам итте. Юғары Совет Рәйесе Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов депутаттар алдында белдереү менән сығыш яһаны. Ул республикалағы ауыр иҡтисади хәлде иҫәпкә алып, 15 декабргә билдәләнгән президент һайлау күп сығымдар (6 — 8 миллион һум) талап итәсәген әйтеп, уны кисектереп торорға тәҡдим итте.

Сәғәт ярым фекер алышҡандан һуң, депутаттар президент һайлауҙы билдәһеҙ ваҡытҡа күсереп тороуҙы хупланы.

!!!...

Беҙҙең депутаттар, ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫәһе урынға, тәүҙә киҫеп, шунан ете ҡат үлсәй, ахырыһы. Ете үк булмаһа ла, ике уйлауҙары хаҡ. Әле генә Президент тураһындағы законға өҫтәмә менән шулай булғайны, хәҙер килеп...

(«Йәшлек» гәзитенең 1991 йыл 14 ноябрь һанынан).

Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимовтың был ҡарарға килеүе, моғайын, "һыу аҫты ағыны"ның тәьҫиренән -- беҙ белгән һәм белмәгән объектив сәбәптәр арҡаһында булғандыр; бөтәһен дә төптән ныҡ уйлап, ете үлсәп бер киҫә торған яңы заман етәксебеҙ ундай оло тарихи эштең ашыҡ-бошоҡ эшләнергә тейеш түгеллеген беҙгә ҡарағанда ла яҡшыраҡ белгәндер, бәлки. Өҫтәүенә, ысынлап та, 6 — 8 миллион һум... республикалағы ҡыҙышҡан сәйәси мөхит... РСФСР Верховный Советының быйыл һайлауҙар үткәрмәҫкә, тигән ҡарары... Ләкин тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ, хәл иткес мөҙҙәттә йоҡлап ҡалма, тигән мәҡәл дә бар бит әле...

Президент һайлау мәсьәләһендәге тотҡарлыҡҡа бигерәк тә йәштәр сыҙай алманы; баш ҡала студенттарының иң әүҙем өлөшө, уҡыу аудиторияларынан ҡала урамдарына сыҡты ағылып, ҙур колонна Башҡорт Йәштәре Иттифағы

лидерҙарының етәкселегендә Салауат Юлаев һәйкәле торған изге Ҡоба тау яғына ыңғайланы:

Президентлы Башҡортостан өсөн!

Кисә көндөҙгө сәғәт 1-ҙә баш ҡала йәштәре, университет, институттар, гимназия, мәктәптәр уҡыусылары телеүҙәкте ҡамап алды. Маҡсат — Башҡортостан халҡына мөрәжәғәт менән телевизорҙан һәм радионан туранан-тура эфирға сығыу ине... Радио һөйләүҙән туҡтатылды. Телефондан милиция наряды саҡыртылды. Башҡортостан дәүләт телерадиокомпанияһының генераль директоры урынбаҫары Рәид Миңдебаев, баш редактор Сәләх Суҡбаев пикетсылар делегацияһы менән килешеү юлдарын эҙләп ҡараны. Әммә йәштәр телевизорҙан һәм радионан халыҡҡа мөрәжәғәт менән сығыш яһамай тороп, бинанан сыҡмаясағын белдерҙе.

Тиҙҙән сессиянан депутаттар килеп етте. Улар араһында радиотелекомпанияның генераль директоры Салауат Килдин, БССР журналистар союзы рәйесе Ризуан Хажиев, Юғары Совет комиссиялары рәйестәре Зөфәр Йәнекәйев менән Марат Мәһәҙиевтар бар ине. Йәштәр вәкилдәре менән тағы һөйләшеүҙәр алып барылды. Депутат ағайҙарға, әгәр сессия 15 декабрҙә Башҡортостан президентын һайлауҙарҙы үткәрергә тигән ҡарарына кире ҡайтһа, беҙ телеүҙәкте ҡамауҙы алабыҙ, тигән шарт еткерҙе.

Депутаттар, кәңәшләшеү өсөн, йәнә БССР Юғары Советы сессияһы барған Ижтимағи-сәйәси үҙәккә әйләнеп килде. Залдан БССР Юғары Советы Рәйесе М.Ғ. Рәхимовты саҡырып сығарҙылар. Шундай һөйләшеү булды:

— Мортаза Ғөбәйҙуллович, эштәр бик насар бит әле. Ҡала йәштәре баш күтәргән, улар телеүҙәкте ҡамап алған һәм эскә лә үтеп ингәндәр. Халыҡҡа мөрәжәғәт менән туранан-тура эфирға ынтылалар.

— Нимә теләй улар?

— Президент һайлауҙы кисектереүгә протест белдерәләр. Кире 15 декабргә билдәләүҙе талап итәләр.

— Юҡ, был мөмкин түгел...

Кире телеүҙәккә килгәндә делегаттар корпусына республиканың ДИК рәйесе Владимир Наумов, БДУ ректоры Рәкип Ғимаев ҡушылды.

...Ишек алдында йәштәр бер нисә ҡулса барлыҡҡа килтереп, эстәге иптәштәрен һаҡлай һәм мәсьәләнең ыңғай хәл ителешен түҙемһеҙлек менән көтә. Эстә милиция, ОМОН вәкилдәре, уларҙы үткәрмәй, ишек һағалай. Депутаттар һәм журналистар ҙур ҡыйынлыҡ менән генә фоегә үтеп, юғары күтәрелде. Түңәрәк өҫтәл артында йәштәр вәкилдәре менән әңгәмә, үҙ-ара тыныс кәңәшләшеү барҙы. Әңгәмә радиоға яҙылды. Меңәрләгән йәштәр тәкдим иткән мөрәжәғәттә бер ниндәй криминал табылманы. Ниһәйәт, радионан да, телевизорҙан да яңғырап, халыҡҡа ишеттерелде.

Йәштәр ниндәй талаптар менән сығыш яһаны һуң?

— Башҡортостанда 15 декабрҙә президент вазифаһына ирекле һәм демократик һайлауҙар уҙғарырға;

— Башҡортостандың тулы үҙ аллылығын тормошҡа ашырырға;

— Әгәр Юғары Совет 15 декабрҙә президент һайлауҙары үткәрмәһә, отставкаға китеүен талап итергә;

— Республика тормошонда бер ниндәй алға китеш булмауға, әлегә тиклем экономикала приватизация үткәрелмәүенә иң тәүҙә БССР Министрҙар Советы гәйепле. Уның Рәйесе М.П. Миргәзәмовтың отставкаға китеүен талап итергә;

— Республика территорияһындағы предприятиеларҙы кисекмәҫтән БССР юрисдикцияһына күсереүҙе талап итергә.

Зәйтүнә Ханова. *(«Йәшлек»).*

Гәзиттең шул уҡ һанында бер килке ватандаштарҙың көн үҙәгенә ҡағылышлы фекерҙәре бирелгән:

Хоҡуҡтарҙан ҡолаҡ ҡағабыҙ. *Президент һайлауҙы кисектереү — республиканы суверенлаштырыуҙың алға барышын туҡтатыу ул. Кисекмәҫтән президент һайлаусы башҡа республикаларҙан аҡыллыраҡмы беҙ? Юҡ, киреһенсә, хоҡуҡтарыбыҙ кәмейәсәк, приватизация ла (үтһә әле) бик оҙаҡҡа һуҙылып, киҫелеп, өҙөлөп, кәметелеп ғәмәлгә ашырыласаҡ. Бер ниндәй тәүәккәллеккә юл ҡуйылмаясаҡ. Президент булмағас, власть та булмай. Тимәк, республика халҡының тормошон да яҡшыртып булмай. Президент власына кисектергеһеҙ саралар ҡабул итеүсе хоҡуҡтар йөкмәтелә. Иң Юғары власть ул. Беҙ шунан ҡолаҡ ҡағабыҙ.* ***Дамир Вәлиев,*** *профессор.*

Киләсәккә юлдар ябыла. *Президент һайлауҙы кисектереү бөтөнләй дөрөҫ түгел. Бөгөнгө ҡатмарлы заманда бер генә эште лә, бигерәк тә сәйәсәттә, кисектерергә ярамай. Сөнки ваҡиғалар бөгөн — бер, иртәгә икенсе төрлө. Икмәк саботажы булды бит инде. Иртәгә унан да яманыраҡы булыуы ихтимал. Ә президент беҙгә барыбер кәрәк. Бөтә республикалар үҙ аллылыҡ алғанда, сәйәси һәм иҡтисади йәһәттән дә Рәсәй империяһының ҡоло булып ҡалырбыҙмы? Берҙән-бер һәм бик ҡыйыу юл — президент һайлау ине. Чечен республикаһындағы һымаҡ тәүәккәллек кәрәк ине беҙгә.*

Юғиһә бит РСФСР менән договор проектын ғына алайыҡ. Унда республикаларҙы губерналарға бүлеү кеүек бөтә нәмәгә юл асыла. Шул көйө ҡабул итһәк, башҡорт иленең бөтөүе лә мөмкин. Бөтөнләй киләсәкһеҙ ҡалабыҙ түгелме? Бөтә яҡлап юлдар ябыла. Ә беҙҙең халыҡ Кавказ халыҡтары һымаҡ күтәрелеп сыға торған түгел. ***Нәжибә Мәҡсүтова,*** *Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте рәйесе.*

Йәнә сигенеү. *Башҡортостан президентын һайлауҙы мотлаҡ үткәрергә кәрәк ине. Суверенлы дәүләткә, үҙ аллылыҡҡа юл ине был. Шундай мөһим сәйәси сараны кисектереү үҙәк хөкүмәт алдында тыңлаусан баш эйеүҙе аңлата. Сәбәптәрен иҡтисади хәлдең ауырлығы, һайлауҙар өсөн генә 6-8 миллион һум аҡса кәрәклеге, өҫтәүенә, РСФСР Юғары Советының һайлауҙар үткәрмәҫкә, тигән ҡарары менән аңлаттылар. Минеңсә, төп сәбәп бер генә — Башҡортостандың тағы Рәсәй хөкүмәте менән килешеүгә барыуы, суверенитетҡа алған курсынан йәнә сигенеүе.* ***Марат Ҡолшәрипов.*** *«Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге рәйесе.*

Эсендә йәне бар әҙәмдең бөтәһе ҡубынғанда, баш ҡалабыҙ иһә кейәһенә таяҡ тығып болғатылған умарта ҡорттарылай ҡайнашҡанда башҡорт әҙиптәре лә бер ситтә тороп ҡала алмай ине, әлбиттә. Яҙыусылар берлеге йортоноң залында ашығыс йыйылып, ағымдағы бик ҡатмарлы сәйәси хәлдәрҙе тикшерҙек; ҡыҙыу фекер алышҡандан һуң, түбәндәге документты ҡабул ҡылдыҡ:

Башҡортостан яҙыусыларының халыҡҡа МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Республикабыҙҙағы һуңғы айҙарҙағы киҫкен политик һәм экономик хәл-ваҡиғалар һәр кемдең йәнен шомландыра, күңелдәрҙе өмөтһөҙлөк биләй. Яҡшы, тыныс йәшәргә ышаныс юғала бара.

Һәм бөтә был социаль-экономик бәләләрҙең башында Верховный Совет, уның башҡарма органы булған Министрҙар Советы торғаны бер кемгә лә сер түгел.

Хәҙер килеп, Башҡортостанда үҙебеҙҙең беренсе президентты һайлар мәл еткәс, Верховный Совет һәм хөкүмәт үҙҙәренең власҡа талашыуын һәм етәкселек итеүҙә булдыҡһыҙлыҡтарын ҡаплау өсөн республикалағы социаль һәм экономик тотороҡһоҙлоҡ сәбәптәрен бары тик буласаҡ президент һайлауҙан ғына эҙләмәкселәр.

Президент һайлауҙы билдәһеҙ ваҡытҡа һуҙып (йәғни күсереп), йәнәһе, халыҡ теләген иҫәпкә алып, уны аслыҡтан һәм бөлгөнлөктән ҡотҡармаҡсылар.

Әммә был артҡа сигенеү — башҡорт халҡының үҙ аллылыҡ алыу юлына йәнә бер өр-яңы кәртә ҡороу менән бер. Ирекле, үҙ аллы дәүләт ҡоролошона дәғүә иткән Башҡортостан һаман да шул Россия империяһы ҡыҫымында күҙ-йөҙ һыуын түгеп, үҙ илендә үҙе фәҡир, килмешәк хәлендә йәшәргә мәжбүр.

Беҙ, халҡыбыҙҙың бөгөнгө — аяныс, киләсәкке өмөтһөҙ яҙмышы менән һис кенә лә килешергә теләмәгән яҙыусылар, ябай халыҡҡа, милләтте бөтөрөүгә йүнәлтелгән был сәйәси тартышты бөтә тулылығында аңлап һәм килеп тыуған ауыр хәлдән нисек тә ҡотолоу юлдарын эҙләп кәңәш ҡорғандан һуң, башҡорт халҡына түбәндәге өндәмә менән мөрәжәғәт итергә булдыҡ.

1. *Һәр милләттең үҙ билдәләнешкә хоҡуғы һәм шәхес азатлығы ихтыярына нигеҙләнеп, бөгөнгө Башҡортостан Верховный Советы һәм Министрҙар Советы алып барған бөтә был политиканың башҡорт милләтен тамырынан ҡоротоуға йүнәлдерелгәнлеген билдәләп, иң һуңғы инстанцияға — Берләшкән Милләттәр Ойошмаһына (БМО-ға) — хат яҙырға.*
2. *Башҡортостандың ысын мәғәнәһендәге үҙ аллылығы, йәғни яуланасаҡ суверенлығы республикала йәшәгән бүтән милләттәргә ҡаршы йүнәлдерелмәгәнлеген тағы бер тапҡыр билдәләргә. Башҡорттар үҙ ерҙәрендә һаман да — бынан бик күп йылдар элеккесә — бүтән халыҡ вәкилдәре менән дуҫлыҡ, татыулыҡ һәм тыныс һыйышып йәшәү ҡанундарына тоғро ҡалыуҙарын белдерә.*
3. *Башҡорт ССР-ы Верховный Советынан Башҡортостандың Президентын һайлауҙы үткәреүҙе билдәләү өсөн халыҡ депутаттарының сираттан тыш сессияһын йыйыуҙы талап итергә.*
4. *Ошо талап үтәлмәгән тәҡдирҙә декабрь айында Бөтә башҡорт халыҡ йыйынында әлеге Верховный Совет һәм хөкүмәткә бәрәбәр (альтернатив) булған үҙ Ваҡытлы хөкүмәтебеҙҙе — Башҡорт милли конгресын — төҙөргә.*

Башҡортостан яҙыусыларының 1991 йылдың 14 ноябрендәге йыйылышында ҡабул ителде.

Был ҡатмарлы һәм яуаплы осорҙа, билдәле, Марат Ҡолшәрипов етәкселегендәге беҙҙең «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге һәм Ринат Байымов

лидерлыҡ иткән Башҡорт Йәштәр Иттифағы ныҡ әүҙемлек күрһәтте, халыҡ уларға күҙ текәп йәшәне, тиһәк тә яҙыҡ булмаç.

16 — 17 ноябрҙә Ҡоролтай йортоноң ҙур залында (Фрунзе, 40) башҡорт йәштәренең ошо киҫкен проблемаларға арналған 2-се республика ҡоролтайы эшләне, унда бөтәһе 9 ҡала, 11 районнан, шулай уҡ Ҡазандан, Пермдән, Силәбенән, Новотроицкиҙан, Ырымбурҙан 239 делегат килгәйне. Саҡырылыусылар араһында мин фәҡирегеҙ ҙә бар ине. Ринат Байымовтың «Беҙ — тыныслыҡ һәм демократия һаҡсылары» тигән бик ҡыйыу докладынан һуң фекер алышыуҙа шундай уҡ ҡыйыу сығыштар байтаҡ булды. «Йәшлек» гәзитенең 1991 йыл 19 ноябрь һанында шулай уҡ мин фәҡирегеҙҙең дә трибунала уң ҡулын юғары сөйөп ебәреп һөйләп тороуы һүрәтләнгән (телмәр тексымды таба алманым — йә юғалған, йә яҙыуһыҙ ғына һөйләгәнмен, буғай). Республикалағы сәйәси хәлдәрҙең ҡырҡыулығы, етәксе даирәләрҙең эште оҙаҡҡа һуҙыуынан йәштәрҙең ризаһыҙлығы улар ҡабул ҡылырға тип әҙерләгән ҡарар проектының киҫкенлегендә сағыла:

Проект резолюции
II королтая Союза Башкирской Молодежи

Понимая сложность политической и социально-экономической ситуации в стране и в республике, сознавая всю ответственность возложенную сегодня на башкирскую молодежь II королтай СБМ постановляет:

1. Требовать от имени II королтая Союза Башкирской Молодежи Верховный Совет БССР на ближайшей сессии установить конкретную дату проведения выборов президента республики не позднее марта 1992 года. В противном случае начать кампанию по отзыву народного депутата БССР М.Г. Рахимова.

2. Предложить Верховному Совету БССР в качестве законодательной инициативы внести следующие поправки к законам о президенте и о выборах президента:

отменить возрастные ограничения кандидата в президенты,

снизить число подписей в поддержку кандидата в президенты до 25 тысяч.

Разработать Закон о гражданстве БССР, в котором для башкир, проживающихся вне территории совр. Башкортостана предусматривалось бы двойное гражданство, наделящие их избирательным правом.

3. Потребовать отставки Председателя Совета Министров БССР М.П. Миргазямова как ответственного за невыполнения требований Декларации о государственном суверенитете БССР в части перевода предприятий, находящихся на территории Башкирии, под ее юрисдикцию. Добиваться незамедлительного выполнения этой части Декларации.

4. Поручить группе юристов из числа членов СБМ подготовить документы в Прокуратуру БССР для возбуждения уголовного дела по факту незаконного подписания постановления о принятии Российского флага на территории суверенной республики Башкортостан.

5. Поручить группе юристов из числа членов СБМ подготовить документы в Прокуратуру БССР для возбуждения уголовного дела по факту избиения граждан бойцами Уфимского ОМОНа 13 ноября 1991 г. у здания телецентра.

6. Присоединиться к решению КМО БССР и выразить протест решению Верховному Совету БССР о назначении председателем комитета по делам молодежи Р. Фахретдинова без учета мнения всех молодежных организаций БССР. В связи с закулисными играми при решении кадровых вопросов, затрагивающих интересы молодежи, выразить недоверия Председателю СМ БССР М.П. Миргазямову, секретарю СДБМ А.Л. Мифтахову, председателю комиссии по делам молодежи ВС БССР М. Магадееву.

7. Приветствовать мужественный чеченский народ, выразить свое восхищение его героической борьбой за свободу и независимость. Направить делегацию СБМ Президенту Дудаеву с проектом Договора о сотрудничестве и взаимопомощи между СБМ и ОКЧН (Общенациональный Конгресс чеченского народа). Обьявить набор добровольцев для защиты чеченского народа в случае угрозы военного вмешательства во внутренние дела Чеченской республики...

«С корабля — на бал», тигәндәй, 19 ноябрҙә шул уҡ бинаның кесе генә бер залында (унда буфет урынлашҡан) «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге комитеты ла (өҫтәрәк әйтеүемсә, унда мин дә ағза инем) республикалағы көсөргәнешле ваҡиғаларҙы уртаға һалып тикшерергә, тейешле саралар билдәләргә йыйылды. Бөтә донъя башҡорттарын да берләштерәсәк, хакимиәттәр менән бөтөн халыҡ исеменән аяҡ терәп һөйләшә аласаҡ ҙур ойошма — Башҡорт милли Конгресын төҙөү идеяһы йөҙә ине һауала, ул Конгрестың ҡайһындайыраҡ буласағы тураһында ла һөйләшергә кәрәк ине. Шул темаға алдан уҡ әҙерләгән, машинканан 19 битлек докладымды уҡыным ҡорҙаштарға (әйтергә кәрәк, ошо оҙон тексты ла бүлдермәй тыңланылар):

Ялбарыуҙар ялҡытты

Һуңғы ярты мең йыллыҡтағы башҡорт сәйәсәт мөхитен ғөмүмән төп ике этапҡа бүлеп ҡарарға мөмкин. 1557 — 1920 йылдар арауығылыр беренсеһе. Шул 1557 йылда башҡорт халҡы үҙ мөстәҡиллеген һаҡлаған хәлдә ике-ара килешеү аша (хәҙергесә конфедерация тип атарлыҡ!) Рәсәй менән берләшкәндән һуң, ике тиҫтә йыл үтер-үтмәҫтән үк, килешеүҙең төп шарттарын мәкерле боҙа башлаған һәм артабан башҡорт халҡын ҡырып бөтөрөп башҡорт ерҙәренә тулыһынса хужа булыу өсөн асыҡтан-асыҡ та, аҫтыртын да аяуһыҙ геноцид үткәреүгә күскән Рәсәй ипмериализмына ҡаршы башҡорттарҙың үҙ-үҙҙәрен ҡурсалап ҡалыу өсөн ҡораллы изге һуғыштар теҙмәһе ул. 1920 йылда ялҡынлы революционер, коммунист Сөләймән Мырҙабулатов етәкселегендәге еңеү менән тамамланған һуңғы иң ҙур башҡорт восстаниеһы шул беренсе этаптың да тамамланышы ине — Мәскәү башҡорт халҡын рәхимһеҙ ҡырыусы ҡырғын әтрәттәренең хәрәкәтен туҡтатырға мәжбүр булды. Ләкин В.И. Ленин (унан һуң И.В. Сталин) етәкләгән совет-империалистик Рәсәй үҙәк хөкүмәте башҡорт халҡының ҡанлы ҡорбандар биреп яулаған ошо һуңғы ҡаҙанышын да юҡ итеү өсөн империализм

арсеналындағы бөтә булған сараларҙы ла еренә еткереп ҡулланды һәм бығаса донъялағы бер империалист-колонизатор ҙа булдыра алмаған уңыштарға ирешҭе, сөнки башҡорттарҙың тоҡомон ҡоротоу (геноцид) политикаһын ул батша хөкүмәте кеүек орҙоло-бәрҙеле түгел, ә фәнни яҡтан йәшертен ныҡ нигеҙләнгән комплекслы ысул (халыҡты ҡырыу, йәшәү сығанаҡтарынан һәм шарттарынан мәхрүм итеү, иленән ситкә һөрөү, эҙәрлекләү, идаралыҡ итеүҙән ситләтеү, ассимиляциялау, тарих-мәҙәниәтенән һәм теленән мәхрүм ҡылыу һ.б.ш. саралар бөтәһе бергә) менән йә асыҡтан-асыҡ, йә аҫтыртын өҙлөкһөҙ тормошҡа ашырҙы. Былар бөтәһе башҡорт тигән тоҡомдо ер йөҙөнән ҡырсып ташларға йүнәлтелгән, шуға ла геноцид атала. Бының өсөн үҙәк хөкүмәт һәм уның урындағы башҡарыусылары 1921 аслыҡ йылын бик оҫта файҙаланып, большевиктарса планлаштырылған алдағы биш йыллыҡта (1920 — 1926) ул саҡтағы бер миллион да йөҙ илле меңле башҡорт халҡын үҙенең төп республикаһында ни бары алты йөҙ илле меңгә ҡалдырыуға (биш йөҙ меңгә кәмегән) өлгәште. Ә шул большевиктар хакимиәтенә тиклем 1917 йылда башҡорт халҡы бер миллион да дүрт йөҙ мең йән тәшкил иткәнен иҫләһәк, ленинсы милли политика үткәрелгән шунан һуңғы һигеҙ йыл эсендә ете йөҙ меңләп башҡорт юҡҡа сыҡҡан. Бөтә милләттәрҙе лә сәскә аттыртыу шиғары аҫтында башҡорт халҡына ҡарата тайпылышһыҙ уҙғарылған геноцидтың был тиклем дә мул уңыш килтереүен донъя тарихы белмәй, әгәр ҙә ки Адольф Һитлер менән Пол Потты иҫәпкә алмаһаҡ... Шунан һуң да геноцид урағы йә асыҡтан-асыҡ, йә аҫтыртын уңыш урған бер-бер артлы осорҙар — ауылды коллективлаштырыу, егерме туғыҙынсы һәм утыҙ етенсе йыл ҡанлы репрессиялары, Бөйөк Ватан һуғышы (башҡорттарҙы милли ғәскәргә айырып утҡа тығыу), һуғыштан һуңғы юрый көсәйтелгән аслыҡ, һуңғы осор «шакировщина» йылдары... Һөҙөмтәлә ураҡ-сүкешле ҡыҙыл флаг елберҙәткән совет империализмының барлыҡ йылдарында ла башҡорт халҡы үҙенең баяғы 1917 йылдағы йән һанына (бер миллион да дүрт йөҙ мең) әйләнеп ҡайта алманы — бер туҡтауһыҙ бөтөүгә табан барҙы. Ә шул уҡ осорҙа был ерҙәге урыҫ халҡы һаны тәүге бер миллион да ике йөҙ меңдән — бер миллион да биш йөҙ илле меңгәсә, татар халҡы дүрт йөҙ илле меңдән — бер миллион да йөҙ илле меңгәсә артты (республика статистика идаралығы төҙөгән рәсми таблицаны[56] ҡарағыҙ). Нимә хаҡында һөйләй был? Бер нәмә хаҡында ғына. Башҡорт ерендә иң күпселек тәшкил иткән өс милләткә ҡарата дәүләт тарафынан ике төрлө демографик-милли политика үткәрелгән: ерҙең төп хужалары башҡорттарға — геноцид, килмешәк урыҫ һәм татарҙарға — ысынлап та хәстәрлекле сәскә аттыртыу. Ә ни өсөн былай һуң? Сөнки был дәүләт хакимиәте башында был ерҙең төп хужаһы башҡорттар түгел, ә баяғы урыҫтар һәм татарҙар йә иһә шуларҙың ҡурайына ғына бейеүсе ҡолойкантон башҡорттар ултыра бойороп. Бөтәһен дә урыҫ һәм татар файҙаһына хәл ҡыла. Сөнки Рәсәй империализмы шулай эшләтә быны — үҙ аллылыҡ һәм азатлыҡ һөйөүсе ғорур башҡорт милләтен бөтөрөп, Башҡортостанды тарҡатып, тупрағын мәңге урыҫ тупрағы ҡылырға. Ана шул юлда татарҙарҙы, боронғо ғәҙәтенсә, йомошсо («служилые татары») итеп алған да

[56] «Совет Башҡортостаны» гәзите, 1990 йылдың 25 октябре.

(башҡортто юҡҡа сығарғандан һуң татарға ла сират етерен алдан уҡ иҫәпләп, әлбиттә) башҡорттоң ҡолойкантондарын ғына яҡын юлатҡан...

Империализм ниңә шулай башҡортҡа нык ҡаныға, геноцид үткәрә һуң? Сөнки башҡорт ярты мең йыл буйына Рәсәй империализмына ҡолдарса буйһонманы, азатлығы, үҙ аллылығы өсөн ҡорал тотоп алышты, азатлыҡ яуында башҡаларға даими өлгө булды. Башҡорт тарихын яҡшы белгән академик М.В. Любавский былай тип әйтеп ҡалдырған: «*Из покоренных Россией народностей ни одна не потратила столько усилий и крови, чтобы отстоять свою страну, свои исконние права на занятые земли и угодья, свой национальный быт, как башкирская. В неравной борьбе она понесла большие количественные, материальные и несомненно духовные потери, но при всем том выявила свою этническую устойчивость, сумела сохранить многое из своего национального наследия и даже абсорбировать в себя значительную часть пришлых чужеродцев...*» (Археографический сборник: Из истории феодализма и капитализма в Башкирии. Өфө, 1971; 227-229-енсе биттәр). Бына ошоноң арҡаһында совет империализмы осоронда айырым «хәстәрлек»кә дусар ҡылынып ҡанһыратылды ла инде «тәкәббер» башҡорт халҡы. Ҡанһыратылыу менән бергә тоталитар системаның мәкерле өгөт-нәсихәтенә алданыу ҙа ҡасандыр ғорур башҡорт тоҡомон үҙ данлы тарихын хәтерләмәүсе манҡортлоҡҡа төшөрҙө: 1920 — 1991 йылдар арауығында ул үҙен рәхимһеҙ онтаған үлемесле тирмәнгә — геноцидҡа ҡаршы бер тапҡыр ҙа әүәлгеләй ҡулына ҡорал тотоп баш күтәрә алманы (был мөмкин дә түгел ине), ә шул тирмән таштарынан бер туҡтауһыҙ мәрхәмәт көтөп һәм ялбарып көн итте. Ҡасандырғы баш бирмәүсән ғорур тоҡом, үҙ өйөндә үҙе хужа булаһы урында, өйҙәштәренән типкеләнеп ялбарыусыға әйләнде. Ата-баба ғорурлығын тәрәнерәк йәшереп, ул һаман өмөт итте: өйҙәштәре үҙҙәренең кем өйҙәше икәнлеген шулай ҙа иҫтәренә төшөрөр, өй хужаһын күрәләтә типкеләүҙән оялыр, үҙҙәре һөмһөҙ биләп алған түр башынан уға ла урын бирер. Әммә башҡорт урыны тупһала ҡалды, Башҡортостандағы хатта турғай ҡунырлыҡ һәр сыбыҡ башҡорт милләтенә ҡаршы кәртә итеп ҡоролдо. Үҙәктәге үргә ҡарап ялбарыуҙар осорҡайы, бер ете генә түгел, етмеш ете йылға тартылды. «Үҙгәртеп ҡороу» тип шаулашҡан әлегекәй осор ҙа беҙгә үҙгәреш килтермәне. Һәр заманға ҡулайлаштырылған геноцид политикаһын башҡорт халҡы быуындарының башынан үткәреүҙе батша Рәсәй империализмы ҡулынан йәһәт совет империализмы, ә унан һуң, 1985 йылдан башлап, «Яңыртылған Рәсәй»ҙең шовинист-демократик империализмы дәррәү күтәреп алды. Исемдәре генә төрлө, әммә асылдары бер: шул уҡ батша Рәсәй империализмының өс төҫлө флагы, «берәгәй һәм бүленмәҫ Рәсәй» шиғары. Әйтерһең дә, заманалар уҙмаған — Рәсәйҙең ике башлы сәмреғошо халыҡтарҙың бәғерен талай һаман. Быларҙы ҡороһүҙ тимәгеҙ, бабаларҙың заманын һәм бөгөнгөнө шул ике осор документтары аша сағыштырып ҡарағыҙ.

1. 1730 г. — Записка о башкирском вопросе в Российской империи и о наилучших способах его разрешения, составленная казанским губернатором А.П. Волынским.

Уповаю я, что не совершенно известно о состоянии башкирского народа, которых мы внутри государства почитая себе подданными имеем; а по моему... мнению

надлежит оных держать и от них осторожность иметь паче всякого внешняго неприятеля по многим доказательствам. Первое, что они имеют махометанский закон и по закону своему, конечно, должны быть христианам неприятели, что уже к Российской империи неоднократно от них через бунты, а потом и самыми разорениями подданнным злоба их явно показана... Второе видно из сего, что народ их такою жестокою злобой исполнен, а время от времени непрестанно умножается и растет, так что через 20 прошедших лет не была прямых башкирцов больше 35 000, или по крайней мере 40 000, а ныне з беглецами стало больше 100 000... И хотя ныне видим, что башкирский народ является кроток, однако же не возможно сказать, чтоб оной был в совершенном и послушании, понеже беглых принимают, несмотря ни на какие указы, и податей не платят, но живут по своей воле, как сами хотят... И по моему б мнению всего лутче, естьли б каким политическим способом их оттуды убавить хотя до половины, а на протчих наложить сперва умеренные подати, а потом время от времени прибавлять... чтобы уже они никакими мерами рук своих противу поднять не могли... Напоследок, когда всевышний поможет оной богомерзкий народ под игу привести, мошно уже со временем будет и то учинить, чтоб ни один иноверец живущей тамо не имел у себя никаково ружья под смертною казнию и притом накрепко смотреть, чтоб уже ни откуды никакова ружья никто к ним не провозил под такою же смертною казнию...

Күрәһегеҙ: башҡорт халҡына ҡарата батша сатраптарының хөсөтөн совет сатраптары дәррәү бойомға ашырҙы...

2. Волынскийҙан һуң бер быуаттай үткәс, декабрист (хәҙергесә «демократ» була инде!..) П.И. Пестелдең Рәсәйҙе үҙгәртеп ҡороу программаһы «Русская правда»нан (АИФ, 45/91):

1. Решительно покорить все народы, живущие к северу от границы... между Россией и Персией, а равно и с Турцией... 2. Разделить все кавказские народы на два разряда: мирные и буйные. Первых оставить в их жилищах и дать им российское правление и устройство, а вторых — семейно переселить во внутренность России, раздробить их меньшими количествами по всем русским ведомостям. 3. Завести в кавказской земле русские селения и всем русским переселенцам раздать все земли, отнятых у прежних буйных жителей, дабы всем способом изгладить на Кавказе даже все признаки его обитателей и обратить сей край в спокойную и благоустроенную область русскую»...

Бына бөгөн шул Кавказда тау халыҡтарының үҙ аллылыҡ өсөн көрәше ялҡындай дөрләгәс, «демократик» битлекле бөгөнгө Рәсәй империализмы, тап баяғы декабрист Пестель һәм гөбөрнәтер Волынский бабалары ҡушҡанса, үткән ноябрь айында уларҙы «ҡыйыу баҫтырыу» өсөн шанлы ҡырғын әтрәттәрен ебәрҙе. Рәсәй вице-президенты генерал А. Руцкой әфәнденең Чечен Республикаһы президенты Ж. Дудаев менән һөйләшеүендә лә тап баяғы үткәндәргә тура күпер һалына: *«По свидетельству Д. Дудаева,* — тип белдерә АИФ, — *во время его переговоров с А. Руцким один из высокопоставленных чинов пытался объяснить новоиспеченному президенту: — России нужно, чтобы все были в составе, и все. — А наше право? — Вот придут две-три дивизии — и все ваше право»...* Сәйнеп ҡаптырыу кәрәкмәй был урында: Рәсәй империализмының һәр ҡайҙа ла, һәр ҡасан да

маҡсаты ла, алымы ла бер төрлө. Генерал А. Руцкой эргәһендәге ниндәйҙер бер чиновниктың һүҙҙәре өсөн «Яңыртылған демократик Рәсәй» хөкүмәте, парламенты яуаплы түгел, тип әйтерҙәр, бәлки. Улайһа, РСФСР Юғары Советының 1991 йылдың 11 октябрендә Р.И. Хасбулатов ҡул ҡуйған «РСФСР составындағы республикаларҙың башҡарма власть башлыҡтары тураһында» тигән ҡарарына күҙ йүгертәйек: *«1. Глава исполнительной власти (президент) республики в составе РСФСР входит в единую систему исполнительной власи РСФСР и вступает гарантом прав и свобод личности, соблюдения Конституции и законов республики в составе РСФСР, защищает суверенитет, экономические и политические интересы РСФСР и республики в составе РСФСР»,* — тип аҡ‑ҡара менән яҙылған унда. Урыҫ булмаған халыҡтарҙың үҙ билдәләнешкә изге хоҡуҡтарын көүҙәләндергән үҙ аллылыҡ тураһындағы декларациялары Рәсәй парламенты тарафынан күҙ асып йомғансы сүплеккә бырахтырылған, президенттары ҡурсаҡҡа — марионеткаларға әйләндерелгән... Әгәр ҙә ки РСФСР мәнфәғәттәре «РСФСР составындағы республика» мәнфәғәттәренә тап килмәһә һәм республика халҡы республика президентынан үҙенең мөҡәддәс мәнфәғәттәрен республика законы менән яҡлауҙы даулаһа? Үҙ республика халҡының мәнфәғәттәрен тоғро һаҡларға һайлаусылары алдында Ҡөрьән (Библия) тотоп ант иткән республика президенты баяғы А. Руцкой яранына Чеченстан президенты Дудаев биргән «Ә беҙҙең хоҡуҡ?» тигән һорауҙы ҡабырғаһы менән ҡуйһа?..

Ләкин «Яңыртылған демократик Рәсәй» Юғары Советының шул уҡ ҡарарында быға ла яуабы әҙер: *«...Действие актов главы исполнительной власти (президента) республики в составе РСФСР в случае их противоречия Конституции и законам РСФСР может быть приостановлено Президентом РСФСР»...* Ҡайһындай ҙа мәсхәрә: РСФСР-ҙың урыҫ булмаған миллионлаған халыҡтарын империяның өнһөҙ ҡолдары кимәленә ҡолатып иҙеү! Юғары Совет ҡарарында «РСФСР Президенты» баш хәреф менән яҙылып та, «республика президенты»н бәләкәй хәрефләп түбәнһетеү үҙе генә лә ни тора! Теләһәк, һеҙҙәрҙе беҙ тырнаҡ аҫтына ғына һалып һытабыҙ, тимәкселәр түгелме?!.

Бына шулай ул, ҡәҙерле уҙамандар... Үҙебеҙҙең ерлеккә ҡайтарып әйтһәк, империализм-йыртҡыстың маҡсаты бер: Башҡортостанды — башҡортһоҙ, өйҙө хужаһыҙ ҡалдырыу, ә хужаһыҙ өйҙө мөмкин йәнең тәләгәнсә таларға. Ленинсылар “юлбаҫар” тип атаған хатта Британия, Франция империализмдары ла үҙҙәре колония ҡылған Африка һәм Азия илдәренә мул тормошло цивилизация, ысын үҙ аллылыҡ ҡалдырып китһәләр, ленинсылар һәм хәҙерге «демократ»тар етәкләгән Рәсәй империализмы иһә үҙе иҙеп ҡанһыратҡан колония халыҡтарын йырып сыҡҡыһыҙ фәҡирлеккә һәм бөтөүгә дусар ҡылып, торор ерен, эсәр һыуын, һулар һауаһын үлемесле ағыуҙарға, радиоактивлы ташландыҡтарға ҡандырып, шулай ҙа ҡорбандарын һис кенә лә тырнаҡтарынан ысҡындырырға теләмәй, әле һаман аяҡ-ҡулдарын тышаулап тота бирә. Шуныһы ла фәһемле: империализмдың Африкалағы һуңғы реликты булып танылған раса айырыусы Көньяҡ Африка Республикаһы (КАР) заманында әгәр апартеид (халыҡтарҙы тән төҫөнә ҡарап дүрт сортҡа бүлеү) политикаһы уҙғарыу менән данланһа, планеталағы ҡоро ерҙең алтынан бер өлөшөнә тамырланған икенсе бер

реликт — СССР-Рәсәй империализмы — халыҡтарҙы уларҙың йән иҫәбенә һәм биләгән ерҙәренә ҡарап шулай уҡ дүрт сортҡа айырыу политикаһы менән шанланды. КАР инде хәҙер апартеид политикаһынан баш тарта, расистик тип танылған шул дәүләттең хатта ҡап-уртаһында уҡ ҡара тәнлеләрҙең Лесото дәүләте әллә ҡасандан үҙ аллы йәшәп килә. Ә «Яңыртылған демократик Рәсәй» империализмы иһә һаман үҙенең колонияларындағы халыҡтарҙы баяғы сорттарға айырып тота бирә, Рәсәй дәүләте уртаһында ла, ситендә лә үҙ аллы дәүләт ҡорорға һис кемдең хаҡы юҡ тип нығыта — хатта КАР расистары хәтле лә була алмайҙар бындағы аҡ йортло һәм аҡ тәнле «демократ»тар... Бына ниңә башҡорт милләтен яҡларлыҡ, уны юҡҡа сығыуҙан араларлыҡ һәр тәҡдимде, закон проектына һәм Конституцияға төҙәтмәне берҙәм ҡул күтәреү менән кире ҡағыусы Башҡортостан парламенты халыҡ депутаттарының һалҡын-кәнәғәт йөҙҙәренән тиртә мыҫҡыллы мәкер: *«Бахырсыҡ башҡорттар, күпме тыпырсынһағыҙ ҙа, яҙмышығыҙ беҙҙең ҡулда — бесәй тырнаҡтарынан ҡасан сысҡандың ысҡынғаны бар?!.»*

Донъялағы хатта иң бәләкәй, иң артта ҡалған тип иҫәпләнгән халыҡ та үҙ яҙмышын үҙе генә хәл ҡылырға хоҡуҡлы. Башҡа бер ниндәй халыҡ та күпселек тауыш ярҙамында уның яҙмышы менән уйнарға хаҡы юҡ — халыҡ-ара нығ танылған норма был. Хәйер, империализм өсөн кешелек нормаһы юҡ, үҙ ҡанунынан башҡа. Башҡортостанға исем биргән төп милләтте юҡҡа сығыуҙан ҡотҡарып ҡалыуҙың дәүләт программаһын төҙөтөргә тырышыу ҙа, уның мәнфәғәттәрен ҡурсалау өсөн Башҡортостан парламентында төп милләттән халыҡ депутатлығына илле процентлы квота булдырырға ынтылыу ҙа тәҡдимдәрҙең Юғары Совет лабиринттарында аҙаштырылып ҡалдырылыуы менән осланды. Хәйер, ул зарығып көтөлгән тәҡдимдәр халыҡ депутаттары табынына өлгәшкәндә лә шовинист-империалистик күпселектең ҡайһылай хәл ҡыласағы билдәле — баяғы шул егерменсе йылдан башлап башҡорт ерендә башҡорт яҙмышын башҡортҡа ярашлы хәл итерлек парламент та, хөкүмәт тә булғаны юҡ, был хәлендә һәм ул булмаясаҡ та...

Әлхасил, башҡорт бының барыһын да үҙенең ете ҡат тиреһенән үткәреп-татып аңланы, һабан менән ҡылыс һабына күнеккән көрәктәй ике ҡулын юғарыға ялбартып бәхет көтөү заманы тамамланғанлығын күрҙе — талап итеп, яулап алырға ваҡыт. Ярты мең йыллыҡ башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтенең яңы этабы башланды. Сал быуаттар буйына был Самарау иле Башҡортостан уны белгән бөтә халыҡтар өсөн дә ғәҙеллектең төйәге, матур өлгөһө булды, ә хәҙер килеп төп милләткә ҡылынған ғәҙелһеҙлекте башҡорт халҡы кисерә алмай артабан. Республика парламентын, республика етәкселәрен ғәҙеллеккә саҡырып ҡына ғәҙеллек юллап булмағанлығын тормош яҡшы күрһәтте. ***Ғәҙеллекте ҡотолғоһоҙ үҙенән-үҙе тәьмин итерлек дәүләт механизмын ҡорорға кәрәк.*** Ошо юлда бөтә башҡорт зыялыларын, хәрәкәттәрен бөгөн бергә туплағыс бер нәмә бар:

Үҙ ерендә үҙ аллы һәм азат йәшәргә хаҡлылығын дәғүәләгән милләтебеҙҙең берҙәм мөҡәддәс хәрәкәтен туплап кәүҙәләндереүсе, теләктәрен бойомға ашырыусы Башҡорт Милли Конгресын (БМК) иғлан итергә кәрәк бөтә башҡорт милләтенең декабрҙә саҡырыласаҡ сираттан тыш йыйынында.

Унда тағы түбәндәгеләр ҡабул ҡылынырға хаҡлы тигән дөйөм фекер бар (быны беренсе *проект* итеп ҡарарға мөмкин). Йәғни бына ҡайһылай булырға тейеш ул ойошмабыҙҙың нигеҙе:

БМК хәҙерге Юғары Советҡа һәм хөкүмәткә бәрәбәр (альтернатив) ваҡытлы хөкүмәт булып тора. БМК үҙен башҡа милләттәргә, халыҡтарға ҡаршы ҡуймай, ә ата-бабаның башҡа милләттәр менән дуҫ, һыйышып йәшәү традицияларына тоғролоҡ һаҡлай.

Бөтә башҡорт милләтенең ошо сираттан тыш йыйынында үҙенең хәҙерге сиктәре эсендәге БССР Башҡортостан иле артабан ***Башҡортостан Республикаһы*** *тип иғлан ителә, Башҡортостан Республикаһының үҙ аллылыҡ тураһындағы Декларацияһы ҡабул ҡылына.*

Башҡортостан Республикаһынан ситтә йәшәүсе башҡорттарға ла үҙ-үҙенән (автоматик рәүештә) Башҡортостан Республикаһы гражданлығы бирелә (бының өсөн улар паспортындағы «милләте башҡорт» тигән яҙыу ҙа етә), уларҙың гражданлыҡ хоҡуҡтарын, мәнфәғәттәрен ҡурсалау Башҡортостан Республикаһына йөкмәтелә. Бер юлы Башҡортостандың башҡа милләтле граждандарының да Башҡортостандан ситтәге үҙҙәренең милли дәүләттәренең граждандары булыу хоҡуғы танылы. Уларҙың һәм республикалағы йән иҫәбе аҙ һанлы башҡа милләт кешеләренең гражданлыҡ мәнфәғәттәрен ҡурсалауҙы Башҡортостанға исем биргән төп милләт үҙ бурысы итеп ала. Башҡорт халҡы ғүмер-баҡый үҙ еренә башҡа халыҡтарҙы үҙе кеүек күреп һыйындырғанлығын, мәрхәмәтен иҫкәртеп тороу кәрәкмәй — халыҡтарҙың үҙҙәренә, тарихҡа яҡшы мәғлүм.

Башҡортостан Республикаһы Президенты итеп Башҡортостан Республикаһының егерме биш йәштән кесе түгел һәм алтмыш йәштән өлкән булмаған, һайлау хоҡуғына эйә булған, Башҡортостан Республикаһы территорияһында кәмендә ун йыл йәшәгән, дәүләт (башҡорт) телен тулайым һәм камил белгән, шулай уҡ милләт-ара аралашыу (урыҫ, татар) телдәрен белгән граждены һайлана ала. Йәш яғына килгәндә, Салауат Юлаев менән Шәйхзада Бабич егерме ике һәм егерме дүрт йәштәрендә үк хәҙерге президенттар эшләй алмаҫлыҡ эштәрҙе башҡарып өлгөргән бит.

БМК башҡа дәүләттәрҙең (республикаларҙың) территорияларын дәғүәләмәй, ә Башҡортостан Республикаһы территорияһының бөтөнлөгөн, сиктәренең боҙолмауын бөтә саралар менән ҡурсаларға әҙер тороуын белдерә.

БМК Башҡортостан Республикаһын Рәсәйгә ҡаршы ҡуймай, ә, ата-бабалар традицияларына тоғролоҡ һаҡлап, Башҡортостан Республикаһы менән Рәсәй мәнфәғәттәре тигеҙ бизмәнләтелгән (сбалансированный) дәүләт-ара килешеү нигеҙендәге ҡаҡшамаҫ ***конфедератив*** *берлектә (союзда) туғандарса берегеп йәшәүҙе мөҡәддәс маҡсат итеп ҡуя.*

БМК Башҡортостан Республикаһына исем биргән төп (башҡорт) милләтен асыҡтан-асыҡ йәки аҫтыртын үткәрелеүсе геноцидтан ҡурсалау өсөн изге көрәшен был этапта тыныс демократик саралар менән алып бара. Тыныс демократик саралар үҙҙәрен аҡламаған хәлдә, көрәштең башҡа сараларын ҡулланыу хоҡуғын һаҡлай.

Башҡортостан Республикаһы — ***йәҙрә ҡоралһыҙ территория*** *тип иғлан ителә. Рәсәй менән конфедератив берлеккә (союзға) кергән хәлдә, конфедерацияның дөйөм именлеген тәьмин итеү өсөн Башҡортостан Республикаһының күпме һәм*

ниндәй өлөш керетеүе дәүләт-ара килешеүҙә билдәләнә. Башҡортостан Республикаһы территорияһындағы бөтә хәрби (ҡораллы) көстәр Башҡортостан Республикаһы граждандарынан ғына төҙөлә. Хәрби хеҙмәткә алынған Башҡортостан Республикаһы граждандары хәрби хеҙмәт ваҡытын Башҡортостан Республикаһы территорияһында ғына атҡара. Башҡортостан Республикаһындағы бөтә хәрби (ҡораллы) көстәр Башҡортостан Республикаһы Президентына ғына буйһона. Хәрби өлкәләге дөйөм конфедерация мәнфәғәттәре лә (һуғыш иғлан итеү һәм солох төҙөшөү) Башҡортостан Республикаһына ҡағылышлы осраҡтарҙа Башҡортостан Республикаһы Президенты һәм Юғары Советы аша бойомға ашырыла...

«Конгресс» — донъяға билдәле һүҙ, шул уҡ йыйын, ҡоролтай тимәк латинса. Сит илдәргә лә аңлайышлы итеп, ойошмабыҙҙы шулай атайыҡ. Эшләп килгән Юғары Совет парламенты төп милләт мәнфәғәттәрен һанға һуҡмағанлыҡтан, уға бәрәбәр (альтернатив) итеп эстондар ҙа, чечендар ҙа үҙ Милли Конгрестарын төҙөнө. Ул Конгрестарҙың ҡаҙанышы бөгөн асыҡ күҙ алдыбыҙҙа. Һиндостан Милли Конгресы үҙ ваҡытында Британия империализмын еңеп, Һиндостандың үҙ аллылығына ирешеҙ. Африка Милли Конгресы тиҫтәләгән йылдар буйынса ундағы апартеидҡа ҡаршы көрәш хәрәкәтен етәкләй, ул да КАР парламентына һәм хөкүмәтенә кереп ерегә башланы инде. Африка Милли Конгресын төҙөткән сәбәптәр беҙҙекенә оҡшашыраҡ, әммә башҡасараҡ та: унда төп золом — апартеид, ә беҙҙә иһә апартеидты ла үҙ эсенә алған йә асыҡтан-асыҡ, йә аҫтыртын геноцид. Шуға күрә Башҡорт Милли Конгресының төп маҡсаты — геноцидҡа ҡаршы был этапта политик саралар менән көрәш, уны юҡ итеү. Бының өсөн кәрәк:

1. Башҡортостандың ысын үҙ аллылығына өлгәшеү — Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәйҙең ике-ара килешеүе нигеҙендә конфедератив берлеккә (союзға) кереү. Рәсәй менән беҙ ике тапҡыр (1557 һәм 1919 йылдарҙа) дәүләт-ара килешеү менән берләштек, икеһендә лә конфедератив хоҡуҡтарға эйә булдыҡ (төп күрһәткесе — үҙебеҙҙең милли ғәскәргә хоҡуҡ). Ә хәҙерге Рәсәй хакимиәте тәҡдим ҡылған федератив берлектең төп асылы (унан сығыу хоҡуғы юҡлығы — «бергәгә һәм бүленмәҫ Рәсәй») бер кемгә лә ҡол булырға күнекмәгән ғорур башҡорт намыҫына ныҡ тейә. Ҡәбергә генә керәләр сыҡмаҫ өсөн. Башҡортостан Рәсәйҙе халыҡтарҙың ҡәберенә әйләндереүгә ҡаршы. Һәр хәлдә, башҡорт милләте ҡәбергә керергә теләмәй ҙә йыйынмай... Рәсәйгә берегеп йәшәү өлгөләрен ярты мең йыл буйына беҙ аҙ күрһәтмәнек, Рәсәй ҙә беҙҙе хөрмәт итергә һәм аңлап ышанырға тейеш.

БМК 1991 йылдың 1 ноябренәсә Башҡортостанда төйәкләнеп йәшәгән башҡа милләт кешеләренең билгән ер-һыуҙарын, мөлкәттәрен дәғүәләмәй. Ләкин ошо көндән башлап башҡа милләт кешеләренең Башҡортостанға күсенеп килеүҙәрен ҡәтғи тыя һәм туҡтата. 1991 йылдың 1 ноябренәсә Башҡортостанда төпләнеп йәшәгән ғаиләләрҙең Башҡортостандан ситтәге ағзаларының әйләнеп ҡайтыуы, шулай уҡ ситтән бында никахҡа кереүселәрҙең килеүе тыйылмай. Әгәр ошо ҡәтғи ҡарар боҙолһа, Башҡортостанға ситтән рөхсәтһеҙ күсенеп килеүселәрҙе кире ҡайтарып ебәреү өсөн башҡорт халҡы теләгән бер сараларҙы, шул иҫәптән көс ҡулланырға хаҡлы. Оҙайлы геноцид һөҙөмтәһендә үҙ республикаһында аҙсылыҡта ҡалған һәм бөтөп барған төп милләтте ҡайтанан тергеҙер өсөн, Башҡортостан Республикаһы төрлө сәбәптәр арҡаһында республиканан ситтә ҡалған, хәҙер әйләнеп ҡайтырға теләгән башҡорттарҙы

ҡайтарып алырға дәүләт ҡаҙнаһынан ярҙам күрһәтә. Республика халыҡ хужалығына үтә зарури белгестәрҙе генә, милләттәренә ҡарамай, уларҙың Башҡортостанда ҡалыу ваҡыты күрһәтелгән контракт менән ваҡытлыса килтерергә, бындай кәрәкле белгестәрҙе үҙебеҙҙә әҙерләүҙе тәьмин итергә.

Бөтә башҡорт милләтенең ошо сираттан тыш йыйынында Башҡорт Милли Конгресының закондар сығарыусы ***Юғары Шураһы (Советы)*** *һәм* ***Башҡарма Комитеты*** *һайлана (һәр ҡайһынының ун берәр кешенән). Бөтә Башҡортостан буйлап уларҙың урындарҙағы структуралары төҙөлә. БМК Юғары Шураһы менән Башҡарма Комитеты үҙҙәренең бөтә аппараты менән элекке КПСС рескомының бинаһына урынлаша. Урындарҙағы структуралары ундағы Советтарға, башҡармаларға (мэрияларға) кереп ерегә. Башҡортостан байлыҡтарында төп милләттең бәхәслекһеҙ ҙур өлөшө булғанлығын танып, БМК Юғары Шураһын һәм Башҡарма Комитетын уларҙың урындарҙағы структуралары менән бергә дәүләт бюджетынан финансылауҙы БССР — Башҡортостан Республикаһы үҙенә йөкмәй.*

2. БМК ошоғаса урыҫ һәм татар мәнфәғәттәрен генә ҡурсалаусы хәҙерге БССР Юғары Советын һәм Министрҙар Советын ҡыуып таратыуҙы (түңкәрелдереүҙе) үҙенең бурысы итеп ҡуймай, республика хакимиәтендә урыҫ һәм татар мәнфәғәттәре лә башҡорт мәнфәғәттәре менән тиңә-тиң ҡурсаланырға хаҡлы тип һанай. Фәҡәт шул ниәттән сығып, БМК хәҙергә БССР Юғары Советын һәм Министрҙар Советын башҡорт мәнфәғәттәрен дә башҡаларҙыҡына тиңә-тиң рәүештә ҡурсаларлыҡ итеп үҙгәртеп ҡороуҙы һәм шуларға кереп ерегеүҙе үҙенең бурысы итеп ҡуя. Башҡа халыҡтар өҫтөнән хакимлыҡ ҡылыу башҡорт тәбиғәтенә ярашлы түгел, һәм ул башҡаларҙы ла үҙ өҫтөнән хакимлыҡ ҡылдыртмаҫ өсөн көрәшә. Дәүләт алдындағы бөтә бәхәсле мәсьәләләр уртаҡ тел (консенсус) табып хәл ҡылынырға тейеш, ә быны тәьмин итер өсөн яҡшы көйләнгән хакимиәт механизмының булыуы шарт. Уртаҡ телгә (консенсусҡа) кемдең дә булһа «яҡшы ихтыяр»ы түгел, ә яҡшы ҡоролған хакимиәт механизмы үҙе автоматик рәүештә мәжбүр итеп килтерһен һәр яҡтарҙы. Шуны булдырыр өсөн, хәҙерге БССР Юғары Советы ике палаталы (Дөйөм палата — Общая палата һәм Төп милләт палатаһы — палата Коренной нации) итеп үҙгәртеп ҡорола. Дөйөм палатаны хәҙерге БССР Юғары Советының халыҡ депутаттары биләй. Төп милләт палатаһына халыҡ депутаттары бөтә башҡорт милләтенән (Башҡортостандан ситтә йәшәгән граждандарҙан да) һайлана һәм ул бөтә башҡорт милләте мәнфәғәттәрен ҡурсалай. Башҡортостандағы йән иҫәбе аҙ һанлы милләт кешеләренең араһынан Дөйөм палатала халыҡ депутаттары булмаған осраҡтарҙа ундай милләт кешеләренең мәнфәғәттәрен ҡурсалауҙы Төп милләт палатаһы йөкмәй. Палаталарҙың һәр ҡайһыһы тиң хоҡуҡҡа эйә, палаталарҙың һәр ҡайһыһы ыңғай тауыш биргәндә генә Юғары Совет эше законлы көс ала. Палаталарҙың береһе ҡаршы тауыш биргәндә бер нәмә лә ҡабул ителмәй. Бына ошо механизм һәммәһен дә ҡотолғоһоҙ уртаҡ телгә (консенсусҡа) килтерә, милләттәр араһындағы дуҫлыҡты, үҙ-ара һыйышып йәшәүҙе нығыта. Эшмәкәрлектәре һайлаусыларының мәнфәғәттәренә ҡаршы килгән халыҡ депутаттарын һайлаусылар кире ҡайтарып алыу, урындарына яңы депутаттар һайлау хоҡуғына эйә. Төп милләт палатаһына халыҡ депутаттары башҡорт халҡы уҡмашып йәшәгән (һәм тарихи башҡорт) ауылдарҙан, ҡалаларҙан һ.б. төйәктәрҙән һайлана. Башҡорт халҡы аралаш йәшәгән, йәки аҙ һанлы булған төйәктәрҙәге, шулай уҡ

Башҡортостандан ситтәге башҡорт халҡының Төп милләт палатаһына һайлау хоҡуғы һәр тәғәйен урынға ярашлы махсус ҡарар менән тәьмин ителә, ул ҡарарҙы, яңы төҙәтмәләр индерелгән «Һайлауҙар тураһындағы закон»ға ярашлы, БМК-ның, «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәгенең, Башҡорт халыҡ фирҡәһенең, Башҡорт Йәштәр Иттифағының йәки башҡа төрлө милли ойошмаларыбыҙҙың урындағы структуралары сығара һәм бойомға ашыра. Халыҡ депутаттарына яңы һайлауҙар үткәргәнгә тиклем, Төп милләт палатаһындағы уларҙың урынын БМК Юғары Шура ағзалары биләй. БМК Башҡарма Комитет ағзалары хәҙерге БССР Министрҙар Советына йә премьер-министр (йәки урынбаҫары), йә министрҙар (йәки урынбаҫарҙары) итеп еректерелә. БССР Юғары Советы һәм Министрҙар Советының урындарҙағы структураларына ла (Советтарға, башҡармаларға, мэрияларға) шул рәүешле еректереүҙәр үткәрелә. Район (ҡала) Советтарында ла хакимиәттең уртаҡ телле (консенсуслы) ике палаталылыҡ механизмы бойомға ашырыла: дөйөм ҡор (общий круг) һәм төп милләт ҡоро (круг коренной нации).

3. Сал тарихлы башҡорт халҡы оҙайлы геноцид һөҙөмтәһендә юҡҡа сығыу алдында тороуын танып, милләттең төп йәшәү ҡеүәттәренең береһе **милли тел** икәнлеген ныҡ иҫтә тотоп, Башҡортостан Республикаһына исем биргән төп халыҡтың милли телен һаҡлап ҡалыуҙы һәм башҡалар менән бер тиң сәскә аттыртыуҙы Башҡортостан ерендә йәшәгән бөтә халыҡтарҙың да кешелек бурысы һанап, Башҡортостанда йәшәгән башҡа халыҡтар вәкилдәренең һәр ҡайһыһының телен ҡурсалаусы үҙ дәүләттәре барлығын, ә бөтә башҡорт милләтенең телен ҡурсаларға тейешле бер генә дәүләт Башҡортостан Республикаһы икәнлеген яҡшы белеп, төп милләт (башҡорт) теленә дәүләт статусы бирергә. Шул уҡ ваҡытта барлыҡ башҡа телдәрҙең дә тоҡҡарлыҡһыҙ ҡулланылышын, үҫешен, сәскә атышын тәьмин итеү маҡсатында һәм Башҡортостан Республикаһында күпселек тәшкил иткән өс милләттең икеһе урыҫ һәм татар икәнлеген иҫтә тотоп, уларҙың телдәрен дәүләт телдәре статусында ҡурсалаусы үҙ дәүләттәре барлығын яҡшы белеп, урыҫ һәм татар телдәренә **милләт-ара аралашыу статусын** бирергә. Беҙҙең менән бер өйҙә йәшәгән урыҫ һәм татар туғандар шуны танырға тейеш: асыҡтан-асыҡ та, аҫтыртын да уҙғарыла килгән геноцид политикаһы беренсе сиратта башҡорт теленә балта сапты, беренсе сиратта башҡорт мәктәптәрен бөлдөрҙө. Көнсығыш Башҡортостандың тарихи башҡорт ауылдарында, ҡалаларындағы мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыу бөтөрөлөп, урыҫ телендә уҡытыуға күсерелһә, Көнбайыш Башҡортостанда иһә тарихи башҡорт ауылдарында, ҡалаларындағы мәктәптәрҙә башҡорт балалары Ҡазанда баҫылған дәреслектәрҙән татар телендә уҡытылды, шул арҡала өс-дүрт быуын балаларыбыҙ үҙ милли теленән, милләтенән ваз кистерелде, башҡорт милләтен тереләтә ике ҡабырғаһынан умырып алыу — урыҫ һәм татар ассимиляцияһы тантана итте. Дәүләт күләмендә үткәрелгән ошо ғәҙелһеҙлекте «ата-әсәләрҙең үҙҙәренең балаларын урыҫ телендә йәки татар телендә уҡытырға теләүе» тигән уйҙырма менән ҡаплата килделәр һаман. (Ә урыҫ телен йәки берәй сит ил телен уҡытыуҙы бер ҡасан да ата-әсәләрҙән һорап тормайҙар бит!...). Шуға күрә, бөтөп барған милләтте ҡабат тергеҙеү хаҡына, *тарихи башҡорт ауылдарындағы, ҡалаларындағы башҡорт балаларын мәктәптәрҙә башҡорт телендә уҡытыуҙы дәүләтебеҙ эҙмә-эҙлекле*

бойомға ашырырға тейеш, урыҫ һәм татар туғандар ҙа быға аяҡ салмаһын — беҙ ҙә уларға үҙ балаларын үҙ телдәрендә уҡытырға ҡамасаулыҡ ҡылмайбыҙ. Мәктәптәрҙә балаларҙы тарихи башҡорт ауылдарында (ҡалаларында) — башҡорт телендә, урыҫ ауылдарында (ҡалаларында) — урыҫ телендә, татар ауылдарында (ҡалаларында) — татар телендә уҡытырға, башҡа милләт кешеләре уҡмашып йәшәгән урындарҙа ла шул башҡа милләттәрҙең телдәрендә уҡытырға; балалар баҡсаларына ла шул ҡағиҙәне күсерергә. Милләттәр аралаш йәшәгән урындарҙа ата-әсәләрҙең балаларын үҙ телендә уҡытырға теләүҙәрен бойомға ашырырға. Балалары һанына ярашлы, шуларҙың телендә мәктәптәр (кластар), балалар баҡсалары (төркөмдәре) эшләүен булдырырға. Дәүләт ҡарамағындағыларҙан тыш, теләгән бер кешегә (төркөмгә) үҙ-үҙен финансылау нигеҙендә теләгән бер телдә законға ярашлы матбуғат, театр, башҡа мәҙәниәт усаҡтары асырға һәм файҙаланырға юл ҡуйырға. Үҙ аллы Башҡортостан телевидениеһында һәм радиоһында башҡорт, урыҫ, татар телдәрендәге өс канал, Башҡортостандағы башҡа милләттәр телдәрендәге дөйөм бер канал булдырырға, уларҙы дәүләт ҡаҙнаһынан финансыларға. Рәсми эш ҡағыҙҙарын дәүләт (башҡорт) телендә йөрөтөргә, ә урыҫтар йәки татарҙар уҡмашып йәшәгән урындарҙа, уларҙың үҙҙәренең консенсуслы ихтыярына бәйле, милләт-ара аралашыу (йә урыҫ, йә татар) телдәрендә яҙып атҡарырға, бындай осраҡтарҙа уларҙың өсөһө тиң бер көскә эйә тип танырға. Бөтә герблы мисәттәрҙе һәм штамптарҙы һ.б. билдәләрҙе бер ҡатарҙан дәүләт (башҡорт) телендә (ул татарҙарға ла яҡшы аңлайышлы) һәм милләт-ара аралашыуҙың урыҫ телендә (йәғни бер юлы ике телдә) башҡарырға. Юғары Совет һәм Хөкүмәт ҡарарҙары, рәсми белдереүҙәр һ.б. өс телдә лә (башҡорт, урыҫ, татар) баҫылып сыға. Ауыл, ҡала, урам, майҙан, ер-һыу исемдәре, биналарға ҡуйылған алтаҡталар, юл күрһәткестәр һ.б.ш. ҙа бер юлы дәүләт (башҡорт) һәм милләт-ара аралашыуҙың урыҫ телендә яҙыла. Пассажирҙар транспортына ла шул ҡағиҙә тарала.

4. БМК республикаға исем биргән төп (башҡорт) милләтен юҡҡа сығыуҙан ҡурсалап ҡалыуҙың дәүләт законы проектын әҙерләй, уны халыҡҡа сығарып фекер алыша ла шунан һуңғы камиллаштырылған тексын закон итеп ҡабул ҡылыр өсөн республиканың Юғары Советы алдына ҡуя, бөтә милләт ихтыярына һәм башҡа милләттәрҙең теләктәшлегенә таянып, мәжлестә уның тотҡарлыҡһыҙ ҡаралыуы, башҡорт милләтенең ихтыярына ярашлы ҡабул ителеүе өсөн көрәшә.

5. БМК Дәүләт флагын, гербын, гимнын булдырыуҙы хәҙергәсә уны тотҡарлаусылар ҡарамағынан алып, жюри комиссияларында тупланған тәҡдимдәрҙе тиҙләтеп тикшерә, үҙе хуплаған өлгөләрҙе Юғары Совет алдына ҡуя һәм уларҙың тотҡарлыҡһыҙ ҡаралыуы, ҡабул ителеүе өсөн көрәшә.

6. БМК Рәсәй менән конфедератив берлеккә керәсәк үҙ аллы Башҡортостан Республикаһының Конституция (Төп закон) проектын тиҙләтеп әҙерләй, уны халыҡҡа сығарып фекер алыша ла шунан һуңғы камиллаштырылған тексын Төп закон итеп ҡабул ҡылыр өсөн республиканың Юғары Советы алдына ҡуя һәм уның тотҡарлыҡһыҙ ҡаралыуы, ҡабул ителеүе өсөн көрәшә.

7. Өҫтә күрһәтелгән төп маҡсаттар бойомға ашырылғандан һуң, Башҡорт Милли Конгресы үҙ-үҙен тарата ла республиканың хакимиәт структураларына тәбиғи ерегеп һеңешә. Әгәр ҙә ки хәҙерге хакимиәт структуралары өҫтә күрһәтелгән төп маҡсаттарҙы бойомға ашырыу юлында ҡаршылыҡ күрһәтһә, БМК менән килешеп һәм

берегеп эшләүҙән баш тартһа, БМК башҡорт милләтенең геноцидтан үҙ-үҙен ҡурсалап ҡалыу ихтыярын бойомға ашырыу сараларының артабан ниндәй төрҙәрен ҡулланыу хоҡуғын һаҡлай үҙендә.

Бына ошо беренсе проект (башҡалары ла булыр).

Ҡәҙерле милләттәштәр, данлы ата-бабаларҙың ҡыҙҙары һәм улдары! Азатлыҡ һәм үҙ аллылыҡты бүләк итеп алмайҙар — яулап алалар!

Донъяның халыҡтары, һеҙгә өндәшәм: Ер шарында тороп ҡалған һуңғы империяның — Рәсәй империяһының бығауҙарын ҡыйратайыҡ!

Йәшәһен халыҡтар берҙәмлеге, башҡорт тәүәккәллеге! Башҡорт Милли Конгресын төҙөйөк, нығытайыҡ, дүрт миллионлы Башҡортостан халҡына ысын үҙ аллылыҡ, егерменсе быуат кешеләренә лайыҡлы ғәҙел, мул, имен тормош яулайыҡ!

19.11.1991. 16-00 сәғәт.

Башҡорт халыҡ Конгресын ойошторау

Өҫтә телгә алынған Башҡорт Милли Конгресын (БМК) төҙөү мәсьәләһен хәл итеү өсөн, 1991 йылдың 23 — 25 декабрендә беҙҙең «Урал» Башҡорт халыҡ үҙәгенең (рәйесе Марат Ҡолшәрипов) 6-нсы сираттан тыш ҡоролтайы эшләргә тейеш ине. Шуға тиклем мәсьәләне асыҡлауға йәнә лә шәхсәнә үҙ өлөшөмдө керетеп, 1 декабрҙә «Башҡорт Милли Конгресы һәм үҙ аллы Башҡортостан Республикаһы тураһында Декларация» проектын (машинканан 10 бит) эшләп өлгөрттөм һәм ул «Йәшлек» гәзитенең 1991 йыл 19 декабрь һанында «Ж. Солтан» имзаһы менән баҫылып сыҡты. Шул 6-нсы сираттан тыш ҡоролтайыбыҙҙың эшендә лә әүҙемән ҡатнашып, 24 декабрҙә унда трибунанан сығыш яһаным (тексы 19.12.1991 йыл яҙып әҙерләнгәйне):

Ғәмләнеү

1. Ер шарындағы иң һуңғы империализм, Рәсәй империализмы, ике башлы йыртҡыс сәмреғош асылындағы ҡылыҡтарын дауам итә бил ерҙә. Дөрөҫ, 1917 йылда большевиктар тип аталған яңы империалистар сәмреғоштоң Әндрәй флаглы батша тажын ураҡ-сүкешле ҡыҙыл флаг менән ҡаплабыраҡ ҡуйғайнылар еңелсә. 1991 йылдың 19 авгусында демократтар тигән шул уҡ империалистар ураҡ-сүкешле ҡыҙыл флаг өҫтөнән бөркәнеләр йәнә килеп ҡыҙыл-күк-аҡ төҫлө флаг. Флагтарҙың төҫтәре генә төрлө, ә улар айбарлаған таж, тажды кейгән ике башлы сәмреғош бер үк һаман, — Рәсәй империализмы. Рәсәй империализмы йәшәй, ул тере, урыҫ булмаған халыҡтарҙың бәғерҙәрен ҡанһыратып талауын дауам ҡыла. Бына инде СССР урынына СНГ төҙөлөп ята, Рәсәйҙең ҡыртышындағы үҙ аллылыҡ алған яңы дәүләттәрҙең: «Беҙ азат! Империализм емерелде!» тигән тантаналы ауаздары яңғырай. «Иртә саҡырған кәкүктең башы ауырта» тип иҫкәртеүсе генә юҡ. Миңә ҡалһа, ауыл дөрләп янған саҡта ауыл ситендәге үҙ өйөнөң түбәһенә бер күнәк һыу тотоп менеп ултырған бәндәләрҙе хәтерләтә бил ҡәүем. Эйе, СССР тип исемләнгән Рәсәй империализмының ҡармаҡ-тырнаҡтары

шөйлә бушаҡланды, элекке союзлы республикалар тип аталған колониялары ысҡынды. Ләкин был һуңғы империяның ҡыйралыуы түгел әле — фанфарҙар тартырға иртәрәк. Сөнки Рәсәй сәмреғошоноң ҡомһоҙ суҡыштары иҫән, ҡорос тәпәйҙәре ныҡ. Элекке автономиялы республикалар тип аталған урыҫ булмаған тиҫтәләгән милләттәрҙең бәғеренә тырнаҡтарын батырып, көрмәп тота ул һаман. Хәҙерге Рәсәй хакимиәтен тәшкил ҡылған демократтар, үҙҙәренең империалистик асылын йәшерер өсөн, халыҡ-ара документтарҙың кеше хоҡуғы хаҡындағы бер өлөшөн генә йолҡоп алып һәм ҡабартып күрһәтеп, шул уҡ документтарҙағы һәр бер халыҡтың үҙ билдәләнешкә хоҡуғы тураһындағы икенсе өлөшөн йәшерергә, танымаҫҡа һәм танытмаҫҡа тырыша, үҙ милләтенең азатлығын яҡлаусы урыҫ булмаған милләт вәкилдәрен милләтселектә ғәйепләй. Тәү ҡарауға дөрөҫ һымаҡ тойолған был хәйләкәр алым, әлбиттә, йән иҫәбе күп һанлы булған урыҫ милләтенә генә файҙалы, ә урыҫ булмаған йән иҫәбе аҙ һанлы милләттәр өсөн зыянлы: урыҫ булмаған милләт вәкилдәрен үҙ милләттәренең азатлығы өсөн көрәшеүҙән ваз кистертеп, яйлап ҡына уларҙы урыҫлаштырырға — урыҫ булмаған милләттәрҙе йотоп бөтөрөүгә йүнәлтелгән. Баҫым яһап йәнә шуны аңлатып киткем килә: Рәсәй империяһы шарттарында урыҫ менән сағыштырғанда йән иҫәбе күпкә-күпкә аҙыраҡ һанлы башҡа милләттәрҙең *кеше хоҡуҡтары* уларҙың *милли хоҡуҡтарынан* айырылғыһыҙ — ул фәҡәт милли азатлыҡ һәм үҙ билдәләнеш, мотлаҡ милли азатлыҡ һәм үҙ билдәләнеш арҡаһында ғына булыу мөмкинлеген күп быуатлыҡ көрәш тәжрибәбеҙҙән ныҡ беләбеҙ. *Башҡортостан Республикаһының ысын үҙ аллылығы арҡылы ғына — милләт азат, милләт азатлығы арҡылы ғына кеше азат буласаҡ, ә киреһенсә түгел!.* Бына ошо тәңгәлдә беҙҙе империалистар сепаратизмда ғәйепләй, «берәгәй һәм бүленмәҫ Рәсәй»ҙе тарҡатыусылар тип әрләй. Юҡ, әфәнделәр, Башҡортостан үҙен Рәсәй һәм башҡа дәүләттәр менән йәшәйешле тоташтырған ҡан тамырҙарын сабып өҙөргә йыйынмай, шулай уҡ ул бауҙарынан ысҡынған һауа шарындай күккә осоп та китә алмай. Башҡортостан менән Рәсәй араһындағы йән тиртеүсе ҡантамырҙарыбыҙ мәңге тоташ ҡаласаҡ һәм мәңге йәшәйеш биреп һулҡылдап торасаҡ. Бөтәбеҙҙең дә йәшәүе өсөн зарури ошо тоташлығыбыҙҙы заманаға ярашлы һаҡлап ҡалыуҙың юлы бер генә — *империализмдан ваз кисеү*, Башҡортостандың үҙ аллылығын таныу, Рәсәй менән ***конфедератив*** берлек аша килешеү. Беҙ үҙебеҙҙе Рәсәйҙең мәңгелек тотҡоно (заложниги) итеп түгел, ә тиң хоҡуҡлы партнеры итеп тойорға теләйбеҙ. Бына ошо элекке автономиялы республикаларға ла ысын үҙ аллылыҡ бирмәй тороп, уларға теләгән бер республика менән (шул иҫәптән Рәсәй республикаһы менән) конфедератив берлеккә ирешеү хоҡуғын бирмәй тороп, Ер шарындағы иң һуңғы империализм — Рәсәй империализмы ла йәшәүен туҡтатмаясаҡ. Империализм тигән яман рак иренең үрмәксе ауы ептәренең остары ғына киҫелде, үҙәк шеш бөтөн ҡалды. Ул яман шеш — бөгөнгө Башҡортостанда. Әгәр ошолай ҡалһа, ул ҡабат бөтә ҡитғаны көрмәйәсәк һәм аҙаҡ сиктә Рәсәйҙең үҙенең дә һәләкәте буласаҡ.

2. Башҡортостан менән, уның төп хужаһы булған башҡорт милләте менән эш иткәндә бер кем дә бер хаҡиҡәтте онотмаһын: Александр Македонский ҙа, Батый-хан да, Аҡһаҡ Тимер ҙә, Иван Грозный ҙа башҡортто ҡорал ярҙамында

яулап ала алманы, башҡорт менән фәҡәт килешеп йәшәргә генә мөмкин. Рәсәй менән беҙ, башҡорттар, ике тапҡыр (1557 һәм 1919 йылдарҙа) килешеү менән берләштек, килешеүҙең икенсеһендә иһә конфедеративлыҡҡа яҡын автономиялы хоҡуҡтарыбыҙ танылды (төп күрһәткесе — үҙебеҙҙең милли ғәскәргә хоҡуҡ). Был килешеүҙәрҙе беҙ түгел, ә Рәсәй империализмы мәкерле рәүештә боҙҙо; башҡорт генофондын тамам юҡ итеп, башҡорт ерҙәренә тулы хужа булыу өсөн, Башҡортостанда асыҡтан-асыҡ та, аҫтыртын да геноцид үткәрҙе, һуңғы етмеш өс йылда был комплекслы төҫ алды. Төрлө йылдарҙа халыҡ йән иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә таянып республиканың статистика идаралығы төҙөгән һәм 1990 йылдың 25 октябрендә «Совет Башҡортостаны» гәзитендә иғлан ҡылынған рәсми таблицанан асыҡ күренә геноцид һөҙөмтәһе: республикалағы йән иҫәбе иң күп һанлы өс халыҡтың икеһе — урыҫ менән татар — һөйөп-тәрбиәләп үҫтерелгән гөлдәрҙәй өҙлөкһөҙ сәскә атып, йән иҫәптәре күп тапҡырҙарға артҡан, ә өсөнсөһө, был ерҙең төп хужаһы башҡорт, салғы менән сапҡандай өҙлөкһөҙ кәмей, бөтөүгә табан бара (йән иҫәбебеҙ буйынса 1917 йылғы кимәлгә лә — бер миллион да дүрт йөҙ мең — әйләнеп ҡайта алмайбыҙ әле һаман). Граждандар һуғышы осоронда, мәҫәлән, башҡорт халҡының яртыһынан күп өлөшө — илле һигеҙ проценты ҡырып ташланды... Ошо геноцидты бөтөрмәй тороп, башҡорт генофондын ҡотҡарып та, тергеҙеп тә булмаясаҡ. ИншАлла, башҡорт был асы хаҡиҡәтте үҙенең ете ҡат тиреһендә татып аңланы, һабан менән ҡылыс һабына күнеккән көрәктәй ике ҡулын юғарыға ялбартып теләнселәү заманы тамамланғанлығын күрҙе — изге хоҡуҡтарыбыҙҙы талап итеп һәм даулап, тартып алырға ваҡыт. Элекке союзлы республикалар тип аталған колонияларын юғалтыуҙан үлем асыһы кисергән империализм инде элекке автономиялы республикаларҙы быуа башлаясаҡ, шуға тиклем Башҡорт Милли Конгресы (БМК) төҙөлөргә, БМК-ның төп маҡсаттарын, эш һәм көрәш программаһын асыҡ билдәләгән Декларация ҡабул ителергә, уның тирәһенә бөтөн халҡыбыҙ тупланып өлгөрөргә тейеш.

Был йәһәттән Диас Йәнтүриндең докладында тәҡдим ителгән Резолюция проекты һәм 19 декабрҙә «Йәшлек» гәзитендә “Ж. Әҙһәм” имзаһы менән баҫылған Декларация проекты бар. Йәнтүриндеке — тас бөгөнгө аяныс хәлебеҙҙән, йәғни Башҡортостан РСФСР субъекты булыуҙан сығып, шуны нигеҙ итеп алып эшләнгән. Икенсе проект иһә Башҡортостандың тулы үҙ аллылыҡ иғлан итеүен һәм, бер кемдең дә субъекты булмайынса, Рәсәй менән ***конфедератив*** берләшеүен күҙ уңында тота — бына ҡайҙа айырма. Делегаттар бына ошо икенең береһен һайлап алырға тейеш. Әгәр ҙә ки Рәсәй империяһының колониаль ҡоллоғонан ҡотолоу өсөн дәһшәтле көрәшкә бөгөндән үк әҙер булһаҡ, һуңғы документты (Декларацияны) ҡабул ҡылабыҙ ҙа киҫкен көрәш юлына баҫабыҙ. Ә инде әлегә әҙер түгелбеҙ тип һанаһаҡ, Йәнтүриндең бөтә үткер мөйөштәре киҫеп шымартылған баҫалҡы резолюцияһына туҡталабыҙ. Ул бөгөнгө хәйерһеҙ хәлебеҙҙән сығып — Рәсәй империяһының субъекты булыуыбыҙға тура килтереп яҙылған, шул йәһәттән ҡарағанда ғөмүмән ыҫпай ғына. Тик ҡурҡыныс бер нисә урыны бар, бына улар: 10-ынсы пунктта *«Окончательное формирование Башкирского Национального Конгресса производится после подбора кандидатур в его состав»* тип, Конгресс төҙөү ғәмәлдә билдәһеҙ киләсәк заманға ташлап

ҡалдырылған, был иһә эште һәләк итеү менән бер. 11-енсе пунктта *«Порядок формирования (избрания) Башкирского Национального Конгресса, его структура и другие организационнные вопросы определяются в уставе организации. Составление проекта Устава поручается правлению Башкирского народного центра «Урал»*, тип әйтелә, был иһә шул һәләк ителгән Конгресыбыҙҙың өҫтөнә ҡәбер тупрағы өйөү тигән һүҙ. Ҡурҡыныс пункттар былар — бәпесте ҡарында килеш быуыу менән бер, ғәфү итә күрегеҙ. Шуға ла резолюциянан был зарарлы урындарҙы алып ташлап, ҡәтғи ҡарар ҡылынһын: тап ошо йыйыныбыҙ — Башҡорт Милли Конгресы тип иғлан ителә (сөнки тап һеҙ үҙегеҙ — ошо делегаттар ул Конгресс!), ошонда уҡ Конгрестың закондар сығарыусы Юғары Шураһы һәм уның Рәйесе, шулай уҡ Башҡарма Комитеты һәм уның Рәйесе һайлана. Һайланғандың иртәгәһенә үк улар эшкә тотонһон, мотлаҡ шулай! Ҡабул ителгән Резолюция (йәки Декларация) Конгрестың Программаһы һәм Уставы тип һанала.

Үҙегеҙ күрәһегеҙ: беҙҙең кешеләрҙең утыҙ йәшкә тиклемгеләре генә ҡыйыу һәм фиҙәкәр; өлкәнерәктәре йә ялағай, йә ҡурҡаҡ. Шуға күрә Конгресс етәкселегенә йәштәрҙе күберәк ылыҡтырайыҡ, ә уның Юғары Шура Рәйесе итеп йәштәр лидеры Ренат Байымовты һайлау отошло булыр. Салауат Юлаев та, Әхмәтзәки Вәлидов та, Муса Мортазин да йәштәр булған даһа! Тимерҙе ҡыҙыуында һуғып ҡалайыҡ, юғиһә һуң буласаҡ. Ысын эшлекле Конгресс төҙөп, халыҡ көрәшен демократик үҙәндән юҫыҡлап ебәрмәһәк, Аллам һаҡлаһын, ул ҡораллы йүнәлеш алыуы ихтимал. Сикәләр нығ ҡыҙышҡан. Әгәр ошо әйтелгәндәрҙе Резолюцияға керетеп, ҡарар ҡабул итмәһәк, халыҡтың был VI сираттан тыш йыйыны бушҡа йыйылған, үҙ бурысын үтәмәгән булып сығыр. Бына ҡайҙа ул беҙгә аҫтыртын янаған төп ҡурҡыныс!..

Башҡортостанда йәшәгән бөтә башҡа халыҡтар асыҡ белергә тейеш: башҡорт милли хәрәкәте башҡа милләттәргә ҡаршы ҡуйылмай, ә улар менән килешеп тә берегеп йәшәргә теләй. Ләкин былдай килешеү һәм берегеү, баяғыса, башҡорттар өҫтөнән геноцид үткәреү шарттарында булыуы мөмкин түгел. Дүрт миллионлы егәрле Башҡортостан халҡына ғәҙел демократик нигеҙҙәге ысын үҙ аллы Башҡортостан Республикаһын төҙөп, хакимиәт структураларын тыныс юл менән үҙгәртеп ҡороу кәрәк: ошоғаса урыҫ менән татар мәнфәғәттәрен генә ҡурсалаусы хакимиәт ошо ерҙә төп милләт булған башҡорт мәнфәғәттәрен дә эҙмә-эҙлекле ҡурсалай алырлыҡ булһын. Ошо ғәҙеллекте, ниһәйәт, урынлаштырмай тороп, был ерҙәге бер кем дә бер ҡасан да үҙен ысынлап имен, бәхетле тоймаясаҡ. Үҙенең мөҡәддәс ерен, телен, динен, азат милли булмышын ҡурсалап ҡалыу өсөн башҡорт халҡы быуаттар буйына ғәзиз йәнен фида ҡылған, бынан һуң да аямаҫ. Гүзәлдәрҙән гүзәл башҡорт ерендә, йомарттарҙан йомарт башҡорт өйөндә түрҙән һыйлы урын алып, ерҙең-өйҙөң төп хужаһы башҡортто ҡаҡ тупһаға тибеп осороп ҡына еңел бәхет ҡаҙанырға, тыныслыҡ табырға тырышыусы өйҙәштәр нығ яңылыша: ерле төп халыҡты бәхетһеҙ итеү иҫәбенә был донъяла бер халыҡ та бәхетле булғаны юҡ. Башҡорт халҡын бәхетһеҙ ҡылған халыҡтарҙың үҙҙәре лә йөҙ тапҡыр бәхетһеҙ булыр — ел сәсеп дауыл урыр. Элекке автономиялы республикаларҙы колониализм ҡоллоғонда көрмәп

ҡалдырып бәхетле булырға тырышыусы Рәсәй-үгәй әсәй ҙә ошо хаҡта етди уйланһын ине.

Телмәремде делегаттар иғтибарлы тыңланы, ҡарыулашыусы булманы.

Йыйыныбыҙ барышындағы ғибрәтле бер ваҡиға.

Беҙҙең менән бер үк ваҡытта, ошо бер үк бинала, хатта беҙҙең ултырыш залының ишеге ҡаршыһында ҙур ишектәр артындағы ҙур залда сәйәси йәһәттән әлһерәмеш коммунистар өйөрө башҡорттарҙы һәм Башҡортостанды күрә алмаусы урыҫ шовинисы Никитин етәкселегендә, имеш, Башҡортостан компартияһын ойошторорға эркелеп йыйылышҡан. Тәнәфес ваҡытында фоеға сыҡһаҡ, ҡаршылағы шул ҙур ишектәр дөбөрҙәп асылып китте лә ҡаршыбыҙға Никитиндың ҡорҙаштар ағымы урғылды һәм, көтмәгәндә, шул Никитиндың ҡорҙашы булыу ҡыуанысынанмы, тулҡынланыуҙанмы, ике күҙе йылтыраған яҙыусы Рәшит Солтангәрәйев менән йөҙгә-йөҙ осраштыҡ. Ҡәҙимге тупаҫ ғәҙәтенсә:

— Һин дә килдеңме ни? — тине Солтангәрәйев, үҙе мөкиббән ҡатнашҡан коммунистик ҡорҙо күҙ уңында тотоп.

— Килдем шул. Тик минең ҡор был яҡта. Ә һин мәйеткә артҡы яғынан тын өрөп, Никитиндың малайкаһы булып йөрөйһөңмө?

— Партия бер Никитиндан ғына тормай, партия беҙгә бөтәһен дә бирҙе һәм бирәсәк. Ә һин һаман, Мостай ағайым әйтмешләй, тар ҡарашлы милләтселегеңдән арына алмайһың икән! — Ҡырт боролоп, коммунист ҡорҙаштары араһына тәмәке тартырға китте. Ошоларҙы ишетеп торған берәү, эргәмә килеп:

— Был Рәшит «Башҡортостан» гәзитендәге мәҡәләһендә лә: «Оло ағай» (йәғни урыҫ етәкселеге. — *Й.С.*) беҙгә ҡарағанда аҡыллыраҡ. Элеккесә уны тыңлап ҡына йәшәһәк, арыу булыр», — тиеберәк ысҡындырҙы бит. Ҡәләмдәшеңдең ошондай ҡылыҡтарына нисегерәк ҡарайһың? — тигәс, иҫем китмәй яуапланым:

— Бик тәбиғи ҡарайым. Башҡорттоң Р.С. кеүектәре, ауыҙын күпертеп, “өлкән ағай” күтен ялаһын, башҡалары -- башҡа тишектәрен... Башҡортта ла шундай хеҙмәт бүленеше булырға тейеш тәһә!

Һуңыраҡ быны ҡуйын дәфтәремә теркәп ҡуйғанмын...

Сираттан тыш 6-нсы Бөтөн Башҡорт ҡоролтайы, үҙ бурысын хәленән килгәнсә башҡарып, әммә мин уйлағанса Башҡорт *Милли* түгел, ә Д. Яндурин теләгәнсә Башҡорт *Халыҡ* Конгресын ойоштороу тураһында ҡарар, уға аңлатма һәм уның Уставын ҡабул итте, етәкселек органдарын һайланы (председателе Вәлитов Н.Х.). Ойошмабыҙ байтаҡ ҡына йәшәне һәм эшләне. Әммә ҡыйыулыҡ етмәүҙән, объектив һәм субъектив сәбәптәр арҡаһында Конгресс үҙенең төп бурысын бойомға ашыра алманы. Ләкин 1995 йылда ойошасаҡ Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайына яҡшы ойотҡо булды ул һәм уны әҙерләне. Ғәмәлдә был ойошмабыҙ ана шул тулы ҡанлы Бөтөн донъя башҡорттары Ҡоролтайы рәүешенә кереп ныҒынды, әммә үткер мөйөштәре бысып ташланған, шымартылған ҡоролтай ине...

6-нсы ҡоролтай тамамланғандың кисенә үк, 25 декабрҙә, мине телеүҙәккә саҡырҙылар һәм зәңгәр экран тамашасыларына тәьҫораттарым менән уртаҡлашыуҙы һоранылар. Аяғөҫтө, тигәндәй, ашыҡ-бошоҡ, бер битлек кенә текст әҙерләп барҙым (бөгөнгө көн өсөн, бәлки, үтә киҫкен булһа ла, ошоға тиклемге һәр осраҡтағыса, нисек бар – шулай күсерәм, сөнки тарих яһалмалыҡты кисермәй):

Тарихи бер көн

Донъя күләмендәге ҙур ваҡиғалар кисерҙек.

Бөтәһе бер көн дауамына кереп һыйышты: 1. Рәсәйҙең урыҫ булмаған халыҡтар бәғерен талаусы ике башлы сәмреғошон 1917 йылдан биреле ураҡ-сүкешле ҡыҙыл флаг менән ҡаплап ҡитғабыҙҙа хакимлыҡ ҡылған СССР тигән империализм дөмөктө — СССР Президенты президентлығынан ваз кисте. 2. Өс төҫлө ала-ҡола флаг елберҙәткән «Яңы Рәсәй» шул уҡ ике башлы сәмреғошон үҙенең дәүләт гербы ҡылып, баяғы СССР урынына үҙен «Рәсәй Федерацияһы — Рәсәй» тип иғлан ҡылды — РСФСР йән бирҙе. Тимәк, Рәсәй империализмы инде үҙ лексиконындағы аҡтыҡҡы «республика» һүҙен дә аяҡ аҫтына һалып тапаны, демократияға төкөрҙө. Бына тап ошо хәтәр мәлдә РСФСР мәйете менән ҡуша уның элекке автономиялы республикаларының да гүргә күмелеү ҡурҡынысы ап-асыҡ төҫмөрләнде. 3. Тап ана шул көндә һәм сәғәттәрҙә башҡорт халҡы үҙенең 6-нсы сираттан тыш йыйынында Башҡорт халыҡ Конгресын төҙөп, тарихи Декларация ҡабул итеп, дүрт йөҙ ҙә утыҙ дүрт йылға һуҙылған колониализм ҡоллоғон бөтөрөргә, төрлө телдәрҙә һөйләшеүсе дүрт миллион егәрле халыҡлы азат Башҡортостан дәүләтен донъя аренаһына сығарырға тәүәккәллеген белдерҙе (ниндәй ҙә зирәклек!). Ана шул сикһеҙ көсөргәнешле мәлдәрҙә мин залдың берҙәм тәүәккәллеген күреп, халҡым манҡорттарҙан ғына тормағанын аңланым. Делегаттар мандаттарын юғары сөйгән һайын, Уралымдың бөйөк фиҙакәрҙәре Алдар батыр Исәкәйев, Сурағол Миңлебаев, Салауат Юлаев, Әхмәтзәки Вәлидов, Муса Мортазин һәм Сөләймән Мырҙабулатовтарҙың тоҡомдары бит былар — дүрт миллионлы Башҡортостаным халыҡтарының мул тормошло азатлығын юллаған бөгөнгөләр, тип ғорурланып уйланым. Ҡайһындай ҙа айырма: бер үк көндә күк ҡабаҡтары асылған тарихи юлда Мәскәү үҙенең империалистик асылына кире ҡайтып, бер аҙым артҡа сикһә, шул колониализм ҡоллоғонан йолоноусы Өфө иһә прогресс юлынан бер аҙым алға китте. Аллаһы Тәғәләнең бөйөк ишараһы, амин тигән изге сәғәтелер был!

Ғәжәп: зәңгәр экрандан аҙағынаса бүлдертмәй ҙә киҫтертмәй һөйләттеләр! Заманалар икенсе шул.

Ямантауға ҡағылған яман шына — Межгорье тураһында

Исемкәйе «яман» булһа ла, үҙе гүзәлдәрҙән-гүзәл Ямантауыбыҙ аҫтына һәм өҫтөнә йәшертен төҙөлгән шомло ҡала Межгорьеның тәғәйенләнеше

тураһындағы ҡурҡыныс хәбәрҙәр халыҡты, бигерәк тә уның зыялыларын, ныҡ борсоуға һала ине. Башҡорт йәштәренең әйтеп үтелгән 2-нсе ҡоролтайында ла ныҡ һиҙелде был борсолоу. БССР Верховный Советы Рәйесе М.Ғ. Рәхимов шунда трибунаға сығып һөйләп торғанда мин, әлеге лә баяғы— түҙә алмай, ырғып тороп, залға ҡуйылған микрофондан Ямантауыбыҙ аҫтындағы шул яманлыҡҡа бәйле киҫкен һорау биреп бүлдерҙем, һүҙемдең асылы: "Ул Межгорье радиациялы боеголовкалар келәтеме, ҡәберлегеме?" -- хаҡында ине. Рәхимов, телмәрен өҙөп, миңә күҙен аҡайтып ҡараны ла, йүнле яуап бирә алмай, ыҡ-мыҡ итеп, албырғаныбыраҡ ҡалды. Шул саҡ залдағы икенсе бер микрофондан Яҙыусылар берлеге рәйесе Динис Бүләковтың «махмур» (похмелье) шауҡымынан ғырылдауыҡ ҡалын тауышы бөтә залды күмеп мине тыйылырға өндәне, түрәгә бирелгән мөһим һорауым яуапһыҙ ятып ҡалды. Ләкин миндә проблеманы йәмғиәтебеҙҙең киң ҡатламына еткереү теләге көсәйеп, шул көндәрҙә үк «Йәшлек» гәзитенә мәҡәлә яҙып бирҙем (бүлек мөдире З. Ханова материалды бик мөһим тип тапһа ла һәм баҫырға вәғәҙә бирһә лә, миңә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында баҫылып сыҡмай ҡалды ул). Инде архивымдан алып килтерәм:

Әжәл геттоһымы?

Ярты ҡитғаны биләп алған Рәсәй империяһының урыҫ булмаған халыҡтарҙы елеген һурып ҡол ҡылыу юлында башҡорт халҡы быуаттар буйына ҡарышты, империя аждаһаһының тамағына арҡыры һөйәктәй торҙо. Шул һөйәкте сәйнәп ташлап ҡотолоу өсөн, быуат-быуат ни золомдар ҡылынманы ла башҡорт ҡандары шарлап күпме аҡманы! Геноцидтың һуңғы ҡаҙанышы итеп аҫаба-башҡорт ерҙәренең үлемесле радиоактив сүплеккә, химия «душегубка»һына әйләндерелеүен атаһаҡ та хата булмаҫ. Был төп халыҡ тамырына балта сапты, башҡорт генофондын упҡын ҡырыйына терәне. Әжәл салғыһын һәр яҡтан да тиҙләтеп, упҡынға тиҙерәк тибеп ауҙарыу өсөн, Ҡоншаҡ, Мейәстең эсер һыу-йылға баштарына, сөмөлйөм күлдәренә миллионлаған тонна радиоактивлы әжәл сүбе түгелде, көньяҡлап Тоцк полигонында атом-үләт шартлатылып, үлемесле саңдары сәсрәтелде, Эстәрлетамаҡта, Пермдә ер аҫтында йәшерен гөрһөлдәтеп атом йәҙрәһенең үләт ыуы шишмә сығанаҡтарына һеңдерелде. Шуларға өҫтәп көнбайышыбыҙҙа Ғазраил-мур моҡсайы — атом электр станцияһы тиҙләтеп төҙөлә башланы, көнсығышыбыҙҙа Ямантауҙың аҫтына яман өңөп кереп Әжәл йәшерен өң ҡорҙо... Етмешенсе йылдарҙа шул яманатлы Ямантауға Кремль ҡарты Косыгин үҙе килеп, ошо көндә бөтәбеҙҙең йәнен алырҙай янаған яңы приговорға ҡул ҡуйғас, Татлы тигән башҡорт ауылын татһыҙлатып йотоп өлгөргән яманлыҡ өңөнә туралатып Белорет — Шишмә тимер юлы һуҙылды ла удар комсомол төҙөлөшө тип данланды. Шул удар төҙөлөш тураһында "Ағиҙел" журналынан мәҙхиә яҙырға ебәрелгән мин фәҡир, эргәлә генә шомло ер аҫты ҡалаһы төҙөлөп ятҡанлығын, ҡолас буйлыҡ оҙон аҡсаға фәҡәт урыҫ, украин, белорус кешеләре ялланып эшләүен, ә ерле халыҡ яҡын юлатылмауын оҙон ҡолаҡтан ишетеп, дөрөҫлөгөн тикшереп ҡарарға итһәм дә, уратып алған сәнскеле тимер сым һәм ҡораллы ғәскәр кәртәһен аша уҙа алманым... Хәҙер килеп шул шомло өңдөң тәғәйенләнеше тураһында ҡолаҡтан-

ҡолаҡҡа «радиоактив сүп һаҡлағыс» тигән яман имеш-мимеш таралғас һәм республикабыҙҙың шул ер аҫты йәшерен эшмәкәрлегенән ныҡ хәбәрдар юғары даирә дәүләт әһелдәренең өсөһөнән бер-береһен һемәйтеүсе өс төрлө аңлатма («Рәсәй дәүләт һәм хөкүмәт етәкселәренең хәтәр саҡта төшөп боҫоу урыны», «Рәсәйҙең алтын-көмөш хазиналарын һаҡлағысы», «Рәсәйҙең ҡара көнгә аҙыҡ-түлек келәте»...) сираттан тыш VI башҡорт халыҡ йыйынында иң юғары трибунанан рәсми рәүештә алынғас, баяғы имеш-мимештең асы хаҡиҡәт булыу ихтималлығы инандырҙкыс көсәйҙе. Сөнки алтмышынсы йылдарҙа уҡ большевистик империяның конвейерҙарынан өҙлөкһөҙ ағылған йәҙрә ҡоралдарын да, кәбәнләнеп өйөлә барған радиоактив сүптәрен дә ҡуйыр урыны ҡалмауы, уларҙы донъя күҙенән йәшереү бер проблемаға әүерелеүе, ошоғаса сер итеп ҡырҡ йоҙаҡ артында ныҡ йомоп тотолһа ла, билдәлелек арҡаһында бар донъяға фашланды ла Ямантауҙың әлегәсә асылмаған яман серен (сирен?!.) тоҫмаллау форсаты тейҙе. Өҫтәүенә, империя яртылаш емерелеп, һыныҡтарында үҙ аллы дәүләттәр шытып, Рәсәйҙә, Украинала, Белоруссияла, Ҡаҙағстанда баштан ашҡан хәтәр йәҙрә ҡоралдарын йә яртылаш, йә бөтөнләй юҡ итергә ҡаты ихтыяж артты. Йәҙрә илтеүсе ракеталарҙың һөлдәләрен, әйтәйек, тимер-томорға тураҡлап та булалыр, әммә хәтәр йәҙрәле башаҡтарын... шым ғына бороп алып... баяғы удар тимер юлдан әлеге әп-әҙер яман өңгә — Ямантау аҫтыналыр, моғайын... Быға элекке СССР атом электр станцияларының, элекке ут күрше социалистик илдәргә СССР үҙе төҙөшөп биргән шундай уҡ ҡоролмаларҙың үлемесле радиоактив сүптәре (дәүләт-ара килешеүҙәр буйынса, ул сүптәрҙе йыйыштырыуҙы СССР үҙ муйынына баулаған), шулай уҡ Германия һ.б. капиталистик илдәрҙең дә тап шундай уҡ хәтәр мөлкәтле контейнерҙары (бының өсөн, имеш, Рәсәйгә марка һәм долларҙар яуасаҡ!) өҫтәлә — моғайын да бөтәһе әлеге лә баяғы шул яманатлы Ямантауға!.. Әммә мәңгелек Ямантау ҙа инде мәңгелек түгел (изге Шәке тауыбыҙҙың бөтөүен хәтерләгеҙ!) — океан аръяғы ракеталары уға тура тоҫҡалыр, аҫтағы йоҡлап ятҡан әжәл уятылып, өҫтәгегә тоташып, тауҙы салҡан ҡапландырыр, алтын бишегебеҙ Урал яман әжәл түшәгенә әйләнер, йәҙрә яғыулыҡлы һәм төтөнһөҙ крематорий барыбыҙҙы теүәлләр — һис бер гетто-гулаг та, ҡатилдар ҙа кәрәкмәҫ, тәүбә-тәүбә...

Яңыртып ҡороу тип аталған был йылдарҙа империяның урыҫ түгел милләттәре урыҫҡа тиң үҙ аллылыҡ ҡаҙанырға, колониализмдан арынырға талпынғас, «бөрәгәй, бүленмәҫ Рәсәй» өсөн ҡырҡышыусылар быуаттар буйына баҫып алынған ул милләттәрҙең үҙ мөҡәддәс ерҙәрендә дөйөм халыҡ йән иҫәбенең нисә процентын ғына тәшкил иткәнлеген иҫәпләп сығарырға, баҫҡын күпселлеге менән төп аҙсылыҡтың милләт яҙмышын шуға бәйләп үҙҙәре хәл ҡылырға уҡталдылар. «Резервация» тигән һүҙҙәр ҙә салынды матбуғатта, АҠШ тәжрибәһен байҡауҙары йәнәһе. Их, Американың бөтөп барыусы шул төп халыҡтарын, индейҙарҙы, ысын йән өрөп тергеҙеүсе, сәскә аттыртыусы шул резервациялар үҙебеҙҙә булһасы, тип әсенәһең башыңа баҫып баҡыртҡан саҡтарында; әммә Рәсәй империяһының гулаг төҙөргә генә йәтеш ҡырағайлығы ундай гөманлыҡҡа һәләтлеме ни! Уның ҡара бәғеренән ярып сыҡҡан яңы хәбәрҙәр ҙә гиҙә башланы — үҙ еренә үҙе хужа булмаҡсы халыҡтар шуны белеп

торһондар: үҙ аллылыҡ алыу өсөн милли дәүмәле (йән иҫәбе) мотлаҡ туҡһан проценттан да кәм булмаған бер төркөмгә уҡмашып, бер урынға күсенеп төйәкләнеү кәрәк икән уларға, ә төйәкте тейешле ерҙән (ҡайҙан — электән йәҙрә ҡоралдарын шартлатып һынаған үлемесле радиоактив полигондарҙан!..) Рәсәй Президенты үҙе күрһәтер... Аллам һаҡлаһын, яңылышһам ярар ине бөтөнләй, әммә ләкин беҙҙең ише халайыҡтарға ысынлап та әжәл геттоһы тәғәйенләнә түгелме? Рәсәй Президентының тап ошо көндәрҙә Һарайтауҙа (Саратовта) үҙенең элекке автономияһын дәғүәләүсе немец халҡына ҡарата бар донъяға мәғлүм ҡылған белдереүе төшөрҙө был баш китмәле уйҙарға...

15.01.1992.

Был – күңелемдең тулғанып-боларыуы...

Боларған илдә күңел дә боларынҡы – йәнемә һис тынғылыҡ тапмай инем...

Шул арала республикала сәйәси хәлдәр ҙә киҫкен ҡырҡыулашыуға юҫыҡланды.

Азатлыҡҡа янай ҡурҡыныс. Рәхимов икеләнә

Башҡортостандағы сәйәси мөхит ҡыҙышҡандан-ҡыҙышты — М.Ғ. Рәхимов Мәскәүгә саҡыртылып, беҙҙең хоҡуҡтарҙың иң мөһимдәрен юҡҡа сығарасаҡ Федератив килешеү тексының проектына алдан алдырып ризалыҡ биреп ҡайтты. Һәм был документҡа ошо 1992 йылдың 31 мартында Мәскәүҙә уның тарафынан ҡул ҡуйыласаҡ ине. Алдынғы йәмәғәтселек быға ҡарата үҙенең ҡырҡа ризаһыҙлыҡ фекерен мин фәҡирегеҙ ҙә етәкселек Комитетында ағза булып торған “Урал” башҡорт халыҡ үҙәге исеменән «Башҡортостан» гәзитенең 26 март һанында белдерҙе:

Башҡортостан Республикаһы Верховный Советы Председателе М.Ғ. РӘХИМОВҠА

Хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙуллович!

Билдәле булыуынса, яңыраҡ Мәскәүҙә Федератив килешеүгә (Россия Федерацияһы дәүләт власының Федераль органдары менән Россия Федерацияһы составындағы республикаларҙың власть органдары араһында эш итеү һәм полномочиеларҙы сикләү тураһында Килешеү) ҡул ҡуйыу тураһында һөйләшеп килешелде. Был актта, Мортаза Ғөбәйҙуллович, һеҙ ҙә ҡатнаштығыҙ.

Был Килешеү беҙҙең республика тарафынан 1990 йылдың октябрендә иғлан ителгән Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында Декларацияны юҡҡа сығара. Мәҫәлән, «...Россия Федерацияһы халыҡтарының тарихи дәүләте берлеген, уның республикалары һәм территорияларының бер бөтөнлөгөн» һаҡлау тураһында белдереүе үҙе генә лә ни тора!

Килешеүҙең I статъяһы асылда Россия Федерацияһының дәүләт органдары эшенә республикаларҙың сәйәси һәм экономик тормошоноң бөтә өлкәләрен дә үҙенә

буйһондора. Федератив килешеү милли республикаларҙы Россияның өлкә һәм крайҙары кимәленә төшөрә.

Россия Федерацияһы дәүләт власының федераль органдары һәм Россия Федерацияһы составындағы республикаларҙың власть органдарының бергә эш итеү өлкәләрен билдәләүсе II статья шулай уҡ республикаларҙың хоҡуҡтарын сикләүҙе маҡсат итеп ҡуя.

III статьяла республикаларҙың власть органдарына аҙ ғына хоҡуҡтар биреү ҡарала ҡаралыуын, әммә улар ҙа бынан алдағы статьялар тарафынан юҡ дәрәжәһенә төшөрөлә.

Тоташ алганда, Федератив килешеү «Россия составындағы республикалар» тип аталған хоҡуҡһыҙ колониялар биләүсе Россия империяһын һаҡлап алып ҡалыуға йүнәлтелгән.

Хөрмәтле Мортаза Ғөбәйҙуллович!

Беҙ һеҙҙең Башҡортостан Республикаһының экономикаһын, сәйәси-хоҡуҡи учреждениеларын тулыһынса Россия Федерацияһына буйһондороусы документҡа алдан килешеп ҡул ҡуйыуығыҙҙы хупламайбыҙ.

Федератив Килешеүҙе ҡабул итмәүебеҙ хаҡында беҙ Б.Н. Ельцинга һәм Р.И. Хасбулатовҡа хәбәр иттек.

Башҡортостан Республикаһының Верховный Советы был ҡоллоҡ документты ратификацияламаһын өсөн, республикала ҙур эш алып барасағыбыҙҙы еткерәбеҙ.

М. Ҡолшәрипов, *«Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге председателе.*

Рәхимовтың ризалығы бирелгән килешеү проектына Башҡортостан халҡы төптө риза булмағанлыҡтан һәм баш ҡалабыҙ Өфө урамдары шартларға әҙер

Һүр. 53. Өфөнөң Совет майҙанында митинг. Алғы планда һулдан уңға Марат Ҡолшәрипов, өсөнсө (“НЕТ” тәңгәлендә) -- Йыһат Солтанов. 28.03.1992).

хәтәр дары мискәләрен хәтерләткәнлектән, парламентыбыҙҙың халыҡ депуттары күңеленә лә ярайһы шом һарылып, мәсьәләне иң юғары кимәлдәге тикшереүгә ҡуйырға хәл ҡылдылар.

Башҡортостан Республикаһының ун икенсе саҡырылыш Верховный Советының сираттан тыш (ун беренсе) сессияһы 1992 йылдың 28 мартында иртәнге 10 сәғәттә Башҡортостан Республикаһы Верховный Советының Ижтимағи-сәйәси үҙәгендә (Фрунзе урамы, 40) асылды, унда баяғы Федератив килешеүгә ҡул ҡуйыу-ҡуймау мәсьәләһе ҡаралды.

Борсолоуға төшкән халыҡ массалары, күберәге ялҡынлы йәш быуын, депутаттарҙан Мәскәүҙең колонизаторлыҡ килешеүенә ҡул ҡуйыуҙы рөхсәт итмәү ҡарарын талап итеп, ултырыш барған Ижтимағи-сәйәси үҙәкте тығыҙ ҡулсаға алып пикетланы. «Замандаш» гәзитенең 1992 йыл 23 апрель һанында хәбәр ителгәнсә, шул уҡ 28 мартта: *«На Советской площади прошел грандиозный митинг представителей всех районов республики и городов, который осудил навязываемый Верховным Советом РФ Федеративный договор. Участники митинга высказались за двусторонний равноправный договор между Россией и Республикой Башкортостан, где необходимо четко определить полномочия договаривающихся сторон. В истории республики Башкортостан такой Договор был подписан 20 марта 1919 года между правительством РСФСР (Лениным В.И.) и республики Башкортостан. Это был первый и последний Договор между правительствами РСФСР и национальной республикой. (К сожалению, положения этого Договора были нарушены уже 20.05.1920 г.)...*

Инициаторами созыва митинга выступили БНЦ «Урал», Башкирская народная партия, Союз Башкирской Молодежи. На митинг пришли и активно участвовали представители всех национальностей республики и всех городов и районов Башкортостана.

На митинге выступили председатель БНЦ «Урал» Кульшарипов М.М., председатель татарского общественного Центра Яушев К.К., председатель республиканского украинского культурного Центра Дорошенко В.Б., председатель Башкирского народного Конгресса Валитов Н.Х., представитель Ишимбайского отделения Башкирского народного Конгресса, председатель конференции свободных профсоюзов Башкортостана Свиридов А.И., писатели Зигат Султанов, Тайфур Сагитов, Тансылу Карамышева, председатель Башкирской народной партии, писатель Равиль Нигматуллин, председатели районных отделений БНЦ «Урал» — Абзелиловского Амангильдин З., Фазылов Ф., Салаватского городского — М. Сабитов, профессор, член-корреспондент БАН — Д.Ж. Валеев, доцент БГПИ Ф.Х. Хисамитдинова, зам. Пред. БНК, доцент Д.Х. Яндурин и др.

В своих выступлениях указанные лица единодушно осудили стремление российских властей низвести национальные республики до уровня губерний, не считаясь с правом народов на самоопределение. Выступающие высказали серьезную тревогу и в связи с отдельно взятым курсом Верховного Совета РФ на восстановление Российской империи со всеми самодержавными атрибутами, что нашло отражение в подготовленном проекте Конституции РФ.

Правление БНЦ «Урал». *29 марта 1992 года».*

Гәзиттең шул уҡ һанының беренсе битендә минең әлеге митингыла ялҡынланып һөйләгәнемде лә (эшкәртеберәк) бирҙеләр, төп нөсхәһе үҙемдә һаҡланып ҡалған:

Приговор

Мы оказались перед национальной трагедией. Подписание Федеративного Договора — это уничтожение башкирского государства и башкирской нации. Мы сами себе подписали смертный приговор, приготовленный Российским империализмом.

Каждая статья Договора — это цель Российской империи, предназначенная для обуздания свободолюбивого башкирского народа. Республика Башкортостан как будто «свободная», но когда внимательно изучаешь конституционные права Башкортостана, напрашивается вывод: без Российской Федерации Башҡортостан самостоятельно даже дышать не должен. Башкортостан по всем жизненно важным вопросам связан и зависим от России. Без нее наша республика ничего не сможет делать, даже один волосок с головы не должен упасть без ведома Федерации. Это и понятно. Законы составлены деятелями России с учетом только своих интересов и должны они служить только на благо империи.

Значит, если Россия завтра же внесет соответствующие изменения Конституции, то за ними последует ликвидация всех национальных республик и восстановление губерний царского самодержавия. Такая Конституция, составленная Румянцевым, давно уже готова, осталось только утвердить. Если это случится, все нерусские нации исчезнут, так как у имперской России на все своя воля. Как говорится в башкирской народной песне «Кулуй кантон»:

На все у него своя воля,
Ибо в руках у него власть...

Татарстан наполовину освободился от кровавой лапы империи, поэтому так и спешит Россия быстрее загонять и другие народы в свои железные клетки. Договор, который парафировал и потом подпишет Муртаза Рахимов — это есть и цепи, и клетки для нас. А Обращение Президиума ВС Республики Башкортостан вопреки желанию Москвы в поддержку референдума в Татарстане — его вынужденный маневр. Если бы Рахимов не сделал даже этого, тогда он и его команда остались бы в политической изоляции. Если Хасбулатов и Шахрай прощают Рахимову этот грех (т.е поддержку референдума в Татарстане), то это делается для того, чтобы Рахимов подписал договор о смерти Башкортостана (об этом Рахимов сам признался на пресс-конференции).

Да, к сожалению, подпишет он договор. Он показал, что является послушным рабом империи. Теперь не только он, но и башкирский народ, башкирская нация сделается рабом Российской империи. Подпись одного раба делает рабом целый народ. Раньше даже самый-самый продажный кантонный начальник и то не посмел бы так поступить, ибо у каждого башкира тогда под рукой было оружие. А теперь прошли времена, когда башкирские егеты брали в

руки оружие. Во всяком случае тот, кто сделал возможным подписание данного договора, был уверен, что народ будет молчаливо согласен. Но подумайте — простит ли это история?

Надо оповестить башкирский народ о грядущей трагедии, кричать, бить во все колокола. Муртаза Рахимов не один сам готовится подписывать документ. Поэтому надо раскрывать подлинное лицо его команды. Пусть народ знает и о них.

Башкирский народный Конгресс, БНЦ «Урал», Башкирская народная партия, Союз Башкирской Молодежи, правление культурно-национального клуба «Ак тирмэ», Комитет Башкирских женщин — все вместе должны подготовить обращение, открыто разоблачающее антинародную политику Муртазы Рахимова и его команды. Надо обратиться к башкирскому народу, открывать ему глаза. Нельзя допустить, чтобы делегация Республики Башкортостан подписала тот договор, парафирование которого уже произошло. Решается судьба народа, судьба страны. На пресс-конференции М. Рахимов пытался так оправдать свой поступок: «Если мы быстрее не подпишем договор, то Российская Федерация развалится».

Пусть развалится! Осталась на Земном шаре последняя империя и империя эта дальше жить не должна!

Зигат Султанов, писатель. 28.03.1992.

Совет майҙанында элекке хөкүмәт йортоноң балконынан тороп һөйләнек, ә балкон тирәсендә: «Муртаза, — НЕТ Федеративному договору!» тип яҙылған хәтәр шиғарлы транспарант (өҫтәге фотоны ҡарағыҙ). Шуныһы ла ғибрәтле: телмәрем аҙағында йомарланған йоҙроғомдо юғары сөйөп, Рәсәй империяһының емерелергә һәм артабан йәшәмәҫкә тейешлеген оранлауымды өлгөр-йылғыр телевизионщиктар (Мадрил Ғафуров) эләктереп алғандар ҙа тура Мәскәүгә тапшырғандар һәм ул кисенә үк Мәскәүҙең «Время» каналынан донъяға фаш ҡылынды...

Верховный Советтың халыҡ депутаттары ла сәйәси хәлдең ҡырҡыулығын аңланылар: килешеүгә Мәскәү тарафынан тәҡдим ителгән әлеге хәлендә ҡул ҡуймаҫҡа, ә шулай ҙа 31 мартта үҙебеҙҙең тәҡдимдәр менән Мәскәүгә делегация ебәрергә ҡарар ҡабул ҡылынды. Мортаза Рәхимов етәкселегендә Рәсәй Федерацияһы баш ҡалаһына юлланған ул делегацияла йәнә Министрҙар Советы Рәйесе Марат Мирғәзәмов һәм урынбаҫары Мансур Әйүпов, Президиум ағзаһы, Юғары Совет эргәһендәге республиканың, ҡала һәм райондарҙың социаль һәм иҡтисади үҫеш мәсьәләләре буйынса комиссия рәйесе Михаил Бугера, Башҡортостан халыҡ депутаттары Риза Мағазов, Николай Катаев бар ине. Илебеҙҙән Мәскәүгә делегация исеменә телеграммалар яуҙы, бер килкеһенең тексы «Йәшлек»тә лә (1992 йыл 31 март) баҫылды:

Бөгөн Мәскәүҙә Федератив Килешеүгә ҡул ҡуйылырға тейеш. Телеграммалар

Мәскәү, Кремль.

*Федератив Килешеүгә ҡул ҡуйыу буйынса Башҡортостандың вәкәләтле делегацияһы етәксеһе, Башҡортостан Респубюликаһы Юғары Советы Рәйесе **М.Ғ. Рәхимовҡа**.*

Әгәр ҙә Һеҙ халыҡтарҙың үҙ билдәләнешен инҡар итеүсе империя Федератив килешеүенә ҡул ҡуйырға риза булһағыҙ, быны́ң көтөлмәгән әҙемтәләргә килтерәсәген башҡорт милли ижтимағи-сәйәси ойошмалары тағы бер тапҡыр хәтерегеҙгә төшөрә. Әгәр Һеҙ, йәнә тәүәккәллек күрһәтмәйенсә, ошо ҡоллоҡ килешеүенә ҡул ҡуяһығыҙ икән, Башҡортостанға ҡайтмағыҙ.

«Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге. Башҡорт халыҡ фирҡәһе. Башҡорт Йәштәре Иттифағы.

Мәскәү, Кремль.

*Россия Федерацияһы Президенты **Б.Н. Ельцинға**.*

Быуаттар буйы үҙенең ирке өсөн көрәшеүсе һәм Россия империяһы нигеҙҙәрен дер һелкетеүсе башҡорт халҡы РФ Конституцияһы проектында империя тәртиптәрен аяҡҡа баҫтырыуҙы ҡарау менән бер ҡасан да килешмәйәсәк. Башҡорт халҡы империяның колониаль сәйәсәте символы булған ике башлы сәмрегош тырнаҡтарына йәнә эләгергә теләмәй. Башҡорт халҡы үҙ билдәләнешкә хоҡуғын инҡар итеүгә — ҡәтғи протест һәм артабан да милли-азатлыҡ көрешен дауам итәсәген белдерә.

«Урал» Башҡорт халыҡ үҙәге. Башҡорт халыҡ фирҡәһе. Башҡорт Йәштәре Иттифағы.

Милли республикалар һәм элекке автономиялар халыҡтарына МӨРӘЖӘҒӘТ

Ҡәҙерле туғандар! Башҡортостан Республикаһы хеҙмәтсәндәре митингыһы халыҡтарҙы бөлгөнлөккә этәреүсе Федератив килешеүгә ҡул ҡуймаҫҡа һәм ҡәтғи рәүештә «юк!» тип яуап бирергә саҡыра. Тәҡдим ителгән килешеү беҙҙең дәүләттәребеҙҙе юҡҡа сығара һәм милли суверенлы республикалар Россия империяһының колониаль өлкәләренә әүерелә.

Мәсьәләне асыҡларға ваҡыт: беҙ йә БДБ-ға һәм халыҡ-ара ойошмаларға ағза булырлыҡ үҙ аллы дәүләттәр төҙөйбөҙ, йә Россия менән бергә иҡтисади һәм сәйәси упҡынға барабыҙ. Һуңғы колониаль держава — Россияның объектив рәүештә тарҡалыу процесын туҡтатыу кәрәкмәй!

Башҡортостан Республикаһы хеҙмәтсәндәре митингыһында ҡабул ителде.

Ләкин тарих ҡуласаһы Рәсәй империяһы файҙаһына үҙенең һәлмәк әйләнешен дауамланы — делегациябыҙ Мәскәүҙә Федератив Килешеүгә үҙебеҙҙең күҙ буярға ғына яраҡлы «Ҡушымта»ны өҫтәгән булып ҡул ҡуйып ҡайтты. М.Ғ. Рәхимов һәм уның ярандары халыҡ теләгенә ҡаршы килгән был ҡылыҡтарын шул «тарихи Ҡушымта» менән аҡларға, Рәсәй менән Башҡортостан араһында булырға тейешле айырым ике-ара килешеүҙе иһә Мәскәү менән торараҡ һөләшеп төҙөшөргә мөмкин буласағына һәм «Ҡушымта» шул килешеүгә нигеҙ була алырлыҡ юридик көскә эйә икәнлегенә ышандырырға тырышты (бәлки, улар үҙҙәре был Рәсәй алдаҡсыһына ихлас ышанғандарҙыр ҙа!). Әммә уҙамандар ул ҡағыҙ ярпыһын күтәреп Мәскәүҙән әйләнеп ҡайтыу менән үк, 1 апрелдә үткәрелгән пресс-конференцияла бөтә ҡорған дәлилдәре селпәрәмә килде лә

ҡуйҙы. Мәҫәлән, ҡул ҡуйыу мәжлесендә ҡатнашҡан делегация ағзаһы дупутат Николай Катаев үҙе үк ошо «Ҡушымта» тип аталған Федератив Килешеүгә *«Башҡортостан өҫтәгән документҡа шикләнеү белдерҙе: «Милләт-ара мөнәсәбәттәр тарихында ниндәйҙер акттарға бындай өҫтәмәләр ҡушылған осраҡтар күп булған, әммә тормошҡа ашырылмаған. РФ беҙҙең документты халыҡҡа иглан итмәне...»* («Йәшлек», 4 апрель 1992 йыл). Һәм ошоноң артынса уҡ был асы хаҡиҡәт Мәскәү үҙәк телевидениенан РФ Дәүләт Думаһы халыҡ депутаты Бабуриндың сығышында аяуһыҙ дөрөҫләнде: *«Имеет ли приложение Башҡортостана федеративному договору юридическую силу?» — тигән һорауға ул тура ярып: «Нет, не имеет», — тине һәм ирония менән: «С чем и поздравляю Башкирию...» — тип тә өҫтәне»* («Йәшлек», 21 апрель 1992 йыл)...

Эйе, Башҡортостан халҡының күрәләтә көҙөн буяу, тишек кәмәгә ултыртыу ғына ине был хәйерһеҙ «Ҡушымта», уның шундай икәнлеген үҙ ваҡытында уҡ аңланыҡ; киң халыҡ массалары ла быға ҡәнәғәтһеҙлеген белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта республика етәкселегенең яңырыусы империализм ҡаршыһында тарихи теҙ сүгеүе, бик ҙур сигенеүе ине һәм ул халҡыбыҙҙың, алдынғы йәмәғәтселегебеҙҙең ифрат ҡырҡа ҡаршылығына осраны, был хәл гәзит биттәрендә лә сағылды:

Москва, Кремль. Президенту Российской Федерации Б.Н. ЕЛЬЦИНУ. Москва, Краснопресненская Набережная, Верховный Совет Российской Федерации, Председателю Р.И. ХАСБУЛАТОВУ

Башкирский народный центр «Урал», Башкирская народная партия и другие башкирские общественно-политические организации считают, что власти России проводят политику сохранения унитарного государства с бесправными колониями, о чем свидетельствуют навязанный руководителям бывших автономий Федеративный договор, который полностью подчиняет экономику, политико-правовые учреждения Башкортостана Российской Федерации.

Мы решительно осуждаем Рахимова за подписание кабального Договора и будем дальше вести борьбу за освобождение Башкортостана от колониального гнета, против шовинистической политики Москвы.

Правление БНЦ «Урал», центральное правление Башкирской народной партии.

Сәйәси хәлдең хәтәр йүнәлеш алыуы илдә төрлө ҡатлам кешеләребеҙҙең дә күңеленә шом һалды, редакцияларға нәфрәт хаттары яуҙы. Бына шуларҙан бер-нисә өлгө:

Халыҡ нәфрәтләнә

Күптән түгел Россия Федерацияһы менән элекке автономиялы республикалар, шул иҫәптән Башҡортостан, Федератив килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Был аҙым Башҡортостан тарихында иң хата аҙымдарҙың береһе булып иҫәпләнәсәк, сөнки был Килешеү буйынса республикабыҙ һаман да сырьё биреүсе төбәк булып ҡаласаҡ. Башҡортостаныбыҙ сәскә атһын өсөн, ул Россия менән үҙенең мөнәсәбәттәрен мотлаҡ тиң хоҡуҡлы Килешеү нигеҙендә ҡорорға тейеш.

М. Сабитов, *Башҡортостандың көньяҡ регионы халыҡ хәрәкәте етәкселәре йыйылышы председателе.*

Башҡортостан Республикаһы Верховный Советы Председателе М.Ғ. Рәхимов ҡул ҡуйған Федератив килешеү, әгәр ул көсөнә инһә, беренсенән, республиканы территориаль берләшмәләр менән тигеҙләйәсәк, икенсенән, киләсәккә бойондороҡһоҙлоҡҡа өмөттө бөтөнләй һүндерәсәк. ***Б. Дауытов,*** *Өфө.*

Яңы Федератив килешеү буйынса үҙ дәүләт суверенитетын иглан иткән Башҡортостанга ысын автономиялы республикалар хоҡуҡтарынан да ҡайтыш хоҡуҡтар бирелә. Икенсе төрлө әйткәндә, тоталитар СССР дәүләтен унан да ҡатыраҡ ҡуллы Россия империяһы алмаштырасаҡ.

Ә. Ғәлимов, *Өфө ҡалаһы.*

Ҡул ҡуйылған хәйерһеҙ Килешеү инде Өфөлә — депутаттарыбыҙҙың нәүбәттәге (3 апрель) ултырышында тамам ҡанунлаштырылырға (ратификацияланырға) тейеш ине. 2 апрелдә ҡалала Башҡорт Йәштәр Иттифағы тарафынан эре хәрефтәр менән яҙылған, күптәрҙе аяҡҡа баҫтырған табаҡнамә (листовка) таратылды:

Уважаемые товарищи!

31 марта 1992 года Председатель Верховного Совета Республики Башкортостан М. Рахимов и Председатель Совета Министров М. Миргазямов, грубо нарушив постановление XI внеочередной сессии Верховного Совета Республики Башкортостан, полностью игнорировав волю многонационального народа Башкортостана, ***подписали Федеративный Договор.***

Товарищи! Не допустим ратификации кабального Федеративного Договора, лишающий всех нас экономических, политических и юридических прав.

Все на пикетирование Сессии Верховного Совета к 9 часам утра 3 апреля *(ул. Фрунзе, 40, зд. ОПЦ)!*

Сәйәси мөхит ҡырҡыулаша, ваҡиғалар ҡуйырғандан-ҡуйыра бара ғына...

Йәштәр аслыҡ сараһы иғлан итте

Иртәгәһен мин барғанда Ижтимағи-сәйәси үҙәк бинаһының алдындағы иркен майҙан ризаһыҙлыҡ кисереп йөрәкһеган, нәфрәтләнгән, киҫкен шиғарлы транспаранттар күтәргән халыҡ менән шығырым тулы, төп көстө һәм күпселекте, әлбиттә, йәштәр тәшкил итә ине. Транспаранттар араһында Башҡортостан сәйәси тарихы өсөн үҙенең яңылығы, киҫкен тәғәйенләнеше менән бөтәбеҙҙең иғтибарын нығ йәлеп иткәне — *«****В случаи ратификации Федерального Договора объявляем голодовку!****»* тигәне булды, уны Башҡорт дәүләт университеты студенты Башҡорт Йәштәр Иттифағы етәкселәренең береһе һәм ошо тарихи пикеттың етәксеһе — ҡыйыу һәм тәүәккәл егет Данир Әхмәҙи улы Ғәйнуллин яҫы күкрәгенә терәп

тотҡайны (уның ошо торoштағы фотоһын «Йәшлек»тең 1992 йыл 4 апрель һанында күрергә мөмкин). Һуңынан шуны ла белдек: әгәр халыҡ талабы үтәлмәһә, нәфрәт белдереп аслыҡ сараһы үткәрәсәктәрен ул дәүләт башлығы М.Ғ. Рәхимовҡа ла алдан уҡ осрашып еткергән, ләкин тегеһе быға иғтибар итмәгән (бала-саға шаярыуы ғыналыр, тип һанаған, күрәһең)...

Пикет барған майҙанға төрлө урамдарҙан халыҡ төркөмдәре өҙлөкһөҙ ағылды, көсөргәнеш минут һайын ҡуйырҙы. Бинаға үтер юлды ОМОН һәм милиция яугирҙәре рәт-рәт баҫып кәртәләгән, уларҙың яңғыраҡыстарҙан өҙлөкһөҙ тәртипкә саҡырыуы, киҫәтеүе тетрәтә майҙанды. Йәштәребеҙҙе Башҡорт Йәштәр Иттифағы етәкселәренең береһе баяғы Ғәйнуллин Данир Әхмәҙи улының ҡыйыу башлап йөрөүе, баш-баштаҡлыҡтарға юл ҡуймай, ныҡлы тәртип булдырыуы күренә. Бина эсендәге халыҡ депутаттарына бөтә пикетсыларҙың берҙәм талабы — дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтарыбыҙҙың Мәскәүҙә ҡул ҡуйып алып ҡайтҡан «Ҡушымта»лы Федераль килешеүен кире ҡағырға, уны ратификацияламаҫҡа! Ҡабат Мәскәүгә барып, Башҡортостан һәм Рәсәйҙең айырым ике-ара килешеүенә ҡул ҡуйырға!

Әммә бина эсендәгеләр үҙҙәренсә уйланылар, ултырыштың дөйөм һулышы алып ҡайтылған документты ратификациялау йүнәлешендә барҙы, тыштағыларға был, әлбиттә, бик ауыр хафа һалды, пикетсы йәштәрҙең нәфрәтен уғата ҡуйыртты. Пикет башлығы Ғәйнуллин Данир Әхмәҙи улы «Ҡушымта»лы Федератив Килешеүгә ҡаршы инде һуңғы сара итеп үҙенең ҡатнашлығындағы бер төркөм йәш егеттәребеҙҙең ***аслыҡ иғлан итеүен*** белдерҙе.

Был тыңдәшһеҙ сәйәси акция рәсми рәүештә 8 апрелдә, баш ҡалабыҙҙың изге ***Ҡоба тау*** түбәһендә милли геройыбыҙ Салауат Юлаев һәйкәле янына ҡоролған башҡорт тирмәһендә һигеҙ егет — БДУ студенттары Данир Ғәйнуллин, Азат Хәлилов, Илдар Хөббөтдинов, Хәниф Юлыҡов, БДПИ студенты Фәнил Дәүләткужин, Өфөнән эшсе егет Азамат Ҡускилдин, Әлшәй районынан Фәрит Юнысов һәм Бөрйән районынан Салауат Әхмәтов тарафынан башланды. 11 апрелдә акцияға БДУ студенты Юлай Мәүләтколов ҡушылды, ә 12 апрелдә Ҡазан университеты студенты Рамай Юлдашев тә, уларға теләктәшлек белдереп, ике көнлөк аслыҡ иғлан итте. Йәш көрәшселәрҙең изге Ҡоба тауындағы нәфрәт төйәгенә көн һайын һәм бер туҡтауһыҙ уларға теләктәшлек белдереүсе халыҡ төркөмдәре ағылды, был урын «Азатлыҡ тирмәһе» тип аталды.

Башҡорт йәштәренең сая акцияһы баш ҡала һәм республика етәкселәренең йөрәгенә лә шом һалып, уны туҡтатырлыҡ сәйәси сара таба алмағанлыҡтарынан, кемдәрелер мәсьәләне мәкерле көс ҡулланыу ярҙамында сисергә лә маташты. Апрелдең 13-өнән 14-енә ҡарай төндә, Азатлыҡ тирмәһен һаҡлаусылар аҙ һанлы булыуҙан файҙаланып, «БАР 17-09» номерлы ПАЗ автобусында тейәлеп килгән, күҫәктәр һәм бысаҡтар менән ҡоралланмыш 25 ҡарагруһтан ғибәрәт шаҡшы төркөм асығыусыларҙы ятҡан урындарынан һөйрәп сығарып туҡманы ла автобустарына тейәлеп йәһәт тайҙы. Ҡанға батырып имгәтелгән Ғәйнуллин Данирға иптәштәре Юнысов Фәрит, Хөпбөтдинов Илдар менән бергә дауаханаларға эләгеп, яраларын оҙаҡ ҡына йүнәлтергә тура килде. Әммә улар урынын башҡалар алды, сәйәси акция бер көнгә лә, бер минутҡа ла туҡталманы.

15 апреддә үк, *«акцияла ҡатнашыусыларға һөжүм итеүҙәренә протест белдереп, түбәндәге йәштәр аслыҡ иглан итеүселәргә ҡушылды: Башҡорт дәүләт педагогия институтынан Рәил Таулыбаев, Ирек Нурлығаянов, Рифат Бүләков, Илһам Йәндәүләтов, Айнур Әмиров, Лилиә Салихова, Шәһәрниса Лоҡманова, Айгүзәл Ғабсадирова, Айгөл Нурғәлина, БДУ студенттары Сабияр Миңдеяров, Байтулла Фәтҡуллин, Фәнүр Йәғәфәров, Рауил Батталов, Зәлиә Мозафарова, Нурания Кәлимуллина, Венер Харрасов, Ауыл хужалығы институтынан Батыр Үҙәнбаев һәм XXII партсъезд исемендәге Өфө нефть эшкәртеү заводы слесаре Руслан Муллагилдин... Тағы ла 101 егет һәм ҡыҙ был сәйәси акцияға ҡушыласаҡтарын белдерҙе»* («Йәшлек», 1992 йылдың 16 апреле). Асығыусыларҙың *«төп лозунгылары — «Ирекле илдә — Азатлыҡ, Тигеҙлек һәм Туғанлыҡ!». Төп талаптары — Юғары Совет Рәйесе М. Рәхимов менән Министрҙар Советы Рәйесе М. Миргәзәмовтың* ***отставкаға сығыуы****, Россия Федерацияһы менән дәүләт-ара мөнәсәбәт нигеҙҙәре тураһында килешеү төҙөү»* («Йәшлек», 1992 йылдың 14 апреле).

Ҡанлы фажиғәнең иртәгәһенә үк башҡорт халыҡ хәрәкәттәренең берлектәге ике документы таратылды матбуғатта (минең ҡулда «Замандаш»тың 1992 йыл 23 апрель һанында донъя күргәне):

1. Обращение собрания граждан от 14.04.92.

В знак протеста ратификации кабального для нашей Республики Федеративного Договора Верховным Советом Республики Башкортостан и соглашательской, примеренческой политики Председателей Верховного Совета и Совета Министров Республики Башкортостан более десяти молодых людей, рабочие и студенты, объявили голодовку около памятника Салавату Юлаеву. Однако власти республики преднамеренно не информировали население Башкортостана об этой политической акции.

Органы безопасности, несмотря на неоднократные провокации со стороны противников суверенитета Башкортостана в отношении голодающих, не приняли соответствующие меры для охраны участников голодовки. В итоге, на пятый день голодовки, в ночь с 13 на 14 апреля группа неизвестных лиц, вооруженных дубинками и кастетами напала и жестоко избила обессиленных голодовкой ребят. Малочисленная охрана голодающих не смогла противостоять против хорошо вооруженных провокаторов, которых органы МВД, Министерство безопасности пытаются выдать за обыкновенных хулиганов. Уже в эту ночь через час, на защиту голодающих собралось более тысяча молодых людей города Уфы. Четверо ребят из числа голодающих было доставлено в городскую больницу номер 21 в тяжелом состоянии. Башкирские общественные организации возмущены этим варварским, явно политическим актом. Мы обращаемся всему населению республики с просьбой поддержать требования голодающих и выразить протест против избиения беззащитных, обессиленных молодых людей.

Мы призываем всех людей, кому небезразлична судьба Башкортостана, участвовать в акции протеста перед зданием Верховного Совета Республики Башкортостан, которая началась с утра 14 апреля сего года и будет продолжаться до выполнения требования голодающих и наказания участников политической провокации.

2. Обращение к населению Республики Башкортостан.

Мы, молодые сыны многострадальной земли Башкортостана, обращаемся ко всем общественным формированиям, национальным движениям, партиям и всем гражданам Отечества с призывом единения в этой решающей для судеб всех народов республики час в борьбе за освобождение от колониального гнета тоталитарного режима Российского центра.

Совесть и разум наши проснулись!

Мы не хотим более жить в положении рабства в условиях непрекрытого геноцида всех народов нашей растерзанной и отравленной Земли!

Все мы — башкиры и русские, татары и чуваши, немцы и украинцы — все мы поколениями наших отцов и матерей дышим отравленным воздухом, пьем зараженную воду, живем на пропитанной ядами земле. Теперь уже наши дети с рождения несут в себе комплексы неизлечимых болезней, не говоря об увеличении в десятки раз по официальной статистике всех раковых и досель неизвестных заболеваний по всей территории республики. Разве это не бездумное, или скорее, ***планомерное истребление*** *всех наций и народов во имя амбициозных целей!*

Этому есть одно определение — ***геноцид!***

Экологическая, экономическая, политическая катастрофы, заложниками которых мы оказались — результат паразитической политики Центра и, подыгрывающей ей, продажной позиции Верховного Совета и правительства Республюлики Башкортостан!

Нашими природными богатствами, результатами труда народов республики целиком и полностью распоряжается Центр, оставляя нам крохи и только право побираться у них!

Граждане республики! Откройте глаза — все обещания всех правительств Союза, России, Башкортостана — это обман. Мы все с вами отданы на заклание и уничтожение. До нас и наших детей нет никому никакого дела!

Недавние подписание Федеративного Договора яркий тому пример! Амбициозный Центр сделал свое дело! Нашу республику в числе прочих, поманив фантиком «Приложения», загнали в стойло, железобетонная изгородь которой называется «конституцией». О каком суверенитете, о каком государстве, о какой Республике может идти речь при существовании Договора о Федерации без определения статуса субъектов ее образовавших!??

Подписание этого документа — предательство всех и каждого из нас!!!

Мы требуем:

1. Немедленного созыва Внеочередной сессии Верховного Совета Башкортостана и аннулирования Федеративного Договора вместе с так называемым «Приложением».

2. Срочного подписания двухстороннего межгосударственного Договора между Республикой Башкортостан и Российской Федерацией.

3. В случае невыполнения этих условий — немедленного роспуска Верховного Совета и отставки правительства Республики.

4. Отставки Председателя ВС Республики Рахимова М.Г. и Председателя Совета Министров Республики Миргазямова М.П.

Призываем все народы к единению!

Правление Башкирского народного центра «Урал».
Центральное правление Башкирской Народной партии.
Правление Союза Башкирской Молодежи.

20 апреллдә иртүк тороп, халыҡ массалары мыжғыған Салауат Юлаев һәйкәле янына ашыҡтым. Азатлыҡ тирмәһенә кереп, бөкләнмәле койкаларҙа хәлһеҙ һуҙылып ятҡан, ҡайһы берҙәре бөксәйеп тороп ултырған егеттәребеҙ эргәһенә сүгәләнем. Унда яҙыусы Булат Рафиҡов «дыуамал йәш быуын»ға үҙенең күпте күргән һәм күпкә аҡыллыраҡ икәнен тойҙорткос тәрбиәүи вәғәзен тап боронғо муллаларса аяҡ бөкләп ултырып, әкрен генә тауыш менән тәмләп һүтә, егеттәрҙе яҡты киләсәгебеҙ хаҡына ғәзиз ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыу өсөн аслыҡ акцияһын бөгөндән үк өҙөргә, атаҡтарына һәм өйҙәренә ҡайтып китергә өгөтләй ине. Бәлки, хаҡлы ла түгелмендер, әммә мин уның вәғәзенән Аҡ йорттағы юғары түрәләребеҙҙең һулышын тойғандай булдым... Өндәшмәй генә бер быуа тыңлағандан һуң, ҡәләмдәштең бер аҙ тынып ҡалыуынан файҙаланып, халыҡ мәнфәғәттәре хаҡына күрһәткән фиҙакәрлектәре өсөн сая егеттәргә һоҡланыуымды, изге акцияны барыһы ла иҫән-имен тамамлауҙарын теләүемде белдереп, ошо үткән төндә генә ултырып яҙған, тап уларға арналған шиғырым тексын тапшырҙым:

Азатлыҡ азаматтары

Сың-сың... сың-сың...
Дүрт миллион бығау —
Бүләк булып ҡайта Мәскәүҙән.
«Ҡушымта»ға ҡушып ҡултамғаһын,
Рәхмәт әйтеп алған меҫкенйән.

Сың-сың... сың-сың...
«Йәнгә, — тип, — наҙлы моң»,
Йәне өнәй сылбыр сыңлауын.
Рәхимовтан рәхим көткәндәрҙе
«Ярлыҡаны» Мәскәү тулайым.

Башҡортостан түгел — Мәхлүҡстан,
Ҡол өлөшөн өнһөҙ алырға!
Бығау сылбырҙарын сылтыратып
Дүрт миллион йәнгә һалырға.

Сың-сың... сың-сың...
Бишкә бөгөп билен
Ҡуштанлана ҡолдар — күр ана!
Россияның ҡушбаш бур бөркөтө
Бауырҙарҙы суҡып тулғана.

«Рус түгелмен, ләкин урыҫйәнмен!» —
Ғорурланып алдай ҡол үҙен.
Мәхлүҡстансылар ҡарайтмаҡсы
Башҡортостан тигән ил йөҙөн.

Йөҙө ҡараларҙың ҡатарында —
Башҡорт бабаларҙың ҡыҙ, улы.
Мәскәү усын ялап ялғай тамаҡ
Үҙ өйөнөң өйҙәшйән ҡоло.

Сың-сың... сың-сың...
Йәнгә, тип, яҡын моң,
Арбамаҡсы Дәжжал ил йәнен.
Башҡортостан! Һинме «Быҕаустан»?!.
Мәскәү бейей, туйлап еңгәнен...

«Быҕаустан»!.. Дүрт миллион быҕау...
Тора алыр быға кем ҡаршы?..
Сеү! Сихри йыр! —
Ҡанын ҡоҫоп йырлай
Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы!

Эй изге йыр! Йәп-йәш күкрәктәрҙән,
Йөрәктәрҙән уҙа, урғылып:
«Үлһәк үләсәкбеҙ азат килеш —
Булмаясаҡбыҙ һис бур ҡоло!»

Һигеҙ йөрәк — тигеҙ дөрләү сыраҡ,
Салауатка тиңдәш ҡабына.
Быҕау өҙгөс алмас тирмә ҡора
Көн-Өфөнөң изге тауына.

Азатлыҡтың һигеҙ азаматы
Ҡаялаған дөрләү йөрәген.
Алмас ҡая, сыйып, ҡомдай ҡоя
Ҡол быҕауын — әжәл көрмәген.

«Быҕаустан» булмаҫ Башҡортостан! —
Азаматтар ҡурпыр ил барҙа.
«Дүрт миллион булһын азамат!» тип,
Юлай улы ҡарғый толпарҙа.

Сыңлы быҕауҙарын саңға тапап

Дүрт миллион ҡарғыр бер юлы:
«Үлһәк үләсәкбеҙ азат килеш —
Булмаясаҡбыҙ һис бур ҡоло!»

Азаматтар тауын аяп иңрәй
Ирәмәлкәй тауҙың аҡ ташы:
«Юҡ, үлмәгеҙ! Оло яуға кәрәк
Ир-егеткәй менән ат башы!»

20 апрель 1992 йыл, Өфө.

Ошоғаса был ваҡиғаларға үҙ мөнәсәбәтен белдермәгән, Ҡоба тауҙағы ҡуҙғалышты күрмәмешкә-белмәмешкә һалышҡан иң юғары түрәләребеҙ ҙә ҡымшаныша башланы. Шул 20 апрелдә уларҙың бер төркөмө, ниһәйәт, йомшаҡ креслоларынан ҡубынып сыҡты: йәғни *«бөгөн, асыгыусы егеттәрҙең һуңгы сиккә етеп хәлһеҙләнеүе һәм Данир Ғәйнуллиндың гүмере ҡурҡыныс аҫтында булыуы сәбәпле, йәмәгәтселектең ҡәтги талабы буйынса, егеттәр эргәһенә БР Югары Советы Президиумынан һәм Министрҙар Советынан делегация килде. Һөйләшеүҙә Министрҙар Советы Рәйесе урынбаҫары Мансур Әйүпов, Югары Совет комиссиялары рәйестәре Александр Юрин, Зөфәр Йәнекәйев, Раиса Оренбуркина, Светлана Йәнекәйева, Рөстәм Хәмитов, Марат Мәһәҙиев, Румил Аҙнабаев, Президиум агзаһы Николай Катаев ҡатнашты. Делегация 17 апрелдә Югары Совет Президиумы менән Министрҙар Советы кәңәшмәһендә ҡабул ителгән мөрәжәгәтте асыгыусыларга тапшырҙы. Делегация, Россия халыҡ депутаттарының VI съезы тамамлангас та, Россия менән ике яҡлы килешеү төҙөү тураһында һөйләшеүҙәр башланасаҡ, тип хәбәр итте. Ике яҡлы килешеү булмай тороп, Федератив Килешеүҙе беҙҙең парламент раҫламаясаҡ, ул саҡта референдум мәсьәләһе ҡалҡасаҡ, тип белдерҙе. Хөкүмәт әһелдәре йәштәр акцияһына тейешле баһа бирҙе, суверенитет өсөн көрәштә халыҡты уяттыгыҙ, һеҙ үҙ эшегеҙҙе эшләнегеҙ, тип, хәҙер, егеттәрҙең сәләмәтлеге өсөн борсолоп, асыгыуҙы туҡтатырга саҡырҙы»* («Йәшлек», 1992 йылдың 21 апреле).

Бирелгән баһа менән килешмәү мөмкин түгел: ысынлап та, республикала йәшәүсе һәм ситтә йәшәүсе байтаҡ халыҡтарҙы сәйәси йоҡонан уятты был акция. Әммә етәкселәребеҙҙең Рәсәй менән «ике яҡлы килешеү төҙөү тураһында һөйләшеүҙәр башланасаҡ» тип ышандырыуы — империя шарттарында нигеҙһеҙ ҡоро хыял, ҡомдан ишкән арҡан ине, сөнки 31 марттағы ҡул ҡуйыу арҡаһында шуға тиклемге отошло сәйәси мөмкинлек ҡулдан ысҡындырылған — поезд киткәйне инде. Артабанғы тормош бының дөрөҫлөгөн күрһәтте.

Изге Ҡоба тауыбыҙҙың Азатлыҡ тирмәһендәге сәйәси аслыҡ акцияһы йәнде әрнеткес бик оҙаҡ — 30 апрелгәсә бер туҡтауһыҙ 22 (егерме ике!) көн һәм төнгә һуҙылды, уның хаҡында бөтөн илебеҙ шауланы. Һәм ул егеттәребеҙҙең заманға тиң егетлеге булып инеп ҡалды хәтергә һәм тарихҡа.

Президентлы Башҡортостан

1993 йыл тулыһынса, тип әйтерлек, Башҡортостан Республикаһының беренсе Президентын һайлау өсөн ныҡышмалы көрәштә үтте. Башҡорт халыҡ хәрәкәттәре һәм, ғөмүмән, эсендә йәне булған һәр башҡорт, «Президент башҡорт телен белергә тейеш» тигән шиғарҙы алға һөрҙө һәм, М.Ғ. Рәхимовҡа булған бөтә сәйәси үпкәләрен онотоп, Башҡортостан Республикаһы өсөн сәйәси йөҙө шикле, йәшерен ниәттәре шомло кандидаттар араһынан уны яҡшыраҡ күрҙе лә һайлаусыларҙы уға тауыш бирергә өгөтләне. Һөҙөмтәлә 1993 йылдың 12 декабрендә беренсе Президентыбыҙ итеп Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов һайланды.

Был тарафтан шөйлә йән тынғандай булһа ла, республикала ер мәсьәләһе, аҫаба башҡорт ерҙәренең тулыһынса килмешәктәр ҡулына ҡалыу ҡурҡынысы янаны, сөнки тегеләр тап шул йүнәлештә башҡорттарға ҡаршы аҫтыртын да, асыҡтан-асыҡ та яҫҡыныуҙарын туҡтатманы аҙым һайын. Башҡорт ере өсөн тартыштың бер бөгөнгө түгеллеген, еренән ҡолаҡ ҡаҡҡан башҡорт йәшәүҙән дә туҡтаясағын халҡыбыҙға хәлдән килгәнсә аңлатып биреү өсөн шәхсәнә үҙем, тарихи документтарҙың бер килкеһен һайлап алып, баш һүҙ яҙып, ташҡа баҫырға әҙерләнем, бына шуның баш һүҙе (бөтә материал 1994 йыл «Шоңҡар» журналының 3-өнсө һанында сыҡты):

Башҡорт һәм ер — икеһе бер

«Аямаған йәнен, түккән ҡанын, һис бирмәгән башҡорт Уралын!» — тип, бабаларҙың аманатын иҫләттертеп тора беҙгә һәм беҙҙең дошмандарыбыҙға милли гимныбыҙ «Урал». Донъя яратылғандан уҡ ошо ерҙең, Уралыбыҙҙың, төп хужалары булған беҙ, башҡорт халҡы, еребеҙҙе үҙебеҙҙең, атай һәм әсәйҙәребеҙҙең йылы тәнеләй итеп тоябыҙ, һанайбыҙ: еребеҙҙе йолҡтортоу — тере тәнебеҙҙе ҡырҡтыртыу менән бәрәбәр. Талап-тунап, алдап-йолдап һаттыртып та һатып алып һәм башҡа мәкерлектәр ҡылып аҫаба башҡорт еренә хужа булырға, башҡорт табанын тупрағынан тайҙыртырға — башҡортто ел ыңғайына тәгәрләүсе ҡамғаҡтай осортоп таратырға яҫҡыныусылар булған, бар, киләсәктә лә булыр. Быны беҙ тарихыбыҙҙан, Россияның бөтмәҫ-төкәнмәҫ болаларынан интеккән тас бөгөнгөбөҙҙән, шулай уҡ ҡарагруһлы мәкерйәндәрҙең киләсәккә ҡорған ҡара маҡсаттарынан бик яҡшы беләбеҙ: «Башҡорт бөтһә — ере ҡала, йырларға йыры ҡала»...

Юҡ, бөтмәбеҙ! Еребеҙҙе лә, йырыбыҙҙы ла үҙебеҙҙә тоторбоҙ! Сөнки башҡорт һәм ер — икеһе бер, бер бөтөн. Бөтөнлөктө һаҡлау юлында бабаларыбыҙҙың миҫалы беҙгә терәк. «Башҡорт ерҙәре мәсьәләһе» бер бөгөн генә ҡупмаған, ләкин уны яһилдарға үҙҙәренсә сисергә юл ҡуймаған башҡорт халҡы бар!

Бына бер аманат — 1917 йылдың 20 — 25 июль һуҙымында Ырымбурҙа эшләгән һәм Башҡорт Үҙәк Шураһының Идара Комитетын һайлаған беренсе башҡорт ҡоролтайынан аҙаҡ, уның ҡарарҙарына таянып, үҙ илен һәм ерен һаҡлап ҡалыу өсөн үҙ ғәскәрен дәррәү төҙөй башлаған Хөкүмәтебеҙҙең ғәскәргә

мөрәжәғәте... Башҡорт иле исеменән Россияның Ваҡытлы Хөкүмәтенә тапшырыу өсөн Илдархан Мутин тарафынан башҡорт халҡы һәм башҡорт ере тураһында урыҫ телендә яҙылған доклад та бик фәһемле; ундайҙарын, йәштәребеҙҙең бер килкеһе әсә теленән мәхрүмлеген, ә күпселеге урыҫ телен иркен аңлауын иҫтә тотоп, тәржемәһеҙ биреүҙе ҡулай таптыҡ. Ырымбур гөбөрнәһенең башҡорттар күпселек тәшкил иткән төбәктәренең береһе булған Орск өйәҙе земство идаралығының ундағы урыҫ ылыҫтарына күрһәтмәһе һәм Преображенск (Йылайыр) ҡасабаһында сабышланған (шабашланған) өйәҙ крәҫтиән съезы ҡарары ла шундайҙарҙан. Башҡорттарҙы үҙ ерҙәренә үҙҙәре хужа булыу хоҡуғынан мәхрүм ҡылып, территорияһыҙ (йәғни ерһеҙ-һыуһыҙ) ителмеш ҡуңалтаҡ «мәҙәни үҙ билдәләнеш»кә генә рөхсәт бирмәксе улар (Россия империяһының ҡәҙимге милли сәйәсәте)... Башҡорттарға ҡарата ошо мәкерле сәйәсәтте ул көндәрҙә урыҫтар ғына түгел, ә Садри Мәҡсүди, Ғаяз Исхаҡи һәм үҙ телен дә, татар телен дә белмәгән Ҡазан мосолманы (осетин) Әхмәт Саликов кеүек татар зыялылары ла алға һөргән тырышып. Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың «Хәтирәлар»ендә («Ағиҙел» журналының 1991 йылғы 6-нсы һаны, 150 — 152-нсе биттәр) был бик асыҡ күренә: «Исхаҡи Мәскәүҙә үҙе сығарған «Ил» гәзитендә (№39) минең хаҡта: «Зәки Вәлиди урыҫса оҙон нотоҡ һөйләп, беҙ ҙә финдар һәм украиндар кеүек берләшергә, үҙ эштәребеҙгә үҙебеҙ хужа булырға тейешбеҙ. Хәҙергә ҡеүәтебеҙ аҙ булһа ла, киләсәк беҙҙең ҡулда. Беҙ конференцияла ерле мөхтәриәт ҡаҙана алырбыҙ», — тине. Ә Дума ағзаһы (Ибниәмин) Әхтәмов уға: «Бында башҡорт далаларындағы митинг түгел; беҙ финдар, украиндар кеүек мөхтәриәт дәғүәләшеүҙә ҡатнаша алмаҫбыҙ», — тип яуап бирҙе», тип яҙҙы. Шул уҡ гәзиттә Украинаның да мөхтәриәт дәғүәләшеүенән көлөп, «Үҙ аллы Хохландия эшләрҙәр, беҙ иһә, урыҫ милләте менән тарихи бәйләнештә булыу сәбәпле, ул юлға баҫмаясаҡбыҙ. Дүрт кешелек бер төркөм булараҡ (Садри Мәҡсүди, Ислам Шаһиәхмәтов, Ғаяз Исхаҡи һәм Шакир Мөхәммәтйәр) хөкүмәт рәйесе кенәз Львовҡа барып, беҙ малорустар (йәғни украиндар) кеүек һеҙҙән айырылырға теләмәйбеҙ, беҙ һеҙҙең менән бергә булырға теләйбеҙ», — тип иғлан итеүҙәрен дә яҙҙы...

Әхмәт Саликов... Рәсәй исламлығын тик бер йәмғиәт тип таный һәм быны ла «мосолман российяндар» тип төшөнә ине... Татар мөхәррире Ғаяз Исхаҡи ҙа Рәсәй мосолмандары араһында Ҡазандың етәкселеген тәьмин итеү уйы менән һәр хосуста Саликов менән бергә эш итте. Һуңынан эмиграцияла ла һәр саҡ бергә булдылар. 1924 йылда Берлинда Әхмәт Саликов Керенский тарафынан сығарылған «Дни» гәзитенең 22 августағы, Ғаяз Исхаҡи иһә 10 сентябрҙәге һандарында «Милли хистәрҙең үҙгәреүе» исемле мәҡәләләрендә үҙҙәрен урыҫ демократияһы берҙәмлеген ҡайғыртыусы тип күрһәтеп, *унитаризмды яҡлау юлында мосолман ҡәрҙәштәренә ҡаршы көрәшеүҙәре хаҡында ғорурланып яҙҙылар»...*

Тимәк, татар ҡәрҙәштәребеҙҙең шул замандағы зыялыларының бер килкеһе, хәҙерге көндәрҙәге бәғзеләре кеүек үк, «башҡорт ерҙәре» мәсьәләһендә урыҫ империалист-шовинистары менән үҙҙәренең рухташлығын, бер ҡатарҙа торғанлыҡтарын яҡшы тойоп, белеп һатҡандар Иблескә йәндәрен...

Документ-аманаттар шәлкемен ослаусы федерация тураһындағы өсөнсө башҡорт ҡоролтайы ҡарары һәм икенсе ҡоролтай хаҡындағы юғары сәйәси һәм сәнғәти ҡиммәтле «Хитабнамә» шул ҡатмарлы замананың ошоғаса күптәребеҙгә билдәһеҙ ҡала килгән көрәш заңын асыҡ итеп күҙ алдына баҫтыра. Башҡорт халҡын «ҡайғыртыусы»ларҙың балауыҙ һығып тиргән юхалы нотоҡтары һәм мәшһүр Шәриф Манатовтың уларға биргән тос яуабы «Хитабнамә»нең бәҫен уғата арттыра. Мәктәп һәм вуз дәреслектәренә инергә лайыҡлы был әҫәр, бөтә билдәләренә ҡарағанда, Әхмәтзәки Вәлиди Туған ҡулы менән яҙылғанға оҡшай.

29.12.1993.

1994 йылда шул уҡ йүнәлештә һәм исемдә икенсе бер материал әҙерләп, йәнә лә «Шоңҡар» журналының 1995 йылғы 2-нсе һанында ташҡа баҫтырттым, кереш өлөшө ошондай:

Ун алтынсы быуат урталарында Башҡортостан үҙе теләпме, әллә мәжбүри «теләп»ме Урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан биреле башҡорт халҡының донъяла йәшәргәме, әллә йәшәмәҫкәме тейешлеген билдәләүсе ***төп мәсьәлә*** көн үҙәгенә ҡалҡынды — ***ер мәсьәләһе.*** Сөнки донъя яратылғандан уҡ Дәү Хоҙайҙың Үҙе тарафынан ярлыҡанып, Иҙел — Кама үҙәне һәм Обь — Иртыш үҙәне араһындағы, бөйөк Бабич әйтмешләй, «Уралҡайҙың аҫты алтын, өҫтө шиғыр, үҙе нур» тупрағына мәңгелеккә еректерелгән һәм шул изге Тәүтөйәктең төп хужаһы, ҡурсаусыһы булған башҡорт халҡынан илаһиәтле был тупраҡты тартып алырға аҙмы яҫҡынды донъя юлбаҫарҙары; ә Рәсәй империяһы тип аталмыш ике башлы ҡоҙғон иһә юлбаҫарлыҡ-ҡомһоҙлоҡтоң сиген уҙып киткәйне. Ҡоҙғон ҡылығы бер булды: бөтә сараларҙы егеп, башҡорттоң тоҡомон ҡоротторға, үҙен гүргә тығып, еренә хужа булырға.

1917 йылда хөрриәт иғлан ителгәндән һуң да үҙгәрмәне хәл; киреһенсә, башҡорт ерҙәрен көпә-көндөҙ хөрриәт исеменән юлбаҫарҙарса тартып алыу, башҡортто һуңғы ҡарыш еренән мәхрүм ҡылып һәләк итеү сәйәсәте уғата көсәйҙе генә. Үлемесле шул шарттарҙа, һыуға батып барыусы бахырйән һаламға йәбешкәндәй, 1919 йылда ҡыҙыл байраҡлы Рәсәй Шуралар Йөмһүриәтенә, йәғни Совет Рәсәйенә, өмөтләнеп күҙ төбәгәндер милли уҙамандарыбыҙ, сөнки ҡыҙыл хакимиәт ил шаулатып «Милләттәрҙең үҙ билдәләнешкә хоҡуғы»н иғлан ҡылды, ә үҙен иһә «халыҡтар төрмәһе Рәсәй»ҙең көллө иҙелгән милләттәрен азатлыҡҡа сығарыусы һәм яҡлаусы тип атаны... Һәр хәлдә, элекке аҡ уҡалы хөлләһен ҡыҙыл-бурҙатлыға алмаштырғанынан һуң да империя — империя килеш ҡалғанлығын бабаларыбыҙ үтәнән-үтә күреп-белеп торһалар ҙа, хөрриәт ҡапҡалы киләсәгебеҙҙе яҡшыға юрарға тырышҡандарҙыр, моғайын: өмөтһөҙ — шайтан, тиҙәр бит. Автономия алған көндәрҙәге Башҡорт Хөкүмәтенең халҡыбыҙға «Өндәмә»һенән ана шуны аңларға мөмкин...

Башҡортостан тупрағына талпандай ҡаҙалған колонизаторҙар Башҡортостан автономияһының ҡан дошманына әүерелеп, башҡорттарға ҡаршы ҡайҙа — ҡораллы фетнә, ҡайҙа — яла яғыу ойошторалар; үҙҙәрен — Советтарҙың терәге, автономия алған башҡорттарҙы — дошманы итеп күрһәтергә тырышалар. Мәскәүҙә лә шулар шаҡшылығына күҙ йоморға, ә гонаһтарын ярлыҡарға

тырышыусылар етерлек була, сөнки, бөйөк инҡилап булһа ла, империясылыҡ сәйәсәте һис үлмәй — уғата мәкерлерәк, аҫтыртынырак төҫ ала. Шуға күрә лә Башҡорт Хөкүмәте һәм Рәсәй Үҙәк Хөкүмәте араһында киләсәктә ҡотолғоһоҙ ҡаршылыҡтарҙы алданыраҡ иҫкәртергә, мөмкин тиклем булдырмаҫҡа йә йомшартырға тырышып, ил тотҡаһы уҙамандарыбыҙ 1919 йылда Үҙәк Совет Хакимиәтенә ифрат мөһим Белдереү яҙып тапшыра («В Центральный Исполнительный Комитет СФС Республики»), уның шул урыҫ телендәге төп нөсхәһен шул көйөнсә уҡып сығыу һәр кемгә лә килешер...

Башҡортостан, башҡорт ере, башҡорт халҡы бер-береһенән айырылғыһыҙ икәнлеген, шул тоташлыҡты өҙөргә быуаттар буйына ниндәй ҡара көстәрҙең көсәнгәнлеген аҙ һүҙ менән бөтә тарихи тулылығында асып һала был документ; яҙылыуына етмеш биш йыл үткәндән һуң да ул үҙенең бер хәрефенең дә әһәмиәтен юғалтмай, иҫкермәй һәм киләсәктә лә шул көйөнсә ҡаласаҡ, белгестәргә бик ҡиммәтле сығанаҡ, киң ҡатламға дәреслек һымаҡ буласаҡ. Хәҙер ҙә башҡорт ерҙәренә тирә-яҡтан ҡомһоҙ ҡулдар һуҙылғанда, уны сәлдереү өсөн имперялa мәкерле сәйәси уйындар барғанда шуларҙың ысын асылын аңлау, тыуған тупрағын һәм үҙен ҡурсалау өсөн һәр башҡорт был аманаттан файҙалы һабаҡ аласаҡ тип һанайым. Бөгөнгө бәләләребеҙҙең, бер бөгөн генә түгел, ә бынан етмеш биш йыл һәм унан да элегерәк башыбыҙға төшөрөлөүен беләбеҙ. Батша хөкүмәте төптө рәсми рәүештә — закондар сығарып талата башҡорт ерҙәрен, шуның юридик кәкерсәктәргә эленгән, ябай-ялпы абайламаҫтай йәшерен механизмы булдырыла, бер туҡтауһыҙ бойомға ашырыла. «Башҡорттоң ере күп ул» тигән колонизаторҙар уйҙырмаһы ла документта статистик мәғлүмәт менән фашлана: шул 1919 йылда башҡорттоң йән башына ни бары бер ярым дисәтинә ер (һөрөргә яраҡһыҙ тау-урман менән бергә) тура килгән. Дәүләт сәйәсәтенә әүерелмеш ерһеҙләндереү һөҙөмтәһендә башҡорт халҡы ҡырылып бөтөүгә бара (йән иҫәбе күҙгә күренеп кәмей). Алдан күрә белеүсәнлек шул тиклем көслө: РСФСР-ҙы ҡайһылай итеп ысын-ғәҙел федерация яһау тәҡдиме лә бар был документта, был иһә буласаҡ СССР Конституцияһынан да, һуңғы замандағы атаҡлы «Сахаров Конституцияһы»нан да камилыраҡ Төп Ҡанундың нигеҙе булырҙай тәҡдим.

1993 йылдың 24 декабрендә президентлы Башҡортостан Республикаһының Конституцияһы (Төп Ҡануны) ҡабул ҡылынды — Башҡорт милли хәрәкәттәренең иң мөһим теләк-талаптарының байтағы иҫәпкә алынды унда (тимәк, күп йыллыҡ сәйәси көрәшебеҙ елгә османы)...

Тормошобоҙҙағы ошо мөһим сәйәси яңырыштар, әлбиттә, рухи-мәҙәни йәшәйешебеҙҙе лә үҙгәртте, яңыртты. Ҙур педагог һәм ғалим, мәктәп дәреслектәренең күренекле авторы Төхфәт ағай Аслаевтың ныҡышмалы үтенесе буйынса, ҡайһылыр синыф балаларының уҡыу китабына керетеү өсөн, 1995 йылдың 12 ғинуарында түбәндәге шиғырҙарымды ижад итеп бирҙем:

Башҡортостан Конституцияһы

Башҡортостан Төп Ҡануны
Тигән аҫыл хоҡуҡ бар.
Конституция тип тә
Атала ул, отоп ҡал!

Башҡортостан тигән илдең
Хоҡуҡтары яҙылған.
Халыҡ — азат, бәхетле-шат
Йәшәһен, тип танылған.

Һәр бер әҙәм көр үтәһә
Ил алдында бурысын,
Конституция һаҡлар
Именлеген, ырыҫын.

Башҡортостан-республикам
Ҡотайһын, тип теләйек.
Ҡанундарҙы боҙмайынса,
Уҡыйыҡ та эшләйек!

Башҡортостан Флагы

Башҡортостан Флагында —
Иң яратҡан төҫтәрем:
Күм-күк күгем, ап-аҡ һыуым,
Йәм-йәшел ер өҫтәрем.

Ете ырыу — ете суғы
Алтын башлы ҡурайҙың.
Елберләгән Флагымда
Йөҙө балҡый Уралдың!

Башҡортостан Гербы

Башҡортостан Гербында
Илем күрке сағыла.
Атлы баһадир Салауат —
Урал тигән сағылда!

Күк күгебеҙ, аҡ һыуыбыҙ,

Йәшел хәтфә еребеҙ.
«Башҡортостан» исемкәйен
Шул өс төҫтә күрәбеҙ.

Ете суҡлы ете ырыу —
Ҡурайымдың үҙәге.
Бөтөн донъя бер түңәрәк —
Башҡортомдоң биҙәге.

Нурға мансып Ҡояш ҡалҡа —
Аллана ла гөлләнә.
Тыуған илем Башҡортостан —
Ер йөҙөндә гөлләмә!

Башҡортостан Гимны

Иртән торһам, радионан —
Һәр көн сәғәт етелә
Гимн уйнай. Уны тыңлап
Йөрәккәйем елкенә.

Илкәйемдең иркенлеге,
Уралымдың саллығы;
Ҡыр-урмандар йәшеллеге,
Баҫыуҙарҙың байлығы;

Ауылдарҙың, ҡалаларҙың
Күкрәп сәскә атыуы;
Халыҡтарҙың татыулығы,
Йөҙҙәренең балҡыуы —

Моңло көйгә һалына ла
Йөрәгемә яғыла —
Башҡортостан Гимны ул!
Мәңге-мәңге яңғыра!

Ләкин... һөйгән ғәзиз төйәгебеҙ, күргән яҡты көндәребеҙ ниндәй генә хозурлыҡтар бирһә лә, әллә ҡайҙа алыҫтарҙа — Ҡаф тауы артында йәшәгәндәрҙең асы яҙмышы, ҡайғыһы ла сорнап алып һыҙлата икән шул йөрәкте...

Бөгөн килеп ошо юлдарҙы яҙғанда ҡомло ғәрәп сүлдәрендә бик боронғо мәҙәниәтле Ғираҡ иле өҫтөнә АҠШ, Бөйөк Британия осҡостары, диңгеҙҙәге караптары көнө-төнө ҡара әжәл бомбалары, «Тамагавк» ракеталары яуҙыра, бер

гонаһһыҙ бала-сағаларҙың, ҡатын-ҡыҙҙың, ҡарт-ҡорондоң ғәзиз ғүмерен өҙә, сәскә атҡан гүзәл ҡалаларҙы көлгә әйләндереп, барыһын ер менән тигеҙләй...

Ә 1995 йылдың 12 ғинуарында иһә президент Б.Н. Ельцин әфәнде бойорған Чечнялағы ҡанлы мәхшәрҙәр тетрәтте йөрәгемде, ҡәләмемдә ҡанға мансып яҙғандай булдым был мәҡәләмде:

Балаҡ төрөп ҡан кисергә...

Уралымдан алыҫ-алыҫ Кавказдағы йәмле Грозный ҡалаһына бер туҡтауһыҙ әжәл бомбалары яуа — гүйә улар минең башыма ауа...

Урам тулы ятҡан мәйеттәр сыбарлана экрандарҙан — гүйә улар араһында мин үҙем үлеп ятам...

Тере килеш тарҡалыусы имәнес дейеү бәрейеләй империяның баштан-аяҡ ҡоралланған дивизиялары аҙ ғына һанлы чечен халҡын көн-төн ҡанға батырыу, шул уҡ ваҡытта шуға бәйләп башҡорт халҡына ҡарата ла Мәскәүҙән яһил янауҙарҙың йышайыуы мине, империя тотҡоно булырға дусар башҡорт әҙибен, ҡан йотоп уйландырта. Башты баҫып ултырып шәйләгәндә, халыҡтарға янаусы был яуызлыҡтың тарихи тамырҙары хәтергә килә. Урыҫ дәүләтенә үҙ теләге менән ҡушылған беренсе «субъект» булараҡ, борондан уҡ Башҡортостан ошо уҫал империяның «милли мәсьәләне хәл ҡылыу» алымдарының башҡорт елкәһендә һынап үткәрелмеш лабораторияһына әүерелде. Йәғни мәҫәлән, империя ҡапҡанына ҡабылған башҡа халыҡтар, шул иҫәптән чечендар, ҡапҡан эсендә тыпырсынып ни күрһә, уларҙан да элегерәк бөтәһен башҡорт күрҙе...

Батша ҡырғынсыларының йөҙәрләгән, меңәрләгән башҡорт ауылдарын яндырып көл ҡылыуҙарын; йөҙәрләгән, меңәрләгән башҡорттарҙы атып та, тураҡлап та һәм донъяға билдәле булған бөтә язалау ысулдарын ҡулланып та үлтереүҙәрен; тереләрен бығаулап, Россияның төпкөлдәренә, Себергә һәм Балтиҡ яҡтарына ҡатырға һөрөүҙәрен; бала-сағаларын урыҫ дворяндарына, татар мырҙаларына ҡоллоҡҡа таратып биреүҙәрен һәм башҡаларын тасуирлап тормайынса, шул иҫәпһеҙ яуыҙлыҡтарҙың сәбәбен һәм маҡсатын ул ҡатилдарҙың үҙ ауыҙынан тыңлайыҡ. Мәҫәлән, «Россия империяһындағы башҡорт мәсьәләһен иң шәп хәл ҡылыу ысулдары» тураһында 1730 йылда хөкүмәткә Ҡазан гөбөрнәтере А.П. Волынский яҙыуынса:

«Башҡорт халҡын... теләгән бер сит ил дошманынан да яманыраҡ күреп ҡулда тоторға кәрәк»... Сөнки бит *«улар Мөхәммәт динендә»*, тимәк, *«христиандарҙың дошманы»*. Өҫтәүенә, *«был халыҡ... әленән-әле өҙлөкһөҙ урсей һәм арта»*, ә был иһә бөйөк держава сәйәсәтенә тап килмәй — урыҫ түгел халыҡтар өҙлөкһөҙ кәмергә генә тейеш...

Чечен Республикаһы Эчкерияға Россия армияһының әлеге рәхимһеҙ ябырылыуы уны тап шул Волынский билдәләгән сәбәптәре өсөн *«теләгән бер сит ил дошманынан да яманыраҡ күреп ҡулда тоторға»* ынтылыуҙан килеп сыҡҡанға оҡшай. Әйткәндәй, башҡорттарға ҡарата шул Волынский раҫлаған тағы ла бер оторо сифат чечендарға ҡарата ла хас ине: *«башҡорт халҡы әле йыуаш ҡына күренһә лә, әммә ифрат тыңлаулы ла тип әйтә алмайбыҙ уларҙы, сөнки, бер ниндәй ҙә указдарға ҡарамай, ҡасаҡтарҙы ҡабул ҡылалар, яһаҡ түләмәйҙәр, ләкин йәндәре теләгәнсә үҙ аллы*

йәшәйҙәр»... — Грозныйға һөжүм ҡылырынан алда чечен илен ғәйепләгән беҙҙең көндәрҙәге «демократик» Мәскәүҙең рәсми дәлилдәре һымаҡ был. Һәм Россия ғәскәрҙәре ундағы тыныс тормошло халыҡҡа тонна-тонна бомба һәм ракеталарын, снаряд һәм пуляларын ни өсөн көн-төн яуҙырыуҙары ла аңлашыла (шул уҡ Волынскийҙан): *«Иң шәбе... уларҙы (башҡорттарҙы) яртылаш ҡына булһа ла кәметергә кәрәк ине, ә ҡалғандарына тәүҙә еңелерәк яһаҡ һалып, һуңынан яһаҡты әленән-әле арттырырға... бер нисек тә беҙгә ҡаршы ҡул күтәрә алмаҫлыҡ хәлгә еткереп»...* — Бөгөн дә бит чечендарҙың бер өлөшөн (дудаевсыларҙы) «кәметеп», икенсе өлөшөн («оппозиция»ны) үҙҙәренсә ярлыҡарға тырышалар түгелме ни?.. *«Аҙаҡ килеп,* — ти башҡорт мәсьәләһен ҡайһылай шәп хәл ҡылырға өйрәтеүсе, — *Хоҙай өсөн ҡәбәхәт шул халыҡты ҡаты иҙгес ҡулыбыҙ аҫтына алырға Хоҙайыбыҙ үҙе ярҙам иткәс... унда йәшәгән башҡа (йәғни мосолман) динле бер кем дә, үлем язаһы янауында, ҡулында бер ниндәй ҙә мылтыҡ тотмаҫлыҡ хәлгә килтерербеҙ»...* — Быныһы ла үҙен ҡурсалап ҡоралланған чечен халҡының ҡоралын һалдыртып алырға маҡсатланған Мәскәү сәйәсәтен сағылдырғандай...

Беҙ генә түгел, империя тотҡалары ла тарихтан һабаҡ ала, бабалары Волынскийҙың нәсихәттәрен заманаға һәм урынға яраҡлатып үҫтерә. Волынскийҙан һуң бер быуат үткәс, атаҡлы декабрист (хәҙергесә «демократ» була инде!..) П.И. Пестелдең Россияны үҙгәртеп ҡороу программаһы «Русская правда»ла яҙыла һәм ул беҙҙең көндәрҙәге Россияны үҙгәртеп ҡороу реформаларын үткәреүсе Кремль хакимиәтенә шул Кавказда яһилланырға юл һыҙып ҡалдырғандай...

Тимәк, Сталин депортацияһы хәҙерге коммунистарҙың да, «демократ»тарҙың да ҡан бабалары декабристар тарафынан уҡ билдәләнгән һәм дудаевсыларҙың ошо көндәрҙә лә депортацияланыуҙан ҡурсаланыуҙары ерле юҡҡа түгелдер. Әйткәндәй, бөгөнгө чечен фажиғәһен тыуҙырыуҙа элекке вице-президент коммунист Руцкой менән уның бөгөнгө сәйәси дошманы коммунист-«демократ» президент Ельцин сәйәсәттәренең ифрат күсәгилешлеген, берҙәйлеген тормош үҙе раҫланы...

Борон-борондан Башҡортостандың ғазаптары башҡа төбәктәрҙең дә, шул иҫәптән Чечняның да, башына төшәсәк афәттәрен алдан уҡ иҫкәрткәндәй, бөгөнгө Чечня кисергән ҡанлы фажиғәләрҙең шәүләһе лә Россияның барлыҡ төпкөлдәренә төштө, суверенлы Башҡортостан йөрәгенә лә ҡанһыраҡкыс яра булып уйылды. Россия ғәскәрҙәре утҡа тотоуҙан дөрләп янған Грозныйҙа күп милләтле Россия халыҡтарының бөтәһенең именлеккә, үҙ-ара дуҫлыҡҡа һәм берәгәйлеккә, әҙәмсә бәхетле тормошҡа бағлаған барлыҡ өмөт-хыялдары бер юлы көлгә әйләнде. Грозныйҙа гөрһөлдәп ауған һәр бер йортта Россияның тиҫтәләгән йылдар буйына күҙҙәре тишелеп фатир көткән миллионлаған граждандарының, шул иҫәптән ошо юлдарҙы әҙәмсә ултырып яҙырға ла урыны булмаған башҡорт яҙыусыһының, аласаҡ фатиры күҙ асып йомғансы саң булып ыуалды, юҡҡа сыҡты. Ҡанлы һуғыштың ҡасанғаса һуҙылыры, тағы ла күпме бәлә-ҡазалар килтерере билдәһеҙ, әммә ошо көндәрҙә үк, Мәскәү стратегтарының үҙҙәренең самалауынса, кавказ һуғышы федерация бюджетынан дүрт-биш триллион һумды умырып та өлгөргән. Был тишекте ҡаплатырға Башҡортостан, Татарстан кеүек федерация

субъекттарын ғәҙәттән тыш мәжбүр ҡылыу мәсьәләһендә Россияның чечендарға ябырылыуын яҡлап сыҡҡан һәм Башҡортостандың «суверенлы дәүләт» статусына теш ҡайраған Дәүләт думаһы депутаты (элекке финанс министры) Борис Федоров был көндәрҙә айырыуса ғәййәрлеген күрһәтә («Известия»ның 1994 йылғы 27 декабрь һаны)...

Башҡортостандың ете ҡат тиреһен тунап алып өйрәнгән Үҙәк үҙенең булдыҡһыҙ сәйәсмәндәренең, томана генералдарының Чечнялағы һәләкәтен ҡаплатырға хәҙер инде республикамдың ҡырҡ ҡат туналған тиреһе аҫтындағы тоташ сей яра һум итен дә һуйып алырға әҙер. Ошо йәһәттән Шахрайҙың да, башҡаларының да аҫтыртын эш башҡарыуҙары сер түгел ине, Чечнялағы һуғыш иһә ундайҙарҙы уғата яһилландырҙы: маңлайына ике башлы йыртҡыс сәмреғош мөһөрләнгән, рәсми орган һаналған Мәскәү гәзитендә Башҡортостан Республикаһының суверенлы дәүләт статусына балта менән киҙәнмеш яһил мәҡәлә сыҡты. Башҡортостан Президентының коррупцияға ҡаршы аяуһыҙ көрәше арҡаһында юғары вазифаларынан ҡолаҡ ҡаҡмыш элекке премьер-министр Копсов әфәнденең һәм уның мутлашып «ожмах ҡаласығы» ҡороу буйынса бер төркөм әшнәләренең йәмһеҙ ҡылыҡтарын, шулай уҡ йылы урынлы вазифаларынан бушатылған район администрация башлыҡтарының күрәләтә ҡыңғырлыҡтарын аҡларға көсәнгән шул мәҡәләсе Президентыбыҙҙы (М.Ғ. Рәхимовты) «кадрҙар һуғышы» алып барыусы рәүешендә тамғаларға тырышып, ҡойто нигеҙгә шау ҡом һарайын ҡора: Президент Рәхимов, имеш, шундай юлдар менән республиканың суверенлығын үҙ файҙаһына ҡайырған да республиканың бөтә ер майҙанын (!..) үҙенең хосуси милкенә әйләндергән. Күренеүенсә, мәҡәлә авторы баяғы «ожмах ҡаласығы» ҡороусыларҙың көллө гонаһтарын ярлыҡап, шундайҙарҙан таҙарыныуға бөтә көсөн һалған Президентҡа бөтә гөнаһты япһарырға тырыша — аҡ эт бәләһен ҡара этҡә ауҙарыу түгелме был?

Кремлдең түрендә үк коррупционерҙар һәм «мерзавецтар» (С. Ковалев нарыҡлауы) Россия Президентының иң яҡын яраНдары булып ултырыуын Мәскәү матбуғаты үҙе көн-төн таҡылдап һөйләп торғанда һәм шуның касафаты бөтә федерацияға яман шеш сиреләй йәйелеп таралғанда, әлбиттә, федерацияның бер субъекты булған Башҡортостан Республикаһын ул әшәке ағым араланы тип әйтеүе ҡыйын. Ағиҙел яры башындағы Аҡ йортта ла бәғзе берәүҙәр һөттән аҡ, һыуҙан пак түгелдер. Аҡ йорт хужаһының да, бәлки, ҡайһы бер етешһеҙлектәре барҙыр эшендә. Ләкин Президенттың бәғзе бер боҙоҡ эшмәкәрҙәрҙән ҡурсаланыуын ҡыйышҡа һапларға ярамай — бөтәһе лә халыҡтың күҙ алдында. Ғәрәсәтле ошо көндәрҙә Кремль хужаһы үҙ граждандарынан ер менән күк араһындай йыраҡлыҡта ултырғанда, Башҡортостан Президентының Башҡортостан халҡына яҡынлығы, республиканың суверенлығын да, намыҫын да халҡы менән бер теләктән яҡлауы суверенлы дәүләт урынында ҡәҙимге гөбөрнә күрергә теләүселәрҙең генә эсен бошора, талаҡтарын таштыра. Тоҡ эсенән төртөп сыҡҡан беҙ кеүек, баяғы бысраҡ мәҡәлә авторы ла йәшермәй быны: «*Теләгән бер территориаль йәки милли ҡоролошто суверенлаштырыу коррупцияға килтерә*», — тип фәлсәфәле һөҙөмтәләп, шунда уҡ быны Чечнялағы үҙҙәре ҡабыҙған һуғыш утына килтереп бәйләй ҙә суверенлы башҡаларҙы киҫәтә: «*...суверенлы кенәзлектең*

(республиканың, тип әйтергә теле бармай. — *Й.С.*) *экстерриториаль иҡтисади үҙ аллылығы — Башҡортостандың, Татарстандың ғына проблемаһы түгел был, Чечняның фажиғәһе»...* Бер бауға теҙелгәнһегеҙ — бер үк яҙмыш көҫәй барығыҙҙы ла, тимәк. Башҡортостанға һөжүмен ул шул асы яҙмыштан аралауҙың сараһын өйрәтеп ослай: Россиялағы бөтә милли республикаларҙың «суверенитетын һәм бойондороҡһоҙлоғон» бөтөрөп, дөйөм ҡанунға буйһонмалы «субъект» итеп ҡалдырырға. Ябай әйткәндә, Башҡортостан Республикаһынан Россияның гөбөрнәһе яһарға...

Чечен илендә ажарланып ике ҡулын терһәктән ҡанға батырған имәнес империяның һаман туймай ҡан көҫәүен 9 ғинуар 23 сәғәттә Россия телевидениеһының «Вести» программаһы бөтә донъяның күҙен баҡтыртып күрһәтте. Дәүләт думаһы скиперы коммунист Рыбкин унда, тележурналисҡа биргән интервьюһында, Кавказдағы ҡот осҡос ҡырылышты берәгәй һәм бүленмәҫ Россия мәнфәғәттәре хаҡына аҡлап, әгәр талап ителһә, ***Чечня «бандформированиелары»на ҡаршы нимә ҡылған булһаҡ, Татарстанда ла, Башҡортостанда ла һәм башҡа субъекттарҙа ла тап шуны ҡыласаҡбыҙ,*** тип янаны. Кемгә нисектер, әммә мин Чечнянан һуң сират беҙгә һәм башҡаларға етәсәген төшөндөм. Ҡан еҫенә илергән өрәк-империя балаҡ төрөп ҡан кисергә лә әҙер...

Ни эшләргә һуң, тигән һорауға яуабым ябай ғына: ***һынмаҫҡа.*** Һынмаҫ өсөн, һынмаусыларҙан рухи өлгө алырға.

Дуҫлашырға ихлас һәр бер халыҡ менән дуҫлыҡты нығытырға.

Иң элек һәр беребеҙ үҙ кешелек бурысыбыҙҙы, көндәлек эштәребеҙҙе еренә еткереп үтәргә.

Ата-бабалар тарихын яҡшы белеп, шулар рухына рухыбыҙҙы ялғарға, милләт рухын ҡоростай үткерләргә. Милли аңды тос йоҙроҡтай йомарлап берәгәйләнергә. Араҡы эсеүҙән туҡтарға.

Сөнки һан менән түгел, сифат менән алдырыу заманаһы хәҙер.

90-ынсы йылдар Рәсәйенең иҫерекбаш Президенты Б.Н. Ельцин күп уйламай ғына башлап ебәргән, Рәсәйҙең меңәрләгән ватандаштарының башына еткән ҡанлы Чечня һуғышы, ниһәйәт, инде туҡталыр, илебеҙҙә күптән көтөлгән тыныслыҡ һәм именлек тантана итер, тигән изге өмөт бар: бына ошо 2003 йылдың 23 мартында Чечняла яңы Конституция, парламентҡа депутаттар һәм илгә президент һайлау мәсьәләләре буйынса референдум үткәрелде, һайлаусыларҙың иң күпселеге бөтә өс һорауға ла: «Эйе!» — тип яуап бирҙе, тинеләр. Иншалла, хәйерле сәғәттә, изге минутта булһын! Ҡан даръялары ағыҙыуҙар туҡталһын!

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы

1995 йылдың йәйендә Өфөлә Бөтөн донъя башҡорттарының беренсе ҡоролтайы йыйылырға тейеш ине, шул ҡоролтайға баш ҡаланың Киров районынан башҡалар менән бергә мине лә һайланылар делегат итеп. Ошо

айҡанлы минән «Шәреҡ» радиостанцияһының бер әһеле интервью алды ла боҙмай ғына эфирҙа яңғыратты. Әлмирә һылыу Сөйәрембәтова биргән һорауҙар һәм уға минең яуаптар түбәндәгесә ине:

«1. Башҡорттарҙың быйыл буласаҡ Бөтөн донъя ҡоролтайының әһәмиәтен ҡайһылай баһалайһығыҙ?

— Бик юғары баһалайым. Беренсе тапҡыр бөтөн донъянан бер ҡорға — Тәүтөйәккә йыйылыу. Башҡорт милләтенең юҡҡа сығыу — һәләкәт алдында тороуын уртаға һалып һөйләшеү.

2. Милләтебеҙҙең һәләкәт алдында тороуының сәбәптәрен ҡайһылай аңлатаһығыҙ?

— Геноцид. Башҡортостан 1557 йылда Урыҫ дәүләтенә ҡушылғандан алып, Урыҫ дәүләте (империя) башҡорттарҙы ҡырып бөтөрөү сәйәсәтен үткәрҙе. Империя төрлө осорҙарҙа төрлө төҫтәргә керҙе: аҡ империя — ҡыҙыл империя — ала-ҡола империя. Әммә уның асылы, милли сәйәсәте бер ҡалды — урыҫ булмаған халыҡтарҙы бөтөрөү.

Башҡорт халҡы үҙенең азатлығын, йәшәйешен яҡлап ике йөҙ йыл буйына баш күтәрҙе, ләкин батша самодержавиеһы ҡанға батырып баҫтырҙы беҙҙе.

Һуңғы (һәм еңеүле) ихтилал — 1920 йылда, милли геройыбыҙ Сөләймән Шаһингәрәй улы Мырҙабулатов етәкселегендә булды.

Рәсәй империясыларының геноцид сәйәсәте башҡорттарҙың йән иҫәбен өҙлөкһөҙ кәметте: 1917 йылда — 1.800.000 башҡорт, ә 1926 йылда — 630 мең... Ошо көнгәсә баяғы 1917 йылғы һанға өлгәшә алмайбыҙ...

Рәсәй һалдаттарының Чечнялағы йырткыслыҡтарын бөтә донъя белә хәҙер. Мәҫәлән, Самашки ауылын һуйыу. Уны ҡанлы тарихтағы Лидице (Чехословакия), Орадур (Франция), Хатынь (Белоруссия), Сонгми (Вьетнам) фажиғәләренә тиңләйҙәр.

Ә башҡорттоң Сейәнтусы ауылы?!. 1735 йылда Тәфтиләү етәкселегендәге батша ҡырғын ғәскәре ауылдың көлөн күккә осорған, бөтә халҡын (мең кешене) ҡылыстан үткәргән, ә 450 ҡатын-ҡыҙҙы, бала-сағаны келәттәргә ябып, тереләй яндырып үлтергән... Күренеүенсә, баяғы тарихи фажиғә кисергән ауылдар исемлегенең башында башҡорттоң Сейәнтусы ауылы тора, торорға тейеш!

Башҡорттарҙы татарға, урыҫҡа әйләндереү — ассимиляция бара өҙлөкһөҙ. Башҡорт тигәнең һыуға төшкән тоҙ кеүек иреп бөтә, юғала...

3. Һеҙҙеңсә, милләтте был һәләкәттән ҡотҡарыу өсөн, ҡоролтайҙың көн үҙәгендә ниндәй бурыстар тора?

— Башҡорт милләтен ҡотҡарыуҙың комплекслы ***дәүләт программаһының*** ҡабул ҡылыныуын, уның ***дәүләт эшенә*** әүерелеүен талап итергә тейешбеҙ.

4. Ул программаның үҙәгендә иң мөһим ниндәй мәсьәләләр торорға тейеш?

— Төп ике мәсьәләне күрәм:

1) башҡорт теленә дәүләт теле статусын биреү;
2) башҡорттоң быуаттар буйына империя ҡулы менән бөгөп-һындырылған милли рухын тергеҙеү.

5. Ҡоролтай быларҙы ыңғай хәл итер, тип ышанаһығыҙмы?

— Икеләнәм. Сөнки, үҙегеҙ беләһегеҙ, Башҡортостаныбыҙҙа ҡәҙимге өй хужаһы һәм өйҙәштәр бар. Өйҙәштәребеҙҙең ифрат әхләкһеҙлеге лә билдәле: өй хужаһын тупһаға тибеп төшөрөп, түргә үҙҙәре менеп ултырырға тамшана...

Башҡорт теленә дәүләт теле статусын бирмәү — башҡорт милләтен үлемгә дусар итеү, үлтереү тигән һүҙ ул.

Шул үлем хөкөмөнөң ауыҙын ҡайырыу, үлемде еңеп сығыу өсөн, һәр башҡорт ең һыҙғанып көрәшергә тейеш. Быны өсөн тәүҙә һәр башҡорттоң милли рухын тергеҙеү мотлаҡ.

6. Милли рухты тергеҙеүҙең ниндәй саралары бар?

— Төп саралар — империя тартып алып тапаған, йәшергән, юҡ иткән милли ***Хәтеребеҙҙе*** тергеҙергә — ҡайтарып алырға тейешбеҙ. Бына нимәләрҙән тора ул Хәтер:

1) башҡорт теле;

2) башҡорт тарихы;

3) башҡорт тәүдине һәм Ислам.

«Россия — дөйөм йортобоҙ» тигән хәрәкәтте башлаусыларға ла һүҙем бар. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Россияны ундағы бөтә «ҙур» һәм «бәләкәй» милләттәрҙең дөйөм туғанлыҡ йорто итеп яңыртылыуын теләйбеҙ. Ләкин был яңы хәрәкәт тә иҫке йөкмәтке алмаһын, һөҙөмтәлә шул ҡәҙерле дөйөм йортобоҙ — «бәләкәй» милләттәрҙең зираты, ә «ҙур» милләт — зират һаҡсыһы була күрмәһен ине.

1995. Май».

Бөтөн донъя башҡорттарының 1-енсе ҡоролтайы, билдәле булыуынса, ошо 1995 йылдың йәмле 1 — 2 июнь көндәрендә баш ҡалабыҙ Өфөлә үткәрелде. Мөһим сәйәси сараны дәүләтебеҙ, хөкүмәтебеҙ үҙҙәре ярлыҡағанлыҡтан, ойоштороу һәм матди яҡтары тейешле кимәлдә булды. Әммә йәнгә тейә биреп ҡуйғаны ла бар: пленар ултырыштағы ораторҙарҙың күпселеге ҡәҙимге коммунистар заманындағыса шыма һөйләп, етди сәйәси сараны байрамға әйләндереп, тормошобоҙҙа бөтәһе лә ал да гөл икән, тигән кәйеф тә залдағыларҙы күпмелер албырғатты. Үҙемдең тыуған Ырымбур яғы делегацияһының башлығы, гөбөрнәтер Елагин әфәнде лә шул алымда трибунанан кинәнеп һайрап торғанда, хозурлыҡ кисереп иҫергәндәрҙе киҫкен репликам менән булһа ла айнытайым әле тип, залдан тороп ошолайыраҡ өндәштем:

— Хөрмәтле гөбөрнәтер, Ырымбур башҡорттары делегацияһының башлығы! Каруанһарайыбыҙҙы ҡасан башҡорттарға ҡайтарып бирәһегеҙ?

Елагин быға тура яуап ҡайтарманы, ыҡ-мыҡ итте лә, әйләндереп-тулғандырып һөйләү менән арынды. Ләкин барлыҡ түрәләр (шул иҫәптән Президентыбыҙ һәм Мәскәү илсеһе Шумилин) ҡатнашҡан был пленар ултырышта Каруанһарай тураһындағы мәсьәләне ҡабырғаһы менән уртаға ҡуйған берҙән-бер сығыш булды был. Һәм ул репликаны аҙаҡ, яҙып алынған магнит таҫмаһынан юйып ташларға онотоп, буғай, бер нисә тапҡыр эфирҙан яңғыраттылар (аҙаҡ юйылды).

Билдәле, бындай оло йыйындың тар ҡыҫаһында хатта рәсми докладтар һәм тәбрикләүҙәр ҙә саҡ һыйышып, фекер алышыуҙар икенсе көнгә төрлө-төрлө секцияларҙың ултырыштарына ҡалдырылғанлыҡтан, мин дә буйһондом шуға –

башҡа сара юҡ ине. Ҡоролтай йыйылыр алдынан 1995 йылдың 27 майында яҙып әҙерләгән фекеремде ҡоролтайҙың **«Тарих һабаҡтары: иҫән ҡалыу, хеҙмәттәшлек тәжрибәһе һәм демография мәсьәләләре»** тигән секцияһында һөйләнем, ләкин һис тә күңелле булманы ул:

ҠӘБЕР ҠЫРЫЙЫНАН ҠЫСҠЫРЫУ

Ҡоролтайыбыҙҙы шау-шоуло ҡәҙимге байрамға, КПСС саралары өлгөһөндә сәхнәләштерелгән спектаклгә әйләндерә күрмәйек. Сөнки милләтебеҙ хәҙер, сәхнә түрендә түгел, ә тәрән соҡор ситендә тора. Уның аянысла хәле, ғәфү итегеҙ, форумыбыҙҙың символикаһында уҡ сағылған: ҡанатлы башҡорт толпары, һуҙылып-һуҙылып иркен еләһе урында, салыныр алдынан дүрт тояғы беректерелгән бахырйән мал ҡиәфәтендә... Өс телдәге бисмиллаһы ла эмблеманың түр башына ҡоролтайҙың үҙ әсә телендә түгел, ә урыҫ телендә шаҡырайтып ултыртылған, башҡорт теле был осраҡта ла иң аҫҡа — тупһаға тибәрелгән. Ошо урында ошоно ла үҙ ҡулыбыҙ менән әҙәмсә, тейешенсә хәл итмәгәс, милли рухыбыҙҙың тамам миңрәүләнә барыуын, һыңар аяғыбыҙ менән инде соҡор ситендә үк кәңгерәкләүебеҙҙе күрһәтә түгелме был?!.

Ул соҡорҙо, 1557 йылдан алып, 438 йыл буйына дәһшәтләнеп соҡоно ҡитғаның золомо. Халҡым тәүге 200 йыл буйына золомға ҡаршы ҡулына ҡорал алып сая көрәште, быуыны-быуыны менән яуҙа ҡырылды. Заманына ҡарап золом үҙенең төҫөн аҡҡа, ҡыҙылға, ала-ҡолаға алмаштырып күҙ быуҙы, әммә ҡылыҡ-сәйәсәте бер ҡалды.

Дөрөҫ, таш атҡанға аш атып та ҡараныҡ.

Ҡурҡыу белмәҫ башҡорт яугирҙәре, Рәсәйҙе әсәй итеп күрергә теләп, Минин һәм Пожарский ғәскәрҙәре сафтарында ла, Петр батшаның Аҙау һәм төньяҡ походтарында ла, шул аҡ батшаларҙың Пруссия, Ҡырым яуҙарында ла, 1812 йылғы Ватан һуғышында ла дөйөм Ватан именлеге хаҡына, йәнен-тәнен аямай, уның дошмандары менән алышты. Граждандар һуғышы, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда данлы башҡорт дивизиялары Ватанға ҡалҡан булды. Ләкин быларҙың рәхмәте беҙгә ҡотолғоһоҙ геноцид — баяғы упкын соҡор-ҡәберҙе киңәйтеү ҙә тәрәнәйтеү булып ҡайтты. Уйлап ҡына ҡарағыҙ: 1917 йылда 1.800.000 (бер миллион һигеҙ йөҙ мең) йән эйәһе иҫәпләнгән башҡорт халҡы 1926 йылда 630 (алты йөҙ утыҙ) меңгә ҡалды — биш-алты йыл араһында өс тапҡырға кәмене. Донъяның бер генә империяһы ла үҙенең колонияһын төптән ҡырҡып ҡырыу буйынса бындай рекорд ҡуйғаны юҡ. Һөҙөмтәлә башҡортто тәүҙә үҙенең үк республикаһында аҙсылыҡ тәшкил итеүсе «бөтөп барған» милләт ҡылдылар, хәҙер инде, шуға таянып, Башҡортостан Республикаһын бөтөрөргә, гөбөрнә ҡылырға яҫҡаналар. Был иһә башҡорттоң башына етеү буласаҡ... Тәфтиләү борон башҡортомдоң Сейәнтусы ауылын бер һелтәнеүҙә халҡы менән ҡуша тулайым ҡырып юҡ итһә, бөгөнгө тәфтиләүҙәр Башҡортостан менән бергә бөтә башҡорт милләтен юҡ итәсәк, әгәр ҙә тиҙерәк иҫебеҙгә килмәһәк, соҡорҙоң ҡәбер икәнен төшөнмәһәк... Сөнки геноцид, үлтереүҙең күрәләтә физик ысулдарын (мәҫәлән, Силәбе өлкәһендә башҡорт ауылдарындағы радиация зәхмәтен) генә түгел, ә аҫтыртын (милли-мәҙәни, сәйәси-иҡтисади, демографик, экологик һ.б.) ысулдары

комплексын фәнни нигеҙҙә эшкә егеп, әлегәсә дауам ҡылына бирә бит. Ошо көндә башҡорттарҙың тыуыусыларына ҡарағанда үлеүселәренең күберәк булыуы тап ана шул фажиғәнең дәлиле булып тора ла инде. Республиканы төҙөгән һәм уға исем биргән төп милләттең теленә дәүләт теле статусын бирмәҫ өсөн аяҡ салыуҙарҙы ла мин геноцидтың дауамы тип аңлайым. Дөрөҫ, Президентыбыҙ Рәхимов үҙенең пленар ултырыштағы докладында һәр өсөнсө башҡорттоң үҙ телен белмәүе өсөн башҡорттоң үҙен ғәйепле һанарға тырышты. Ләкин быларҙың барһы өсөн геноцид, империя ғәйепле. Милләтте тамам ҡәбергә ҡолатмаҫ өсөн, башҡорт милләтен тергеҙеү һәм башҡорт теленә дәүләт теле статусын биреү тураһындағы закондар проекттарын ҡабул итергә һәм уларҙы бойомға ашырыуҙы милләт исеменән Республика Президентына, Дәүләт Йыйылышына һәм Хөкүмәткә ныҡлап йөкмәтергә кәрәк. Шуларҙың үтәлеше — кемдең кем икәнлеген йәғни улар башҡорт милләтен тергеҙеп йәшәтеү яғындамы, әллә бөтөрөү яғындамы торғанлыҡтарын күрһәтеүсе лакмус ҡағыҙы булыр.

«Россия — дөйөм йортобоҙ» тигән хәрәкәтте башлаусыларға ла һүҙем бар. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Россияны ундағы бөтә «ҙур» һәм «бәләкәй» милләттәрҙең дөйөм туғанлыҡ йорто итеп яңыртылыуын теләйбеҙ. Ләкин был яңы хәрәкәт тә иҫке йөкмәтке алмаһын, һөҙөмтәлә шул әүрәткес матур исемле дөйөм йортобоҙ — «бәләкәй» милләттәрҙең зираты, ә «ҙур» милләт иһә зират һаҡсыһы була күрмәһен ине. Алданмайыҡ һәм үҙебеҙҙе үҙебеҙ алдап ымһынмайыҡ, туғандар! Хәлебеҙҙең асылын асыу өсөн, был сығышымды мин ҡәбер ҡырыйынан ҡысҡырыу тип атаным...

Ҡоролтайҙан һуң, ошо телмәремдең тексын «Йәшлек» гәзитенә илтеп бирһәм дә, унық ул саҡтағы баш редакторы уны баҫып сығарырына һис күҙем етмәй ине. Әммә Хоҙай Бабайҙың ҡушыуылыр: игелекһеҙ баш мөхәррир шул көндә ялға китеп, урынбаҫары Хәсән Назар мәҡәләне, кисектермәй, баҫмаға урынлаштырҙы...

Шунан һуң ни эш менәндер «Башҡортостан» гәзитенең ялдан ҡайтмыш баш редакторына керәйем, тиһәм, соланда туҡтаттылар: бүлмәһендә ниндәйҙер мөһим йыйылыш-ыҙғыш барыуын иҫкәртеп, шул бөткәнсе алғы бүлмәлә көтөп ултырырға ҡуштылар. Бер заман бүлмә ишеге шаран асылды ла көсөргәнешле кисерештәрҙән ҡыҙара-бүртенгән бер өйөр журналист уҙамандар, услап атҡан борсаҡтай, тышҡа һибелде — йәмғеһе бөтә баҫмаларыбыҙҙан килгән баш мөхәррирҙәр, араларында Матбуғат министрыбыҙ Ғәлим Хисамов үҙе бар (минең менән ҡул биреп күрешеп уҙҙы). Аҙаҡтанырaҡ ҡалып тәпәйләгән, ҡобараһы осҡан Хәсән Назар менән мин ихлас күрешеп, ни өсөн уның балтаһы һыуға сумғанлығын — кәйефе төшкәнлеген һорашҡас, ошо минуттарҙа бер юлы көлкөлө лә, ғибрәтле лә тарихи хәлгә тарыуымды аңланым. Баҡтиһәң, тап минең баяғы мәҡәләне «Йәшлек»тә баҫып сығарғаны өсөн Хәсән Назарҙы ҡыҙыу табаға баҫтырырға, шуның менән башҡаларға ла күргәҙмә һабаҡ бирергә йыйған икән дәһә Министр әфәндебеҙ гәзит мөхәррирҙәрен... (Һуңынан шағир Марат Кәримов ошо аяныслы ваҡиғаны шағир Хәсән Назарға арналған фәһемле бер шиғырында йырланы)...

ДҮРТЕНСЕ КИҪӘК

Тамырҙар тәрән тарта

Шәжәрәләрем

Эйе, «ләрем»... Сөнки Үҫәргән аҫаба башҡорто Йыһат Солтановтың тән тамырҙарында, донъя яратылғандан уҡ килгән үҙ ырыуы Үҫәргәндекенә ҡушылып, башҡорттоң Бөрйән ырыуынан Сыңғыҙ-хан нәҫеленең һәм башҡорттоң боронғо бер ярсығы Мишәр ырыуының ҡаны ла тибә һулҡылдап. Һуңғы икеһе, әлбиттә, тарихи сәбәптәр арҡаһында Үҫәргән ерендә пәйҙә булған, килеп һыйынған ырыуҙар... Ә ул ерҙең төп хужаһы — Үҫәргәндең шанлы көнәсәһе (кенәзе) Муйтән-бейҙең бөйөк Сыңғыҙ-ханға иң яҡын кеше икәнлеге шәжәрәбеҙгә яҙылған:

Һүр. 54. Сыңғыҙ-хан. Бронза

«Вә бәгдә Сыңғыз-хан Муйтәнгә һәр мәжлескә ҡабул идеп, яҡынлардан иҫәп итеп бик ҡәдерле гиззәт илән хан янында бер нисә йыл тороп, ахырында хан Муйтәнде билек дәрәжәһен биреп, илгә дау-талашларҙы тикшереп тороу өсөн указ биргән.

Бирелгән указда яҙылган һүҙләр: «Муйтән Туҡһаба балаһына билек мансабы бирелде. Үҙе үлгәнсә би булыр, үҙенән һуң балаларынан береһе булыр». Шул рәүешендә баланан балага бирелеп, Муйтән нәҫеленән башҡага бирелмәй. Береһе һайланмай береһенә билек бирәрәк Муйтән ырыуына — Туҡһаба ырыуына бирелдерәк».

Тимәк, Үҫәргән ырыуы шәжәрәһе — бөтә башҡорттарҙың Батшалар шәжәрәһе икәнлеген бабабыҙ Сыңғыҙ-хан таныған. Һәм Муйтән-бейҙең йәғни Үҫәргән ырыуының биләмәләренең ҡайҙарҙан ҡайҙарғаса йәйрәп ятыуы йәғни дәүләт сиктәре лә шул заманында уҡ бөйөк йыһангир Сыңғыҙ-хан бабабыҙ тарафынан аныҡ билдәләнгән:

«Әүәл Аҡ Иделнең башынан тамагына саҡлы Аҡ Иделгә ҡойган үҙәнләре белән һәм урман вә йылгалары белән һәм Урал тауының көнсыгыш ягы Уралга яҡын Ишем ҡушылган һыулар, Ирман, Иртыш тигән үҙәнләр, үҙәнләренә ҡушылган бар йылгалары, урман вә ялан белән, йәнә лә Йайыҡ башы Ялпы таулары, Йайыҡдиң ике ягы. Ер Йайыҡтың көнсыгыш ягы Тубыл һыуына саҡлы һәм Йайыҡга ҡойган ни бары һыулар һәм үҙәнләре һәм урманлары вә яланлары, ердән сыга торган мәгдәнләре белән Туҡһаба оранлы башҡортларга күсеп йәйләгән, ултырып ҡышлау урынларын мәңгелек итеп бирелде», — тип яҙылган указында». (Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации). Уфа — 1985, 57-нсе бит).

Шуныһы ла ҡыҙыҡлы: бүре-эткә табыныусы үҫәргәндәрҙең бик боронғо замандарҙан уҡ ҡитғабыҙҙың ҡайһы өлөшөнөң аҫабалары булғанлығын улар һыулаған, уларҙың «әсәһе» бүре-эткә бәйләп изгеләштерелгән йылға исемдәре асыҡ күрһәтә. Быны тамаша ҡылдыртыуҙы Үҫәргәндең мине тыуҙырған «ҡамалар» араһынан башлайыҡ.

Ҡама-ан (-ан — сығанаҡ килеш ялғауы, йәғни «ҡаманан тыуған») — ҡоман//куман (үҫәргәндәрҙең боронғо бер аталышы).

Ҡама//Кама йылғаһы.

Ҡобан//Кубань йылғаһы.

«Ҡама» һүҙенең ҡама — ҡаба (ҡаб) — ҡоба (ҡоб) үҙгәрештәрен кисергәнлеге асыҡ. Ә ҡоб//ҡаб — бүре ул. Сөнки ҡоб-аҡ («аҡ бүре») — көбәк («бүре»). Ошоғаса телебеҙҙән төшмәгән «өй көбәге» тигән әйтемебеҙ — «өй бүреһе» йәғни ҡулға эйәләштерелгән бүре (эт) тигән һүҙ ул. Тимәк, ҡобан-ҡомандар//ҡамалар — «бүренән тыуған» йәки «бүрене имгән» башҡорттар (үҫәргәндәр).

Шулай уҡ телебеҙҙә әлегәсә һирәкләп булһа ла ҡулланылыусы ҡабаҡ//ҡапаҡ һүҙе — нимәне булһа ла бүре-эт хоҙай кимәлендә изгеләштереп маҡтау, «аҡ бүре» тигәнебеҙ. (Танылған яҙыусыбыҙ Сәләх ағай Кулибай ҙа, нимәнелер яратып маҡтар булһа, «ҡапаҡ» һүҙен ҡуллана торғайны).

Һәм йәнә:

Пирет (Бүре-эт) — Геродот тарихындағы Ағиҙел йылғаһының исеме.

Прут (Бүре-эт) — ҡитғабыҙ көнбайышындағы хәҙерге йылға.

Бөрө//Бирь, Бөрөсуан//Бирсуан (Бүре-әсә-аба-ан — «Бүре-әсә-апанан тыуған») — Башҡортостандағы хәҙерге йылғалар.

Бөрө-аҡ-эт-ул («бүре аҡ эт улы») — Бүре-аҡ-әтил (бүре-Ағиҙел»). Һәм шунан килеп сыға:

Бөрө-аҡ-әтил — болоаҡа-әтил//болаҡ-әтил — болоайа-әтил — Белая-Әтил//Белая-Иҙел. Шулай уҡ:

Болаҡа-Әтил — Волга-Иҙел.

Аҡ-әсә-ул («аҡ бүре улы») — Ҡәсул//Ҡыҙыл йылғаһы.

Абай (апай)-әс («бүре-әсә») — амай-әс — Майәс//Мейәс йылғаһы — «бүре-әсә йылғаһы».

Аба (апай, өпәй) — Өфө//Уфа (Ҡариҙел) йылғаһы — «бүре йылғаһы».

Эҫем//Сим — «әсәм» йәғни «бүре-әсәм» йылғаһы.

Бөрө-әсән («бүре-әсәнән тыуған») — Йөрө-әсән//Йөрүҙән йылғаһы.

Әс-әй («бүре-әсәй») — Әй йылғаһы.

Әсәй-аҡ («аҡ бүре-әсәй») — Жайаҡ//Йайыҡ йылғаһы.

Әсәк-бөрө («әсә-бүре»)//Әсәк-мөрө — Сәк-мәре//Сакмара (Һаҡмар) йылғаһы.

Әсә-мәре («әсә-бүре») — Сәмәре//Самара йылғаһы.

Аҡ-әсә-бүре-эт — Кәсәмәрет//Ҡаҫмарт йылғаһы.

Күренеүенсә, былар бөтәһе башҡорттоң бүре-эткә табыныусы Үҫәргән тәүырыуы сиреүҙәре йәшәгән ер йөҙөндәге һыуҙарҙың исемдәре, йәғни ҡитғабыҙың Обь — Иртыш үҙәненән алып көнбайышҡа табан Уралғаса һәм Урал тауҙары аша Алыҫ Көнбайышҡаса һуҙылған (боронғо ғәрәп сәйәхәтселәре яҙып ҡалдырған Эске Башҡорт) тарафы. Бында «Эске» — әсәкә//әсә-аҡ («аҡ әсә бүре яғы») тигән һүҙебеҙ. (Шуныһын да әйтәйек: үҫәргәндәрҙең көнсығыш яртыһы — ата бүрегә, ә көнбайыш яртыһы әсә бүрегә табынған).

Миҫал өсөн башҡорттоң боҙ-инәгә (боҙ һыйыры бизонға йәки боланға) табыныусы икенсе яртыһын тәшкил итмеш Бәжәнәк («боҙ-инәк» — боҙ һыйыры бизон йәки болан) тәүырыуҙары сиреүҙәре йәшәгән, баяғы Обь — Иртыш дөйөм үҙәненән алып Алыҫ Көнсығышҡаса һуҙылған Тышҡы (атасҡы йәғни «ата яғы» —

тасҡы — Тышҡы) Башҡорт тарафының ҡайһы бер йылға исемдәренең асылын күрһәтәйек:

Ана-ҡар-аба//Ана-корова («инә-һыйыр») — Ана-Ғара-аб//Ангара-Обь йылғаһы.

Инә-әсәй («һыйыр-әсәй» йәки «һыйыр-һыу») — Инәсәй//Енисей йылғаһы...

Ә инде Алыҫ Көньяҡтағы ер йөҙөнә һалған эҙҙәребеҙҙе билдәләү өсөн, Урта Азиялағы Сыр-даръяны, Сурхан-даръяны («үҫәргән-йылға»лар), Афғанстандағы Башҡорт (Бажгир) ҡалаһын, Ирандың Лот далаһындағы Бөрйән (Буржан) ҡалаһын һәм Күк (Һинд) океанының Фарсы диңгеҙ ҡултығы яры буйындағы Башҡорт (Башгирд) өлкәһен, шулай уҡ шул тарафтарҙа Һиндостандың бөйөк эпосы «Махабхарата»ла теркәлгән Ҡанҡа (Ҡаңғы) башҡорт ырыуын һәм Ҡанҡа (Ганга) изге һыуын иҫкә алыу ҙа етә.

Донъя-Ғаләм-Тереклек тураһындағы мифтан билдәле булыуынса, Дәү Хоҙайыбыҙ Донъя-Ғаләмде ете ҡатлы түңәрәк урата рәүешендә яралтҡан: урталыҡтан башлап тышҡа табан һанағанда тәүге өс ҡат-уратаһы — бәндәләр, ҡалғандары хоҙайҙар өсөн йәшәү урыны имеш. Шул уҡ ваҡытта был ете ҡатлы түңәрәк-урата тап уртанан һәр береһе ярым түңәрәкле ике өлөшкә бүленеп, шул бүленештәге ҡитғабыҙҙың көньяҡ-көнбайыш яртыһы — Эске Башҡорт яғы (Үсәр-Ҡан йәки Үҫәргән тәүырыуының «Ҡан» яртыһынан үрсегән Ҡанлы//Кангюй//Канка, Ҡыпсаҡ//Половец, Башҡорт//Пицигит//Паскатир ҡәбиләләре тарафы); ә иһә төньяҡ-көнсығыш яртыһы — Тышҡы Башҡорт яғы (Үсәр-Ҡан йәғни Үҫәргән тәүырыуының «Үсәр» яртыһынан үрсегән Үҫәр//Сэр//Усень, һәм дә йәнә Ҡатай//Кидань//Хат//Хэт һәм Бәжәнәк//Бәшнәк//Печенег ҡәбиләләре тарафы).

Ҡатламлы түңәрәк-урааталарҙы ике яртыға бүленмәгән бер бөтөн рәүешендә ҡараһаҡ, үҙәген — Үҫәргән (Үҫәргән-Ҡанлы), икенсе ҡатламын — Ҡатай-Ҡыпсаҡ, ә өсөнсө иң тышҡы ҡатламын иһә Бәжәнәк-Башҡорт игеҙәк ырыуҙары биләгән, уларҙың ҡитғала урынлашыу ҡануны ла шуға ярашлы булған. Бына ни өсөн V быуатта бәжәнәктәр (һундар; сөнки һун//сун — ҡыр, йәғни «ҡыр-дала кешеләре» тигән һүҙ), ҡитғаның көнсығыш ҡырыйындағы йәшәү шарттары насарланыуы сәбәпле, үҙҙәренең шул көнсығыштағы Тышҡы Башҡорт тарафынан ҡубынып, Эске Башҡорт аша үтеп китеп, баяғыса үҙҙәренең өсөнсө түңәрәк-уратала урынлашыу ҡануны буйынса, ҡитғаның Алыҫ Көнбайыш ҡырыйында (Башҡорт яғында) үҙҙәренә Хоҙай Бабай тарафынан бирелгән һәм тейешле булған биләмәләргә — Көнбайыш Европаға ябырылалар («халыҡтарҙың бөйөк күсенеү» дәүере)...

Сыңғыҙ-хан бабам менән Муйтән-бей бабам

Тарих тойғоло һәм белемле һирәк-һаяҡ әҙиптәребеҙҙең береһе Аҫылғужа Баһуманов сәйерһенеберәк яҙҙы бер заман:

«Актерҙар йорто. Яҙыусыларҙың дөйөм йыйылышы. Тарих һәм тарихи темаға әҙәбиәт тураһында һөйләшәбеҙ. Ғәҙәттәгесә, президиум ултыра. Мин сығыш яһарға иң алдан яҙылһам да, һүҙ бирмәйҙәр әле, сөнки Президент

Рәхимов һәм уға эйәргәндәр әҙәп өсөн ултырып китергә тейеш. Улар һәм телевидение киткәс кенә тейә миңә сығыш яһау бәхете.

Бына трибунаға Йыһат ағай Солтанов менде. Сығышының аҙағында, ярһып китеп, һалмаһынмы хәбәрҙе: «Сыңғыҙ-хан башҡорт булған!»

Тәгәрәп ятып көлдө зал. Айырыуса Тамара Ғәниева рәхәтләнде — шаңғыраны ғына. Мыҫҡыллы көлөүҙәрҙән Йыһат ағай ҡаушабыраҡ ҡалды, сығышын тоҡос ҡына бөтөрөп, трибунанан төшөп китте. Һүҙҙе Ғәлим Хисамовҡа бирҙеләр, шунан һуң ғына сират тейҙе миңә. Микрофонды ситкәрәк эттем дә былай ҙа көслө тауышыма ғәйрәт индереп әйттем:

— Йыһат Солтановтың сығышын ниңә көлкөгә һабыштырҙығыҙ әле? Аңтоңдо белмәйенсә! Тарихты белмәгән көйөгөҙгә!» («Ағиҙел» журналының 1999/6 һаны, 176-нсы бит).

Хаҡ һүҙҙәр. Белмәгәндең беләге тыныс — белгәндәрҙе тинтәккә һанап, йығылып ятып һәм шаңғыртып көлөүе лә ап-анһат бит ул үҙенең рухи наҙанлығын «йән сәләмәтлеге» итеп һанаусы меҫкен миңрәүйәндәргә. «Белмәү ғәйеп түгел, белергә тырышмау ғәйеп», — тигән ата-баба һүҙен һанламай, «шаңғыратабыҙ» ғына шул...

Ләкин ошо «сәйер» әҙәм Йыһат Солтанов өсөн ысынлап та кемдәр һуң улар — Сыңғыҙ-хан менән Муйтән-бей?..

Ауылым, ырыуым, нәҫелем тәүәрихенә, шәжәрәмә туранан-тура бәйле булғанлыҡтан һәм дә ошо хикәйәтемдең артабанғы ағылышы ла уларһыҙ һәм уларҙың тоҡомдарыһыҙ була алмағанлыҡтан, минең ҡанымда ҡандары ҡайнаған алыҫыраҡ шул ике бабам тураһында бер килке мәғлүмәт бирмәйенсә булмайҙыр.

1155 йылда боронғо Башҡортостаныбыҙҙың Һаҡмар (Саҡмар) һәм Таналыҡ йылғалары аралығында «Бурхан тау»ға яҡын ерҙә шул «Бурхан» — Бөрйән ырыуы башҡорто Темәсйән (аҙаҡ Сыңғыҙ-хан) бабабыҙ донъяға килә. 1240 йылда (Сыңғыҙ-хан үлгәндән һуң 13 йыл үткәс) башҡорт сәсәне тарафынан ҡытай иероглифтары ҡулланып яҙылған һәм һуңынан монголсалатып уҡылған (уны, ҡытай иероглиф яҙыуын, башҡортсалатып та уҡырға булыр ине!) һәм хәҙер «Йәшерен хикәйәт» тип йөрөтөлгән тәүәрихтә Бөрйән ырыуы — Борчжигин, бабабыҙ Темәсйән — Темучжин тип, Һаҡмар (Әсәк-мәр йәғни Әсә-һыу) йылғабыҙ — Онон (Ана-йылға) тип бәйән ҡылына. (С.А. Козин. Сокровенное сказание. М. — Л., 1941. Был «Йәшерен хикәйәт»те артабан Й.Х. тип кенә бирәбеҙ). Бер үк йылғаның ике төрлө аталышының сере ул һүҙҙәрҙең мәғәнәһе аша сиселә: Саҡмар — Әсәк-мәр («Әсә-йылға») һәм Онон//Анан — «Ананың (инәнең йәғни шул уҡ әсәнең) һыуы». Күренеүенсә, Әсәк//Анан — икеһе бер мәғәнәлә (борон заман Һаҡмар һыуын «Анан» тип тә исемләгәндәр, тимәк). Ә Таналыҡ йылғаһының исемен ул ҡомартҡыла шул көйөнсә — *«Теңелик»* тип яҙғандар. Ундағы боронғо «Бурхан» тау — хәҙерге Бүребай ҡасабаһы эргәһендәге тау икәнлеге шәйләнә («хан» -- «бай»ға алмаштырылып), шулай уҡ «Бүрхан» -- «Бөрйән» икәнлеге лә үтә күренә...

Билдәле булыуынса, Темәсйәндең атаһы Иҫәкәйҙең вафатынан һуң (уны татарҙар ағыулап үлтергән), беренсе ҡатынынан — дүрт ул һәм бер ҡыҙ, икенсеһенән ике ул ҡалып, улар янына Темәсйәндең йән туғаны (побратимый) Йәмуха (Джамуха) ла өҫтәлеп, тол ҡалмыш Ай-Луна-әсәй (Оэлун-учжин) шул ете

малайы менән бергә үҙҙәренә ҡан-ҡәрҙәш һалйыуыттар (был да башҡорт ҡәбиләһе) йәйләүендә ҡағылып-һуғылып, аслы-туҡлы көн күрә. Ағалы-энеле ете малай сикһеҙ интегә бында. Һалйыуыт ҡәрҙәштәренең ситләтеүе шул тиклем дә аяуһыҙ була ки, бер көн иртән Тарғытай Кирелтуҡ менән Төҙөгән Кәртә исемле түрәләр башлығындағы һалйыуыттар яңы йәйләүгә күскән саҡта Иҫәкәйҙең ырыуы бөрйәндәрҙе лә үҙҙәре менән бергә алып китһәләр ҙә, Ай-Луна-әсәне кескәй балалары менән, малһыҙ-ниһеҙ, таянысһыҙ килеш, ошо Башҡортостандағы иҫке йәйләүҙә торғоҙоп ҡалдыралар.

«Ай-Луна-әсә тыумышынан аҡыллы ҡатын ине, — тип әйтелә Й.Х.-ла. — Үҙенең бәләкәй балаларын тәрбиәләп, тол ҡатындың әрһеҙ кәпәсен башына кейеп, күлдәк итәген билбауы аҫтына күтәрә ҡыҫтырып, Һаҡмар (Онон) йылғаһы буйын үрле-түбәнле ҡыҙырҙы, ҡырағай алма, муйыл емештәрен бөртөкләп йыйып, көнө-төнө балаларын туйындырҙы. Тыумышынан уҡ ҡыйыу һәм изгелекле әсә, хоҙай рәхмәтендәге изге балаларын ҡәҙерләп, йүкә ҡурысынан үргән ҡуҙы-тубалын беләгенә элеп ялан ҡыҙырҙы, сарана//һарана (судуна[57]) тамыры ҡаҙып, кесерткән (кичигин) йыйып туйҙырҙы тамаҡтарын.

Әсәнең муйыл да һуған ашатып үҫтергән балалары хан дәрәжәһенә ирешерлек булып етеште. Хыянатһыҙ әсәнең үлән тамырҙары ашатып үҫтергән балалары ғәҙеллекле, аҡыллы булып сыҡтылар.

Гүзәл әсәй сарана-әсәк//саранәсәк (сарымсаҡ[58]//һарымһаҡ) ашатып үҫтергән кемһәләр — батыр улдар булдылар, Юғары дәрәжәләргә ирешкән дәүләт эшмәкәрҙәре булдылар»... (Й.Х., параграф 75).

Темәсйәндең (буласаҡ Сыңғыҙ-хандың) балалыҡ һәм үҫмер йылдары башҡорт халыҡ ижадында ла (Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Бишенсе китап. Өфө — 1983, № 181; артабан бирелә: Б.Х.И.), һәм шулай уҡ монголдарҙыҡы тип яңылыш һаналған баяғы «Йәшерен хикәйәт» (Й.Х., 1, 28, 63, 74, 75, 76, 77, 82, 105, 110, 111-енсе параграфтар) тәүәрихендә лә ике тамсы һыуҙай бер үк төрлө тасуирлана. Икеһен тиң йәнәшәләп-сағыштырып ҡарайыҡ:

Б.Х.И. Бер бабайҙың булған, ти, ете улы.

Й.Х. Иҫәкәйҙең ете улы.

Б.Х.И. Малайҙар балыҡ ҡармаҡлап, һунарға йөрөп тамаҡ туйҙыралар.

Й.Х. Малайҙар балыҡ ҡармаҡлап, ҡош аулап тамаҡ туйҙыралар.

Б.Х.И. «Арала берәү була бит инде. Быларҙың да эштәре гел көйлө бармаған. Бер ағай гел генә туғандарынан ситләшеп, башҡалар һүҙенә ҡолаҡ һалмай, үҙһүҙләнер булған... Яңғыҙы ярты яҡ тартып йөрөгәнгә, уға «Яңғыҙаҡ» тип исем ҡушҡандар, ти».

Й.Х. Темәсйән һәм башҡа туғандары араһында низағ тыуа, Темәсйән хатта Балағатай[59] тигән бер туғанын үлтереүгә тиклем барып етә. Ай-Луна-әсәй

---

[57] Судуна — ҡытай яҙмаһында «р»-лы иероглиф булмағанлыҡтан, уны «д»-ға алмаштырып, «суруна» (сарана) урынына «судуна» тип яҙғандар һәм уҡығандар.

[58] Текста «голый чеснок» тип тәржемәләнгәндең «голый» тигәне, моғайын, «сарана-әсәк»тең «әсәк» өлөшөн «асыҡ» тип аңлауҙан хасилдыр (йә булмаһа хәҙерге телебеҙҙәге «ҡоро һарымһаҡ» мәғәнәһендәлер).

[59] Балағатай — башҡорт ырыуҙарының береһенең исеме.

Темәсйәнде ҡәһәрләп, былай ти: «Ҡарынымдан яҡты донъяға усында ойошҡан ҡан йомарлап тыуыуы юҡҡа түгел икән шул»...

Б.Х.И. Малайының үҙһүҙлелегенә «бабай бик көйөнгән. Үлеп киткәнсе: «Берлектә — бәрәкәт, тарҡаулыҡта — һәләкәт», — тип ныҡыған булды, ти».

Й.Х. Боронғоларҙан килгән шул уҡ атай өгөт-нәсихәтен Ай-Луна-әсәй ҙә ныҡып ҡабатлай.

Б.Х.И. Яңғыҙаҡ, бер туғандары менән килешә алмай, «Көсөм бар, миңә нимәгә таяныс, — тип, ағай-энеләренән айырылып, тау, урмандар араһындағы бер аҡланға барып нигеҙ ҡорҙо, ти»...

Й.Х. Үҙ-ара низағлашып тарҡауланған туғандарҙы көтмәгәндә һалйыуыттар[60] (тайчжиуты) килеп баҫа, Темәсйән тау, урмандар артына ҡаса ла Туғын-Ындыр (Тэгунэ-Ундур) тигән ерҙә боҫоп, йәнен һаҡлап алып ҡала. (Лубсан Данзан. Алтан Тобчи. М., 1973; 76-нсы бит. Артабан: Алтан Тобчи). Бик мөһим мәғлүмәт: Туғын//Туҡан — тәгәрмәсҡалабыҙ Арҡайым емеректәре ырҙынланып ятҡан, тәгәрмәс туғынына оҡшаған урын был! Бик мөһим булғанға күрә лә Үҫәргән батшалар шәжәрәһендә Темәсйән бабабыҙ шул Туҡан-Арҡайым исеме менән «Туҡан-хан» тип теркәлгән. (СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы китапханаһы. РБ — 2279. Үҫәргән тәүәрихе, 39-ынсы бит. Артабан: «Үҫәргән тәүәрихе»). Ләкин бер көн килеп уны, Темәсйәнде, һалйыуыттар әсир итәләр, муйынына ағас боғалаҡ һалып, Һаҡмар (Онон) буйына алып ҡайтып китәләр. Әсирлектән һәм үлемдән уны Үҫәргән-Сура (Соргон-Шира) — йәғни Үҫәргән ырыуынан Сура тигән кеше ҡотҡара.

Б.Х.И. «Шулай йәшәп ятҡанда, тирә-яҡты шом баҫҡан: уның яңғыҙ йәшәүен ҡараҡтар һиҙеп ҡалған. Тәүҙә бер өйөр башы йылҡы юғалған. Шунан икенсе өйөрҙөң айғыры үрештән ҡайтмаған»...

Алтан Тобчи, 79-ынсы бит: «Ҡараҡтар килеп», Темәсйәндең һигеҙ ҡола атын урлап китәләр.

Б.Х.И. «Шулай аңҡы-тиңке килеп йөрөгән арала ҡараҡтар төнөн килеп, бының... ҡатынын да тартып алғандар... Өс ҡараҡ Яңғыҙаҡты бер мөйөшкә ҡыҫырыҡлай башланы, ти... Яңғыҙаҡ үҙе ҡара урманға ҡасып, йәнен саҡ ҡотҡарып алып ҡалған». Ә ҡатынын урлап алып китәләр.

Й.Х. Таҡта-хан етәкселегендәге Мәркет хәрби берләшмәһенең өс бейе, йәғни Мәркет ырыуынан Таҡта, Убасы-Мәркет (Өфөсө-Мәркет) ырыуынан Дәү-ир-Үҫен (Үҫен — Үҫәргән ырыуының көнсығыш тармағы), Ҡатай ырыуынан Тармалы, ғәскәр менән Темәсйән йортон килеп баҫалар. Темәсйән йәшеренгән Бүребай йәки Бөрйән (Бурхан) тауын өс тапҡыр ҡамаһалар ҙа, Темәсйәнде тота алмай, уның ҡатыны Бүртәне урлап алып китәләр. «Алтан Тобчи» (84-енсе бит) был урынды беҙ белгән хәҙерге Бүребай (Бурхан) тауы эргәһендәге Таналыҡ (Түңәлек) йылғаһы буйында, тип билдәләй.

Б.Х.И. Яңғыҙаҡ, үҙенең алты ағай-энеһе менән берләшеп, ҡатынын урлаған өс ҡараҡтың йорт-ерен барып баҫа ла уларҙы ҡырып ташлай һәм ҡатынын әсирлектән ҡотҡарып алып ҡайта.

---

[60] Хәҙерге Һалйыуыт ырыуы башҡорттарының бабалары.

Й.Х. Темәсйән, кирәйҙәр (кереит) ханы Туғрил (кирәйҙәр — хәҙерге башҡорт ырыуы гәрәйҙәрҙең боронғо бабалары) һәм йән дуҫы Йәмуха менән берләшеп, Мәркет ылыҫын (улусын) барып баҫа ла һәммәһен тар-мар ҡыла, ҡатыны Бүртәне әсирлектән ҡотҡарып алып ҡайта...

Башҡорттоң «Бөрйәндәр хан замандарында» тигән риүәйәтендә лә Сыңғыҙ-хан тураһында тап «Йәшерен хикәйәт»тәгесә бәйән ҡылына. (Б.Х.И. Риүәйәттәр, легендалар. Өфө — 1980; 155-енсе бит).

Буласаҡ бөйөк Сыңғыҙ-хандың бала сағына һәм йәшлегенә бәйле ваҡиғаларҙың тап Башҡортостан тупрағында булғанлығын, унын, әсәһенең һәм яҡындарының тап башҡорт икәнлектәрен тәрән йөкмәткеле һәм бай мәғлүмәтле Ирәкте башҡорттары шәжәрәһендә лә күрәбеҙ (урыҫсаға тәржемәһенән алынды):

«В старых шеджере предков нашего рода, которые были у меня в руках, башкира Ирякте, насколько хватает моего разумения, я возвожу к разыскавшему Чингиз-хана и передавшего его матери Алан-гува-ханым Майкы-бию по прозвищу Уйшун (Задумчивый)...

Выше я уже написал, что имевший прозвище Задумчивый Майкы-бий по приказу матери Чингиз-хана разыскал его. Из старых шеджере видно, что когда Чингиз-хан понял, что старшие братья завидуют ему настолько, что собираются убить его, он покинул свою землю и бежал. Мать Чингиз-хана направила на его поиски посыльных, одним из которых становится Майкы-бий»... (Башкирские родословные. Выпуск первый: издание на русском языке. 2002, Уфа — «Китап», с. 391 — 392, № 27).

Инде бөйөк бабаларымдың икенсе береһенә — Сыңғыҙ-хандың уң ҡулы һәм беренсе таянысы, ышаныслы урынбаҫары, бөйөк дәүләтенең алтын өрләгө, Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге алтын ҡулса — Туҡсаба улы Муйтән-бейгә күсәйек.

Темәсйән, баяғыса, Иртыштың көнсығыш яғында Мәркет хәрби берләшмәһен тамам ҡыйратҡас, даны бөтә тирә-яҡҡа таралып, башҡорт һәм монгол ырыуҙары күпләп уға килеп баш эйә, урҙаһына кереп берләшә башлай. Әйтеп үтеүебеҙсә, 1240 йылда уҡ ҡытай иероглифтары менән яҙылып, аҙаҡ монголсалата боҙоп уҡылған был Сыңғыҙ-ханға ҡушылыусы ырыу һәм исемдәр араһында ҡайһы бер башҡорт бабаларын көсәнмәй танып була, мәҫәлән, былай тип әйтелә унда: килделәр Тарғыттан — Ҡаҙаған-Талтар-хан үҙенең биш ҡустыһы менән. Меңетәй-Ҡиян улы Уңғар — үҙенең Һалйыуыт һәм Баяуыт ырыуҙары менән. Барлас (Барулас) ҡәбиләһенән — Ҡубилай-Ҡотос үҙенең ҡустылары менән. (Барлас — хәҙерге Һалйыуыт ырыуы башҡорттарының бер араһының ораны. — А. Камалов, Ф. Камалова. Атайсал. Өфө — «Китап» — 2001; 408 — 409-ынсы биттәр. Әйткәндәй, донъяға билдәле йыһангир Аҡһаҡ Тимер ҙә шул Һалйыуыттың Барлас араһынан булған). Маңҡот ҡәбиләһенән — бер туған Етәй менән Туҡылҡы-Сәрби. Уран (Урянхан) ҡәбиләһенән бүленеп, ағаһы Елмә эргәһенә уның кесе бер туғаны Сабырхан-Сүбәҙәй-Батыр килде. Башҡорт (Бесуд) ҡәбиләһенән бер туған Даға һәм Көсөкөр килде. Шулай уҡ һалйыуыттарға ҡараған Сулдус ҡәбиләһе кешеләре, ә атап әйткәндә, Елгетай-Тәкә үҙенең ҡустылары менән килде... Шулай уҡ бер ауыл барындар (Барын-ауыл – Барнауыл,

хәҙерге Алтайҙағы ҡала) килде: Ҡорсо-Өсән ҡартлас һәм Күке-Сос үҙенең Менән-Барын (Барын-Табын ырыуы) кешеләре менән...

Был урында беҙҙе ҡыҙыҡһындырғаны — тағы ла бер ырыу исеме булыр — былай тип дауамлана унда: Йылайырҙың Туҡран араһынан килде — өс бер туған туҡрандар: Хажийән-Туҡран, Ҡараҡай-Туҡран һәм Ҡаралтай-Туҡран... Йәнә лә Йылайырҙан — Сөсө-Тамаҡ һәм Арҡай-Ҡасар-Бала үҙенең уландары менән... (Й.Х., параграф 120). Һуңғылары артабан Темәсйәнгә хыянат ҡылып, уның ҡан дошмандары татарҙар яғына сығып киткәс, татарҙарҙы ҡырған яуҙа Темәсйәнгә әсир төшөп, язалап үлтереләләр.

Ләкин ниндәй ырыу һуң ул Йылайыр ырыуы? — тигән һорауға: «Үҫәргән ул», — тип аныҡ яуап бирәбеҙ.

«Р» менән «л»-дың алмашынып йөрөүен иҫәпкә алһаҡ, бер үк һүҙҙең ике төрлө яҙылышын күрәбеҙ: Үҫәргән//Үҫәлгән. Был ҡушма һүҙ түбәндәге тамырҙарға тарҡала:

Әс-ал-аҡ-ан — әсәлҡан//әсәргән (Үҫәргән). Һәм:

Әс-ал-аҡ-ир — салаҡир//жалайир (Йылайыр).

Күрәһегеҙ: ике термин бер-береһенән аҙаҡтағы «ан» (ана йәғни ҡатын кеше) һәм «ир» (ир йәғни ата кеше) өлөштәре менән генә айырыла, йәғни икеһе бер үк термин, тик беренсеһе, урыҫса әйткәндә, — женского рода, икенсеһе — мужского рода. Ҡалған өлөштәрҙең мәғәнәләре: әс — әсә йәки һыу-һөт; ал-аҡ — ал-аҡ төҫтәге Көн (ҡояш). Тимәк, мифтарыбыҙға бәйле, терминдар артындағыларҙың икеһе лә — Әсә-Көн кешеләре йәғни Шүлгән-башбаба тоҡомдары үҫәргәндәр. Сөнки:

Әсә-ал-Көн//Әсәлҡан (Үҫәргән) — Сәлгән//Шүлгән. Ә Дәү Хоҙайыбыҙ тарафынан Донъя-Ғаләм-Тереклек яратылыуы тураһындағы миф буйынса, күктә йөҙөп йөрөгән Көн (ҡояш) — Шүлгән-башбабаның үлеп тарҡалып һыу-һауаға әүерелмеш «кәүҙә»һенән айырылған һәм ергә йәшәү саҡкылары һибеп янған мәңге үлемһеҙ «баш»ы ул. Шул уҡ ваҡытта Ай — Урал-башбабаның шундай уҡ «баш»ы...

Ҡыҫҡаһы, «Йылайыр ырыуы» тигәндәре — Үҫәргән ырыуы икән. Бөгөнгәсә Йылайыр йылғаһының Үҫәргән ере үҙәгендә булыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй.

Иртыш йылғаһының көнсығыш яғындағы Көньяҡ Себер далаларында кинәт көсәйеп алған, шундағы бөтә ҡәүемдәрҙе үҙ тирәһенә туплап, үҙ илен ҡора башлаған ҡан-ҡәрҙәше Темәсйәнгә ҡарата Бөйөк Башҡортостан *көнәсе* (йәки *көләре*) Туҡсаба Ҡаҙансы улының мөнәсәбәте ҡайһылай булған һуң?

Быны асыҡларҙан элек, Бөйөк Башҡортостандағы Үҫәргән батшалар шәжәрәһе вәкилдәренең ул заман батшалыҡ дәрәжәһе атамаларын (титулдарын) аңлатыбыраҡ бирәйек.

Сал Афина һәм Рим ҡалаларынан да салыраҡ баш ҡалабыҙ Көн-Өфө (хәҙерге Өфө) алтын тәхетендә Бөйөк Башҡортостан менән идара итеүсенең дәрәжә атамаһы — *көнәс* йәки *көләр.* Был «Көн-әс» (Ҡояш-әсә) — ҡарыһүҙ (миф) буйынса Үҫәргән тәүырыуының башбабаһы Шүлгән-әсәнең Ҡояш булып әүерелмеш үлемһеҙ башына ишара, шунан хасил булалыр *көн (көн-би) — ҡан*

(хан) титулдары. Бөйөк Башҡортостандың (урта быуат көнбайыш сәйәхәтселәре ватаныбыҙҙы «Һунгария майор» — «Бөйөк Бүре-ирҙәрҙең өйө» тип юҡҡа ғына атамаған: бында һуна//шуна//суна — «бүре» тигән һүҙ) тәхет эйәһе — Көн-әсәнең ерҙә әҙәми ҡиәфәттәге кәүҙәләнеше, тимәк. Шул «көнәс(ә)»нән яһалған да инде *көнәс//кенәз* титулы; мәҫәлән, шәжәрәбеҙҙәге кенәз Бикбау Тәтегәс улы һәм Рәсәй батша Сенаты указындағы «кенәздәр тоҡомо тархан Боҫҡон Даянов» (минең атам яғынан да, әсәм яғынан да яҡын бабаларымдың береһе). «Көләр» (көл-әр) титулы иһә шул уҡ «көн» («көл» дә шул уҡ «көн»: «көләс-ҡояш» тибеҙ) һәм ул, тәүге вариантынан айырмалы булараҡ, уға «ир» (әр) өлөшө ҡушылыуҙан хасил; был иһә әсә заты Көндөң ир (ата) затына — Айға әүерелеүен күрһәтә (Ай — Башҡорт тәүырыуының башбабаһы Урал-атаның үлемһеҙ башы, имеш). Фарсы тәүсығанаҡтарында ул осор Бөйөк Башҡортостан батшаһының «көләр» титулы менән аталышы — бөтә ырыуҙарыбыҙҙың «берәгәй хоҙай» Уралға табыныуҙарын (Сураш-Тора — Зороастр дине) һәм дөйөм «башҡорт» исеме аҫтында йөрөүҙәрен күрһәтә. Шуға бәйле рәүештә, Бүре-әсән//Бөржән ырыуы башҡорто Сыңғыҙ-хандың байрағы *аҡ* — Асман (Әсәм-анам) йәғни күктәге яҡтылыҡ төҫөндә булһа, Бөйөк Башҡортостан *көләре* (батшаһы) улының, йәғни Туҡсаба улы Муйтән//Мухали *мырҙаның* шундай уҡ төҫтәге байрағының уртаһында *ҡара ер* төҫөндәге Ай һүрәтләнер булған. (Мэн-да бэй-лу. М., 1975; 187-нсе бит).

Көнәс (кенәз) улының *мырҙа* (принц) титулына килгәндә, ул Бүре-әсә — бүрҙә — *мырҙа* рәүешле хасил булған. Бүре-әсә — күктәге Көн-әсәнең (ҡояштың) ерҙәге кәүҙәләнеше, ә Үҫәргән ырыуының башбабаһы Шүлгәнде иһә Бүре-әсә имеҙеп үҫтергән. Көнәс//кенәз балаларының иң өлкәне алтын тәхеттә атаһын алмаштырған һәм көнәс//кенәз титулын алған. Башҡа мырҙалары көнәс//кенәзгә бойондороҡло ырыуҙар берләшмәһенә (иләүенә йәки иленә) *солтан* итеп тәғәйенләнгән («солтан» — сүл-атан йәғни ҡояштан нур алыусы Ай, тигән һүҙ), йә иһә шулар уҡ ырыуҙарҙың башлыҡтары — *бәк//бей//бай* итеп беркетелгән...

Муйтән-бейҙең Сыңғыҙ-ханда аманат (дипломат) булып ҡалыуы

Һәм бына минең туранан-тура ҡанбабаларҙың эҙе: Темәсйән яуының ҡулына төшкән Үҫәргән (джургэн) кешеләре араһында Йылайырҙың (йәғни Үҫәргәндең!) Тулғата Байан улдары — Ҡоман-гүзәл, Селәүһен Ҡайсы һәм Ябаға исемле уҙамандарҙың да барлығы асыҡлана -- Сыңғыҙ-хан урҙаһына Башҡортостандан илсе итеп ебәрелгән был инсандарҙы юлда саҡта уның (Сыңғыҙ-хандың) яугирҙәре осраҡлы рәүештә тотоп килтерәләр (Алтан Тобчи, 109-ынсы бит).

«Үҫәргән тәүәрихе»ндәге шәжәрә буйынса самалаһаҡ, әле әйтелгән Тулғата Байан — Бөйөк Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Көн-Өфө тәхетендә ултырған кенәз//көләр Ҡаҙансы Тура улына, ә Ҡоман[61]-Гүзәл — Туҡсаба Ҡаҙансы улына,

[61] Ҡоман — ошо бабанан беҙҙең Солтановтарҙың ҡома//ҡама араһы киләләр.

Селәүһен Ҡайсы — Ҡарада Ҡиә Ҡаҙансы улына һәм Ябаға — Ислам Ҡиә Ҡаҙансы улына тура килә. Был өсәү тап Көн-Өфө тәхет эйәһенең улдары икәнлеген ышаныслы тоҫмаллатҡыс мәғлүмәт бар ҡытайҙар тәүәрихендә. Беренсенән, уларҙың атаһы Ҡаҙансы, ошо исеме менән түгел, ә үҙе тәхеттә ултырған баш ҡалаһының исеме менән ләҡәпләнә унда, ҡытайҙар тәүәрихендә: «*Кун-вэнь* ***Ку-ва***» йәки «*Кун-вень* ***У-хэ***». Быларҙан шул күренә: Кун-вэнь тигәне — Көн-Апан (Көн-Әсә), Ку-ва тигәне — Ҡоба (хәҙерге Өфө торған Ҡоба тау), йәғни «Ҡоба тау ҡалаһының көнәсе//кенәзе»; *ләҡәптең икенсеһе **(У-хэ)** лә шулай уҡ*: «Өфө (Өхө) кенәзе»... Икенсенән, «Ҡоба//Өфө кенәзенең биш улы бар ине: өлкәне Ху-лу-ху-эр, унан ҡала Ци-ли-ку-эр, унан ҡала *Мухали*, унан ҡала Буға һәм унан ҡала Дәүсун», — тип әйтелә ҡытайҙар йылъяҙмаһында. Тимәк, Муйтән-бей (Мухали) бабабыҙ — Ҡаҙансының уртансы улы булып сыға... Өсөнсөнән, Муйтән//Мухалиҙың ата-әсәһе ҡушҡан балалыҡ исеме — *Сәмиҡ* икән дә баһа! Һәм ул үҙенең ҡул аҫтындағы сәрдарҙарҙан, шулай уҡ яугирҙәрҙән дә үҙен, «Муйтән//Мухали» тигән рәсми ләҡәп менән түгел, ә шул ата-әсәһе ҡушҡан ысын исеме менән атауҙарын талап ҡылыр булған. (Мэн-да бэй-лу; 59 — 60, 155 — 157, 226-нсы биттәр). Шулай итеп, Үҫәргән шәжәрәһендәге Ҡаҙансыны, уның улы (Муйтәндең атаһы) Туҡсабаны юлланыҡ; ул һәм уның ҡустылары Иртыш йылғаһы — Бөйөк Башҡортостандың көнсығыш сиге — аръяғында, моғайын, Башҡортостандан Сыңғыҙ-хан ыҫтанына ебәрелмеш илселәр рәүешендә пәйҙә булғандарҙыр ҙа унда һуғыш барған осорҙа Темәсйән яуының ҡулына осраҡлы рәүештә килеп эләккәндәрҙер. Сөнки, ҡеүәтле хан урҙаһы менән мөнәсәбәттәрен нығытып, урҙала даими илсе (аманат) итеп Темәсйәнгә үҙҙәренең улдарын ҡалдырып китәләр бит. Уландарҙың исемдәрен ҡытай иероглифтарынан түбәндәгесә уҡыйҙар.

Туҡсабаның Сыңғыҙ-ханға аманатлыҡҡа ҡалдырған ике улы: 1. *Мукли-куен* (Мүкле ҡуйын йәғни төклө-йөнтәҫ ҡуйын)//*Мукали//Мухали* (Мэн-да бэй-лу, 132-нсе бит). Үҫәргән шәжәрәләрендә ул боронғоса Мүкле-тән//Мүктән тип әйтелешенән *Муйтән* булып үҙгәрешендә яҙыла. Тимәк, Мухали тигәндәре — үҙебеҙҙең тәне йөнтәҫ Муйтән-бей бабабыҙ икән дә! 2. Буҡа//Буха йәки Буға (үҙебеҙсә).

Селәүһен Ҡайсының да аманатлыҡҡа ҡалдырған ике улы: 1. Тухэ, ә үҙебеҙсә Туҡай; Үҫәргән һ.б. шәжәрәләребеҙҙә ул, шулай уҡ рәсми ләҡәбе менән булһа кәрәк, Туҡай тип түгел, ә Байҡы//Майҡы булып яҙыла; тимәк, үҙебеҙҙең *Майҡы-бей* бабабыҙ икән. 2. Хасар//Хазар.

Ябағы иһә, үҙ балаһы булмағанғалыр, моғайын, үҫәргәндәр («джургэн»дар) йәйләүенән Сыңғыҙ-ханға аманатлыҡҡа Бүреғол исемле бер малайҙы килтереп бирә (Алтан Тобчи, 109 — 110-ынсы биттәр).

Ҡытай тәүәрихтәренән билдәле булыуынса, Муйтән//Мухалиҙың ҡустыһы Буға — Сыңғыҙ-хандың йәнуҙағы (телохранителы), ә икенсе бер ҡустыһы Дәүсун (Дәү Бүре тигән һүҙ) — Сыңғыҙ-хандың ҡыҙына өйләнгән кейәүе — Сыңғыҙ-хандың шәхси гвардияһының башлығы булып хеҙмәт итәләр. Муйтән//Мухали бабабыҙ бер заман үҙе идаралыҡ иткән Төньяҡ Ҡытайҙан саҡыртып алынып, көнбайыш фронтҡа (урыҫ-ҡыпсаҡ ғәскәрен ҡыйратырға) ебәрелгәндән һуң,

урынына уның улы Бүре (Дәүсун) тәғәйенләнә һәм, «атаһы кеүек үк, Сыңғыҙ-ханға мөкиббән хеҙмәт итеп, 1228 йылда 32 йәшендә үлә», тип әйтелгән унда (Мэн-да бэй-лу; 155 — 156, 158-енсе биттәр). Был *Бүре*, моғайын, Үҫәргән шәжәрәләрендәге Муйтән-бейҙең улы Шаҡмал//Шаҡалдыр, сөнки «шаҡал» да бит «сүл бүреһе» тигән һүҙебеҙ... Шаҡмал улы Бүзәкте[62] (Бөжәкте йәғни буҙ бүрене) лә шәжәрәбеҙ: «Туҡан-хан (йәғни Сыңғыҙ-хан) заманында бәк булып, хөкүмәт ҡылыр ине», — ти бит — заманалары тап килә. Күренеүенсә, Муйтән//Мухалиҙың яҡын туғандарына ла бик ныҡ таяна Сыңғыҙ-хан.

Бына шул шанлы Муйтән//Мухали бабабыҙ, үҙенең зирәк аҡыллылығы, киң һәм тәрән белемлелеге арҡаһында яусыл Темәсйән урҙаһында ундағы һис кемгә күрһәтелмәгән ышаныс, ҡәҙер-хөрмәт ҡаҙана, Темәсйәндән шанлы Сыңгыҙ-хан яһаусы ла ул була. Сөнки Муйтән//Мухали бабабыҙ Онон[63] йылғаһы башында 1206 йылғы ҡоролтайҙа Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә Сыңғыҙ-ҡаған итеп күтәреүҙе ойоштора; шул уҡ ҡоролтайҙа Муйтән//Мухали үҙе лә Сыңғыҙ-ҡаған дәүләтенең Юғары Хөкөмдары (Судъяһы) итеп һайлана (Й.Х., параграф 202) һәм уға, Муйтән-бейгә, дәүләт юғарылығындағы иң ҡатмарлы мәсьәләләрҙе һәм тартыштарҙы ғәҙел итеп сисеү, хөкөм сығарыу хоҡуғы тапшырыла. Бөйөк ҡағандың ул уң ҡулы һәм таянысы рәүешендә һәр саҡ уның уң яғында ултыра, ә ике туған ҡустыһы Майҡы-бей, шундай уҡ рәүештә, ҡағандың һул яғын биләй. Сыңғыҙ-хандың атаҡлы йәшәү ҡанунының («Яҫау»ының) нигеҙен дә юғары белемле һәм зирәкйән Муйтән бабабыҙ һалған булырға тейеш. Башҡорт иленең иң юғарылыҡлы илсеһе булараҡ та бик уңышлы эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә Муйтән баба Сыңғыҙ-ҡағандан Обь — Иртыш дөйөм үҙәненән алып көнбайыштағы Иҙел — Ҡама дөйөм үҙәненәсә йәйрәп ятҡан Бөйөк Башҡортостан[64] дәүләтенең Сыңғыҙ-хан урҙаһына итәғәтле (хәҙергесә әйткәндә, *автономиялы*) үҙ аллылығын таныу ярлығы ала. Әммә шуға ла ҡарамаҫтан, Муйтән баба менән кәңәш иткәндәрме, юҡмылыр, киләһе 1207 йылында уҡ Сыңғыҙ-хан үҙенең өлкән улы Яусыға (Джучиға) ҙур ғәскәр биреп, туранан-тура Бөйөк Башҡортостан аша Алыҫ Көнбайышҡа үтергә лә “аттарының тояҡтары барып еткән” Атлантик океан ярҙарынаса бөтә донъяны яулап алырға бойора. Яусы-батыр, юлындағы барса Себер халыҡтарын бер-бер артлы еңеп һәм буйһондороп, Бөйөк Башҡортостандың ҡағылғыһыҙ көнсығыш сиге булған Иртышҡа килеп етә, ләкин башҡорт еренә үтеп керә алмай: Иртыштың көнсығыш ярында уҡ һағауылда торған башҡорт ғәскәрҙәре менән ҡаты бәрелештә еңелеп, Бөйөк Башҡортостан менән ике-ара тыныслыҡ килешеүе төҙөшөргә һәм, Бөйөк Башҡортостан тупрағына аяҡ баҫмайынса, һул яҡҡа ҡырт ҡайырылып, Урта Азияға табан урап үтергә мәжбүр була. Шул ике-ара килешеү буйынса, Башҡорт иле Яусы-батырҙың ғәскәрен үҙенең яугирҙәре, яу аттары, аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүҙе йөкмәй — артабан башҡорт яугирҙәре татар-монгол яуҙарының Урта Азияға, Иранға һәм Һиндостанға сәфәрҙәрендә туранан-тура ҡатнаша. 1236 йылдың көҙөндә Бөйөк Башҡортостанға килеп киткән Юлиан-

---

[62] Бүзәк — Үҫәргән шәжәрәләренең береһендә ул Бүрекәй тип тә яҙылған.

[63] Онон (Әсәк-мәр -- Һаҡмар) йылғаһы исемен Темәсйән менән бергә киткән бөрйәндәр Байҡал күле аръяғындағы йылғаға ла исем итеп илтеп ҡушҡан.

[64] Ҡарағыҙ: Башкирские шежере. (Филологические исследования и публикации). Уфа — 1985; 57-нсе бит. Артабан: «Башкирские шежере».

монах яҙып ҡалдырыуынса, татар-монголдар баяғы 1207 йылда Иртыш ярында башҡорттар менән «бәрелешкән саҡта уларҙы (башҡорттарҙы) еңә алмағандар, ә киреһенсә, беренсе һуғышта уҡ улар тарафынан еңелгәндәр. Шуға күрә уларҙы (башҡорттарҙы) үҙҙәренә дуҫтар һәм ҡорҙаштар итеп һайлап алғандар ҙа, шул рәүешле бергә ҡушылып, улар ун биш батшалыҡты башкөлләй ҡыйратҡандар». Күренеүенсә, Европаны (шул иҫәптән урыҫтарҙы) татар-монгол ябырылыуынан ул саҡтағы Башҡортостан ҡалҡаны ҡурсалап ҡалған, шул арҡала татар-монголдар стратегик ниәттәренә фәҡәт бик урау юлдан — Урта Азия һәм Төньяҡ Ҡафҡаз аша ундағы ҡәүемдәр менән һуғыша-һуғыша көстәрен бик ныҡ кәметеп, тиҫтәләгән йылдарҙан һуң ғына ирешә алғандар — унда ла тулыһынса түгел. Бына ошоно урыҫ тарихсыларына ла танырға ваҡыт.

Бөтөн ҡитғаны баҫып алырға илһамланған Сыңғыҙ-хан шул Көнбайышты яулау менән бер үк осорҙа көнсығышҡа ла ҡул һуҙа, шул йәһәттән 1214 йылда Муйтән//Мухалиҙы сәрғәскәр (ғәскәр башлығы) итеп ҡуйып, урынына Юғары Хөкөмдарлыҡҡа үҙенең аҫырау улы татар Шығай-Ҡотағаны билдәләй. Ә сәрғәскәр вазифаһындағы Муйтән//Мухали 1214 — 1217 йылдар һуҙымындағы өҙлөкһөҙ һуғыштарҙа Төньяҡ Ҡытайҙы яулап ала ла, әйтеп үтеүебеҙсә, Сыңғыҙ-хандың шундағы урынбаҫары итеп тәғәйенләнә (Татаро-монголы в Азии и Европе. «Наука», М., 1977; 38, 66 — 69-ынсы биттәр; Алтан Тобчи, 38-енсе бит). Күп йыллыҡ фиҙакәр хеҙмәттәре өсөн Муйтән//Мухали Сыңғыҙ-хандан дәүләттең иң юғарылыҡлы (ҡытай терминлы) *гоа* (сибәр, гүзәл), *гуи-онг* (дәүләт мырҙаһы), *чингизанг* (Сыңғыҙҙың премьер-министры), *тайши* (бөйөк остаз) тигән титулдарын ала, Сыңғыҙ-хандың иң ышаныслы туғыҙ «өрлөг»өнөң[65] иң ышаныслыһы була (Алтан Тобчи; 39, 363-өнсө биттәр).

Бөйөк Муйтән//Мухали бабабыҙҙың да йәшәү йылдарын асыҡларлыҡ мәғлүмәттәр күренә ҡытайҙар тәүәрихендә. Әйтәйек, бер урында «Мухали 1223 йылда 54 йәшендә вафат» тип яҙылған, ләкин был «вафат» тигәне дөрөҫ түгел. Сөнки тап шул 1223 йылда татар-монгол ғәскәрҙәре Аҙау диңгеҙе яҡаһындағы Ҡалҡа йылғаһы буйында берләшкән урыҫ-ҡыпсаҡ ғәскәрҙәренең бик ныҡ ҡаршылығына осрай ҙа, әйтеп үтеүебеҙсә, Сыңғыҙ-хан үҙенә Ҡытайҙы яулап алып биргән данлы сәрғәскәре Муйтән//Мухалиҙы Төньяҡ Ҡытайҙан саҡыртып алып, шул Аҙау яғына көнбайыш фронтҡа ебәргән булырға тейеш, ә ҡытайҙар үҙҙәре яғында дәһшәтле Муйтән//Мухалиҙың юҡҡа сығыуын уның вафатына тиңләгәндәрҙер. Сөнки Муйтән//Мухали бабабыҙ Сыңғыҙ-хан үлеп күп йылдар үткәс тә иҫән — Мәңке-ҡаған тарафынан ул 1254 йылда Хубилай менән бергә империяның көнсығыш (Ҡытай) биләмәләренең хәлен тикшерергә инспектор итеп юлландырылған[66]. (Мэн-да бэй-лу; 132 — 134-енсе биттәр). Шулай ҙа тәүге мәғлүмәттең бер ҡиммәте әйтеп бөтөргөһөҙ ҙур — 1223 йылда 54 йәшлек Муйтән//Мухали бабабыҙ 1169 йылда (1223 - 54=1169) донъяға килгән, тимәк! Ғүмеренең ахырын да фараз ҡылып беләбеҙ: татар-монголдарға ҡаршы баш күтәргән Бөйөк Башҡортостандың 35 йыл буйына һуҙылған ҡораллы көрәшенә йә — йәшерен, йә — асыҡтан-асыҡ етәкселек итеп, татар-монголдар тарафынан 1255

---

[65] Өрлөк — башҡорт һүҙе.

[66] Был, бәлки, уны тотоп алып үлтереү өсөн һылтау ғына булғандыр.

йылда 86 йәшендә хәҙерге Ирандың Мазендеран өлкәһендә ҡулға алынып юҡ ителгән. («Ағиҙел» журналының 1999/12 һаны; 126, 133-өнсө биттәр).

Инде кире артҡараҡ сигенәйек.

Сыңғыҙ-хандың вафаты

Көнбайышҡа урыҫ илен яуларға ебәрелмеш аҡыллы сәрдар Яусы (Джучи), Дон буйҙарына барып етһә лә, урыҫтар менән ҡапыл-ғара бәрелешергә ниңәлер ашығып бармай, эште оҙаҡҡа һуҙа: моғайын, Иртыш буйында башҡорттар менән һөйләшеп килешкән кеүек үк, урыҫ мәсьәләһен дә тыныс юл менән хәл ҡылырға йыйына. Атай әмерен еренә еткереп үтәмәгәне өсөн һарыуы ҡайнаған Сыңғыҙ-хан 1227 йылда Яусыны саҡыртып ҡайтарта ла йәшерен рәүештә билен һындыртып үлтертә, тик үҙе лә оҙаҡҡа бармай — шул уҡ йылдың августында Ордостағы хәҙерге Иньчуан (Ҡытай) ҡалаһы тирәһендә йән бирә (шундағы Чжамхаҡ йылғаһы буйында ошоғаса иҫтәлекле кәшәнәһе һаҡланған). Ләкин мәйетен уның тыуған яғына илтеп ерләйҙәр. Быны мәңгелеккә сер итеп ҡалдырыр өсөн, оҙон матәм юлы буйынса осраған һәр берәүҙе үлтерәләр, илдәге иң һылыу ҡырҡ ҡыҙҙы ла Сыңғыҙ-хан мәйете менән ҡуша ҡәбергә һалалар, имеш (Е.И. Кычанов. Жизнь Темучжина, думавшего покорить мир. «Наука», М., 1973; 128,.130 — 131-енсе биттәр. Артабан: Е.И. Кычанов). Мәрхүмде тыуған иленә оҙатышып, әлбиттә, иң беренсе таянысы, «өрлөг»ө Муйтән//Мухали[67] барған, дөрөҫөрәге, Башҡортостандағы Сыңғыҙ-хан ырыуы бөрйәндәрҙең төбәгенә алып ҡайтып ерләшкән булырға тейеш:

Мәңгелек Сыңғыҙ[68] тыуҙырған бөйөк батыр, хужабыҙ!
Һинең хаҡ халҡың,
Һинең улдарың һәм уларҙы тапҡан ҡатының,
Һинең тыуған хан ерең һәм һыуҙарың — шундалар бит!
Һинең бөтә ырыуың, туғандарың — шундалар бит!
Һине ҡойондорған һинең һыуҙарың,
Күп һанлы мәңгелдәрең[69] — һинең халҡың,
Анандағы[70] Түләгән-Балдаҡ, һинең тыуған ерҙәрең — шундалар бит!
Турайғыр кикеле эленгән һинең әләмең,
Һинең дөмбөрҙәрең, торба һәм борғоларың,
Һинең йор телле бөтә халҡың,

[67] Эренжен Хара-Даван тигән тикшереүсе 1929 йылда Белградта нәшер ителгән «Чингис-хан как полководец и его наследие» тигән китабының 129-ынсы битендә: «Мукали 1223 йылда үлгән», — тип яҙа, ләкин был дөрөҫ түгел, сөнки Муйтән//Мухали бабабыҙ шанлы сәрғәскәр сифатында 1224 йылда Төньяҡ Ҡытайҙа һуғышҡанлығы билдәле. (Е.И. Кычанов, 124-енсе бит).

[68] Сыңғыҙ (Зәңгәр) — боронғо динебеҙ буйынса, Зәңгәр-Күк Хоҙай йәғни Анабыҙ Һауа тигән һүҙ.

[69] Мәңгел//монгол һүҙенең төбөндә «мәңгелек» тигән мәғәнә ята, тип һанағандар. (Мэн-да бэй-лу, 89-ынсы бит).

[70] Анан (Онон) — хәҙерге Баймаҡ районындағы Һаҡмар йылғаһы буйы. Йәғни мифик “Ананан – Ана-Һыйырҙан башланғыс алған һыу.

Көрүлән[71] далаһындағы һин хан булып күтәрелгән Арал[72] — шундалар бит!
Һинең Бүртәгөлйән-катын, иң беренсе хәләлең,
Бураған-Тукан[73] — һинең тыуған ер-һыуың,
Бауырсы[74] һәм Мухали[75], һинең һөйөклө дуҫтарың,
Һинең бөтә бөйөк канундарың — шундалар бит!
Һинең менән мөғжизәле кауышкан Колон-катын,
Һинең ***курайҙарың*** *һәм һыбыҙғыларың, һәм йырҙарың,*
Бөтә халыктарың һинең тулайым,
Һинең изге хан ер-һыуҙарың — шундалар бит!
(Алтан Тобчи, 241 — 242-нсе биттәр).

Күрәһегеҙ, юл буйынса сеңләй-сеңләй, тыуған ере Уралға — Башкортостан тупрағына алып кайтып киләләр Бөрйән ырыуының бөйөк улы Сыңғыҙ-хандың мәйетен. Башкортка ғына хас моң-көй коралының исеменә — «курайҙарың» тигәнгә иғтибар итегеҙ! Бөрйән ырыуы башкорто Сыңғыҙ-хан ғүмере буйына курай (кур) моңон тыңларға бик яраткан, үҙе лә курай тарткан булырға тейеш, сөнки «хан курайын (курын) һаклаусы Жәбә исемле башкорт (бэсут)» билдәле, ә уның туранан-тура тоқомо Куширҙәй-курайсы (Куширдэй-куричи) XVII быуатта Ордоста йәшәгән. Был фактка аңлатма биреүсе Н.П. Шастина ошолай яҙа: «Сыңғыҙҙың курайын һаклаған музыкант тураһындағы был мәғлүмәттәр һис шикһеҙ кыҙыкһыныу уята... Күренеүенсә, Сыңғыҙҙың һарай музыканты — курайсыһы (хуричи) һәм ифрат кимммәтле моң-көй коралы булған». (Алтан Тобчи; 294, 386-нсы биттәр). Шуныһы ла кыҙыклы: курайыбыҙ хәҙерге монгол моң-көй коралы рәүешендә лә һакланып калған имеш: «*бишхур* — звук извлекается через камышовую трость» (Д. Мадар. Памятники истории и культуры Монголии. М., «Мысль», 1981; 130-ынсы бит). «Бишхур» тигәне — «биш тишекле курай», йә иһә «башкорт курайы» тигән һүҙҙер, моғайын...

Кош-корт, дошман күҙен яҙлыктырмакка, юл буйында барышлай уҡ бернисә урында Сыңғыҙ-ханды ялған ерләү йолаларын үткәреп, ә үлгән ере Ордоста — өҫтәрәк телгә алынмыш иҫтәлек-кәшәнәһен короп калдырып, һәм тыуған төйәгенә килеп етәрәк «*Муна* тауы янындағы һаҙлы-баткак урында... уның кейемһалымын һәм ойоктарын ерләгән «кәбер»е өҫтөнә лә тирмә короп» калдырҙылар... (Алтан Тобчи, 241-енсе бит). Үтә лә мөһим мәғлүмәт был: ялған ерләү йолаһы үткәрелгән «*Муна*» тауы тигәнгә иғтибар итегеҙ! Тәүәрихтәге ошо *Муна* — Сыңғыҙ-хандың ырыуҙаштары бөрйәндәр йәшәгән хәҙерге Баймак районы *Сыңғыҙ* ауылының боронғо исеме *Мунаш* бит! (Ә. Әсфәндиәров. Олатайҙарҙың бар тарихы. Өфө — «Китап», 1996; 65-енсе бит)... Ысын кәбере

---

[71] Караған йылғаһы (Яйыкка коя) һуғарған иркен дала — боронғо Тукан (Аркайым) калаһы төбәге.
[72] Арал — Урал тауҙары.
[73] Бураған-Тукан — боронғо Аркайым калаһы. Темәсйән башлап үҙенең хан дәрәжәһен шул төбәктә алғанлыктандыр, моғайын, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенә ул «Тукан-хан» тип теркәлгән.
[74] Бауырсы (табынсылар башлығы) — Табын ырыуының башбабаһы, бер үк вакытта Сыңғыҙ-хандың шәхси гвардияһының башлығы Бүрекәй Муйтән улы.
[75] Мухали — Муйтән.

тәғәйен ҡайҙалығын бик ныҡ йәшергәнлектән, берәү түгел — бер нисә мәғлүмәт быуындан-быуынға килә:

«Уның ысын мәйете, бәғзеләр һөйләүенсә, Бурхан-Халдун тауында ерләнгән. Башҡалары иһә уны — Алтай-хан тауының төньяҡ итәгендә йәки Кәнтәй-хан тауының көньяҡ итәгендә, йәки *Яга-Үтәк* тигән урында ерләгәндәр, тип һөйләй» (Алтан Тобчи, 242-нсе бит).

Темәсйәндең, йәш сағында, тыуған төйәгендә үҙенә янаған бәлә-ҡазанан ҡасып, емерек Туҡан (Арҡайым) ҡалаһын янлап аҡҡан һәм Ҡарағанға (Көрүләнгә) ҡушылған *Үтәгән* йылғаһы буйында йәшәп алғанлығын белгәнлектән, тарихнамәлә әйтелмеш *Яга-Үтәк* тигәнде, һис ҡыйынһынмай, шул «*Үтәгән* йылғаһы *ягы*» йәки *“Үтәгән* йылға *яҡаһы”* итеп ҡабул ҡылабыҙ. Ә көнсығыштан былай табан килә яҡтандағы ул *Үтәгән ягы* — шулай уҡ хәҙерге Сибай тәңгәлендәге Яйыҡ, Таналыҡ, Һаҡмар йылғалары буйы ла бит ул шул уҡ ваҡытта — тәүәрихтәге Темәсйәнде (Сыңғыҙ-ханды) тыуҙырған изге еребеҙҙең йылғалары!

Йәшлегендә шул тирәлә һунарҙа йөрөгәнендә, Темәсйән бер яңғыҙ тирәк төбөндә ятып ял иткән һәм йәненә хозур еңеллек алған. Шуға күрә лә күңеленә нык оҡшаған был төбәк тураһында: «Вафат булғас, мине ошонда килтереп ерләрһегеҙ», — тип әйтеп ҡалдырған, ти (Е.И. Кычанов, 130-ынсы бит). Был урынды, әлеге лә баяғы, хәҙерге Баймаҡ районының *Сыңғыҙ* ауылы ултырған ер итеп ҡарамай булмай, сөнки тап шунда, Сыңғыҙ тигән ауыл исеменән тыш, *Сыңғыҙ-ханга* бәйле тағы ла бик мөһим ике нәмә бар. Уларҙы бөтәбеҙгә билдәле булған мәшһүр Р.Г. Игнатьев 1864 йылда уҡ тикшереп, бөтәбеҙ өсөн аманатлап ҡалдырған. Бына тап шул ғилми-рәсми мәғлүмәт: «Чингизовский вал (городище?). Дер. Чингизово, Баймаҡский район. В четырех верстах от деревни, на левом берегу р. Сакмары, в устье Асили находятся остатки вала окружностью 84 сажени с двумя воротами, по преданию «Ставка Чингиз-хана». Игнатьев Р.Г., 1864».

Һәм ниһәйәт: «Чингизовский курган. Дер. Чингизово, Баймакский район. В трех верстах от деревни, на правом берегу р. Сакмары, в 300 метрах от берега находится каменный курган под названием «Усулар» (могила ордынского хана). Высота кургана три сажени, диаметр 17 саженей, на вышине три ямы глубиной 1 — 1,5 аршина. Игнатьев Р.Г., 1864». «Урҙа ханы»ныҡы булғас, ошолор инде Алтын Урҙа ханы Сыңғыҙ баба ҡәбере!

Йәнә килеп, тәүәрихтән шуныһын да беләбеҙ: Сыңғыҙ-хан бабабыҙ ерләнгән ерҙә — уның иң яҡын туғандарының да зираты: «Чингизовские курганы... Дер. Чингизово, Баймакский район. На окраине деревни, на территории кладбища и вблизи него находится группа из 30 курганов, расположенных беспорядочно. Многие курганы разрушены современными могилами. В одном раскопанном кургане обнаружена ограбленная могила... Садыкова М.Х. Отчет 1963; Мажитов Н.А. Отчет 1965» (Археологическая карта Башкирии. «Наука», М., 1976; 187 — 188-енсе биттәр).

Бөйөк бабабыҙ Сыңғыҙ-хандың тәғәйен ҡайҙа ерләнгәнлеге, тимәк, шөйлә баҙыҡ төҫмөрләнә башланы...

Урыҫ-авторҙар нимә ти

БАШКИРЫ И ЧИНГИЗ-ХАН

О тюркской компоненте т.н. "монгольского" завоевания Евразии

Введение

Немало копий сломано вокруг т.н. монгольского завоевания, якобы начавшегося из окрестностей рек Онон и Керулен в Забайкалье и завершившегося порабощением почти всей Евразии. Многократно отмечалась мифологичность такого головокружительного скачка малочисленного азиатского народца, прозябавшего в полной дикости и безвестности - к владычеству над всем известным миром всего за каких-то 60-70 лет. И не единожды возникало удивление темпами стремительной деградации величайших завоевателей всех времен и народов - опять к полной дикости и безвестности за какие-то 100 лет после распада «их» великой империи на составные части. Деградации настолько глубокой, что уже через 200 лет этот народ вообще ничего не помнил ни о своем удивительном прошлом, ни о тех достижениях, с которыми его познакомили многочисленные порабощенные народы. Одним из первых попытался объяснить все немыслимые метаморфозы, произошедшие с монголами, Л.Н.Гумилев, разработавший теорию этногенеза, основанную на изобретенном им принципе пассионарности. Его принцип породил шквал критики со стороны классической исторической науки. Но принцип пассионарности оказался в 1970-е гг. единственным инструментом, способным более или менее правдоподобно объяснить загадку монголов. В итоге некоторые положения теории Гумилева вошли в новейшие учебники истории для ВУЗов. Но даже заключение о повышенной страстности-пассионарности монголов не может достоверно объяснить ту массу противоречий, с которыми сталкиваешься при детальном знакомстве с обстоятельствами завоевания, не имевшего под собой ни политической, ни экономической, ни технологической, ни военной, ни людской базы.

Этнические монголы конца XII века и их окружение

Согласно исследованиям ученых, монголы кон. XII в. были малочисленным кочевым народом, живущим за счет скотоводства и охоты. Их общественный строй представлял из себя союз родовых общин. Неудачная попытка создания Монгольского каганата во 2-ой пол. века указывает на отсутствие у монгол потребности в централизованном объединении. Это вполне объяснимо крайне низкой плотностью населения и самодостаточностью родового ведения хозяйства. Как статданные численности населения Монголии, так и расчеты по мобилизационным ресурсам государства Чингиз-хана, взятым из различных литисточников, не единожды производившиеся в процессе дискуссий на инет-форумах, показывают, что максимально возможное население на территории нынешних Монголии и

31. Шырау-ир (был осорҙа Бируздан ҡалмыш тәхет өсөн ҡанлы тартыштар булып, 628 — 632 йылдар араһында тәхеттә бер-бер артлы ун батша алмашына. Йездегирд III [632 — 652 й.й.] тигән берәү тәхетте биләп алғас, Сәсәндәр нәҫеленән булған был Шырау-ир үҙенең алыҫ бабаһы Бәк-Сәсәндең тыуған еренә — Туран иле Башҡортостанға ҡасып ҡайтып, сал Көн-Өфө [Тура] йәки хәҙерге Өфө ҡалаһындағы ата-баба тәхетенә ултыра: бының тап шулай икәнлеген Шырау-ирҙең бүләренең шәжәрәләге ***Туран Дархан*** тигән батшалыҡ ләҡәбе дәлилләй. Күрәһегеҙ, Шырау-ирҙең ***Дары*** исемле данлы бүләһе ошо Туран [Башҡортостан] дәүләтенең баш ҡалаһы Өфө тәхетендә нығынған һәм Туран-Дархан [Дары-хан] батша ләҡәбен алған, шунан һуң уның батшалыҡ итеүсе нәҫелдәре лә быуындан-быуынға «дары-хан» — ***тархан*** ләҡәбен йөрөтөп, башҡорттоң тархандар [хакимлыҡ итеүселәр] ҡатламы барлыҡҡа килгән. Туран Дары-хандың ҡарткартатаһы Өфөгә ҡайтҡан баяғы 632 йыл менән Туран Дары-хан араһында әҙәмиҙәрҙең ике быуын ғүмере — 50 [25+25=50] яҡтанлыҡтан, Тура Дары-хан бабабыҙ Өфө тәхетенә яҡынса 682 [632+50=682] йылда ултырған булырға тейеш). —
32. Шәһриәр. —
33. Ардашир. —
34. Туран Дархан (баяғы Туран Дары-хан, йәғни Туран иленең Дары исемле ханы, тигән һүҙ; уның тәхете, әйтеп үтеүебеҙсә, Көн-Өфө — Тура ҡуш ҡалаһында, йәғни хәҙерге Өфөлә). —
35. Жәзир Жир. —
36. Әбү Алсаҡ («Алсаҡ-ир бер заман Баратурз Дархандың ҡалаларын яулап алды, ҙур ил яһаны. Ғайәт шөҡәтле һәм Искәндәр сафиуллаға тиң хан ине». — 58-енсе бит). —
37. Солтан Ғоҫман. (Хәҙерге Төркиә дәүләтен нигеҙләүсе, ғоҫманлы төрөк солтандарының бабаһы. Ә беҙ (Солтановтар) иһә уның солтан Жәләлитдин бауынан киләбеҙ). —

38. Солтан Жәләлитдин. —
39. Әҙеһәм. —
40. ***Баба Төкләç-бей.*** —
41. Трә (Тура) бин Баба Төкләç (Тура-хан, XII быуат. Был Тура-хандың ҡәбер кәшәнәһе уның баш ҡалаһы булған хәҙерге Өфөнән алыç түгел Шишмә районының Түбәнге Тирмә ауылы эргәһендә һаҡланған әлегәсә, архитектор-белгестәр уның ҡоролошон ысынлап та XI — XII быуаттарға ҡарата. — Б.Г. Калимуллин. Башкирское народное зодчество. Уфа, 1978; 114-енсе бит. Боронғо башҡорт тәүәрихсеһе Ҡыҙрас Муллаҡаевтан заманында атаҡлы П.И. Рычков [Топография Оренбургской губернии, Уфа — 1999; 372 — 373-өнсө биттәр] һорашып яҙып алғанса, «хан Тура бин Баба Төкләç оҙонлоғо ун саҡрымға һуҙылмыш бөйөк Өфө ҡалаһының аҙаҡҡы ханы булған». Мәсетле районы Һөләймән ауылында табылған Әйле ырыу шәжәрәһендә Боронғо Башҡортостан 9 ханлыҡҡа бүленгәнлеге, һәр бүлемдә кем хан булып торғанлығы күрһәтелеп, «1-енсе. Өфи ҡәлғәсен, Дим тамағын Тирәй хан биләде», — тип әйтелгән, йәғни «Тирәй» тигәне — Тора-хан. — Башкирские шежере. Филологические исследования и публикации. Уфа — 1985, 67-нсе бит). —
42. Ҡаҙансы. —
43. Туҡсаба («Иҙел — Яйыҡ араһында хөкөм һөргән... Туҡсаба хан заманында Буйат-бей — бей ине». — 54, 62-нсе биттәр). —
44. Муйтән-бей («Ҡасыр»). —
45. Шаҡмалы-бей Муйтән [«Ҡасыр»] улы. (Рашид-ад-дин тарихында ул, уның дошмандары татар-монголдар ләҡәпләгәнсә, Ҡасыр улы [Качир-улэ] тип бирелгән; 1237 йылдың йәйендә татар-монголдарға ҡаршы башҡорт ихтилалы етәкселәренең береһе; Үçәргән ихтилалсыларынан Баçман [Бачман] менән бер осорҙа берләшеп көрәшкән, аҙаҡ ҡулға алынып, язалап үлтерелгән. Был хаҡта Рашид-ад-диндың тәүәрихендә: «Сығышы ҡыпсаҡ (тарихсы «ҡыпсаҡ» тип яңылыш әйтә. – Й.С.) халҡынан — ***Оло Бүрелек*** [Үçәргәндең Баш-Бүре араһы. — Й.С.] ҡәбиләһенән булған Баçманды [Бачманды], ундағы иң оятһыҙ әмирҙәрҙең береһен, һәм ***Әсәләр*** [Бүре-Әсәләр йәғни Үçәргән. — Й.С.] ҡәбиләһенән Ҡасыр[79] улын [Качир-улэ] икеһен әсир итеп алдылар...». Әлхасил, Рашид-ад-дин яҙған был «Ҡасыр улы» — Муйтән-бейҙең улы Шаҡмал тип раçларға таяныс бар. Муйтән-бей, билдәле булыуынса, Каспий диңгеҙе аша хәҙерге Иран тупрағына ҡасып китерҙән алда хәҙерге Ырымбур өлкәһенең Һарыҡташ районы Жултый ауыл советына ҡараған Һунарсы һәм Сәнкем-Биктимер ауылдары араһындағы һәм шул ике ауылды тыуҙырыусы Ҡасанҡый-Сала [хәҙерге «Иçке Ҡый»] ҡасабаһында йәшеренеп йәшәгән; уны эҙәрлекләүсе татар-монгол әтрәтен хәҙерге Ергәйеш ауылында һағалаусы башҡорт ғәскәре, Ҡасанҡый-Сала [«Иçке Ҡый»] яғына үткәрмәй, Эйек тамағы тарафына бороп ебәргән. Муйтән-бей, Ҡасанҡый-Саланан көньяҡтараҡ хәҙерге Алабайтал ауылы янындағы Яйыҡ кисеүенән ашып, Үçәргән (Каспий)

---

[79] Ҡасыр — татар-монголдарҙан ҡасып киткән Өфө батшаһы Муйтәнгә дошмандар биргән ләҡәп; ә «Ҡасыр улын» — Муйтәндең улын, тигән һүҙ.

диңгеҙе ярындағы Түләнкөн [хәҙерге Тулений остров янындағы Рыбачий] ҡалаһына килә һәм, карапка тейәлеп, Каспий аръяғына [хәҙерге Иранға] аша, шунан тороп илбаҫар татар-монголдарға ҡаршы көрәште ойоштора. Уның улы Шаҡмал, Ҡасанҡый-Сала [«Иҫке Ҡый»] ҡасабаһында ҡалып, татар-монгол илбаҫарҙарына ҡаршы Башҡортостандағы ҡоралды көрәште етәкләй. Муйтән-бей үҙе хан булып, уның улы Шаҡмал ***солтан*** [принц] булғанлыҡтан, Ҡасанҡый-Салала уны ***Шаҡмал-Солтан*** йәки ***Солтан*** тип кенә лә йөрөтәләр, һәм унан ҡалған тоҡомдарҙы ла, беҙҙең ғаилә риүәйәттәре буйынса, ***Солтандар*** [урыҫ документтарында — ***Солтановтар***] тип атайҙар. Шул рәүешле шул төбәктә беҙҙең ***Солтановтар*** фамилияһы барлыҡҡа килә, ә был иһә ошо юлдарҙың авторының да мөҡәддәс фамилияһы). —

46. Бүрекәй-бей (Бүзәк-бей йәғни Бөжәк[80]-бей) Шаҡмалы улы йәки ләҡәбе буйынса Муйнәйтмәҫ-бей. (Сыңғыҙ тоҡомдары хакимлыҡ ҡылған хәтәр заманда был бабабыҙ, моғайын, үҙенең Муй [Муйтән-бей] ейәне икәнлеген йәшереп йөрөгәндер; шуға ла уға «Муйнәйтмәҫ» йәғни Муйҙы әйтмәҫ ләҡәбе бирелеп, икенсе исеме рәүешле нығынып ҡалғандыр. Аҙаҡ килеп, беҙҙең нәҫел кешеләренең ҡайһы берҙәре ана шуны фамилия итеп алып, «Муйнәйтмәсов» булып йөрөгәндәр). —
47. Һеркә-бей (Жерүкә-бей). —
48. Манғут-бей Һеркә улы. —
49. Урал-бей (Аралбай) Манғут улы[81]. —
50. Арбан-бей Урал улы. —
51. Тимерҡабыҡ-бей Арбан улы. («Бораҡ-хан заманы». — Ү.Т.Ш[82]). —
52. Һарыбаш-бей Тимерҡабыҡ улы. («Жанбәк-хан заманы» — Сим — Яйыҡ йылғалары араһын биләгән). —
53. Һырыш-бей Һарыбаш улы. («Ҡасим-хан заманы»). —
54. Ябынсы Яҫауыл Һырыш улы (Иван III Васильевич — «Сабаталы батша» (Иҫке яҙыуҙан шәжәрәне күсереүсе бутаған – «Ҡалталы батша» йәғни Иван Калита булырға тейеш) заманында [1440 — 1505 й.й.] йәшәгән, Литваны яулауҙа шул батшаға хеҙмәт итеп, «Яҫауыл» дәрәжәһен алған. 1552 йылда башҡорт ғәскәре төркөмө башында Ҡазанды һаҡлап Яуыз Иван ғәскәрҙәренә ҡаршы ҡаһармандарса һуғыша. Ябынсы Яҫауыл үҙенең замандашы — туранан-тура Сыңғыҙ-хан нәҫеле Даян-ҡағандың Миңдекәй тигән, Үҫәргәндең Сураш араһынан булған еңгәй-ҡатынынан тыуған ҡыҙына өйләнеп, был икәүҙән бабабыҙ Үҫәргән Ябынсы улы тыуған булырға тейеш, шуға күрә лә минең ғәзиз бабаларҙың бер килкеһе Даянов [Дуянов] фамилияһын алған). —
55. Үҫәргән Ябынсы улы (кесе улы). —
56. Сөйәлғужа Үҫәргән улы. —
57. Муҫка (Мусаҡай) Сөйәлғужа улы. («Ҡуҙаш Ҡунаҡ таифәһенең атаһы»). —
58. Күскенсе Муҫка (Мусаҡай) улы. —
59. Иҫәнбирҙе Күскенсе улы. —

---

[80] Бөжәк — боронғо телдә Бүре.
[81] Ошонан башлап артабанғы мәғлүмәттәр «Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе»нән (ҮТШ) алына.
[82] Ү.Т.Ш. — Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе.

60. Болаҡбай-батыр Иҫәнбирҙе улы. Ошо урында Болаҡбай бабабыҙ тураһында аңлатма биреү урынлы (шәжәрәбеҙҙәге унан да боронғораҡ быуын Болаҡ баба менән бутамаҫ өсөн). Сөнки «Ағиҙел» журналының 1993/9 һанында ырыуҙашым Рәшит Насиров уҙаман мәғлүм ҡылған Үҫәргән шәжәрәһе тураһындағы хәбәрҙә: «Үҫәргән олатайыбыҙҙың ике улы булған. Беренсеһе (өлкәне) Болаҡ, икенсеһе Таймаҫ исемле», — тигәне буталыбыраҡ киткән. Беренсенән, иң теүәлдәрҙең береһе һаналған Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһендә (Ү.Т.Ш.) Үҫәргән бабаның өс улы күрһәтелеп, Болаҡ менән Таймаҫ иһә Үҫәргән бабанан һуңғы бишенсе быуындағы Иҫәнбирҙе улдары булып тора. Икенсенән, Болаҡ бабабыҙ «сабаталы[83] Һары Кривой Иван заманында йәшәгән, әммә уландары булмаған шул», — тигәне лә, заманаһы дөрөҫ әйтелһә лә, бабабыҙ Болаҡбай батыр менән уның бер туғаны Таймаҫ осорона тура килмәй (улар 18-енсе быуаттың беренсе яртыһында йәшәгән); бында шәжәрәләргә хас саҡ ҡына аймылыш бар, сөнки ошо әйтелгәндәр ысынлап та урыҫ илендә Иван III Васильевич (1440 — 1505) һәм Яуыз Иван IV (1530 — 1584) батшалыҡ иткән һәм беҙҙең баба Болаҡ батырҙан ете быуын элгәреге Болаҡ Һырыш-бей улы менән уның бер туғаны Ябынсы Яҫауыл баба заманаһында булған. Шәжәрәлә Болаҡ Һырыш-бей улынан, ысынлап та, нәҫел күрһәтелмәгән.

Шулай итеп, шәжәрәмдәге ошо 60-ынсы быуын бабам Болаҡбай-батыр Иҫәнбирҙе улының шәжәрәләге 61-енсе быуынды тәшкил иткән уландары (туғыҙ ул) бына кемдәр:

I. Этйейммәҫ (йәки Эттейммәҫ, бер ниндәй ҙә этлектәргә бирешмәҫ, тигән исем);
II. Боҫҡон Даянов[84] (Дуянов); тархан, кенәз дәрәжәләрендә йөрөй (1748 й. тыуған);
III. Юламан;
IV. Әбделмәмбәт (1789);
V. Ҡотлогилде *Муйнәйтмәҫов* (1770), яҫауыл. Фамилияға әүерелгән «Муйнәйтмәҫ» — Муйтәндең нәҫеле икәнлеген әйтмәҫ, мәғәнәһендәге ләҡәп; Муйтән-бей тоҡомдары илбаҫар татар-монголдарҙан эҙәрлекләнгәнлектән, шуларҙы аймылыш ҡылмаҡ өсөн, Муйтән улы Шаҡмалының («Ҡасыр улы»ның) улын шулай йөрөткәндәрҙер. Һуңынан, күренеүенсә, бабаларым уны фамилия итеп ала башлаған; 1763 йылдың 25 июнендә бер төркөм Нуғай юлы башҡорттарының Ырымбур гөбөрнәтере Д.В. Волковҡа яҙған хатына Йомаҡай Муйнәйтмәҫов та ҡул ҡуйған, урыҫса текста был «Муаитмасов» тип боҙоп яҙылған. (Материалы по истории Башкирской АССР, IV, часть вторая. М. — 1956; 45-енсе бит).
VI. Аҡкилде (1773);
VII. Муса (1809? — дата яңылыштырылған);
VIII. Ҡәҙербирҙе.
IX. Айбаш.

---

[83] "Ҡалталы" тигән һүҙҙе яңылыш уҡыу.

[84] Бабабыҙ Үҫәргән Ябынсы Яҫауыл улының әсәһе Сыңғыҙ-хан нәҫеленән — Даян-ҡағандың ҡыҙы икәнлеген иҫтә тотоп, Болаҡбай-батырҙың ҡатындарының береһенән тыуған улдары, башҡаларынан айырылып тороу өсөндәр, Даянов (Дуянов) фамилияһын алғандар.

Тимәк, Болаҡбай-батыр бабабыҙҙың нисәмәлер ҡатындарынан туғыҙ улан тыуып үҫкән.

Инде тәүҙә шуларҙың араһынан шәжәрәләге 60-ынсы быуын Болаҡбай бабанан һуңғы — ошо юлдарҙың авторы Йыһат Солтановты ла үҙ эсенә алған быуындарҙы 61-енсенән алып туранан-тура теҙәйек:

61. (IV). Әбделмәмбәт Болаҡбай улы. —
62. Әйүп Әбделмәмбәтов (1792), урядник. —
63. Мөхәммәтсадиҡ Әйүп улы Солтанов[85] (1846 — 1909). —
64. Әҙеһәм Мөхәммәтсадиҡ улы Солтанов (1895 — 1936). —
65. Йыһат Әҙеһәм улы Солтанов (1932, ошо юлдарҙың авторы). —
66. Сабит Йыһат улы Солтанов (1960). —
67. Наилә Сабит ҡыҙы (1990) һәм Диләрә Сабит ҡыҙы (2000) Солтановалар.

Тимәк, үҙемдең 67 быуын шәжәрәмде барланым.

Инде Болаҡбай-батырҙың һәр туғыҙ улының нәҫелдәрен айырым-айырым һәм өҫтәге сират һандары буйынса барлап теркәйек:

I. Этйеймәҫ йәки Эттеймәҫ тип тә әйткәндәр (бер ниндәй ҙә этлектәргә бирешмәҫ, тигән исем). Уның нәҫеле:

1. Ишемтәй Этйеймәҫев (1754). Ишемтәй нәҫеле:

а) Шәмситдин Ишемтәйев (1802);

б) Хәмиҙулла Ишемтәйев (1805);

в) Һибәтулла Ишемтәйев (1817);

г) Хисамитдин Ишемтәйев (?), уның улы Йәләлитдин Этйеймәҫев (1830), Йәләлитдин улы Солтангәрәй (1847);

2. Ишәй Этйеймәҫев (1759), уның нәҫеле:

а) Хәсән (1789);

б) Хәмитдин (1795);

в) Сиреүбай Ишәйев-Этйеймәҫев (1807). Был исем ер-һыуҙарыбыҙға береккән: Сәнкем-Биктимерҙән, Ҡаҫмартты кисеп, Селек Мужигы (Ново-Николаевка) утарына барған юлда «Сиреүбай-ҡараҡ ҡасып ятҡан» тәрән (Ҡаҫмарттың иҫке үҙәне) Сиреүбай соҡоро бар.

Сиреүбай нәҫелдәре: Сиразитдин (1799), Дәүләтбай (1814), Кинйәғол (1812); Кинйәғол улдары: Мырҙағол Кинйәғолов (1836), Ырыҫланғол Кинйәғолов (1839), был мырҙабыҙ «әхләкһеҙлеге арҡаһында» 1863 йыл генерал-гөбөрнәтер фарманы буйынса Себергә һөрөлгән; Хәйрулла Кинйәғолов (1842);

3. Сәйфитдин Этйеймәҫев (1819), уның нәҫеле:

а) Бесәнсе (1836), Бесәнсе улдары: Ғарифйән Сәйфитдинов (1918 — 1919 йылдарҙа ҡыҙыл гвардиясы, 1920 — 1937 йылдарҙа БашЦИК-та эшләй, репрессияланған), Хәмәтйән Сәйфитдинов;

4. Ҡускилде Этйеймәҫев (1791);

[85] Үҙ шәжәрәһен яҡшы белгән икән шул бабаларым, Муйтән-бей улы Шаҡмалы Солтан тоҡомдары; улар уның «Солтан» ләҡәбен үҙҙәренең фамилияһы итеп күрһәтә башлай — беҙҙең нәҫелдең Солтановтар фамилияһы барлыҡҡа килә. Шулай уҡ данлы бабаларыбыҙҙың башҡаларының да исемдәрен фамилия итеп алалар (мәҫәлән, Урал-бай исеменән — Аралбаевтар).

5. Байгилде Этйеймәҫев (1764), Байгилде улдары: Динмөхәммәт (1805), Мөхәммәтғәли (1813).

II. Боҫҡон Даянов (1748), тыумыштан уҡ («природный») тархан һәм кенәз дәрәжәләрендә. Уның нәҫеле:

1. Әлмөхәммәт Боҫҡонов (1775), йорт старшинаһы. Уның нәҫеле:

а) Дилмөхәммәт Әлмөхәммәтов (1813), указлы мулла;

б) Мостафа Әлмөхәммәтов (1814), уның нәҫеле:

*Хамбал (1845), имам хатиб, Хамбал улы Сәлмән Солтанов (1908);

*Ибраһим (1855);

в) Ғәбделҡадир Әлмөхәммәтов (1817), уның нәҫеле:

*Мөхәммәтсадри Солтанов (1847 — 1914);

*Мөхәммәтсадиҡ Солтанов, уның улы Мөхәммәткәрим (1882), уның улы Ғәбделрәхим (1909);

*Мөхәммәтхарис Ғәбделҡадир улы Солтанов (1850);

*Ғәбделмәзин Солтанов, уның улы Сәлмән (1883);

*Ғәбделғәзиз Солтанов (1855), уның нәҫеле:

Ноғоман (1880 — 1899),

Ғилман (1906 — 1908),

Вилдан (1909),

Ғәбделрахман (1915 — 1916),

Суфиян Солтанов, уның улы Сәлимйән Солтанов, Сәлимйән улы Ырыҫлан (Руслан) Солтанов;

г) Ҡотлоәхмәт Әлмөхәммәтов, уның нәҫеле:

*Бикмөхәммәт (1837),

*Ниязмөхәммәт (1844);

д) Шаһиәхмәт Әлмөхәммәтов (1821), уның улы Шаһимәрҙән (1852);

2. Ноғоман Боҫҡонов-Солтанов (1797), уның нәҫеле:

а) Мортаза (1819), Мортаза улы Ағзам (1848);

б) Нурмөхәммәт Солтанов (1831), уның улы Ғәбделсәлим Солтанов (1860 — 1908);

3. Юлмөхәммәт Боҫҡон улы Болаҡбаев[86]-Солтанов (1801), уның улы Мөхәммәтлатиф (1831). Мөхәммәтлатифты Лотош ҡарт тип атап йөрөткәндәр; алтын алам тип, ауыл осондағы Әүлиә (Урмәмбәт-бей) зиратын ҡутарғанында ауыҙы ҡыйшайған;

4. Мөхәммәтжан Боҫҡон улы (1791), указлы мулла.

III. Юламан. Уның нәҫеле:

1. Ҡотбул Юламанов (1754), Ҡотбул нәҫеле:

а) Сәлих;

б) Исмәғил;

в) Исламғол Ҡотбулов-Солтанов (1809), Исламғол улдары:

*Кәлимулла (1834),

*Заһиҙулла (1853),

---

[86] Бер юлы ҡартатаһы Болаҡбай-батырҙың исемен дә, алыҫ бабаһы Шаҡмалының Солтан ләҡәбен дә фамилия итеп алған.

*Ғәлиулла (1856),

*Хәлилулла Солтанов (1858 — 1915), уның улдары:

Сәлимулла Солтанов (1918 — 1919 йылдарҙа ҡыҙыл гвардиясы. 1919 й. башҡорт аҡ армияһының ҡыҙылдар яғына сығыу мәсьәләһе буйынса Темәстә йыйылған Хәрби йыйын делегаты),

Ямалитдин Солтанов (1899),

Сәлихулла Солтанов (1904 — 1905).

IV. Әбделмәмбәт, уның нәҫеле:

1. Теләүғол Әбделмәмбәтов (1789), Теләүғол улы Мөхәммәтхәсән Теләүғолов (1819). Был Мөхәммәтхәсән — Лотош ҡарт менән бергә алтын көҫәп баяғы Әүлиә зиратын ҡутарғандарында күҙе салшайған Хәсән ҡарт була инде;

2. Әйүп Әбделмәмбәтов (1792), урядник; уның нәҫеле:

а) Баһауитдин Әйүп улы Солтанов (1819), ауыл старостаһы. Уның түшенә тағаҡай «Староста деревни» тип яҙылған ҡалай билдәһе беҙҙә 60-ынсы йылдарғаса һаҡлана ине,

б) Мөхәммәтсәлим (1841),

в) Мөхәммәтсадиҡ Әйүп улы Солтанов (1844 — 1909. Ошо юлдарҙың авторының ғәзиз ҡартатайы), Мөхәммәтсадиҡ нәҫеле:

*Мөхәммәткәрим Солтанов,

*Әҙеһәм Солтанов (1895 — 1936), Әҙеһәм улы:

Йыһат Солтанов (1932), Йыһат улы:

Сабит Солтанов (1960), Сабит ҡыҙҙары:

Наилә Солтанова (1980),

Диләрә Солтанова (2000).

V. Ҡотлогилде Муйнәйтмәҫев (1770), яҫауыл.

VI. Аҡкилде (1773. Ҡотлогилде Муйнәйтмәҫев менән бер туған). Аҡкилденең нәҫеле:

1. Баһауитдин (1803), — Ҡаҫмарт йылғаһының ятыуына батып үлә: Сәнкем-Биктимер ауылында «Баһау батҡан» ятыуы бар ине;

2. Ҡунаҡбай Аралбаев (1790) — беҙҙең Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге алыҫ бабабыҙ Уралбай//Аралбай исемен фамилия итеп алған; уның нәҫеле:

а) Мөхәммәтғәли Ҡунаҡбаев-Солтанов[87] (1801), уның улдары:

*Тимерғәли (1837),

*Йыһанша (1845);

3. Ҡунаҡҡужа Аралбаев (1812), уның нәҫеле:

а) Мөхәммәтша Ҡунаҡҡужин-Аралбаев (1832), уның улы:

*Ишмөхәммәт Аралбаев (1898);

б) Ғәлиәхмәт (1838), уның нәҫеле:

*Хужахмәт (1884 — 1899),

*Шаһиәхмәт, уның улы:

Хикмәтулла Аралбаев (1896 — 1942, совет хакимиәтенең дошманы рәүешендә ҡулға алынып, атып үлтерелә), уның улдары:

Салауат Аралбаев,

---

[87] Аралбаевтарҙың элек Солтанов фамилияһында булғанлыҡтарына дәлил.

Рафиҡ Аралбаев.

*Һиҙиәтулла Ғәлиәхмәт улы Аралбаев (1905 й. үлә);

*Мотиғулла Аралбаев (1909),

*Сәғиҙулла Аралбаев (1912 — 1914);

в) Ниязмөхәммәт (1840);

г) Дәүләтша (1845), уның нәҫеле:

*Илморат Аралбаев (1899 — 1899),

*Вәлиша Аралбаев (1902),

*Йыһанша Аралбаев (1900);

д) Әхмәтша (1848), уның нәҫеле:

*Сәхәбитдин Аралбаев (1905), уның улы:

Алмас Аралбаев;

*Ишбулды Әхмәтша улы Аралбаев (1898);

е) Вәлиәхмәт, уның улдары:

*Нуриәхмәт Аралбаев (1910),

*Сәмиғулла (1912);

4. Билал Аҡкилде улы Солтанов (1813), уның нәҫеле:

а) Шаһимөхәммәт (1836);

б) Мөхәммәтзариф (1846);

в) Ғәбиҙулла Солтанов (1853), уның нәҫеленән:

*Бибисадиҡа Ғәбиҙулла ҡыҙы Солтанова (1896 — 1977, Өфө — мосолман зиратында) — Йыһат Солтановтың ғәзизә әсәһе;

*Һибәтулла Солтанов (1909 — 1943), уның нәҫеле:

Фәрит (1935),

Ринат (1938 — 1941), Фәрит улдары:

Ринат Солтанов,

Рифҡәт Солтанов;

*Хәбибулла Солтанов (1910 — 1941).

5. Ҡолмөхәммәт Муйнәйтмәҫев-Солтанов (1814), уның нәҫеле:

а) Динмөхәммәт (1843 — 1852).

VII. Муса, уның нәҫеле:

1. Ильяс, уның нәҫеле:

а) Шамалмәт (1861 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

б) Мәрҙән (1875 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

в) Ишмөхәммәт, уның улы:

*Шаһимөхәммәт (1885 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

г) Шаһиәхмәт, уның улы:

*Ғәбдрәхим (1890 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән.

2. Сәғитдин Мусаев, уның нәҫеле:

а) Камалитдин Сәғитдинов-Мусаев (1809), уның улы:

*Мифтахитдин (1833);

3. Баһауитдин Сәғитдинов-Мусин (1813), уның нәҫеле:

а) Әхмәтйән (1840), уның улдары:

*Хисамитдин Мусаев (1877 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

*Фәхритдин Мусаев (1885 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

б) Мифтахитдин (1853);

4. Сәлихйән (1840), уның нәҫеле:

а) Әхмәтша Мусаев (1860 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

б) Ғабдулла Мусаев (1902 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән, уның улы:

*Юныс (1903);

5. Ғарифйән (1846);

6. Махийән, уның нәҫеле:

а) Абдулла (1894 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән. Уның улы:

*Юныс (1903 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән.

7. Хисамитдин, уның нәҫеле:

а) Ямалитдин (1845), уның улдары:

*Минғазитдин Мусаев (1882 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

*Зиннәтулла Мусаев (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылнда татарға әүерелгән;

*Бәҙритдин Мусаев (1885 — 1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында башҡорт килеш (татарға әүерелмәгән);

*Хәмзә Мусаев (1895 — 1941) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында башҡорт килеш, ҡыҙыл гвардиясы. 30-ынсы йылдарҙа ул — Өфөлә комвуз ректоры, 1937 йылда репрессиялана, 1941 йылда Бөйөк Ватан һуғышында һәләк була;

8. Тазитдин Мусаев, уның нәҫеле:

а) Дауыт Тазитдинов-Мусаев (1806), уның нәҫеле:

*Мөхәммәтғәли, уның улы:

Фазыл Мусаев (1920 й. иҫән, Яңы Ғафарҙа) — милләте яҙылмаған;

*Мөхәммәтхәсән (1833), уның улдары:

Мотиғулла Тазитдинов (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән,

Ниғмәтулла Тазитдинов (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

*Йософ (1841), уның улы:

Закир Тазитдинов (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында татарға әүерелгән;

б) Рәхмәтулла Тазитдинов-Мусаев, уның улы:

*Ибәтулла (1920 й. иҫән) — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылында, милләте яҙылмаған.

VIII. Ҡәҙербирҙе, уның нәҫеле:

1. Көбәк, уның нәҫеле:
а) Аҡмырҙа Көбәков (1783);
б) Ғәбделмәзит Көбәков (1819), уның улдары:
*Собханғол (1854 — 1856),
*Умырҙаҡ (1859);
в) Ғәбделфаиз Көбәков (1823);
2. Балыҡ (1797);
3. Ҡанмырҙа Солтанов (1786), уның нәҫеле:
а) Лоҡман, уның улы:
*Бикмырҙа Солтанов, уның улы:
Шиһабитдин Бикмырҙа улы Солтанов (1840), уның улы:
Хисамитдин Солтанов (1890), уның улы:
Ким Солтанов (1933), уның улдары:
Динис Солтанов,
Хәким Солтанов;
йәнә лә шул уҡ Шиһабитдин улдары:
Солтанғәли Солтанов (1905 — 1905),
Байрамғол Солтанов (1906),
Ғүмәр Солтанов (1909),
Камалитдин Солтанов (1912);
*Йәнмырҙа Бикмырҙа улы Солтанов, уның улдары:
Әхмәтйән Солтанов (1908),
Афзалитдин Солтанов (1916),
Язаритдин Солтанов (1924 — 1943);
4. Йомағужа, уның нәҫеле:
а) Алтай Йомағужин (1788);
б) Булдай Йомағужин-Солтанов (1793);
в) Иркәбай (1811);
г) Аҡмөхәммәт (1813).

IX. Айбаш, уның нәҫеле:

1. Бикҡужа Айбашев (1773);
2. Аҡҡужа Айбашев (1778), уның улы:
а) Йомағол Аҡҡужин-Солтанов (1817 — 1854);
3. Аҡбирҙе Айбашев (1782), уның нәҫеле:
а) Ғибәҙәт Аҡбирҙин-Солтанов (1820);
б) Шәрәфитдин Аҡбирҙин (1828), уның улдары:
*Сәләхитдин (1859 — 1859);
*Ямалитдин Солтанов, уның улы:
Камалитдин Солтанов, уның улдары:
Язаритдин Солтанов (1894 — 1899);
Зәйналитдин Солтанов (1900 — 1910);

Йәләлитдин Солтанов (1904);
Шәрәфитдин Солтанов (1912);
Фәрхәлитдин Солтанов (1915);
Ғаязитдин Солтанов (1924?), уның улдары:
Шәрәфитдин Солтанов,
Сәләхитдин Солтанов,
Йәләлитдин Солтанов;
4. Аҡбура Айбашев (1784);
5. Байҡашҡа Айбашев (1786).

Бер юлы кенәз һәм тархан дәрәжәләренә эйә булмыш Боҫҡон бабабыҙ, Үҫәргән батшалар тоҡомо (кенәз, тархан) булыуы менән бергә, Сыңғыҙ-хан — Даян-ҡаған (бөрйән) бабаларыбыҙ нәҫеленән икәнлеген дә белдерәйек. Был Даян-ҡаған 16-нсы быуатта Яуынсы Яҫауыл бабам менән бер осорҙа йәшәгән һәм Яуынсы Яҫауылға хәләл ефетлеккә ҡыҙын биргән. Даян-ҡағандың Үҫәргәндәргә кейәүгә сыҡҡан шул мөхтәрәмә ҡыҙы тап минең дә алыҫ оләсәйем булғанлыҡтан:

2. Бөрйән ырыуының үҫәргәнле Йыһат Солтановҡа ялғанған Сыңғыҙ-хан нәҫеле шәжәрәһе

1. Бүре-ата Сөн-Һауа (Буртэ Чино-а), Асман-Күк улы[88]. —
2. Түбә Мәргән (Добу Мэргэн). Түбә Мәргән үлгәс, уның тол ҡатыны Лан-Һауа (Алан-гоа) үҙенең йорт хеҙмәтсеһе (*ниндәйҙер бер уҙғынсынан болан ботона (иткә) алмаштырып алып ҡалынған* хеҙмәтсеһе) менән ҡауышып (ләкин тол ҡатын үҙенең «елдән» быуаҙыуын «Һары әҙәм ҡиәфәтенә кергән Ҡояш менән ҡауыштым», тип аңлата), донъяға килә Сыңғыҙ-хан нәҫелен биргән бөрйәндәрҙең баш бабаһы:
3. Боҙансар (Боданчар, хәҙерге башҡорт риүәйәтендәге Байназар – Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуы шәжәрәһендәге зат). —
4. Ғәбәши-баһадир (Хабичи-багатур). —
5. Бәғер-баһадир (Бэхир-багатур). —
6. Маха Тотон. —
7. Хажи-Көлөк (Хачи-Кюлюк). —
8. Барс Шөңгөр Тыҡшын (Барс Шонгхор Догшин). —
9. Төмбинәй Сәсән. —
10. Ҡабул-ҡаған. —
11. Бартан-баһадир. —
12. Йәсүгәй-баһадир. —
13. Темәсйән — Сыңғыҙ-хан (1155 — 1227). —
14. Толуй. —

---

[88] Асман-Күк улы — Бөрйән ырыуы ғәмәлдә Үҫәргән ыррыуының сатаһы икәнлегенә ишара.

15. Мүнкә (Маңҡа)-ҡаған (1208 — 1257), 1251 йылда ҡырҡ биш йәшендә тәхеткә ултырған. —
16. Хубилай Сәсән-ҡаған (1213 — 1294), 1263 йылда ҡырҡ биш йәшендә тәхеткә ултырған. —
17. Өлзәйтү-ҡаған (1265 — 1307), 1294 йылда утыҙ йәшендә тәхеткә ултырған. —
18. Хәсән Көлөк-ҡаған (1281 — 1311), Хубилай Сәсәндең ейәне, 1307 йылда 27-нсе йәшендә тәхеткә ултырған. —
19. Буянту-ҡаған, 1311 йылда тәхеткә ултырған, 1320 йылда үлгән. —
20. Гәгән-ҡаған (1303 — 1323), 1320 йыл тәхеткә ултырған. —
21. Йесүн Тимер-ҡаған, 1324 йыл тәхеткә ултырған, 1327 йыл үлгән. —
22. Рәжәбәк-ҡаған, 1327 йыл тәхеткә ултырған, 1328 йыл үлгән. —
23. Ҡошала-ҡаған, 1328 йыл тәхеткә ултырған, 1329 йыл үлгән. —
24. Ҡотоҡто-ҡаған, 1329 йыл тәхеткә ултырған, 6 айҙан һуң үлгән. —
25. Заяғату-ҡаған, шул айҙа уҡ тәхеткә ултырған, 1333 йыл үлгән. —
26. Иржамал Әрҙәнә Суҡты-ҡаған, 1333 йыл тәхеткә ултырған, шул уҡ айҙа үлгән. —
27. ***Туған Тимер Уҡағат-ҡаған,*** 1333 йыл тәхеткә ултырған 1368 йыл үлгән ***(Ҡытайҙың Юань династияһының һуңғы императоры).*** «Этот каган лишился великой державы, основанной Чингис-ханом»... «Говорят, что с тех пор, когда Хубилай Сэчэн-хаган воссел на престол в Дайду, до времен Ухагату-хагана (Тоган Тэмура) прошло сто пять лет и шесть месяцев, и тогда-то чингизиды лишились Дайду, где царствовали».

Туған Тимер-ҡағандың бер улы:

28. Айыушридар Белегте-ҡаған (Белемле-ҡаған, 1370 — 1378 йылдарҙа тәхеттә. —
29. Ускал-ҡаған (Уҫал-ҡаған) ләҡәпле Туғыҙ Тимер (1378 — 1388 йылдарҙа тәхеттә). —
30. Энге Зариғты-ҡаған (1359 — 1392), 1389 — 1392 йылдарҙа тәхеттә.
31. Илбәк-ҡаған (1393 — 1399 йылдарҙа тәхеттә). —
32. Үлсәй Тимер-ҡаған (1403 — 1410 йылдарҙа тәхеттә). —
33. Дилбегә-ҡаған (1411 — 1415 йылдарҙа тәхеттә). —
34. Аҙай-каған (14 йыл тәхеттә, 1438 йыл үлгән). —
35. Дайсуң-ҡаған (1438 — 1452 йылдарҙа тәхеттә, 1452 йылда монголдарҙың хурлат ҡәбиләһе башлығы Цэбдэн тарафынан үлтерелә). «У Дайсунг-хагана было три сына... Старший сын его Монгэлэй-тайджи (Миңғәли-солтан. — Й.С.) еще раньше стал тэнгри (үлгән). Хаган и два его сына Или и Дали и два их товарища из ***хор хунов*** (ҡор-һун — башҡорт!) Агбулат и Багбулат (Аҡбулат һәм Бәкбулат), — все пятеро были захвачены Цэбдэном»...

Был өҙөктә Дайсуң-ҡағандың үҙ башҡорттары араһында һәм уларға таянып йәшәүе, татар-монголдарға ҡаршы тороуы асыҡ сағыла.

«Миңде-өрлөк[89], старший брат Агбулата и Багбулата, ночевал у себя в стойбище. Два его коня, называвшиеся Хулагана (Ҡола ғына) и Харагана (Ҡара ғына), предчувствуя несчастье, били копытами о землю и вздыхали. Услышав вздохи своих коней, Миңде-өрлөк сказал: «Этим они предсказывают, что скоро

[89] Миңде исемле был башҡорт Дайсуң-ҡаған дәүләтенең «өрлөгө» — министры булған.

произойдет несчастье». Утром Миңде-өрлөк встал и поспешил хагану (Дайсуң-ҡағанға). Прежде чем он успел доехать, хаган и младшие братья его были казнены (монгол Цэбдэн тарафынан). Миңде-өрлөк сделал подушкой одного из убитых младших своих братьев — положил под голову хагана, на другого младшего брата положил ноги хагана и так похоронил их. Вслед за этим Миңде-өрлөк во главе всех своих *нукеров* напал на Цэбдэна, чтобы отомстить ему, и захватил его»...

«Когда ойратами и Цэбдэном была отнята держава у Дайсунг-хагана и Абхарчин-джинонга (Дайсуңдың улы)[90], то *младший брат Дайсунга по отцу* от другой матери, называвшийся Мандугули (Миңдеғәли, Аҙай-ҡағандың улы), ушел и кочевал в местности *Джисут.* После того:

36. Мандугули-хаган воссел на великий престол в год овцы (1463 г.) в местности Хасарандай-дзон. У Мандугули-хагана были две супруги. Одна из них была *Мандухай (Миңдекәй, беҙҙең Үҫәргәндең Сураш араһынан).* Другая была большеносая Йүнгән. Отцом Мандухай-хатун был Тэмур-чингсанг из рода Чорос (Сураш араһы — Үҫәргән ырыуынан!)... Отцом большеносой Йүнгән был уйгурский Бэгэрсэн-тайши. Говорят, что с большеносой Йүнгән хаган испытывал онемение и не мог соединиться с ней (тәне тартмай)»...

Был текстан асыҡ күренеүенсә, Миңдеғәли-ҡағандың «тән тартҡан» (яратҡан) ҡатыны Миңдекәй — минең үҫәргәнле бабаларымдың аҫаба ер биләмәләрендә Әселе йылғаһы буйындағы Сураш ауылы ҡыҙы булған, Сураш ауылы әле лә бар, рәсми исеме Юлдыбай...

Миңдеғәли-ҡағандың бер туған ҡустыһы Болху-джинонг (Болаҡһыу-солтан) бик мыҡты егет булып үҫә, татар-монголдарға ҡаршы яу сабып данлана. Ағаһының тәхетен тартып алырға йыйына, тип яла яғыусыларға ышанып, бер туған ағаһы Миңдеғәли-ҡаған уны үлтерергә яҫҡынғас, Болаҡһыу-солтан үҙенең башҡортҡа кейәүгә сыҡҡан бер туған апаһы Боғорол-көнсөнөң ҡанаты аҫтына Башҡортостанға ҡаса, ***Ҡоҙоҡ-Тереһыулы*** (хәҙерге Салауат районындағы Ҡорғаҙаҡ) йылғаһы эргәһендә йәшәй һәм Шихир-дайху (Шәһәрбаныу) исемле башҡорт ҡыҙына өйләнә. Һөйөклө ҡатыны Шәһәрбаныуҙан 1466 йылда Даян исемле улы тыуа (буласаҡ Даян-ҡаған бабабыҙ). —

37. Болаҡһыу-солтан 1467 йылда тәхеткә ултыра, тәхеттәге исеме Байан Мүнкә Болаҡһыу-ҡаған.

Улы Даянды, моғайын, башҡорт араһында башҡорт итеп үҫтереү өсөн, башҡорттоң Балыҡсы ырыуы кешеһе Бахайға (Баҡыйға) тәрбиәгә биреп ҡалдыралар.

Уйғыр ханы Смал-тайши (Исмәғил-мырҙа) барымтаға килеп, ҡаған ҡатыны Шәһәрбаныуҙы урлап алып китә, ә Болаҡһыу-солтан үҙе ҡасып ҡалып, йәшеренеп ҡаңғырып йөрөгәнендә бер ауылда билендәге алтын билбауы өсөн юлбаҫарҙар тарафынан үлтерелә (1470 й.).

Буласаҡ ҡаған Даянды Баҡый насар тәрбиәләүе сәбәпле, тиҙәр, танғут ханы Теләксенең етенсе улы Тимер Һаҙаҡ (исемдәренән күренеүенсә, улар ҙа башҡорт!) уны урлап алып китеп, үҙендә тәрбиәләй. Тимер Һаҙаҡтың ҡатыны Йисүн Томи сирле баланы дауалап һауыҡтырғас, Тимер Һаҙаҡ шул Даян-солтанды уның атаһы

---

[90] Быларҙың монгол Цэбдэн тарафынан баяғы үлтерелеүе тураһында һүҙ бара.

менән бер туған баяғы Миңдеғәли-ҡаған йортона илтеп тапшыра. 1467 йылда Миңдеғәли-ҡаған үлгәс, уның Сайын-ҡатын (Гүзәл-ҡатын) ҡушаматлы тол ҡатыны Миңдекәй ҡәҙерләп үҫтерә малайҙы. Был саҡ Сыңғыҙ-хандың бер туғаны булған Хасар (Хазар) нәҫеленән Энебулат тигән уҙаман Миңдекәйгә өйләнергә яусылап йөрөһә лә, Миңдекәй һылыу һис риза булмай (Сыңғыҙ-хан нәҫеленә генә кейәүгә сығырға риза). Бер заман ул Сыңғыҙ-хан нәҫеле Даян-солтанды, үҙенең аҫырау балаһын, хандарса кейендерә лә, Сыңғыҙ-хан ҡомартҡыларын һаҡлаған изге һигеҙ аҡ тирмәгә алып килеп ҡорбан сала һәм бөрйәндәрҙең баш бабаһы (әсәһе) һаналмыш Алан-Һауа — “Әсә-ҡатын” рухына баяғы мөҡәддәс теләген әйтеп табына:

Если одобришь эти мои слова,
Әсә-ҡатын, моя матушка,
Пусть на внутреннюю полу мою
Родятся семь сыновей!
Пусть на внешнюю полу мою
Родится единственная дочь!
Если пожалуешь семерых сыновей по просьбе моей,
Каждому из семи дам тогда я имя «Болад»...

«После того, когда Бату Мүнкэ Даян-хагану было семь лет, Мандухай Сайн-хатун соединилась с ним и в тот же год свиньи (1470) возвел его на ханский престол...» —

38. Бату Мүнкә Даян-ҡаған (1466 — 1543).

«Родилась у Мандухай-хатун (Даян-ҡағандан) семеро сыновей и одна дочь... Каждому из семерых (сыновей) было дано имя Болад (Булат)...

От Самар-дайху, внучки урйанханского (монгол) Хутугту Шигүши у Дайан-хагана родилась ***Гәрәсәндзә*** (Джалаир-тайджи) и Гэр-Болад (Урут-тайджи)... От младшей жены Хуши-хатун родились Гэрэту и Чинг-тайджи... Все они были одиннадцатью сыновьями Даян-хагана».

Был өҙөктән күренеүенсә, Даян-ҡағандың монгол ҡатынынан 1513 йылда тыумыш ***Гәрәсәндзә (Ҡарасансы)*** тигән улы һуңынан Джалаир-тайджи (Йылайыр-солтан) — Башҡортостандың хәҙергә Йылайыр төбәгендә Үҫәргән кенәзе булып торған, ә Гәр-Болад (Ҡарабулат) тигәне Урут-тайджи (Урыҫ-солтан) булып, моғайын, шул уҡ Үҫәргәндең көнбайыш төбәген (урыҫ яғын) биләгәндер (Башҡортостандың хәҙерге Йәнсура районында әлегәсә ике Ҡалмыҡ ауылы бар). Минең икенсе тыуған ауылым һаналмыш Һунарсылағы *Ҡарасановтар* фамилияһы тап ана шул *Ҡарасансы* тоҡомдарылыр, моғайын. Хәҙерге Йәнсура районындағы *Ҡарабулатовтар* ҙа Даян-ҡаған улы *Ҡарабулаттың* нәҫелдәре булыуы бик ихтимал.

Ә минең ***Боҫҡон*** бабамдың ***Даянов*** фамилияһына килгәндә, әйтеп үтеүемсә, Даян-ҡаған менән бер осорҙа йәшәгән ***Ябынсы Яҫауыл*** бабабыҙ Даян-ҡағандың бер туған еңгә-ҡатыны (үҙебеҙҙең Сураш ауылы ҡыҙы) Гүзәл Ҡатын Миңдекәйҙән тыуған берҙән-бер ҡыҙына (Даян-ҡаған ҡыҙына) өйләнгән дә шул ҡатынынан ***Үҫәргән*** исемле бабабыҙ тыуған, тигән риүәйәт бар ине. Шуны яҡшы

белгән Боҫҡон (Үҫәргән улы) бабабыҙҙың Даян-ҡаған тоҡомло Даянов булып йөрөүе бик тәбиғи.

Даян-ҡағандың гелән генә беҙҙең үҫәргәндәр менән аралашып, яуҙарҙа берләшеп йәшәүе лә билдәле. Мәҫәлән, Даян-ҡаған алыҫ Ордоста (Ҡыуанһыу йылғаһы буйында) йәйләгәнендә Ҡытай яуынан еңелеп, беҙҙең тарафҡа ҡаса. Шунан һуң Керуленда (Алтайҙа) сағында монголдарға ҡаршы яу сабып, Тургән (хәҙерге Ҡаҙағстандағы Турғай) йылғаһы буйында һуғыша. Аты һөрлөгөп батҡаҡҡа ауғас, бэсут (башҡорт) Туған (Ә.З. Вәлиди Туғандың бабаһы?) уны ҡотҡара, монгол ғәскәрен бергәләшеп еңәләр.

Шунан һуң уйғыр ханы Исмәғилгә ҡаршы яу саба, уны үлтереп, теге саҡта ул урлап алып киткән әсәһен — Шәһәрбаныуҙы ҡотҡара. Барын-табындарҙы еңеп, үҙенә буйһондора. Монголдар ҙа уға буйһона...

«Даян-хаган тридцать семь лет сидел на ханском престоле и в возрасте сорока четырех лет стал тэнгри (умер)»...

Минең бабаларым Солтановтарҙың боронғо документтарға ҡуйған ҡултамғалары — уларҙың Үҫәргән батшалар тоҡомо икәнлектәрен белдереүсе Донъя Ҡуласаһы (Свастика) йәки шуның төрлөсә киҫәксәләре.

«Когда Добу Мәргән, взяв мяса, возвращался домой, по дороге к нему приблизился один бедный человек, ведший своего маленького сына.

Когда Добу Мәргән сказал: «Ты чей человек?», — тот человек ответил: «Я человек Магалиг Байагуая; не могу идти я так больше. Отдам тебе этого своего сына, а ты не дашь ли мне часть того мяса?» Когда он так сказал, то Добу Мәргән, отрезав одно из бедер трехлетнего оленя, отдал ему, и тот мальчик стал у него в юрте слугой. Вскоре... Добу Мәргәнә не стало, Алун-гоа, живя без мужа, родила трех сыновей по имени Буху Хатаги, Бухучи Салджи и Боданчар Мунгхаг»... (Лубсан Данзан. Алтан Тобчи. М., 1973; 55-енсе бит).

Был өс малай башҡорттоң өс ырыуының баш бабалары булалыр инде: Хатаги — Ҡатай, Салджи — Һалйыуыт, ә өсөнсөһө Боданчарҙан (Байназарҙан) башланалыр Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыуының Байназар нәҫеле Байназаровтар...

Һәм был Сынғыҙнамәләге Боданчар — шул уҡ беҙҙең баяғы риүәйәттәге Байназар икәнлеген исемдәрҙең килеп сығышынан һәм телдән-телгә үҙгәрешенән шәйләйбеҙ:

Боданчарҙың әсәһе Алун-гоа//Алан-Һауа — Лан-Һауа (Лан — боландың бер төрө). Тимәк, анабыҙ Болан-Һауа.

Болан-Һауанан тыуа Боданчар//Боҙансар — Боҙан-әсә-ир, йәғни «Боҙан-әсәнән тыуған ир», сөнки «Болан» боронғо телебеҙҙә «Боҙан» тип әйтелгән, ә Боҙан һыйырын иһә Боҙан-апа-эйә — Боҙан-бейә тип тә йөрөткәндәр. Быны
ң сағыу миҫалын башҡорт халыҡ ижадында тап шул бөрйәндәр бабаһы Боҙансарға бағышланмыш «Боҙансы батыр» (Боҙан-бейәнән тыуған батыр) әкиәтендә күрәбеҙ. (Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр, өсөнсө китап. Өфө, 1978; 113-өнсө бит). Шул «Боҙан-әсә-әр»ҙән (Боҙансарҙан), телебеҙҙә әүмәләнә-әүмәләнә, урталағы “н” өнө “й”-ға әүерелеп, Боҙанасар — Байаназар — ***Байназар*** килеп сыҡҡан...

«Сыновья Арсу Болада были Онон (йәғни Һаҡмар!) *и Буджигир* (йәғни Башҡорт!)... *Сын Буджигира был нойоном* (бей булған) *рода Тартай. Его потомки были нойонами в семи туменах Ордоса».* (Алтан Тобчи, 294 — 295-енсе биттәр).

Бында, бәлки, Үҫәргәндең тартай араһы, ә «Ордос» тигәне — Ҡыуанһыу буйындағы Ордос түгел, ә Ағиҙел йылғаһы буйындағы Оро-таш//Ордас («Арский камень») төбәге (хәҙерге Белорет районында), ете төмән тигәне — башҡорттоң ете ырыуылыр. Һәр хәлдә, Даян-ҡаған улы Ырыҫ-Булат, Ырыҫ-Булат улы Башҡорт һәм уның ете уланы башҡорт еренең бейҙәре булып торғанлығы күренә. Ә Даян-ҡағандың бабам-башҡорт Ябынсы Яҫауылға кейәүгә сыҡҡан ҡыҙынан тыуған олаталарымдың береһе -- кенәз-тархан Боҫҡон Даянов...

Шулай итеп, 2-нсе шәжәрәләге 38-енсе быуын Бату Мүнкә Даян-ҡағандан һуң 39-ынсы быуын — үҫәргәнле башҡорт әсәнән тыуған Ырыҫ-Булат, ә 40-ынсы быуын — Ырыҫ-Булат улы ***Башҡорт-бей***...

Алыҫ бөрйәнле бабалар ҡаны менән ҡуша, Ҡарағай-Ҡыпсаҡ шәжәрәһенән Байназаровтар ҡаны ла ҡатнаш миндә, сөнки Бибиғәфифә оләсәйем (әсәйемдең әсәһе) — ауылыбыҙҙың атаҡлы зыялыһы (урыҫса ла грамоталы писарь) Мөхәммәтзариф Ғәбделлатиф улы Байназаровтың ҡыҙы бит.

Тыуған ауылым Сәнкем-Биктимергә ун һигеҙ саҡрымдағы Мырҙабулат-Абзан ауылында ла бар Байназаровтар. Мәҫәлән, 1816 йылда Абзанда йорт старшинаһы Ҡазбулат Мырҙабулатовтың командаһында сәфәр йөҙбашы (походный сотник) Байназар Аҡназаров (51 йәштә) үҙенең уландары Туғыҙбай (27 йәштә), Иҙрис (17 йәштә), Сәйетбаттал (3 йәштә), Зәйнәғәбдин (1 йәштә) һәм бер туған ҡустылары Әбделмән (25 йәштә), Ниғмәтулла (23 йәштә) менән бергә донъя көткән. Шулай уҡ Ҡашҡар Байназаров, Вәлит Аҡназаров тигән ғаилә башлыҡтары ла булған унда. Был осраҡта шул Мырҙабулат-Абзан ауылындағы Байназарҙың уландары Байназаров фамилияһын алғандарҙыр, моғайын.

Күренеүенсә, мәғлүм ителгән ике фамилия һәм сәфәр йөҙбашының исем-шәрифе башҡорттоң Ҡарағай-Ҡыпсаҡ ырыу шәжәрәләрендәге (Башкирские шежере. Уфа, 1960; 94-енсе бит һәм «Замандаш» гәзитенең 1992 йыл 13 июль һаны) Аҡназар, уның улы Байназар исемдәренән алынған.

Минең төбәк Байназаровтары, әле әйтелгән Мырҙабулат-Абзандағы түгел, ә Ҡарағай-Ҡыпсаҡ шәжәрәһендәге боронғораҡ Байназарға бәйле, сөнки Сәнкем-Биктимерҙә баяғы уҡ 1816 йылда иҫәпкә алынмыш 50 йәшлек Бәлхиә Байназаров һис кенә лә Мырҙабулат-Абзан ауылындағы 51 йәшлек Байназар Аҡназаровтың балаһы була алмай. Беҙҙең Һунарсы ауылындағы Байназаровтар фамилияһының тап Сыңғыҙ-хан бабаларыбыҙ замандарындағы «Байназар»ҙан килеп сыҡҡанлығын дәлилләүсе бер риүәйәтте мин 1965 йылда үҙебеҙҙең Һунарсы ауылы ҡарты Баубаков-Байназаров Һибәтулла олатайҙың ауыҙынан яҙып алғайным, бына ул:

Һунарсы ауылының тарихы

Һунарсы ауылы әүәл бында булмаған. Һунарсы Ҡормантай[91] *эргәһендә ултырған.*

[91] Ҡормантай — шунда Ҡаҫмарт йылғаһының тармағы — Аҡмалы буйындағы бер төбәктең исеме, шуға яҡын иң боронғо ауылыбыҙ (хәҙер юҡ) Ҡасанҡый-Сала («Иҫке Ҡый») күҙ уңыда тотола.

Утыҙ йәштән түбәне башҡорттарҙың бер яҡтан күсеп киләләр малдары менән, ата-әсәләрен ҡалдыралар. Бер егет атаһын арбаға йәшереп һалып алып килә. Килә торғас, һыуһайҙар, теге ҡарт малдарҙы үҙ ыңғайына ебәрергә ҡуша, малдар һыуға ҡарай тарта. Бүре (кейек-йәнлек) осрай, малдар (йылҡылар) бүрене ҡыуып китә, бара торғас бүре юҡ була (һыу буйында); ҡарт шул ергә ауыл ҡорорға, ауылды Башҡорт тип атарға ҡуша. Түрә (баш) һайлайҙар, халыҡ теге егетте баш итеп ҡуйырға була (дөрөҫ булғанға әйткәндәре). Егет: «Мине тәүҙә хөкөм итегеҙ — атайымды алып килдем бит мин», — ти. Ғәфү итәләр. Ҡарт ҡала.

Ауылдағы ҡайһы бер араларҙың килеп сығышы:

1. ***Ҡаҙаҡтар** — әсир төшкән.*
2. ***Төрөкмәндәр:** бер уҙғынсы китеп барғанда беҙҙең Баубаковтар бер етем баланы **(Байназарҙы)** бер һыйыр ботона һатып алып ҡалалар.*

Мөгөш (Нөгөш) Сәнкеменән килгән халыҡ был — унда (Нөгөш Сәнкеменә) иһә Туҡ-Соран буйынан килгән.

Йәнә лә аралар:

1. ***Ҡамалар** (Солтановтар), тамғаһы (ҡойошҡан -- Донъя Ҡуласаһы).*
2. ***Төрөкмәндәр** (Байназаровтар).*
3. ***Борайҙар** (Сунарчиндар).*
4. ***Ҡаҙаҡтар** (Үтәбаевтар, Туйгариндар, тамғаһы (сүкеш).*
5. ***Һыуырҙар йәки башҡаралар** (Мусаҡаевтар).*
6. ***Бешкәктәр** (Ташбулатовтар), тамғаһы (ҡуян).*
7. ***Ҡараҡалпаҡтар** (Бикҡужиндар).*

Өҫтә килтерелгән риүәйәттән беҙ «төрөкмәндәр» араһының Байназаровтар икәнен белдек, Үҫәргән ырыуында ла бар ул төрөкмәндәр араһы (Р.Г. Кузеев. Происхождение башкирского народа. М. — 1974; 109, 111-енсе биттәр). Ә иң мөһиме һәм ҡыҙыҡлыһы — беҙҙәге төрөкмәндәр араһының баш бабаһы Байназарҙы ниндәйҙер бер уҙғынсынан бөрйәндәрҙең бер һыйыр бото биреп алып ҡалыуҙары. Был иһә тарихи Сыңғыҙ-хан бөрйәндәренең тарихындағы Боданчар (боҙоп яҙылған шул уҡ Байназар) мажараһына ике тамсы һыуҙай тап килә.

ҺУНАРСЫ АУЫЛЫ БАЙНАЗАРОВТАРҘЫҢ ҠАРАҒАЙ-ҠЫПСАҠ ШӘЖӘРӘҺЕ

Быуындарҙың был сиратланыу исемлеге ныҡ ҡыҫкартылып төҙөлгән. Мәҫәлән, Байназар (Баданчар, XI быуат аҙағы) һәм минең ауылдашым Ноғоман мулла (XVIII быуат аҙағы) кеүек шәхестәр йәшәгән осор арауығындағы 700 йылда тейешле 28 быуын теҙеме урынына бында ни бары 4 кенә быуын теркәлгән (ҡыпсаҡ шәжәрәләренә, ғөмүмән, ошондай теүәлһеҙлек хас). Уның ҡарауы, Ноғоман мулланан дауамланған өлөштә өҙөклөк юҡ.

1. Лоҡман-Хәким. – 2. Дәшт Ҡыпсаҡ. – 3. Рушан. – 4. Исмәғил. – 5. Алмалы. – 6. Күҙәй. – 7. Боҫкон. – 8. Бабасаҡ. – 9. Күсәк-би. – 10. Игүнсәк. – 11. Мөндөк. – 12. Сөйөндөк. – 13. Ишбулды. – 14. Бикдархан. – 15. Дәүләтбай. – 16. – Ҡашаҡ. – 17. – Базан. – 18. Ильяс. – 19. ***Байназар*** (Башҡортостандың хәҙерге Бөрйән районындағы Байназар ауылын нигеҙләгән – XI быуат аҙағы). – 20. Мырҙағол (мулла). – 21. Баубаҡ, уның нәҫеле:

I. Ҡолбәк, уның нәҫеле:

1. Бикмөхәммәт Ҡолбәков (1792), уның улдары:

а) Динмөхәммәт (1813),

б) Ишмөхәммәт Бикмөхәммәтов-Ҡолбәков (1822);

2. Дуҫмөхәммәт, уның улдары:

а) Ырыҫмөхәммәт Дуҫмөхәммәтов (1831), уның улдары:

*Ғәзизйән Ҡолбәков, уның улы:

Ғәлимйән Ҡолбәков (1895),

б) Шәрәфитдин Дуҫмөхәммәтов (1833),

в) Сәйфитдин Дуҫмөхәммәтов (1838).

II. Бәлхиә (1766), уның нәҫеле:

1. Фазулла Бәлхин-Байназаров (1814 — 1856), уның улдары:

а) Сафиулла (1839 — 1852),

б) Үмәр, уның улы:

*Бәҙритдин Баубаков (1893 — 1920 й. иҫән).

III. Ноғоман Баубаков-Байназаров (1788), башта мөхтәсип (һөнәрмән), аҙаҡ указлы мулла. Уның нәҫеле:

1. Ғәбделлатиф Ноғоманов-Байназаров (1808), уның нәҫеле:

а) Мөхәммәтзариф Байназаров (1831), уның нәҫеле:

*Мофаззал (1858 — 1915), уның нәҫеле:

Мырҙағәли (1893 — 1920 й. иҫән), уның улдары:

Мәһди (1902 — 1910),

Муллағәли (1904),

*Бибиғәфифә (1873 — 1940, Андижан шәһәрендә ерләнде. Йыһат Солтановтың оләсәһе),

*Хәмзә (1898 — 1942),

*Хөснөтдин, уның улдары:

Ғаббас (1904),

Ғәбделсәлим (1910);

б) Мөхәммәтғариф (1836 — 1857);

в) Сөнәғәтулла, уның улы:

*Зиннәтулла (1916);

г) Лотфулла (1916).

2. Абдулкәли (1813).

3. Мөхәммәтсадиҡ (1827), уның улдары:

а) Шаһислам Баубаков (1850 — 1920 й. иҫән);

б) Шәйхулислам Баубаков (1866 — 1920 й. иҫән).

4. Мөхәммәтхәсән Байназаров (1830), зауряд-хорунжий, 3-өнсө йорт старшинаһы вазифаһын башҡара. Уның улдары:
а) Ғәбделфәттәх (1852);
б) Ғәбделфазыл (1858), уның улы:
*Һибәтулла Баубаков (1887 — 1965 й. иҫән, миңә баяғы риүәйәтте һөйләүсе).
5. Мөхәммәтғәли Ноғоманов-Байназаров (1814), урядник. Уның улдары:
а) Хәмзә (1850 — 1853);
б) Хәким;
в) Айытбай Байназаров (1871 — 1920 й. иҫән);
г) Ғабдулла Байназаров (1873 — 1920 й. иҫән);
д) Шәйхелислам Байназаров (1875 — 1920 й. иҫән);
е) Абдрахман Байназаров (1878 — 1920 й. иҫән), уның нәҫеле:
*Фәйзрахман (1918?), уның улдары:
Ринат,
Сафуат;
*Фәтхрахман (1930?);
ж) Ҡорбанғәли, уның улы:
*Миңлеғәли (1932), уның улы:
Сергей.
6. Ғабдулвәли Ноғоманов-Байназаров (1815 — 1857), уның улы:
а) Мөхәммәтшәриф (1834).
7. Мөхәммәтсафа Байназаров (1844), уның улдары:
а) Мөхәммәтвафа;
б) Төхфәтулла Байназаров (1872 — 1920 й. иҫән); уның улдары:
*Насибулла, уның улдары:
Марат (1932 — 1952),
Фоат (1927 — 2000), уның улдары:
Марат,
Талғат.
*Сәғиҙулла Байназаров (1902), уның улдары:
Ирек,
Спартак;
*(?) Сәмиғулла Байназаров;
*(?) Хөсәйен Байназаров.
8. Хисмәтулла, уның улы:
а) Ғайса Байназаров (1902).
9. Хәйбулла, уның улы:
а) Хәмзә Байназаров (1907), уның улдары:
*Динам Байназаров,
*Илүс Байназаров,
*Мансур Байназаров.

IV. Абдулмоталлап (1800)...

ҺУНАРСЫ АУЫЛЫН НИГЕҘЛӘҮСЕЛӘР ШӘЖӘРӘҺЕ

(Хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Һарыкташ районы, Жултый ҡасаба советы)

Мәғлүмәттәр XX быуат баштарында Бәкәтәр-Йәнсура (хәҙерге Ырымбур өлкәһе, Ҡыуандыҡ районы) ҡасабаһының аҡһаҡалы Рәхмәтуллин Мөҡим Бәҙретдин улы төҙөп ҡалдырған "Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһе"нән, Рәсәй дәүләт администрацияһы төрлө йылдарҙа үткәргән "ревизские сказки"ҙарҙан һәм 1956, 1960 йылдарҙа Мәскүҙә нәшер ителгән "Материалы по истории Башкирской АССР" исемле документтар тупланмаларының IV һәм V томдарынан, шулай уҡ Сәнкем-Биктимер ауылы мәсетенең метрика кенәгәләренән алынды. Хәҙерге яҙмала ҡабул ителгән "бей" һүҙе шәжәрәләгесә "би" (мәҫәлән, Мөйтән-би) яҙылышында ҡалдырылды; волость – ылыҫ, губерния – гөбөрнә тип бирелә. Текстағы автор өҫтәлмәләре дүрткел йәйәләр эсенә һалынды.

Билдәле булыуынса, Обь – Иртыш үҙәненән алып Ҡама – Иҙел үҙәненәсә, Төньяҡ Боҙло океандан (Ҡар диңгеҙенән – Карское море) Каспий (Үһәргән – Гурган) диңгеҙенәсә йәйрәп ятҡан ерҙәр бик боронғо замандарҙан уҡ башҡорт ырыуҙарының тәүтөйәге булған, ошо тәүтөйәктән бабалар мең-мең йылдар дауамында мифик Бүре һәм Болан (Һыйыр) юлбашсылығында изге Көн-Өфө (Ҡәнифә) һәм Ҡуңыр-Буға юлдары буйлап Евразия ҡитғаһының дүрт тарафына таралған, хатта Америка, Африка ҡитғаларына барып еткән.

Изге Көн-Өфө юлындағы бабалар, әле әйткәнсә, үҙҙәренең юлбашсы-башбабаһы (дәдәме – тотемы) итеп бүре-этте (бүретте – бурятты) һанаған; ырым буйынса дәдәмдең ысын исем-атын әйтеү ҡәтғи тыйылғанлыҡтан, уны "аҙаштырып" Әби-ән-әс (бында Әби-ән -- Әбиҙән йәғни әпи-апабыҙ Көн-Ҡояштан тыуған, әс -- әсә мәғәнәһендә) -- Әби-Нәс тип йөрөткәндәр; ябай ғына әйткәндә, Көн-Әбиҙән (Ҡояш-Апанан) тыуған Әсә (Әсә-Бүре) була инде. Бара-тора "Нәс" тигәнебеҙ "нәсәб" (нәс-әби), "нос" (бүреттең еҫ тойғон осло танауы) төшөнсәләрен биргән. "Нос" тигәнебеҙ тағы "с" өнө "һ"-лашыу һөҙөмтәһендә "нос"тан ноһ – нох – нюх (урысса "еҫ тойоу") – еҫкәп белеүсе тойғон-эт мәғәнәһендәге һүҙҙәребеҙ хасил булып, ахырҙа был дәдәмебеҙ донъялағы төп диндәрҙең Нух – Ной пәйғәмбәренә әүерелә. Ошоларғы бәйле, бүрет (бурят) дәдәмле ырыу-ҡәбиләләр ҡәүемен, дөйөмләштереп, Нухай – Нуғай (йәғни бүре-эткә табыныусы) тип атағандар; был атама Сыңғыҙ-хан бабабыҙ заманында уға буйһынған һәм ҡулға бүре-эт эйәләштереүҙе башҡорттарҙан күреп белгән монгол ҡәбиләһенең теленә "эт" мәғәнәһендә "нухай – нуғай" рәүешле барып кергән. (Ентеклерәк белергә теләгән уҡыусыға китап бар: Йыһат Солтанов. Башҡорт батшалары. Сыңғыҙхандан алып Урыҫ дәүләтенә ҡушылғанғаса. Өфө, 2007).

Биреләсәк шәжәрәбеҙ кешеләре төйкләнгән тупраҡтың да тарихын ҡыҫҡаса белеү хәйерле. Урта быуаттар Башҡортостан хакимы Сәсле Дәрүиш-биҙән һуң дәүләтебеҙ идаралығы һәм биләмәләре уның ике ейәненә бүленеп, өлкәне Борнаҡ – Себер өлкәһендә (Себер ханлығының башланыуы), кесеһе Ядкәр (1533 йылда тыуған) Өфө өлкәһендә (Нуғай Урҙаһы) идара ҡыла. Бернисә йыл буйы килгән ҡоролоҡ-ҡытлыҡ арҡаһында ил ҡаҡшап, өҫтәүенә төньяҡлап урыҫ баҫҡынсылығы

көсәйгәс, халыҡтың бер өлөшө 1546 йылда Ядкәр уҙаман етәкселегендә илдән ҡубынып, ул саҡтағы тыныс һәм йылы һаналған Ҡубан яҡтарына күсеп китә лә шундағы нуғай халҡына әүерелә. Тәүтөйәкте ташлап китергә риза булмаған башҡорттар (ҡаҙаҡтар уларҙы Себер ханлығындағы әстәк – остяк ҡәүеменең исеме менән истәк – иштәк тип атай) баяғы ҡанҡәрҙәштәренән бушанып ҡалған ерҙәр иҫәбенә биләмәләрен киңәйтеп, Үҫәргән батшалар шәжәрәһенең аҫыл заты Тәтегәс-би (1565 йылда вафат, Юрматы ырыуының бийе) етәкселегендәге берләшмә буларак йәшәй, ләкин дөйөм Башҡортостан бернисә өлөшкә бүленгән хәлдә тарҡаулыҡ осорон кисерә. Шул шарттарҙа 1557 йылда башҡорттарҙың дүрт ырыу биҙәре – Үҫәргәндән – Тәтегәс һәм уның улы Бикбау, Бөрйәндән – Иҫке (Иҫәкәй), Ҡыпсаҡтан Мышы улы Ҡараҡужаҡ, Тамъяндан Шәғәли Шаҡман уҙамандар үҙҙәренең ихтияры буйынса Урыҫ дәүләтенә ҡушылыуҙарын иғлан ҡыла һәм шул дәүләт администрацияһынан ергә аҫабалыҡ хоҡуҡтарын һәм биләмә-ер сиктәрен билдәләгән рәсми танытма-грамота ала. Шуға ярашлы Үҫәргән, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Бөрйән ырыуҙарыныҡы итеп танылған ер-биләмәнең сиктәре түбәндәгесә (текст бөгөнгө телгә яраштырылды):

«961 йыл ғәкрәбнең 2-че көнендә рус жәмәғәте Ҡазан шәһәрен басып алдылар. Шундан суң, башҡордлар дүрт ыруғындан вәкилләр: Үсәргәндән — Бикбау кенәз, Ҡыпчаҡдан — Мәшәүле Ҡаракөчөк кенәз, Бержәндән — Иске бей кенәз (икенче исеме Буранчы бей), Тамъяндан — Шығай Шаҡман кенәз рус кенәзенең чаҡырыуы буйынча Ҡазанға бардылар. Олуғ кенәз царь Васильевичҡа, тәбиғә вә рәғиәлек (буйһонмаҡҡа) ғарыз (яҙма рәүешле аңлатыу) итүб, ҡабул итеп, үз химаясына алғандан суң, ерләрен һәм сыуларын тигезләб үлчәб бирүб, ғарыз итдиләр. Былар һәр ҡайусына тарханлыҡ чины биреб, башҡордларға ерләрен ғәделләп тигезләб биреү, тигезләб бүлеү ҡайуның өчөн төлкө вә сусар ясағы түләделәр. Еремез түбәндәгечә бүленеб, Олуғ кенәзнең санатлары тәсдик итделәр. Әүәл Жайыҡ буйлап Үрге Жики Бузчык, Ҡызыл, Саҡмар сыуы, Эстәрле, Исәйле Үскәлек, Ике Һүрән — буларның башындан аяғынача, Саялмыш башындан Кер ауылының, Ташкичеүдән Ману йылғасындан Ялғыз өйәнкегәчә, Нуғай кичүе үтә Ер төбәкдән Үксез төбәккәчә, юлҡамы рәүешле Үткелендән, Ҡарағайдан, Керйыуардан, Ҡалмак башындан Сыуал тауынача, Саҡмар буйлаб Кейембирде түбәгенәчә, Таналыктың бөтөн буйы белә Жайыкның Буз тирәгенәчә, Яраҡлидан ҡара урман артсылы Ҡамышлауның Ҡуш Усағындан, Өйрөк Таудан Жим сыуынача — Үсәргән, Ҡыпчак, Тамъян, Бөржәннеңдер. Андан сахра тарафы: түбән чиге Сарайчыҡдан Өч Үзәннең сыу ағышы белән чиге Дүрт Килигәчә — Бөржәннең асаба ерләредер. Бу — башҡордларның мәшһүрәт белән тигезләп үлчәб бүленгән ерләредер. Бу Ҡазан шәһәренең кенәгәсенә теркәлмештер, һәм булар өчөн төлкө, сусар ясағы түләнмеш.

Тарих 970 жөзәнең 29-ынчы көнөндә бу грамута ҡәғәзинең ахрына император Әғзәм хәзрәтләренең олуғ санатлары ҡул ҡуймыш: **Бобров, Степан Белагушин, Степан Соколов,** сәркәтиб **Михаил Белинский».**

Күренеүенсә, Бөрйән ырыуының элекке аҫаба ер-биләмәләре хәҙерге Рәсәй Федерацияһының Куйбышев, Саратов өлкәләрендә һәм Ҡаҙағстанда тороп ҡалған (ҡалдыҡтары әлегәсә шул аҫаба ерҙәрендә донъя көтә). Боронғораҡ (Туҡтамыш-

хан заманы) бөрйәндәрҙең уғата көньяҡтараҡ – Каспий диңгеҙе буйындағы Маңғышлаҡ ярымутрауында төйәкләнеүе тураһында ла ҡыҙыҡлы мәғлүмәт бар (Әхмәтзәки Вәлиди Туған. Башҡорттарҙың тарихы. Өфө, 1994, 23-өнсө бит). Ә ҡыпсаҡтарҙың бер килкеһе был яҡтарға Килмәк-абыз Нурышов етәкселегендәге башҡорт ихтилалын баҫтырышырға батша ғәскәрҙәре сафында 1736 йылдың йәйендә хәҙерге Ырымбур арты далаларынан килеп төпләнеүе билдәле, ул хаҡта “Башҡорт ҡырылған урын” тигән хеҙмәтемдә йәки ошо “Эскерһеҙҙең тормошо” тигән мемуарҙарымда ентеклерәк уҡырға мөмкин.

Билдәле булыуынса, үҫәргәндәр ерендә Ырымбур ҡалғаһен ҡорҙортмаҫ өсөн ҡубынған был ҡораллы күтәрелеште 1735 йылда көнбайыш Башҡортостанда Аҡай-батыр Күсемов башлап ебәрһә, Үҫәргәндә уны Килмәк-абыз Нурышов менән Алғышай-батыр Наҙаров (иртә үлгән шағирыбыҙ Рифҡәт Алғышаевтың бабаһы) етәкләй. Баш күтәреүселәрҙең һуғыш юлдары ҡанлы, ә юл осо ҡот осорғос фажиғәле. Ихтилалсыларҙы баҫтырыуҙа ҡырғынсы ғәскәр сафтарында батша яҡлы төрлө милләт вәкилдәре менән бергә баяғы *ете йөҙ (700) башҡорт ҡыпсағы* ла ҡатнаша. Ихтилал етәкселәренең береһе яҙып ҡалдырған тәүәрихтә был хаҡта асыҡ әйтелгән: *“Ҡыпсаҡтар, үҙҙәренең урыҫтар яҡлы булыуынан маһайып,* Хоҙай уларға тыныслыҡ һәм бәхет килтерҙе, тип һананы һәм тамъяндарға (күтәрелеште тамъяндар башлап ебәргән -- Килмәк-абыҙ тамъян ырыуынан. – Й.С.) ҡаршы көрәште. Тамъяндарҙан үс алырға теләп, Һаҡмарға (йәғни хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ергә. — Й.С.) барып еткән урыҫтар менән берләшеп, тамъяндарға ябырылды. Һуңғылары үҙҙәренә ҡотолор урын таба алманы...

Улар (тамъяндар. — Й.С.), күсенергә теләп, ҡыпсаҡтарҙың тарафына (йәғни ҡыпсаҡтар менән үҫәргәндәр араһын сикләүсе Һаҡмар йылғаһы буйына – хәҙерге Һунарсы ауылы ултырған ергә. — Й.С.) килгәйне, ләкин көтмәгәндә ҡыпсаҡтарҙан булған һатлыҡ йәндәр Һаҡмарға килеүсе урыҫтарға хәбәр иткән улар хаҡында. Мосолмандар иһә бер ни ҙә белмәне. Һатлыҡ йәндәрҙең береһе... *Ҡорбанай...* мосолмандар йәшәгән урынды күрһәткән һәм урыҫтарҙы һуғыш хәйләһенә өйрәткән. Урыҫтар төндә үҙҙәренең туптарын килтерҙе лә иртәнсәк шуларҙан ата башланы. Бахыр башҡорттар, был атыуҙың ҡайҙан ҡупҡанлығын аңлай алмай, төрлө яҡҡа һибелеп ҡаса башланы; күп ҡатындар балаларын ҡосоп йылғаға ташланды ...бәғзеләренең сабый балалары тирәк ботаҡтарына эленгән сәңгелдәктәрҙә ҡалды — бөтәһе лә шунда һәләк булды, сөнки әсәләре уларҙы үҙҙәре менән алырға өлгөрмәне. Яралылар ҙа йылғала һәләк булды. Был һуйышта Һаҙлыйылғала (хәҙерге Һунарсы ауылы аша аға. – Й.С.) мәйеттәрҙән күпер хасил булды. Ҡарттарҙы эт урынына таштар һәм күҫәктәр менән һуғып үлтерҙеләр, имсәк сабыйҙарын ҡылыстар менән тураҡланылар, гөманлы бисара ҡатындарҙың ҡорһаҡтарын ярҙылар, йәш-елкенсәкте мауығып үлтерҙеләр. Шәһиттәрҙең мәйеттәрен ҡарғалар суҡыны һәм төлкөләр кимерҙе. Ошо көндә лә унда ул кешеләрҙең һөйәктәрен табырға мөмкин... Күксә-тархандың ҡатынын — Сураҡайҙың әсәһен — әлһерәп бөткән ҡарсыҡты, урталай яра сабып, юлдың ике яғына быраҡтырҙылар. Тамъяндан Ҡорманғолдо, Аҡмайҙың улын, был фетнәле көндә урыҫтар ҡамаған; үҙенең һөйләүенсә, ул, ике янды бер юлыматҡып алып, керешен бөтөрә тартып, шуларҙан уң яҡлап — урыҫтарға, һул яҡлап мишәрҙәргә

атып, үҙенә юл ярған. Бер мишәр уның артынан: «Ах, ни эшләнең һин, яуыз башҡорт?! Һеҙҙе аҫып бөтөрөргә тирәктәр ҙә етмәй бит!» — тип ҡысҡырып ҡалған... Һатлыҡ йәндәр көлдөләр һәм уларҙың ҡайғыһынан ҡыуандылар... Хатта шуға тиклем барып еттеләр: үҙ әтрәттәрен төҙөп, бахыр мосолмандарҙы ҙур тырышлыҡ менән ауланылар һәм уларҙы урыҫ ҡулдарына һаттылар... *улар көслөк менән башҡорт ерҙәрендә ҡалды һәм бөгөн дә күп әле улар*; башҡорт ауылдарында берәүҙе лә тере ҡалдырманылар"...

Рәсәй хөкүмәтенең рәсми документтарында быларҙың барыһы дөрөҫләнә.

1736 йылдың 2 июнендә Ырымбур экспедицияһы башлығы И.К. Кирилов әбей батшаға кинәнесле хәбәрләй:

«Ее императорскому величеству, самодержице всероссийской всеподданнейшее в Кабинет доношение.

После всеподданнейших нижайшего раба репортов и отъезду отсюду генерала-лейтенанта и казанского губернатора Румянцева получил известие от майора *Останкова*, что яицкими казаками вступя от Сакмарска Нагайской дороги в Башкиры *19 мая*, ушедших с Демы реки воров, на которых *пришли внезапно*, в горах *между Ика и Сакмары рек*, добита *мужеска полу с 600, женска* ***немалое число,*** причем получено лошадей, скота и пожитку довольно...». Шул

Һүр. 1. Карталағы түңәрәк төртөклө пунктир -- Аҡһаҡтимер яуының юлы. Тәреле пунктир -- Кириловтың Ырымбур экспедицияһы юлы. Уҡлы һыҙыҡ -- батша ҡырғынсыларының Ҡасанҡый-Салаға (башҡорт яуының төбәгенә) уҙған юлы. 1. Сәнкем-Биктимер. 2. Ҡасанҡый-Сала -- батша ҡырғынсылары 1200 башҡортто ҡырған урын. 3. Ҡаҫмарт йылғаһының иҫке үҙәне. 4. Тәре-билдә -- Тирәкле йылғаһы янында Кирилов драгундары Килмәк-абыз яуы менән һуғышҡан урын. 5. Тәреле түңәрәк-билдә -- Аҡһаҡтимер һәм Туктамыш-хан ғәскәрҙәре бәрелешкән урын.

ҡырғында батша яҡлы (“доброжелательные башкирцы”) башҡорт ҡыпсаҡтарының да ете йөҙ (700) кешелек әтрәте ҡатнашлығын батшаға ентеклерәк итеп һуңғараҡ яҙылған хисапнапмәлә күрәбеҙ: “Майор Останков 2 сентября из Сакмары писал: ...собравший он, майор, доброжелательных башкирцев з 700 же человек да яицких казаков с 300 человек, отправил на вора Алгишея по другую сторону реки Сакмары, о котором де есть известие, что кочует на реке Космарке и Оняку (дөрөҫө Эйек. – Й.С. [Материалы по истории Башкортостана, том VI, автор-составитель Н.Ф. Демидова. Уфа – 2002, №312, 475-енсе бит])”.

Иғтибар итегеҙ: 1736 йылдың 19 майында хәҙерге Һунарсы ауылы урынлашҡан ерҙә 600 ир-ат һәм ***унан да кәм булмаған һанда*** (тимәк, тағы 600) ҡатын-ҡыҙ, бала-саға — бөтәһе 1200 кеше, көтмәгәндә баҫып алынып, бер юлы үлтерелгән, һәм был ҡанлы фажиғә тап ошо беҙҙең төбәктә — Эйек менән Һаҡмар аралығындағы минең бабалар ауылы Ҡасанҡый-Сала ерендә булған (ауыл тулыһынса яндырылған – Иҫке Ҡый тигән ерҙә өй урындары беленә)... Ә Ырымбур экспедицияһының 1736 йыл 30 июндә яҙылған икенсе бер документында: «Майор *Останков* с яицкими казаками после первой над ворами победы *от 22* по 30 числа мая ходил по реку Яику, где воровских разорил и выжег 113 деревень, и с башкирцами, коих было 1000 человек, бились и побито больше двух сот...» — тип әйтелә. Тимәк, ауылыбыҙ Ҡасанҡый-Салала ҡырғынсылар тарафынан 1200 ир-аттың, ҡатын-ҡыҙҙың, бала-сағаның яҙалап үлтерелеүе һәм ауылыбыҙҙың яндырылып юҡ ителеүе 1736 йылдың иҫке стиль менән 22 майында булған, был иһә Себер юлы Балыҡсы ылыҫы Сейәнтусы ауылы фажиғәһенән кәм түгел. Айырма шунда ғына: Тәфтиләү менән бергә йөрөгән П.И. Рычковтың яҙма-шаһәҙәтнамәһе арҡаһында ғына Сейәнтусы тарихҡа керһә, Ҡасанҡый-Сала фажиғәһе тарихтан ситтә ҡалған.

Был ҡанлы фажиғә урыны төбәгебеҙҙең һыҙмаһында (һүр. 1.) – тәре тамғаһы менән, ә Һаҡмарҙың һул ярынан ҡырғынсылар килгән юл уҡбашаҡлы һыҙыҡлап күрһәтелде. Ҡорбанай (йәки Ҡорбантай) тигән хыянатсы ҡырғынсыларҙы аҫтыртын үткәргән йәшерен юлды төртөклө пунктирҙар менән билдәләнек; шул кисеү һәм уның аръяғындағы төбәк хәҙер ҙә *Ҡормантай төбәге* тип атала. Хәҙерге Һунарсы ауылынан Сәнкем-Биктимергә табан Әселе үҙәкте сыҡҡас та, юлдың һул яғында һөргән ер эсендә (хәҙер инде һөрөлмәй — ауыл өйҙәре аҫтында ҡалып бара) эре-эре таштар менән буралған, арҡырыһы — биш, буйы ун метр самаһындағы оҙонса-түңәрәк (овальный) уба, ә уның ян-яҡтарында шулай уҡ таш бураулы бәләкәйерәк ике уба (ирҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар, бала-саға айырым-айырым өс ҡәбергә ерләнгән) бар ине — «Сәғир-Сағаид» зыяраты. Ҡайһы берәүҙәр уны, «Сағаид»ә һүҙен боҙоп әйтеп, «Сәғиҙә зыяраты» тип йөрөттө, шуға күрә унда, имеш, «атаһы менән ҡунаҡтан ҡайтып барышлайы юлда үлеп ҡалмыш Сәғиҙә тигән ҡыҙ күмелгән», тип һөйләне (бер юлы өс зыяратҡамы?!.). Әммә зыяраттың бабаларыбыҙ ҡушып ҡалдырған ғәрәпсә исемендәге «Сәғир» — «ғазап уты», ә «Сағаид» — «бейек урын, уба» тигән һүҙ икән. Фани донъяла уҡ ғазап утында яныып-яҙаланып үлеүселәрҙең — изге шәһиттәребеҙҙең уба-зыяраты, тимәк...

Мең дә ике йөҙ шәһит күмелгән был убаның эре-эре бура таштарын үткән быуаттың алтмышынсы йылдар уртаһында Хәмитов Миңнебай тигән кеше ташып алып, саҡ ҡына үрҙәрәк Әселе үҙәктең һул ярында өйөнөң нигеҙенә һалған, белекһеҙҙе бирәү ҙә туҡтатмаған (башҡорт маңҡортҡа әүерелә -- ата-бабалар тарихын тойомламай). Шул йылдарҙа Һунарсы ауылы Әселе үҙәктең баяғы ҡанлы уң ярынаса ҙурайып китеп, шәһиттәрҙең изге зыяраттарына еткерә яҙып яңы йорттар төҙөлгән һәм улар, изге зыяраттар, бура таштарының урланып бөтөүе сәбәпле, ер менән тигеҙләнгән -- зыярат булыуынан туҡтаған. Ошо көндә ул урынды ауылдың бернисә ҡарты ғына (мәҫәлән, минең замандаштарым Сөйәрембәтев Фәсхетдин, Ҡыуатов Атауылла, Мостряков Алексей-Лүнке — ғүмерҙәре буйына шул зыяратты уратып үтеп ер һөргән тракторсылар) күрһәтеп бирә алыр ине (ул изге урынды 2003 йылдың июлендә ғаиләм менән ауылға ҡайтҡаныбыҙҙа баяғы уҙамандар менән берлектә урта тәңгәленә бүрәнә киҫкәһе һалып ваҡытлыса ғына билдәләп киткәйнек. Аҙаҡ 2008 йылда Фәсхетдин һәм Атауылла вафат булған тип ишеттем). Халҡыбыҙҙың ҡаны аҡҡан изге зыярат мотлаҡ тергеҙелергә һәм унда мәңгелек матәм һәйкәле ҡуйылырға тейешле, тип һанайым.

Һаҙлыйылға буйындағы ҡанлы еңеүенән рухланған секунд-майор Б.Л. Останков үҙенең ҡырғын әтрәте менән май айының аҙаҡҡы аҙнаһында Үҫәргән ерҙәре буйлап Һаҡмар менән Яйыҡ аралығынан үрләп китә лә 113 башҡорт ауылын яндырып, 200 башҡорттоң башына етеп ҡайта. Ошондай ҡырғын өҙлөкһөҙ ҡоторона. Секунд-майор Останковтың хисапнамәләре буйынса, 1737 йылдың август аҙаҡтарында ул Ағиҙел аръяғынаса дөрөп, Нөгөш, Мәләүез йылғалары буйындағы ихтилалсы башҡорттарҙың ҡанын ҡоя. Һөҙөмтәлә был ерҙәрҙең үҫәргәндәре йә ҡырылып, йә төрлө яҡҡа һибелеп бөтөп, бик һирәкләнеп ҡала, урындарына баяғы батша яҡлы ҡәүемдәр төйәкләнә (хәҙер һәр ауылда, тип әйтерлек, ҡатнаш йәшәйбеҙ).

Һаҡмар һәм Ҡаҫмарт буйҙарындағы ауылдарҙы нигеҙләгән Үҫәргән башҡорттарының бер тармағы -- тарихи Солтанов – Боҫҡонов – Уралбаев (Аралбаев) фамилияларын биргән бабаларыбыҙ XII быуат баштарында (1200 йылда) уҡ ошо Ҡаҫмарт йылға тамағындағы Мөйтән-би ыҫтаны Ҡасанҡый-Салала (Урта Сәнкем тип тә йөрөтөлгән) донъя көтөп торғанлығы билдәле. Шул уҡ Үҫәргәндең икенсе бер тармағы -- хәҙерге Һунарсы (Үрге Сәнкем) ауылын нигеҙләгән Сунарчин, Тләүмбәтов, Сөйәрмбәтов, Мусаҡаев, Яугустин фамилиялары һәм Этбай (Үрге Ырыҫҡол), Ырыҫҡол, Солтанбай, Тирәкле ауылдарын нигеҙләүсе Этбаев, Ырыҫколов, Арыҫланов, Солтанбаев, Ярышев фамилияларының һәм, моғайын, Үҫәргән ырыуынан булмаған Биктимеров (Сәнкем-Биктимер ауылын нигеҙләүселәр), Баубаков, Байназаров фамилияларының бабалары, быуындан-быуынға тапшырылған риүәйәттәр буйынса, был төбәккә һуңыраҡ – баяғы бер ҡәүем башҡорт-нуғайҙарҙың 1546 йылда Ҡубанға күсенеп китеүе осоронда Нөгөш йылғаһы буйынан килеп төпләнгән булырға тейеш. Үҫәргәндәрҙең ул яҡтағы биләмәләре тураһында тарихи мәғлүмәттәр бар: мәҫәлән, 1787 йылдың 3 сентябрендә Нуғай юлы Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы башҡорттарының Нөгөш йылғаһы буйындағы аҫаба ерҙәрен завод

хужаһы Д.И. Пашковаға һатыуы тураһында килешеү ҡағыҙы бар; унда, башҡалар менән бергә, *Һунарсы Тләүмбәтов* (Елумбетов тип боҙоп яҙылған) Ишбулат Тләүмбәтов (Тляуф тип боҙоп яҙылған) ҡул ҡуйған (Материалы по истроии Башкирской АССР, V том, М., 1960, №220. – Артабан томдар ғына күрһәтелә). Тап беҙҙең төбәк үҫәргәндәрҙең исем-фамилиялары Тляумбет Явгостин (Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы старшинаһы), Абдрак Явгостин, Калмаҡ Явгостин, Суярымбет Явгостин, Буляк Тляумбетов, Урускул Кайбулатов, Урускул Айтаков, Аблай Урускулов, Казянь Урускулов, Давлет Урускулов, Унгар Урускулов, Юлтимир Урускулов, Ибрай Урускулов, Сакир Урускулов, Урускул Елдашев, Исергап Аллабердин (сотник), Яруш Сулеймановтар (IV томдың беренсе киҫәгендә 1754-70 йылдар ҡыҫаһындағы документтар: №47,167,181,298,302,311) һәм Калкаман Бускунов, Исергап Бекбовов, Ильчугул Таймасовтар (V томдың 1770 йылғы №317 һәм 1791 йылғы №321 документтары) теркәлгән сәхифәләр бар.

Инде төбәгебеҙ ауылдарының ҡыҫҡаса тарихына бер килке күҙ һалайыҡ.

Әйтеп үтелеүенсә, хәҙерге ауылдарыбыҙҙың әсәһе Ҡасанҡый-Сала (Мөйтән-биҙең ҡасанҡы – ҡышлау ҡасабаһы) хәҙерге Һунарсы ауылынан түбәндәрәк Иҫке Ҡый (иҫке ауыл урыны) тигән ерҙә булған; унан саҡ ҡына түбәндәрәк – Ҡамышлыҡолаҡ күтеренең ситендәге тәбәнәк тауҙа – шул ауылдың зыяраты. Бабабыҙ Мөйтән-биҙең (“Башҡорт батшалары” тигән китабымдың тышлығында унның ҡытай рәссамы яһаған һүрәте бирелде) 1207 йылда Бөрйән бәге Темәсйәнде аҡ кейеҙҙә Сыңғыҙ-хан (император) итеп күтәрешкәнен һәм күп йылдар унның уң ҡулы булғанлығын (аҙаҡ дошманлашалар) беләбеҙ. Тимәк, урындағы халыҡ телендә унның “баш ҡалаһы” тип йөрөтөлгән Ҡасанҡый-Саланың йәшәү тарихын иң кәмендә ***1200 йылдан башлап*** һанай алабыҙ. Баяғы 1735 йылдың 19 майындағы оло фажиғәлә был сала (село) ҡырғынсылар тарафынан тулыһынса яндырылғас, тере ҡалғандарҙың береһе Биктимер ҡарт тап шул 1735 йылда ауылды түбәндәрәк – Ҡаҫмарт йылғаһы Һаҡмарға ҡойған урында тергеҙеп, йорт һалып ултыра, тере ҡалған башҡа ауылдаштары ла бер-бер артлы шунда ултыраҡланғандан һуң, ауыл инде Биктимер (аҙаҡ Сәнкем-Биктимер) исемләнә. 1795 йылғы V ревизия буйынса, ундағы 40 ғаилә-йортта 124 ир-ат, 102 ҡатын-ҡыҙ йәшәгән. Был күрһәткестәр Солтанбайҙа (Һултамбайҙа) 24 һәм 42 – 50, Ырыҫколда 24 һәм 50 – 43, ә Һунарсыла 9 һәм 34 – 28 һандарында сағыла.

Ҡыҙыҡһынғандар өсөн йәнә:

Һунарсыла 1816 йылда 14 йорт, 44 ир-ат, 24 ҡатын-ҡыҙ; 1859 йылда 41, 96 – 90; 1866 йылда 35, 91 – 87.

Солтанбайҙа 1816 йылда 5, 26 – 24; 1859 йылда 25, 66 -- ?; 1866 йылда 22, 53 – 42.

Ырыҫколда 1816 йылда 22, 200 – 169; 1859 йылда 112, 311 – 304; 1866 йылда 102, 261 – 231.

Сәнкем-Биктимерҙә 1816 йылда 21, 105 – 76; 1859 йылда 95, 230 – 207; 1866 йылда 99, 226 – 211. Заманында гөрләп торған ауылыбыҙ большевиктарҙың 70 йыллыҡ хакимиәте осоронда ҡороп юғалды.

Инде Сәнкем-Биктимерҙән заманында яңы ауылдар бүленеп сығыуының сәбәбен ҡыҫҡаса аңлатайыҡ.

XVIII быуат урталарында батша самодержавиеһы тарафынан башҡорттарҙың Урта Азияға юлын быуыр һәм уларҙы ауыҙлыҡлап тотор өсөн Башҡортостан көньяғы Самаранан алып Орскиғаса хәрби ҡәлғәләр (крепостар) менән уратып алына. Ҡәлғәләрҙең бер өлөшө Һаҡмар йылғаһының һул яры буйлап та ҡорола, ә уң яҡ яр буйы, башҡорттар менән рәсми килешеү нигеҙендә, башҡорттарҙың һис кем ҡағылышһыҙ аҫаба ерҙәре итеп танылa. Өфө янындағы Шишмә ҡасабаһынан килтерелеп Һаҡмарҙың һул яғында (хәҙерге Шишмә ауылы) урынлаштырылған Шишмә ландмилицияһы тигән ғәскәри төркөм кешеләренә (татарҙарға) бабаларыбыҙ йыл да, уң ярға сығып, Әселе йылғаһы тамағында бесән сабырға рөхсәт бирә.

Әбей батшаның 1767 йыл 1 июнь указына ярашлы, 1768 йылда Һаҡмар буйы ҡәлғәләренә хәрби казак рәүешендә 1044 нуғай Ҡазандан килтерелеп, Водвиженка ҡәлғәһенә, Никитин һәм Жултый редуттарына, Ҡундрау биҫтәһенә бүлеп ултыртыла. Шунан һуң был нуғайҙарҙың Һаҡмар аша башҡорт ерҙәренә ҡул һуҙыуы йонсота башлай, был йылдан-йыл көсәйә. Шуға сик ҡуйыр өсөн, Сәнкем-Биктимер ауылы башҡорттарының бер өлөшө Һаҡмар түбәнендә Никитин нуғайҙары зыянлыҡлаған үҙ аҫаба ерҙәренә күсенеп, яңы ауыл нигеҙләй, уға ла Биктимер исеме бирелә. Хәҙер ул ауыл башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, татарға әүерелгән. VII (1816 йыл) һәм IX (1859 йыл) ревизия мәғлүмәттәре был Биктимерҙәрҙең икеһендә лә байтаҡ ҡына бер үк фамилияларҙың (мәҫәлән, биктимеровтар, сиреүбаевтар, алтынбаевтар, мәсәғутовтар) булыуын күрһәтә. Шуныһы ҡыҙыҡ: Алтын(бай) Сиреүбаев ике ауылда ла теркәлгән (Сәнкем-Биктимерҙән күсенеүҙәренә дәлил) – икеһендә лә аҫаба ер биләмәләренә эйә булыу маҡсатынандыр, бәлки.

Воздвиженка нуғайҙары һис бер тынғы бирмәгәс (улар хатта Әселе тамағын мишәрҙәргә 500 һумға һатып ебәрә), бабаларыбыҙ был ерҙәрен Ырымбур алпауыты Васильевка һатып ҡотола, ә Васильевтан поручик Петр Дмитриевич Крашенинников (атаҡлы яҙыусы Н.А.Крашенинниковтың ҡартатаһы, шундағы Петровское/Кершәнник ҡасабаһын нигеҙләүсе) һатып ала ла уның баяғы Әселе мишәрҙәрен үҙ биләмәләренән ҡыуҙыртыу өсөн күп йылдарға һуҙылған, аҙаҡ еңеүе менән осланған дәғүә-тартышы башлана.

Ҡундрау нуғайҙарының баҫҡынынан ҡотолоу өсөн, Ырыҫҡол ауылы башҡорто Юлғотло шул тәңгәлдә (Һаҡмарҙың уң ярында) утарланып ултыра һәм ул төбәк башҡорттары, балалары мәктәптә татарса уҡытылыу сәбәпле, татарға әүерелмеш Юлғотло (Утар) ауылына әйләнә.

Башҡорттарҙың үҙ аҫаба ерҙәрен ҡурсалап ҡалыу өсөн өс тиҫтә йылға һуҙылған иң ҙур дәғүәле тартыш Ҡаҫмарт һыуының ике яғындағы оло байлыҡ -- Олобай сабынлығы өсөн була, ул эш батшаға барып етеп кенә башҡорттар файҙаһына хәл ителә; һәм Сәнкем-Биктимерҙән күснеүселәр тарафынан Һунарсы, Яңы-Ғафар (Яңауыл) ауылдарының нигеҙләнеүе лә тап шул Олобайға бәйле. Архив документтарынан Һунарсының башланыу йылын асыҡлайыҡ.

Олобайҙы башҡорттар ҡулында һаҡлап ҡалыу өсөн яҙған ғаризаларында Ырымбур түрәләренән уҙып батшаға тиклем барып еткән уҙаман – хәҙерге Солтанов фамилиялыларҙың олатайҙарының береһе кенәздәрҙән тархан Боҫҡон

Даянов (ҡағыҙҙарҙа Бускун Дуянов) ул. 1804 йылдың 28 майы менән тамғаланған ике ауыл ышаныҡтарының юлламаһы ла ҡыҙыҡлы, уға Сәнкем-Биктимерҙән Аҫылғужа Биктимеров, Абуталип Солтанморатов, Баубаҡ Байназаров, Бикйән Хоҙайназаров, Әлибай Биктимеров, Иҙелбай Сәғитов, Моҡанай Хәлилов, Ғайса Бикташев, Ишмөхәмәт Этйеймәсев, Ғүмәр Итчин уҙамандар, десятник Абдулла һәм бер килке ауылдаштар Баймөхәмәт, Ташбулат, Ҡотлогилде, кәсепсе Көбәк Ҡәҙербирҙин, ә Һунарсынан указлы мулла Өмөрҙаҡ Солтанморатов, кенәздәрҙән тархан Боҫҡон Дуянов, ***Һунарсы Тләүмбәтов*** (ауылды нигеҙләүсе), Илбул Ҡалмаҡов, Йәрмөхәмәт Ҡотлобаев, Айдарбәк Килдебаев, Килсембай Сөйәрембәтов, Әбйәлил Сунарчин уҙамандар ҡул ҡуйған.

Жултый нуғайҙарының ышанығы Кидрали Азяпов тигән бәндә Ҡаҫмарт йылғаһының ике яғын (Олобайҙы) башҡорттарҙан арындыртыуҙы һорап 1804 йылдың 10 июнендә Ырымбур генерал-гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға атҡарған шикәйәтендә башҡорттарҙың унда тәүҙә утар булып ултырыуын, шунан һуң "самовольно" ауыл барлыҡҡа килеүен; нуғайҙарҙың был ерҙәргә дәғүәһе Ырымбур Земский Суды тарафынан 1782, 1785, 1802 йылдарҙа ҡаралып та, һаман нуғайҙар файҙаһына хәл ителмәүен яҙа. Тимәк, Олобай сабынлығындағы башҡорт Һунарсы Теләүембәт улының утары нуғайҙар Жултыйға күсеп килгән 1768 йыл һәм Судта беренсе дәғүә ҡаралған 1782 (йәмғеһе 14 йыл) араһында булған. Эҙләнгән урталыҡ һан 14:2=7 тип алып, Һунарсы утарының нигеҙләнеү йылын яҡынса билдәләйбеҙ: 1768+7=1775. *Ләкин* ул 1775-тең ҡанҡойошло бола заманы икәнен һәм 1795 йылда Һунарсы ауылында 9 өй генә булыуын иҫәпкә алып, ул туғыҙ өйҙөң һигеҙе иң кәмендә 5 йыл дауамында ырағандыр тип һанаһаҡ, ***1790 йыл Һунарсы ауылының нигеҙләнеү йылы булып тора һымаҡ.*** *Ләкин* Һунарсы ауылы Ҡасанҡый-Саланың да, Сәнкем-Биктимерҙең дә туранан-тура дауамланышы икәнен ныҡ иҫтә тотоп, уның ысын тыуған йылын билдәләйбеҙ – Мөйтән-би үҙе нигеҙләгән ***1200 йыл.*** Тимәк, ошо юлдар яҙылған 2010 йылда ***Һунарсыға 810 йәш*** тулды.

Ләкин Һаҡмар аръяғы һөмһөҙҙәре һаман Олобайҙың арғы осонан баҫып кереп ыҙалағанлыҡтан, 1863 йылда Сәнкем-Биктимер һәм Һунарсы ауылдарының бер килке башҡорттары шул тәңгәлгә күсеп барып яңы ауыл нигеҙләй, беренсе булып нигеҙ һалған Һунарсы ауылы башҡорто Ғабдул-Ғафар (1812 йылда тыуған) Ғабдулсәләмов-Моратбаҡтыев (Моратов) уҙамандың исеменән ул ауыл рәсми ҡағыҙҙарҙа Ново-Гафарово тип яҙыла, ә ябай телдә Яңауыл тип йөрөтөлә (хәҙерге ваҡытта был ауылдың башҡорттары, балалары мәктәптә гел татарса уҡытылыу сәбәпле, тоташ татарға әүерелгән).

Ҡыҫҡаһы, Һунарсы ауылының ысын тыуған йылы ***1200.***

Һунарсы икенсе тыуған ауылым (сөнки Сәнкем-Биктимерҙең совет осоронда һирәкләнеп ҡалған һуңғы халҡы ла шунда күсенде) булғанлыҡтан, был ауылды нигеҙләгән ырыуҙашыбыҙ Һунарсы Тләүмбәт улының шәжәрәбеҙҙәге нәҫел бауын ҡәҙерле ауылдаштарым һәм башҡаларҙың иғтибарына еткереүҙе изге бурысым һананым. Әммә бер иҫкәртеү яһарға кәрәк: һуңғы йылдарҙа үҫәргәндәрҙең "Туҡсаба" тигән ырыу оранын яңылыштырып, "ораны Мөйтән" тип яҙыусылар күренә, быны сәбәбе, моғайын, Ҡыпсаҡ ырыуының да ораны шундай уҡ

булыуҙан сәйерһенеү ғәләмәтелер. Ләкин быға һис аптырарға ярамай, сөнки боронғо заманда ҡыпсаҡтарҙың шул уҡ үҫәргәндән саталанып сығыуы билдәле, шуға күрә уларҙа ла Үҫәргән ырыуының ораны "Туҡсаба" һаҡланған.

Шулай итеп, бисмилла:

Үҫәргән-Түңгәүер шәжәрәһенең Һунарсы бауы

Ырыуы – **Үҫәргән.**
Ағасы – **Миләш.**
Ҡошо – **Торна.**
Ораны – **Туҡсаба.**

Тамғаһы – **Аҡа-Ай+Әсә-Көн>Ҡаяс-Көн>Ҡояшҡан (Ҡойошҡан):** .

Оран һәм тамға атамаларыбыҙҙың килеп сығышы (этимологияһы):

ТУҠСАБА: Ат-Аҡ (Ата-Аға)+Әс-Аба (Әсә-Апа йәки Аҫаба)= һүҙҙәрҙе аңлатыу:

1. Атаҡ – Таҡ – Тау (йәки Ир-Ер);

2. Әсаба – Әсә-Сауа (Һыу-Һауа) йәғни боронғо "төрөк-бөтөн" бабаларыбыҙ изгеләштереп табынған Ер һәм Һыу (Ер-Һыу) ул. "Төрөк" (тороҡ) атамаһы – Тороҡ-атау (Тора-тау) иленең (йәғни Башҡортостандың) кешеһе тигән һүҙ. Изге Тора-тау (боронғоса Тороҡ-атау) Башҡортостан Республикаһының хәҙерге Ишембай районында урынлашҡан.

ҠОЙОШҠАН: Аҡ-Ай (Аға-Ай)+Әс-Көн (Әсә-Көн)= шул уҡ боронғо "төрөк-бөтөн" бабаларыбыҙ изгеләштереп табынған Ай һәм Көн (Ай-Көн) ул.

Иҫкәртмә: ошо Күк есемдәренең икеһенең дә Урта Донъялағы (Евразия ҡитғаһындағы) мифик енес күрһәткестәре (Ай – ата, Көн -- әсә) улар орбиталары буйынса Өҫкө Донъяға (Африка ҡитғаһына) һәм Аҫҡы Донъяға (Америка ҡитғаһына) уҙған саҡта ҡапма-ҡаршы есемгә (Ай -- әсә, Көн – ата булып) үҙгәргән.

Тимәк, хәҙерге үҫәргәндәр – боронғо Орхон – Селенга ядкәрташтарындағы ырын (рун) яҙыуҙарында тәүәрихләнеп данланған, Айға һәм Көнгә, Ергә һәм Һыуға табынған "төрөк-бөтөн" халҡының туранан-тура тоҡомо, вариҫтары.

Шәжәрә (Туҡсабанан дауамланған өҙөгө):

[1. Туҡсаба]. – 2. Мөйтән-би Туҡсаба улы. – 3. Шаҡмалы-би Мөйтән улы. – 4. Бүрекәй-би Шаҡмалы улы. – 5. Һеркә-би Бүрекәй улы. – 6. Манғут-би Һеркә улы. – 7. Урал-би Манғут улы. – 8. Арбан-би Урал улы. – 9. Тимерҡабыҡ-би Арбан улы (өҫтәлгән: "Бораҡ-хан заманында йәшәгән" йәғни 1422-27 йылдарҙа). – 10. Һарыбаш-би Тимерҡабыҡ улы. – 11. Һырыш-би Һарыбаш улы (өҫтәлгән: "Ҡасим-хан заманында йәшәгән"). – 12. Ябынсы-яҫауыл Һырыш улы (өҫтәлгән:"Ябынсы бабабыҙ батшаға хеҙмәт итеп, яҫауыллыҡ хәрби дәрәжәһе алған"). – 13. Үҫәргән Ябынсы улы (өҫтәлгән: "Кесе улы"). – 14. Сөйәлғужа Үҫәргән улы. – 15. **Мусаҡай**

Сөйәлғужа улы [Мусаҡаевтар фамилияһы]. – 16. Яукүсте (Күскенсе) Мусаҡай улы [Яугүстиндар фамилияһы]. – 17. Иҫәнбирҙе Яукүсте улы [Иҫәнбирҙе улы Болаҡ батырҙан яҙыусы Йыһат Солтановты биргән нәҫел бауы дауамлана]. – 18. Таймасби (кенәз) Иҫәнбирҙе улы, уның улдары:

А. Тләүмбәт Таймас улы Яугүстин (Сәнкем-Ҡыпсаҡ ылыҫы старшинаһы [1754 йылдың 6 июнендәге рәсми ҡағыҙға ҡул ҡуйған -- Тләүмбәтовтар фамилияһы]), уның улы **Һунарсы Тләүмбәт улы Тләүмбәтов** [Һунарсы ауылын нигеҙләгән инсан, 1787 йылдың 3 сентябрендәге һәм 1804 йылдың 28 майындағы рәсми ҡағыҙҙарға ҡул ҡуйған – Сунарчиндар фамилияһы]. Уның улдары:

I. Ғәбделяйыҡ Һунарсы улы Сунарчин, 1757 йылда тыуған, уның улы Лот, 1794 йылда тыуған;

II. Ғәбделйәлил Һунарсы улы Сунарчин (йорт сотнигы), 1762 йылда тыуған. Уның улдары:

1) Сәйфулла Ғәбделйәлил улы, 1796 йылда тыуған;

2) Мөхәммәтҡолой Ғәбделйәлил улы, 1805 йылда тыуған, уның улдары:

*Ғатаулла Мөхәммәтҡолой улы, 1830 йылда тыуған, уның улы Сөләймән, 1853 йылда үлгән;

3) Ғәйнулла Ғәбделйәлил улы, 1813 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Асатулла Ғәйнулла улы, 1840 йылда тыуған (1860 йылда Себергә һөрөлгән), уның улы Ғиззәтулла Асатулла улы, 1857 йылда тыуған;

4) Мөхәммәтҡунафиә Ғәбделйәлил улы, 1822 йылда тыуған, уның улдары:

а) Мөхәммәтсафа Мөхәммәтҡунафиә улы, 1847 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Хөснулла Мөхәммәтсафа улы Сунарчин, 1898 йылда тыуған, уның балалары:

**Мәзит Хөснулла улы Сунарчин;

**Сафия Хөснулла ҡыҙы Сунарчина-Байназарова;

**Наилә Хөснулла ҡыҙы Сунарчина-Байназарова;

б) Мөхәммәтхан Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1855 йылда тыуған һәм йәнә:

б) Ғәлиулла Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1893 йылда тыуған, 1920 йылда иҫән;

в) Идрис Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1878 йылда тыуған;

г) Ерйеҫ Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1880 йылда тыуған;

д) Фәйзулла Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1890 йылда тыуған, уның балалары:

*Хаматулла Фәйзулла улы Сунарчин, 1924-42;

*Фатҡулла Фәйзулла улы Сунарчин;

*Фәррәх Фәйзулла улы Сунарчин;

*Маһира Фәйзулла ҡыҙы Сунарчина;

е) Баймөхәммәт Мөхәммәтҡунафиә улы Сунарчин, 1895 йылда тыуған, уның нәҫеле:

*Рамаҙан Баймөхәммәт улы Сунарчин, 1924 йылда тыуған, уның улы Йосоп Сунарчин;

*Фирҙәүес Баймөхәммәт ҡыҙы Сунарчина-Иҡсанова, уның улы Таһир Иҡсанов.

III. Ғәбделрәхим Һунарсы улы Сунарчин, 1771 йылда тыуған, уның нәҫеле:

1) Ишмөхәммәт Ғәбделрәхим улы, 1796 йылда тыуған, уның улы Хөснетдин -- указлы мәзин, 1823 йылда тыуған;

2) Шәрәфетдин Ғәбделрәхим улы, 1813 йылда тыуған;

3) Мөхәммәтсәхи Ғәбделрәхим улы, 1805 йылда тыуған.

IV. Ғәбделрафиҡ Һунарсы улы Сунарчин, 1775 йылда тыуған, уның нәҫеле:

1. Мерәҫ Ғәбделрафиҡ улы Мусаҡаев, 1793 йылда тыуған, уның нәҫеле:

а) Ғәбделвәли Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1822 йылда тыуған, уның улы Идрис, 1855 йылда үлгән;

б) Ғәбделғәлим Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1824 йылда тыуған, уның улдары:

*Мөхәммәтсәлим Ғәбделғәлим улы, 1853 йылда тыуған;

*Мөхәммәткәрим Ғәбделғәлим улы, 1856 йылда тыуған;

в) Мөхәммәтшәриф Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1827 йылда тыуған;

г) Шәрәфетдин Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1832 йылда тыуған, уның улы Мөхәммәтәмин, 1859 йылда үлгән;

д) Хисаметдин Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1837 йылда тыуған, уның улы Низаметдин Хисаметдин улы Мусаҡаев, 1902 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

*Сания Низаметдин ҡыҙы Мусаҡаева-Аҡманова;

*Роза Низаметдин ҡыҙы;

*Робес Низаметдин улы, 1941 йылда тыуған;

*Илдар Низаметдин улы, 1945 йылда тыуған;

*Шәриф Низаметдин улы, 1950 йылда тыуған.

е) Сәләхетдин Мерәҫ улы, 1871 йылда тыуған, уның улы Зәйнетдин Сәләхетдин улы Мусаҡаев, 1910 йылда тыуған, уның улдары (Мусаҡаевтар):

*Зәйнәғәбдин Зәйнетдин улы, 1925 йылда тыуған;

*Ғәпсәләм Зәйнетдин улы, 1931 йылда тыуған;

*Ғәлимйән Зәйнетдин улы, 1947 йылда тыуған.

ж) Ҡунаҡкужа Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1881 йылда тыуған, уның балаһы Ғәйникамал Ҡунаҡкужа ҡыҙы Мусаҡаева-Байназарова;

з) Толомғужа Мерәҫ улы Мусаҡаев, 1885 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

*Дәүләткирәй Толомғужа улы, 1924-43;

*Әлимә Толомғужа ҡыҙы;

*Рауил Толомғужа улы, 1935 йылда тыуған, уның нәҫеле (Мусаҡаевтар):

**Рәмил Рауил улы, 1960 йылда тыуған, уның улдары:

***Тимур Рәмил улы, 1984 йылда тыуған;

***Руслан Рәмил улы, 1988 йылда тыуған;

**Радик Рауил улы, 1964 йылда тыуған, уның улы Марат Радик улы, 1988 йылда тыуған.

2. Мөхәммәтғәли Ғәбделрафиҡ улы Мусаҡаев, 1805 йылда тыуған;

3. Әхмәтйән Ғәбделрафиҡ улы Тләүмбәтов, 1820 йылда тыуған, уның улдары:

*Мөхәммәтсадиҡ Әхмәтйән улы, 1849 йылда тыуған;

*Мөхәммәтлатиф Әхмәтйән улы, 1852 йылда тыуған;

*Абзалалетдин Әхмәтйән улы, 1861 йылда үлгән.

4. Мөхәммәтша Ғәбделрафиҡ улы Тләүмбәтов, 1809-1853, уның улы Хәлиулла Мөхәммәтша улы, 1848 йылда тыуған.

V. Ғәбделнасир Һунарсы улы Тләүмбәтов, уның улы Фәйзулла Ғәбделнасир улы Тләүмбәтов, 1795-1852.

VI. Динмөхәммәт Һунарсы улы Сунарчин, уның улы Шаһиәхмәт, 1836 йылда тыуған.

Таймас-биҙең икенсе улына күсәбеҙ:

Б. Сөйәрмбәт Таймас улы Яугүстин [1754 йылдың 6 июнендәге рәсми ҡағыҙға ҡул ҡуйған -- Сөйәрмбәтовтар фамилияһы], уның улдары:

1) Килсебай Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1753 йылда тыуған, уның балаһы Баһауетдин Килсебай улы, уның улы Фәхретдин Баһауетдин улы, 1872 йылда тыуған, уның улдары (Сөйәрмбәтовтар):

*Ҡолмөхәммәт Фәхретдин улы, 1904-43, уның балалары (Сөйәрмбәтовтар):

**Фәсхетдин Ҡолмөхәммәт улы, 1930 йылда тыуған;

**Шәмсинур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы, 1932 йылда тыуған;

**Ғилминур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы;

**Маһинур Ҡолмөхәммәт ҡыҙы;

**Алмира Ҡолмөхәммәт ҡыҙы.

*Нәбиулла Фәхретдин улы Сөйәрмбәтов, 1924-43.

Ошо урында үҙемдән остоҡ хәтирә: бер туғандар Ҡолмөхәммәт менән Нәбиулла һуғышта үлеп ҡалды. Һуғыш йылдары аслығында Ҡолмөхәммәттең биш балалы тол ҡатыны Ғәйнекамал еңгәй, балаларын астан үлтермәҫ өсөн, ырҙында эшләп йөрөгәнендә кеҫәһенә һалып алған ҡушус бойҙай менән тотолоп, биш йылға хөкөм ителеп, уны Тоҙтүбә төрмәһенә алып киттеләр, фронтовиктың биш балаһы ҡартәсәләре Мәхмүзә инәй ҡулында ҡалды... “Таң нурҙары” тигән повесым шул ваҡиғаларға нигеҙләнгән.

Шәжәрәне дауам ҡылайыҡ:

2) Ялсыйән Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1785 йылда тыуған;

3) Хөсәйен Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1787 йылда тыуған;

4) Беләр Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1794 йылда тыуған;

5) Йосоп Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1801 йылда тыуған;

6) Әйүп Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1804 йылда тыуған;

7) Сәйет Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов, 1805 йылда тыуған.

8) Абзан Сөйәрмбәт улы Сөйәрмбәтов [Абзан ауылын нигеҙләүсе?], уның улы Ғәбделсәләм Абзан улы, 1784 йылда тыуған, уның улы Ғәбделманнан Ғәбделсәләм улы, 1805 йылда тыуған...

Шәжәрә бауҙарының бөгөнгәсә еткерелмәгәндәрен уларҙың тоҡомдары үҙҙәре тикшереп ялғай алыр. Ә Солтановтар шәжәрәһенең алтмыш ете быуынын элегерәк төпсөнөп төҙөгәнмен.

26.01.2010

Инде ғәзизә ҡартәсәкәйем (атайымдың әсәһе) Бибилатифа Ямалитдин ҡыҙы Әбдрәшитованы тыуҙырған Мишәр ырыуының Сәнкем-Биктимер ауылы мишәрҙәре шәжәрәһен төҙөрҙән алда, уларҙың ауылыбыҙға күсеп килеү тарихын

һәм шул осорҙағы уларға ла бәйле көсөргәнешле ауыл ваҡиғаларын ҡыҫҡасараҡ бәйән ҡылыу фарыздыр.

Аҫаба ерҙәребеҙгә мәкерле ҡул һуҙыуҙар һәм аҫыл бабаларыбыҙҙың көрәше

«Ҡаҙаҡ ханы Әбелхәйерҙең һорауы» һәм әбей батша Анна Иоанновнаның 1734 йыл 1 май указы буйынса, 1735 йылдың 15 авгусында Яйыҡҡа һул яҡлап ҡойған Ур йылғаһы тамағында Ырымбур экспедицияһы башлығы статский советник Кирилов М.К. беренсе Ырымбур ҡәлғәһен нигеҙләүен (1743 йылдан башлап ул Орск ҡәлғәһе тип йөрөтөлә, ә ысын Ырымбур иһә шул йылда Ырымбур комиссияһы башлығы тайный советник һәм кавалер Неплюев И.И. тарафынан Яйыҡтың уң ярында Һаҡмар йылғаһы тамағында боронғо башҡорт ҡалаһы Аҡтүбә өҫтөнә ҡорола); шуға ҡаршы башҡорт халҡының Аҡай батыр — Килмәк-Абыҙ етәкселегендәге күтәрелешенең ҡайһы бер ҡанлы ваҡиғалары тап беҙҙең төбәктә булғанлығын бәйәнләгәйнек өҫтәрәк.

Беренсе Ырымбур ҡәлғәһе осоронда уҡ, тайный советник Татищев В.Н. менән Ырымбур комиссияһы башлығы генерал-лейтенант кенәз Урусов (боронғо башҡорт (нуғай) кенәзе Зартуш Һары Йософтоң суҡынмыш тоҡомо) әбей батшаға Һаҡмар йылғаһының башынан алып тамағынаса һул яры буйлап туғыҙ ҡәлғә ҡорорға ла ул ҡәлғәләрҙә Рәсәй ғәскәрҙәре файҙаһына игенселек менән шөғөлләнеүсе һәм башҡорттарҙы ауыҙлыҡлап тотоусы ландмилиция (ерле милиция) полктарын урынлаштырырға, тигән проект тапшырғас, 1739 йылда Анна Иоанновна шуны раҫлап указ сығара. Был указды тулыһынса бойомға ашырыу башҡорт халҡының ҡоралы яңы күтәрелеше менән янағанлыҡтан, Ырымбурҙағы яңы түрә Неплюев И.И. яңы Ырымбурҙан көнсығышҡа табан Һаҡмар буйына ике ҡәлғә ҡороу менән сикләнә (Ырымбурға кәрәк ағасты башҡорт урмандарынан һаллап ағыҙыу өсөн): Ырымбурҙан Һаҡмар ҡәлғәһе аша уҙғас 59-ынсы саҡрымда — Пречистинский, ә унан ары 47-нсе (Ырымбурҙан — 106) саҡрымда Эйек тамағы тәңгәлендә Воздвиженский ҡәлғәһе. Шул һуҙымда ике хәрби нығытма редут та эшләнә: Пречистинскийҙан 23-өнсө саҡрымда — Никитинский, ә Воздвиженскийҙан үрҙәрәк 30-ынсы саҡрымда Суртанлы йылғаһы тамағында уны уң яҡлап — Жултый редуты.

Өфө янындағы хәҙерге Шишмә татар ҡасабаһында төҙөлгән, заманында Кирилов экспедицияһын башҡорт боласыларынан һаҡларға был яҡтарға ебәрелгән ландмилиция Шишмә (Өфө янындағы) драгун полкы һәм хәҙерге Алексеевский (Өфө янындағы) ҡасабаһында төҙөлгән Алексеевский полкының йәйәүле бер ротаһы Воздвиженский ҡәлғәһенә урынлаштырыла. Улар шунда үҙҙәре ер һөрөп, бесән сабып хужалыҡ ҡылырға тейеш була. Шул уҡ шарт менән батшаға хеҙмәт итергә ялланған, ә элегерәк Әстерхан һәм Ҡубан араһында далала аҙып йөрөгән, шунан һуң Ҡазанға күсерелгән бер төркөм “ҡундырау нуғайҙары”н (борон заманда Ҡубанға күсеп киткән һәм инде башҡортлоҡтарын онотҡан Үҫәргән ярсыҡтарын) да килтерәләр, 1745 йылдан башлап улар Жултый редуты

янындағы Суртанлы йылғаһының һул яғында Ҡундырау нуғайҙары бисҭәһе (хәҙер Жултыйҙың Нуғай яғы) ҡороп ултыралар. Шуныһы бик мөһим: беҙҙең аҫаба башҡорт бабалар менән Неплюевтың һөйләшеп килешеүенсә, баяғы ҡәлғәләр тәңгәлендә Һаҡмар йылғаһының уң яғы башкөлләй башҡорт ерҙәре булып ҡала, һул ярҙағы ҡаҙна кешеләре ул ерҙәргә ҡул һуҙмаҫҡа — башҡорттарҙың рөхсәтенән тыш бер нәмәһенән дә файҙаланмаҫҡа тейеш була. Был — Һаҡмарҙы буйлатып ҡәлғәләр ҡороу мәсьәләһендә башҡорттарҙың төп шарты һәм батша администрацияһы тарафынан ҡабул ҡылынған шарты.

Әммә сусҡаның томшоғо һыйған тишектән бөтә кәүҙәһе керә, тигәндәре дөрөҫтөр. Һаҡмар һыуының бейек һул ярында көн күреүсе шул ҡаҙна кешеләре уң яҡтағы Эйек, Ҡаҫмарт, Әселе буйҙарындағы ҡалын үләнле һыубаҫар болондарға, ҡуйы урмандарға ҡарап күҙҙәре ныҡ ҡыҙа, Һаҡмарҙы кисеп сығып, рөхсәтһеҙ-ниһеҙ бесән сабыу, ағас киҫеүҙәр йышая. Бабаларым, килмәшәктәрҙең көс ҡулланып баҫып алыуҙарына ҡарағанда, һөйләшеп килешеүҙе яҡшыраҡ күреп, Шишмә ландмилиция полкына Эйек, Әселе буйҙарынан йыл да бесән сабып алырға рөхсәт бирә. Заманалар уҙыу менән хәрби ҡәлғәләрҙең әһәмиәте юғалып, ландмилиция полктары һәм нуғайҙар ғәскәри казактарға әүерелгәс тә улар, әүәл заман башҡорттарҙың рөхсәте менән ландмилиция ваҡытлыса файҙаланған ул ерҙәрҙе инде башкөлләй үҙ биләмәләре һанап, һөмһөҙлөктөң сиген ашып китәләр. Шуға күрә, Эйек — Әселе буйҙарында Воздвиженский нуғайҙарынан һис бер тынғы ҡалмағас, Сәнкем-Биктимер, Күҙәш (шәжәрәбеҙҙәге 57-нсе быуын Муҫка (Мусаҡай) бабаның улы Ҡуҙаш//Күҙәш бабаның йорто, ә икенсе исеме Әсеүташ; 1920 йылда ул — Асташ утары), Юлдыбай (Сураш), Сәнкем-Биктимер ауылдарының уртаҡ йәйләүе һәм сабынлыҡтары булған ул ерҙәрҙе шул ауылдарҙың халҡы, үҙ-ара килешеп, 1784 йылда Ырымбурҙағы бер түрәгә — титулярный советник Андрей Федорович Васильевҡа һатып ебәрәләр (шуға бәйле «Бейлеғош йәйләүе» тигән һағышлы йырҙы үҫәргәндәр әлегәсә йырлай). Бүлешеп алынған аҡсаһын ҡайһы ауыл халҡы ҡайһылай файҙаланғандыр, әммә беҙҙең ауылдыҡылар тураһында мәрәкәле риүәйәттәр бар: кемдер берәү, сереп байыуын күрһәтер өсөн, өйөндә көпә-көндөҙ шәм яғып ултырған, ә икенсе берәһе, ҡайыш ҡамыт, ҡойошҡанлап еккән атының ҡайыш дилбегәһен йәйге селләлә лә терһәгенәсә оҙон ҡуныслы күн бирсәткә кейеп тотоп йөрөгән. Һәм ауылда, фәҡир-фоҡор күршеләренең көлсә менән генә сәй эсеүҙәрен күреп: «Әсәй-әсәй, өрөкһөҙ ҙә сәй эсеп буламы икән ни ул?!» — тип ихлас ғәжәпләнеүсе ҡыҙыҡайыбыҙ ҙа булған... Әммә ер һатыуҙың ахыры бик күңелһеҙ барып ослана: йәйҙәрен киң сахраларға йәйләүгә сығыуҙар өҙөлөп, үкенестән баяғы «Бейлеғош йәйләүе»н йырлағандар...

Заманаһының ҡанунына ярашлы, башҡорттарҙың — һатыу, Ырымбур урыҫы Васильевтың һатып алыу шартнамәһе ҡануни ике йыл һынау үткәндән һуң ғына йәғни 1886 йылда раҫланырға тейеш була. Воздвиженский нуғайҙары шул икеле-микеле арауыҡтан мәкерле файҙаланып, салғый аҫтынан аҫтыртын эш йөрөтөп, хәҙер инде Васильев еренең Әселе тамағы төбәген Һаҡмар һул яғындағы килмешәк Сиркәш ауылының ун алты йорт (60 йән) яҫаҡсы татарына биш йөҙ һумға һаталар, ә тегеләре тиҙ генә унда күсенеп тә ултыра. 1811 йылғы

иҫәпнамәлә был Әселе ауылында беҙҙең ауыл мишәрҙәре Әбдрәшитовтарҙың ағай-энеләре лә йәшәй: Әбделвахит Әбдрәшитов (1768) һәм уның улы Мөхәммәтғәли (1807).

Быға тиклем ул яҫаҡсы татарҙар тәүҙә Ырымбур өйәҙе (һуңынан Быҙаулыҡ өйәҙе) Яңы Үмәр ылыҫының Үмәр йылғаһы тамағындағы Яңы Үмәр ауылында ерһеҙлектән интегеп, Рәсәй хөкүмәте башҡорттарҙан тартып алып үҙләштергән «ҡаҙна ерҙәре»нән өлөш теләнә торғас, Һаҡмарҙың һул яғындағы шул Воздвиженскийға яҡын Сиркәш йылғаһы буйына күсерелгәндәр ҙә Сиркәш тигән ауылды нигеҙләгәндәр икән. Ерҙәре ифрат күп булһа ла, ҡылғанлы дала яғын мөрәхәтһенмәй, Һаҡмарҙың уң яғындағы аҫаба башҡорт биләмәләренә — бесәнгә лә, урманға ла бай Эйек, Әселе буйҙарына ҡомһоҙ күҙ аталар имеш. Воздвиженский нуғайҙары, шунан оҫта файҙаланып, баяғыса, аҫаба башҡорт ере Әселе тамағын уларға 500 һумға «осорғас», һатып алыусылар, Сиркәштәге биләмәләрен дә үҙҙәренең «дача»һы итеп ҡалдырып, Әселе тамағында шул Әселе исемле ауылды ҡора һалып ултырғандар, ә ул ерҙең һуңғы ҡануни хужаһы Васильев, моғайын, абайламай ҙа ҡалғандыр быны. Әммә ошо баҫкынсылыҡ ерҙең элекке эйәләре башҡорттарҙың кеҫәһенә ныҡ ҡына һуғырға янай имеш, сөнки баяғы һатыу — алыу шартнамәһе буйынса, әгәр башҡорттар бер һатҡан ерҙәрен икенсе берәүгә һатһа (ә Воздвиженский нуғайҙары ул ер өсөн Әселе яҫаҡсы татарҙарынан «башҡорттар ҙа 140 һум алды», тип ялғанлай), Васильевҡа ҙур штраф түләргә тейеш була. Шуға күрә, барыһынан әүәл һиҫкәнеп, баяғы үҙе кенәз, үҙе тархан тоҡомло Боҫҡон Даянов бабабыҙ һөмһөҙ килмешәктәр (нуғайҙар) өҫтөнән Ырымбур Наместник идаралығына яҙма ялыу тапшыра. Ул идаралыҡ 1785 йылда гөбөрнә Земский суды аша уға белдерә: башҡорттар ул ерҙең аҫаба хужалары икәнлектәрен суд аша дәлилләһен, ә яҫаҡсы татарҙар шуға тиклем Әселелә тыныс йәшәй бирһендәр. Ләкин Васильев быға риза булмай, 1788 йылдың 18 сентябрендә гөбөрнә Граждандар палатаһына мөрәжәғәт иткәс, палата эште уның файҙаһына ҡарап, 1791 йылдың 30 сентябрендә Ырымбур Земский судына түбәндәгесә бойора: суд Әселе ауылы татарҙарына уларҙың Васильев еренә ҡанунһыҙ кереп ултырыуҙарын, шуға күрә икенсе яҡтағы ҡаҙна еренә күсеп китергә тейешлектәрен белдерһен.

Татарҙар был ҡарарҙы үтәмәгәс, палата 1792 йылдың 22 июнендә баяғы ҡарарын дөрөҫләп, татарҙар әгәр икенсе ергә үҙ ихтыярҙары менән күсеп китмәһә, көсләп күсереләсәктәр, тип белдерә. Ә 1797 йылдың 16 декабрендәге күрһәтмәһендә уларҙы, әгәр 1798 йылдың 15 ғинуарына тиклем башҡа урын табыуҙары тураһында килеп хәбәр итмәһәләр, баш тартыусылар сифатында Судҡа тарттырыласаҡтар, тип ҡаты киҫәтә.

Шул арала Әселе яҫаҡсы татарҙарының хәлдәре уғата мөшкөлләнә: беренсенән, бындағы ерҙең көтмәгәндә ифрат ғауғалы икәне асыҡланһа, икенсенән, Сиркәш буйында ҡалдырған «дача»ларына гөбөрнәтер ғали янаптары башҡа яһаҡсы татарҙарҙы күсергән: Яңы Үмерҙән — 48, Өҫкәлек йылғаһы тамағындағы Өҫкәлек ауылынан 90 йән эйәһен. Улар элекке сиркәштәрҙең иң яҡшы ерҙәрен үҙләштереп, Әселе тамағындағы хужаларына «дача»лыҡка тау-

ташлы иң насар урындарҙы ҡалдырғандар ҙа Яңы Сиркәш (Ново-Черкасово) ауылын ҡороп ерекккәндәр...

1792 йылда Васильев әфәнде был ғауғалы биләмәһен алпауыт Петр Дмитриевич Крашенинниковҡа (билдәле яҙыусы Н.А. Крашенинниковтың ҡартатаһына) һатып ҡотола.

Яңы хужа П.Д. Крашенинников беренсе сиратта башҡорттар менән ике аралағы сикте нығыта — ауылыбыҙ янындағы баяғы тарихи Һаҙлыйылға башындараҡ йәмле бер төбәккә атаһы Дмитрий алпауытты крәҫтиәндәре менән бергә килтереп ултырта — беҙгә яҡын урындағы Дмитриевка (Митрский) урыҫ ауылы барлыҡҡа килә (хәҙер юҡ). Һаҙлыйылғаны шул урта биленән быуҙыртып, Ҡаҫмартҡаса түбән яғын ҡороталар (яҙҙарын һыу ташҡанда ғына аға). Ә Әселе йылғаһы буйында йәш алпауыттың үҙ исемендәге ҙур Петровский (Кершәнник) ҡасабаһы хасил була (таштан һалынған алпауыт йорто хәҙер ташландыҡ хәлдә емерелеп ултыра), беҙҙең бабалар аҙна һайын унда баҙарға йөрөй (Сәнкем-Биктимер ауылы һыртында зират эргәһенән «Кершәнник юлы» бар ине). 1801 йылда П.Д. Крашенинников күпләп күсереп килтергән урыҫ крәҫтиәндәре Әселе яҫаҡсы татарҙарын ныҡ ҡыҫырыҡлай: бесәнлектәрен саба, һөргән ерҙәренә үҙ игенен сәсә, урмандарын киҫә, көтөүлектәрендә мал йөрөтә. Алпауыт үҙе иһә ҡәтғи рәүештә үҙ еренән килмешәктәрҙең күсеп китеүен даулай. П.Д. Крашенинников был талабын 1804 йылдың 12 майында Ырымбур хәрби гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға ирештергән оҙон текслы үтенес ҡағыҙында нығыта.

Жултый редуты йәнәшәһендәге Ҡундырау (хәҙерге Нуғай) биҫтәһе нуғайҙары иһә бабаларыбыҙҙың теңкәһенә иң ныҡ тейгәндәре була. 1735 йылғы Аҡай — Килмәк-Абыҙ баш күтәреүендә берҙәм ҡатнашҡан, Алғушай батыр Наҙаров етәкләгән үҫәргәндәр яуҙарҙа ныҡ ҡырылып, аралары һирәгәйеп, һөҙөмтәһе насар була: батша ҡырғын ғәскәрҙәре менән бергә башҡорт яуын баҫтырышҡан ҡәрҙәштәре ҡара-ҡыпсаҡтар Ҡаҫмарт буйына күпләп килеп ултыра; ҡанһыратылған төп ер хужалары үҫәргәндәр иһә ерҙәрен баҫып алыуҙарға ҡаршы тора алмай, әлбиттә. Шул сәбәпле үтә һөмһөҙләнгән Жултый Ҡундрауы нуғайҙары, үҙҙәренә тейеш булмаған Һаҡмар уң яғына сығып, бабаларыбыҙҙың Ҡаҫмарт һул яғындағы диңгеҙҙәй киң гүзәл сабынлығын — Олобайҙы баҫып алып, үҙҙәренеке итеп һанай башлайҙар. Шуны рәсми нығытырға, ер үлсәүсе урыҫ түрәләрен һатып алып, 1768 йылда үҙҙәренең ер планына беҙҙең Олобайҙы ла кереттертәләр. Ләкин башҡорттарҙың ялыуы һөҙөмтәһендә ул саҡтағы Ырымбур гөбөрнәтере Рейнсдроп был нахаҡ һәм ялған планды юҡ иттертеп (утҡа яҡтыртып), 1769 йылда ул ерҙәрҙең дөрөҫ планын төҙөп бирергә капитан Бреховты юлландыра, нуғайҙар капитан Бреховты ла һатып алыуға ирешә. Ул төҙөгән хәйләле ер планы нуғайҙарға алданыраҡ — 1769 йылда, башҡорттарға 1770 йылда тапшырыла. Ләкин ер өсөн башҡорттар менән нуғайҙар араһындағы иҫке ғауға ун йылдан һуң яңырып, капитан Брехов планында башҡорттар һәм нуғайҙар араһындағы сик ҡапма-ҡаршы ике төрлө: башҡорттарға тапшырылған планда — Һаҡмар йылғаһын сик һыҙығы (Олобай башҡорттар яғында) итеп, ә нуғайҙарҙыҡында Һаҡмарҙың уң яғындағы уға ҡойған Ҡаҫмарт һыуының һул яғы (Олобайыбыҙ!..) нуғайҙарға ҡалдырылып һыҙылыуы

фашланғас, 1780 йылда Ырымбур гөбөрнә чиновниктары, Рейнсдроп юҡ иттерткән 1768 йылғы ялған пландың бер нөсхәһен эҙләп табып, башҡорттар ҡулындағы Брехов планына ла шул ялған пландың сик һыҙығын күсертәләр ҙә башҡорттарға — Ҡаҫмарт йылғаһының Олобайһыҙ уң яғын, нуғайҙарға бөтә Олобайлы һул яғын биләргә бойоралар. Башҡорт-нуғай тартышы уғата көсөргәнешләнеп дауам итә, ә, ниһәйәт, хәлләнеп алған башҡорттар инде Олобайға нуғайҙы килтертмәйҙәр, бесәнен йыл да үҙҙәре сабып алалар. Хәҙерге Һунарсы ауылы урынында Һунарсы Теләүембәт улының (1804 йылда иҫән) ғына өйө була, шуға ла уны Һунарсы тип атайҙар (ауылдағы Һунарсиндар, Теләүембәтовтар — шул бабаларҙың нәҫелдәре). Һөмһөҙ нуғай яҫҡыныуҙарына тере кәртә булып, Боҫкон Даянов бабабыҙ унда, Һунарсыға, Солтановтарҙың бер өлөшө менән бергә күсенеп ултыра. Тора-бара Ҡолбәковтар, Биктимеровтар, Баубәков һәм Байназаровтар, Иҡсановтар, Ташбулатовтар ҙа Сәнкем-Биктимерҙән күсеп киләләр. Нуғайҙарҙың быға ҡаны бик ҡыҙа, юҡҡамы ни шул Жултый нуғайҙары исеменән Ҡыдрәли Әзәпев тигән берәү хәрби гөбөрнәтер Г.С. Волконскийға: «Тәүҙә утар ғына булып, һуңынан ауыл булып күсенеп ултырыусы башҡорттар беҙҙе ҡыҫа», — тип зарланып яҙа...

Бер эҫенеп алғас ни, нуғайҙар ул ерҙе даулап өҙлөкһөҙ эш ҡуҙғаталар, гөбөрнәтергә, хатта батшаға шикәйәттәрен яҙалар. Һөҙөмтәлә мәсьәләне энәһенән-ебенәсә тикшертеп, генерал-гөбөрнәтер барон Игельстром 1789 йылда Граждандар палатаһына ғауғасы нуғайҙар ҡулындағы 1768 һәм 1780-енсе йылғы ялған пландарҙы таптыртып алып юҡ итергә һәм 1770 йылғы пландың башҡорттар ҡулындағы нөсхәһен (Һаҡмарҙың уң яғы башҡорттарҙыҡы!) ҡануни тип танырға, ә нуғайҙарға башҡорт еренә башҡаса ҡул һуҙмаҫҡа, тип бойороҡ бирергә ҡуша. Ләкин бойороҡ еренә еткереп үтәлмәй, сөнки гөбөрнәтерҙәр -- алмашына, чиновниктар һатып алына тора.

1803 йылда бабабыҙ Боҫкон Даянов, башҡорт ерҙәренә нуғай баҫҡынсылығын туҡтатыуҙы һорап, Рәсәй императорына хат яҙа; нуғайҙарҙың ышаныслыһы — Воздвиженский ҡәлғәһенең иллебашы Ғәни Телибәнев тә башҡорттарға ҡаршы яҙылған шундай уҡ хатты еткерә батшаға. Гөбөрнәтергә урында хәл күрергә ҡайтарылған нуғай хатын 1804 йылдың 7 майында Ырымбур граждан гөбөрнәтере, тейешле саралар күрергә, тип, Земский судҡа тапшыра. Земский суд иһә Крашенинниковтың үҙ еренән ҡанунлыҡһыҙ төҙөлгән Әселе ауылын ҡыуырға юллауын махсус суд ултырышы ҡарамағына ҡалдырып, Ҡаҫмарт һул яғындағы Олобайҙы, нуғайҙарға һатылған дворян заседателе Полюдовтың барып тикшереү һөҙөмтәһен танып, нуғайҙарҙың биләмәһе тип һанарға һәм унда башҡорттар сабып өйгән 110 кәбәнде ҡанунға ҡаршы һәм нуғайҙарға зыян килтереп эшләнгән эш, тип белдерергә бойора. Ә Боҫкон Даянов хатына яуап итеп Ырымбур хәрби гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға Петербурҙағы Юстиция министрынан ебәрелгән хатта батша исеменән башҡорттарға ул ерҙәр тураһындағы мәсьәләнең хөкүмәт сенатында ҡаралып хәл ҡылыныуын көтөргә ҡушыла.

Һәм шул йылдың майында уҡ Земский суд тәфтишсеһе Жултый редуты нуғайҙарының, Сәнкем-Биктимер, Һунарсы, Күҙәш ауылдары башҡорттарының,

Әселе ауылы татарҙарының вәкилдәрен тейешенсә "өгөтләп", ғауғалы мәсьәлә хөкүмәт сенатында хәл ҡылынғанға тиклем, үҙ-ара ыҙғышмаҫҡа, булған ерҙәрҙән әүәлгесә файҙаланып, тыныслыҡ һаҡларға һүҙ биреүҙәре тураһында яҙылған ҡағыҙҙарға ҡултамғалар ҡуйҙыртып ала. Ләкин ике-ара көсөргәнеш ҡырҡыулаша, күҙҙәрен ҡан баҫҡан һикһән нуғай өйөрө Һаҡмар аръяғынан Олобайға ябырылып, унда бесән эшләп йөрөүсе бабаларыбыҙға һөжүм итеп ҡан ҡоя. Һәм бына тағы Боҫҡон Даянов бабамдан батшаға мөрәжәғәт:

1805 йылдың 4 февралендә ҡабул ҡылынған. №1328/288.

Сиятельнейший князь,

Премилостивейший Государь!

За неполучением от местного начальства в Оренбургской губернии должного защищения, вынудили меня прибегнуть к стопам Вашего Сиятельства и просить: отрите слезы плачущих в предобидности и раззорении нашей, которая состоит в нижеследующем.

1-ое, в оной Оренбургской губернии правительству в разные присутственные места довольно чрез подаваемые от меня жалобы с изъяснением с прочими одновотчинниками моими башкирцами Кипчатской волости имею по течению реки Сакмары при самой оной на правой стороне на жалованной предкам нашим От Царей и Великих Князей Михайлы Федоровича и Алексея Михайловича земле по данным От Их Величеств Грамотам и владенным правам на жительствующие против наших деревень по течению оной реки Сакмары на левой стороне в Воздвиженской крепости и в Желтом редуте нагайцы самовольно переезжая реку Сакмару в наши дачи усильством своим в летние времена выкашивают траву и пасут свои конские табуны, а в зимнее время без ращетно губят лес, чем самым всему нашему обществу делают нестерпимую обиду и разорение и с чего ясно в ниже описанных обстоятельствах обнаруживается, когда самовластно и без дозволения на то от правительства, живущие в крепости Воздвиженской нагайцами из разных мест сшедшие ясачные татара в числе шестнадцати душ допустили на правую сторону реки Сакмары во внутрь к башкирским селениям при речке Асселю разстоянием же от крепости в 15-и верста, на котором напред сего места нами ежегодно производилось сенокошение, поселиться деревнею под названием Асселя со взятием с них нагайцами 500 руб. Каковой допуск учинен несоответственной с правилами, а кольми паче и без предписания Казенной палаты, которые проживание свое имели до пятой ревизии безгласными.

2-е, а как наш башкирский народ предвидя таковое присвоение вотчинной нашей земли, то принужденными нашлись ту часть земли в 788 году по согласию всех разных волостей вотчинников продать титулярному советнику (кой ныне надворный) Васильеву. А оной учинил препродажу поручику Петру Крашенинникову, которой за собою узаконенным порядком справил и отказал и переведя крестьян заселил, тем самым ласкал себя быть удовлетворительными, но вместо того открылись разные чрез происки нагайцев и ясашных татар а паче за взятые за припуске 500 руб. денег, хотя и довольно находимы они были в затаенности несправедливыми, но не оставляли как прежде так и ныне доводить нас до бесконечного разорения и убытка, во избежание сего

входил я Всеподданнейшим моим к — Его императорскому Величеству от 7 июля прошлого 1803-го года прошением о заступлении нас, на что хотя и последовало Монаршее благоволение со всевозможным поспешением о скорейшей окончательности нашего дела, но как Межевая Оренбургская Контора, Межевому Сената Департаменту донесение учинила, что башкирские земли за великостию оной межеванием некончены, а когда вся окружность нашего владения будет кончена тогда и дело просимое нами решится, а посему и нет нам надежды получить скорого решения.

2-е[92]*, а между тем как припущенные нагайцами ясашные татары так и сами нагайцы без всякой бережливости чинят вырубку дельного и дровяного нам принадлежащего леса и как нас так и порутчика Крашенинникова крестьян тесня, к подлежащему пользованию не допускают, а тем самым причиняют весьма немалый убыток, которой должны мы неминуемо впредь заплатить ему сполна, ибо есть такова наша обязанность в данной Васильеву купчей, а посему сверх случившегося нам по производству в присутственной об оном деле немалого убытка и можем и должны быть до бесконечного разорения и несостояния отправлять должную Его императорскому Величеству службу, кою мы содержанием линии всегда исправляем посредством своего иждивения, не имея ни от коль определенного какового либо жалованья, провианта и фуража. —*

3-е, предвидим же и ту нерешимость долговременную легко могущую произойти и от сего что при собирании производств из гражданских судов в Оренбургскую Межевую Контору и в рассмотрении дел в оной казалось бы быть уже незачем когда межевание учинено еще прошлого 1800-го года, при коем и подлежащие о спорной части земли от нас, нагайских татар и от порутчика Крашенинникова крепостные права отобраны с прописанием чего о происходимом напредь сего по делу о проданной нами помянутому покупщику земли Васильеву, и по перепродаже им порутчику Крашенинникову донесено мною в прошлом 803 году в феврале месяце чрез почту Его Сиятельству Господину Министру Внутренних Дел. И прошено в оудовлетворение объясненные мною обстоятельств о справедливом иску нашем на нагайских татар взойти в рассмотрение, на что последовало От Его Императорского Величества к бывшему Оренбургскому военному губернатору и кавалеру Бахметеву Повеление. Которой по оному учинил свое донесение и поднеся при оном в подробностях экстракт в которою оправдательные нас издавна решительные судебными местами на удовлетворение резоны Его императорскому Величеству Всеподданнейше поднес с предстательствующим и с прошением Всевысочайшего Соизволения по решениям судебных мест о припущенных нагайцами татар на землю проданную нами Васильеву, а от него Крашенинникову, перевести с оной на порезжую казенную землю коей в здешней губернии и в самом Оренбургском уезде отыскаться довольно может и что Казенная Палата троекратно в Земский суд еще, до происходимого в здешней губернии Генерального Межевания о своде с проданной — нами земли указами предписаний последовали. — Между чего припущенные нагайцами ясашные татара нарочито ежегодно как у нас башкирцов так и у порутчика Крашенинникова чрез выпускаемой скот на поля хлеб и сенные покосы вытаптывают без малейшей пощады, о чем просил Оренбургского Земского суда дабы оной учинил в том воздержание. На место того

---

[92] Документтың нумерланышы шундай.

4-е, прошлого 1803 года июля 3-го числа реченного Земского суда дворянской заседатель Полюдов приехав на спорные места[93] *с собранными им вроде понятых не из самоближайшей по смежности селений, а из дальных крепостей Пречистинской, Красногорской и Верхнеозерной и Кондуровской слободы с нагайцами и отборными людьми кои имеют дружеское между собой обхождение и со оными, состоящими с нами в споре нагайцами и ясашными татарами подлого поведения, как то обращающихся во всегдашнем пьянстве и сам будучи не в трезвом же виде вызвал наших жителей и порутчика Крашенинникова к себе. Объявил сперва словесно, что по Имянному Его Императорского Величества Соизволению состоящей у нагайцев и Ассельских татар спорной с нами и порутчиком Крашенинниковым земли Оренбургское губернское правление Земскому суду Указом предписало нам и оному Крашенинникову сенокошение производить воспретить, причем спрашивал кто до последнего генерального обмежевания владел теми местами на кой объявлены были ландмилицкие Шешминской драгунской и Алексеевской пехотной полки коему хотя наши жители и порутчик Крашенинников изъявили, что захват оной простирался и далее, но по причине той что они наедино-временное расположение находились и так как бы на постое, а ныне у первых нас по правам, а у последнего по крепости и отказной книге то самое количество кое в те права и крепостя явствует и как мы, так и Крашенинников в непринадлежащее владение до самого Межевого конторою обмежевания никогда не вступили, а что при оном межевание нагайскими и деревни Асселя татарами хотя им и было воспрещение напредь оного; но по вкоренившемуся в них против начальства упрямству и по донесть оного не покидают, и тем самым, —*

5-е, в прошлом 1804-ом году в июле месяце при начатии нами сенокошения по речке Касмарке, означенного Желтого редута нагайцы с юртовым старшиной Абыком Кильмеметевым, пятисотенным ясаулом юртовым сотником и походным старшиной — не в малом количестве нагайцев приехали и с кой многие были не в трезвом виде, и приглася с собою Земского суда реченного заседателя Полюдова, а с ним находились два подьячий, из коих один Янов, по найму старшиной Абыка Кильмеметева, а последней Сапожников при Полюдове, все они были в не трезвом пьянстве, но не приглася к себе никаких посторонних людей, дабы могли быть всему свидетелями, но заседатель же Полюдов, видно подстрекатаемостью нагайцев так был азартен, что кричал необычно с ознозначенными двумя писарями к нагайцам: «Что вы смотрите? Принимайтесь и бейте их досмерти!», — а с сим самым словом вначале и приступили из нагайских начальников, пятисотенной ясаул Янтемиров и юртовой старшина Кильмеметев, сотник Чиянов и походной старшина Уразманов, а за ними все бывшие последовали в каковой наглой дерзости, полагали мы быть из нас совершенно убитыми, а какие именно причинили увечьи и раны нам башкирцам — о том привезенном в Оренбургский Земский суд, в коем по учиненному чрез штаб-лекаря Быстринского Свидетельству оказалось и мне поверенному Дуянову от великих ударов глазные яблоки кровью так сильно обливши были, что несколько дней от того был слеп и около обоих глаз багровые с опухолью пятна, на спине пониже левой лопатки и на локте от побои синие пятна, на правом плече прошибина раною; башкирца Ярмухамет Кутлубаева на лице на левой щеке багровые пятна, на левой лопатке и руке синие пятна, а на спине

---

[93] Олобайға.

ранами прошибы, на правом плече синие с прогибом да раны на правой ноге и пояснице синие знаки; у башкира Абдряшева на голове кожа от удара разсечена, на лице Щапика, на правой плече и руке синие с опухолью пятна, на спине в трех местах кровавые знаки, на левой руке на локте боявые знаки. Да чрез судебного заседателя Полюдова поступок причинено оставшимся на том сенокошении башкирцам, писарем Яновым, который бросясь с имеющимся в руках его кинжалом на башкирца Кускилду Адчимазова и разсек ему левую руку подле кисти до самой кобри, который крайне был избит, что в жизни отчаянной находился; башкирец Абуталип Султанбратов также сильно избит, что на месте был обравлен в чаянии мертвого, которой и поныне не имея от ран и побой облегчение; и башкирца Ахмера Ильчина также был не меньше, первый из двух сильно избит, да сверх того три башкирские избиты женщины, при чем самим пятисотенной ясаул Янтемиров сорвал с меня Дуянова с шеи бумажник, в коем было денег ассигнациями 55 руб., у башкирца Ермухаммета нагаец Умрали Салтыков отнял косу и тюбетейку в четырех да дву лошадей и с кой одну с седлом ценою в 75 руб.; с жены моей сорвана с головы кажбав ценою во 100 руб., с другой женки Ербики Шамкиной часть кажбавы ценою в 35 руб., а по причине сего ко освидетельствованию были присланы от кантонного Начальника Куватова юртовой сотник Ерали Янгузин, старшинской писарь Бекбулат Бикбаев, юртовой выборной — сотник Исмаил Сулейманов да и протчие из башкир старики, при оном свидетельстве находились в каковых содействиях заседателя Полюдова, я по выздоровления от побои сходил Оренбургскому генералу военному губернатору от кавалерии генералу князю и кавалеру Григорию Семеновичу прошением. Которой на то хотя и учинил Земскому суду свое предложение, но оной суд нимало в подробность разбирательством не входил, а только несколько от нагайцев да и то самую малую часть вещей обратно получили, а что до преступления касалось, то сие осталось в туне.

6-е, сверх всего сего к сущему нашему разорению Оренбургской Земской суд прибыв в Желтый редут созвал нас из деревень Сунарчиной и Бектемировой башкирцев, объявил нам от 10-го числа декабря прошлого 1804 года Оренбургского губернского правления в Земской суд последовавшей Указ, состоящей в споре с живущими в здешнем уезде разных селений нагайскими татарами и башкирцами, по речке Касмарке по обе оной стороны сенные покосы выдать во владение Желтого редута нагайцам, а по свидетельству тем судом оказалось, что по течению речки Касмарки состоит накошенного и оставленного деревень Сунарчиной и Бектемировой у башкирцов Желтого редута с нагайцами спорных лугах по обе оной стороны сена и именно двести стогов, а по правую двенадцать целых, а початых двенадцать же, а всего с початыми двести двадцать четыре стога, каковое сено помянутой Земской суд нагайцам свести в селение приказал, что они в два дня и исполнили. Чем причинил нам несносное разорение, так что по истинной цене полагая целые по восьми рублей, а початые с полы — на тысячу семьсот пятьдесят четыре рубли, от чего в обоих наших башкирских деревнях от бескормицы без малого до двух тысяч скотин совершенно могут свалиться и что по несостоянию ныне здесь господина военного губернатора, не имеем нигде себе в здешней губернии о покровительстве защищения и от насильственного присвоения нагайцев и Ассельских ясашных татар удаления «в несправедливом присвоении», как только осмелился от Вашего Сиятельства представляя все выше писанные с нами

случившиеся, как прежние так и нынешние стесненные обстоятельства, и с кой довольно усмотреть соизволите что салатанаульские нагайцы и ясашные татары чинят нам великие наглости чрез последство послаблямое от Оренбургского Земского суда нежели не получил Вашего Сиятельства заказ Вашего предстательства и не будет вскоре нам для продовольствия скота воизворот сена, также ежели нагайские татара не удержутся от буйства, а ясашные татара с речки Асселя на казенную землю сведены не будут, то мы опасаясь с нас по обязанности продажи земли понесенных убытков принуждены будем просить на житьбе в другие губернии, а посему и ожидаем нетерпеливо Вашего Сиятельства предстательства, а потому более и то что по предписанию от Господина Министра Внутренних Дел Графа Виктора Павловича Оренбургскому Гражданскому губернатору которой в прошлом 1804-м году в ноябре месяце для рассмотрения о принадлежности нам неоспоримость сверх древнего в праве башкирского в землеведения основано на содержании Указа Правительствующего Сената 19 сентября 1744-го года о поселении под городкой Оренбургской Сеитовской слободы и на самом том 7-го августа 1768-го года определении бывшего Оренбургского губернатора Князя Путятина, по которому нагайцы из Казанской губернии Оренбургскую переселены, а затем и план 1740 года в разрешении наших споров на владение башкирское от бывшей губернской канцелярии ко успокоению от всех волокит и тяжестей дан. В рассуждении чего всенижайше прошу по толь Великой Вашей должности за бедной наш народ вступясь удостоить прозорливым оком свое благорассмотрительное предположение.

Сиятельнейший Князь Высокомилостивейший Государь — всенижайший слуга Оренбургской губернии и уезда 9-го Башкирского кантона Чанким-Кипчатской волости деревни Бектемировой от мирских людей поверенной башкирец ***из князей тархан*** *Бускун Дуянов тамгу свою приложил таковую[94]:*

Со слов переводил талмач Алексей Сергеев.

Оренбург, 1805 года генваря 17-го дня.

Боҫҡон Даянов бабаның талмас Алексей Сергеев ҡулынан ошолай оҙон итеп яҙылған, уның ҡатмарлы йөмләләрен, һөйләү стилен хәҙерге уҡыусылар өсөн аңлауы ҡыйыныраҡ булған ошо үтенеснамәһен Петербур батша һарайындағы аҡыллы баш уҙаман мөмкин тиклем ҡыҫҡа һәм аңлайышлы, ләкин йөкмәткеһе төҙөк инша рәүешендә килтереп һала батша алдына:

Дело по прошению поверенного от башкирцев Тархан Бускун Дуянова, жалующегося на неправильное отнятие крепостных их земель ясашными татарами по реке Сакмаре. 1805 г.

Оренбургской губернии и уезда 9-го Башкирского кантона Чанким-Кипчатской волости деревни Биктемировой от Мирских людей поверенный башкирец из Князей тархан Бускун Дуянов в просьбе Вашей Светлости изъясняет, что верители его башкирцы Кипчатской волости имеют заселение на правой стороне по течению реки

[94] Минең ата-бабаларымдың батшалыҡ тамғаһы — Донъя Ҡуласаһы (Свастика) ишараты ҡуйылған.

Сакмары на пожалованной предкам их от царей и великих князей земле по данным грамотам и владеным правам. Жительствующие против их деревень по левую сторону реки Сакмары Воздвиженской крепости и в Желтом редуте нагайцы усиленно завладели их сенными и лесными угодиями, допустили без всякого от начальства позволения, пришедших из разных мест ясашных татар в числе 60 душ поселения в их Башкирских дачах деревнею под названием Асиля, со изъятием с них нагайцами 500 руб. — Они Башкирцы претерпели таковое от нагайцев притестнение входили в 803 году со всеподданнейшим о заступлении их к Государю императору, на что хотя и последовало высочайшее повеление о скорейшем окончании в Оренбургской Межевой конторе дела о землях; но они не имеют надежды получить скорого решения, поелику контора донесла межевому Сената департаменту, что Башкирские земли за великостью их межеванием еще не кончены.

Они Башкирцы просили о своде оных татар с их дач на другие земли; но вместо того объявлен им от Оренбургского Земского суда Указ Губернского правления, о воспрещении им, Башкирцам, производить на спорных дачах сенокошение. А в июле месяце прошлого 1804 года, когда они начали в означенных своих дачах сенокошение, то соперники их нагайцы приехав с заседателем Земского суда Полюдовым, произвели драку, прибили много Башкирцев, отняли разные вещи, а у некоторых и деньги.

На сей их нагайцев дерзкий поступок, приносили они Башкирцы жалобу Оренбургскому военному губернатору Князю Волконскому, по предписанию которого, хотя им некоторые вещи и возвращены, но о поступке нагайцев оставлено без исследования.

А в декабре месяце прошлого 1804 года Земский суд объявил им Указ Губернского правления предписывающей спорные сенные покосы отдать во владение Желтого редута нагайцам, приказать сим свести к себе скошенное Башкирцами и поставленные в стога сено, которого всего 224 стога ценою на 1454 руб. ими свезено, через что они и лишились всех способов к продовольствию скота — и по не состоянию ныне там военного Губернатора, не имели ни от кого защиты, просить Вашу Светлость о покровительстве и доставлении им защиты.

Шуның артынса уҡ Рәсәй батшаһы Ырымбур гөбөрнәтере Г.С. Волконскийға яҙа:

Милостивый Государь мой Князь Григорий Семенович!

Повторенной от Башкирцев 9-го кантона Чанким-Кипчатской волости тархан Бускун Дуянов жалуется мне на несправедливое у них отнятие крепостных их земель с накошенным на оных ими сеном, которое Оренбургским Земским судом по предписанию Губернского правления отданы живущим с ними в соседстве нагайцам, через что они лишены всех способов прокормлению скота.

Не имея точного сведения о деле просителей, я долгом поставил просьбу их препроводить к Вашему Сиятельству и покорнейше просить Вас, Милостивый Государь мой, ежели оной справедлива, доставить просителям законную защиту.

Имею честь быть с истынным почтением и преданностию.

Милостивый Государь мой Вашего Сиятельства. Февраля 14 дня 1805 года.

Его Сиятельству — Кн. Г.С. Волконскому.

Хәрби гөбөрнәтер Г.С. Волконский үҙ сиратында 1805 йылдың 17 апрелендә Ырымбур Земский судына ҡәтғи йөкмәткеле әмернамә бирә: эште тикшерергә һәм ғәйеплеләрҙе ҡануни хөкөмгә тарттырырға. Шуға яуап булып, 1805 йылдың 30 июнендә Г.С. Волконскийға Ырымбур Өйәҙ судынан рапорт атҡарыла. Суд әһелдәре был эшкә бәйле ваҡиғаларҙың һәм ялыу-волокиталарҙың барыһын тиң энәһенән ебенәсә тикшереп һәм тасуирлап, Олобайҙағы баяғы ҡанлы тартыштан һуңғы хәлдәрҙе лә өҫтәкләй: 9 ноябрҙә Жултый редуты нуғайы Хәсән Йомалин 12 кешелек шайкаһы менән килеп, Һунарсы ауылы көтөүлегенән 41 һыйырҙы ҡыуып алып киткән... Кантон башлығы Буранғол Ҡыуатов хәрби гөбөрнәтергә яҙған рапортында Земский суд чиновниктарының мәсьәләне ғәҙел хәл ҡылыуына башҡорттарҙың өмөтө өҙөлөүен һәм ышанмауҙарын белдереп, нуғайҙарҙың һөмһөҙ яҫҡыныуына туранан-тура гөбөрнәтер үҙе сик ҡуйыуын һораған...

Әммә Земский суд һаман ҡәтғи ҡарар сығармай — мәсьәләне хәл ҡылыуҙы киләсәккә ҡалдыра: әгәр башҡорт Даяновтың үтенесе һәм кантон башлығы Ҡыуатовтың рапорты ғәҙел икәнлеге раҫланһа, Земский суд уларҙы ярлыҡаясаҡ, шуға күрә башҡорттар дүрт аҙна араһында Губернское Правлениеға мөрәжәғәт ҡылырға тейештәр (Боҫҡон Даянов иҫкәртелгән был хаҡта)...

Күренеүенсә, ғауғалы эште хәл итеү һаман һуҙыла: эт — эткә, ә ул эт — ҡойроҡҡа һылтанып тайшана.

Олобай өсөн дәғүәләрҙең һүрелмәүен Ырымбур хәрби гөбөрнәтере кәнсәләрендә 1817 йылдың 24 июлендә башланған һәм 1828 йылдың 28 июлендә генә тамамланған эш ҡағыҙҙары күрһәтә: «О спорной земле Воздвиженской крепости с башкирцами Кара-Кипчатской и Усерганской волостей и нагайцами». 95 табаҡлыҡ был папка башҡорттарҙың һаман ғәҙелһеҙлек кисереүен аңлатыу менән асыла:

Его превосходительству господину генерал-лейтенанту — Оренбургскому военному губернатору, Управляющему по сей губернии Гражданскою частию и Кавалеру Петру Кирилловичу Эссену

9-го Башкирского кантона начальника майора и кавалера Куватова РАПОРТ

Поданное ко мне прошение сего июля 19-го числа от поверенного деревни Бектемировой тархана Бускуна Дуянова находя с своей стороны описанные в нем обстоятельствы во всем справедливыми, осмеливаюсь при сем представить оное на благорассмотрение Вашего Превосходительства и покорнейше просить взойтить в бедственное положение башкирцов, а нагайцев Желтого редута и Воздвиженской крепости от неправильного и усильного владения башкирскою землею по правую сторону реки Сакмары лежащую, которая никогда казне не принадлежала и ныне не принадлежит. По данной Вашему Превосходительству Начальственной власти удержать, предоставить им пользоваться оною согласно решению всех судебных мест и

господ начальников губернии, а особенно по постановлению Устроителя Края Оренбургского Тайного Советника и Кавалера Неплюева утвержденному самим Правительствующим Сенатом по левой стороне той реки Сакмары. — И тем справедливой стороне башкирской — оказать начальственное Вашего Превосходительства защищение и покровительство, на что буду иметь счастие ожидать в разрешение повеление. 19 июля 1817 года.

Яңы гөбөрнәтер П.К. Эссендың яңы кантон башлығы (әүәлге кантон Буранғолдоң улы) Ҡәһәрмән Ҡыуатовҡа 31 июлдәге яуабында Ырымбур гөбөрнә идаралығына был бәхәсле эш буйынса бөтә материалдарҙы йыйып алып өйрәнергә ҡушыуын, ә ыҙғышыусылар иһә, мәсьәләне хәл ҡылғанға тиклем, ул ерҙәрҙе нисек бар — шулай файҙалана торорға һәм тыныслыҡ һаҡларға тейешлектәрен яҙа. Ошондай уҡ йөкмәткеле ҡағыҙ Земский судҡа ла ебәрелә. Хөкүмәт Сенатынан да П.К. Эссенға император исеменән шуға оҡшаш йөкмәткеле указ килә: башҡорттарҙың батшаға үтенес ҡағыҙында күрһәтелгән мәғлүмәттәрҙе тикшереп һәм йыйып, Хөкүмәт Сенатына атҡарырға ла хәл ҡылыуын көтөргә — чиновниктарҙың волокитаһы бер рәүешле өр-яңынан башлана...

Ләкин П.К. Эссен эште тиҙләтергә тырыша: 1820 йылдың 17 июлендә 1695-енсе фарманы менән Ырымбур Войсковой Кәнсәләренә һәм Земский судҡа бойора: ***Жултый биҫтәһендә һәм редутында йәшәүсе нуғайҙарҙың Һаҡмар уң яғындағы башҡорт аҫаба ерҙәренә башҡорттарҙың рөхсәтенән тыш аяҡ баҫырға хаҡтары юҡлығын башҡорттарға һәм нуғайҙарға ҡаты киҫәтеп раҫларға, ә төптө үҙҙәренеке түгел кеше урманын ҡарауылларға ҡуйылған нуғай ҡарауылсылары вазифаһын бөтөрөргә, шулай уҡ Межевой Контораның ул ерҙәрҙең башҡорттарҙыҡы икәнлеген күрһәтеүсе планын Земский судта раҫларға ла шул хаҡта аҫаба башҡорттарға һәм улар менән ыҙғышыусы нуғайҙарға мәғлүм ҡылырға.*** Әммә был ҡарар ҙа бойомға ашырылмай — бюрократияның туҙанлы өҫтәл буҫтауҙары аҫтында ҡапланып ҡала килә.

Булып үткән ваҡиғаларҙы, ике яҡтың ялыуҙарын һәм уларға ҡарата сығарылған ҡарарҙарҙы ысынлап та энәһенән ебенәсә ҡабат тикшереү башлана, чиновниктарҙың был эше биш йыл буйына һуҙылып, 1822 йылдың 28 июлендә П.К. Эссенға яҙылған йылғалай оҙон аңлатма менән ослана. Башҡорт ҡалъяһын тартып алып һоғоноуҙан өмөттәре өҙөлмәгән Жултый нуғайҙары был ҡалъяны инде яңы гөбөрнәтер ҡулы аша алырға яҫҡынып, үҙҙәренең юллаусыһы итеп был юлы ике башҡортто — Аҡъюл Юлъяҡшинды һәм Һунарсы ауылы ҡара-ҡыпсағы Үтәгән ҡарттың улы Бикмөхәммәт Үтәгәневте яллайҙар. (Был бәндәнең ике туған ҡустыһы Ҡолмөхәммәт Күсмөхәммәт улы Үтәгәнев һуңынан, ағаһының ҡылығынан оялып, буғай, хәҙерге Күгәрсен районындағы Сәнкем-Тәүәкән ауылына күсеп китә). Уларҙың ялыунамәһен П.К. Эссен 1824 йылдың 23 июлендә Ырымбур Земский судына юлландыра ла бер юлы Ҡәһәрмән Ҡыуатовҡа, нуғай баҫҡынсыларын башҡорт ерҙәренә ебәрмәҫкә, тигән бойороғо өсөн шелтә иғлан итеп, бынан һуң ер эштәренә ҡыҫылмаҫҡа — суд аша ғына эш йөрөтөргә ҡуша.

Шул уҡ 1824 йылдың 19 сентябрендә П.К. Эссен ҡулына Сәнкем-Биктимер һәм Һунарсы ауылдары халҡының һайлап ҡуйылған ышаныслыһы Аҡдәүләт

Килдебаевтан[95] баяғы Аҡъюл Юлъяҡшин һәм Бикмөхәммәт Үтәгәнев хөсөтөнә ҡаршы йүнәлтелгән үтенеснамә килеп төшә, унда ***мәсьәләнең асылы аңлатылып, Ырымбур Межевой Контораһы бәхәсле ерҙәрҙең башҡорттарҙыҡы икәнлеген дөрөҫләп, бөтә сиктәрҙе күрһәтеп план төҙөп биреүе, ә нуғайҙар ҡулындағы ялған пландың кире ҡағылыуы; гөбөрнәтер генерал-майор Бахметев заманында уҡ Ырымбур Граждандар Палатаһы ул ерҙәрҙең башҡорт аҫаба ерҙәре булыуын раҫлауы әйтелә***. Баҡтиһәң, 1818 йылда Ырымбур һәм Эстәрлетамаҡ форштмейстеры Максимов Ҡаҫмарт буйындағы урманды тикшереп, уны йыртҡыстарса ҡырҡыуҙы сикләр өсөн, ике яҡтан да — башҡорттарҙан да, нуғайҙарҙан да урман һаҡсылары тәғәйенләп киткән булған, ә нуғайҙар шуны мәкерле файҙаланып, нуғай ҡарауылсы булғас, тимәк, ул урмандар нуғайҙарҙыҡы, тип, Ҡаҫмарт буйҙарына яңынан ҡыҙышып ҡул һуҙа башлағандар.

1824 йылдың йәйендә Рәсәйҙең император ғали янаптары Александр I үҙенең ил буйлап сәйәхәтендә ошо яҡтарға ла һуғылып үтәсәген ишетеп, бабаларыбыҙ күп йылдарға һуҙылған тартыш тураһындағы хатты Алдарбәк Килдебаев аша юлландыралар һәм ул уны сәйәхәт ҡылыусы батшаның үҙ ҡулына илтеп тапшыра. Шунан һуң донъя ҡуласаһы башҡорт файҙаһына нығыраҡ әйләнә башлай, буғай: хәрби гөбөрнәтер П.К. Эссен мәсьәләне, ниһәйәт, башҡорттар файҙаһына ҡырҡа хәл ҡылырға һәм шул хаҡта уға хәбәр итергә бойороп, 1825 йылдың 4 майында эште Ырымбур Өйәҙ судына тапшыра, бәхәсле мәсьәләнең элек Межевой Конторала һәм Земский судта башҡорттар файҙаһына хәл ителгәнлеге лә киҫәтеп әйтелә. Шул ҡағыҙға һалынған рәсми резолюцияға ҡарағанда, гөбөрнәтерҙең тәҡдиме Өйәҙ судында 1826 йылдың 1 февралендә бойомға ашырылған — Олобай һәм Әселе тамағы өсөн башҡорт-нуғай тартышы ошоноң менән тамам, башҡорттарҙың ғәҙел талабы тулыһынса ҡәнәғәтләндерелде, тимәк.

1829 йылдың сентябрендә башҡорт Алдарбәк Килдебаевтың хәрби гөбөрнәтерҙән нуғайҙарҙың шикәйәтнамәләренә артабан иғтибар итмәҫкә һорап яҙған үтенесен хәл ителгән мәсьәләнең тарих битендәге һуңғы шаңдауы итеп ҡарарға кәрәктер.

Шулай итеп, 1784 йылдан башланған һәм 41 йылға һуҙылған тартыш 1826 йылдың 1 февралендә аҫаба башҡорттар файҙаһына тамамланып, һуңғы нөктә ҡуйыла.

Киләсәк быуындар тарихи һабаҡ ала: баҫҡынсыны алдан күрә белергә һәм тупһанан үткәрмәҫкә кәрәк. Өйгә бер кереп алһа, уны ҡыуып сығарыуы бик ҡыйын.

3. Мишәр ырыуының Йыһат Солтановҡа ялғанған бауының шәжәрәһе

[95] Боҫҡон Даянов вафат булғандыр, бәлки.

Инде беҙҙең ауыл мишәрҙәренең бабаларына килгәндә, төрлө йылғы хисапнамәләр буйынса түбәндәгесә күренә улар.

Ҡырмыҫҡалы ауылы мишәрҙәре (1834, 1850, 1859 й.й.). Был теҙмәлә Сәнкем-Биктимер мишәрҙәренең туранан-тура бабалары ҡалын хәрефләп бирелә.

1. Сәхип Мәҡсүтов (1759 — 1827), йорт старшинаһы, ә ғүмеренең ахырында зауряд сотник. Уның нәҫеле:
   а) Абдулфатих (1793), уның улдары:
   *Абдулнафиҡ (1815),
   *Мөхәммәҙи (1816);
   б) Ғабдул Фахрулхаҡ (1793), уның улы:
   *Абдулнасри (1815);
   в) Әхмәт (1806).
2. Сабит Мәҡсүтов (1765 — 1831), писарь. Уның нәҫеле:
   а) Төхфәтулла (1798 — 1821);
   б) Фатҡулла (1801 — 1842);
   в) Фәйзулла Сабитов (1801;
   г) Фәйрүз (1803), указлы аҙансы. Уның улы:
   *Шаһиәхмәт (1834 — 1835);
   д) Ноғоман Сабитов (1807 — 1840), уның улы:
   *Низамитдин (1830),
   *Шаһивилдан (1837);
   е) Хәбибназар Сабитов (1814 — 1846);
3. Абдулмәзит Мәҡсүтов (1745 — 1812), уның нәҫеле:
   а) Абдулвахит (1781), уның улдары:
   *Абдулҡафия (1810),
   *Абдулбани (1812);
   б) Абдулкәли (1792);
   в) Абдулханнан (1898).
4. ***Яхъя Әбдрәшитов*** (1755 — 1826), уның нәҫеле:
   а) Ғабдуллатиф Яхин (1784), уның нәҫеле:
   *Мостафа (1801),
   *Әбдрәхим (1807),
   *Мөхәммәтрәхим (1811),
   *Абдулзәлил Ғабдуллатипов (1812), уның улдары:
   Моғавиә (1839),
   Фәхритдин (1849),
   Шаһибәк (1855),
   Шаһиәхмәт (1858);
   *Мөхәммәтсәхәүитдин (1812),
   *Мөхәммәтсадиҡ (1812 — 1847), уның улдары:
   Абдулсабур (1836),
   Сәләхитдин (1838),

Ямалитдин (1841),
*Мөхәммәтғәни (1814 — 1819),
*Мостафа Ғабдуллатипов (1819), уның улдары:
Мөхәммәтзариф (1853),
Мөхәммәтәмин (1853),
Мөхәммәтсадиҡ (1856);
*Әбдрәхим (1825);
*Мөхәммәтрәхим (1829);
*Мөхәммәтвәли (1834);
*Мөхәммәтғафур (1836);
****Шәрәфитдин*** (1839);
*Камалитдин (1844);
б) Ғәтиәтулла яхин (1792 — 1859), уның нәҫеле:
*Мөхәммәтсафа Ғәтиәтуллин (1813) уның улдары:
Шаһимөхәммәт (1831 — 1851),
Шаһиәхмәт (1832 — 1851),
Сәлимйән (1850);
*Әхмәтсафа (1817), уның улы:
Вәлийән (1846);
*Әхмәтғәли (1827), уның улы:
Ахунйән (1857);
*Әхмәтйән (1832).

5. Мөхәммәтәмин Мәҡсүтов (1780), указлы учитель. Уның улдары:
а) Абдулҡотдус (1815 — 1820);
б) Ибраһим (1816 — 1824);
в) Мөхәммәтхафиз (1829);
г) Мөхәммәтсәлим (1831).
6. ***Абдуллатиф Яхин-Әбдрәшитов*** (1763 —1839), уның нәҫеле:
а) Ғөзәир (1806);
б) Насритдин (1812 — 1844), уның улдары:
*Хәйритдин (1837),
*Мифтахитдин (1839),
*Камалитдин (1843).
в) Мөхәммәтлатиф Абдуллатифов (1800), уның улдары:
*Мөхәммәтғәни (1820),
*Мөхәммәтгәрәй Мөхәммәтлатифов (1829),
*Абдулхәбир (1836), уның улдары:
Мөхәммәтйософ (1858),
Мөхәммәтгариф (1859).

Өҫкәлек йылға тамағындағы Өҫкәлек ауылы мишәрҙәре (1811 й.)

1. ***Әбдрәшит Мәҡсүтов*** (1738), уның нәҫеле:

а) Мөхәммәдиәр (1770), уның улы:
*Мөхәммәтйән (1808);
б) Мөхәммәтәмин (1772);
в) Мөхәммәтрәхим (1776 — 1797);
г) Әбдрәхим (1779).

Документ аҫтына Әбдрәхим Әбдрәшитов «тауыҡ тәпәйе» тамғаһын һалған (Сәнкем-Биктимер ауылы мишәрҙәренең тамғаһы).

Былар Сейет биҫтәһенә (Ҡарғалыға) күсеп киткәндәр.

Әселе йылға тамағындағы Әселе ауылы мишәрҙәре (1811 й.)

1. Абдулвахит Әбдрәшитов (1769), уның улы:
   а) Мөхәммәтғәли (1807).
   (Асылыкүлгә күсеп китәләр. Әселелә 1834 йылдың 25 апрелендә бер генә өй ҡалған).

Асылыкүл ауылы мишәрҙәре (1834)

1. Абдулвахит Әбдрәшитов (1769, Әселе ауылынан күсеп килгәндәр). Уның улдары:
   а) Мөхәммәтғәли (1807);
   б) Ибраһим (1813). Тимәк, Әселенән Асылыкүлгә улар шул 1807 — 1813 й.й. араһында күсеп килгәндәр.

2.*Ғәли Әбдрәшитов* — 35 йәштә, ләкин был дөрөҫ түгел, сөнки, яҙылған һанды ҡырсып ташлап, яңы һан — «35» яҙып ҡуйғандар. Уның тәүге ысын яҙылышы, моғайын, «75» булған да тәүге «7»-не, баяғыса, бер аҙ ҡырсып, урынына «3» яһап, «35» итеп яңылыштырып яҙғандар. Әгәр шулай икән, дөрөҫө була: халыҡ хисабы алынған йыл 1834-75=**1759** — Ғәли Әбдрәшитов тыуған йыл. Ул саҡта атаһы Әбдрәшит 21 йәштә булған. Ә Ғәлиҙең улы **Хисамитдин** тыуған 1782 йылда Ғәлигә: 1782-1759=23 йәш — осо оҫҡа ялғана. Документ аҫтында аңлатма: «№5 почищено в летах — в семействе Гали Абдрашитов 35 лет. С подлинным верно — канцелярист Кадомцев».

Әлхасил, Ғәли Әбдрәшитов тыуған йылды 1759 тип дөрөҫләп яҙабыҙ (артабан шул дата алына).

3. Мөхәмәдиәр Әбдрәшитов (1770 — 1826), уның нәҫеле:
   а) Ҡорбанғәли (1795);
   б) Мөхәммәтшәриф (1795), уның улы:
   *Мөхәммәтлатиф (1824);
   в) Ғүмәр (1799);
   г) Ғайса (1811), 1828 йылда рекрутҡа биргәндәр;
   д) Муса (1815).

Сәйет биҫтәһенендә (Һаҡмар тамағы татар Ҡарғалыһында) йәшәгән мишәрҙәр (1834 й.)

1. Мөхәммәтрәхим Әбдрәшитов (1789).
2. Әбдрәхим Әбдрәшитов (1787 — 1817), уның улы:
   а) Әбсәләм (1802).
3. Фәйзулла Әбдрәшитов (1752 — 1840).
4. Абдрахман Әбдрәшитов (1808), уның улы:
   а) Абдулхалиҡ (1833).

Үрге Себенле ауылы мишәрҙәре (1834 й.)

1. Абдрахман Әбдрәшитов (1784), уның улы:
   а) Мөхәммәтғәли (1833).

Богдашкино ауылы мишәрҙәре (1834 й.)

1. Ниғмәтулла Әбдрәшитов (1822 й. үлгән), уның улдары:
   а) Рәхмәтулла (1810);
   б) Ибәтулла (1817).

Ырымбур гөбөрнәһе һәм өйәҙе (һуңынан Быҙаулыҡ өйәҙе) Яңы Үмәр ылыҫы Юлыҡ Ямы (почта ҡуналҡаһы) мишәре (1834 й.)

1. ***Хисамитдин Ғәлиев*** (1782), 52 йәштә, отставкалағы һалдат.

«Уволен в отставку с пачпортом 1823 года сентября 26 дня за №4829». (Ул заманда һалдатта 25 йыл хеҙмәт иткәндәр).

Башҡа кеше юҡ. (Моғайын, ғаиләһен ауылда ҡалдырып йәки ғаиләһенән яҙып, «яма»ла яңғыҙы йәшәгәндер).

1823 йылда һалдаттан ҡайтҡанда уға 41 йәш булған. Әрмелә 25 йыл хеҙмәт иткәнлектән, һалдатҡа ул 16 йәшендә алынған.

Был ***Хисамитдин Ғәлиев*** — баяғы Асылыкүл ауылындағы мишәрҙең, документта йәшен үҙгәрткән Ғәли **Әбдрәшитовтың**, улы булырға тейеш.

Хисамитдин Ғәлиевтың, әрмегә китмәҫе борон уҡ (йәки икенсе йылында), ***Баһауитдин*** һәм ***Тәхәүитдин*** тигән игеҙәк улдары тыуған, тип фараз ҡылам (ҡайҙа йәшәгәнлектәре билдәһеҙ). Аталары Хисамитдин Ғәлиев әрменән ҡайтҡансы уҡ, моғайын, әсәләре вафат булып, малайҙар таралышып, шуға күрә Хисамитдин Ғәлиевтың ҡайтыр йорто-ғаиләһе булмаған — Юлыҡ Ямындағы почта ҡуналҡаһында киҙеүселек эшенә урынлашып, яңғыҙ башы ҡаңғырып

йәшәп ятҡан, тип уйларға кәрәк. Был Юлыҡ Ямы хәҙерге Ырымбур өлкәһе Красногвардейский районындағы Яңы Юлас (Новоюласка) ауылы булырға тейеш, 19-ынсы быуат урталарында ул Быҙаулыҡ өйәҙенә ҡараған (шуға күрә лә беҙҙең мишәрҙәр: «Бабаларыбыҙ Быҙаулыҡ яғынан күсеп килгән», — тип һөйләрҙәр ине).

Баһауитдин менән ***Тәхәүитдин***, мишәрҙәребеҙҙең риүәйәте буйынса, аталарының асы яҙмышы өлгөһөндә үҙҙәренең дә малайҙарын батшаға һалдат итеп биреүҙән ҡурсаланып, беҙҙең аҫаба бабаларҙан рөхсәт һәм ер алып, ошо ерҙә һалдатҡа алынмайынса үҙ әрмеһендә сиратлап хеҙмәт итмәле аҫаба башҡорт араһына — Сәнкем-Биктимер ауылына шул «Быҙаулыҡ яғынан» күсеп киләләр. *Ләкин... **ике йыл*** үтеү менән үк (1865 йылда) башҡорт әрмеһе бөтөрөлгәнгә күрә, башҡорттарҙы *ла* һалдатҡа ала башлайҙар, — шулай итеп һемәйгән беҙҙең бабалар, тип көлә торғайнылар мишәр ҡарттары... Әммә әсәйемдең өҫтәрәк бирелгән хикәйәтендә, мишәрҙәр беҙҙең ауылға, ауылыбыҙҙың бер килке аҫабаһы 1868 йылда Һаҡмар үренәрәк үҙҙәренә башҡа Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылын төҙөргә күсенеп киткәс, уларҙан ҡалған урынға 1871 йылда килеп ултырғандар, тиеберәк аңлатһа *ла*, мишәр ҡарттарының «ике йыл»ды ҡушып һөйләгән риүәйәте буйынса улар Сәнкем-Биктимергә 1863 йылда төйәкләнгән булып сыға. Анығыраҡ даталы документ табылманы.

Быҙаулыҡ яғынан пәйҙә булған былар артынса уҡ ауылыбыҙға уларҙың туғандары — Әбдрәшит ҡарт тармаҡтарының Ҡырмыҫҡалылағы тағы *ла* бер нисәһе күсеп килә һәм улар бөтәһе бергә, Әбдрәшит Мәҡсүтов тоҡомдары, киләсәктә *лә* үҙҙәренең туғанлыҡтарын юғалтмаҫ өсөн, ошонан һуң һәммәһе *лә* ***Әбдрәшитов*** фамилияһында йөрөргә һүҙ ҡуйышалар, фәҡәт Фәхритдин баба нәҫелдәре генә, башҡалары менән ни өсөндөр ыҙғышып-үпкәләшеп, фамилияларын Әбдрәшитовтан «Фәхритдинов»ҡа алмаштыра...

Өҫтә килтерелгән хисапнамә мәғлүмәттәренән ауылыбыҙ мишәрҙәренең бабалары төрлө заманала төрлө ауылдарҙа йәшәгәнлеге күренә.

Ә «баш баба» **Мәҡсүт** ҡарт үҙе (Әбдрәшит бабаның атаһы) Ҡырмыҫҡалыға ҡайҙан һәм ҡасан килгән һуң? Сығышы ниндәй булған? Уның ҡыҫҡаса шәжәрәһен бөйөк ғалимыбыҙ Ризаитдин Фәхритдиновтың “Аҫәр” хеҙмәтендә осраттыҡ:

«63. Вәлит бин Мәҡсүт бин Әфәк бин Дусмөхәммәт бин Байғара бин Туҡғара бин Суҡғара.

Эстәрлетамаҡ төбәге Ҡырмыҫҡалы ауылында имам вә ахун булып оло бер шөһрәт эйәһе булған. Өфө ҡалаһында мосолманлыҡ идараһы асылмаҫтан элек, ислам йәмгиәтенең мөрәжәғәт итер кешеһе вә һыйыныһы булып, кәрәк ерҙәргә мәсет бинаһына (төҙөү өсөн) рөхсәт бирер вә имамдарҙы ла тәғәйенләр булған. 1179 йылда (1765/1766 м.) хөкүмәт тарафынан хоҡуҡлы булып, шағбан айында (Ай йылының һигеҙенсе айы), мең ике йөҙ һигеҙенсе (1208) йылда (1793 м.) вафат булған. Ҡәбере Ҡырмыҫҡалы ауылында. Улдары Вилдан ахун менән Сафиян ахун да мәшһүрҙәр иҫәбенән.

Атаһы Мәҡсүт бин Әфәк Ҡазан вилайәтендә Яңы Саллы исемле ауылдан күсеп, Өфө төбәгендәге Биш Ҡурай ауылына килеп, дәрәжә тотоуҙа үҙе лә ғөләмән булып, Мортаза әфәнде (29) янында файҙа иткән». («Ағиҙел» журналының 2001/2 һаны, 127-нсе бит).

Мәҡсүт баба тәүҙә хәҙерге Туймазы районындағы Бишҡурай ауылына күсеп килгән булырға тейеш. Иң боронғо хисапнамәнән күренеүенсә, Бишҡурай мишәрҙәре ни өсөндөр унан хәҙерге Илеш районына күсерелгән һәм шундағы Бишҡурай ауылын нигеҙләгән. Мәҡсүт улдарынан Вәлит, Сәхип, Сабит, Абдулмәзит, Мөхәммәтәмин исемлеләре, моғайын, аталары Мәҡсүт бабай менән бергә, — Ҡырмыҫҡалыға, ә Әбдрәшит тигәне хәҙерге Йәнсура районында Өҫкәлек йылғаһы тамағындағы Өҫкәлек ауылына күсенеп ултырғандар, Әбдрәшиттең Яхъя, Абдуллатиф исемле улдары атаһының Ҡырмыҫҡалылағы туғандары янына китеп һыйынған. Бына шул Әбдрәшит Мәксүтовтан үрсегән дә инде хәҙерге Әбдрәшитовтар (һәм Фәхритдиновтар). Уларҙың шәжәрәһен бөгөнгөләр үҙҙәренең тамырҙарын юллай алырҙай төҙөп бирергә тырыштым. Шәжәрәләге рим цифрҙары — быуындар нәүбәтен күрһәткес. Мәҫәлән, Мәҡсүт баба VI-сы быуын булһа, уның ғәрәп цифрҙары менән нәүбәтләп билдәләнгән 6 улы VII-нсе быуын тәшкил итеп, исеме ҡалын хәрефтәр менән яҙылған 6-нсы ул Әбдрәшит иһә бөтә Әбдрәшитовтарҙың (һәм Фәхритдиновтарҙың) бабаһы булып тора. Шул VII-нсе быуын Әбдрәшиттең 9 улы нәүбәттәге VIII-енсе быуынды тәшкил итеп, һәр улан исеме алдында шул VIII һәм туғыҙ улдың һәр береһенең үҙ нәүбәт һаны йәнә ғәрәп цифрҙары менән ҡуйыла, мәҫәлән: VIII. 2. **Яхъя Әбдрәшитов** (1755 — 1826). Туғыҙ улан араһынан беҙҙең ауыл Әбдрәшитовтарының өс бабаһының исеме, артабан уларҙы айырым-айырым алып нәҫелдәрен тәфсилләү өсөн, ҡалын хәрефтәр менән яҙылды. Нәүбәттәге IX-ынсы быуын тағы рим һәм ғәрәп цифрҙары менән билдәләнеп (мәҫәлән: IX. 1. **Ғабдуллатиф Яхин**), унан тыуған нәүбәттәге быуын исеме иһә шулай уҡ рим цифры һәм алфавит хәрефе ҡуйып яҙыла, мәҫәлән: X. а) Мостафа... X. д) Абдулзәлил Ғабдуллатипов... Ә ул X-ынсы быуындан тыуған уландар иһә нәүбәттәге XI цифры һәм йондоҙ (*) ишараты менән билдәләнеп, уларҙан тыуған артабанғы быуындар исеме алдына нәүбәттәге рим цифры ғына ҡуйыла, мәҫәлән: XI. *Ғилажитдин Шәрәфитдин улы Әбдрәшитов, уның улы: XII. Сафуат Әбдрәшитов...

Шулай итеп:

Сәнкем-Биктимер ауылы мишәрҙәренең шәжәрәһе

I. Суҡғара. —
II. Туҡғара. —
III. Байғара. —
IV. Дусмөхәммәт. —
V. Әфәк. —
VI. ***Мәҡсүт*** (1793 й. вафат), уның улдары:

1. Вәлит;
2. Сәхип;
3. Сабит;
4. Абдулмәзит;
5. Мөхәммәтәмин;
6. ***Әбдрәшит.*** —

VII. ***Әбдрәшит Мәҡсүтов*** (1738), Өҫкәлек ауылында. Уның улдары:

VIII. 1. Ниғмәтулла Әбдрәшитов (1822 й. үлгән);
VIII. 2. ***Яхъя Әбдрәшитов*** (1755 — 1826);
VIII. 3. ***Ғәли Әбдрәшитов*** (1759 — 1834 й. иҫән);
VIII. 4. ***Абдуллатиф Әбдрәшитов*** (1763 — 1839);
VIII. 5. Абдулвахит Әбдрәшитов (1769);
VIII. 6. Мөхәммәдиәр Әбдрәшитов (1770 — 1826);
VIII. 7. Мөхәммәтәмин Әбдрәшитов (1772);
VIII. 8. Мөхәммәтрәхим Әбдрәшитов (1776 — 1797);
VIII. 9. Әбдрәхим Әбдрәшитов (1779).

Инде ҡалын хәрефләп яҙылған һәм беҙҙең ауылға ҡараған VIII-енсе быуын кешеләренең нәҫелдәре айрым-айырым:

VIII. 2. ***Яхъя Әбдрәшитов*** (1755 — 1826), уның нәҫеле:
IX. 1. ***Ғабдуллатиф Яхин*** (1784), уның нәҫеле:
X. а) Мостафа (1801);
X. б) Әбдрәхим (1807);
X. в) Мөхәммәтрәхим (1811);
X. г) ***Мөхәммәтсадиҡ*** (1812 — 1847);
X. д) Абдулзәлил Ғабдуллатипов (1812);
X. е) Мөхәммәтсәхәүитдин (1812);
X. ж) Мөхәммәтғәни (1814 — 1819);
X. з) Мостафа Ғабдуллатипов (1819);
X. и) Әбдрәхим (1825);
X. к) Мөхәммәтрәхим (1829);
X. л) ***Мифтахитдин Ғабдуллатипов*** (1830 — 1903 й. иҫән), уның нәҫеле:
XI. ****Ямалитдин Мифтахитдинов-Әбдрәшитов*** (1830), уның нәҫеле:
XII. ***Бибилатифа Ямалитдин ҡыҙы*** (1854 — 1904), Йыһат Солтановтың ҡартәсәһе (атаһының әсәһе).
X. м) Мөхәммәтвәли Ғабдуллатипов (1834);
X. н) Мөхәммәтғафур Ғабдуллатипов (1836);
X. о) ***Шәрәфитдин Ғабдуллатипов-Әбдрәшитов*** (1839), уның нәҫеле:
XI. *Ғилажитдин Шәрәфитдин улы Әбдрәшитов, уның улы:
XII. Сафуат Әбдрәшитов (1927).
IX. 2. ***Ғәтиәтулла Яхин*** (1792 — 1859).
VIII. 3. ***Ғәли Әбдрәшитов*** (1759 — 1834 й. иҫән), уның нәҫеле:
IX. 1. Хисамитдин Ғәлиев (1782 — 1834 й. иҫән), уның нәҫеле:
X. а) Баһауитдин Хисамитдин улы, уның улдары:
XI. *Әхмәтсафа Баһауитдин улы Әбдрәшитов, уның улдары:
XII. Ғәбделрахман,
XII. Ғатаулла,
XII. Ғөбәйҙулла Әбдрәшитов;
XI. *Әхмәтвафа Баһауитдин улы Әбдрәшитов, уның улы:

XII. Мөхәммәтхафиз Әбдрәшитов (1900), уның улы:
XIII. Мансур Әбдрәшитов.
X. б) Тәхәүитдин Хисамитдин улы, уның улдары:
XI.*Сиражитдин,
XI. *Низамитдин Тәхәүитдин улы Әбдрәшитов, уның улдары:
XII. Сәләхитдин Низамитдин улы Әбдрәшитов (1897), уның улы:
XIII. Рифҡәт Әбдрәшитов;
XII. Сәхәүитдин Низамитдин улы Әбдрәшитов (1902), уның улдары:
XIII. Рауил Әбдрәшитов,
XIII. Дамир Әбдрәшитов;
XI. *Ғималитдин Тәхәүитдин улы Әбдрәшитов, уның улдары:
XII. Фәхрәлитдин Ғималитдин улы Әбдрәшитов,
XII. Ғимазитдин Ғималитдин улы Әбдрәшитов, уның улдары:
XIII. Шәйхулла Әбдрәшитов,
XIII. Ғәни Әбдрәшитов (1930);
XII. Ғәйналитдин Ғималитдин улы Фәхритдинов, уның улы:
XIII. Ғәләүитдин Фәхритдинов (1897);
XII. Нәжмитдин Ғималитдин улы Әбдрәшитов, уның улдары:
XIII. Сәғитдин Нәжмитдин улы Әбдрәшитов, уның улы:
XIV. Фәрһәт;
XIII. Фәсхитдин Нәжмитдин улы Әбдрәшитов (1903 — 1941), уның улдары:
XIV. Ирек Әбдрәшитов (1932), уның улы:
XV. Сиражи Әбдрәшитов;
XIV. Йәүҙәт Әбдрәшитов (1937), уның улдары:
XV. Миҙхәт Әбдрәшитов,
XV. Илфат Әбдрәшитов;
XIII. Хисмәтулла Нәжмитдин улы Әбдрәшитов (1909 — 1941), уның улдары:
XIV. Фәрит Әбдрәшитов,
XIV Гафур Әбдрәшитов.
XII. Зәйналитдин Ғималитдин улы Фәхритдинов,
XII. Шәйхналитдин Ғималитдин улы Әбдрәшитов-Фәхритдинов, уның улы:
XIII. Шәмситдин Фәхритдинов, уның улы:
XIV. Ғабдрахман Фәхритдинов (1908), уның улы:
XV. Йәүҙәт Фәхритдинов.
XII. Нуралитдин Ғималитдин улы Әбдрәшитов.
XI. *Зиалитдин Тәхәүитдин улы Әбдрәшитов,
XI. *Хиалитдин Тәхәүитдин улы Әбдрәшитов,
XI. *Хисамитдин Тәхәүитдин улы Әбдрәшитов (1849), уның улдары:
XII. Һибәтулла Хисамитдин улы Әбдрәшитов, уның улдары:
XIII. Ғиниәтулла Һибәтулла улы Әбдрәшитов (1908 — 1945), уның ҡыҙҙары:
XIV. Мәсҡүҙә Әбдрәшитова (1932),
XIV. **Сания Әбдрәшитова** (1937), Йыһат Солтановтың хәләл ефете.
Һәм шул Ғиниәтулланың улы:
XIV. Самат Әбдрәшитов (1941), уның улдары:

XV. Салауат Әбдрәшитов,
XV. Руслан Әбдрәшитов;
XIII. Хәбибулла Һибәтулла улы Әбдрәшитов (1913 — 1942), уның улы:
XIV. Ирек Әбдрәшитов (1941), уның улдары:
XV. Марсель Әбдрәшитов,
XV. Илһам Әбдрәшитов,
XV. Инсаф Әбдрәшитов,
XV. Виль Әбдрәшитов.
XII. Ғибаҙулла Хисамитдин улы Әбдрәшитов, уның улдары:
XIII. Хәйрулла Әбдрәшитов (1913 — 1940),
XIII. Хәмиҙулла Әбдрәшитов (1924), уның улы:
XIV. Мәзит Әбдрәшитов;
XIII. Насибулла Әбдрәшитов (1927), уның улдары:
XIV. Фаил Әбдрәшитов,
XIV. Наил Әбдрәшитов,
XIV. Рафаил Әбдрәшитов.
XII. Кәлимулла Хисамитдин улы Әбдрәшитов, уның улы:
XIII. Мәрҙеғәлләм.
VIII. 4. ***Абдуллатиф Әбдрәшитов*** (1763 — 1839), уның нәҫеле:
IX. *Мөхәммәтлатиф Абдуллатифов (1800), уның улы:
X. Абдулхәбир Мөхәммәтлатифов (1836), уның улы:
XI. ***Мөхәммәтғариф Абдулхәбиров-Әбдрәшитов*** (1859), уның ҡыҙы:
XII. ***Бибисәрә Мөхәммәтғариф ҡыҙы Әбдрәшитова*** (1962 й. вафат), Йыһат Солтановтың хәләл ефете Санияның ҡартәсәһе (атаһының әсәһе)...

Шәжәрәләрем ошоноң менән тамам.

Инде ҡалды хәҙерге Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылын нигеҙләгән һәм, тел-милләтен алмаштырып, татарға әүерелгән Сәнкем-Биктимер ауылы аҫаба башҡорттарын бөгөнгө шул «татар» нәҫел-нәсәптәренә ғибрәтләп күрһәтергә. Аянынслы ул ғибрәтнамәне китаптың «Ҡушымталар» бүлегенә керетәм.

Өфө, 10.04
2003.

ҠУШЫМТАЛАР

Асы хаҡиҡәт

ЯҘМЫШМЫ — АҘМЫШМЫ?..

Яңы ауыл башҡорттарының аҙыуы — тел-милләт яңыртыуы

Хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районының Һаҡмар һыуы үрендә — Олобайҙың арғы башында ирәүәнләнеп ултырған Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылы хаҡында бара һүҙ. Сәнкем-Биктимер ауылының аҫабалары (саф башҡорттар) нигеҙләгән һәм шуларҙың тоҡомдары йәшәгән ауыл ул. Әммә хәҙер татарса һөйләшәләр, татар милләте яҙылалар, татар ауылы һаналалар. Сөнки үҙҙәренең килеп сығышын, тарихтарын белмәйҙәр. Хәйер, ундай имәнес хәлде Үҫәргәндең бөгөнгө төп төйәгендә — Башҡортостан Республикаһының Йәнсура районы Күгәрсен (Салих) ауылы миҫалында ла күрергә мөмкин: Муйтән-бейебеҙҙең туғыҙынсы быуын тоҡомо Сурабан-бей (15-енсе быуат) Ҡазан ханы һарайында аманат булып торғанында татарҙың Күгәрсен ырыуы ҡыҙына өйләнеп, Ҡазанда үлеп ҡалғас, уның тол ҡатыны һәм унан тыуған балалары ата йортона — Үҫәргәнгә ҡайтып төшә лә әлеге Күгәрсен ауылын нигеҙләй; аталарының изге тупрағында, аҫаба башҡорт араһында йәшәп тә улар аҙалар — хәҙерге шул Күгәрсен (Салих) ауылы татарҙарына әүерелеләр... («Үҫәргән тәүәрихе», 64-енсе бит).

Беҙҙең Олобай сабынлығы борон, исеменән үк күренеүенсә, бесән осоронда ике ауылдың һәр йорт башына тейешле «бай»ҙарға (пайҙарға — өлөштәргә) бүленгән, һәр ғаилә үҙ байында эш итергә тейеш булған. Олобайҙың арғы (алыҫ) башынан байлы булған кешеләр, сабынлыҡтарына яҡынайыу өсөн (йәнә килеп, Олобайҙы һәм туғайҙарҙы Һаҡмар аръяғы баҫҡынсыларынан һаҡларға, тип), Сәнкем-Биктимерҙән һәм Һунарсынан Һаҡмар үренәрәк күсенгәндәр ҙә хәҙерге Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылын ҡорғандар. Ауыл матур урында — көтөүлектәре өсөн иркен тау аралары, утын һәм төҙөлөш ағастары өсөн Һаҡмар буйы туғайлыҡтары етерлек.

Иң һуңғы, 1859 йылғы, ревизия хисапнамәләрендә мин был ауылды таба алманым; хәйер, һуңғараҡ уны нигеҙләүселәр ҙә ул 1859 йылда Сәнкем-Биктимерҙә йәшәүсе аҫабалар рәүешле теркәлгән. Тимәк, Яңы Ғафар ауылын нигеҙләү 1859 йылдан һуң булған.

1880 йылда Ырымбурҙың Б. Бреслин баҫмаханаһында мөхтәрәм Красильниковтың 1755 йылда ҡағыҙға һыҙылған «Ландскарталар»ы ташҡа баҫылып сыға, унда ошо карта һыҙылмыш 1755 йылдан һуң барлыҡҡа килгән ҡайһы бер яңы географик атамалар ҙа *өҫтәлеп,* улар араһында хәҙерге Яңы Ғафар ауылы тәңгәлендә «Янеурино» — Яңы Урын (йәғни Яңауыл) тип яҙылған. Тимәк, был ауылыбыҙҙың барлыҡҡа килеү ваҡыты баяғы 1859 йыл менән әлеге географик картала сағылған 1880 йыл араһында. Ә уғата теүәлерәк дата, өҫтә күренеүенсә,

әсәйем хикәйәтендә бирелә: Сәнкем-Биктимер аҫаба башҡорттарының бер төркөмө Яңы Ғафарҙы 1868 йылда нигеҙләгән. Күренеүенсә, Сәнкем-Биктимер аҫабалары яңы урынға күсеп барғас, ауыл шулай Яңы Урын аталған, тора-бара ул Яңауыл тип йөрөтөлгән (халыҡ телендә әле лә шулай) һәм аҙаҡ, шул ауылдың нигеҙләүсеһе исеменән, Яңы Ғафар итеп рәсмиләштерелгән. Кем булған һуң ул Ғафар?

Тыуған төбәгебеҙҙең Һаҡмар, Ҡаҫмарт йылғалары буйы ауылдарын берләштергән "Сакмарский" колхозының Нижняя Черноречка урыҫ ауылы уҙаманы С.Я. Понятов 1994 йылда колхозыбыҙ иғәнәһе ярҙамында Ырымбурҙа ошо ерҙәргә һәм ауылдарға арналған "Желтый Яр" исемле игелекле китабын баҫтырып сығара. Бының өсөн ул мәғлүмәттәрҙе, хәленән килгәнсә, архивтарҙан һәм ауылдарыбыҙҙың ҡарттарынан һорашып йыйған, һөҙөмтәлә шаҡтай уңышҡа өлгәшкән. Әммә унда, үкенескә ҡаршы, мәғлүмәтселәренең яңылышыуы арҡаһындалыр, буталсыҡтар һәм хаталар ҙа киткеләгән. Шуларҙың иң етдийе — Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылын башлап нигеҙләүселәрҙең һәм уларҙың нәҫелдәренең милләтен аҙағыраҡ унда Татар Ҡарғалыһынан килеп һыйынған бер нисә ғаиләнеке менән ишәйтеү. Хөрмәтле автор шул ауылға исемен биргән мөхтәбәр бабаны ла, уға тағылып күсеп килгәндәрҙе лә барыһын бергә Татар Ҡарғалыһы татарҙары тип атай. Ә Ғәмәлдә уларҙың бөтәһе лә беҙҙең Сәнкем-Биктимер һәм Һунарсы ауылдарыбыҙҙың аҫаба башҡорттары (байтағы минең бабаларым Солтановтар) булып, ауылды нигеҙләүсе үҙе лә (С.Я. Понятов атаған "татар Моратов Ғафар") Һунарсы ауылының аҫаба башҡорто Ғәбдел-Ғафар Ғәбдел-Сәләм улы Морат-Баҡтыев икәнлеге 1859 йылғы аҙаҡҡы "ревизские сказки" (халыҡ иҫәбен алыу документы) менән дәлилләнә (№33); ул саҡта уға — 47 йәш, ә улы Мөхәммәт-Хәсәнгә 18 йәш икән. Шул уҡ ҡатарҙа (№35) уның ике туған ағаһының фамилияһы бер аҙ үҙгәртеберәк яҙылған: Бикинә Мөхәммәт-Шафиҡ улы Морат-Баҡиев ("т"-һы юҡ, бәлки, Яңы Ғафарҙағы хәҙерге "татар" Баҡиевтар — шуның нәҫелдәрелер?) — 50 йәштә, ә улы Ғәбдел-Ҡадирға 12 йәш.

1920 йылғы йорт хужалары иҫәбен алыу буйынса Яңы Ғафарҙа (Яңауылда) шулар нәҫеленән Моратбаҡиев Сәлим Ҡауи улы (№23) йәшәгән, әммә ул "татар" яҙылған.

Был исемлектә, фамилиялары уғата ҡыҫҡартылып, йәнә лә икәү — Моратов Кәрим Ярулла улы (№48) һәм Моратов Усман Әүхәҙи улы (№57) — "татар" тип теркәлгәндәр. Фамилияларҙың яҙылышта ҡыҫҡартыла барыуы әйтелгән 1859 йылғы документта Сәнкем-Биктимер ауылында ла сағыла: мәҫәлән, Ғәбдел-Вәли Ғабд-Рафиҡ улы (№30) һәм Ғәбдел-Ғафар Ғәбдел-Сәләм улы икеһе лә тулыһынса Морат-Баҡтыев яҙылһа, уларҙың яҡын туғандарының береһе — Моратбаев (№31), ә икенселәре (№32, 35) Морат-Баҡиев булып теркәлгән. 1920 йылғы исемлектә иһә уларҙың нәҫелдәре, күренеп тора, фамилияларын уғата йыйнаҡлаштырып, Моратов ҡына булып киткән...

Билдәле булыуынса, 1920 йылда Башҡортостанда (ә ул саҡта беҙҙең төбәк Башҡортостанға ҡараған) Әхмәт-Зәки Вәлиди етәкселегендәге Башҡорт Хөкүмәте, республика хоҡуҡтарын ҡыҫырыҡлаусы Мәскәү менән килешеп йәшәй алмайынса, эшен ташлап китеп, республиканың хакимиәт башына башҡорт

автономияһының хас дошманы Ғәли Шәмиғолов етәкселегендәге шовинистар килә, башҡорттарҙы эҙәрлекләү, репрессиялар башлана. Яңы Ғафар башҡорттарының “татар”ға әүерелешендә лә тап шуның һәм мәҙрәсәлә (мәктәптә) балаларҙы ғүмер буйына татар телендә уҡытыуҙың шауҡымы барҙыр, моғайын. Әммә ошо сетерекле шарттарҙа ла 1920 йылда ундағы ун ике ғаилә үҙҙәрен һаман аҫаба башҡорт һанаған.

Башҡорт АССР-ы Үҫәргән кантоны 6-нсы Үҫәргән ылыҫы (хәҙерге Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ районы Жултый ауыл советы) Яңы Ғафар (Яңауыл) ауылының 1920 йылғы йорт хужалары хисапнамәһен Сәнкем-Биктимер һәм Һунарсы ауылдарының 1859 йылғы ревизия хисапнамәһе менән сағыштырып ҡарау нигеҙ йорттан яңы урынға китеүселәрҙең ундағы нәҫел-нәсәптәрен (бөтәһе лә аҫаба башҡорттар!) асыҡ итеп билдәләргә мөмкинлек бирә (башҡортлоҡтарын һаҡлап ҡалғандарҙың алдына йондоҙ (*) ишараты ҡуйылды):

1920 год, село Ново-Гафарово, Н.-Гафаровское общество

1. *Султангулов Давлетша Сиддикович, башкир, 56 лет, жене (артабан «ж.» тип бирелә) 47; дочерям (артабан «д.» тип бирелә) 2, 7, 11, 16.
2. *Султангулов Мугатаметша Сиддикович, башкир, 35 л., ж. 34, сыну (артабан «с.» тип бирелә) 8; д. 4, 10, матери (артабан «м.» Тип бирелә) 70 л.
3. *Мусаев Мардан Ильясович, башкир, 45 л., ж. 35 л., с. 6, 13, 15;д. 10; баб. 75 л.

Һунарсылағы №28 (1859 й. ревизия ҡағыҙындағы рәт һаны) аҫаба башҡорт Муса Низамитдинов-Мусаевтың Ильяс (26 йәш) исемле улының улы был.

4. *Султангулов Шапик Сиддикович, башкир, 67 л., ж. 50; с. 8, 10, 20, 25; д. 5.
5. *Мусин Миннигарей Нурсалимович, башкир, 62 л., ж. 40; д. 6, 8 л.
6. *Султангулов Гадельша Сиддикович, башкир, 44 л., ж. 37; с. 13, 17; д. 1, 6, 6, 10.
7. Габидуллин Нигматулла Агтиалович, татарин. Парадокс: унық бер туған ағалары — ошо уҡ исемлектәге №10 Зәйнулла һәм №12 Ғәтиәтулла — башҡорттар, ә быныһы татарға әүерелгән...
8. *Фаизов Хамадей Шарипович, башкир, 44 л., ж. 38; д. 6, 13 л.
9. *Султангулов Исламитдин Шафикович, башкир, 40 л., ж. 34; с. 5, 9, 11; д. 2; м. 65.
10. *Габдуллин Зайнулла Агтуалович, башкир, 45 л., ж. 35; с. 1, 9, 16.
11. Бакиев Мурат Хананович, татарин.
12. *Габидуллин Гатиатулла Агтуалович, башкир, 38 л., ж. 35; с. 15; д. 16.
13. Янабердин Гариф Галиевич, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №69 аҫаба башҡорт Мөхәммәтғәли (18 йәштә) Йәнбирҙин-Байсутлиндың улы, татарға әүерелгән.
14. *Супханов Гиззатулла Файзулович, башкир, 53 л., ж. 48; с. 6, 19; д. 3 л. Сәнкем-Биктимерҙәге №78 аҫаба башҡорт Усман Ғабдрахманов-Собханғоловтың улы Фәйзулла (27 йәштә) урядниктың улы.
15. Субхангулов Абдулла Гумарович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге шул №78 аҫаба башҡорт Усман Ғабдрахманов-Собханғоловтың улы Ғүмәр (29 йәштә) урядниктың улы, татарға әүерелгән.

16. *Мусаев Бадритдин Ямалитдинович, башкир, 35 л., ж. 30; на его попечении дети-сироты его братьев-красногвардейцев Мусаева Хамзы Ямалитдиновича[96], башкира 25 л. и другого брата 33 л.; сироты 8, 9л.; снохи 25, 28 л. Сәнкем-Биктимерҙәге №76 аҫаба башҡорт Баһауитдин Сәғитдинов-Мусиндың ике туған ҡустыһы Ямалитдин Хисамитдинов-Мусаевтың улы.
17. Ягудин Садык Рафикович, татарин.
18. Габидуллин Хайрулла Агтуалович, татарин. Ошо уҡ исемлектәге №10, 12 аҫаба башҡорт Зәйнулла менән Ғәтиәтулланың бер туған ҡустыһы була тороп та, Ниғмәтулла тигән бер туғаны менән бергә татарға әүерелгәндәр...
19. Амирханов Хади Латифович, татарин.
20. Хусаинов Гариф Хасанович, татарин. Һунарсылағы №29 аҫаба башҡорт Ғабдулла Мөхәммәтҡунафин-Хөсәйеновтың аҫырау улы башҡорт Хәсән (26 йәштә) Хөсәйеновтың улы, татарға әүерелгән.
21. Гумаров Фарих Зарипович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №88 аҫаба башҡорт Ғәбит Сәғитов-Ғүмәровтың ейәне Зарифтың (7 йәштә) улы, татарға әүерелгән.
22. Гумаров Юсуп Якупович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №88 аҫаба башҡорт Ғәбит Сәғитов-Ғүмәровтың Яҡуп (12 йәштә) исемле улының улы, татарға әүерелгән.
23. Муратбакиев Салим Кавиевич, татарин. Күренеп тора: баяғы аҫаба башҡорт Морат-Баҡтыевтарҙың нәҫеле.
24. Ильясов Абдрахман Усманович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №13 аҫаба башҡорт Юлдашбай Ильясов-Деникашевтың Усман (16 йәштә) исемле улының улы, татарға әүерелгән.
25. Хусаинов Зариф Хасанович, татарин. Һунарсылағы №29 аҫаба башҡорт Ғабдулла Мөхәммәтҡунафин-Хөсәйеновтың аҫырау улы башҡорт Хәсән (26 йәштә) Хөсәйеновтың улы, татарға әүерелгән.
26. Мусаев Мингазитдин Ямалитдинович, татарин, 38 л., ж. 32; с. 8; д. 3, 5. Ошо уҡ исемлектәге №16 аҫаба башҡорт Мусаев Бәҙритдин менән Хәмзәнең бер туғаны, татарға әүерелгән.
27. Мансуров Зариф Хисамитдинович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №26 аҫаба башҡорт Баһауитдин Мәсәғүтов-Мансуровтың бер туған ҡустыһы башҡорт Хисамитдин (20 йәштә) Мәсәғүтов-Мансуровтың улы, татарға әүерелгән.
28. Гумаров Сафа Гайсович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №86 аҫаба башҡорт Садиҡ Сәғитов-Ғүмәровтың ейәне, татарға әүерелгән.
29. Исхаков Шагувалий Галиевич, татарин.
30. Ильясов Гиззятулла Гумарович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №90 аҫаба башҡорт Мөхәммәтшәриф Йәғәфәров-Ильясовтың Ғүмәр (26 йәшта) исемле улының улы, татарға әүерелгән.
31. Мансуров Удагат Хисамитдинович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №26 аҫаба башҡорт Баһауитдин Мәсәғүтов-Мансуровтың бер туған ҡустыһы башҡорт Хисамитдин (20 йәштә) Мәсәғүтов-Мансуровтың улы, ошо исемлектәге бер туғаны №27 Зариф һымаҡ уҡ, татарға әүерелгән.

---

[96] Мусаев Хәмзә Ямалитдин улы 1937 йылда репрессияланғанға тиклем башҡалабыҙ Өфөлә комвуз ректоры булып эшләй.

32. Искаков Ахматказый Ахматгалиевич, татарин.
33. Мансуров Муллагалий Хисамитдинович, татарин. Ошо үк исемлектәге бер туған ағаһы №27 Зариф кеүек үк, аҫаба башҡорттан татарға әүерелгән.
34. Искаков Шакир Мухаметдинович, татарин.
35. Рахимов Давлетша Ахматович, татарин.
36. Гумаров Газизулла Габидуллович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №88 аҫаба башҡорт Ғәбит Сәғитов-Ғүмәровтың улы, татарға әүерелгән.
37. Субханов Нигматулла Файзуллович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №78 аҫаба башҡорт Усман Ғабдрахманов-Собханғоловтың Фәйзулла (27 йәштә) исемле урядник улының улы, татарға әүерелгән.
38. Ильясов Гайса Валиевич, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №91 аҫаба башҡорт Ғосман Йәғәфәров-Ильясовтың Мөхәммәтвәли (33 йәштә) исемле улының улы, татарға әүерелгән.
39. Тазитдинов Мутигулла Хасанович, татарин. Сәнкем-Биктимерҙәге №77 аҫаба башҡорт Дауыт Тазитдинов-Мусаевтың Мөхәммәтхәсән (26 йәштә) исемле улының улы, татарға әүерелгән.
